»Ч Ь

*дйндб*

# БИЙШЕВА

## КӘМҺЕТЕЛГӘНДӘР



25/ш515
13/IX 724
КОНТРОЛЬНЫЙ ЛИСТОК
СРОКОВ ВОЗВРАТА
КНИГА ДОЛЖНА БЫТЬ
ВОЗВРАЩЕНА НЕ ПОЗЖЕ
УКАЗАННОГО ЗДЕСЬ СРОКА

Колич. пред. выдач

Сух, тип. 384 —33ООСД.-















*\дйнәб*

**БИЙШЕВА**

# КӘМҺЕТЕЛГӘНДӘР

*роман*

БДшҟортоетАн китав
1990

ББК 84 Баш
Б 43

**Биишева** Зәйнәб

Б 43

Кәмһетелгәндәр. Роман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. —432 бит.

Башҡортостандык Халыҡ яҙыусыһы, республнканыц Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты ЗәГшәб Биишеванын «Кәмһетелгәндәр» романы — «Яҡтыға» трилогияһынын тәүге китабы. Автор был әҫәрендә ябай башкорт халкынык царнзм осорондағы ауыр, фажиғәле яҙмышын һүрәтләй һәм уларҙың Бөйөк Октябрь көндәрендә аяуһыҙ көрәшкә күтәрелеүен киң сағылдыра.

„4702110100—50 57—90 84 Баш
М 121/03/—90

5—295—00588—7

**Биишйва** Зәйнәб, **1990**

# Беренсе бүлек

**«Донъя киңлегендә ни файҙа,**
**Аяҡ кейемдәрең тар булғас...»**
**Д. Юлтый**

## 1

Төн. Башҡорт ҡыҙыныц тәңкәле еләне шикелле, күҙҙен, яуын алып, йымылдап торған аяҙ күктә, алтын табаҡтай, тулған ай йөҙә. Таллыҡта һандуғастар сутылдаша. Тирәк башында кәкүк саҡыра. Күләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы, үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандуғас моңдарына мансып, ҡыуана-көлә бер өҙлөкһөҙ сылтырап аға ла аға. Ағастар, сәскәләр, хайуандар, хатта ҡоштар ҙа йомшаҡ, еләҫ елдән һөйөлөп, көндөҙгө эҫе кәмегәнгә һөйөнөп, байрам итә. Иҫ киткес рәхәт, гүзәл яҙғы төн тышта. Ә өйҙә, Емештәрҙең өйөндә, бөтөнләй икенсе күренеш. Тәбиғәткә нимә?! Кеше яҙмышында унық ҡайғыһы бармы ни! Үҙе гүзәл, мөһәбәт, шат булғас, шул еткән уға.

Өй эсе ҡараңғы. Кескәй генә тәҙрәләр. Унық да яртыһы ҡарындыҡ менән ҡапланған. Әлегә быялаһы төшмәгән тар күҙәнәктәр аша ҡурғаш таҫма булып һуҙылған ай нурҙары, әлбиттә, өй эсен яҡтырта алмайҙар. Хәйер, бында яҡтылыҡ кәрәкмәй ҙә. Ғаилә йоҡлай: урындыҡтың түрьяғында, иң төптә, ҡаластай ишелеп бер малай ята. Ул— Иштуған. Уға ун ике генә йәш әле. Ләкин ул инде ғаиләнең өмөтө, ышанысы. Үҫер, атаһына иш булыр, ярҙамсы булыр. Унық атаһы Байғилде ағай шулай уйлай.,Шуға күрә уға исемде лэ Иштуған тип ҡушҡан бит ул. Өс ҡыҙ араһында бер генә малай — бер генә иш.

— Тик ҡасан ғына үҫеп, ҡул араһына инер һуң ул?!

Иштуғандан бирерәк, иҫке бер ҡорама юрған аҫтында, өс ҡыҙ йоҡлай. Улар: Бибеш, Йәнеш, Емеш. Ҡыҙҙар ҙа үҫеп киләләр. Бибеш ғаиләлә иң өлкән бала. Уға ун дүрт кәш. Ул инде хәҙер өйҙә бөтә эште тиерлек эшләй ала. Ә бына Йәнещ менән Емеш кескә йерәктәр әле. Береһенә ете, икенсеһе-

нә дүрт кенә йәш тула. Эйе, кескәйҙәр әле улар. Ниндәй яҙмыш көтә уларҙы киләсәктә?.. Нимәләр күрергә, ниҙәр кисерергә тура киләсәк?.. Улар әле был хаҡта уйлай белмәйҙәр. Өйҙөн, томроклоғон да, тарлығын да, юрғандың өс кеше өсөн бәләкәс булыуын да тоймай, бесәй балалары шикелле татлы мышылдап, йоҡлай бирәләр. Ә бына Байгилде ағай менән Сәғүрә еңгәгә бик етди уйланырға тура килә. ,Шуға күрәлер, ахыры, тен уртаһы еткән булһа ла, улар һаман йоҡламағандар. Сәғүрә еңгә ҡыҙҙарынан мөмкин тиклем алыҫыраҡ булырға тырышып, түрбаш яҡҡа, иң мейөшкә һырындырып һалынған ике кешелек урында, май шәм кеүек һыҙып, өнһөҙ тынып ята. Ә Байгилде ағай, сыбалып-ойошоп бөткән көрәк һаҡалын семеткеләп, урындыҡ ситендә баянан бирле һүҙһеҙ ултыра. Күгелйем ай нурҙары уны берсә ҡарҙан яһаған, берсә ҡурғаштан ҡойолған һынға оҡшаталар. Сәғүрә еңгә иренен, ҡасандыр дала бөркөтө шикелле ҡыйыу ҡарашы менән үҙенең йөрәген дер һелкеткән, әле инде ҡайғылы тынып ҡалған һөрмәле ҡара күҙҙәренә, сөйәлләнеп ҡаткан ҙур көслө ҡулдарына моңайып ҡарай ҙа:

«Эй-й, бәхет тигәнең матурлыҡта ла, егәрлелектә лә түгел икән дә ул... Байгилде менән беҙ матур булманыҡмы ла егәрле булманыҡмы! Eләк кеүек үҫтек, ен кеүек эшләнек. Булмағас булмай икән дэ ул...»,— тип уйлай. Ә Байгилде ағай һаман өндәшмәй. Сәғүрә еңгә унан күҙен алмай уйын дауам итә:

«Донъяла, Байгилде, һин эшләмәгән ниндәй генә эш ҡалды икән һуң?! Көтөү ҙә көттөң. Итек тә тектең. Мейес тә сығарҙың. Ҡыуғын ҡыуып, Эйек, һаҡмар, Яйыҡ буйлап күпме ер үттең? Ҡарамыш байҙан башлап Ташлының Тимаш баярына хәтле икәүләп бетә байҙын, күпме урағын урҙыҡ.

— Ураҡ урғанда Байгилденең ҡулына күҙ эйәрмәй, усмаһына көс етмәй. Ураҡта уньщ алдына кеше түгел, шайтан да сыға алмаҫ,— тигән даның таралды. Ә бәхет булманы. Ҡайҙа һуң ул бәхет! Йә, берҙән-бер атыбыҙға хәтле үлеп ҡуйҙы бит. Атһыҙ ир —ҡанатһыҙ ҡош бит инде ул...

Байгилде... Моғайын, ҡайным мәрхүм, улым бай булһын, тип ошондай исем ҡушҡандыр, бахыр. Эй алла, ярлынан бай тыуғанын кем күргәне бар һуң?!»

Ул, уйының ошоурынына еткәс, ауыртына-һыҙлана тороп ултырҙы. Был моңһоу тынлыҡҡа уның артыҡ түҙер хәле ҡалманы.

— Атаһы,— тине ул бик һаҡ, йомшаҡ ҡына тауыш менән.— Йә, әйт инде, һөйләштеңме?

Байгилде ағай, тағы бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң, өмөтһеҙ рәүештә ҡул ғына һелтәп: • . •> •

— һөйләштем генә түгел, эшкә инеп тә ҡайттым да ул — тип ҡуйҙы.— Иртән уларҙа эшләй башлайым,— тип тә өҫтәне.

— ,Шулай булғас,— тине Сәғүрә еңгә, йәнләнеп,— нинә көйөнәһең, нимәгә былай эсең боша һуң, атаһы?

— Бошмай ни, боша шул. Бошор урыны бар, әсәһе, бошорлоҡ яғы бар... Дүрт бала атаһы булып бөткәс, ялсылыҡҡа барып инеүе еңел түгел икән шул, әсәһе. Еңел түгел. Етмәһә, кемгә бит! Ҡарамыш байға! Халыҡ уның Ҡарамыш тигән исемен юҡҡа ғына Ҡормош тип алмаштырмағандыр бит?! Үҙең беләһең, ҡомһоҙ-ҡомағайлыҡ, һаранлыҡ менән Ҡормошҡа әйләнгән бит ул. Бына ошо Ҡормошҡа барып ялланырға тура килде инде. һуңы ни менән бөтөр...

— Бер йыл һәйбәт кенә эшләһәң, бер тай бирермен. Тайҙан ат үҫеүе оҙаҡмы ни? Бына шулай итеп, яҙған булһа, атлы ла булып китерһең,— тигән була...

Сәғүрә еңгә балаларса ҡыуанып уҡ китте.

— Дөрөҫ әйтә шул, атаһы. Э-й, алла биреп тағы атлыэйәрле булып алһаҡ, беҙ ҙә кеше шикелле йәшәп китер инек әллә... Мин, һинең юлың уңманымы икән әллә, тип хәүефләнгәйнем. Былай булғас ни, аллаға шөкөр инде...

Байгилде ағай, тағы сабырһыҙ ҡул һадтәп, ҡатынының һүҙен бүлдерҙе.

— Эйе, бер өйөр йылҡыһы булған Ҡормош байға тайҙың ат булыуы тойолмай ҙа ҡала инде ул. Ә беҙгә уның.өсөн бер йыл үгеҙ кеүек егелеп эшләргә лә унан тағы бер йыл тайҙың ҡонан булыуын көтөргә кәрәк. Ҡонан түгел, дүнәнгә әйләнгәс тә баҫа егерлек ат булмай бит әле ул.

«Көтөрбөҙ, атаһы, көтөрбәҙ, алла бирһә, тик тайы ғына булһын»,— тип әйткеhe килде Сәғүрә еңгәнең. Ләкин иренең һуңғы ваҡытта һүҙ көрәштергәнде яратмауын, урынһыҙ һүҙ ҡыҫтырһаң, бөтөнләй һөйләшеүҙән туктап, үҙ алдына уйланып тик ултырыусан булып китеүен хәтерләп, өндәшмәи ҡалды.

— Исмаһам, һин элеккесә һау булһаң да бер хәл ине Кешегә балаҫ һуғып, кейеҙ баҫып булһа ла көндәлекте табып балаларҙы ҡарап торор инең. Тайҙы көтөп бер йыл буйы ашамаи-эсмәи иәшәп булмай ҙа баһа. Етмәһә, йылы нисек ҡоро килә бит. Аслыҡ та булып китһә...

— Яуыр әле, атаһы, яуыр, улай өмөтһөҙ булырға ярамаи -тине Сәғүрә еңгә. Өмөтлерәк булырға тырышты. 1Окһа төн уға айырата шомло тойола башланы

Ьаигилде ағай ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

Г^я1 Ьф »ҙа бИТ " Тик ҡасан ЯУЫР?- Күрәһең, июнь егеп Л ИҮН »ЛӘП и СЫҠ та төш «әне юҡ. Әгәр яңынан ун-ун көн шулаи торһа, ашлыҡ көйә башлаясаҡ. Ул саҡта ..

Сәғүрә еңгә, арыҡ хәлһеҙ ҡулдарын иренең кин, көелө яурынына һалып, йомшаҡ ҡына һыйпап ҡуйҙы.

— Атаһы, йә, ятсы. Серем итеп ал. Иртә үк эшкә тотонорға ла булғас...

Байгилде ағай йәнә тынып ҡалды. Ә Сәғүрә еңгәнең уны нисек тә йыуатҡыһы, әҙ генә булһа ла өмөтләндергеһе килә. Үҙенең дә, балаларының да донъяла иң тоғро, иң ышанысло берҙән-бер таянысы булған был бала кеүек асыҡ, яҡшы күңелле, дәү кешенең өмөтһөҙлөккә бирелеүе унын, өсен хатта бер туҡтамай йөрәгенә төшөп торған ҡул-аяҡ һыҙлауынан да ауырыраҡ тойала ине.,Шуға күрә ул ғәҙәтенсә йомшаҡ, яғымлы итеп тағы:

— Атаһы,— тине.— Әй, атаһы, бөгөн Сыуаҡай еңгәм килгәйне әле. Ул әйтә, һинең, ти, Сәғүрә килен, ҡул-аяғың яман ҡандан һыҙлай, ти. Ҡан алдырырға кәрәк, ти. Ҡан алдырһаң, бынамын тигән һап-һау кеше булып китерһең, ти. Шунан, ти...

Байгилде ағай унын, һүҙен ҡырт киҫеп бүлдерҙе:

— Бушты һөйләмәһен. Хәлемдән килһә, мин һиңә ҡан өҫтәтер инем, ҡан!.. Аңлайһыңмы, алдырырға түгел!..

Сәғүрә еңгә бүтән өндәшмәне. Өйҙә тағы ла ауыр, мон,-һоу тынлыҡ баҫты. Бик оҙаҡҡа хәтле балаларҙың алмаш-тилмәш мышылдауҙары, мейес ярығына оялаған сиңерткәләрҙең, ялҡтырғыс сырылдашыуҙары ғына ишетелеп торҙо. Ахыр, Байгилде ағай ауыр көрһөнөп:

— Әй Сәғүрә, Сәғүрә, беҙ күргәнде Ҡормош байҙын, эте лә күрмәй бит,— тине лә, итеген, кәзәкейен ҡэһәрләнеп сисеп ырғытып, ҡатыны янына килеп ауҙы. Тар, йоҡа таҡталарҙан ғына теҙеп һалынған урындыҡ ҙур, ауыр кәүҙәнән һығылып китте лә бер аҙға тиклем тирбәлеп торҙо. Ҡолаҡсындай мендәргә битен бөтөнләй батырып, ҡапланып ятҡан Байгилде ағай әллә илай, әллә йәшһеҙ генә һыҡтай ине. Эскә батҡан ҡайғылы күҙҙәрен инде ай яҡтыһы ла ҡалдырып киткән ҡараһыу күҙәнәктәргә текләп, тағы ла шомлораҡ уйҙарға батып ятҡан Сәғүрә еңгә иренә бүтән өндәшмәне лә, йыуатманы ла.

Төн. Өй томра, ҡараңғы. Ә иртәнге көн унан да ҡараңғыраҡ. Бында ниндәй йыуатыу һүҙҙәретабырға мөмкин һуң?!

## II

Ауылда бөтә кеше уны яратып та, мәҙәк итеп тә Сыуаҡай әбей тип йөрөтә. Көҙгө сыуаҡ кеүек яҡты күләс йөҙлө, йомшаҡ, яғымлы һүҙле, изгелексән, яҡшы күнелле был әбейгә Сыуаҡай тигән исем ғәжәп йәтеш тура килеп тора.Шуға күрә ахыры унын. мулла ҡушҡан Сыуаҡбикә тигән исемен телгә алыусы ла юҡ хәҙер.

Сыуаҡай әбей ауылда оҫта кендек әбейе лә, им-томсо ла, һәр өйҙә ҡәҙерле ҡунаҡ та. Ул теләгән бер ейгә теләгән ваҡытта барып инә, үҙенен им-томон итеп, хәбәрен һөйләп, сәй эсеп ни бирһәләр, шуны алып сығып китә. Тик тарамыштарҙан ғына торған бәләкәс арыгк кәүҙәле, ваҡ, күләс йыйырсыҡтар баҫҡан йоҡа битле был әбей аяғына йөн ойоҡ менән ҡата, өҫтөнә биленән генә берөп тегелгән ситса күлдәк кейеп, ҡыш көндәрендә башына берәй алама шәл ябынып, урамдың әле бер осонан, әле икенсе осонан йүгереп үтә. Уны өҫтөнән бер минутка ла төшмәгән нужа, аслыҡ, яланғаслыҡ ҡына түгел, ә бөтә нәмәне белергә, ишетергә төшенөргә ашҡынып торған тынғыһыҙ күңеле лә шулай ҡыуып йөрөтә. Ул үҙенсә һәр кешенең тормошон, ҡайғыһын, шатлығын белеп торорға, кәрәк саҡта һәр кемгә ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә, унын, яҙмышын еңеләйтергә теләй. Ә үҙ тормошонан ул бик ҡәнәғәт.

Сыуаҡай әбей, иренән йәшләй тш ҡалып, Сәхиулла исемле бер генә ул үҫтергән. Хәҙер Сәхиулла ир етеп, ҡатын, бала-сағаһы менән үҙе донъя көтөп тора. Улы «әсәйем» тип, килене «бейем» тип, ейәндәре «картсәй» тип өҙөлөп торалар. Хәлдәренән килгәнсә ҡәҙер-хөрмәт итәләр. Унан тарһынмайҙар ҙа, унын, эшенә ҡыҫылмайҙар ҙа. Сыуаҡай әбей тулыһынса үҙ ихтыярлы кеше. Ошонон, менән ул үҙен тағы ла бәхетле һиҙә. Уға теләгән ваҡытта кешеләргә теләгәнсә ярҙам итеп йәшәр өсен бөтәһенән элек ошо ирек кәрәк.

Сыуаҡай әбей өсөн кешене бәхетле лә, һау ҙа итә торған нәмә им-том, өшкөрөү-төкөрөү. Унһыҙ кеше харап буласаҡ, тип ышана. Халыҡ араһында быға ышанмаусылыҡты күрһә, ысын күңелдән ҡайғыра. Ундай кешеләрҙе Әхмәҙулла муллаға әйәреп, «иманһыҙ», «мөртәт», тип атай. Гонаһлы булмаҫ өсөн уларҙан алыҫыраҡ булырға тырыша. Унынса Байгилде ағай ана шундай мөртәттәрҙең береһе. Унын, хаҡында Сыуаҡай әбей урыны килгән һайын:

— Бөтөнләй мөртәт булған, бахыр. Мәсеткә бармай, имтомға ышанмай. Ғүмер баҡый урыҫ араһында, ситтә йөрөп диндән яҙып бөткән. Әхмәҙулла мулла дөрөҫ әйтә шул: динде дин тип, мулланы мулла тип белмәгән өсөн ул бер ҙә йәлсемәй. Башы ялсылыҡтан сыҡмай унын,— тип һөйләй. Ә инде артыҡ баҫалҡы хсмокло, аҙ һүҙле Сәғүрә еңгәне ул:

Тү?ә, меҫкен, түҙә. Юҡлыҡҡа ла, сырхаулыҡҡа ла иламаи-һыҡтамай, зарланмай-һөйләнмәй түҙә, алла бәндәһе,— тип маҡтай. Унын, һау сағын иҫкә алып:

— Ә ниндәй эшләй торғайны бит... Ҡулынан килмәгән

эш юк ине. Йә, хәҙер ауылда шаршау, таҫтамал, һөлгөләрҙе уның шикелле оҫта һугыусы башҡа берәү бармы? Әһә, юк шул!..— тип ҡуя. Унан ысын күнелдән әсенеп:

— Ҡулдары ҡорой бит, бисаранын, ҡулдары ҡорой. Бер ни ҙә эшләй алмай бит хәҙер. Ниңә ҡорой? Белмәсһең. Берәй үҙенән елкән кешегә һуккандыр ҙа уның ҡарғышы төшкәндер тиһәң, Сәғүрә ундай бәндә түгел. Кешегә һуғыу түгел, себеште лә рәнйеткәне юктыр уның. Бигерәк һәйбәт кеше бит ул,— тип аптырай. Ахыр:

— Юк, күҙ генә тейҙе уның ҡулдарына, күҙ генә. Шул тиклем эшләүгә нисек күҙ теймоһен һуң?— тигән ҡаты һығымтаға килеп туктай.

Сыуаҡай әбей инде Байгилде ағай таңдан төнгә хәтле Ҡормош байҙарҙа эштә булғас, иркенләп, Сәғүрә еңгәне лә имләргә әҙерләнә башланы. Бөгөн дә ул сәй янында, башта донъя, күрше-күлән хәлдәре тураһында әҙерәк һейләп алғандан һуң, айырыуса рухланып, төрлө-төрлө ауырыуҙар, унан нисек һауығыу мәсьәләләренә күсеп китте. Әллә ниндәй ен һуккан, мәскәй әбей арбаған, бисура эйәләшкән кешеләр тураһында береһенән-береһе ҡурҡынысlыраҡ һүҙҙәр һөйләне. Унан һүҙенең ахырын:

— Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул, Сәғүрә килен, мин һиңе Әхмәҙулла муллаға күрһәтергә уйлайым әле,— тип бөтөрҙө. Сәғүрә еңгә, ғәжәпләнеп:

— Ниңә, еңгә? — тип һорап ҡуйҙы.

— Ниңә тип ни, күпмегә хәтле былай һыҙланып йөрөмәксе булаһың? — тине Сыуаҡай әбей, ҡаты итеп. Унан тағы үҙенец йомшаҡ, көйлө тауышы менән һөйләп китте.— һинен. аяк-ҡулың да шул ен ҡағылғанға һыҙлай бит ул. Ен ҡағылғанға яман ҡанын күбәйгән. Яман ҡан быуындарына ултырған. Бына шул яман ҡанды алдырырга кәрәк һиңә, Сәғүрә!

Сәғүрә еңгә ҡыйыуһыҙ ғына ҡаршы төштө.

— Атаһы ни, Сәғүрә, һинең быуындарыц һалкын тейгәнгә һыҙлай. һалкын һинен, елек майҙарыңа хәтле үтеп бөткән, ти ҙә баһа.

— Кит бушты, Байгилденә сжшап көфөр һүҙ һөйләп ултырма,— тип ҡаты итеп иҫкәртте Сыуаҡай әбей.— Ир кеше нимә белә ул? Бына ошо өшкөртөүҙән, им-томдан ҡаскан өсөн дә һауыкмайһың да һин!

— Әлләсе, атаһы шулай тигәнгә генә әйтәм дә...

— Әлләсе-мәлләсе тип тә торма. Мин кисә Әхмәҙулла мулланы күреп һөйләштем.

— Байгилденең үҙен, мөртәтте, хуп күрмәһәм дә, Сәғүрә килен хаҡына барһам барып сығырмын,— тине.— Бәлки, ул бына хәҙер үк килеп тә инер әле. һин, Байгилдегә ҡарап, минең, сшокешенең, һүҙен йыкмаҫһың бит? Беләһең, ул бит башҡа муллалар кеүек өшкөрөп-төкөрөп кенә ҡалмай, ҡан алып им-том итеп тә һауыктыра!..

Сыуаҡай әбейҙең ошо һүҙҙәрҙә әйтеп бөтөүе булды — тышта ишек төбөндә кемдеңдер нәҙек һыҙынкы тауышы яңғырап та китте.

— Әссә-лә-мәғәләй-кү-ү-м! Хужалар өиҙәме?

Сыуаҡай әбей, был сәрелдек көйлө тауышты шунда уҡ танып, урындыктан иҙәнгә йомғаҡ кеүек тәгәрәп төштө лә, оҙак бөкләп ултырыуҙан һыныккан быуындарын яҙа алмай, алпан-тшпан баҫып, ишеккә табан атланы.

— Әй-ҙүк, мулла, әйҙүк, рәхим генә ит, түрҙән генә уҙ. Килеп тә еттеңме ни? һай, рәхмәт яуғыры!

Ҡорҡолдайы йөҙрөк хәтле булып сығып торған арыҡ оҙон муйынлы, салыш күҙле Әхмәҙулла мулла ишек төбөндә калушы менән йәшел таяғын ғына ҡалдырҙы ла, сәлләһен, сапанын сисмәҫтән түргә уҙып, мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы. Ауыҙ эсенән нимәләрҙер мығырланып, тимер һәнәк саталары шикелле осло кәкре бармаҡтарын тырпайтып:

— Йә, хуш, аллаһы әкбәр! — тип битен арлы-бирле һыйпап ҡуйҙы. Унан салыш күҙҙәрен ҡомһоҙ ҡыҫҡылап, Сәғүрә еңгәгә, ҡурҡынып мөйөшкә һырынған балаларға ҡарап алды.

Сыуаҡай әбей, ҡыуанып:

— Бына, Сәғүрә килен, әйттем бит, Әхмәҙулла мулла беҙҙең кеүек ярлы-ябағаны ла ситкә тибәрмәй ул тип. Күрҙеңме, һөйләшкән сәғәткә килеп тә еткән. ,Шулай алла бәндәһе кеше инде ул беҙҙең, мулла, рәхмәт яуғыры,— тип . һөйләнде.

Маҡтауға иреп киткән мулла инсафлы төҫ менән:

— Беҙҙең вазифа шул бит, еңгә. Бәндәләргә ҡулдан килгәнсә ярҙам итеү, сихәтләндереү, йә, хуш! —тип яуапланы. Сәғүрә еңгә уға, кисә Байгилде ағай баҙарҙан алып ҡайтҡан барлы-юклы әсмүхә сәйен тотош һалып, ҡаты сәй яһап бирҙе. Әле генә көлгә күмеп бешереп алған берҙән-бер сөсө икмәген тогош турап уның алдына һалды. Йәиеш менән Емеш, урын-ер йыйып ҡуйылған һандыҡ артына ҡасып, шаҙра менән йырғыланған ҡып-ҡыҙыл арыҡ йөҙлө, ырғаҡ кеүек кәкре оҙон бармаҡлы, ҡарсыға сукышы һымаҡ көмрө танаулы мулланы аптырау ҡатыш ҡыҙыкһыныу менән күҙәтә башланылар. Улар быҒаса уны бер ҡасан да былай яҡындан күргәндәре юк ине әле.

Мулла менән Сыуаҡай әбей һөйләшә-һөйләшә, ихласлап тағы сәй эсергә керештеяер. Һүҙ тағы төрлө-төрлө ауырыуҙар Әхмәҙулла мулланың иҫ киткес һауыктырыу көстәре тураһында барҙы. Тик хәҙер һәр һүҙҙең аҙағы ябай хәбәр

итеү менән генә түгел, ә им-том, өшкөрөү-төкөрөү килешһен өсөн имсене ризалаштырырға, хәйер-саҙаҡаны йәлләмәҫкә кәрәклекте төшөндөрөү менән тамамланды.

Самауырҙы бер-ике тапҡыр яңыртып, ҡыҫтатып-ҡыҫтатып оҙаҡ итеп сәй эскәндән һуң, Әхмәҙулла мулла, бер генә ҡат буйлы ыштан кейгән арыҡ кәкре аяҡтарын бөкләп, сапан ендәрен терһәгенә хәтле һыҙғанып, урындыҡ ситенә килеп ултырҙы. Үҙен бик изге күңелле, хатта алланың бөтә серле эштәренә төшөнеүсе аҡыл эйәһе итеп күрһәтергә тырышып, кире ҡаҡҡыһыҙ етди тауыш менән:

— Хуш, йә, килен, хәйерле сәғәттә башлап ҡарайыҡ,— тине. Унан ҡаты ғына итеп тамаҡ ҡырып алғас.— Бер тас йылы һыу килтерегеҙ! — тип бойорҙо.

Сыуаҡай әбей, икеләнеберәк торған Сәғүрә еңгәнән алда йүгереп йөрөп, йышып йылтыратылған еҙ тасҡа йылы һыу һалып, мулла алдына килтереп ултыртты.

Мулла, тағы ла нығыраҡ һуҙып:

— Йә, хуш,— тип ҡуйҙы. Унан тауышты тамаҡ төбөнәнерәк, ҡалынураҡ итеп сығарырға тырышып:

— Килен, һинең быуындарыңа яман ҡан ултырған. Алла бирһә, бына хәҙер ҡан алғас та сихәтләнеп китерһең. Я аллам, ғәзиз, ғәфүр аллам, бәндәләреңә сихәтлек бир... Миңә, зәғиф илсеңә, бәндәләреңә ярҙам итерлек көс, ҡеүәт насип ит... Я һыу алла, амин...— тип мығырлай-мығырлай күҙҙәрен күккә текләп, оҙаҡ итеп доға ҡылып алды. Ҡурҡынып, бөтөнләй төҫө ҡасҡан Сәғүрә енгә ни әйтергә белмәй аптырап ҡалды. Ә мулланың шул хәтле изге теләкле булыуына күңеле бөткән Сыуаҡай әбей күҙенә эркелгән йәштәрен ең остары менән һөртә-һөртә:

— Рәхмәт, мулла, шулай булһын. Алла насип итһен. Әжерен дә йәлләмәбеҙ, Сәғүрә килен унан тормаҫ. Анауы, яңы бәрәсләгән оло кәзәһен тотор ҙа бирер. Баш һау булһа, мал табылмаймы? Эйе бит, килен? — тип һөйләнде.

Сәғүрә еңгә ҡапыл һиҫкәнеп, уянып киткән һымаҡ булды.

— Аһа, кәзәне тиһеңме, Сыуаҡай еңгә?

— Эйе. Шулай тим, килен. Таком өсөн бер бәрәсе ҡала бит әле, етеп торор.

Мулланын, салыш күҙҙәре ҡомһоҙлаҡ менән йылтырап китте, шулай ҙа ул һис тә алымға иҫе китмәгән тауыш менән:

— Ярар, кәрәкмәҫ. Бер ни ҙә там итмәйем. Мин тик бына балалар хаҡына... алла хаҡына...— тип мығырланды.

Сыуаҡай әбей ҡасандыр унын үҙенән үк ишеткән тауыш менән уны бүлде:

— Ҡуй, улай тимә, мулла. Тейешле әжерен бирмәйенсә, имсене, алланың илсеһен, ризалаштырмайынса, им килешәме ни?..

Мулла тыйнаҡ, сабыр булырға тырышып:

— Ярар һуң улай булғас,— тип ҡуйҙы.— Ҡабул итәйек. Кәзә лә хуп. Бик хуп. Бирһен хоҙай... Алла ҡабул итһен, сихәтләнергә яҙһын...

Сәғүрә еңгә, ашығып ҡаршы төштө.

— Ҡуйсы, еңгә, кәзәне бирә алмайым да. Атаһы ла быға риза булмаҫ. Беҙҙең бит һыйыр ҙа, ат та, бөтә мал да шул тигәндәй... Нисек итеп балаларҙың ауыҙынан аҡты өҙөп алайым?

Бынан һуң ул, һыҙлаулы ҡулдарын сабырһыҙ ыуғылап, Сыуаҡай әбейгә, муллаға, балаларына, унан бөтә өй эсенә күҙ йөрөтеп сыкты ла ғәйепле тауыш менән:

— Риза булһағыҙ, бынауы балаҫымды бирер инем,— тип өҫтәне.

— Балаҫтымы? Ҡайһынышын?

Сыуаҡай әбей һандыҡ өҫтөнә һәйбәтләп ҡатлап-ҡатлап өйөп ҡуйылған урын-ер араһында бер үҙе күҙҙең яуын алып торған өр-яңы балаҫҡа төртеп күрһәтте.

— Бынауы, аллы-гөллөһөнме, килен?

Сәғүрә еңгә, «эйе» тигәнде аңлатып, баш ҡаҡты. Сыуаҡай әбей балаҫты урын араһынан тартып сығарып, мулланың тубығына алып барып та һалды.

— Мулла ни балаҫҡа ла риза булыр. Рәнйемәҫ. Балаҫы балаҫ ише генәме?! Ҡандай һәйбәт бит. Биҙәктәрен әйтәм ҡайһылай сағыу бит! Ай-һай-һай!.. Рәхмәт төшкөрө, үҙең һуҡҡан балаҫтыр инде был, килен?

Сәғүрә еңгә лә, балаҫҡа тәү күргән кеүек һсжланып ҡарап, үкенесле тауыш менән:

— Матур шул,— тип ҡуйҙы.— Ҡыҙ сағымда мин ундайҙарҙы кешеләргә бик күп һуҡтым.,Шул саҡта эшем есөн кешеләр биргән йендәрҙән иләп, буяп, үҙемә лә ошо баласты Пуғыпалғаиным. Шуны кер төшөрмәй, Бибешемә тип һаҡлаи инем. Хәйерле булһын инде, уға насип түгел икән...

Мулла ла, Сыуаҡай әбей ҙә унын һуңғы һүҙен ишетмәмешкә һалыштылар. Ә урын-ер артына һыйынып торған иәнеш менән Емеш, балаҫ артынан эйәреп, мулланың алдына уҡ килеп баҫтылар. Улар, берҙән, әсәләрен, икенсенән, аЛ Е'"ӘЛЛӘҮҘӘН > Хатта -курҡыуҙарын да оноттолар.

Рц нурҙа Ры шикелле төрлө-төрлө сағыу биҙәктәр һУғылған был балаҫты улар бик яраталар ине тяН ИртӘНСӘК- УРЫНДЫ йыйып, мунсаҡлап-мөһөрләп тартма менән тарттырып ҡуйғандан һуң, улар би«Г СүКӘЙе" УлтыРалаР ?* ошо баластың һызат биҙәктәрен үҙ-ара бүлешеп уйнай торғайныдар.

— Йәм-йәшел генәһе минеке!
— Сейә ҡыҙылы үҙемә!
— Ҡыҙыл сәскәһе үҙемдеке! һинеке түгел. Бынауы күк сәскәһе лә минеке!..

Хәҙер урында бер генә матур нәмә лә ҡалманы. Бер ҡара кейеҙ ҙә ике ҡорама юрған, бер яҫтыҡ, биш мендәр. Уларҙың да тыштары юҡ. Йөндәре туҙып йөрөй. Ниндәй йәмһеҙ булып ҡала бит был урын!..

Ҡыҙҙар был юғалтыуҙың ауырлығынан баҫылып, тауыштынһыҙ ҡатып торҙолар. Ә мулла, кәкре бармаҡтарын тырпайтып, битен бер-ике ҡат һыйпап та өлгөрҙө.

— Амин. Алла ҡабул итһен.

Бынан һуң, ул Сәғүрә еңгәнең беләген ҡыҫып тогоп, еңен терһәгенән үргә төрөп ҡуйҙы ла, кеҫәһенән осо кәшкәйеп торған ҡыҙыҡ ҡына бәке сығарып, усына янып алды. Унан Сәғүрә еңгәгә сикһеҙ шомло тойолған тауыш менән:

— Йә, хуш, тәүәккәлләйек,— тине.

— Тәүәккәлләйек. Алла шифаһын бирһен,— тине ^ыуаҡай әбей ҙә.

Сәғүрә енгә өнһөҙ-һүҙһеҙ башын ғына эйҙе. Ул, хәҙер быуын һайын сурайып шешеп сыҡкан һап-һары арыҡ ҡулдары, ҡурҡыуҙан тағы ла нығыраҡ ҡаны ҡасҡан аҡһыу һары йөҙө менән, өҙөлөп төшөргә торған көҙгө япраҡты хәтерләтә ине.

Йәнеш менән Емеш тә, әле генә туғайҙан утын күтәреп ҡайткан Бибеш менән Иштуған да әсәһе янына һыйынды. Балаларҙың илаша башлауҙарынан ҡурҡып, Сыуаҡай әбей:

— Аллаға тапшырҙыҡ, мулла, оҙаҡлатма,— тине.

Сәғүрә еңгә ҡыймай ғына ҡулын кире тартты.

— Ҡуйсы ла. Әллә нин,ә бер ҙә күңелем тартмай ҙа...

Мулла быны ла ишетмәгәнгә һалышты. Ҡорбанының ҡулынан тағы ла ҡатыраҡ ҡыҫып тотто, беләк бөгәрендәге ниндәйҙер тамырға бәке менән сапты. Сәғүрә еңгә әллә хәле бөтөп, әллә ҡурҡыуҙан күҙҙәрен йомоп, сайҡалып ҡуйҙы. Балалар иларға ла, йәки ни ҙә булһа берәй һүҙ әйтергә лә белмәй ҡатып ҡалдылар. Бәке менән сабылған урын башта аҙ ғына ағарынып, төҫө ҡасып торҙо ла аҙаҡ ҡап-ҡара ҡан күренде. Мулла Сәғүрә еңгәнең ҡулын терһәгенә хәтле тастағы йылы һыуға батырҙы...

һыу ҡан менән ҡатнашып ҡуйырған һайын Сәғүрә еңгәнен. йөҙө ағара, төҫө ҡаса барҙы. Кескәй өй эсен шомло тынлыҡ сшғаны. Балалар үҙ йөрәктәренен, ҡайҙалыр ситтә, стенаға сүкеш менән һуҡкан кеүек булып дөпөлдәүен ишеттеләр. Хатта был эште бик ихласлап ойоштороп йөрөгән Сыуаҡай әбейҙең дә тыны ҡыҫыла башланы. Тик ҡан алыусы ғына шәпләнеп:



___Бына, күрәһегеҙме, ҡайһылай күп яман ҡан йыйылған Бәҫ, шулай булғас, нисек һыҙланмаһын! Иншалла, бынан һуң, сихәтләнеп, сәләмәтләнеп китерһең, килен. Яман ҡаның хәҙер сығып бөтә,— тип һөйләнде. Ләкин был һүҙҙәр инде бер кемде лә ҡыуандырманылар ҙа, йыуатманылар ҙа. Сәғүрә еңгәнең хәле бөткән һайын, өйҙә шомло ҡурҡыныс арта барҙы. Ахыр был ҡот осҡос күренеш иң элек кескәй Емеште түҙемдән сығарҙы. Ул йөрәк өҙгөс тауыш менән:

— Кит бынан, бабай! Әсәйемә теймә! — тип ҡысҡырып илап ебәрҙе лә, күҙ асып йомғансы, әсәһенең ҡулын тастан тартып алып үҙенең күкрәгенә ҡыҫты.

— Етер, әсәйемден, ҡулын бирмәйем? Әсәйем үҙемдеке, һиңә бирмәйем!

Беләктән атылған ҡара ҡан Емештең күк борсаҡ биҙәкле аҡ күлдәгенен. түшенән итәгенә табан ағып китте. Быны күреп Йәнеш менән Иштуған да, хатта түҙемле, өлкән кеше булырға өйрәнеп бөткән Бибеш тә илай башланы. Сәғүрә еңгә ҡағыҙ кеүек ап-аҡ булып урындыҡҡа ауҙы. Сыуаҡай әбей:

— Ай алла! Әй эттәгенәһе, был ни булды һуң әле, мулла? — тип, сәбәләнеп, ни эшләргә белмәй, берсә ишеккә, берсә урындыҡҡа табан йүгерҙе. Ә ҡан алыусы, ниҙер мығырлап, алама кейеҙ киҫәген шәмдә көйҙөрөп яраға япты ла, ашыҡ-бошоҡ бәйләп, арлы-бирле доға ҡылып, балаҫты ҡултығына ҡыҫтырып сығып та китте. Балалар сыр-сыу килеп илаштылар. Сәғүрә еңгә бик оҙаҡ хәрәкәтһеҙ ятҡас ҡына иҫенә килде. Күҙен асты. Тороп ултырырға теләне. Балаларының баштарынан һыйпап, һөйәп йыуатмаҡсы булды. Ләкин ул ҡыбырлай ҙа алманы. Ҡулдары ла, аяҡтары ла уны тыңламанылар. Унын. бөтә тәне, таш кеүек ауыр булып, хәрәкәттән туктап ҡалғайны.

## III

Иртәгеһен ғаиләһенең хәлен белеп китергә ҡайткан Байгилде ағай ишектән инеү менән үк эштең нимәлә икәнен аңлап алды. Сәғүрә еңгәнең күҙенә текләп бик оҙаҡ өндәшмәй торғандан һуң, ауыр көрһөнөп:

Ярай, әсәһе, минең һүҙҙе тогмағанһың, инде үҙеңә үпкәлә. Былай булғас, балаларҙы етем ҡалдырҙың,— тине. Каиғынан йөрәгенә ҡан һауған Сәғүрә еңгә иренә ни тип тә яуап ҡайтара алманы. Уның төпкә баткан иҫ китксс моңһоу ҡара күҙҙәренән эре-эре йәш бөртектәре тәгәрләшеп сыҡтылар ҙа балауыҙ шикелле һары яңаҡтары буйлап ҡолаҡ яғына, ҡалын ҡара сәс толомдарынын, төбөнә ҡарай ҡыуы-

шып ағып киттеләр. Ул, иламаҫҡа, йәштәрен туҡтатырға тырышып, күҙҙәрен сырт йомдо.

Байгилдеағай унын аяҡ осона барып ултырҙы. Берсә әсәләренә, берсә үҙенә тилмереп ҡарап торған кескәй ҡыҙҙарына кәзәкей кеҫәһенән ҡап-ҡара ике һыныҡ икмэк сығарып бирҙе. Ҡормош байҙар иләк аҫтынан ҡалған бойҙайҙан ялсылары өсөн ошондай икмәк бешерәләр ине. Ҡыҙҙар күнелдәре әзерәк күтәрелеп тышҡа йүгерҙеләр. Әсәһенә монайып текләп урындыҡта тик кенә ултырған ҡыҙы Бибешкә лә атаһы икмәк һондо.

— Бар, ҡыҙым, һин дә уйнап, һыу инеп ҡайт. Бик эҫе бит. Әсәйен. янында мин үҙем ултырып торормон,— тине.

Бибеш аласыҡҡа сыкты ла көйәнтәләп һыуға китте. Ә Йәнеш менән Емеш өйҙөң күләгә яғына сығып, нигеҙ буйына ултырҙылар. Көн тын алғыһыҙ томра ине. Йәнеш, нәҙек кенә аяҡтарын ҡалас кеүек ишеп, тубыҡтарына күлдәк итәген ҡаплап ҡуйҙы.

— һин дә ошшай ултыр, һылыу, йэме. Ашағанда икмәк валсыҡтарын. ситкә төшмәһен,— тип өйрәтте ул. Унан: «Ашаһаң бөтә лә китә бит»,— тип йәлләп, икмәкте әйләндерептулғандырып бик оҙаҡ ҡарап ултырғандан һуң:

— Йә, һылыу, кем аҙ ҡабырҙан ашайыҡ, йәме,— тип тәкдим итте.

— Йә,— тине Емеш тә, күҙҙәрен ҡыҫҡылап, икмәгенә текләп.— Мин гел бәләкәс кенә ҡабып ашайым бит ул.

Улар, икмәкте ваҡ ҡына өлөштәргә бүлеп, тел остарына ғына һалып ашарға, был татлы минутты нисек тә оҙағыраҡ һуҙырға тырыштылар. Ләкин ул барыбер бик тиҙ ашалып бөттө. Бынан ары Йәнеш йәнә бер йыуаныс уйлап тапты:

— Икмәктең энә осондай ғынаһы ла кешенән сшоти ул. Уны ергә төшөрөп тапаһаң, харап яман гонаһ була, ти.— Хатта мен йыл тамуҡта янаһың, ти. Йә, һылыу, итәгебеҙҙәге валсыҡтарҙы йыйып ашайыҡ.

Ҡыҙҙар итәктәренән энә күҙәүендәй валсыҡтарҙы ла ҡалдырмай сүпләп бөттөләр. Уларҙан әҙерәк өлөш теймәҫме тип, күптән бирле ҡойроғон болғап, ҡашты һикертеп, ярамһаҡланып, ҡаршыларында баҫып торған өлкән, арыҡ кәүҙәле, осло моронло һунар эте Ҡашҡарғала, эҫелеккә түҙмәй, ауыҙзарын асып: «ҡыҡы-ҡыҡ» тип йырлаштырып, ҡырын-мырын ҡарап, көтөп йөрөгән сыбар тауыҡ менән һары әтәскә лә бер ни ҙә теймәне. Улар, өмөтһеҙләнеп, үҙ урыщдарына таралды. Ҡашҡар әлһерәп, яҫы ҡыҙыл телен һалындырып, аҡыллы һоро күҙҙәрен бер нөктәгә төбәп, лапаҫ аҫтына барып ятты. Тауыҡтар кэртәлә тиреҫ аҡтарып, ҡорт эҙләргә керештеләр. Ә ҡояш, ҡарышҡан шикелле, тағы ла нығыраҡ ҡыҙҙырырға тотондо. Күләгә урында ла эҫелеккә түҙер хәл юҡ ине. Ҡыҙҙар нигеҙ буйынан төштөләр.



1- Әйҙә, һыу инә барайыҡ, һылыу, йәме,— тине Йәнеш.

___-^уй ҙ. Бармайыҡ та. Мин ҡурҡам,— тине Емеш. Унын әсәһенән башҡа өйҙән алыҫ китеп йөрөгәне юҡ ине әле. Оҙакламай күрше.Шәһит олатайҙың ейәнсәрҙәре Бибекәй менән Гөлкәй ҙә йүгерешеп килеп сыкты.

— Йәнеш, әйҙә һыу инергә!

Йәнеш тағы Емештең итәгенән тартты.

___Әйзә, һылыу. Ана, һинең кеүек бәләкәс Гөлкәй ҙә бара бит.

Емеш еңелде. Улар Бибекәй менән Гөлкәи артынан эиәрҙеләр. Йәнештәрҙең дә, Бибекәйҙәрҙең дә өйҙәре ауылдың ҡап уртаһында, (Зло Эйек йылғаһына табан һуҙылып киткән киң йырын буйындағы «Ярсыҡ» урамға ҡапма-ҡаршы ғына тора. Бибекәй менән Гөлкәй ошоЯрсыҡ урамды үтеү менән, ғәҙәттәгесә, күлдәктәрен систеләр ҙә:

— Бәйге, бәйге! — тип, баш остарына күтәреп болғайболғай, шыр яланғас көйө йырын буйлап түбәнгә, йылғаға табан йүгерҙеләр. Йәнеш тә башҡа ваҡытта шулай итә торғайны. Ошолай йүгереп барған ыңғайы күлдәкте ҡырсынға ырғытып, кем уҙарҙан һыуға инеп китеүе харап мәрәкә була ине. Ләкин бөгөн, берҙән, унын. ҡарамағында кескәй һеңлеһе бар, икенсенән, үҙенең дә күңеле бойоҡ. Улар етәкләшеп, саңлы оло юл буйлап, инәһен юғалткан ҡаҙ бәпкәләре шикелле, йыуаш, шым булып, илке-һалҡы ғына атлап барҙылар. Йәнештәр килеп еткәндә, Бибекәй менән Гөлкәй күптән бында, үҙҙәре кеүек кескәй бер өйөр балалар менән бергә, сырсыу килеп һыу инеп йөрөйҙәр ине инде. Бибекәй Йәнеште күргәс, һыуҙан йүгереп сығып, маҡтанырға ла кереште:

— Әй, саҡ килеп еттеләр. Ә беҙ инде биш тапҡыр һыу инеп сыҡтыҡ! — Йәнеш тә сер бирергә теләмәне.

— Ә беҙ бая, иртәнсәк, ун рәт инеп ҡайтҡайныҡ инде, эйе бит, һылыу? — тип яуап бирҙе.

— Беҙ бөгөн егерметапҡыр индек! — тип арттырып ебәрҙе Бибекәй.

Был ауылдың балалары, йәштәре араһында күп һыу инеү, йеҙөү, текә ярҙан упҡынта һикереү, сумып һыу төбөнән аҡ таш эҙләп алып сығыу кеүек нәмәләрҙә ярышыу ғәҙәте бар. Бибекәй менән Йәнеш араһында барған был һүҙ көрәштереү ҙәошо ғәҙәттен бер сағылышы ине.Шулай итеп, Йәнеш һис тә бирешергә, ярышта артта ҡалырға теләмәне. Бөгөн һыу оуиына тәүге тапҡыр килеүенә ҡарамаҫтан:

— Ә беҙ бөгөн йөҙ рәт индек, эйе бит, һылыу! — тмп, Ьибекәиҙән дә арттырып ебәрҙе:

Йәнеш һәр бер һүҙен Емештән раҫлатыу өсөн, «эйеме, һылыу?» тип бөтөрһә лә, бынан бер ни ҙә аңламаған Емеш уға аптырап ҡарап тик торҙо. Шулай ҙа йөҙҙән ҙур ниндәй һан барын белмәгәс, Бибекәй еңелде. Уға хәҙер:

— Әй маҡтансыҡ, маҡтансыҡ! Маҡтансыҡтың арты асыҡ? — тип таҡмаҡлап, асыҡ артын ялтыратып, Һыуға сумыуҙан башҡа бер сара ла ҡалманы. Йәнеш ғорур төҫ менән дуҫынын, артынан эйәрҙе. Улар тырышып-тырышып йөҙөргә, сумырға тотондолар.

Йәнештәр һыу ингән урын йылғаның иң һай, ағын ере ине. Бында йылға ҡояшта йымылдап ятҡан төрлө-төрлө, аҡыҡ кеүек матур, шыма, ҡырсынташтары араһынан, тере-гөмөштәй аҡ, саф булып сылтырап аға. «Кисеү» тий йөрөтәләр былурынды. Тимәк, ошо урында йылғаны кисеп сығып була. Бында һыу сите — ҡырсын, ваҡ, ҡуйы бөҙрә талдар, кин, яҫы япраҡлы йәш тирәктәр менән ҡапланған. Ләкин ағас күләгәһендә лә түҙгеһеҙ эҫе бөгөн. Ҡыҙған ҡырсынташтары табанды ҡуҙ кеүек яндыра. Емеш һыуға инергә ҡурҡып, ошо томроҡ күләгәлә хәле бөткәнсә баҫып торҙо. Ә уның янында, йылғаның ҡаҙандағы кеүек эҫегән һай урынында Гөлкәй бер үҙе генә һыу инеп йөрөй ине.

— Кил, төс, Емес, әрәхәт! +— тип, Емеште үҙ янына саҡырҙы ул.— Эй, ҡурҡаҡ, беҫмәгән!..— тип зәменә тейҙе. Ахыр Емеш тә, сисенеп, унын, янына төштө. Улар һыуҙың төбөнә таянып, йәнәш һуҙылып яттылар ҙа аяҡтарын бар көскә сәпелдәтә башланылар. Йәнәһе йөҙөп киттеләр. Йылы һыуға йыйылып, мыжғып ятҡан селбәрәләр, энә осондай ғына йотҡолсгктар, ҡайҙа ҡасырға белмәй, көтөүҙәре менән ары-бире йөҙҙөләр. Гөлкәй уларҙын, бер-икеһен һыу менән бергә услап алып йотоп та ебәрҙе.

— Ни, Бибекәй апайым әйтә, селбәрә йағһаң, балыҡ кеүек сәп йөҙөүсе булаһың, ти. Йә, Емес, һин дә йоғ. Тотоп бирәйемме?

— Кит, кәрәкмәй,— тине Емеш.— Йотҡолоҡ минен, эсемдә йәйен булып үҫеп китер.

Гөлкәй унан:

— Эй, ҡурҡаҡ, бесмәгән бәлес! — тип көлдө. Үҙенен, батырлығын тағы бер ҡат раҫлар өсөн йәнә бер-ике йагколоҡто йотоп ебәрҙе. Емеш унын, был батырлығына ысын күңелдән һоҡланды. Тик үҙе барыбер йотманы.

Бибекәй менән Йәнеш күгәренеп, тештәре тешкә тейеп шаҡылдағанса һыу инделәр. Емеш, ялынып:

— Ҡайтайыҡ, асыҡтым,— тип иламһырай башлағас ҡына улар күлдәктәрен кейҙеләр. Бәкәлдән генә булған һыуҙа йөрөгәнлектән, арҡаһына һыу ҙа теймәгән, туҙан



ҡатыш тир ағып бысранған бите лә йыуылмаған Емеш тә таһылдай-мышылдай күлдәген кейҙе. Йәнеш уның күлдәгенең алды артҡа кейелеүен дә абайламай етәкләп ҡайг тып китте. Бибекәйҙәр Ҡыҙылъяр урамы яғынан ҡайтырға булдылар. Йәнеш тә уларға эйәрҙе. Ҡыҙылъяр башына менгәс, улар күкһел йәшел булып, өйөрөлөп ағып ятҡан тәрән тымыҡ урында бер ҙә ҡурҡмай йөҙөп йөрөүсе ҙурҙарға һсжланып ҡарап торҙадар. Бында еткән ҡыҙҙар, еңгәйҙәр тулҡын өҫтөндә ятҡан аҡҡсштар шикелле ҡалҡынып-ҡалҡынып, Оло Эйек уртаһында йөҙөп йөрөйҙәр. Бирьяҡ ярҙан аръяҡ ярға кем уҙарҙан ярышалар. Йөҙгәндә ҡыҙҙарҙын. яңы ғына ҡалҡып килгән нәфис аҡ күкрәктәре күренеп-күренеп ҡала. Ошонон өсөнмөлөр бында ҡыҙҙар, килендәр араһында күкрәкте ҡалҡытып, аяҡтарҙы һыуға таҡмаҡлатып һуғып йөҙөү иң матур йөҙөү иҫәпләнә. Ҡыҙҙарҙан арыраҡ, Ҡыҙылъяр аҫтында, «төпһеҙ» упҡында малайҙар, егеттәр һыу инә. Улар өс-дүрт метрлы текә ярҙан һыуға һикереп төшәләр ҙә бик аҙаҡ һыу аҫтында юғалып торалар. Унан бөтөнләй икенсе урындан, алыҫтан, ҡалҡып сығып, ҡолас ташлап аръяҡҡа йөҙөп китәләр. Унда сыҡҡас, йомшаҡ һары ҡом өҫтөндә ятып ял итәләр. Ҡайһы берҙәре салҡан йөҙөүҙә ярышалар. Ҡыҫҡаһы, һәр ҡайһыһы үҙенсә йөҙә, ярыша, өйрәк балалары шикелле һыу эсендә уйнай. Бында ҡыҙға, малайға айырып бер-береһенә ҡул тейҙереү, ҡурҡытыу, оялтыу йәки берәй ҡырын һүҙ әйтеү кеүек әҙәпкә һыймаған бер генә нәмә лә юҡ. һыуҙа улар бөтәһе лә бер тигеҙ, тәбиғәт балалары. Бында, апо һыу буйында, борон-борщдан ошо ғәҙәт йәшәп килгән. Ул әле лә шулай дауам итә. Яҙғы һыу ташыу ваҡытынан алып көҙгө һыу туңа башлағанға хәтле йылға өҫтө һәр көн, бигерәк тә иртән-кис шулай йөҙеү, уйнау-көлөү, һыу сәсрәтеү тауыштары менән шау-гөр килеп тора. Кешеләр бында иң ҡыҙыу бесән-ураҡ өҫтөндә лә, һыуһынға туҡтаған арала ғына булһа ла һыуға төшөп сығырға ваҡыт табырға тырышалар.

Йәштәр һыу ингән ергә килгәс, Бибекәй менән Йәнеш ҡайтыуҙы бөтөнләй онотто. Ә төшкөлөккә етеп, тап түбә өҫтөнән ҡыҙҙыра башлаған ҡояш хәлде тағы ла нығыраҡ ала башланы.

— Йәнеш, әйҙә, кире китәйек! Тағы һыу инәйек!— тип тәкдим итте Бибекәй.

— Әйҙә,— тине Йәнеш тә,— йүгерәйек!..

Улар Һәр кен шулай, ҡайтырға сыҡҡас, бер нисә тапҡыр кире йүгереп китәләр. .Шулай итеп көн буйына йылғанан сыға алмайҙар ине. Ләкин бөген Й ^
в-рып сьпшаны.



5-Е.едиа.:г:изго 1 р ф^
Учалинского Г К

— Ҡайтайыҡ, әсәйемә ҡайтайыҡ! — тип иланы Емеш. Уның сәстәре араһынан шыбаҡшып тир аға, ике бите сейә кеүек ҡыҙарып яна ине.

— Әйҙә инде, Йәнеш, йәһәт бул! — тип ашыҡтырҙы Бибекәй. Үҙе шунда уҡ, Гөлкәйен эйәртеп, туҙанлы һуҡмаҡ буйлап, ҡашлаҡтан йүгереп төшөп тә китте.

— Емеш илай бит,— тине Йәнеш, икеләнеп.

— Бына минең һылыуым Гөлкәй ҡалай аҡыллы. Бер ҙә иламай, үәт! — тип маҡтанды Бибекәй.

Ысынлап та, Гөлкәй апаһына эйәреп йөрөй-йөрөй әрһеҙләнеп нығынып бөткән. Ул ҡайҙа барайыҡ тиһә, шунда китергә әҙер тора ине. Ә Емеште бығаса әсәһе әллә үҙе һауһыҙ булғанға ҡыҙғанып, бик иркәләй, ҡәҙерләй, үҙенән башҡа бер ҡайҙа ла ебәрмәй. Кәрәк саҡта уны мунсала йәки таста ғына һәйбәтләп үҙе йыуындыра ине.

Ҡашлаҡ аҫтына төшкәс, Бибекәй артыша боролоп тағы бер ҡат ҡысҡырҙы.

— Йә, әйҙә инде, Йәнеш! Эй, ҡылансыҡ!

Емеш:

— Ҡайтайыҡ! — тип, Йәнештең итәгенә йәбеште.

Йәнеш, асыуланып, Емештең. ҡулынан һелкетә тартып етәкләп алды ла ауыл яғына табан атланы.

— Илаҡ! Бынан ары алып йөрөр тиһеңдер әле.

Емеш мышҡылдай-мышҡылдай апаһынынңартынан эйәрҙе. Уның башы ауырта, күңеле бопғана, аяҡтары тала ине.

— .Шәберәк атла, бүкән!—тип тартҡыланы Йәнеш.— һинен, был атлауын, менән беҙ ҡасан ҡайтып етербеҙ?

Емеш нисек кенә тырышып ҡараһа ла шәп атлай алманы. Тора-бара хатта аяҡтары ҡамырҙан яһалған кеүек һығыла башланы. Ә бер аҙҙан бөтөнләй хәле бөтөп, ул туҙанлы юл өҫтөнә ултырҙы.

— Йәнеш, күтәр, арыным!

— Бына, биғәләш! Мин һине күтәрә аламдыр шул?! — тип аптыраны Йәнеш.— Әйҙә, ултырма, тор, ҡайта һалайыҡ.

Емеш торманы. Ул хатта, нисектер, йсгкомһораған да кеүек була башланы. Йәнеш, бәләкәс кенә йоҙрсжтарын төйнәп, уның башын төйгөсләп тә ҡараны.

— Уй, һине!.. Бына күрерһен,, икенселәй үҙенде бер ҡайҙа ла алып йөрөмәм,— тине ул, үҙе лә иламһырап.— Йә, тор, тим, атла, тим!

Булманы, Емеш тыһылдап, баяғынан да нығыраҡ ҡыҙара бүртенеп ултыра бирҙе. Ахыр Йәнеш унын, алдьша сүкәйҙе.

— Әйҙә, һылыу, йөкмәп алып ҡайтайым,— тине ул, инде йомшаҡ тшна итеп.— Атлан!

Емеш, көскә тороп, апаһьшын, арҡаһына атланды. Йәнеш, ергә башы тейә яҙып, биленән бөгөлә-һығыла алға йүгерҙе.



Ләкин күп тә бармаҫтан, хәле бөтөп, үҙе лә ултыра төштә. Аяҡ-ҡулы еп кеүек өҙөлөргә генә торған бәләкәс, арыҡ еге йәшлек Йәнешкә, буйға үҙе ҙурлыҡ тип әйтерлек тос, йомро кәүҙәле дүрт йәшлек Емеште күтәреүе сиктән тыш ауыр ине. Шулай ҙа ул һеңлеһен ташлап китмәне. Бер йөкмәп, бер төшөрөп, ауната-тәгәрәтә алып ҡайтып егкерҙе.

Байгилде ағай был ваҡытта тағы Ҡормош байҙарға эшкә киткәйне инде. Әҫе, торма өйҙә Сәғүрә еңгә бер үҙе генә ята ине.

Сөнки Бибеш тышта, аласыҡта, киске тамаҡҡа өйрә бешерер өсөн тары төйә, Иштуған яғырлыҡ сытыр-мытыр йыйып алып ҡайтырға тнп түбәнге туғайға киткәйне.

Өйгә ингәс, Емеш бер сүмес һалҡын һыуҙы төп күтәрә һемереп эсте лә әсәһе янына барып ауҙы. Сәғүрә еңгә уның яғына көскә башын бороп:

— Ҡыҙыҡайым, бәпесем, ауырып киттеңме әллә? — тип һораны.

Ауыр, йыш тын алып ятҡан бала, күҙҙәрен асмай ғына:

— Йоҡом килә, әсәй,— тине. Сәғүрә еңгә ҡыҙының башын баҫып ҡарарға, арҡаһынан һөйөп иркәләргә теләне. Ләкин ҡулдары һаман элеккесә хәрәкәтһеҙ ҡалдылар. Ул үҙенә тилмереп ҡарап, аяҡ осонда баҫып торған Йәнешкә күҙ йәштәрен күрһәтмәҫ өсөн, башын мөйеш яҡҡа борҙо. Йәнеш, ҡайғылы башын түбән эйеп, тышҡа, апаһы Бибеш янына, сығып кетте.

IV

Ошо көндән алып Емеш ике аҙна буйы ҡаты ҡыҙыулыҡ менән ятты. Төндәрен һаташып, ҡысҡырып сыҡты. Әсәһенең ҡанын алған мулла шикелле салыш күҙле, кәүҙәһеҙ баштар, сәлләләренең ҡойроҡтарын һөйрәлтеп унын, тирәһендә йылан кеүек өйөрөлдөләр. Тештәрен ыржайтып, кеше башы һыйып китерлек ҡурҡыныс ҙур ауыҙҙарын шапылдатып уны йоггорға маташтылар. Йәки уның әсәһен өҙгөләп, йсмҡкодап ашарға тогондсшар. Әсәһенең беләктәре, күлдәктәре буйлап ҡандар сәсрәп сыҡты.

— Сәлләләр! Баштар! Ҡан! Ҡан! Әсәкәйем! Теймәгеҙ! Теймәгеҙ әсәйемә! — тип, илап һаташты ул. Ҡайһы саҡта шулай ҡысҡыра-ҡысҡыра тороп йүгереп тә китте. Байгилде ағай тен йоҡламай ҡыҙын ҡараны. Ул хәҙер Ҡормош байҙарҙа эшләмәй ҙә ине инде. Бай уны: «Үҙ өйөндә күп булаһың. Миңә ундай ялсы кәрәкмәй»,— тип эшенән ҡыуып та сығарғайны.

Емеш менән бындай хәл һәр кис шулай ҡабатланды. ғүр еңгәнең хәлен белергә килеп йөрөгән әбейҙәр, хәҙер

Емештең ауырыуы, уны нисек һауыктырыу кәрәклеге тураһында ла баш вата башланылар. Берәүҙәре уға һыу ене ҡағылған, икенселәре ер ене һуҡҡан, тип раҫланы. Хәҙер күп ваҡытын Сәғүрә еңгә менән Емеште тәрбиәләп бында үткәреүсе Сыуаҡай әбей «күҙ тейгән» тигән фекерҙе ҡеүәтләне. Хәл белә килгән күрше-күләнгә, Емештең ябай бала түгеллеге, ниндәйҙер айырым ғәжәп бала, күҙ тейерлек бала булыуы хаҡында әллә ни хәтле дәлилдәр килтерҙе.

— Мин бит уның кендек инәһе. Беләм инде. Тыуғандан уҡ әллә ниндәй бала булды ул,— тип һөйләне ул, был турала бик серле итеп.— Бер саҡ, мин һиңә әйтәйем, ҡышҡы сатлама һыуыкта, оногмаһам, ғинуар айында ине шикелле, төн уртаһында Байгилде ҡәйнеш йүгереп килеп инде.

— Еңгә, ти. Тиҙерәк бул, ти. Киленең балаға ауырып китте, ти. , Шунан мин ҡарға бата-сума йүгереп килһәм, сөбханалла, был бала тыуған да яр һалып ҡысҡырып илап ята: «Ниңә мине матур итеп ҡаршы алыусы ла юҡ?..»—ти буғай, бисара. ,Шунан мин тиҙ генә кендеген ҡырҡтым да, ялғашҡа йылы һыу һалып, йыуындыра башланым. Ҡарайым, ҡыҙыҡайың ике-өс ай йәшәгән бала шикелле ҙуп-ҙур, туп-тулы. Беләккенәләре быуаҡланып тора хатта. Сәстәре лә оп-оҙон, ҡап-ҡара. Хатта керпектәренә, ҡаштарына хәтле үҫеп бөткән. Үҙе яр һалып ҡысҡырып илай бит әле.Шунан, мин һиңә әйтәйем, йыуындырып йылы йүргәккә төрөп күтәреп кенә алғайным, ҡыҙыҡайын шарт тынмаһынмы. Ул ғына ла түгел, илауҙан туктаны ла башын ипләп кенә төрлө яҡҡа бороп, күҙен ҡыҫып ҡына түбә таҡтаһына ҡарай башланы. Сөбханалла, мин әйтәм, әйтмәйем уйлайым, был ни ғәләмәт?! Тфү, тфү!.. Үҙем, күҙ тейҙереп ҡуймайым, тип, тиҙ генә әсәһе янына илтеп һалдым.,Шунан ни булды тиһегеҙме? Теге бала баш осонда мейес ссжалтаһында быҫылдап ултырған һуҡыр лампаға аңҡайып ҡарай башламаһынмы? Әстәғәфирулла!..— Әй, мин әйтәм, бисара бала, яҡты донъя тигәндәре, ташҡүлсәйем, ошомо икән? — ти буғай, тим. Үҙем йәнә, күҙ тейҙереп ҡуймайым, тип, өҫтөнә лас-лос төкөрәм. Тфү, тфү!— тим. Егерме-утыҙ йыл буйы әллә нисә йөҙ баланың кендек инәһе булып, бындайҙы күргәнем юҡ ине,— тим. Иҫендәме, шулай тинем бит, килен?

Сәғүрә еңгә, талған күҙҙәрен алыҫ үткәндәргә төбәп, хәлһеҙ генә йылмайып ҡуйҙы.

___Эйе шул. Шулай тигәйнен, еңгә. Бик тә ҙур, бик тә шәпле булып тыуғайны шул ҡыҙыҡайым. Мин хатта игеҙ булыр ахыры тип ҡурҡып йөрөгәндә, шундай шәпле бер ҡыҙ тыуыуға харап ҡыуанғайным. Атаһы ла ҡыуанғайны.

Уның был һүҙенән һуң, Сыуаҡай әбей, тағы ла ҡанатланып, үткәндәрҙе хәтерләргә кереште.



— Шунан һуң нисек шәп үҫеүен ҡарағыҙ әле һеҙ уның. Өс айҙа ҡулына тәтәй тогш уйната башланы. Дүрт айҙа ултырҙы. Сәғүрә килен уны, тап боронғадар әйткәнсә, алты айҙа алдан һалды, ете айҙа егәкләне. Ә йәше тулғанда инде ҡыҙыҡайың бөтөнләй һөйләшеп тә бөттө., Шулай булды бит, килен?

Сәғүрә еңгә сикһеҙ ауыр итеп көрһөнөп ҡуйҙы:

___Эйе шул, еңгә, шулай булғайны шул...

Уның оҙш ҡуйы керпектәре араһынан терегөмөш кеүек йомарсаҡ йылтыр йәш тамсылары атылып сыҡтылар ҙа һөйәк менән тиренән генә торған сикәһе буйлап мендәргә табан йүгерҙеләр.

— Йә, ошшай булғас, уға нисек күҙ теймәһен? — тип, һүҙен дауам итте Сыуаҡай әбей.— Хәҙер бына уға дүрт кенә йәш. Ә буйға ла, аҡылға ла ете йәшлек Йәнештән иҫлерәк бит ул!

— , Шулай шул. Дөрөҫ шул. Күҙ тейгәндер,—тиештеләр әбейҙәр.

Шулай итеп, күҙ тейеү хаҡлығы һис шикһеҙ иҫбат ителгәс, һүҙ кемдең күҙе тейеү мәсьәләһенә күсеп китте. Сыуаҡай әбей бында ла башҡаларҙан белдеклелеген күрһәтте.

— Бүтән берәүҙең дә түгел,,Шәһит ҡарттың ғына күҙе тейгән,— тине ул, ҡырт киҫеп. Унан үҙенә лә, әбейҙәргә лә тағы бер тапҡыр эҫе сәй яһап алғас, бик күп дәлилдәр менән уның ғына күҙе тейеүен раҫларға кереште.

Бибекәй менән Гөлкәйҙең ҡарттаһы, бәләкәс, арыҡ, еңел кәүҙәле, йылғыр оҫта ҡуллы, йор һүҙле Шәһит ҡартты бында «Сыпсыҡ , Шәһит» тип йөрөтәләр. Был ҡушамат хатта уның бөтә ырыуына ла таралған. Шәһит ырыуынан булған бөтә кешеләрҙе лә «сыпсыҡтар» тиҙәр. Был ҡушамат Шәһит бабай нәҫеленең кескәй, еңел кәүҙәле, етеҙ, эшсән ҡуллы булыуы есен һөйөп ҡушылғанлыктан, уға берәүҙең дә хәтере ҡалмай. Бына ошо Сыпсыҡ Шәһит бабай үҙенә инде һикһән алты йәш булыуына ҡарамаҫтан, таң иртәнән ҡара кискә тиклем бер генә лә тик тормай. Ул балта оҫтаһы. Үҙҙәренең ишек алдының бер мөйөшөнә эшләп алған станогында көндөң көнө буйына сабып-юнып, нәмәләрҙер эшләп кенә тора. Уның янында һәр ваҡыт яңы ғына щ 1л ц ӘНГӘН илэк> силэк . көрәк, тәртә, тәпәндәр аунап ята. Шәһит ҡарттың улы, Гөлкәйҙәрҙең атаһы Шаһиморат ағай, У ға УРмандан кәрәкле ағастарҙы алып ҡайтып биреп тора. ^ баҙар еткәс, аҙна буйына эшләнгән был көрәк-мөрәк, ҡамыт-ҡсэмогтарҙы үҙенең тар оҙон күкрәкле урман арбапына тейәй ҙә, баҙарға алып барып һатып, аҙналыҡ он,,

сәй-шәкәр һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алып ҡайта. Ә Шәһит картгын. унда эше юҡ. Ул хатта улынан:

— Күпмегә һаттың, нимә алдың? — тип тә һорамай. Эштең үҙе—юнып-йышып донъя кәрәген яһап тороу ғына ҡыҙыҡһындыра уны. Ә кескәй Емеш һәр ваҡыт уларға барып, Шәһит ҡарттын, әкрен генә йырлай-мөңрәй эш эшләгәнен ҡыҙыҡһынып ҡарап ултыра. , Шәһит бабай ҙа Емеште йәшенән алда үҫкәне, күпте белгәне өсөн ярата. Әсәһе ауырыу, тормоштары ауыр булғаны өсөн йәлләй. һәр килгәндә көләмәсләп, шаяртып унын, күңелен асырға тырыша.

— Әй ҡыҙым-ҡыҙым, һинең күлдәгеn. ситсанан ғына бит. Ана Ҡормош байҙың яп-ямаҡ ҡыҙы Ғилмекәй гел сатиндан да ебәктән генә кейә. Ниңә улай икән ул, ә? Бына һиңә кәрәк ине ул матур күлдәктәр, ә, ҡыҙым? — тип ирештерә

Ә Емеш, сер бирергә теләмәй:

— Минен. күлдәгем ситса түгел, ебәк кенә ул,— тип еңешә.

Әсәһе ҡыҙ саҡта, төрлө еп менән нәғешләп сигеп Байгилде ағайға бүләк иткән, хәҙерге көндә һандыҡ төбөндә яткан ебәк янсыкты күргәне бире, унын. күңелендә ин, матур нәмә ебәк тигән ан, ҡалған. Был унын. телендә ин, ҙур маҡтау һүҙе ине,

— Ситса бит инде, ҡуйсәле, ҡыҙым,— тип ныҡыша Шәһит бабай.

— Түгел. Ебәк, ебәк! Минең күлдогем дә, яулығым да, көпөм дә, әсәйем тегеп биргән ҡоптор итегем дә ебәк кенә! — тип ебәрә Емеш. Ҡайһы саҡта тағы ла батырайып китеп Шәһит ҡарттын, күлдәк ендәренән, энер бауынан тотоп тарта:

— һинең, бабай, үҙендең күлдәгең бына киндерҙән генә. Киндер генә күлдәгеңде бысҡы вағы йәбештереп бысратып та бөткәнһен, инде. Бына, әсәйен. орошор әле үҙенде,— ти.

Шәһит ҡарт, Емештен, яуапҡа аптырамауына кинәнеп, кеткелдәп көлә.

Ҡайһы саҡта, эштән арып ял иткән арала, ул Емешкә әкиәттәр ҙә һөйләп ала. Емеш бигерәк тә «Кәҙә менән бүре» әкиәтен яратып тыңлай. Уға әкиәттең көйләп һөйләнгән өлөштәре айырыуса окшай.

...Әбей менәа бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Яндарында бер бәпес
һикереп төшөп уйнай.
Арандагы биш кәзә
Мырт-мырт көйшәй,
һарайҙағы сыбар тай
Сыр-сыр кешнәй.



Соландағы ҡоторло көсөк
Ләүек-ләүек өрә,
Биш кәзәнең бишеһен дә
Ашарға ине мицә!..—

тип көйләй-көйләй килә, ти, ас бүре,— тип һалмаҡ ҡына таҡмаҡлап һөйләйШәһит бабай. Емеш, тын да алмай тыңлап, унын янында ултыра...

Сыуаҡай әбей уларҙы ошохәлдә күп тапҡырҙар күргәне бар шул. Ҡарттың, һакланып:

— Ай-һай, үткер бала булмаҡсы был Емеш. Мал ай булһа, ирмен тигән бер кеше сығыр ине үҙенән. Ҡыҙ булып ҡына әрәм булған,— тип һөйләнгәнен дә ишеткәне бар унын. Ошоларҙы хәтерләй ҙә ул хәҙер ысын күцелдән шомланып:

— Унын ғына, төптө унын ғына, күҙе тейгәй,— тип ҡабатлай.

— , Шулайҙыр, шулайҙыр. Унын. күҙе харап үткер бит ул. Кешене үтәнән-үтә күрерҙәй булып, туп-тура тишеп ҡарай ҙа ҡуя бит ул,— тиештеләр башҡа әбейҙәр ҙә. Унан һис кисекмәҫтән, ҡарттың берәй аламаһын өҙөп алып, өтәҫләп, Емешкә еҫкәтергә булдылар. Икенсе көндө иртүк Сыуаҡай әбейШәһит бабайҙарға килеп тә етте. Ҡарт был ваҡытта, ғәҙәтенсә, ғәмһеҙ мөңрәй-мөңрәй, кемдеңдер ҡорғаҡһыған мискәһенә ҡайтанан ҡоршау һуғып маташа ине. Сыуаҡай әбей, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, мискәнен, нисек ҡоршалыуын ҡарағ?! кеше булып, ҡарттын, тирәһендә әйләнгеләп йөрөнө лә унын ыштанынан бер алама өҙөп тә алды. Халыҡ әйткәнсә, «кырк ямау» күлдәк-ыштандан өҙөләп төшөргә торған урындар күп булғанлыҡтан, Сыуаҡай әбейгә был эште башҡарыуы һис тә ауыр булманы. Шәһит ҡарт бер ни ҙә һиҙмәй эшен дауам итте.

Ошо көндө үк был аламаны өтәҫләп, Емешкә еҫкәттеләр. Ләкин бынан уға бер еңеллек тә килмәне. Емеш һаман элеккесә янып-көйөп ауырыны ла ауырыны. Инде Сыуаҡай әбей икенсе саралар эҙләй башланы. Ул хәҙер, исмаһам, баланы һауыҡтырып булһа ла, Байгилденең ғаиләһенә еңеллек килтерергә теләй ине. Шулай ауырыуҙың сәбәптәре хаҡында һаман баш вата торғас, ул:

— Күҙ теймәгән. Ә ҡото осҡан. Ҡот ҡойорға кәрәк,— тигән фекергә килде. Байгилде ағай Емеште эҫе һуҡкандыр, иәки тирләп Һыуға төшкәнгә үпкәһе шешкәндер, тип уйлаһа ла, хәҙер бөтә ғаиләне ҡарап, ярҙамлашып йөрөгән Сыуаҡай әбейҙең хәтерен һаҡлап, ҡот ҡойоуға ҡаршы килмәне. «Әйҙә, ҡойһон инде^ Унщ файҙаһы булмаған кеүек, зарары ла юҡ»,— тип уйланы ул. Хатта ҡот ҡойған саҡта ҡыҙын үҙе алып ултырҙы. Сыуаҡай әбей, «мөртәт» Байгилденең ошолай яҡшырып, баҫалҡыланып китеүенә ҡыуанып:

— Бына күрерһең, Байгилде ҡәйнеш, бермә-бер килешер. Хоҙай ҡушһа, ауырыуы һылап алған кеүек булыр,— тип тәтелдәй-тәтелдәй ҡот ҡойорға тотондо. Ул тәүҙә ҡалаҡ башындай аҡ ҡурғашты сүмескә һалып иретте. Унан (бер ниндәй доғалыҡ белмәһә лә), ауыҙ эсенән нимәләрҙер укый-укый.бер туҫтаҡ һалҡын һыуҙы Емештең түбә өҫтөндә әйлән-дерә-әйләндерә уға ирегән ҡурғашты шажлатып ҡойоп ебәрҙе. Был тауыштан Емеш, тағы ла нығыраҡ ҡуркып, тыбырсынып илай башланы. Байгилде ағай, ҡыҙын тиҙ генә әсәһе янына алып барып һалып, тынысландырмаҡсы булғайны ла, Сыуаҡай әбей рөхсәт итмәне.

— Тороп тор. Ҡарайыҡ әле, ҡәйнеш. Нимәнән ҡото оскаҡанын беләйек. Ҡого төшмәһә, тағы ҡойорға тура килер,— тине. Унан һалҡын һыу эсендә төрлө яҡҡа сәсрәп, мәғәнәһеҙ шәкелдә ҡатып ҡалған ҡурғашты иғтибар менән әйләндереп-тулғандырып ҡарарға кереште. Ахыр:

— Үрмәксе һүрәтенә акшап төшкән. Үрмәксенән ҡурҡҡан икән,— тигән ҡарарға килде.— Шулай ҙа һынау өсен тағы бер ҡойоп ҡарайыҡ әле,— тине. Бынан һун. ҡурғашты ҡабат иретеп, йәнә шажлатып Емештен, баш осонда һыуға ҡойоп ебәрҙе. Емеш тағы ҡуркты, тағы иланы. Бынһында ҡурғаш әтәскә оҡшаған, Емеш әтәстән ҡурккан булып сыҡты.

— Инде ҡото ҡайтканса, йөрәк һүрәте төшкәнсә ҡойорға кәрәк,— тип раҫланы Сыуаҡай әбей. Байгилде ағай тағы ҡаршы килә алманы. Сыуаҡай әбей Емеште һаман шулай ҡурҡытып, илатып, бик эшлекле төҫ менән ҡот ҡойоуын дауам итте. Ахыр, ул, нисектер, әллә ҡоя-ҡоя, эҫеп ҡалған һыуға төшкәнгәмелер, бик үк сәсрәмәй, йомарсағыраҡ булып ҡаткан ҡурғашты туҫтаҡтан алып:

— Бына, ҡогоҡайтты. Йөрәк һүрәте төштө. Инде һауығыр, иншалла,— тине лә, ҡурғаштың ослораҡ бер урынын тишеп, еп үткәреп, Емештең муйынына таҡты. Ҡурҡып, илап хәлдән тайған бала атаһының ҡулында уҡ йсжлап китте. Сыуаҡай әбей Байгилде ағайға ғорур ҡараш ташлап алды:

— Күрҙеңме, ҡәйнеш, ҡогоҡайтҡас, бала ҡалай тынысланды! Әйттем бит, шифаһы тейер тигәйнем бит!..

Үҙенән бигерәк балаһы өсөн ҡайғырған әсә, өнһеҙ-һүҙһеҙ генә илап ятты.

Был им-томдарҙан һуң Емеш кисен генә түгел, кендеҙ ҙә һаташып, ҡуркып тағы бер аҙ ауырыны. Ике аҙна тигәндә, ул бер көндө бөтөнләй үлер хәлгә етеп ауырая башланы. Ошо ваҡыт Шәһитбабай яңы ғына һуйылған һарыктың тиреһен алып инеп, Емеште төрөп һалды. Емеш йылы тире эсендә манма һыуға төшөп, ауырый башлағаны бирле тәү тапкыр тирләп, рәхәтләнеп йсклап китте. Шәһит бабай үҙ эшенән бик ҡәнәғәт булып: .



— Мин һеҙгә күптән әйттем. Балаға тир ауырыуы тейгән. Тирләтергә кәрәк тинем. Ә һеҙ һаман тыңламайһығыҙ. Шуға бына әле, бесән ваҡытында ашарға тип бөгөн өлкән һарығыбыҙҙы һуйғайныҡ та, тиреһен йылы ғына көйө йүгертеп алып индем. Ҡыҙыма һурпаһын да инәһе алып килеп эсерер әле. һауығыр,— тип һөйләнде. Байгилде ағай менән Сәғүрә еңгә уға булған рәхмәттәрен нисек аңлатырға белмәй, һүҙһеҙ тынып ҡалдылар. Шәһит бабай уларҙы был уңайһыҙ хәлдән -коткарыр өсөн:

— Ярар, ярар, һарығығыҙ булмаһас, ҡайҙан һуң һеҙгә тире алырға? Ни эшләйһең, хәл юҡ. «Байлыҡ аҡыл яткырмай, ярлылыҡ аҡыл таптырмай»,— тигәндәр бит. һеҙ ҙә шулай инде,— тип еҫтәне лә, кәлт-көлт баҫып, сығып та китте.

Ошо кендән һуң әллә, ысынлап та, йылы тире эсендә ятып тирләү килешеп, әллә ауырыуҙың кризисы уҙып, Емештең ҡыҙыулығы төштө, һауығыу яғына сыкты. Урынынан тороп, үҙенен, дә, әсәһенен, дә күҙенә, ауыҙына ябырылып йонсогҡан себен өйөрөн ҡыуып ултыра башланы. Тик тышҡа, уйнарға сығырға ғына уның хәле юҡ ине әле. Сәғүрә еңгәнең хәлен белергә, ғаиләнең ҡайғыһын уртаҡлашырға күрше-күлән, әбей-һәбей һаман килгеләп торҙо. Уларҙың ҡайһы берҙәре, йәшерәктәре, ҡыҙҙарҙың сәстәрен тарап, өҫ-баштарын йыуып, икмәк бешереп китте, олораҡтары илдәге, ауылдағы хәбәрҙәрҙе һөйләне. Был хәбәрҙәрҙең күбеһе хәҙер гел шулай ҡоролоҡ, йотлок килеү тураһында ине. Улар, ауыр көрһөнә-көрһөнә, шомлотауыш менән, яҙҙан бирле ергә бер тамсы ямғыр яумауы, күктә бер генә болот та күренмәүе, йәш балаларҙынәс китеүе менән ҡырылыуы, ашлыҡ, үлән кибеп-ҡороп бөтөүе тураһында һөйләйҙәр. Ҡасандыр булған ошондай ҡоролоҡта кешеләрҙең эт, бесәй, хатта кеше ашауҙары, ауылы-ауылы менән ҡырылыуы хаҡында береһенән-береһе ҡот осорғосораҡ хәлдәрҙе хәтерләйҙәр. Бер саҡ Сыуаҡай әбей көн буйы тип әйтерлек гел сшондай ҡуркыныс хәлдәр тураһында ғына һөйләп ултырҙы.

— Япон һуғышынан элек булды был аслыҡ,— тип башлап китте ул хикәйәһен.— Эй-й, әле лә көн кеүек иҫемдә. Хоҙайҡайым, ҡабат күрһәтмәпен ул көндө. Тәүбә, әстәғәфирулла, ул йылды юл буйында маяҡ урынында ла мәйеттәр баҫып торҙобит!.. Аслыктан өркөтелөп урамға һибелгән бисаралар ауыл араларында юл буйы тулып ҡыҙырып йөрөйҙәр-йөрөйҘәр ҙә, ҡайҙа тура килһә, шунда үлеп ҡалалар. Шунан әллә инде берәй таш бәғерлеһе уларҙы маяҡ итеп юл ситенә ҡаҙап китә. Әллә үҙҙәре шулай баҫкан килеш ҡатып ҡалалар... Шунан ас бүреләр килеп йолҡколап ташлағансы төрлөһө төрлө һүрәттә һерәйеп торалар шунда, меҫкендәр. Йыйып алып күмер кеше лә ҡалманы бит. Ни хәл итһендәр... Тере

йөрөгән кешеләр ҙә ярым үлеп, күнелдәре ҡатып бөткәндер инде, күрәһең... Бер кемдең дә был мәйет-маяҡтарға иҫе китмәй. Үҙҙәре лә шулай бер көн йығылып ҡалғанса улар юлынан йөрөй бирәләр, меҫкендәр... Эй алла... һай, афәт!..

«Был эбей Сәғүрәне үлтермәйенсә һөйләүҙән туктамаҫ, ахырыһы»,— тип борсолоп уйланды Байгилде ағай. Ул ишек төбөндә, түмәр өҫтөндә, Иштуғандың итеген ямап ултыра ине. Улар бөгөн кис Иштуған менән икәүләп Уралға, әлеге шул Ҡормош байға көнлөккә ялланып бесән эшләргә китергә тейештәр ине.

Сыуаҡай әбей шулай көйләп һуҙып, бер аҙ тынып ултырҙы ла, Сәғүрә еңгәгә ҡапыл эйелеп:

— Беләһеңме, килен, хоҙай нинә илгә ҡоролоҡ ебәрә? — тип һорау биреп тағы һүҙ башлап алып китте.— Бына Әхмәҙулла мулла әйтә, ерҙә гонаһлы бәндәләр күбәйҙе, ти. Кешеләр байҙыг бай, батшаны батша, мулланы мулла тип белмәй башланылар, ти. Бына, ти, Бетербурҙа хатта зауыттыҡылар батшаға ҡаршы ҡул күтәргәндәр, ти. Әстәғәфирулла тәүбә, батша һынлы батшаға ҡаршы сыҡҡандар, ти. Ҡайһы бер ерҙә ауыл кешеләре лә аҙҙы, ти. Батша, баярға ҡаршы күсәк күтәреп ҡаршы сыға башланылар, ти... Йә, шул ярай торған эшме? Был бит алланың эшенән риза булмау тигән һүҙ. Алла бит кемде бай, кемде ярлы итергә үҙе белә инде ул. Ин. яратҡан кешеһен, ярлы, сырхау итермен тигән ти бит ул. Бына һин дә, Сәғүрә килен, алланын, иң һөйгән бәндәһе булғанға ошодай аҙап сигәһен. бит. Ауыр аҙапҡа һыҡтамай-зарланмай түҙеүен, өсөн аллаһы тәғәлә һине ожмахтын, ин, түренә мендереп ултыртасаҡ. Был фани донъя нимә ул? Бында беҙ барыбыҙ ҙа ҡунаҡ ҡына бит. Бында ҡалай ҙа уҙа, теп йортта, теге донъяла, хсҫай ожмахтан мәхрүм итмәһен. Ә күп кешеләр бына алланың ошоэшенән риза булмай күтәреп булашалар икән. Йә, шул ярай торған эшме? Әхмәҙулла мулла әйтә, бәс, шулай булғас, хоҙай ергә нисек афәт ебәрмәһен, ти?..

Байгилде ағай тамам түҙемдән сығып:

— Енхә,— тип унын һүҙен бүлде.— Петербурҙа ул хәл бишенсе йылда уҡ булғайны ла баһа. Ә хәҙер ун беренсе йыл. Ниңә хоҙай бының өсөн язаны улай һуңлап ебәрә икән, ә? Боронғолар: «Былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡыҫҡырмайҙар», тигәндәр түгелме һун.? Етмәһә, батша, байҙар бының өсөн үҙҙәре лә етерлек үс алғайнылар ҙа баһа? Ҡорал да, власть та улар ҡулында ла баһа... Алла ярҙамыша мохтажмы ни улар?!

Сыуаҡай әбей, былдай иманһыҙ һорауға ни тип яуап ҡайтарьфға белмәй, күҙҙәрен шар асып аптырап торған арала, Байгилде ағай тағы шул асыуһыҙ, эскерһеҙ тауыш ме нән:



— Унан, ен,гә, аллаһы тәғәлә ницә гел шул батша, байҙарҙы ғына яҡлай икән, ә? Әллә ул үҙе лә шул бай токомданмы икән?— тип өҫтәне.

Сыуаҡай әбей ҡурҡышынан аҡылынан яҙырҙай булып:

— Кит, иманһыҙ! Әстәғәфирулла тәүбә тиген, мөртәт! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

— Унан, еңгә, Әхмәҙулла мулла нинә һуң үҙе ярлы, ауырыу кеше булып, алланың ин, һөйгән бәндәһенә әйләнергә теләмәй икән, ә? Тегенән-бынан өҙөп-йолҡоп һаман байырға, күп тә, яҡшы ла ашап керәйергә тырышып ятҡан көнө бит!

Сыуаҡай әбей эләгә-тәгәрәй ишеккә ташланды:

— һинең менән һөйләшеп иманыңдан яҙыуың бар, тфү, мөртәт!..

— Ниңә оло кешене үсекләйһең?—тип шыбырланы Сәғүрә еңгә. Үсегеп килмәй ҡуйһа, мине кем ҡарар? Үҙең китәһең...

— Йән түҙмәй китә бит. Нисек гел генә өндәшмәй сыҙайһың?—тине Байгилде ағай, әсенеп. Унан ҡул ғына һелтәне лә ямап бөткән итеген әсәһе янында ултырған Иштуғандың аяҡ аҫтына ырғытты.

— Мә, кей, улым. Киттек. Бөгөн барып етеп, берәр һыуһын эшләп ятырға кәрәк.

Иштуған итеген кейгәс, әсәһенә текләп, йөҙлөк буйында тағы бер аҙ тапанып торҙола яй ғына атлап тышҡа сыҡты.

— Салғыға ҡырҡылып ҡуйма, улым,— тип ҡалды Сәғүрә еңгә.

— Уралда йылан күп була торған... һаҡлан!..

Байгилде ағай күҙҙәрен ҙур асып, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә ултырған Емештең арҡаһынан бер генә ҡағып һөйөп ҡуйҙы.

— Әсәйеңде ҡара, йәме, ҡыҙым.

Сәғүрә еңгәнен, балауыҙҙай һары хәрәкәтһеҙ ҡулдарын йомшаҡ ҡына һыйпап үтте.

— Бирешмә, әсәһе, нык бул...

Унан ҡапыл ашығып, тышҡа ташланды. Өй эсе тағы ла ҡаранғыраҡ, ҡайғылыраҡ булып китте. Сәғүрә енгә, хәрәкәтһеҙ күҙҙәрен ҡайҙалыр алыҫҡа теклэп, өнһеҙ-һүҙһеҙ тынып ятты. Себендәр тағы ла ҡомһоҙланыбыраҡ уны таларға керешге. Емештең хәлһеҙ ҡулдары таҫтамал елпетеп, уларҙы ҡыуып ултырыуҙан бик тиҙ талды. Ул оҙаҡламай, үҙе лә һиҙмәҫтән, әсәһе янына ауып, иҙерәп йоҡлап китте. ғаҙаплы ауырыу һәм ҡайғы эсендә, көндән-көн нығыраҡ пулый, шиңә барған Сәғүрә енгә янғыҙы ятып ҡалды.

## V

Береһенән-береһе күнелһеҙерәк, монһоуыраҡ көндәр менән тағы бер аҙна ваҡыт у^ҙы. Емеш бөтөнләй тип

әйтерлек һауығып, Йәнеш менән бергә тағы тышта йөрөй башланы. Ә көндәр һаман ҡыҙыулана ғына барҙы. Ураҡ ваҡыты етте. Тик урырға ашлыҡ ҡына юҡ ине. Йомшаҡ иҫке ерҙәрҙе генә һөрөп сәскән ярлы-ябағаның баҫыуында ашлыҡ тамырынан уҡ көйөп, ерҙең ҡара саңы осоп ята. Тик байҙар баҫыуында ғына, буйта тәпәш булһа ла, тос башаҡлы, ҡыҙыл туҡал бойҙай тулҡынып үҫкәйне. Быны күреп халыҡтың бер төрлөһө ғәжәпләнә. Икенсеһе: «Алла һаман ярлының ауыҙынан тартып алып байға бирә»,— тип һуҡрана. Ә белдеклерәктәре:

— Улар шикелле көҙҙән тәрән итеп сиҙәм аҡтарһаң. Яҙын иртә сәсһәң. Етмәһә, беҙҙең ҡоро яҡҡа эйәләшеп, сыҙамлы булыш алған ҡыҙыл туҡалды йәки аҡ туҡалды сәсһәң, беҙҙең дә иген уңыр ине лә бит. Беҙҙең арыҡ аттар менән сиҙәм аҡтарып та, ваҡытында ғына һөрөп-сәсеп тә булмай шул,— ти.

Күптәр, илап-ялбарып, хоҙайҙан ямғыр теләй. Барлыюҡлы малын ҡорбанға салып, әлеге шул Әхмәҙулла муллаға ашата. Унан етмеш ҡара ташты өшкөртөп, Оло Эйеккә ырғыталар. Былай ҙа булмағас, «болоттарҙы өркөтөп, ямғыр яуҙырмай тороусы тауыҡтар бар имеш. Ул тауыҡтарҙың ҡанат аҫтары яланғас була, имеш. Шул тауыҡтарҙы тотоп муллаға бирергә кәрәк. Мулла уларҙы өшкөртөп, муйындарын бороп, тәндә һыуға сумырһа, ямғыр яуасаҡ, имеш», тигән һүҙ тарала. Бына бер көн ауыл тауыҡ ҡыткылдаған тауыш менән тула. Йәштәр, балалар, ҡатындар ҡыскыртыпсырылдатып тауыҡ тоторға керешәләр. Ниндәй генә тауыҡты тотоп ҡарамаһындар, бөтәһенең дә ҡанат аҫтары, әлбиттә, арыҡлыҡтан яланғасланып бөткән булып сыға. Шулай итеп, «ямғыр яуҙырыусы» шәрә ҡанат тауыҡтар ҙа тотолоп, мулла ҡаҙанына төшөп бөттө, ә ямғыр һаман яуманы. Ҡояш һаман элеккесә ҡыҙҙыра, көйҙөрә барҙы. Инде хатта кистәрен ысыҡ та тешмәй башланы. Ауылда береһенән-береһе ҡурҡынысыраҡ, шомлораҡ һүҙҙәр таралды. Халыҡ тамам өмөтһөҙлөккә бирелде. Рәхимһеҙ аслыҡ тың аяуһыҙ тырнағы әле үк үҙ муйындарына бата башлағанын тойоп күптәр эш, аҙыҡ эҙләп ары ҡағылды, бире һуғылды. Һәр кемдә баш ҡайғыһы китте. Әбейҙәр, күршекүләндәр Емештәргә килеп оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп ултырмай ҙа башланылар. Улар, ирендәре кибеп, төҫтәре ҡара янып, өнһөҙ күләгәләр шикелле, аҙға ғына инәләр ҙә ғәҙәт буйынса:

— Шәмпе, килен? Хәлең нисек? Арыуланмайһыңмы әле? — тип хәл һорашып һәм бер кемде лә ышандырмаған тауыш менән:



— Алла ярҙам бирһә, фәрештәнен амин тигәненә тура килһә, һауығып та китерһең әле, килен, бошонма,— тип, йыуатыу һүҙҙәрен әйтеп сығып китергә ашығалар. Хатта бығаса уларҙан ҡайтмай йөрөгән Сыуаҡай әбей ҙә, бигерәк тә бер көн, һис тә уйламағанда, Байгилде ағай менән һүҙгә килешкәндән һуң, уларға һирәгерәк килә башланы. Килгәндә лә Байгилде ағай менән осрашмаҫҡа, һөйләшмәҫкә тырыша ине.

Ошондай үтә күңелһеҙ көндәрҙең береһендә Байгилде ағай Уралға Ҡормош байҙарға көнлөкләп бесән эшләргә китмәне. Иштуған да өйҙә ҡалды. Улар ни өсөндөр гел Сәғүрә еңгә янында ғына ултырҙылар. Бибеш тә өйҙән сыҡманы. Сәғүрә еңгә бик әкрен, ара-тирә генә һөйләшеп, ғәҙәттәгенән дә шымыраҡ, бәләкәсерәк булып, хәҙер-хәҙер иреп, шиңеп бөтөргә торған май шәм һымаҡ һыҙып тик кенә ятты. Йәнеш менән Емештә әсәһе янында, өйҙә генә, ултырмаҡсы булғайнылар ҙа, Байгилде ағай уларға:

— Ҡыҙыҡкайҙарым, бар, тышта уйнағыҙ. Әсәйегеҙ янында мин үҙем ултырып торормон,— тип, сығарып ебәрҙе. Ҡыҙҙар ҡаҙ бәпкәләре шикелле аллы-артлы эйәрешеп, тауыштынһыҙ ғына Гөлкәйҙәргә китеп барҙылар. Улар барып ингәндә, Шәһит бабай һаман шул ҡапҡа эргәһендәге лапаҫ аҫтында йөрөй. Кемгәлер ер-ян,ы арба тәгәрмәсе эшләп маташа ине. Йәнеш менән Емеш уның янына бүрәнә өҫтөнә барып ултырҙылар.

— Килдегеҙме, ҡыҙҙарым? — тине Шәһит бабай, үҙе уларға ҡарамаҫҡа тырышҡан кеүек булды.

— Килдек,— тигән булдылар ҡыҙҙар. Шуның менән һүҙ бөттө. Шәһит бабай бөгөн, ниңәлер, элекке кеүек төрлө көләмәс һүҙҙәр һөйләп, Емеште мәрәкәләп тә ултырманы. Тик ара-тирә эштән туктап, тирә-яҡҡа әллә ниндәй ят ҡараш ташлап тора бирә лә, башын сайҡап:

— И-һи-һи... Йылдар!.. Килде бит һеҙҙең быуынға йылдар, Емеш, ҡыҙым, ә?.. Килде!..— тин күңелһеҙ һуҙып ҡына ҡуя ине.

Емеш бындай һүҙҙәрҙән бер ни ҙә аңламаны, әлбиттә. Шуға күрә бабайға һиҙҙермәй генә апаһынын. еңенән тартты:

— Китәйек! Китәйек, тим, Йәнеш!

Йәнеш ҡуҙғалманы. Оҙаҡламай аласыҡтан ауыҙы-бите ҡатыҡҡа буялып, Бибекәй менән Гөлкәй ҙә килеп сыҡты. Бибекәй Йәнеште күреү менән, ғәҙәтенсә:

Әйҙә, әхирәт, һыу инә барайыҡ!..— тип ҡысҡырып

— Бармайыҡ. Бында ғына уйнайыҡ,— тине Йәнеш.

Балалар урамға сыҡтылар. Урам буш, кен бөркөү, эҫе. °алаларҙың береһенен дә күңеле йүгереп уйнарға ла, һыу

инә барырға ла ихласланып тартманы. Улар өлкәндәр шикелле уйсан төҫ менән ҡапҡа төбөндә тапанып торҙолар. Ахыр Бибекәй тағы һүҙ башланы.

— Улай булғас, әйҙәгеҙ. Ҡыҙылъяр башына барып, тиреҫлектән мунсаҡ эҙләйек. Бына мин унан кисә ни хәтле мунсаҡ таптым! Ҡарағыҙ, нисәмә төрлө!..

Ул һүҙен дөрөҫләр өсөн, Йәнештен. алдына баҫып, үҙ муйынындағы бер теҙем йәшелле-зәңгәрле мунсаҡҡа төртөп күрһәтте.

— Бына, күрҙеңме?

— Кәрәкмәй,— тип ҡаршы төштө Емеш.— Бармайыҡ. Унда мунсаҡ хәҙер юҡ та ул.

— Бар,— тип ныҡышты Бибекәй.— Ҡарттайым әйтә, борон унда хатта ҙур, хатта бай ауыл булған, ти. Салауат батыр менән Йәмәлкә батыр болаһы сағында ул ауылда әбей батша ғәскәрҙәре үрт һалып көлөн күккә осороп киткәндәр, ти. Шул саҡта янған селтәрҙәрҙен, ҡашмауҙарҙың мәрйендәре, мунсаҡтары әле булһа ошо тиреҫлек араһында һибелеп ята, ти, белденме?

— Беләм дә...— ти Йәнеш.— Сыуаҡай инәйем һөйләгәйне лә...

Эйе, Йәнеш тә был хаҡта белә. Уның да замандар үтеү менән тупраҡ төҫенә инеп барған был ҡыҙғылт тиреҫлектән әллә ни хәтле мәрйендәр, мунсаҡтар, әбей батша һүрәте төшөрөлгән көмөш тәнкәләр табып алғаны бар. Шулай ҙа Йәнештең бөгөн унда барғыһы килмәне.

— Ҡуй, бармайыҡ. Эҫе. Әйҙәгеҙ, Ҡормош олатайҙарҙын ҡыйлығына барайыҡ. Унда төрлө-төрлө матур сынаяҡ ярсыҡтары күп була. Шуларҙы йыйып алырбыҙ ҙа күләгәлә генә сынаяҡ уйнатып ултырырбыҙ, йәме, Бибекәй әхирәт,— тине.

Бибекәй ҙә быға күнде. Улар һенлеләрен етәкләп, үрге оҫҡа, йәшел тимер түбәле өйҙәре, зәңгәргә буялған семәрле ҡапҡалары менән бөтә урамды йәмләп ултырған Ҡормош бай йортона табан киттеләр. Әлбиттә, уларға был ҡапҡаларҙын эсенә инергә, бай ишек алдының ғәжәп мауыҡтырғыс тормошо менән танышырға бер ҡасан да тура килгәне юҡ. Әле лә улар, байҙың ҡойма аша тыҡрыҡҡа ырғытылған сүплегенә генә барҙылар.

Сүплектә, ысынлап та, сынаяҡ ярсыҡтары, сәй ҡурғаштары, буш шырпы ҡаптары тулып ята ине. Ләкин балаларҙын. күңелен хәҙер улар түгел, ә бөтөнләй икенсе нәмә ылыҡтырҙы. Сүплек өҫтөндә Емештең йоҙроғо хәтле булып бүртенгән эре ҡара емештәр баҙырайышып ята ине. Был ки ғәжәп хәл? Ҡыҙҙар бер ҡасан да бындай емештәрҙе күргәндәре лә, ашағандары ла юҡ та баһа!..



Балалар, ни әйтергә, нимә эшләргә белмәй, емештәрҙән күҙҙәрен ала алмай тeкләп торҙолар. Ахыр Бибекәй түҙмәне:

— Тукта әле. Береһен генә тел осома тейҙереп ҡарайым әле. Тәмлеме икән?— тине. Үҙе, уны тел осона тейҙереп тә тормаҫтан, ҡабып та ебәрҙе.

— Әсәкәйем, ҡайһылай тәмлекәй! — тине ул, күҙҙәрен сырт йомоп.— Теленде йоторлоҡ!..

Гөлкәй ҙә апаһына эйәреп бер емеште ҡабып өлгөрҙе.

— Тәмлекәй ҫул!..

Ҡыҙҙар кем уҙарҙан был емештәргә ташланырға ғына торғанда, бәхеткә ҡаршы, Ҡормош байҙын, күсере килеп сығып, уларҙы пыр туҙҙырып ҡыуып ебәрҙе.

— Китегеҙ, һай, йүнһеҙ балалар! Нинә уны ашайһығыҙ?!

Р Ҡормош байҙын, силсә малайы ашағандан ҡалған емештәр бит улар!.. Бына үҙегеҙгә силсә йоғор әле! — тип, әсенеп

|,; ҡысҡырҙы ул.

Ҡыҙҙар, ҡурҡышып, сүплектән ситкә ташландылар. Ҡормош байҙын, муйындары, яңаҡтары тишелеп ағып йөрөгән ин кесе улын улар беләләр. Ололарҙың:

— Улына силсә төшкән. Атаһының гонаһ шомлоғонан улы интегә! — тип шомланып һөйләгәндәрен аңлап еткермәһәләр ҙә, күп тапкырҙар ишеткәндәре бар уларҙың. Ҡыҙҙарҙын ҡурҡыу һәм ерәнеүҙәренен, иге-сиге булманы. Бигерәк тә берәр емеште йотоп ебәрергә өлгөргән Бибекәй менән Гөлкәйҙен. хәле ауыр ине. Төкөрөнә торғас, уларҙың телдәре, тамаҡтары кипте, тауыштары бөттө. Теремек Бнбекәй бынан да ҡотолоу юлын уйлап тапты.

— Беләһегеҙме,— тине ул,серле итеп.— Ҡартсәйем әйтә, берәй харам нәмәне янылыш ашаһан, бисмилла әйтеп, ҡырҡ тапкыр төкөрөргә кәрәк, ти. Шунан гонаһ та булмай, ен дә һуҡмай, ти. Беҙ һылыуым менән хәҙер шулай итәбеҙ ҙә беҙгә силсә йоҡмаҫ!..

Бибекәй яңылыша-яңылыша булһа ла һанап, бисмилла әйтеп ҡырҡ тапкыр текөрҙе. Гөлкәй ҙә апаһынса эшләргә тырышты. Бынан һуң ҡыҙҙар, күңелдәре бер аҙ тынысланып, өйҙәренә ҡайтып киттеләр. Тик күптән түгел ҡаты ауырыуҙан торған Емештен. тағы күнеле болғанып, башы ауырта башланы. Йәнеш уны етәкләп, тарткылап, һөйрәкләп өйҙәренә көскә алып ҡайтып еткерҙе. Унан Емеште тиҙерәк әсәһе янына индерел һалып, ҡотолорға ашыкты. Ләкин шек алдында, ғәҙәттәгегә оҡшамаған күренешкә осрап ^апҡа төбөндә туктап ҡалды.
етм h Шбләр бында башҡа ваҡыттағыға ҡарағанда күберәк •мәпә, элеккесә ҡатын-ҡыҙ, әбей-һәбей генә лә түгел, каРттар, ирҙәр ҙә бар. Улы Сәхиулла менән Сыуаҡай әбей

ҙә, Бибекәйҙәрҙең атаһы Шаһиморат ағай менән Шәһит бабай ҙа бында. Улар ниндәйҙер артыҡ ҡайғылы, борсоулы төҫ менән өйгә әлдән-әле инеп-сығып йөрейҙәр. Шым-шым ғына нимәлер һөйләшәләр. Өйҙән кемдеңдер мөнрәп Ҡөрьән уҡыған тауышы килә.

— Мәзин икенсе тапҡыр ясин сыға. Иман менән генә үтһен инде бисара,— тип шыбырлай Сыуаҡай әбей.

— Алла урынын ожмаҡта итһен бисаранын. Был донъяла рәхәтлек күрмәне. Теге донъяла күрергә яҙһын, исмаһам,— тип теләй Бибекәйҙең ҡәртсәһе Зәлифә әбей.

**Солан** ишегенен. **яңағына һөйәлеп, таяҡҡа таянып, бөк**рәйеп торған Шәһит бабай, кемгәлер үпкә белдергән һымаҡ итеп:

— Йәшләй китә, йәшләй... Утыҙ ике йәш кенә бит. Самай йәшәр сағы. Нужна бөктө, нужна!.. Юҡлыҡ башына етте, юҡлыҡ!..— тип һуҙып ҡуя.

Йәнеш менән Емеш был ят күренеште кү^әтеп, ҡапҡа төбөндә бер аҙ торғандан һуң, ҡапыл, нимәгәлер төшөнгән һымаҡ, өйгә табан йүгерҙеләр.

Улар барып ингәндә, Байгилде ағай, Иштуған, Бибеш һаман иртәнгесә, Сәғүрә еңгәнең аяҡ осонда ултыралар. Бибеш менән Иштуғандын. күҙҙәре илауҙан ҡыҙарып беткән. Сәғүрә еңгәнең баш осонда, аяҡтарын бөкләп, мендәр өҫтөндә ултырған мәзин, балалар барып инеүгә, оҙон көйләп:

— Амин!— тине лә уҡыуҙан туҡтаны. Күрәһең, тағы бер ҡат ясин сығып бөттө. Йәнеш менән Емеш йүгереп барып урындыҡҡа менделәр ҙә икеһе бер юлы:

— Әсәй!

— Әсәкәйем!..— тип ҡысҡырып илап ебәрҙеләр... Сәғүрә еңгә быялаланып, тоноп барған күҙҙәрен ҙур асып ҡыҙҙарына бер тултырып ҡараны ла тағы йомдо. Унын һарғайып кипкән йөҙөнән илауға оҡшаш ғазаплы шәүлә йүгереп үтте. Ләкин күҙҙәренән йәш сыҡманы. Бер аҙҙан ул тағы күҙҙәрен асты. Ишетелер-ишетелмәҫ кенә тауыш менән өҙөп-өҙөп:

— Бә-пес-тә-рем... бар... тыш... та уй-на-ғыҙ... Йәме...— тине.

Әсә, үҙенең һуңғы ғазаптарын күрһәтеп, балаларҙын йөрәктәрен яраларға теләмәүен яҡшы аңлаған Байгилде ағай, ашығып:

— Йәнеш, ҡыҙым. Бар, һылыуынды Шәһит олатайыкдарға алып барып тор, тиҙерәк бул,— тине.

Ләкин күңелдәре ҡотолғоһоҙ бәхетһеҙлек тойған балалар, әсәләренә текләп, баҫҡан урыщдарынан ҡуҙғала алмай торҙолар. Байгилде ағай уларҙы берәм-берәм күтәреп иҙәнгә төшөрҙө лә, етәкләп, ишектән сығарып ебәрҙе.

— Барығыҙ, Бибекәй менән Гөлкәй унда һеҙҙе көтә!-



Йәнеш менән Емеш ҡапҡа янына барып әҙ генә торҙолар ҙа ҡабат йүгереп ейгә инделәр. Тағы урындыҡҡа менеп, әсәһе янына барып баҫтылар.

— Әсәй!..

— Әсәкәйем!..

Тик әсәләре уларға был юлы бер ни ҙә өндәшә алманы. Күҙҙәрен дә асып ҡараманы. Ул балаларҙыҡы шикелле кескәй арыҡ күкрәгән ҡалҡытып, эйәген күтәрә биреп, балауыҙҙан ҡойоп яһалған һын шикелле ҡатып, тып-тын булып һуҙылып тик ята ине хәҙер. Унын. ике яҡ яндан аяҡ осона хәтле һуҙылған сәс толомдары, ҡыйылып торған ҡалын •ҡыйғас ҡаштары, иркә балаларҙыҡы кеүек кескәй ҡабарын•ҡы ирендәре был һындын, ҡасандыр ғәжәп һылыу кеше булыуы тураһында әле лә ап-асыҡ һөйләп торалар ине.

— Әсәй, тим, әсәй! — тип ҡабатланы Йәнеш, үҙәләнеп.
,ч Иштуған менән Бибеш үкһеп илап тышҡа сығып китпЛЧеләр. Байгилде ағай, күҙ йәштәрен күрһәтмәҫ есөн, ҡыҙЧҙарына арты менән әйләнде.
^О — Әсәйегеҙ йоҡлай. Бар, ҡыҙҙарым, тышта йөрөп тороГ^ғоҙ,— тине Сыуаҡай әбей. Йәнеш өндәшмәне. Ә Емеш
гч күҙҙәрен ғәҙәттән тыш ҙур асып, керпек тә ҡаҡмай әсәһенә ^оҙаҡ-оҙаҡ йәшһеҙ-ниһеҙ текләп торҙо ла, ниндәйҙер ғәжәп бер тынıс тауыш менән:

— Эйе, йоҡлай һиңә! Әсәйем үлгән дә ул. Әсәйем юҡ инде минен,— тине.

Мәйетте йыуыу, ҡәбер ҡаҙыу өсөн йыйылған кешеләр ғәжәпләнеп бер-береһенә ҡарашып, баштарын сайҡап ҡуйҙылар. Бер кем дә бер һүҙ өндәшмәне. Тик Сыуаҡай . әбей генә, ҡаты шомланып:

— Китсе, кит! Дүрт йәшлек бала белә торған эшме ни инде был?! һай, ахыр заман балаһы...— тип һөйләнде. Уға ла яуап ҡайтарыусы булманы. Өй эсендәге бөтә кешеләр ҙә тәбиғәттең был аяуһыҙ, дәһшәтле ҡануны алдында баҫылып, һүҙһеҙ тынып ҡалғайны. Ошо ваҡыт ҡапыл тирә-яҡ ҡараңғыланып китте. Күк йөҙөн арҡыры-буйға утлы йәшен ярып үтте. Был ауыр тынлыҡты боҙоп, һис кетмәгәндә, ҡаты күк күкрәп, ер дерелдәп, тәҙрәләр зыңлап китте. Ҡояшты яҙҙан бирле беренсе тапҡыр ҡара болот ҡапланы, Сәғүрә еңгәнен, һуңғы күҙ йәштәре кеүек эсе, ауыр ямғыр тамсылары һирәк-һаяҡ тыпылдап, тәҙрәләргә, ҡороп сатнап ҡаткан саңлы ергә ҡаҡлыға башланы. Ҡайғыһынан бөтөнлэй баҫылып, телһеҙ ҡалған кешеләр, ҡапыл, йәнләнеп, тышҡа һибелделәр ҙә бүректәрен алып ямғыр аҫтына баҫтылар. һәр кем үҙенсә ҡыуанды, өмөтләнде, теләне

Ҡарасы, ҡайһы арала был болот ҡалҡып сыҡҡан? *\үрмәй ҙә ҡалғанбыҙ.



«' «•• -~—-—*—
БИ5ЛИ )7_;-1А
ç и н о г о I р фко?!>:
Учаланского ГЧ..К

— Сәғүрә изге йән икән. Унының үлем сәғәтенә хоҙай тәғәлә тере ҡалғандар өсөн ямғырын ебәргән!..

— Я алла, рәхмәтең менән бир.

— Хәйерле, шифалы ғына ямғыр булһын.

— Ерҙе туйындырғансы яуһа, әллә һун, сәскән ашлыҡтар тын алып, күтәрелеп китер ине...

Бөтә өйҙәрҙән урамға йүгерешеп сыҡҡан балалар сырсыу килеп ямғыр теләргә керештеләр. Берәүҙәре:

«Ямғыр, яу, яу!
Ашлыҡ, үҫ, үҫ!
Илгә бир, илгә бир!
Илдән күберәк беҙгә бир!»—

тип теләне. Икенселәре:

«Ямғырым, яу, яуып тор,
Мискә менән ташып тор,
Күнәк менән ҡойоп тор,
Игендәрҙе үҫтереп,
Илгә икмәк биреп тор!»—

тип таҡмаҡланы.

Тик ямғыр, өлкәндәр теләгәнсә, ерҙе туйҙырырлыҡ та булманы. Балалар теләгәнсә күнәкләп тә ҡойманы. Аңғармаҫтан килеп сыҡҡан кеүек ҡапыл ғына уҙып та китте. Ерҙең саңын да баҫманы. Ара-тирә төшкән эре тамсылпр, болот аҫтынан тағы ла сағыуыраҡ балҡып сыҡҡан ҡояштың ҡыҙыу нурҙары аҫтында шунда ук быуға әйләнеп осоп бөттө. һауа элеккегә ҡарағанда ла эҫерәк, бөркөүерәк булып китте. Тәҙрә быялаларына төшкән тамсылар аҡ таптар ҡалдырып киптеләр. Кешеләр тағы ла ҡатыраҡ шомланды.

— Тоҙло ямғыр булды, күрәһен. Шифалы ямғыр булманы!..

Сыуаҡай әбей, хатта сикһеҙ ҡаты әсенеп, үҙ холҡона һис тә хас булмағанса ауыр һуҡранып та ҡуйҙы:

— Эй аллам, айҙар буйы зарығып көтөүебеҙ, ялыныпялбарып теләүебеҙ өсөн биргән ямғырың ошомо?! Ташҡүлсәйем!.. Бер тамсы һыуынды ла йәлләйһен. дә баһа!..— Унан Шәһит бабай янында тауышһыҙ ғына тилмереп баҫып торған Йәнеш менән Емешкә күрһәтеп:

— Исмаһам, бынауы етемдәр хаҡына, ерҙе туйҙырғансы ямғыр бирер инең. Ишетмәйһең һин беҙҙен, зарҙы, ишетмәйһең, рәхимле алла!..— тип өҫтәне. Унын был һуңғы һүҙҙәре үҙе лә аңламаҫтан алланың рәхимлелегенә ҡаты ирония булып яңғыраны. Ул ҡулын өмөтһөҙ һелтәп өйгә инеп китте.



— Әйҙәгеҙ, әбейҙәр, мәйетте йыуайыҡ. Бөгөн ерләргә кәрәк.

Әбейҙәр унын артынан эйәрҙеләр.

Байгилде ағай башҡа ваҡыт булһа:

— Сыуаҡай еңгә, бәй-бәй, һиңә ни булды? Һин дә аллаға үпкәле һүҙҙәр әйтә башланың түгелме һун? — тип мәрәкәләмәйҡалмаҫ ине, әлбиттә. Ләкинхә^ер мәрәкәләшеп,төртмә һүҙ әйтешеп торор саҡ инеме ни? Ул, өнһөҙ-һүҙһеҙ, елкәһенә көрәк һалды ла, бер ҡасан да зарланыу, яҙмышҡа ризаһыҙлыҡ күрһәтеүҙе белмәгән, һәр ваҡыт шат, көләс тәбиғәтле Сыуаҡбикә әбейҙе лә ошондай өмөтһөҙлөккә, түҙемдән сығыуға килтереп еткергән, үҙенең кескәй балаларын етем ҡалдырған аяуһыҙ тормошҡа эсенән ләғнәт әйтә-әйтә, зыярат яғына китеп барҙы. Ҡәбер ҡаҙышыр өсөн килгән башҡа ирҙәр ҙә унын артынан ҡуҙғалды. Шәһит бабай, кәфенлек һатып алыр өсөн, Ҡормош бай лавкаһына йүнәлде. Бибеш менән Иштуған, илашып, әсәһенен. мәйете янынан китмәнеләр. Ишек алдында Йәнеш менән Емеш икеһе генә тороп ҡалды.

«...Етемдәр... Етемдәр... Етемдәр...»

Үҙҙәренә ҡарата тәүге тапҡыр әйтелгән был һүҙҙең балаларға нисек ауыр тәьҫир итеүен тел менән һөйләп биреү мөмкин түгел ине.

Емеш, ишек алдында яңғыҙ үҙҙәре тороп ҡалғас ҡына, был һүҙҙен. бөтә мәғәнәһенә төшөнгән шикелле, ҡапыл ҡурҡып, үҙәләнеп:

— Уй, әсәкәйем, әсәйем!—тип ҡысҡырып илап ебәрҙе. Йәнеш уны, үҙенең арыҡ бәләкәс кенә ҡулдары менән ҡосаҡлап, иркәләп йыуатырға тырышты.

— Сеү, илама, һылыу, йәме...

Аҙаҡ үҙе лә уға ҡушылып илай башланы. Нигеҙ буйында ултырған Ҡашҡар ҙа, йөрәк өҙгөс тауыш менән олоп, уларға ҡушылды. Әйтерһең, ул да тиңһеҙ юғалтыу өсөн балалар менән бергә ҡайғырыша, илаша ине.

## VI

Сәғүрә еңгәнең ҡырҡын уҡытҡас та, Байгилде ағай аҙаҡтан, көнлеккә эшләп түләү шарты менән Ҡормош байҙан бер тәүлеккә ат һорап алып Илсеғол ауылына китте. Уға ошо ауылдан Сәрбиямал исемле бер тол ҡатынды димләгәйнеләр.

Үткер ҙә, егәрле лә. Теленән дә, ҡулынан да килә. Етпә, үҙенең йорт-ере, мал-тыуары ла бар. Иң яҡшыһы — ла тапмай. Һинең үҙ балаларын, да еткән,—тигәйнеләр. игилде ағайға ла унын биҙәү ҡатын булыуы оҡшаны. «Үҙ

балаһы булмағас, минен балаларымды ҡаҡмаç, үҙ итер»,— тип уйланы. Шәһит бабай ғына:

— Әле һиңә, утыҙ биш йәшлек кешегә, бынамын тигән ҡыҙ ҙа киләсәк. Боронғолар: «Урау булһа ла юл яҡшы, һуҡыр булһа ла ҡыҙ яҡшы».— тип тиккә генә әйтмәгәндәр. Ҡыҙ кешене алһаң, үҙеңә эйәләшер ҙә китер. Балаларыңа ла уçал булмаç. Тол ҡатын алһаң, уның мутлығы үҙенән ауыр булыр,— тип өгөтләп ҡарағайны ла, файҙаһы булманы.

Шулай итеп, бөгөн Байгилде балаларына үгәй әсәй алып ҡайтырға тейешле ине. Ә Сәрбиямалдың үҙенән алда хәбәре килде. Берәүҙәр:

— Атаһының берҙән-бер ҡыҙы булған, ти. Бик иркә, үҙ һүҙле булып үçкән, ти. Атаһы уны, ҡыҙым кеше кеүек дшъя көтөп торһон, тип бик һәйбәт ерҙәргә һигеҙ тапҡыр кейәүгә биреп ҡараған, ти. Ә ул һигеҙенән дә ҡасҡан да ҡайтҡан, ти. Аҙаҡ уны берәү ҙә ҡоҙаламаç булған,— тип һөйләйҙәр. Икенселәре:

— Шулайҙыр, шулай булмаһа, баҙнат итеп, үҙ ирке менән өс-дүрт бала өçтөнә килмәç ине,— тип дөрөçләйҙәр. Ҡайһы берҙәре хатта:

— Үҙ көсөнә таянып, балаларҙы тегеләй-былай туҙҙырып бөтөрөрөнә ышанып киләлер әле. Тиктәçкә генә түгелдер,— тип шомланып та ҡуялар. Ләкин был хәбәрҙәрҙең береһе лә «ир һөймәç» Сәрбиямалдын, ҡапыл ғына аҡылға ултырып, дүрт балалы ярлы бер иргә барырға риза булыуының төп сәбәбен асып бирә алмай ине. Дөрөç, был һүҙҙәрҙең нигеҙендә ысынбарлыҡ ята. Әйтәйек, Сәрбиямалдың һигеҙ тапҡыр булмаһа ла, өс-дүрт тапҡыр ирҙән ҡасып ҡайтыуы һис шикһеҙ хаҡ ине. Бының менән ул «Ҡасҡын Сәрбиямал» тигән исем дә алғайны инде. Шулай уҡ бала тапмауы ла дөрөç ине.

Сәрбиямалдың атаһы менән әсәһе, бай булмаһалар ҙа, хәлле генә йәшәнеләр. Берҙән-бер ҡыҙ булған Сәрбиямал иркә, үҙ һүҙле булып үçте. Ҡыҙ булып етер-етмәçтән, ауылда үҙенең уçаллығы, саялығы менән дан тотҡан Әхмәтша тигән егет менән яҡын бәйләнешкә инеп китте. Әхмәтшаны Шымбай каштандың улы булғаны өсөн дә, Әхмәтшаның үҙенең дә бик йәшләй үк, «ат ҡарағы» тип исеме сыҡҡаны өсөн дә Сәрбиямалдың ата-әсәһе яратмай ине. Шуға күрә, ҡыҙҙарын был бәйләнештән ҡотҡарыу ниәте менән, күрше ауылдың һәйбәт, баçалҡы бер егетенә кейәүгә биреп ебәрҙеләр. Ләкин Сәрбиямал, унда барғас, бер ай ҙа тормайынса, Әхмәтшаның: «Ҡайт, үҙем алам»,— тип әйтеп ебәреүенә ышанып, ҡыштың сатлама һыуыҡ бер көнөндә ун саҡрым ерҙе йәйәүләп ҡасып ҡайтып килде. Әхмәтшаһы менән тағы элекке бәйләнешен башлап ебәрҙе. Ләкин Әхмәтшаһы уны кәләшлеккә алырға һорап бер тапҡыр ҙа яусы ебәрмәне.

Бынан һуң, атаһы менән әсәһе Сәрбиямалды тағы бер нисә тапҡыр кейәүгә биреп ҡаранылар. Иң аҙаҡҡы тапҡыр Сәрбиямал, һаман шул Әхмәтшаһының «алам» тиеүенә алданып, илле-алтмыш саҡрым ерҙән, ялан яғынан да ҡасып ҡайтты. Был уның дүртенсе ирҙән ҡасыуы ине. Яңғыҙ ҡыҙҙарынан да уңмауға ғәрләнеүҙән ата-әсәһе ауырыуға һабышты. Кеше араһына сығып күренер хәлдәре ҡалманы. Ә инде аҙаҡ, Әхмәтша өйләнгәс, Сәрбиямал йөрәгенә түҙмәй үҙ өйҙәренән дә ҡасып китте, ҙур баҙарлы күрше Яҡуп ауылында йәшәүсе бер купец ҡатынға аш бешереүселеккә барып инде. Был ваҡиғанан һуң унын, ата-әсәһе бөтөнләй түшәккә ятты.

Сәрбиямал эшкә барып ингән Батыйма тутай (бында башҡорттар татар ҡатындарын шулай «тутай» тип йөрөтәләр ине), ишеккә һыймаçлыҡ йыуан, тол ҡатын, аршынлы тауар, сәй-шәкәр кеүек нәмәләр менән бик шәп сауҙа итеүе өçтөнә, баҙар көндәрҙә ҡунырға кеше төшөрөү, эске мәжлестәре ойоштороу, йәки матур ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәргә ҡушып аҙҙырыу кеүек боҙоҡ эштәре менән дә даны сыҡҡан кеше ине. Шуға күрә, ҡатын-ҡыҙға түгел, хатта ир кешегә лә, кеше күҙенән төшөү өсөн, Батыйма тутай өйөнә инеп бер кис ҡунып сығыу ҙа етә. Сәрбиямалдың быға ла иçе китмәне. Сөнки уға Әхмәтшаһы менән осрашырға хәҙер ошонан да уңайлы урын юҡ. Әхмәтша бында иң йыш килеүсе ҡунаҡтарҙың береһе ине.

Сәрбиямал Батыйма тутайҙа бик тырышып эшләне. Бөтә яҡлап «тутайға» ярарға тырышты. Халыҡ әйтмешләй, аҡыллы эт кеүек хужаһының күҙенә генә ҡарап торҙо. Шул арҡала ете-һигеҙ йыл эшләү осоронда ул бик оçта итеп бешеренергә, тегенергә, кешеләр менән башҡортса ғына түгел, татар һәм рус телдәрендә лә һәйбәт итеп һөйләшергә өйрәнде. Сөнки Батыйма тутайҙа һәр милләттән «ҡунаҡтар» етерлек була ине. Иң мөһиме ул бында байлыҡтың, аҡсаның нимә икәнен, уның нindәй көскә эйә булыуын аңланы. Хәйлә, ялғандың серенә төшөндө. Бер тин өсөн кешенең күҙен соҡоп алырлыҡ һаран булырға өйрәнде. Тора-бара үҙе лә ошо «Батыйма тутай» кеүек бай бисә булып «теттереп» донъя көтөү хаҡында йыш ҡына хыяллана башланы. Ошоноң есөн дә ул, былтыр ҡыш, аллы-артлы ғына үлеп киткән ата-әсәһе әсөн һис тә ҡайғырып, борсолоп тормаçтан, ҡайтып йортка хужа булып алды. нынçа был Сәрбиямалдың «Батыйма тутайға» әйләнеүенең башы булырға тейеш ине. Ләкин тормош үҙенекен итте.

?ц лы" китер өсөн күп аҡса> атайҙан ҡалған мал-тыуҡарау, тәрбиәләү өсөн ир заты кәрәк ине. Быларҙы ҡай-

ҙан алырға? Күп аҡсаны ғына түгел, тирә-яҡҡа яманаты таралған Сәрбиямалға хәҙер ир заты табыу ҙа еңел эш түгел. Ә инде әллә ниҙә бер килеп, йәшерен-боҫорон ҡунып киткән Әхмәтшанан уға бер тинлек тә ярҙам юҡ ине.

Ошондай аптыраулы көндәрҙең, береһендә Сәрбиямалдың ҡулына Байгилде ағай килеп ҡапты. Иргә сығырға булған был һуңғы мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырырға Сәрбиямал иҫәр түгел ине, әлбиттә. Ул Байгилде ағай тарафынан саҡ ҡына ишара булыу менән үк ризалыҡ биреп, йорт-ерен, малтыуарын ваҡытлыса туған тейеш бер ҡартҡа тапшырып, Байгилде арбаһына ултырып китеп тә барҙы.

«Барырға, күрергә, әгәр йорт-ере, мал-тыуары минекенән кәм булһа, бында күсереп апҡайтырға кәрәк. Улы, ҡыҙы ла артмаҫ. Йомош-юлға йөрөтһән. дә файҙа булыр...» — тип уйланы ул. Ә Байгилде ағайға ҡарап, татлы йылмайып:

— Минен, донъямды аҙаҡ күсереп алып барырбыҙ, йәме. Хәҙер мин буласаҡ ҡыҙҙарымды, улымды күрергә ашығам, әйҙә тиҙерәк һеҙгә китәйек,— тине. Унан хатта:

— Бигерәк бала яратам шул мин. Урамда күренгән бер баланы һөймәй, кәнфит бирмәй үтә алмайым. Шуға күрә, хоҙай тәғәлә миңә үс итеп, бала бирмәне инде,— тип иламһырап та алды. Байгилде ағайҙын. быға күңелетамам йомшарҙы, ҡатынын:

— Йә, һылыу, илама. Минең балаларым һинең балаларың булыр. Үҙ әсәләре кеүек хөрмәт итерҙәр. Мин уларға шулай ҡушырмын,— тип йыуатты.

## VII

Байгилде ағай ҡатын эҙләп киткән көндө Сыуаҡай әбей иртүк килеп Бибешкә өй йыйыштырышты. Балаларҙын, өҫбаштарын йыуып кейҙереп, сәстәрен тарап үреп, бөтәһен дә тәртипкә индерҙе. Үҙе әленән-әле көрһөнөп:

— Эй-й, тулғаҡ аҙабын да, әсәлек ләззәтен дә татымаған кеше балаларҙы йәлләй белерме лә, ҡарай белерме? Булмаҫ, йүне булмаҫ,— тип һөйләнде. Балаларға серле бышылдап:

— Үгәй, үгәй булыр инде, балалар. Үҙ әсәгеҙ булмаҫ. Уға һеҙ «әсәй» тип әйтмәгеҙ. -«Апай» тип кенә әйтегеҙ ҙә ҡуйығыҙ,— тип киҫәтте.

Эште бөтөргәс:

— Инде, балаҡайҙар, атайығыҙҙы үҙегеҙ генә ҡаршылағыҙ. Сәғүрә киленден, өйөнә ете-ят бисәнең килеп инеүен күреп, түҙеп торорға минең хәлем етмәҫ,— тип иламһырап ҡайтып китте. Балалар дүртеһе бер юлы:



___Инәй, ҡайтмай тор!— тип ҡапҡаға хәтле эйәреп барҙылар. Улар әсәләре үлгәне бирле өйгә инһәләр ҙә, тышҡа сыҡһалар ҙа, бер-береһенән ҡалышмай, етем бәрәстәр шикелле өйкөлөшөп, гел бергә генә йөрөйҙәр ине. Әле инде Сыуаҡай әбей ҡайтып киткәс, улар тағы ла нығыраҡ бойоғоп, -капка төбөндә өнһөҙ-һүҙһеҙ баҫып торҙолар. Урамда ла уларҙын. ей эстәренән күңеллетүгел ине. Ауыл буш, тын. Ирҙәрҙең күбеһе аҙыҡ, эш эҙләп ситкә, рус араһына китеп бөткән. Күләгә шикелле шым, бойоҡ булып ҡалған ҡатын-ҡыҙ, бала-сағанын, күбеһе алабута, мысай баштары тиреп, ҡырҙа, томалаҡ бөрөләре сүпләп туғайҙа йөрөй. Ауылда ҡарт-корола Емештәр шикелле кескәй етем-еһер генә күренгеләп ҡала ине.

Әле август урталары ғына булыуға ҡарамаҫтан, ағастарҙың, үләндәрҙең һарғайып, кибеп бетөүе лә ауылға айырата күңелһеҙлек, моңһоулыҡ өҫтәй. Етмәһә, көньяҡтан бер өҙлөкһөҙ иҫкән эҫе ҡоро ел һырттан күбә ҙурлыҡ кипкән ҡара ҡамғаҡтарҙы ҡыуып алып килә лә урам буйында тәгәрләтеп алып йөрөй. Был ғәжәп ҙур үрмәксе шикелле эре ҡабарынҡы ҡамғаҡтар, үҙҙәренен, кипкән, ҡоро тармаҡтары менән ергә арлы-бирле генә ҡағылып, нимәгәлер ҡыуанғандай һикергеләп, урам тулып бейеп йөрөйҙәр. Быны уларҙың бер ин, ҙуры, ҡурҡыныслыһы, ҡоро тармаҡтарын тырпайтып, Емештәрҙең янына килеп, ҡалтыранып-дерелдәп туктап тора бирҙе лә, ҡапыл осоноп, һикеренеп, ары тәгәрләп китте. Әйтерһең дә, ул был ҡоролоҡ артынан киләсәк ҡот осҡос аслыҡтың ҡорбандарын күреп кинәнеп һикеренә, шарҡылдап көлә ине.

Ҡороҡамғаҡтарҙын, шомлобейеүҙәренә текләп, бик оҙаҡ һүҙһеҙ торған Иштуған, өлкән кешеләрсә, ауыр көрһөнөп:

— Бындай эре ҡамтаҡтарҙы ла, уларҙын, былай урам тулып тәгәрләп йөрөүҙәрен дә бер ҡасан да күргәнем юҡ ине,— типҡуйҙы.

Был шыҡһыҙ, ят күренеш балаларҙы тағы ла нығыраҡ бойоктор3о, уларҙың күңелдәренә билдәһеҙ, аңлайышһыҙ ҡурҡыу, мон еҫтәне. Улар йылға уртаһында ишкәкһеҙ ҡалған кәмә шикелле ҡайҙа барырға, нимә эшләргә белмәй аушаңлап, бер аяҡтан икенсеһенә күсеп, тамаҡтары кипкәнсе, хәлдәре бөткәнсе шулай ҡапка төбөндә, эҫе ҡояш аҫтында тапанып торҙолар. Ахыр Бибеш ҡыуаныуға ҡарағанда ҡурҡыуға окшаған тауыш менән:

Киләләр!..— тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Ҡайталар!..— тип ҡабатланы Иштуған, Үҙе шунда уҡ арата ҡапканы елтерәтеп шар асып ҡуйҙы. Ысынлап та, был ваҡытта Ҡормош байҙарҙың ерән айғырын һалмаҡ ҡына рттырып, сей һары кешмир йоҡа шәл беркәнгән ҡатынды

һул яғына ултыртып, Байгилде ағай үрге остан урамға килеп ингәйне. Ҡыҙҙар, бүренән өрккән ҡолонсаҡтар шикелле, бер-бер артлы йүгерешеп, өйгә инеп юҡ булды. Ҡапҡа төбөндә Иштуған ғына тороп ҡалды. Был ваҡытта уныд күңелен биләп алған ат туғарыу, һуғарыу, унан Ҡормош байҙарға хәтле саптырып барыу шатлығы атаһының килеп етеүен түҙемһеҙлек менән көтөп ошонда торорға мәжбүр итте. Атты ярата ине шул ул. Хатта, әгәр аттары булһа, үҙенең уны нисек ҡәҙерләп тәрбиәләйәсәген, уға менеп нисек еләсәген уйлап, төндәр буйы йаклай алмай сыҡҡан ваҡыттары ла күп була ине уның. Атаһы быйыл яҙ Ҡормош байҙарға бер тай өсөн бер йылға эшкә ялланғас, ул эсенән генә сикһеҙ ҡыуанғайны. Үҙҙәренең аты булыу тураһындағы татлы хыялдары инде тамам тормошҡа ашҡан кеүек тойғайны. Ләкин уның был емөтө әсәһе үлеү, атаһын бай эштән ҡыуып сығарыу менән селпәрәмә килде. Иштуған был турала хәҙер иҫкә алырға ла ҡурҡа. Был уй әсәһе тураһындағы уй кеүек үк ауыр ҙа, һағышлы ла, үкенесле лә. Хәҙер инде уға бына ошолай, әллә ниҙә бер кеше атына менеп сабыу ҡыуанысы менән генә ҡәнәғәтләнергә тура килә ине.

Быуа ерән айғыр ярһып, кешнәп, дөбөр-шатыр ишек алдына килеп инде. Иштуған, ҡыуанысынан нимә эшләгәнен белмәй, ат башына барып йәбеште.

— Тыр-р-р! Ерәнсәй!

— Быуа һеҙгә әсәй алып ҡайттым, улым,— тине Байгилде ағай, нисектер, ғәйепле тауыш менән.— Күреш, улым.

Бөтә иғтибары ерән айғырға йүнәлгән Иштуған быны ишетмәне лә, яңы әсәйҙе хатта абайламаны ла. Әйтерһең дә, уның өсөн хәҙер бөтә донъяла ошо Ерәнсәйҙән башҡа бер нәмә лә юҡ ине.

Байгилде ағай ҡатынын эйәртеп өйгә инде. Ҡыҙҙар, ҡурҡышып, төрлөһе-төрлө мөйөшкә ҡасып бөткәйнеләр. Емеш хатта әлеге урын-ер йыйылған һандыҡтың артына уҡ инеп тын да алмай шымып торҙо.

Сәрбиямал ирҙәр күҙе төшөрлөк мимылдыҡ йомро кәүҙәле, ике бите янып, сәләмәтлеге ташып торған етеҙ ҡыйыу хәрәкәтле, егерме биш-утыҙ йәштәр самаһындағы ҡатын ине. Уның еҫтөндә Ырымбурҙағы купец бисәләренең күлдәктәренә оҡшатырға тырышып, алты итәкләп, ҡойроҡлап, яурын баштарын күпертеп, ең остарын терһәккә хәтлетарайтып семтеп, нәҙек ҡатмарҙар һалып тегелгән ал кесейә күлдәк, аяғында бейек күтәрмәле өр-ян,ы ҡара итек, башында шау биҙәк һары кешмир шәл — бындағы йәш ҡатын-ҡыҙҙын, ин һөйөп ябынған шәле, Сәрбиямалдың кейем-һалымы ла, үҙе лә ялт итеп күҙгә бәрелеп тора. Йөрөшөнән-торошонан ниндәйҙер тотоп тыйғыһыҙ үҙ һүҙлелек, баҙнатлылыҡ, ҡатындарға хас ҡыйыу матурлыҡ бөркөлә. Эйе, ирҙәр күҙе төшөрлөк ҡатын икән ул Сәрбиямал!.. Байгилде ағайға ла ул бер уреүҙә үк оҡшаны. Бигерәк тә уның ташып барған энергиялы сәләмәт төҫө, көр бойороҡло тауышы, етеҙ, баҙыҡ хәрәкәте окшаны уға.

«Сәғүрә мәрхүм менән беҙ үтә йыуаш булдыҡ... Йыуаш кешегә донъя көтөүе ауыр... Был ни донъяның артына тибеп көтөр...» — тип уйланы Байгилде ағай. «Тик балаларға ғына ҡаты булмаһын инде...» — тип теләне.

Сәрбиямал хужаларса ҡыйыу атлап өйгә инде. Байгилде ағай, кереһенсә, ғәҙәттәгенән дә ҡыйыуһыҙырак күренә ине.

— Ҡыҙҙарым,— тине ул, тауышын көскә сығарып.— "Кыҙыкайҙарым, һеҙ ҡайҙа?.. Сығығыҙ, әсәйегеҙ менән танышығыҙ...

Мейес артына ҡасҡан ерәнән иң элек Бибеш сыҡты. Йәнеш тә уның артынан эйәрҙе.

— Атаҡ, ошолармы ни инде минең ҡыҙҙарым? Ҡарасы, ҡалай бәләкәс кенәләр ҙә арыҡ ҡыналар...

Сәрбиямал, шарҡылдап көлөп, балаларға алмаш-тилмәш ҡулын һуҙҙы.

— Йәгеҙ, күрешәйек. Исемдәрегеҙ нисек?

Ҡурҡып та, аптырап та ҡалған ҡыҙҙар бер ни тип тә өндәшә алманылар. Улар өсен Байгилде ағай үҙе яуап бирҙе.

— Ҙурыһы — Бибиғәйшә, уртансыһы — Йәнбикә, ә анауы, һандыҡ артынан ҡарап торғаны— ин, бәләкәсе— Гөлйемеш. Бибеш, Йәнеш, Емеш тип кенә йөрөтә лә ҡуябыҙ.

Сәрбиямал, ни өсендөр, бөтә иғтибарын үҙенә иҫ киткес ҡурҡыу һәм аптырау менән текләп торған Емешкә йүнәлтте.

— Аһа, унда ла берәһе бармы ни әле!.. Атаҡ-атаҡ, ни эшләп йәшенеп тораһың, алйот! Сыҡ, кил, күреш!..

Сәғүрә еңгәнең бәрхәт һымаҡ йомшаҡ, әкрен тауышына күнеккән өйҙә Сәрбиямалдың көслө, ҡырҡыу тауышы артыҡ тупаҫ ^йәмһеҙ һымаҡ яңғыраны. Емеш бөтөнләй һандыҡ артына йәшенде. Сәрбиямал бармаҡ янап ҡуйҙы:

— А-та-к?.. Ҡалай ҡырағай. Һай, ҡыр кәзәһе!..

Байгилде ағай ҡыҙы өсөн ғәфү үтенгән тауыш менән:

~ Ярар, бәләкәс әле ул. Өйрәнер, ылығыр,— тине.-— Әкренләп ейрәнешерһегеҙ әле...

— Өйрәнер. Өйрәтермен. Күренеп тора, был балалар тәрбиә күрмәгән,— тине Сәрбиямал.

Ул йоҡа шәлен һелкетә тартып алып урҙаға элде лә урындыкка уҙып ултырҙы. Мөләйем йылмайырға тырышып, тағы ҡыҙҙарға алмаш-тилмәш ҡарап сыҡты. Ләкин ауыҙы ғына йылмая, ә танау янында бер-берәһенә бик килеп, төптән мызлап торған бәләкәс йомро күҙҙәре

сикһеҙ һалкын һәм ҡороҡарашлы ине. Балалар тик ошоҡарашты ғына күрҙеләр, тупаҫ, ҡырҡыу тауышты ғына ишеттеләр. Шуға ҡыҙҙарға ул бик уҫал һәм йәмһеҙ тойолдо.

Емешкә ул хатта кисә кис Сыуаҡай инәһе һөйләгән әкиәттәге мәскәй әбейҙе хәтерләтте.

Сыуаҡай әбей кисә, төн буйы тип әйтерлек, уларға, моңһоу тауыш менән көйләй-көйләй, бөтөнләй тип әйтерлек Емештәрҙең бөгөнгө тормошдаа оҡшатып, етем балалар, үгәй әсәйҙәр тураһында әкиәттәр һөйләне.

«...Борон-борон заманда бер әбей менән бер бабай булған, ти. Уларҙың бик матур бер ҡыҙы менән бер улы булған, ти. Көндәрҙең бер көнөндә әбей ҡаты ауырып үлгән дә киткән, ти. Шунан бабай күрше ауылдан барып үгәй әсәй алып ҡайтҡан, ти. Ә ул... мәскәй әбей булып сыҡҡан, ти. Килеп етер-етмәҫтән, бабайҙын. балаларын ашар өсөн хәйлә ҡороп, ауырыуға һабышып ятҡан, ти. Бабай ни хәтле өшкөртөп-төкөртөп ҡараһа ла, һауыҡмаған булған ти яуыз. Шунан көндәрҙең бер көнөндә, бабай яңы дауалар эҙләп, юл буйлап китеп бара икән, теге мәскәй әбей, хызыр-ильяс булып бабайҙын, ҡаршыһына килеп сыҡҡан да:

— Әссәләмәғәләйкүм! Ниңә былай бик бойоғоп бараһын, әҙәм балаһы?—тип һораған, ти. Бабай үҙенең зарын һөйләп биргәс, ул:

— Ҡатынын һауыҡһын тиһән,, улыңды һуйып йөрәген ашат,— тип кәңәш биргән, ти. Был алланың, әмере. Башҡа сара юҡ,— тигән, ти, ҡороғоро.

Шунан бабай бахыр илап-һыҡтап ҡайтып инеүгә, теге мәскәй әбей күптән ҡайтып, бабайҙың күҙенә ҡыҙғаныс тилмереп:

— Йә, минец әзәлемә дауа таптыңмы? — тип ҡарап ята икән, ти.

— Юҡ. Бер дауа ла тапманым,— тип яуап биргән, ти, бабай.

— һиңә бирәй изге йән осраманымы? — тип ныҡышҡан, ти, әбей.

Бабай тағы:

— Юҡ,— тип яуап ҡайтарған, ти.

— Алдайһын. Күҙеңдән белеп торам. һин,ә бер изге йән дауа өйрәткән. һин мине шәбәйтергә теләмәйһең икән!— тигән дә әбей тағы ла ҡатыраҡ ауырыған да киткән булған, ти. Шунан һуң бабай сараһыҙҙан әбейенә улын һуйып ашатҡан, ти. Малайҙың апаһы мырҙаһынның үгәй әсәй талап-кимереп бөткән һөйәктәрен илай-илай йыйып алған да, аҡ сепрәккә төрөп, ҡайын төбөнә күмеп ҡуйған, ти. Шунан ошо һөйәктәрҙән теге малай бүҙ турғай булып осоп киткән, ти. Хәҙерге бына ошо бүҙ турғайҙар бөтәһе лә ана шунан таралған, ти. Шуға улар ошолай йөрәк өҙгөс итеп моңайып һайрайҙар, ти...

Бына бер саҡ ошо малай — бүҙ турғай — үҙҙәрененң тәҙрә төбөнә килеп ҡунған да һайрай башлаған, ти.

Ҡулағаҙан ҡайнайҙыр,
Атай бысаҡ ҡайрайҙыр.
Үгәй инәй «һуй!»— тиҙер,
Үҙ апайым «Ҡуй!»— тиҙер,—

тип һайраған, ти, ул бахыр. Шунан өйҙәренә осоп инеп атаһынның яурынына ҡунған да:

— Атай, атай, ауыҙыңды ас! — тип әйткән, ти. Атаһы ауыҙын асҡас, уға бер ҡалаҡ май ҡаптырған, ти.

Унан һун, апаһынның яурынына ҡуныпп:

— Апай, апай, ауыҙыңды ас! — тип әйткән, ти. Апаһы ҡустыһынын, тауышын танып, ҡыуанып ауыҙын асып ебәргән, ти. Шунан тегетурғай уға берҡалаҡбал ҡаптырған.ти. Аҙаҡ үгәй әсәһенә барып:

— Инәй, инәй, ауыҙыңды ас! — тип әйткән, ти. Үгәй инәһе уны тогоп йогайым тип ауыҙын ҙур итеп асҡан икән, бүҙ турғай уға бер ҡап энә ҡаптырған да осҡан да киткән, ти. Мәскәй әбей шунда уҡ йығылып та үлгән, ти...»

Был ҡот осорғос әкиәт башҡа балаларҙың ғына түгел, хатта кескәй Емештен, дә күңелендә ташҡа баҫылған кеүек һаҡланып ҡалғайны. Шунлыҡтан, уға хәҙер үгәй әсәй тағы ла ҡурҡыныcыраҡ булып тойолдо. Уны күрмәҫкә, уға күренмәҫкә тырышып, ул тағы ла һандыҡ артына боҫто.

Бүркен элергә онотоп, ҡулында ыуалап, сит кеше шикелле ишек төбөндә баҫып торған Байгилде ағай, ғәҙәтенсә, йомшаҡ ҡына итеп:

— Бибеш, ҡыҙым, самауыр ҡуйып ебәр,— тине.

— Самауыр ҡайнаған,— тип яуап бирҙе Бибеш.

— Улай булғас, сәй эсеп алайыҡ. Беҙ юлдан һыуһап ҡайттыҡ,— тине атаһы.

Бибеш урындыҡҡа ямалып бөткән булһа ла, ап-аҡ, таҙа киндер ашъяулыҡ алып килеп түшәне. Батмус менән сәйгүн, сынаяҡ, икмәк, һөт алып килде. Ул арала ат менән эшен бөтөрөп елгөргән Иштуған да аласыҡтан ҙур еҙ самауырҙы күтәреп алып инде. Хәҙер һәр кем ғәҙәттәге урынына ултырып сәй эсәһе генә ҡалды. Уларҙын, өйөндә лә, башҡа өйҙәрҙәге кеүек үк, һәр кемдең ашағанда ултыра торған билдәле урыны бар ине: уң яҡтан иң үрҙә, түр юрған менән арҡыры юрған киҫешкән урында, кескәй мендәр өҫтөндә, атай кеше ултыра. Унын уң яғында, урындыҡтың ситендә, самауыр 'нында әсәй кешенен, урыны. Бынан уға сәй яһау өсөн уңай-

лы. Һул яҡтан атаһына ҡаршы Иштуған, урындыҡ ситендә әсәһенә ҡаршы Бибеш ултыра. Ә Емеш атаһы менән ағаһы араһында уртала, Йәнеш ағаһы менән апаһы араһында һул яҡта ултыра торғайны. Бына әле лә һәр кем элеккесә үҙ урыкына барып ултырҙы. Тик Сәғүрә ецгәнең урыны ғына буш ине әле. Уға хәҙер ҡулын йыуып, тыштан килеп ингән Сәрбиямал барып ултырырға тейеш ине. Ләкин ошо ваҡыт Емеш, бөтә ҡурҡыуын онотоп, һандыҡ артынан атылып сыҡты ла әсәһенең урынына барып ултырҙы. Үҙе ниндәйҙер ят, ҡырыҫ тауыш менән:

- Кит, ҡара бисә. Минең әсәйемдең урынына ултырма. Унда мин үҙем ултырам,— тине. Ә үҙенең күҙҙәре йәш менән тулышып, хәҙер-хәҙер илап ебәрергә әҙер тора ине.

Байгилде ағай ҙа, хатта үтеп сыҡкан ҡыйыу Сәрбиямал да ни әйтергә, нимә эшләргә белмәй аптырап ҡалды. Өйгә үгәй әсәй алып ҡайтҡан көндө үк бәләкәс баланы орошоп илатыу ҙа, уның былдай ҡыйыу ҡылығын язаһыҙ ҡалдырыу ҙа ауыр ине. Ахыр Байгилде ағай һул яҡка күсеп китте.

— Сәрбиямал, беҙ был яҡтан ултырайыҡ. Әсәһенең урыны әйҙә Емешкә ҡалһын.

— Һул яҡтан минә сәй яһауға хилаф була ла баһа,— тип Сәрбиямал ҡаршы килеп ҡарағайны ла, Байгилде ағай:

— Ярар, өйрәнерһең әле,— тип һүҙҙе бөтөрҙө.

Сәрбиямал Емешкә тишерҙәй итеп ҡарап алды ла һул яҡка барып ултырҙы. Иштуған, Йәнеш, Бибештәр ун. яҡка күстеләр. Өй эсендә ғүмер-ғүмергә йәшәп килгән тәртип шулай итеп беренсе тапҡыр боҙолдо.

Сәйҙән һуң, Сәрбиямал, әллә был бәләкәс усал ҡыҙҙы үҙенә ылыҡтырырға, әллә уның күңел яраһын тағы ла тәрәнәйтергә теләп, Емеш менән булаша башланы.

— Кил әле, ҡыҙым, һөйәйем үҙенде. Мин һинен, әсәйең бит,— тип бәйләнде ул. Емештен. йән көскә сәбәләнеп ҡасыуын күреп, ғәжәп яһалма тауыш менән шарҡылдап көләкөлә уны ҡыуырға тотондо. Ғүмерендә бала тотоп ҡарамаған кешенен, бөтә ҡыланышы тупаҫ һәм ҡырыҫ ине. Байгилде ағай уңайһыҙ ғына йылмайып, эстән ҡаты борсолоп, был шаяртыуҙы күҙәтеп ултырҙы.

Бына Емеш ҡасып барып әлеге-баяғы һандыҡ артына йәшенде. Сәрбиямал уның беләгенән тогоп алды, һандыҡ артынан тартып сығарҙы, көсләп үҙ итәгенә ултыртты:

— Йә, тогшдоңмо, ҡырағай?! Ниңә ҡасаһың? Йә, әсәй тиген. Мин һинең әсәйең бит?.. Әсәй тип әйт, штобы!.. — тип бәйләнде.

Емеш бар кескә тартылып, тулап уның ҡулынан ыскынырға тырышты. Ләкин кескәй балаға был ырғаҡ шикелле ҡаты, йәбешкәк ҡулдарҙан ҡотолоу мөмкинме һуң?! Сәрбиямал хихылдап көлә-көлә Емештең ауыҙына имсәген ҡаптыра башланы.

— Им, тим! Мә, имсәк бирәм, им. һин минең бәпесем булаһын!

Емеш, тештәрен ҡыҫып, ауыҙын асмаҫҡа тырышты. Булманы. Сәрбиямал үҙенең ҙур һалкын имсәген Емештең ауыҙына көсләп тыҡты ла, танауын күкрәгенә батырып, ҡыҫып тотоп алды. Күрәһең, ул имсәк менән ҡаплап баланы тонсоҡтороорға мемкин икәнен дә белмәй ине.

— Ха-ха-ха! Им, бәпесем, им!..

Емеш ҡороға ырғытылған балыҡ шикелле тыбырсынды. Ыскына алманы, ҡотолорға башҡа сара ҡалмағас, имсәкте •ҡапы итеп тешләп алды.

Сәрбиямал:

— Абау!.. Ҡәһәр һуҡҡыры! Тешең серегере!..— тип эсе •карғанып Емеште иҙәнгә атып бәрҙе. Бының артынса һикереп тороп тибеп тә ебәрәйем тигәндә, Бибеш араға ташланып һеңлеһе Емеште үҙ тәне менән ҡапланы. Сәрбиямалдың бейек үксәле ҡара итеге уның тап биленә тура килде. Ләкин был тупаҫ, ҡырағай ҡыланышҡа йөрәге һыҙлаған Бибеш ауыртыуҙы тойманы ла. Емеште күтәреп һөйә-йыуата тышҡа алып сығып китте. Йәнеш менән Иштуған да унын, артынан эйәрҙе. Уларға хәҙер был шыҡһыҙ үгәй әсәй түгел, кескәй туғандарын шулай ыҙаларға юл ҡуйып торған аталары ла ҡапыл ят, сит кеше һымаҡ тойолоп китте. Улар, аласыҡҡа инеп, был яңы ауыр тойғонан оҙаҡ ваҡыт телһеҙ ҡалып ултырҙылар. Ә өйҙә йәш ҡатын пыр туҙҙы.

— Атаҡ-атаҡ, бынауы етеп бөткән ҡыҙынды ниңә кейәүгә бирмәй тотаһың?! Бәләкәстәре, уға арҡаланып, миңә баш бирмәйәсәктәр бит,— тип ҡыскырҙы ул Байгилде ағайға.— Штобы, ул ҡыҙынды минен. күҙ алдымда йөрөтмә!

— Ҡайҙа етһен. Уға бары ун дүрт кенә йәш әле,— тип ҡыйыуһыҙ ғына ҡаршы тештө Байгилде ағай. Сәрбиямал, күҙ йәшенә быуылып:

— Атаҡ, ун дүрт йәш аҙҙыр шул?! Еткән, еткән. Бибешеңде бөгөн-иртән кейәүгә биреп ебәрмәһәң, мин һиндә тормайым. Ишетәһеңме, тормайым! —тип ҡабатланы.

Ғаиләлә талаш-тартыш, илаш-ҡысҡырыш күреп өйрәнмәгән Байгилде ағай ни әйтергә, нимә эшләргә белмәй аптырап ҡалды.

## VIII

Был ваҡиғаға аҙна-ун көн үтеүгә, Байгилде ағайҙарға °Р-яңы кырандасҡа уйнап торған яҡшы ат еккән ете-ят бер кеше килеп төштө. Оҙон буйлы, ҡыҙыл иөҙлө, ерән һаҡаллы

был кеше үҙенең аяғына кейгән ситек калаиы, майланып бөткән ҡара хәтфә түбәтәйе, буйлы ебәк сапаны менән Емешкә әсәһенең ҡанын алған Әхмәҙулла мулланы хәтерләтте. Шуға ул, был кеше кырандастан төшөп:

— Әссәләмәғәләйкүм! — тип һуҙып Байгилде ағайға табан килә башлағас та, ҡурҡып аласыҡҡа инеп йәшенде. Бибеш менән Йәнеш: «Был кем икән?» — тип аптырап уға текләп торҙолар. Нимәгәлер ҡыуанып, ауыҙы ҡолағына еткән Сәрбиямал ниндәйҙер ят, мыйылдыҡ тауыш менән:

— Бибеш, ҡыҙым, бар, һин дә аласыҡҡа ин. Еткән ҡыҙға улай сит кешегә ҡарап тороу килешмәй ул! — тине. Үҙе, бик тыйнаҡ ҡыланып, кегкелдәп көлә-көлә сит кешегә табан атланы.

— Әйҙүк, әйҙүк, Хисбулла суфый, рәхим генә ит, өйгә ин, түргә уҙ!..

Унан бер ни аңламай аптырап торған Байгилде ағайҙың ботонан ҡаты ғына семтеп алды.

— Атаһы, ҡунаҡты ҡаршы ал. Атаҡ, атаҡ, ни эшләп иҫәңгерәп тораһың!.. Әйҙүк, әйҙүк, әйҙә, өйгә рәхим ит, суфый! Иштуған улым, ҡунаҡтың атын туғар! — тип бойороҡтар бирә-бирә Хисбулланы өйгә алып инеп китте. Ни тип әйтергә, ни уйларға ла өлгөрмәгән Байгилде ағай, башын баҫып, улар артынан эйәрҙе. Өйҙә Сәрбиямал ҡунаҡты түргә мендереп, мендәр өҫтөнә ултырткас:

— Атаһы, һөйләшә, таныша тороғоҙ. Мин сәй әҙерләй һалайым,— тип, өйрәк шикелле тайпаңлап, аласыҡҡа сығып китте. Ләкин Байгилде ағайҙың, был саҡырылмаған ҡунаҡ менән һөйләшергә лә, танышырға ла ниәте юҡ ине. Ул үҙенең сөйәлле бармаҡтарын бөтөркә көрәк һаҡалына батырып, ҡуйы ҡара ҡаштарын төйнәп, оҙон керпекле уйсан ҙур күҙҙәрен берсә ҡунаҡтың төлкө ҡойроғо кеүек оҙон ерән һаҡалына, берсә түбәтәй аҫтынан ялтырап күренеп торған ҡыҙыл түбәһенә төбәп: «Мендәр өҫтөндә бик йәтеш ултыра был ҡарт. Мәҙрәсәлә күп яткандыр, ахырыһы»,— тип асыулы уйланып тик ултырҙы. Хисбулла, әле утыҙға ла етмәгән булһа ла, кейеме, тышҡы ҡиәфәте, үҙен тотоуы менән оло, ир уртаһына еткән кеше кеүек күренә ине уға. Сөнки ул, әсәһе Таиба әбей өйрәтеп ебәргәнсә, ҡыйыу, бай, укымышлы кеше булып ҡыланырға, һүҙҙе үҙе үк башлап, ирҙәрсә олпат итеп һөйләргә тырыша ине.

— Йә, ху-у-уш!— тине, һуҙып,— иҫәнлек-һаулыҡмы? Мал-тыуар, бала-саға, күрше-күлән именме? — тип бер нисә тапҡыр һүҙ башлап ҡараны ул. Ләкин Байгилде ағай:

— Имен,— тигән бер генә һүҙ менән әңгәмәне өҙҙө. Артабан ни һөйләргә, ни әйтергә белмәгән Хисбулла:

— Бәрәкалла, бәрәкалла,— тип урынында һикергеләп,



тамаҡ ҡырғылап ҡуйҙы. Ҡарышҡан шикелле, әсәһе өйрәтеп ебәргән тейешле һүҙҙәр ҙә ҡайҙалыр ҡасып бетте. Ә Байгилде ағай һаман өндәшмәне. Ул арала Сәрбиямал йүгереп инеп сәй урыны әҙерләне. Сәй янына ултырғас, бер туктауһыҙ һөйләне, иң изге, иң яҡшы күнелле әсә булып, ҡыҙҙарҙың бәхете тураһында кен-төн ҡайғырыусы тынғыһыҙ йән булып ҡыланды. Ир ҡәҙерен белмәгән аҙғын ҡатындарҙы этән алып этҡә һалып тиргәне, изге йәнле, хоҙай бәндәһе ирҙәрҙе йәлләп һыҙланды. Был уцай менән хатта бер-ике тамсы эре күҙ йәшен сәйенә тамыҙып, һыңҡылдатып эсеп тә ебәрҙе. Сәрбиямалдын, был ҡыланышына ла Хисбулла һаман баяғыса килбәтһеҙ бәүелгеләп:

— Бәрәкалла, бәрәкалла! — тиеүҙән башҡа яуап тапманы.

«Мәҙрәсәлә ошонан башҡа бер һүҙ ҙә өйрәтмәгәндәрҙер ахыры. Йә, был байғош бында ни тип килеп сыҡты икән? Нимә бар икән уға бында?» — тип йәне биҙеп уйланды Байгилде ағай.

— Атаһы, таныш бул, был Хисбулла, беҙҙен, Илсеғол егете,— тип үтә алсаҡланып һөйләне Сәрбиямал. Унан Хисбулланын булған-булмаған шәп яҡтары тураһында һөйләп китте. Имеш, ул Таиба әбейҙең бынамын тигән «шәкерт» улы икән. Имеш, уның Сәлимә исемле бик һылыу ҡатыны булған икән. Берҙән-бер көндө уларҙың араһына шайтан вәс-вәсә һала башлаған. Хисбулланын, бер туған ағаһы, көрәшсе Хаммат батыр, шайтан булып араға ингән. Шунан Сәлимә, аҙыптуҙып, Хамматҡа иргә сығып киткән. Хисбулла, изге күнелле кеше булғас, уларға:

— Әйҙә, йәшәй бирегеҙ. Алла һеҙгә яҙаны үҙе бирһен,— тигән дә ҡул һелтәгән. Уға хәҙер тоғробисә булырлыҡ аҡыллы, ғиффәтле ҡыҙ кәрәк, имеш. Шуға ул Бибеште үҙенә ҡоҙаларға килгән, имеш...

«Ҡара һин уны, был ҡаргҡа ла йәш ҡыҙ кәрәккән!.. Бына оятһыҙ. Үҙе минең менән йәштәштер әле...» — тип асыуланып уйланды Байгилде ағай. Хисбулланын, берҙән, ғөрөфғәҙәтте боҙоп, яусыһыҙ-ниһеҙ, туп-тура өйгә килеп тешөүе, икенсенән, ир башы менән балаға ымһыныуы есөн дә ҡаты асыуланды. Уны хатта хәҙер үк пыр туҙҙырып өйҙән ҡыуып сығарғыһы килде. Шуға күрә, ҡырт киҫеп:

— Олокешегә бирер ҡыҙым юҡ минең,— тине.

— Атаҡ, атаҡ.опо булмаға ни. Аралары ун йәш кенә була бит! Был олсшсжмо ни ул! — тип ҡаршы төштө Сәрбиямал.— Алла бирһә, бына тигән тиң булып китерҙәр, «карт Уйынында ҡалас бар»,— тип боронғолар белмәй әйтмәгән. Дәрҙе Иҫәрләнмә, атаһы. Ҡыҙыңдың бәхетен кире ҡаҡма!

Ә Хисбулла үҙенсә килбәтһеҙ, иркә йылмайып, әле Байгилдегә, әле Сәрбиямалға ҡыйыуһыҙ ғына ҡараштырып тик ултырҙы. Сөнки уның бәрәкалланан башҡа һүҙе юҡ. Ә ул һүҙ был урында килмәй. Етмәһә, уға барыбер. Байгилде ҡыҙын бирһә лә, бирмәһә лә ярай. Ул бит бында әсәһе тукмап ебәргәнгә генә килгән.

Был бәндәнең кем тырышлығы арҡаһында былай ҡыйыуланып, туп-тура килеп төшөүенә хәҙер инде тағы ла яҡшыраҡ төшөнгән Байгилде ағай, әсе йылмайып:

— «Ҡарт ҡуйынында ҡалас бар. Ҡаласынан ҡан тамыр, йәш ҡуйынында ҡамсы бар. Ҡамсыһынан бал тамыр», тигәндәр түгелме һуң ул боронғолар? — тине лә тынды.

— «Ҡарт ағасҡа ышыҡланып, йәш ағас йөҙ йыл йәшәр» тип тә әйткәндәр улар,— тип ҡарыулашты Сәрбиямал. Ләкин ни хәтле тырышып, бөтә булған хәйлә оҫталығын ҡулланып ҡараһа ла, Байгилде ағайҙан бүтән яуап ала алманы. Ә инде Хисбулла һис тә бошонмай ҡайтып та киткәс, өйҙә быға тиклем күрелмәгән, ишетелмәгән дауыл ҡупты. Өй эсендә йәшәргә лә, ашарға ла, эшләргә лә, тынысларға ла мөмкинлек ҡалманы.

— Аслыҡ йыл бит. Ҡырым сиреүе балаларың менән нисек ҡыш сыҡмаҡсы булаһың?.. Астан ғына ҡырылырбыҙ инде, эй алла!.. Ниңә генә мин ошондай эшкинмәгән иргә әрәм булдым икән?! Хисбулланы һин, аңғыра, аңлай алаһыңмы ни?! Ул бит үҙе йыуаш, үҙе аҡыллы, үҙе уҡымышлы, үҙе хәлле кеше. Һинең ишеме ни?! Һинен, эшкә ашмаған ҡыҙынды әҙәмгә һанап-килгәнден, ҡәҙерен белмәнең, анғыра!.. Илләмәгәр Бибешенде Хисбуллаға бирмәһәң, һиндә бер көн торасағым юҡ!.. Ишетәһеңме? — тип теҙҙе ул көнөн-төнөн. Байгилде ағай башта бер-ике һүҙ менән булһа ла ҡарыулашып ҡараны ла ахыр ҡул һелтәне: «Әйҙә, һайраһын!..»

Ләкин Сәрбиямал һайрап ҡына ҡалманы. Байгилде ағайға белдермәй генә Таиба әбейгә тағы хәбәр ебәрҙе:

— Хисбулланы ебәр, һөйләшә белеп һөйләшһә, мәһәрен йәлләмәһә, ҡыҙ һеҙҙеке буласаҡ! — Ә Байгилде ағайға:

— Әгәр ҙә мәгәр Хисбулла суфый ҡабат килеп сыҡһа, штобы ҡаршы бер һүҙ әйтәһе булма, ишетһен ҡолағың. Йә, Бибеш, йә мин, Бибешенде уға бирмәһәң, мин ҡайтып китәм. Әйҙә, етемәктәрең менән сыуалышып бер үҙең тороп ҡал! — тип ҡат-ҡат иҫкәртте.

Байгилде ағай ике ут уртаһында ҡалды: Бибеш тә ҡыҙғаныс, ҡатынһыҙ тороп ҡалыу ҙа, күмәк бала өҫтөнә тағы бүтән ҡатын табыуҙы өмөт итеү ҙә мөмкин булмаған хәл ине. Ул ни уйларға, нисек хәл итергә лә белмәй, тамам аптырауҙа ҡалды. Ә Сәрбиямал уның ошо икеләнеүенән бик оҫта файҙаланды. «Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡкан яҡшы» тип, Байгилде ағай рәтле бер ҡарарға килмәҫ элек, эште тиз генә хәл итеп ҡуйырға ашыҡты. Оҙаҡламай Таиба әбей Хисбулланы тағы әрләп-әрләп Иҫәнбәткә ебәрҙе:

— Ҡара, ишет, киленһеҙ ҡайтып инәһе булма!

Был юлы Сәрбиямал уны бөтөнләй:

— Әйҙүк, рәхим ит, кейәүкәй!..— тип ҡшас йәйеп ҡаршы алды. Унан, Байгилде ағайҙы ауыҙ ҙа астырмай, Бибеште кейәүгә бирергә әҙерләнә башланы. Хисбулла әсәһенен, киленгә бүләккә тип биреп ебәргән сулпылыҡ, талир тәңкә менән суклы ике көмөш беләҙекте яңылыш уға биреп тә ҡуйғас, Сәрбиямал инде бөтөнләй ҙә ҡанатланып, үҙ тигәнен тормошҡа ашырырға кереште. Күрше-күлән аптырап ҡалды. Шәһит бабай инеп:

— Был ни ҡыланыуығыҙ, Байгилде? Ниңә баланы йәшләй әрәм итәһең! Үҫһен. Быуынға ултырһын. Бибеш һылыу ҡыҙ булмаҡсы. Бына тигән үҙ тиңе егеттәр ҙә табылыр,— тип өгөтләне. Сыуаҡбикә әбей килеп:

— Ниңә һеҙ уны, ҡатын кешеләй итеп, тоя иргә ултыртып ебәрергә әҙерләнәһегеҙ? Алланан оялмаһағыҙ, кешенән оялығыҙ, исмаһам! Эй алла, боронғолар: «Әсәйең үгәй булһа, атайың еҙнәй була»,— тип белеп әйткәндәр шул. Балаларыңдан ҡул һелтәп ултырыуың ошолор инде һинең, иманһыҙ, мәртәт! — тип әрләп тә ҡараны. Булманы. Байгилде ағай, ауыҙына һыу уртлаған кеше шикелле, башын баҫып тик ултырҙы. Унын, өсөн бөтәһе менән Сәрбиямал әрепләште.

— Бирәбеҙ шул. Бына тигән байға бирәбеҙ! Штобы бында эҙегеҙ булмаһын! Кеше ҡыҙында һеҙҙең ни эшегеҙ бар?! — тип ҡысҡырынды ул. Шәһит бабай ҙа, Сыуаҡбикә әбей ҙә:

— «Яман бисәнән дейеү пәрейе лә ҡасҡан»,ти. Был яман бисәне өгөтләп еңеп булмаҫ,— тип ҡул һелтәп сығып киттеләр ҙә бүтән килмәнеләр. Сәрбиямал лапаҫ аҫтына ҡасып илап ултырған Бибеште ҡулынан тартып елтерәтеп алып ҡайтты ла аласыҡҡа индереп япты:

— Сәсеңде тара, албаҫты! Штобы тиҙ бул!

Бибеш аласыҡтың бер мөйөшөнә баҫып, ҡалтыранып илап тик торғас, Сәрбиямал унын беләгенән һелкетә тартып алып килеп ултырғысҡа ултыртты ла сәстәрен өҙөп-йолкоп үҙе тарарға кереште. Бибеш шул хәтле бәләкәс, арыҡ. Ултырғыста ултырғанда унын аяҡтары хатта ергә лә теймәй. Яурындары беҙ кеүек осло, түш кенәләре таҡта кеүек тип-тигеҙ. Ҡыҙ булып етеү, елгөрә башлау билдәһе уның әле бер генә ерендә лә күренмәй. Тик сәстәре генә әсәһенен, сәсенә оҡшап ҡалын, оҙон булғанлыҡтан, хәҙер таратып, туҙҙырып ебәргәс унын кескәй кәүҙәһен бөтөнләй ҡаплап алғайны. Ә унын иҫ киткес моң, ҡайғы бөркөлгән ҙур яҡты күгелйем күҙҙәренән бер өҙлөкһөҙ ҡайнар йәштәр аға ине. Ләкин Сәрби-

ямалбыларҙың береһен дә күрмәй, береһен дә тоймай. Әйтерһен, уның алдында бала түгел, ә ниндәйҙер йәнле ҡурсаҡ ултыра ине.

Бына сәстәр ҙә тарап үрелде. Бынан һуң Сәрбиямал Бибештең гел ялан аяҡ йөрөүҙән ярылып, ҡарайып ҡаткан аяҡтарына кейәү алып килгән ҙур күн итекте, өҫтөнә ҡатмарлап тегелгән ҡыҙыл сатин күлдәкте кейҙерҙе. Унан Бибештен. теше-тырнағы менән ҡарыулашыуына ла ҡарамаҫтан, унын, башына көсләп яулыҡ бәйләп, биҙәкле йәшел кешмир шәл ябындырып ҡуйҙы. Был Бибештең ҡыҙ сағы үтеүенең, ир йәмәғәте булыуынын, беренсе билдәһе ине.

Ошолай итеп, Сәрбиямал, ғәҙәттә енгә кешеләр башҡара торған бөтә эште үҙе башҡарып, Бибеште кейәүгә ҡушырға әҙерләп бөткәс, аласыҡты йоҙаҡлап сығып китте. Был ваҡытта тышта эңер төшөп, өйгә ут алғайнылар инде. Сәрбиямал хәҙер ғаиләнең ҡалған кешеләренә тотондо.

Иртәнән бирле илап, ашамай-эсмәй лапаҫ башында ятҡан Иштуғанға ҡолаҡсындай мендәр ырғытып:

— һин бөгөн шунда йакла! — тип ҡысҡырҙы.

Ишек алдында өнһөҙ-һүҙһеҙ ултырған Байгилде ағайға ҡарап:

— Кейәү менән ҡыҙға урынды өйгә йәйәм. Йәнеш менән Емеш тә өйҙә йаклар. Бәләкәстәр әле, улар ни белә! — тип һөйләнде. Унан ҡаршы әйтергә урын ҡалдырмаҫтай тауыш менән: — Үҙебеҙ аласыҡта ятырбыҙ,— тип өҫтәне.

Байгилде ағай һаман бер ни ҙә өндәшмәне. Шулай итеп, ҡыҙҙы биреү, ҡушыу өнһөҙ-һүҙһеҙ хәл ителде. Бынан һуң Сәрбиямал киске сәйгә мәзинде генә саҡырып никах укытты ла эштелә бөтөрҙө. Унан илай-илай ярым үлек хәлгә килгән Бибеште күтәреп тигәндәй индереп кейәүгә тотторҙо ла ишекте тыштан бикләп үк ҡуйҙы.

Иртәгеһенә Хисбулла Бибеште алып ҡайтып китте.

— Унда әсәйем яңғыҙ. Уға тиҙерәк килен алып ҡайтырға кәрәк,—тине ул, иркә йылмайып.

Сәрбиямал күм-күм булып күгәренеп, илап шешенеп бөткән Бибеште һөйрәкләп тигәндәй кырандасҡа сығарып ултыртты ла үтә ҡәнәғәт тауыш менән:

— Хуш, һау ғына булып тор инде, кейәүкәй! — тип мыйылданы.

Байгилде ағай бер ни ҙә әйтмәне. Иштуған бөтөнләй ишек алдында күренмәне.

Байгилде ағайҙың йәп-йәш ҡыҙҙы күрмәгән-белмәгән тсш иргә һатып ебәреүен хупламаған күрше-күләндең береһе лә ҡыҙ сҙатышырға килмәне. Хисбулла ла, әсәһе өйрәткәнсә, ҡыйыу, бай ҡиәфәтле булырға тырышып, эре генә тамаҡ ҡырып алды:



— На, юртаҡ!

Күк юрға, шуны ғына көтөп торғандай, уйиап, кешнзп •капканан атылып сығып та китте. Ни булғанына әле һаман төшөнөп етә алмай аптыранып, кырандас янында әйләнгеләп йөрегән Йәнеш менән Емеш ат артынан урамға йүгереп сығып апаларынын, тал сыбыҡ шикелле бөгөлеп төшкән кескәй кәүҙәһе туҙанлы юл эсенә инеп юғалғансы ҡарап торҙолар. Апаһының иҫ киткес ҡайғылы, әсе күҙ йәш менән тулы һунғы ҡарашы Емештен. күңеленә мәңге юйылмаҫка яҙылып ҡалды. Үҙ эшенән бик риза булып, ауыҙы кшаҡ төбөнә еткән Сәрбиямал, ҡапыл ниҙер иҫенә төшкән кеүек йүгереп, аласыҡҡа инеп китте лә, унан бер күнәк кел алып сығып, Бибештәр киткән яҡка борҡотоп һибеп ебәрҙе:

— Артыңа көл!.. Штобы башын, әйләнеп ҡайтмаһын!..

Көньяҡтан ҡаршы иҫкән көслө ҡоро ел көлдө кире өрөп Сәрбиямалдың үҙен баштан-аяҡ ҡойондорҙо.

— Ай, ҡәһәр һуҡҡыры, күҙемә көл тулды бит!.. Уй, күҙемде, күҙекәйемде!.. Китһә лә кире ҡайтыр, рәхәт күрһәтмәҫ был яуыз ҡыҙ! —тип ҡарғана-тиргәнә битен йыуырға ашығып, Сәрбиямал аласыҡҡа инеп китте. Ә Байгилде ағай, иҫерек кеше һьшаҡ тәнтерәкләй-тәнтерәкләй, урам буйлап бара бирҙе лә Бибештәр инеп юғалған тыҡрыҡҡа боролдо. Оҙаҡламай балалар унын. ҡанаты һынған ҡаҙ кеүек ҡулдарын бәйһеҙ һалындырып, аяҡ осона текләп, оло юл буйлап ҡайҙалыр алға, һырт аръяғына табан китеп барғанын күрҙеләр. Нимә уйлай, ҡайҙа бара? Балаларға бынынһы, әлбиттә, билдәһеҙ ине.

Был көн Байгилде ағай өйгә ҡайтманы. Ә иртәгеһен, көн кискә ауышҡас, ҡайтып ингәндә, ул аяҡка баҫып тора алмаҫлыҡ иҫерек ине. Аталарын тәү тапҡыр бындай хәлдә күргән балалар аптырап төрлөһө-төрлө яҡтан уға текләп торҙолар. Ләкин Байгилде ағай уларға иғтибар итмәне. Сәрбиямалды ҡосаҡлап шаяртырға, ят, ҡырағай тауыш менән йәмһеҙ ҡыланып һөйләнергә кереште.

— Йә, йәнем, күнелен, булдымы инде? Ни теләгең бар тағы? Әйт, унынһын да үтәйем дә янып көйөп бөтәйем! — Мин бит шәп ир, ун дүрт йәшлек ҡыҙын һатып ашаған шәп атай бит мин!.. Ха-ха-ха!..

Сәрбиямалдын, быға бер ҙә иҫе китмәне. Хатта иҫерек иренә ҡушылып, ни өсөндөр, кинәнеп, хихылдап көлдө, Байгилде ағайҙың итәгенә ултырып, муйынына һарылып, борғоланды-һырғыланды. Бындай ҡыланышты тәүләп күргән оалаларҙын, күңелендә сикһеҙ ерәнеү, нәфрәт уянды. Улар ^эроиямалдан ғына түгел, аталарынан да йәндәре биҙеп, ти?°Рәк ситкә таралыштылар.

Икенсе көндө иртүк Байгилде ағай тағы китеп юғалды.

Кисен йәнә иҫереп ҡайтты. Күпме ваҡытҡалыр был шулай ҡабатланды. Балалар бөтөнләй ташландыҡ хәлдә ҡалдылар. Тик ара-тирә генә Сыуаҡай әбей уларҙы эйәртеп алып ҡайтып, йыуындырып, сәстәрен тарап үреп, ҡатыҡ-һөт эсереп ебәрә. Ошо ваҡытта уларға уфтана-көрһөнә аталарының насар юлға баҫыуы, бынын. яҡшыға алып бармаясағы хаҡында һөйләп тә ала ине.

— Ҡайғынан ғына шулай булды инде бисара,— тип ысын күңелдән көйенеп һейләй ул.— Бер-бер артлы ике ауыр ҡайғы бит Йәш ҡатындын. һүҙен йыға алмай, ҡыҙын һатып ебәрҙе лә, хәҙер инде ҡайғынан да, оятынан да ни эшләргә белмәй, эскегә һабышты,— ти. Унан әллә балаларҙы, әллә үҙен йыуатырға, тынысландырырға теләп:

— Ярар, ҡыҙын һатып байыған аҡсаһын эсеп бөтер ҙә туҡтар әле. Ҡайҙа барыр тиһең,— тип ҡуя.— Тик әлеге-баяғы ата-бабаһы, нәҫел-нәсәбе ҡыланмаған ҡылыҡты ҡыланып йөреүенә көйөнөп кенә әйтәм. Йә, бығаса кем шулай көпәкөндөҙ эсеп-иҫереп, шул теҫә менән оялмай әҙәмгә күренеп йөрөгәме бар?! Юҡ бит, Байгилденән башҡа ундайҙы күргән дә юҡ, күрергә лә яҙмаһын. Алла һаҡлаһын,— ти.

Байгилде ағай шулай эсеп, ысынлап та, ауылда һис кем ҡыланмағанды ҡыланып йөрөй торғас, бер көн бик ҡаты туҡмалып, башы-бите күгәреп, өҫ-башы өҙгөләнеп ҡайтып килде. Ошонан һун, ыңғырашып, ара-тирә ҡан төкөрөп, бер кем менән һөйләшмәй аҙнанан ашыу өйҙә ятты. Йәнеш менән Емеш өйгә инеп сыҡҡан арала унын һирәк-мирәк әллә иҫерек, әллә айныҡ әйтелгән:

— Ни эшләргә һуң? Инде ни эшләргә?! — тигән һүҙҙәрен генә ишеткеләп ҡалдылар. Ләкин бынан улар, әлбиттә, бер нәмә лә аңламанылар. Тик аталары ла шулай ятыр-ятыр ҙа әсәһе кеүек үлер ҙә китер тип ҡурҡтылар ғына.

Бер көндө улар шулай ҡурҡышып, ҡайғырышып нигеҙ буйында ултырған саҡта, ҡыңғырауҙар шанғырлатып һырт яҡтан урамға тройка килеп инде. Йәнеш менән Емеш ҡыҙыҡһынып унын кайҙа барырын күҙәтергә лә өлгөрмәнеләр, был уйнам торған өс ҡара айғыр егелгән тройка уларҙың тәнгәленә килеп тә туҡтаны. Ул арала булмай, тройканан йылтыр төймәле, ҡара кейемле, ҡылыслы, мылтыҡлы өс кеше һикерешеп төштө. Икеһе шунда уҡ өйгә инеп китте. Ә береһе һуҡыр Сапый менән старостаны эҙләп алып килде. Улар ҙа

«Бүнәтәй», «обыска» тип ниндәйҙер ят, аклайышһыҙ һүҙҙәр һейләй-һөйләй ашығып Емештәрҙен өйҙәренә инеп киттеләр. Йәнеш менәи Емеш ҡурҡып та, ғәжәпләнеп тә, ни әйтергә, ни эшләргә белмәй, урындарында ҡатып ҡалдылар.



Ул арала теге өс кеше Байгилде ағайҙы төрткөләп өйҙән алып сыҡтылар ҙа теге ҡанатлы кырандасҡа елтерәтеп алып барып ултыртып, үҙҙәре икеһе кырандастың ике яҡтағы ҡанатына, береһе кырандастың артына баҫып, килгәндәге кеүек үк ҡапыл китеп тә юғалдылар. Йәнеш менән Емеш тройка китеп күҙҙән юғалғас ҡына, бында ниндәйҙер ҡурҡынысլы хәл барын тойоп, ҡысҡырып илап ебәрҙеләр. Ире артынан эйәреп сығып, бер ҙә иҫе китмәй ҡапҡа төбөндә ҡарап торған Сәрбиямал уларға:

— Штобы тауышығыҙҙы сығармағыҙ! Оломағыҙ, үҙ башығыҙға булғырҙары! Ҡырылып бөткөрҙәре! — тип баҡырҙы ла өйгә инеп китте. Ә ҡыҙҙар, нигеҙ буйында ултырып, күҙҙәре ҡыҙарып, шешенеп бөткәнсе иланылар. Өйҙә булған хәл тураһында бер ни белмәй балыҡ ҡармаҡлап йөрөгән Иштуған да ҡайтманы. Күршеләр ҙә, күрәһең, власть алдында гонаһлы булған кешенең балаларын йыуатып, үҙҙәренә шик төшөрөүҙән ҡурҡып, уларҙы ситән аша ғына күҙәттеләр. Емештең ятраҡан бабаһы Шәһит ҡарт өйҙә булһа, әлбиттә, ҡурҡып тормаҫ, балалар янына хәҙер үк килеп етер, йыуатыр ине лә бит. Ул һалабаш сығарып, ҡарама бөгөп урманда ята ине хәҙер. Сыуаҡай әбей ҙә өйҙә юҡ. Ул да, ғәҙәте буйынса, емеш-еләк йыйып урманда йөрей ине.

Был ваҡиғанан һун, күпмелер көндәр үткәс, Байгилде ағай тағы ла бойоғораҡ, ябығыраҡ булып ҡайтып инде. Унын, артынан ниндәйҙер ят кешеләр килеп, Сәғүрә еңгә теге ваҡытта ҡан алдырыу өсөн муллаға бирмәй йәлләп алып ҡалған берҙән-бер кәзәне, самауырҙы, урындағы арыуыраҡ балаҫ, кейеҙ, яҫтыҡтарҙы алып сығып киттеләр. Үҙҙәре балаларға аңлашылмаған ят телдә:

— Вот тебе конфискация! Одно барахло! — тип көлөштөләр.

Байгилде ағай телһеҙ кеше шикелле, башын баҫып, ишек төбөндә тик торҙо. Балалар иларға ла, ни эшләргә лә белмәй, ҡурҡышып, берсә был ят, уҫал кешеләргә, берсә шундай йыуашайып, меҫкен булып ҡалған аталарына ғәжәпләнеп ҡарап, урындыҡта, ҡаҡ таҡтала тапандылар Өй эсе тағы ла бушыраҡ, тағы ла ҡотһоҙораҡ булып ҡалды. Кисен, балалар йоҡларға ятҡас, Байгилде ағай өмөтһөҙ тауыш менән тағы бер нисә тапҡыр:

— Инде ни эшләргә? — тип ҡабатланы.— Егерме дүрт сәғәт эсендә ауылдан ғына түгел, волостан да сығып китергә хөкөм иттеләр бит!.. Йә, ни өсөн?.. Ни өсөн?!

Сәрбиямал уға ҡырт киҫеп:

— Ни есен икәнен тикшереп тороу һинең эшен түгел. Телендән тапҡанһың. Ә ҡайҙа китергә урын бар. Әйҙә беҙҙен. ауылға, минен, йортҡа ҡайтабыҙ,— тине. Унан Байгилде

ағайҙан бер һүҙ ҙә әйттермәй, кире ҡаҡҡыһыҙ тауыш менән дауам итте:

— Унда минең донъям ташландыҡ хәлдә ята. Мин һинә күптән инде унда ҡайтайыҡ тип әйтергә йөрөйөм дә, әле ҡыймай ғына тора инем. Хәҙер үҙең күрәһең, башҡа сара юҡ. Аллаға шөкөр тиген, ярай әле шундай ҡатынға осрағанһын. Юҡһа хәҙер башынды ҡайҙа барып төртөр инен?.. Ә бында хәҙер һинен. тауыҡ кетәгендәй өйөндән башҡа нимән, ҡалды?! Минен, унда бөтә нәмәм бар. Атым да, һыйырым да, кәзәм дә тигәндәй...

— Ә балалар? — тине Байгилде ағай, аптыранып.— Балаларымды ҡайҙа ҡуям?!

— Уларҙы ташлап ҡалдырмаçһын инде,— тине Сәрбиямал изгелекле тауыш менән,— хужалыҡ булғас, ҡул аçтына керерҙәй балалар ҙа кәрәк була ул.

Байгилде ағай тоноҡ тауыш менән:

— Уныһы шулай ҙа...— тип ҡуйҙы.— Тик илле саҡрым ерҙе улар йәйәүләп үтә алалармы ни?!

— Минең унда бик шәп көрән бейәм бар. Шуны барып егеп алып кил,— тине Сәрбиямал, тағы ҡырт киçеп.— Бар, хәҙер үк кит! Штобы тиҙ йөрө...

Унын тауышы тағы ла көр, кире ҡаҡҡыһыҙ ҡырҡыу булып яңғыраны.

Байгилде ағай был һүҙҙәрҙән һун һаҡалын семеткеләп бик оҙаҡ уйланып ултырҙы. Унан, нисектер, ят, баш эймәкле тауыш менән:

— Эйе, башҡа сара юҡ... Сара юҡ бүтән!..— тип ҡабатланы ла, күңеленән: «Бибеш тә унда бит әле...»,— тип өçтәп: — Ярай, Сәрбиямал, шулай булһын...— тип тороп сығып китте.

— Таң атҡансы барып етерһен. Төшке тамаҡ алыуға бында ҡайтып етерһең! — тип оҙатып ҡалды Сәрбиямал.

Балалар бик оҙаҡ йоҡлай алмай яттылар.

## IX

Иртәгеһен Йәнеш менән Емеш иртүк тороп Сыуаҡай әбейҙәргә киттеләр. Балаларҙың ҙур бәхетһеҙлек һиҙенгәп кескәй йерәктәре, кемдәндер ярҙам, яҡлау емөт итеп, ситлектәге сәпсек кеүек лепелдәй ине. Ләкин Сыуаҡай әбей ҙә уларҙы ҡайғылы йөҙ, йәшле күҙ менән ҡаршы алды.

— Эй, балаҡайҙар, әсәйҙән ҡалыуығыҙ етмәгән, инде ауылығыҙҙан, яҡындарығыҙҙан да айырылаһығыҙ бит. Эй алла, эй алла, ниңә сабыйҙарҙан былай үс алаһыцдыр, бел-



мәйем, бер ни ҙә аңламайым,— тип зарланып, Йәнеш меиән Емештең алдына ҙур туçтаҡ менән ҡатыҡ ултыртты. Ҡуш услап ҡарағат бирҙе.

— Ашағыҙ, балалар. Кисә генә тиреп алып ҡайттым. Бер оло күнәк тирҙем дә ҡуйҙым. Емеш-еләк харап уңған шул быйыл. Ҡоролоҡ йылды гел шулай була ул,— тип күцелһеҙ генә һөйләнде.

Ҡыҙҙар ҡарағатты бер-ике бөртөк сүпләп ҡабыуға, улар артынан Иштуған килеп етте.

— Йәнеш, һылыу, эйҙә ҡайтығыҙ,— тине ул, эсе бошоп.— Китәбеҙ!..

— Ҡабаландырмасы әле. Оло Эйектен. емешен ашаһын дар әле,— тине Сыуаҡай әбей.— Әйҙә, Иштуғаи улым, һин дә аша.

Иштуған урындыҡҡа килеп ултырҙы. Ләкии ҡарагатҡа ҡулын һуҙманы. Был көндәрҙә уныц тамагыпа аш бармай ине.

Сыуаҡай әбей унык ап-аҡ булып ҡороп кипкән ирендәренә күҙ ташлап:

— Әллә айран эсәһеңме, улым? — тип һораны.

— Эйе,— тип баш ҡаҡты Иштуған.— Тамагым кипте, инәй.

Сыуаҡай әбей уға һалҡын шишмә һыуы менән ҙур бер туçтаҡ айран һыулап бирҙе. Иштуған уны төп күтәрә эсеп бөтөрҙө. Сыуаҡай әбей тағы ауыр итеп уфтанып ҡуйҙы

— Ҡалай сарсағанһың, балаҡай. Эй алла!..

Унан, әсенеп, Ҡормош бай менән һукыр Сапыйҙы әрләп алып китте. •

— Шул яһилдар ғына ашаны инде Байгилденең башын Шулар ғына. Ҡормош судка биргән, ә быныһы, күрмәһә лә, күрҙем, ишетмәһә лә, ишеттем, тип ҡул тамғаһын һуҡҡан. Уға нимә, кеше башы йәлме, әллә үҙ ҡорһағы яҡынмы? Знамы, үҙ ҡорһағы яҡын. Ул ғүмергә шулай булды. Гел шулай ялған доносты дөрөçләп судка шаһит булып барҙы. Унын күҙе лә тиктәçкә генә түгел, ялған ант иткәнгә һуҡырайған бит ул. Ошолай ялған ант итеп, бинахаҡҡа ярлы-етемде рәнйетмәһә, байҙар унн яратыр инеме лә, тома һукыр көйе ике бисә алып типтереп йәшәй алыр инеме ул!.. Харам килешә шул уға, харам килешә. Эй алла, ниңә һинең ошондай боҙоҡ бәндәләрең генә ерҙә рәхәт йәшәйҙәр?.. Ниңә яҡшы бәндәләрең интегә һинен?.. Эй раббым,. Ошондай көфөр һүҙҙәр пөйләп гонаһлы ла булып бөтәмдер инде мин. һөйләмәç инең _ йән түҙмәй... Түҙем етмәй.. Я хоҙай, түҙем бир беҙрә, гонаһлы бәндәләренә... Түҙем бир...

Сыуаҡай әбей, әллә үҙенең ҡыҙып, артығыраҡ һөйләп ташлауын тойоп, ҡапыл туҡталып ҡалды, тирә-яғына ялт-

йолт ҡаранып алды, унан күңелһеҙ, һүрәнке тауышҡа күсеп:

— Байгилденең ұҙенән дә булды инде,— тип ҡуйҙы,— ул элек тә зауыт-мауыт тирәһендә зимагур булып йөрөгән сағында ишетеп ҡайтҡан көфөр һүҙҙәрен гел һөйләштерә торғайны. Хәҙер, Сәғүрә менән Бибеш ҡайғыһынан эсергә һалышҡас, теле бигерәк йүгәнһеҙләнеп китте шул...

Сыуаҡай әбей, тына биреп ултырғас, балаларҙың баштарынан һыйпап, арҡаларынан һөйөп ҡуйҙы.

— Йә. Ярар, барығыҙ, балаҡайҙар, нисек итәһен. бит... Ҡайтығыҙ. «Күрәсәкте күрмәйенсә кереп булмай гүрҙәргә»,— тип әйткәндәр бит. Күрәсәктәрегеҙ барҙыр инде, балаҡайҙар. Сит ерҙәрҙә ейәһе ризығығыҙ, эсәһе һыуҙарығыҙ барҙыр.

Балалар теләмәй генә урындарынан ҡуҙғалдылар. Сыуаҡай әбей ҙә, улар артынса уҡ урамға сығып, түбән осҡа табан елпелдәтә баҫып китеп барҙы:

— һуҡыр Сапыйҙын. килене балаға ауырый икән. Шуға барам. Барғым килмәһә лә барам. Тилмереп көтөп яталыр. Килендең дә, тыуаһы сабыйҙың да ни ғәйебе бар? Шулай бит, балалар...

Балалар уны өнһөҙ-һүҙһеҙ, күҙ менән генә оҙатып ҡалдылар. Атлау ыңғайына елгә ҡабарып, ҡыуыҡланып үргә күтәрелгән йоҡа күлдәк итәктәре, ян-яҡҡа тырпайып торған арыҡ ҡулдары менән Сыуаҡай әбей бер көнгө һырттан, ҡарағура араһынан тәгәрәп тешөп, урамда аунап йөрөгән ҡоро ҡамғаҡтарға оҡшап бара ине. Ул да шул ҡамғаҡтар шикелле ары-бире туҡталып, урамды тәгәрләп үтер ҙә күҙҙән юғалыр, был изге йөрәкле, күңелсәк әбейҙән тиҙҙән бер ни ҙә ҡалмаҫ кеүек тойолдо балаларға. Улар, инәһенән аҙаи]ҡан ҡаҙ бәпкәләре шикелле, аллы-артлы теҙелешеп, ҡайтыу яғына йүнәлделәр.

Ә кисен, эңер төшкәс, Байгилде ағай егеп килгән көрәм бейәгә конфискациянан ҡалған барлы-юҡлы әйберҙәрен тейәп, өй тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡағып, улар ауылдан сығып та киттеләр.

Йәнеш менән Емеш арбаға әйберҙәр өҫтөнә ултырҙы. Иштуған ат тотто. Байгилде ағай менән Сәрбиямал йәйәүләп арттан эйәрҙе.

Ҡапҡа төбөндә тик Ҡашҡар ғына тороп ҡалды.

— Ҡашҡар, маһ, маһ! — тип саҡырҙы Иштуған. Байгилде ағай ҙа саҡырып ҡараны. Эт эйәрмәне. Ә Иштуғандын уны һис тә ҡалдырып киткеһе килмәй ине. Бер аҙ барғас, атты ауыл осонда туҡтатып, Байгилде ағай менән Иштуған икәүләп, Ҡашҡарҙы эйәртер өсөн, өйҙәренә табан кире китеп барҙылар. Иркәләп тә, асыуланып та, икмәк биреп алдатып та ҡаранылар, ләкин Ҡашҡар эйәрмәне. Бүтән ваҡытта



Байгилде ағай йәки Иштуған ҡайҙа барһа ла эйәреп, арттан -калмай йөрөй торған эт бөгөн тыуған йортто ташлап китергә теләмәне. Хужалары өйгә боролоп килһә, ҡыуанып ҡойроҡ болғаны, алып китәбеҙ тип, үҙҙәре артынан эйәртергә саҡыра башлаһалар, шыңшып лапаҫ аҫтына ҡасты ла, уларға үпкәле, шелтәле ҡараш ташлап, ырылдап ятты. Ә китә башлаһалар, ҡапҡа төбөнә килеп ултырып олорға кереште. Гүйә ул кешеләрҙең онотоусанлығына, тыуған ерҙе шулай еңел ташлап китә алыуҙарына көйөнөп, әрнеп илай ине. Хужалары, тағы ла ҡатыраҡ бошоноп, кире киттеләр.

— Булманы. Әйҙә, улым, атты ҡыу! — тине Байгилде ағай. Иштуған теләмәй генә арбаға менеп ултырҙы. Уны хатта атлы булыу, ат тотоп күсерҙә ултырып барыу бәхете лә ҡыуандырмай ине хәҙер.

— Эттең эте лә тыуған-үҫкән ерен ташлап китергә теләмәй бит! Ә беҙгә китергә тура килә,— тине Байгилде ағай, ауыр көрһенөп.

Унын. менән йәнәш атлап арба артынан барған Сәрбиямал ғына ғәҙәте буйынса ҡырҡыу итеп:

— Йә, әйтмә инде, харап!.. Бында ла үҙ ауылым тип әйтерлек урының бар инде! Ерең-һыуың, туған-ырыуың, бер яҡын-еһерең юҡ. Исмаһам, берәүһе лә яҡламаны бит! Яҡындарың булһа, нахаҡ бәлә яғып ҡыуҙырып ебәрмәҫтәр ҙә ине,— тине.

Уға яуап ҡайтарыусы булманы. Ауыр булһа ла, был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар ине шул.

Ысынлап та, Байгилде ағай имән ҡыуышынан төшкән кеүек япа-яңғыҙ ине был ауылда. Атаһы ла, яҡын ғына туғаны ла юҡ ине уның. Ҡасандыр, кемдәндер ишетеп белеүенә ҡарағанда, борон-борон заманда Толомбәт, Әкембәт, Бәйембәт, Иҫәнбәт тигән бик көслө дүрт бер туған батыр булған, ти. Улар бынан бик алыҫта, көнбайышта, киң, иркен далаларҙа йәшәгәндәр, ти. Замандар үтеү менән был дүрт батырҙан дүрт ырыу таралған, ти. Был ырыуҙар һәр береһе бер ара булып, тәбиғәттең иң матур урындарында йәйләп йөрөгәндәр, ти. Әкембәт, Иҫәнбәт, Бәйембәт, аралары йөҙ-йөҙ саҡрымдар үтеп, көнсығышҡа, Урал итәгенә килеп, йәмле Эйек буйында йәйләргә ятраҡкандар, ти. Ә иң ололары Толомбәт ырыуы иген игеп, йорт һалып, кәртә-ҡура төҙөп бер урында йәшәүҙе артыҡ күргән, ти. Шул ҡола ялан далаһында ауыл ҡорған да бер ҡайҙа ла китеп йеремәгән, ти. Берҙән-бер ваҡыт батша хөкүмәте башҡорттарға ерҙәрен ауыл-ауыл итеп бүлеп биреүҙе сығарған, ти. Шунан был ер бүлеү ваҡытын-Да Эйек буйында йәйләп йөрөгән Әкембәт, Бәйембәт, Иҫәнбәт ырыуҙары шунда ер алып, ерләшеп ҡалғандар. Ә Толомбәт ырыуы бер үҙе ялан яғында, Ырымбур аръяғындағы да-

лала торған да ҡалған, ти. Телəгəнсə күсеп йөрөргə ер тарайғас, Эйек буйындағы ырыуҙар ҙа ауыл булып урынлашып, игенселек менəн көн күрергə тотонғандар. һəр бер ауыл ырыу башының исеме менəн аталған, ти.

Байгилде ағайҙын, олатаһы һайылмыш ҡарт теге ялан яғында тороп ҡалған Толомбəт ырыуынан булған, ти. Лəкин ул үҙенең яҡын туғандары Əкембəт, Бəйембəт, Иҫəнбəттəн айырылып йəшəүҙе бер ҙə яратмаған, ти. Шунан берҙəн-бер йəйҙе үҙ араһын ташлап, бала-сағаһын тейəп, Оло Эйек буйына сыҡҡан да киткəн, ти. Унан үҙе иң яҡын күргəн Иҫəнбəт ырыуы араһына килеп урынлашҡан, ти. Тик ырыу-ара тəртип нигеҙендə уға бында ер теймəгəн, ти.

— һинə ер үҙ даланда, Толомбəттə, бирелгəн,— тигəндəр, ти, туғандары. һайылмыш ҡарт уларға:

— Ярар, кешегə күп ер кəрəкмəй. Үлһəм, зыяраттан урын бирерһегеҙ əле, тигəн дə бында торған да ҡалған, ти. Ҡартҡа, ҡола ялан ерҙəн килгəн кешегə, был йəмле Оло Эйек буйы харап оҡшаған, ти. Тик ерһеҙ-һыуһыҙ, ул бында бик тиҙ бөлгəн. Мал-тыуары ҡырылып бөткəн, ти. Ул үлеп киткəс, унын улы — Байгилденең атаһы Мəхмүт ҡарт үҙ иленə ҡайтайым тиһə лə ҡайта алмаған. Бала-саға тейəп, йөҙəр саҡрым ер үтер хəле ҡалмаған, ти, унын. Шунан күп тə тормай ваба ауырыуы сығып, Мəхмүт ҡарт менəн ҡатыны икеһе бер көндө үк үлеп тə киткəн. Унын башы осона кемдер берəү юнылмаған, йышылмаған ҙур һоро таш ултыртҡан да уға ни менəндер батыу соҡоп, ғəрəп хəрефе менəн: «Толомбəт тоҡомонан Мəхмүт ибни һайылмыш, һайылмыш ибни Ҡаҙмаш, Ҡаҙмаш ибни Ирғəле, Ирғəле ибни Байғəле, Байғəле нбии Йəнғəле, Йəнғəле ибни Толомбəт», тип кəкре-бекрə итеп, ете быуынға хəтле теҙеп яҙған да, Мəхмүттең ҡайһы йылда, нисə йəштə вабанан вафат булыуын йҫтəп, «амин»! тип ҡуйған.

Байгилде ағай хəҙер ер менəн тигеҙлəнеп сиҙəм баҫҡан был иҫке ҡəбер өҫтөндə, ел-ямғырҙан йыуылып, суғырмаҡланып бөткəн, ошо һоро таштан башҡа бер нəмəне лə белмəй. Ул ата-əсəһенəн ҡалып, зимагур булып йөрөгəн арала башҡа яҡындары ла үлеп бөткəн. Хəҙер алыҫ туған Шəһит ҡарт менəн Сыуаҡай əбейҙəн башҡа унын, бер кеме лə ҡалмаған. Быларҙың туғанлыҡ осо ла ҡайҙан, нисек килеп тоташыуы ла Байгилде ағайға билдəһеҙ.

Ҡайһы берəүҙəр уларҙы Бейеш батыр тоҡомонан икəн, ул тотолғас, унын тоҡомонан булған кешелəр ҡасып, төрлөһө-төрлө яҡҡа туҙып китеп, ошолай ерһеҙ-һыуһыҙ булып ҡалғандар, имеш, тип тə һөйлəйҙəр. Лəкин Байгилде ағай быларҙын ҡайһы дөрөҫ, ҡайһы буш һүҙ икəнен дə белмəй. Үҙенен ҡайҙалыр алыҫта ере-һыуы, туған-ырыуҙары бар нкəн тигəн һүҙгə лə ныҡлап ышанып етмəй. Ул Эйек буйымда ултырған ошо Иҫəнбəт ауылын ғына белə, йəне, йөрəге менəн ярата, уны төп үҙ ауылы тип иҫəплəй. Шуға күрə уға бөгөн Иҫəнбəтте ҡалдырып китеүе һөйлəп биргеһеҙ ауыр ҙа, һағышлы ла ине.

Үҙ ғүмерендə нисəмə тапҡыр шулай йөрəк һыҙлатып ҡалдырып китте ул уны. Лəкин һəр береһендə беренсе мөмкинлек булыу менəн əйлəнеп ҡайтты. Ə хəҙер берəй ваҡыт ҡайта алырмы ул бында, юҡмы?! Шулай уҡ уны ғүмергə бында ҡайтыуҙан мəхрүм итерҙəрме икəн ни? Ни тиклем ауыр!.. Ни тиклем хаҡһыҙлыҡ?!

Ауылын тəү тапҡыр ташлап, эш, аҙыҡ эҙлəп сығып киткəндə, Байгилдегə бары ун ике генə йəш ине. Унын яңынан ялан аяҡ, ялан баш йүгерə-атлай йəнəш барған, киндер күлдəк-ыштанлы, ҙур яҡты күҙле, ҡыйыу, асыҡ йөҙлө малайға — унын берҙəн-бер ҡустыһына — бары ун ғына йəш ине. Атаһы менəн əсəһе үлгəн йəй ине был. Улар ауыл уртаһындағы кескəй генə ситəн өйҙə берҙəн-бер апаларын — ун биш йəшлек Гөлғəйшəне ҡалдырып, бəхет эҙлəп, ил гиҙеп тəү тапҡыр сығып китеп баралар ине был көндө.

— Байгилде мырҙа, минең яңғыҙымды нинə ташлап китəһен? Исмаһам, берəй бабайға кейəүгə биреп ҡалдыр! — тип иланы Гөлғəйшə уларҙы оҙатҡанда. Был ай шикелле түңəрəк, ап-аҡ матур битле, изгелекле, тыныс ҡарашлы, ҙур күүҙəле, лəкин кескəй бала кеүек бер ҡатлы Гөлғəйшə Байгилделəр ғаилəһендə хəҙер ин. өлкəн кеше ине. Лəкин ул үҙе Байгилдегə хəҙер өйҙə өлкəн ир кеше, унын. тормошон да ойошторорға тейешле кеше итеп, таяныс итеп ҡарай ине.

Ауылдан сығып көнбайышҡа ҡарай ун-ун биш саҡрым ер үткəс, малайҙар бер шишмə янында ял итергə туҡтанылар. Бында кен эҫе булыуға ҡарамаҫтан, аяғына күн итек, башына һырма бүрек, өҫтөнə ҡара кəзəкей кейеп, билен ал билбау менəн быуып ҡуйған арыҡ бəлəкəс кəүҙəле, күгəрсен күҙҙəре шикелле бəлəкəс түнəрəк кенə күҙле бер ир кеше лə ял итеп, ҡатҡан сөсө икмəкте шишмə һыуына ебетеп тамаҡ ялғап ултыра ине. Байгилде унын эйəк аҫтында кəзə һырғаһы шикелле һалынып торған ҡыҙыл сөйəленə, кеселекле мөлəйем йөҙөнə оҙаҡ ҡына теклəп ултырҙы ла, нисектер ҡыҙыҡһынып:

— Ағай, һин ҡайҙан?—тип һорап ҡуйҙы.— Ҡайҙа бараһың?

— Елəкле ауылынан,— тине ағай кеше, ауыр көрһөнөп.— Ҡатын үлеп китеп, өс ҡыҙ балам етем тороп ҡалды əле, мырҙам. Шуларға һəйбəт кенə берəй əсəй табып апҡайтмаммы тип китеп бармаҡмын...

Был һүҙҙəрҙəн һуң, Байгилденең иҫенə үҙенең бер ҡатлы апаһы Гөлғəйшəнең бая əйткəн һүҙе келт итеп килеп төштө:

«Байгилде мырҙа, исмаһам, мине берәй бабайға булһа ла биреп китер инең. Былай яңғыҙым мин нисек йәшәйем!..»

Байгилде үҙе лә анламаҫтан:

— Минең апайымды ал, ағай, атыу ул өйҙә бер үҙе генә ҡалды,— тип әйткәнен тоймай ҙа ҡалды. Унан ул, үҙ һүҙенән үҙе ҡыҙара-бүртенә, үҙҙәренең тормош хәлен аңлатып бирергә тырышты. Теге түбәнселекле ҡарашлы, бәләкәс кешегә Байгилденең һүҙҙәре оҡшаны булһа кәрәк. Ул аҙ ғына уйланып, күҙҙәрен алыҫҡа текләп, тынып ултыра биргәс, ябай, еңел генә итеп:

— Әйҙә, тәүәккәлләп ҡарайыҡ һуң, мырҙа,— тине.

— Әйҙә,— тине Байгилде лә. Оҙаҡламай улар өсәүләп ауыл яғына кире боролдолар. Ә ҡояш байыуға улар күмәкләп Байгилделәрҙә сәй эсеп ултыралар ине инде. Байгилде бер-ике сынаяҡ сәй эсеп, тамаҡты ебеткәс, етди тауыш менән:

— Бына, апай, мин һиңә бабай табып алып ҡайттым,— тине.

Урындыҡ ситендә сәй яһап ултырған Гөлғәйшә оялышынан ҡарағусҡыл ҡыҙыл төҫкә ингән теге бәләкәс арыҡ кешене һис тә тартынмай баштан-аяҡ ҡарап сыҡты ла:

— Аһа, ап-арыу ғына бит. Исемен. кем? — тип һораны.

— Ҡотләхмәт,— тине теге кеше, түбән ҡарап.

— Аһа, исемен. ҡайһылай матур,— тине Гөлғәйшә, ғәмһеҙ шарҡылдап көлөп. Унан бик ябай итеп: — Мин һинә барһам, һин минең мырҙама нимә бирерһең һун? — тип һораны.

— Минең бер нәмәм дә юҡ шул. Өс ҡыҙым да бер ситән өйөм. Эшкә яраған ике ҡулым,— тине Ҡотләхмәт. Бер аҙ уйлап торғас, юл тоҡсайынан бер әсмүхә сәй алып, унайһыҙланып ҡына Гөлғәйшәгә һуҙҙы.

— Ошо сәйҙе генә бирмәһәм...

— Ярар, бир шуны,— тине Гөлғәйшә, сәйҙе Ҡотләхмәттең ҡулынан тартып уҡ алды. Уны шунда уҡ боҙоп, сәйнүгенә сәй өҫтәне. Ҡотләхмәткә ҡаты итеп тағы бер сынаяҡ сәй яһап ултыртты. Унан, ихлас көлөп:

— Эс, әсмүхә сәйлек бабай!..— тип ҡуйҙы.

Иртәгеһенә Ҡотләхмәт Гөлғәйшәне Еләкле ауылына алып ҡайтып китте. Улар ярлы булһалар ҙа, татыу, матур итеп оҙон ғүмер йәшәнеләр. Кин, күңелле, асыҡ сырайлы бошмаҫ Гөлғәйшә Ҡотләхмәт балаларын ҡаҡмай-һуҡмай матур итеп үҫтерҙе. Үҙе лә тиҫтәгә яҡын малайҙар, ҡыҙҙар табып бирҙе. Тик бабайға ҡушҡан тәү көнгө ҡушаматын ғына ул бер ҡасан да онотманы.

— Аша, әсмүхә сәйлек бабай!

— Мә, таҙа күлдәгеңде кей, әсмүхә сәйлек бабай!..

Ләкин был һүҙ арала бер ҡасан да үпкәләшеү уятманы. Сөнки ул Гелғәйшәнең ауыҙында Ҡотләхмәткә түгел, ә аяуһыҙ яҙмышҡа әсе мыҫҡыл булып янғырай ине. Эйе, ярлылыҡхы улар уйлап сығармағандар бит инде донъяға!..

Шулай уҡ Гөлғәйшә был һүҙҙе үкенеү, зарланыу өсөн дә әйтмәй, әлбиттә. Ул үҙ тормошонан тулыһынса ҡәнәғәт, риза. Елкәләренә мәңгелеккә менеп атланған ярлылыҡ та, етеп килгән ҡартлыҡ та Гөлғәйшәнен. тыныслығын, бошонмаҫлығын боҙа алмай, ул хатта төҫкә лә үҙгәреп китмәй. Ҡаты-ҡото ашап, һөт-ҡатыҡ күрмәй йәшәһә лә, һаман шул йомро ғына кәүҙәле, ай шикелле түнәрәк яҡты йөҙлө булып, көләс балҡып тора ул...

Ә бит шулай итеп уны бабайға биреп, оҙатып ебәргән көнгә лә күпме ваҡыт уҙып китте! Шул осор эсендә Байгилденен башынан күпме нәмә кисте. Ҡайҙа ғына булманы, кем генә булып эшләмәне. Зимагор булып йөрөй торғас, ҡайҙалыр юғалып ҡалған берҙән-бер ҡустыһы өсөн күпме ҡайғырманы. Уны осратмаммы тип, Верхнеуральск, Ырымбур, Златоуст, Быҙаулыҡ ҡалаларында ташсы булып та, балта оҫтаһы булып та, йөк ташыусы булып та нисәмә йылдар үткәрҙе ул. Шулай ҙа ауылын онотманы. Егет булып еткәс, унда ҡайтып ғаилә ҡорҙо. Ә хәҙер уны ауылынан көсләп ҡыуалар. һөйгән ауылын көсләп онотторорға тырышалар. Йә, шулмы хаҡлыҡ?! Ошомо ғәҙел закон? Йә, ни өсөн уны хөкөм иттеләр? Ни өсөн ҡыуҙылар?! Ниндәй ярамаған эш эшләне һук ул?!

Был хаҡһыҙлыҡ Байгилде ағайҙы шулай сығырҙан сығырлыҡ итеп аптыратһа ла, Ҡормош бай, Әхмәҙулла мулла, һуҡыр Сапыйҙар өсөн һис тә ғәжәпләнерлек эш түгел ине. Сөнки улар Байгилде ағайҙын тура кнлгән бер ерҙә муллаларға, байҙарға ҡарата төртмә һүҙҙәр әйтеп йөрөүҙән үтеп, бер ни эшләмәгәнен, ундай эшкә әлегә һәләтле кеше лә түгеллеген асыҡ белһәләр ҙә, унын был һүҙҙәре халыҡҡа, бигерәк тә йәштәргә, оҡшауын күреп инде унан ҡотолорға булдылар. Шуның өсөн уны дингә, батшаға, байҙарға ҡаршы власть өсөн ҡурҡыныслы кеше итеп күрһәтеп, һәр саҡ ялған донос яҙып килделәр.

Шулай йыл үткән һайын ҡағыҙ өҫтөнә ҡағыҙ өҫтәлә барҙы. Ахыр инде уларға бынау һуңғы ваҡиға ла килеп өҫтәлгәс, бизмәндең доносль яғы бик нык баҫып китте лә Байгилде ағайҙы бәреп тә йыҡты, ауылдан ҡыуып та сығарып ебәрҙе.

Ваҡиға тип әллә ни ҙур ваҡиға ла булманы, әлбиттә. Ә шулай ҙа сүпте сүмәлә яһап, кеше башы ашап өйрәнгән бәндәләргә етерлек аҙыҡ бар ине бында.

Баҙар көндө булды был хәл. Эсмәй эскән Байгилде ағайҙын, Бибеш ҡайғыһынан бер тинлек эсеп, мен тинлек иҫереп йөрөгән сағы ине. Баҙарлы ҙур рус ауылында Байгилде ағай

бер маҡсатһыҙ-ниһеҙ, башына һуҡҡан тай шикелле, арыбире һуғылып, урам ҡыҙырып йөрөй торғас, сиркәү артында ғына торған ҙур бай йорт янына барып сыҡты. Был Ҡормош байҙың белеше кожевник Червяк йорто. Ҡормош бай баҙар көндө гел уларҙа ҡунаҡ була. Бына әле лә Червяктың ҡапҡа төбөндә, урам яҡтан, кырандаслы әс яҡшы ат себенгә сыҙамай тыбырсынып тора. Байгилде ағай был аттарҙын, төҫтәренә, йылтырап торған һырттарына, көмөшлө шлеяларына ҡарап шунда уҡ танып алды.

«Әһә, Ҡормош бай ҙа, Әхмәҙулла мулла ла, хатта һуҡыр Сапый ҙа бында икән. Ни эшләп бик иртә йыйылған был ишлмалар? Хальгктан йәшенеп кенә типтереп ултыраларҙыр әле. Тукта, брат, мин һеҙҙе ҡыҙыҡ итәйем әле...»

Байгилде ағай уларҙы, бигерәк тә мулланы, эске еҫтәндә осратыу, урыны килгәндә быны кешеләр алдында үҙҙәренә әйтеп көләү, үс алыу теләген тыя алмай, өтөлә-йығыла өйгә барып инде. Өҫтәлде емерә яҙып тулып ятҡан һыйҙан да, бушатып өҫтәл аҫтына аяҡ араһына ҡырын һалып ҡуйылған аҡбаш шешәләрҙең ҡыҙыуынан да нығ ҡына кәйефләнергә өлгөргән ҡунаҡтар һөҙөргә йыйынған үгеҙ кеүек уға төбәлделәр. Әхмәҙулла мулла йәшерергә өлгөрмәй ҡалған стаканын ике ҡуллап ҡаплап ултыра.

— Әй, йолҡош, һиңә кем кәрәк? — тип тынлыҡты боҙҙо өй хужаһы. Байгилде ағай был һүҙҙе ишетмәгән дә к-еүек ҡысҡырып көләп ебәрҙе.

— Мулла ағай, араҡы хур ҡыҙы түгел бит ул. Нинә уны ул хәтле ҡуш ҡуллап ҡосаҡлап ултыраһыц?!

— һай, мөртәт! — тип мығырланды мулла.— Иблес! Иблестең тап үҙе бит һин, Байгилде...

Ҡормош бай, йыуан ҡорһағын ҡапайтып, өҫтәл артынан торҙо.

— Эй, ялкау, эшлекһеҙ! Эсеп йөрөргә беләһең, ә алған бурысынлы түләмәйһең! — Давай, хәҙер үк теге ун ҡаҙаҡ ондоң аҡсаһын биреп сыҡ!

— Ун ҡаҙаҡ он? Ҡасан алдым әле мин уны һинән? — тип аптыраны Байгилде ағай.

— Бисәң үлгәс. Оноттоң дамы ни әле? Көнләккә ураҡ урып түләрмен тип, ялынып-ялбарып, теләнселәп алғайнын, бит!..

— Ә-ә-ә, улмы ни? — тип тағы ҡысҡырып көләп ебәрҙе Байгилде ағай.— Иң элек ул он ун ҡаҙаҡ түгел, ә биш ҡаҙаҡ ине. Унан һуң уны мин ашаманым. Сәғүрәнең етеһен иҫкә алам тигән булып, анауы мулла ағайым ҡоймаҡ бешертеп ашап бөттө бит уны. Ха-ха-ха... ысын.мин ул ҡоймаҡты ҡабып та ҡараманым хатта. Ха-ха-ха!.. Бына ул, ошо



иулла ағайым, минең Сәғүрәмдең ҡанын ағыҙып бөтөп үлтерҙе лә, унан ҡоймаҡ ашай-ашай, уны иҫкә алырға тотондо, ха-ха-ха!..

Ҡормош бай күркә кеүек ҡабарынып-бүртенеп Байгилде ағайҙың алдына килеп баҫты.

— Түлә, тим, хәҙер үк түлә, ишетәһенме, йолҡош?!

Мулла:

— һай, мөртәт, һай, иблес! — тип ултырған урынында һикеренде. Һуҡыр Сапый аҡ төймә баҫҡан күҙҙәрен түбә таҡтаһына текләп, бер ни булмаған кеүек, суфыйҙарса тыйнаҡ •ҡына булып тик ултырҙы. һүҙ башҡортса барғас, өй хужаһы ла артабан һүҙгә ҡатнаша алманы. Ә Ҡормош бай шул биш ҡаҙаҡ он есөн Байгилденен, боғаҙын сәйнәрҙәй булып һаман әтәсләнде.

— Түлә, тим, юкһа беләһенме?.. Яҡшылыҡ көтмә, зимагур!

Байгилде ағай ҡапыл айнып киткән һымаҡ булып көләүҙән туктап ҡалды. Унан үҙен әйләндереп алған был ҡанһыҙ кешеләргә берәм-берәм күҙ йөрөтөп сыҡты ла әсе нәфрәт менән:

— Ашыҡма, Ҡормош бай,— тип ҡуйҙы.— Көнө килер, мин бурысты һинә икеләтә арттырып түләрмен. Нисек тә түләрмен... Тик һин, бай, шулай ҙа минән бурысты түләтергә бик үк ашыҡма, йәме... Ҡорһағың шартлап ҡуйыуы бар...

Ҡормош бай ата күркә кеүек бер ҡыҙарып, бер буҙарып китте.

— Ах фетнэсе! Был һүҙен өсөн мин һинең башынды Себерҙә серетермен, беләһеңме?

— Беләм,— тине Байгилде ағай, бик тыныс итеп.— Теләһән ни эшләт. Мин бер нәмәнән дә, хатта батшанан да ҡурҡмайым хәҙер. Минә барыбер. Ә һин бер саҡ шартларһын.!.. Ишетәһеңме, барыбер ҡасан да булһа бер шартларһың!..

Байгилде ағай ошо һүҙҙәрҙе әйтте лә сығып китергә теләп арты менән әйләнде. Ләкин Ҡормош бай һеләүһен тиҙлеге менән ултырғысты күтәреп алып арттан унын башына тондорҙо. Байгилде ағай иҫәнгерәп бәүелеп китте лә гөрҫ итеп иҙәнгә ауҙы.

Ошоно ғына көтөп ултырған Әхмәҙулла мулла менән кожевник Червяк та Ҡормошҡа ярҙамға ташландылар... Ә бер аҙҙан Байгилде ағай ауыр ыңғырашып иҫенә килгәндә, унын янында яҡты зәңгәр күҙле, алтын сәсле ят бер ҡатын менән эре Һары һипкелле, йәйге күк кеүек яҡты, көләс күҙле бер кескәй малай ғына баҫып тора ине. Малай ҡаты киндер таҫтамалды бизрәләге тэн семерҙәткес һалҡын шишмә һыуына тығып һыулай ҙа нығ итеп бороп алтын сәсле

ҡатынға бирә. Ә ҡатын уларҙы Байгилде ағайҙын. башына, күкрәгенә яба.

«Ҡайҙа мин? Кемдәр бында? Ҡайҙа күрҙем һуң мин быларҙы?» — тип уйлай Байгилде ағай. Ләкин һорауын ҡысҡырып әйтә алманы. Ул үҙен тирмән ташы баҫҡан кеүек тоя.

— Әсәй, уянды! Ҡарап ята! — тип ҡыуанып шыбырлай малай.— Ул үлмәгән.

— һөт алып кил, улым.

— Хәҙер, әсәй, йүгерҙем.

— Әй, белеш, нихәл? — тип моңһоу ғына итеп йылмая алтын сәсле ҡатын.— Бына нисек һине биҙәгәндәр... Күгәрмәгән ерең ҡалмаған. Ярай әле Никита барып ингән. Юҡһа һиңә был донъя менән хушлашырға тура килер ине... Мә, эсеп ебәр, белеш. Хәл инер...

Ҡатын улы йүгертеп алып килгән бер стакан һөттө Байгилде ағайҙың ауыҙына алып бара. Ә ул ниндәйҙер йотлоғоу менән һөттө төп күтәрә һемерә лә тағы һорай. Малай тағы бер-ике стакан һөт алып килә. Ошонан һун, Байгилде ағай тамам хәл алып, айнып тороп уҡ ултыра.

— һай, рәхмәт. Эсемдәге утты өрөп һүндергән кеүек булды ла баһа!..— ти. Инде үҙенең Никита өйөндә ятыуына ла, үҙ янында Никитаның ҡатыны менән улы тороуға ла яҡшы төшөнә.

— Йә, дуҫҡай, һөйләп ебәр. Миңә нимә булды? Никита ҡайҙа? Нисек мин һеҙгә килеп индем?

— Никита һине арбаға һалып алып килде лә, беҙгә тәрбиәләргә ҡушып, ашығып сығып китте,— тип яуапланы теге ҡатын.— Ә беҙ бына Алеша менән һине сәғәттәр буйы иҫеңә килтерә алмай йөҙәнек.

— Червяктарҙа һине туҡмағандар, ағай. Ныҡ туҡмағандар,— тип күк күҙҙәрен кин. асып, ашығып һүҙгә ҡушылды кескәй Алеша.— Атайым әйтә, мин барып ингәндә туҡмап иҫен китәргәйнеләр, ти, вот.

— Эйе, Никита ниндәйҙер йомош менән барып ингән,— тип һалмаҡ ҡына һөйләп алып китте ҡатын.— һинең иҙәндә, тегеләрҙен, аяҡ аҫтында ятҡаныңды күргәс:

— һеҙ ни эшләйһегеҙ? Көпә-көндөҙ кеше үлтерәһегеҙ бит,— тип ҡысҡырып ебәргәнемде белмәй ҙә ҡалдым, ти. Ә тегеләр еще минен, үҙемә ажғыралар:

— Тынын, сыҡмаһын,— тиҙәр, ти, ә мин уларға:

— Кеше үлтерергә хаҡығыҙ юҡ,— тип ҡысҡырам, ти. Шунан улар һине сатай-ботай тотоп тышҡа алып сығып арба төбөнә ырғыттылар ҙа:

— Бар, баҙар майҙанына алып барып ырғыт. Баҙар көндә эсеп-иҫереп аунап ятыусылар унда күп була. Ха-ха, Байгилде уларҙан кәмме ни? Әйҙә ул да шунда ятһын,— тип көләләр, ти. Шунан Никита тиҙ генә ат еккән дә һине бында алып ҡайтып ҡалдырып китте. Китмәҫ ине, байҙың асыуынан ҡурҡа. Әҙ генә бер нәмә булһа, эштән ҡыуам ти ҙә ҡурҡыта бит, яуыз, Эшһеҙ ҡалһаң, беҙҙең кеүек ерһеҙ кешеләргә астан үлергә генә бит... Үҙен беләһең...

Байгилде ағай кожевник Червякта йәк ташыусы булып эшләүсе үҙенен, яҡын дуҫы Никиталарҙа ике-ес көн ятҡас ҡына, көскә аяҡҡа баҫып, ҡайтып китте. Уның күкрәге тын бирмәй ҡыҫа, башы ҡаты ауырта, әйләнә ине.

«Үпкәнде иҙгәндәр шул, үпкәнде!»— тип көрһөнөп ҡалды Никитаның ҡатыны. Өлкәндәрҙең зарын иғтибар менән тыңлап ултырған кескәй Алеша, аптырап:

— Әсәй, нинә байҙар уҫал булалар? — тип һораяы. Әсәһе улына монһоу ғына ҡарап ҡайғылы йылмайҙы ла:

— Күпте белһән, тиҙ ҡартайырһын,— тнп кенә ҡуйҙы.

Байгилдене туҡмап ырғытҡан көндөң кисендә үк Ҡормош бай Червяк ҡарттың гимназист улынан бөтә шартына килтереп прошение яҙҙырҙы. Унда Байгилде динһеҙлектә, аллаға, батшаға ҡаршылыҡта, йәштәрҙе аҙҙырыуҙа, уларҙы власҡа ҡаршы аяҡландырыуҙа, тағы әллә ни хәтле хәтәр эштәрҙә ғәйепләне. Динде, милләтте һаҡлап ҡалыу өсөн унын, һис кисекмәҫтән ауылдан ҡыуылыуын һораны. Прошение шундай бай, шөһрәтле кеше тарафынан яҙылып, Әхмәҙулла мулла менән һуҡыр Сапыйҙар тарафынан дөрөҫләнгәс, етмәһә, судьяларға Ҡормош байҙан бер нисә ҡуй ҙа эләккәс, эште оҙаҡҡа һуҙып тормаҫтан, эшләп тә ҡуйҙылар. Байгилденен бөтә әйберен конфисковать итеп, үҙен егерме дүрт сәғәт эсендә ауылдан ғына түгел, волость еренән дә сығып китергә хөкөм иттеләр. Бөгөн бына шул хөкөмдө тормошҡа ла ашырҙылар.

Байгилде ағай әле ҡулдарын артҡа ҡуйып, туҙанлы юл өҫтөнән күҙен алмай, арба артынан эйәреп барғанда, ошо хаҡта сикһеҙ йәберһенеп уйлауҙан үҙен һис тә тыя алмай йөҙәне.

«Эт кеүек ҡыуып сығарып ебәрҙеләр... Эт кеүек...»

Уның уйы тағы Ҡашҡарға барып текәлде.

«Эт кеүек, тим. Унан да насарыраҡ. Эт әле, исмаһам, был ҡанһыҙ законға төкөрөп тә бирмәй. Ана, Ҡашҡар, китергә теләмәгәс, торҙо ла ҡалды. Уны бер кем дә ҡыуып ебәрә алмай».

Эйе, Ҡашҡар, ысынлап та, тыуған йортҡа булған мөхәббәтенә хыянат итергә теләмәне. Ауылды ташлап китеүҙән ҡырҡа баш тартты. Ә Байгилде ағайға ул сикһеҙ ҡыҙғаныс ине. Әллә көсек кенә сағынан Сәғүрә еңгә тәрбиәләп үҫтергәнгә, әллә үҙе менән гел-гел ҡуян һунарына йөрөгәнгә, Байгилде ағай уны балаларҙан кәм йәлләмәй ине. Шуға күрә күҙ

етеп, сана юлы төшкәс, ул, ниндәйҙер бер һылтау табып, Ҡашҡарҙы алып ҡайтыу ниәте менән үҙ ауылына барып сыҡты. Ябығып, ялбырап, эсе үткәшеп бөткән был осло моронло ҙур һары эт, сыбыҡ кеүек булып ҡалған, ал аяҡтарына башын һалып, төпкә батҡан аҡыллы, моңло күҙҙәрен ҡайҙалыр алыҫҡа төбәп, һаман цшек төбөндә ята ине. Ул хужаһын күреү менән еикһеҙ ҡыуанып, сыйылдап һикереп торҙо. Унын. яурындарына таяныП, биттәрен, ҡулдарын яланы. •.••.-<

— Ҡайттыңмы, бөтөнләйгә ҡайттыңмы? — тип һораған кеүек итеп, күҙҙәренә тултырып-тултырып ҡараны. Байгилде ағайҙын. ҡулынан икмәк киҫәктәрен алып, ҡойроғон брлг ғ.ай-болғай ҡыуаңып эшаны.. Ләкин уға энәреп ишек алдь)т нан һаман бер генә.аҙьвд да сығырға теләмәне. Байгилде ағай ниндәй генә хәйләләр ҡороп ҡараһа ла, уны үҙ артынан эйәрг тә алманы. Тотоп, ҡороҡлап алып китәм тиһә, асыуланып, ырылдап өҫтөнә ташланды. Ахыр Байгилде ағай бөтөнләй өмөт өҙөп ҡайтып китте. Ташланған йортта Ҡашҡар тағы яцғыҙ үҙе генә тороп ҡалды. Күршеләр йәлләп башта уны алмашлап ашаттылар. Ҡатҡан-ҡотҡандарын биреп торҙолар. Ләкин, ҡаты аслыҡ уларҙың үҙҙәрен дә тамам бөгөп алғас, эт ҡайғыһы китте. Ҡашҡар бөтөнләй ас ҡалды. Башҡа йылдарҙа, ҡырпаҡ ҡар төшөү менән ҡуян тотоп туйынып, һимереп ала торған эт хәҙер бер генә аҙым да ишек алдынан китмәй, хужаларын көтөп, йорт һаҡлап ята бирҙе. Тик төндәрҙә генә ҡапҡа төбөнә сығып ултырып, кемдәрҙелер әрләгән, ҡарғаған шикелле сәңкелдәп өрә-өрә, йөрәк өҙгөс ҡайғылы тауыш менән олой ине ул. Шулай ҡыш етте. Ҡашҡарҙын хәле ауырайғандан-ауырайҙы. Ахыр ул ҡаты буранлы сатлама һыуыҡ бер төндө, йорт һаҡлап ишек төбөндә ултырған еренән ҡуҙғалмай ғына, был фани донъяға һуңғы ләғнәтен ебәреп, йән әсеүе менән:

— У^у-уй! —тип тағы бер-ике олоно ла, ал аяҡтарына башын һалып, иҫ киткес моңло, аҡыллы күҙҙәрен ҡайҙалыр алыҫҡа төбәп, мәкгелеккә тынып ҡалды. Көслө декабрь еле, һырттан тау-тзу ҡарҙарҙы ҡыуып алып килеп, тан атҡанса ишек алдын ҡапҡа менән бер тигеҙ бейеклеккә күтәреп күмеп ҡуйҙы. Иртән торғас, күршеләр Ҡашҡарҙын ҡайҙа булғанын да белмәнеләр. Ул инде хәҙер бер ерҙә лә күренмәне. Тик төндәрен генә унын. үҙәк еҙгөс ҡайғылы олоуы һаман-һаман күршеләрҙен. ҡолағында сағылып торған һымаҡ булды. Тора-бара улар ғәйәт шомланып:

— Был Ҡашҡар түгел икән. Бисара Сәғүрәнен йәне шулай төндә килеп, үҙе үлгәс туҙып, ташландыҡ хәлгә ҡалған донъяһын йәлләп, ҡайҙалыр аҙашып йөрөгән балаларын һағынып илап ултыра икән,— тип һөйләй башланылар. Ҡайһы берәүҙәр хатта унын ай яҡтыһында күҙҙен, яуын алырлыҡ һылыу ап-аҡ булып, оҙон ҡара толомдарын болот кёүёк туҙҙырып. илай-илай тупһала сәс тарап ултырғанын үҙ күҙҙәре менән күреүҙәрен раҫланылар. Тәҙрәләрен», ишегенә арҡыс-торҡос таҡталар ҡағылған ташландыҡ был кескәй өй ниндәйҙер серле, шомло урышға әйләнде. Ҡатын-ҡыҙ, бала-саға уны хатта көндөҙ ҙә ситләп үтә башланы. Ә яҙғы бер төндә күршеләр был ишек алдында кемдәрҙендер ҡыҫҡырышыи, һейләшеп, таҡ та тоҡ, шатыр ҙа шотор кнлеп йерөгәндәрен ишеттеләр:

; «Өйгә ен эйәләшкән. Күрәһең, унда ендәр күсеп киләд^р»^___тип уйланылар. Шомланып, бөтә белгән доғалыҡтарын укый-укый ҡолаҡтарын тығып яттылар. Ә иртәнсәк тортас, был өйҙөн бөтә кәртә-ҡураһы менән юк булғанлығын күрҙеләр...

Бер төн эсендә серле рәүештә юҡҡа сыҡҡан был иорттан ҡалған буш урын кешеләрҙен күнеленә тағы ла нығыраҡ шом, ҡурҡыу һалды. Инде ҡатын-ҡыҙ, бала-саға ғына түгел, хатта ҡайһы бер ирҙәр, йәштәр ҙә «ен эйәләшкән» был урынды ситләп үтә башланы.

Тик бер Шәһит бабай ғына быға ышанманы.

— Ен шул, һинен менән минен кеүек ике аяҡлы, ике ҡуллы ен. Етмәһә, исеме лә бар — Ҡормош,—тип кеткелдәп көлдө ул.— Байгилде унан биш ҡаҙаҡ он алып ашап түләмәй киткән бит. Бына шунын. өсөн Ҡормош бай бер төндә унын йорт-ерен ташытҡан да алған. Уға нимә? Хеҙмәтсе лә, ат та етерлек. Ана, хәҙер, рәхәтләнеп, ҡоро утын я^ып ята. Ышанмаһағыҙ, унын ялан кәртәһенә инеп ҡарағыҙ!..

Ҡайһы бер ҡыйыуыраҡ ирҙәр, нисек тә сәбәп табып, Ҡормош байҙын ялан кәртәһендә тулып ятҡан был «ҡоро утын»-ды күргеләп тә сыҡтылар.

Ысынлап та, кескәй өйҙөн ваҡ, серек бүрәнәләре бында үҙҙәренен һуңғы вазифаларына берҙәм баш эйергә теләмәгән һымаҡ, тырым-тырағай туҙышып, ялан кәртә тулып ята ине.

Шулай итеп, Емештәрҙең тыуған өйө лә, нигеҙе лә юҡҡа сыкты инде. Ҡасан, ҡайҙа булыр уларҙын. яңы нигеҙҙәре? Булырмы ул?!

## Икенсе бүлек

Эй, күңелдең шаулап аҡҡан шишмәнән сафыраҡ сағы,
Эй, ғүмерҙең нурланып үҫкән йәшел япраҡ сағы.

Ғ.. Туҡа#

### 1

Хисбулланың атаһы йыуаш, сиркәтәү генә кеше булды Донъяны Таиба үҙе көттө. Ә инде ире япон һуғышында үлеп, йәшләй генә өс бала менән тол ҡалғас, тормоштоң бөтә ауырлығын бөтөнләй ҙә бер үҙе күтәрҙе. Шулай ҙа Таиба әбей улдарын ирле ҡатындарҙан кәм ҡараманы. Үҙе һуҡҡан киндер, туланан өсөһөн бер төҫ ап-аҡтан кейендереп, аҡсарлаҡтар кеүек итеп йөрөттө.

— Етем икәнбеҙ тимәһендәр. Меҫкен булып үҫмәһендәр,— тип тырышты. Улдарын ас-яланғас итмәҫ өсөн ирҙәр менән ярышып ҡыр эше эшләне. Ашлығын да сәсте, бесәнен дә сапты, кәбәнен дә һалды, урмандан утынын да ташыны Тел сәйнәп ваҡытты буш уҙғарыуҙың ни икәнен дә белмәне

Улдарының икеһе, үҙенә оҡшап, мыҡты кәүҙәле, көслө ихтыярлы булып үҫте. Ин. өлкән улы Хаммат ун ете йәштән көрәштә үҙ алдына кеше сығарманы. Аҙаҡ, үҫеп етеп, сажин кәүҙәле, бөркөт ҡарашлы ир булып еткәс, уның менән көрәшеп, көс һынашып ҡарарға батырсылыҡ итеүселәр һирәк булды. «Хаммат батыр» тип исем бирҙеләр уға. Унын, хаҡында: «һабанды атынан көслөрәк үҙе тарта икән. Шуға ул ашлыҡты бөтә кешенән алда сәсеп бөтә икән»,— тигән һүҙ таралды.

Хаммат иген игергә, хатта ауылда һирәк кеше сәсһән көнбағыш, картуф, ҡарбуз-ҡауындарға хәтле үҫтерергә ярата Уларҙы йәш бала кеүек ҡәҙерләй, тәрбиәләй. һәр ваҡыт башҡаларҙың күберәк уңыш ала, мулыраҡ, туғыраҡ йәшәй. Ауылда уны күптәр ошо тырышлығы өсөн айырата яраттылар. Тик ҡайһы бер эш һөймәүселәр генә үҙҙәренен, ялҡаулыҡтарын аҡлау өсөн:

— Таиба әбей үҙе лә ғүмер-ғүмергә урыҫ кеүек таң ҡараңғыһынан төн ҡараңғыһына хәтле эшләне. Хәҙер Хамматы ла шулай. Мосолман кешегә был фани донъяны шул тиклем ҡыуыу килешәме ни инде ул,— тип ғәйепләп маташалар



Хамматтын ике балаһы, ҡатыны бар, Ул күптән инде әсәһенән башҡа сығып, үҙ алдына донъя көтөп тора. Уларҙың йорто Сәрбиямалдарға күрше генә.

Таиба әбейҙең кесе улы Закир ҙа төҫө-башы менән Хаммат ағаһынан бер ҙә кәм булмаҫтай ине лә, тик ул, әсәһе әйтмешләй, бик иртә «ҡулдан ысҡынып» китте. Өлкәндәргә бер ҙә буй бирмәне. Өгөт тә, туҡмау ҙа файҙа итмәне уға. Болан балаһы кеүек шаян, ҡырағай, ҡолонеаҡ кеүек йылғыр булып үҫте ул. Таиба әбей уны мәҙрәсәгә лә биреп ҡараны, Закир Маа бер-ике йыл уҡып, нисектер, бик тиҙ уҡырға-яҙырға өйрәнеп алды ла уҡыуҙы ташланы. Мәҙрәсәнең шатлыҡһыҙ, -ҡыҙыҡһыҙ бер терлө тормошо ла, Ғаббас мулланың теге донъя, ожмах, тамуҡ тураһындағы бөткөһөҙ өгөт-нәсихәттәре лә уны бик тиҙ екһендерҙе. Әсәһе әрләп тә, туҡмап та уны мәҙрәсәгә ҡабат аяҡ баҫтыра алманы.

— Хаммат ағайым да уҡымаған бит. Мин дэ уҡымайым. Хисбулла ағайым уҡығас етәр,— тип ҡарыулашты ул. Шулай ҙа китаптарҙы яратты. Әсәһенең тауыҡ йомортҡаларын урлап биреп, ҡырҡ тартмасынан «Йософ — Зөләйха», «Таһир — Зөһрә», «Ләйлә — Мәжнүн», «Буҙъегет» кеүек китаптарҙы һатып алып, туҙып, биттәре ҡойолоп бөткәнсе ҡатҡат уҡыны. Китап яратыуы арҡаһында бер йылды ул өйҙән ҡасып китеп тамаҡ хаҡына ялланып, ҡырҡ тартмасының тартмаһын йәй буйы ауылдан ауылға күтәреп тә йөрөнө. Тартмалағы бөтә китаптарҙы «бушлай уҡып» бөткәс, күҙ еткәс, сүл ғәрәбе кеүек ҡап-ҡара тәнле, сикһеҙ арыҡ, оҙон буйлы егет булып, өҫ-баштары еҙгөләнеп бөтөп, ауылға ҡайтып килде. Әсәһе уны ҡайыш ҡамсы менән ҡулы талғансы ярҙы. Таиба әбей балаларын эстән ныҡ ратһа ла, тыштан уларға ҡаты, ҡоро булырға тырыша. Баланы туҡмап, ҡыҫып тотҡанда ғына кеше итеп була, тип ышана ине. Шуға күрә ул Закирҙы был юлы ла:

— Бына һинә китап! Бына һинә ҡырҡ тартма! — тип таҡмаҡлай-таҡмаҡлай туҡманы. Закир бер ҡаршылыҡ та күрһәтмәне. Тик:

— Әсәй, ботҡа ғына һуҡ, башҡа һуҡма! Юҡһа йәй буйы этләнеп кенә йыйған бөтә белемемде башымдан өркетөп сығарып бөтөрөрһөн,! — тип, шаяртып, әсәһен көлдөрөргә генә тырышты.

Таиба әбейҙен, уға ҡайыш менән ултыртҡан аҡылы оҙаҡҡа сыҙаманы. Закир бер аҙ хәл йыйып, өҫ-башын бөтәйтеп алғас, тағы ҡасып китте. Был саҡта уға бары ун биш йәш иңе. Йылдар уҙҙы. Закир буйға Хаммат ағаһы ҙурлыҡ мыҡты егет булып үҫеп етте. Тик унан нәҙегерәк кенә ине ул.

Ауылға ҡайтһа, уны хәҙер танымаҫтар ҙа ине. Ләкин ул ҡайтманы. Ырымбурҙа, ауылдаштары әйткәнсә, зимагур булып йәшәй бирҙе. Ҡаланы, унын, ауыр, ләкин ниндәйҙер яңырыу, тамырынан үҙгәреү алдында торған көсөргәнешле тормошон, дауыллы ямғыр алдындағы томороҡ кен кеүек өмөтлө тойоп, ярата ине ул. Ҡыйыу, шаян тәбиғәтле, күпте күрергә, яңынан-яңы нәмәләрҙе белергә ашҡынып торған осҡор, ярһыу йөрәкле егетте ауылдың бер төрлө тын тормошо кәнәғәтләндерә алманы. Шул уҡ ваҡытта, байлығы, белеме йәки билдәле бер һөнәре булмағас, нисәмә йыл ҡалала ҡағылып-һуғылып йөрөһә лә, ысын мәғәнәһе менән ҡаланын үҙ кешёНё булып, шаулы, ҡатмарлы тормоштон,'эсенә инеп тә китәй*лмай интекте. Зимагурлыҡтан уҙа алманы. Ҡала, кәрәк саҡта унын тәбиғәт биргән берҙән-бер байлығы булған талымһыҙ беләк көсөнән теләгәнсә файҙалана ла, кәрәге бөткәс, урамға сығара ла ырғыта. Шунан ул тағы ҡасан, кемгә был көс кәрәк булғанса туктаhыр нөктә таба алмай урамда йөрөй бирә. Шулай ҙа бығаса ауылға унын ҡараҡлыҡҡа бирелеү, аҙып-туҙып йөрөү йәки башҡа берәй насар юлға баҫыуы тураһында хәбәр килгәне юҡ. Таиба әбей хәҙер ошонон есөн дә шат ине.

Шулай итеп, Закир беренсе донъя һуғышы башланғансы йөрөй бирҙе. һалдатҡа кеше кәрәккәс, уны ҡала урамынан булһа ла эҙләп табып алдылар.

Таиба әбейҙен. уртансы улы Хисбулла атаһына оҡшап йыуаш, йомшаҡ холоҡло булды. Мәҙрәсәлә Ғаббас мулла уны, «инсафлы, итәғәтле егет», тип маҡтаны. Хатта: «Уҡыһаң, бынамын тигән мулла ла булыр»,— тип Таиба әбейҙе өмөтләндерҙе. Шуға күрә Таиба әбей, үҙенә ни тиклем ауыр булһа ла, Хисбулланы уҡытырға тырышты. «Исмаһам, бер улым әҙәм булһын. Эрәхәт йәшәһен»,— тип уйланы. Ләкин Хисбулла остазы Ғаббас мулланын, да, әсәһенен. дә өмөтөн аҡламаны. Саңлы мәҙрәсә иҙәнендә ун йыллап аунап ятыуға •карамаҫтан, ул хатта йүнләп уҡыу-яҙыуға ла өйрәнә алманы. Әлеп-бей, иман шартынан башҡа бер нәмә лә белмәне. Мәҙрәсәнән сыҡҡас, унын булдыҡһыҙ, бер ҡатлы холҡо мулла булырға, ә ситек-калушы менән сәлләһе ысын, ныҡлы крәҫтиән булырға ҡамасауланы. Таиба әбей уны был яраҡһыҙ уртаҡлыҡтан сығарырға тырышып-тырышып та булдыра алмағас, уҫал ғына бер кәләш алып биреп, үҙ башына донъя көттөрөргә булды. Оҙаҡламай ул күрше ауылдык шоморт ҡара күҙле, һылыу йөҙлө, йәш болан кеүек шаян, уяу холоҡло, зифа буйлы Салимә исемле ҡыҙға яусы ебәрҙе. Был ҡыҙҙы әхирәттәре лә, егеттәр ҙә яратып Сәлимәкәй тип кенә йөрөтәләр ине.



Егеттәр, унын, һылыулығыш-һоҡланып, йыр-ҙар сығаралар-

...Сәлимәкәй һыуга барған саҡта,
Ел бәхетле — һыйпай башынан.
Сәлимәкәй төндә йоҡларанда,
Ай бәхетле — убә ҡашынан...

Тирә-яҡта яҡшымы-яманмы «шәкерт Хисбулла», «Суфый Хисбулла» тип исеме таралырға өлгөргән был «уҡымышлы» егеттән яусы килеүҙе Сәлимәкәйҙен, ата-әсәһе үҙҙәренә ҙур хөрмәт күрһәтеү тип һананы. Әле бер кемде лә һөйөргә өлгөрмәгән, ләкин үҙен ниндәйҙер оло бәхеткә хаҡлы итеп тойған, үҙенә кейәү булаһы кешене ғәҙәттән тыш бер егет итеп күҙ алдына килтерергә, унын хаҡында төндәр йоҡламай зарығып хыялланырға өйрәнгән Сәлимәкәй ҙа: «Ул егет ошолор, моғайын»,—тип өмөт итеп, үҙен шәкерт Хисбуллаға биреүгә ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Ләкин ул яңылышты. Хисбуллаға барған кендән алып Сәлимәнен күңеле ситлектәге ҡош кеүек зарыға башланы. Йылдар уҙған, Сәлимә ҡатын булып өлгөрә барған һайын был зарығыу арттандан-арта ғына барҙы. Үҙе ир ҡуйынында, ә күнеле ситтә, билдәһеҙ эҙләнеүҙә булды унын.

«Нимә етмәй һуң уға? Хисбулла йыуаш, өнһөҙ-һүҙһеҙ. Арыу ғына хужалығы ла бар. Уҫал ҡәйнә исеме таралған Таиба әбей ҙә уны йәберләгәне юҡ. Киреһенсә, бөтә көсө менән һәйбәт булырға, өйөн, улын яраттырырға тырышып ҡына тора. Әхирәттәре, дуҫ-иштәре лә Сәлимәгә: «Бәхетле булдың, һәйбәт урынға төштөн»,— тип һоҡланып бөтә алмайҙар. Шулай булғас, тағы нимә етмәй һуң уға?.. Ҡыҙ кешегә ошонан да артыҡ ниндәй бәхет өмөт итергә мөмкин һуң?.. Ниңә, исмаһам, бала ла юҡ икән?.. Бала булһа, бәлки, уға әүрәп йөрәк баҫылыр ине...»

Сәлимәкәйҙең башында был уйҙар йыш ҡабатланалар. Ләкин ул йөрәге күптән инде ап-асыҡ итеп тойған был етмәгән нәмәне уйлауҙан, асыҡлауҙан сикһеҙ ҡурҡа. Уны нисек тә үҙ күнеленән юйып ташларға, иҫләмәҫкә, онотоpға тырыша. Тик был уй, ҡарышҡан шйкелле, унын. иркенән тыш, унан бер аҙым да, бер генә минут та ҡалмай эйәреп йөрөй.

«Был ул, ул!.. Мин көткәнден, мин теләгәнден тап үҙе шул! Мин уны ятатам, үлеп, өҙөлөп яратам... Ниңә ул мине түгел, бынауы итек башындай һары бисәне алған?.. Нинә уны мин элегерәк күрмәгәнмен?.. Эй, ғүмер, һин кешегә ошолай үкенес өсөн генә биреләһен. микән ни?..»

Сәлимәнең күңелендә был үкенесле лә, ҡурҡынıслы ла уйҙы тыуҙырған кеше — унын, ҡайнағаһы Хаммат батыр ине.

Хнсбулланан ике генә йәшкә өлкән булһа ла, әллә ҡасан нр етеп, ике бала атаһы булырға, бына тигән итеп донъя көтөп торорға өлгөргән шат, уйынсаҡ холоҡло, баһадир кәүҙәле, ут сәсеп торған бөркөт күҙле Хамматты тәү күреүҙә үк Сәлимә ҡойолоп төштө. Гүйә ул, сихырсы ҡарсыҡ шикелле, унын. аяҡ быуындарынын, хәлен, йөрәк итенен. иң ҡәҙерле бер өлөшөн өҙөп алып китте. Тора-бара ул Хамматтың үҙен күреү генә түгел, ҡайҙалыр яҡында ҡалын күкрәк тауышын ишетһә лә ҡаушап, юғалып ҡала торған булды. Үҙенең был тойғоһон белдереүҙән ҡурҡып, ул Хаммат осрағанда битен шәл йәки яулыҡ менән ҡаплап үтте. Уға күтәрелеп ҡарамаҫҡа, унын. менән һөйләшмәҫкә тырышты. Ләкиң Сәлимәнең шәл осон тоткан нәфис бармаҡтарының һиҙел-ер-һиҙелмәҫ кенә дерелдәүенә, ҡапыл бәрелгән ҡайнар ҡандан, былай ҙа һылыу йөҙө тағы ла һылыуланып, ҡарағусҡыл сейә кеүек булып янып китеүенә, шулай ук үҙ янынан Сәлимәнен. һәр ваҡыт үтә сабырһыҙ йүгереп үтеүенә, әллә ниҙә бер булһа ла бөтә тәненде көйҙөрөп алырлыҡ ҡайнар ҡараш ташлап ҡуйыуына ҡарап, зирәк, уяу тәбиғәтле Хаммат быларҙын бөтәһенә күптән төшөнөп өлгөргәйне инде. Ул хатта үҙ йөрәгендә лә быға са бер ҡасан да татылмаған ниндәйҙер ят, ләкин иҫ киткес татлы, яңы бер тойғо уяна башлауын, был тойғо хатта бөтә йәнен-тәнен биләп барыуын һиҙә. Ошо арҡала үҙе лә Сәлимәнен, юлында әйләнгән һайын осрап ҡына тора ине. Сәлимәкәй һыуға барғанда, ул ат эсерә килә. Сәлимә һыйырҙарға бесән һалыр өсөн лапаҫ башына менһә, ул тыҡрыҡтан һыбай елдереп үтеп китә, йәки һис тә көтмәгәндә:

— Әсәй, айран һыулап эсер әле. Киленең әллә ҡайҙа киткән,— тигән булып, ҡапыл аласыҡҡа килеп инә.

Сәлимә Хамматтың әсәһе менән һөйләшкән, айран эскән арала, үҙ яғына ярһыулы, шаян ҡараш ташлап алғанын тойоп, күп тапҡырҙар аптырап ҡала. Уға ҡарамаҫҡа, унын тауышын ишетмәҫкә, унын янынан ҡасып китергә тырыша. Аҙаҡ ни өсөн былай эшләүенә, ни өсөн яулыҡ аҫтынан ғына булһа ла уға туйғансы ҡарап тормауына үкенә.

Ошондай ғазаплы йәшерен хистәр менән янып ике-өс йыл ваҡыт үтеп китте. Сәлимә лә инде йәш киленлектән сығып, шәл беркәнмәй, битен ҡапламай йөрөй башланы. Бала килтермәй, ире өсөн борсолмай йәшәү арҡаһындамылыр, йәшерен һөйөү ғазабы ни тиклем ауыр булһа ла, Сәлимәкәй матурланғандан-матурлана, кәүҙәһе һаман зифалана барҙы. Ҡыҙ саҡтағы килбәтһеҙерәк ҡыланыштарҙан ҡотолоп, тура, ҡыйыу ҡарашлы, үткер ҡатын булып алды. Йөрәгенең бтөә ярһыулы зарын ҡаты эш менән баҫырға тырышты.

Ләкин йөрәктә ҡабынған ҡайнар мөхәббәт ялкыны һүрелмәне. Киреһенсә, йылдар үткән һайын киҫкенләшә, ҡыйыулана, бәйҙән ысҡынырға теләп ашҡына ғына барҙы. Хаммат та үҙ йөрәгендә Сәлимәнең һаман нығыраҡ урын ала баоыуын көндән-көн асығыраҡ тойҙо. Тик был хистәрҙең ҡасан, нисек тышҡа бәреп сығасағын ғына белгән кеше юҡ ине.

Шулай йөрөй торғас, ул бер көндө, һис тә көтөлмәгәнсә хәл ителеп тә ҡуйҙы. Ҡыҙыу бесән өҫтө ине. Таиба әбейҙең • уландары бөтә ғаилә менән сығып, Оло Эйек туғайлығында ҡуна ятып бесән эшләйҙәр. Бесән бик шәп үҫкән йыл ине был. Сабынлыҡ эсенә хатта ат инеп китһә лә күренмәй. Бер көн, -: энер тешөр алдынан Хамматтар ҙа, Хисбуллалар ҙа йәнәш -б-Ч-"кенә сабынлыҡта кәбән һалдылар. Хаммат был көн айырата •&* ярһып эшләне. Кеше көсө еткеһеҙ ауыр өс саталы ағас һәнәк •"' менән күбәләрҙе тотошлай сәнсеп алып, йән кеүек енел итеп, кәбәнгә ырғытып ҡына торҙо. Унын ырғытыуына кәбән башында ике кеше тороп көскә елгөрә ине. Үҙҙәренең кәбән башында торған Сәлимәкәй Хамматтың эшенә ҡарай ҙа бесәнде мендәрҙәй генә итеп сәнсеп алып килбәтһеҙ генә ырғытып торған үҙ иренә эсе боша:

«Бер туғандар... Ә ер менән күк араһы кеүек айырма? Нинә былай? Эй алла, Хисбулланы һин минең бәхетһеҙлегем өсөн генә ошолай итеп яратҡанһындыр инде...»

Сәлимәкәй Хамматтың кәбән башында орсоҡ кеүек өйрөлөп торған кескәй, арыҡ кәүҙәле, ләкин ғәжәп ҙур бәхет менән балҡыған яҡты күҙле ҡатыны Өммөгөлсөм яғына ла аратирә көнселөклө ҡараш ташлап ала:

«Алманың аҫылын ҡорт ашай»,— тип белмәй әйтмәгәндәр шул. Йә, ошо итек башындай бисә Хамматҡа тинме һун. инде?!»

Былдай уйҙар унын. башына беренсе тапҡыр ғына килмәйҙәр, әлбиттә. Ә Хисбуллаға ҡатын булып килгән, Хамматты тәү тапҡыр осраткан көндән бирле еҙлекһеҙ борсойҙар уны. Ләкин был тойғо бөгөн айырата асыҡ, түҙеп торғоһоҙ киҫкен булып тотош йөрәген биләп алды унын,- Хамматтың бер генә хәрәкәте лә, бер генә ҡыланышы ла унын күҙенә сағылмай ҡалманы. Ул хатта тиргә ҡушылып, Хамматтың текә маңлайына, баһадирҙарса кин,, көслө күкрәгенә йәбешкән бесән кәбәктәренән дә көнләште бөгөн.

«Ниңә мин дә шул хуш еҫле, йәшел япраҡ остоҡтарының береһе түгелмен икән, исмаһам...»

Ул бегөн ошо тойғолар аҫтында бик тарҡау эшләне. Хисбулланын. сәрпәкләп ырғытҡан бесәндәрен дә тотоп ҡала алмай тешөргөләп ебәрҙе. Хисбулла, ғәҙәтенсә, ауыҙ эсенән генә мөңгөрәп әрләне:

— Быға нимә булған? Нимәгә аңшайып тора, ғибрәт!..

Хаммат алыҫтан һөрәнләне:

— Эй, килен, туҡта, кәбән һалырға һине мин үҙем өйрә-

тәйем әле, Еңгән кеүек орсоҡтай өйрөлөп тормаһан; ҡара*..

Унын. да ҡулдары эштә булһа ла, күҙҙәре Сәлимәкәй менән Хисбулланың бер генә хәрәкәтен дә яҙа ебәрмәй ине.

Хисбулла кәбәнде яртыламағайны әле. Шулай ҙа килбәтһеҙлек арҡаһында ла, Сәлимәкәйҙең үҙенә генә түгел, эшкә лә һаман иғтибарһыҙырак була барыуына үҙенсә янып-көйөп тә, бишләтә арып, арманһыҙ булып бөткәйне инде. Уны был ауыр хәлдән ағаһы килеп ҡотҡарҙы.

Хаммат үҙ кәбәнен пыр туҙҙырып һалып бөттө лә, ике ҡулды бөйөргә таянып, кин. баҫып, Хисбуллалар янына килеп туҡтаны. Ул ҡарап торғас, Хисбулла менән Сәлимәкәйҙең эше тағы ла сығырынан еығып китте. Хисбулла бесәнде ҡырын ырғытты, Сәлимә яҙа һелтәнеп ҡалды. Хаммат быны күреп, ысын күңелдән ҡысҡырып көлдө лә Хисбулланың ҡулынан һәнәкте тартып алды.

— Эй мырҙам, мырҙам. Әсәйем һине — «аҫау егет» була торған кешене — мәҙрәсәгә биреп, «абау, байғош!» итте лә алды шул. Йә, булмаһа һин, минең атты егеп, һәнәк-тырмаларҙы тейә лә енгәнде Зәлифә сауҡаһындағы сабынлыҡҡа күсерә тор. Ә мин һинең кәбәнде ослап ҡуяйым,— тине. Унан бойороу тауышы менән:

— Еңгәң сәй ҡайната торһон. Ашанып алғас, ай яҡтыһында тағы бер аҙ эшләп ташларбыҙ,— тнп өҫтәне. Хисбулла, анһат эшкә күсеүенә ҡыуанып:

— Ярар, ағай,— тип, тынлаусан бала һымаҡ иркә баҫып, китеп тә барҙы.

— Йә, килен,— тине Хаммат, юғарыға шаян ҡараш ташлап.— Абай бул!..

Үҙе шул ыңғайға бер күбәне тотош күтәреп кәбән өҫтөнә ырғытып та ебәрҙе. Сәлимәкәй уны осоп килгән ынғайға тимер һәнәк менән кәйелтеп тотоп алып, аяҡ аҫтына һалып тапаны.

— Аһа, ҡара һин уны, шаянды!.. Булдыраһың да баһа!..— тип ҡуйҙы Хаммат. Унан бесәнде тағы ла ҙурыраҡ еәнсеп алып ырғытты. Сәлимә быныһын да кәйелтә тотоп алып, тейешле урынға һалып өлгөрҙө. Бынан һун күбә артынан күбә бал ҡорто шикелле маҙаһыҙлап, кәбән өҫтөнә ябырылып ҡына торҙо. Сәлимәкәй, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡанатлы ҡош кеүек осоноп, кәбән өҫтөндә бейеп кенә торҙо. Хаммат бесәнде ни хәтле йылдам ырғытһа, ул шул хәтле уны етеҙерәк эләктереп алып, кәрәк урынға һалып тапай барҙы. Гүйә ниндәйҙер иҫ киткес серле көс унын өсөн эшләй, уның өсөн осона-ҡағына кәбән өҫтөндә зыр әйләнеп йөрөй ине хәҙер.

Кәбән һалынып та бөттө. Сәлимәкәй был киң күкрәкле, бейек кәбәндең иң осонда кескәй генә нөктә булып тороп ҡалдьъ Байып барған ҡояштың таятын иурҙары уның оҙон кер* пектәренә килеп ялғанды. Энерге еләҫ елдәр унын, зифа тәненә һылашҡан йоҡа күк күлдәген, башындағы ал кешмир яулығын ҡаҡҡылап-тарткылап шаярҙы. Әйтерһең дә, ҡапыл уйсанланып ҡояшҡа текләп тынып ҡалған Сәлимәкәйҙе уятырға, иҫенә, аҡылына килтерергә тырышты. Ә Сәлимәкәйҙен. уйҙары тәрән, моңһоу, һағышлы ине. Билбау кеүек ҡара болот менән билдәшләнеп, ғәжәп ҙур ҡанлы шар булып, тау түбәһенә төшөп яткан ҡояшҡа текләп, ниңә был кәбән һалыуҙын. шул тиклем тиҙ бөтөүе, бәхетле минуттарҙын ни өсен шулай һиҙелмәй үтеүе тураһында үкенеп уйлана ине ул. Уның был уйын бүлеп, түбәндә Хамматтын, күкрәк тауышы янғыраны:

— Килен, төш!

Сәлимәкәй тертләп китте. Күҙен ҡояштан ергә күсерҙе. Унда, түбәндә, кәбән янында, ҡосағын кин. йәйеп, ниндәйҙер ярһыу сер тулған һөйкөмлө ҡарашын уға төбәп, Хаммат баҫып тора ине. Сәлимәнен. башы әйләнеп киткән кеүек булды. Ярһыуҙан тауышын көскә сығарып:

— Арҡан ташла, ҡайнаға...— тип шыбырланы.

Хаммат, мут йылмайып:

— Арҡан юҡ. Тапманым. Шул көйө генә шыуып төш. Ҡурҡма, үҙем тотоп алырмын,— тип яуап бирҙе.

Сәлимәкәй кәбәндән бер-ике аҙым ситтә, арба янында яткан арҡанды күрһә лә, Хамматтыц да уны күреп тороуына шиге булмаһа ла, өндәшмәне. Был минутта йөрәген тағы ла ҡатыраҡ тулҡындырып ебәргән ярһыу шатлыҡтан иҫереп, шинғырлатып бер көлдө лә, йығылып имгәнеү ҡурҡынысын да онотоп, кәбәнден икенсе яғынан түбәнгә ташланды. Ләкин Хаммат та ул яҡҡа сығып өлгөрҙө, килененен. аяҡтарын ергә тейҙермәй күтәреп тә алды. Сәлимәкәй ҡапыл үҙенен, ҡабырғалары шытырлап ҡыҫылып китеүен, Хамматтын ҡайнар тыны үҙенең битенә бәрелеүен, үҙ йөрәге янында икенсе бер ҙур йөрәктен сабырһыҙ дөпөлдәп тибеүен тойҙо. Унын. тыны быуылып, күҙ алдары ҡараңғыланып киткән һымаҡ булды.

Хаммат киленен ҡосағынан ысҡындыра алмай, тағы б€р аҙ күтәреп тора бирҙе лә иплəп кенә ергә баҫтырҙы.

— Эй килен, килен, улай ташланып, башты юғалтып ҡуйырға ла була бит...

— Юғалһа ла үкенесе юҡ...— тип шыбырланы Сәлимә. Ә күңеленән: «Башымды һинен, күкрәгенә бер генә тапҡыр терәр өсөн мин айҙан йығылып төшергә лә риза булыр инем...» — тип уйланы. Хаммат та, уның был уйын анлаған кеүек, нисектер, айырыуса серле итеп:

— Эйе, шулай...— тип дөрөҫләне. ;Л: >г ; • •?>-ҡ^ : ..: м

Бынан ары улар ошо минутта үҙ йәрәктәрен айырата нык солғап алған һәм үҙенең ҡотолғоһоҙлоғо менән ҡурҡыткан яңы, ят, ләкин иҫ киткес татлы бер тойғо алдында еңелеп, бер аҙға һүҙһеҙ тынып ҡалдылар.

... Малай ғына сағынан әеәһе көсләп өйләндергән Хамматтың да, белмәй-күрмәй Хисбуллаға барған Сәлимәнең дә тәүге мөхәббәт тойғоһо ине был. Улар быға са уны нисек тә белмәмешкә, күрмәмешкә һалыштылар. Аңламаҫҡа тырыштылар. «Үтеп китер»,— тип өмөт иттеләр. Ләкин мөхәббәт ҡош түгел, уны ситлеккә бикләп тотоп булмай икән. Бына ул тәүге, кескәй генә бер мөмкинлек тыуғас та, бөтә булған яһалма кәртәләрҙе ватып-емереп, тышҡа бәреп тә сыкты. Инде уны тотоп, томалап ҡалырлыҡ донъяла бер ниндәй ҙә кес юҡ ине.

«...Шулай булғас, һаман һуҙып, йәшеренеп маташыуҙың кәрәге бармы һун?.. Юҡ, юҡ! Мөмкин түгел!» — тип ҡабатланы уларҙың йөрәге.

Инде аҡыл көсөн еңеп, тау шишмәһе шикелле урғып килеп сыҡҡан көслө һөйөү тойғоһо менән иҫергән Хаммат, керпектәрен түбән төшөрөп, ҡайнағаһы янынан тиҙерәк ситкә ҡасырға кәрәклеген онотоп, ҡатып ҡалған Сәлимәнең ҡулынан ҡыҫып тотоп үҙенә табан тартты.

— Килен!.. Килен, тим! Мин бит һине яратам. Биллаһиваллаһи, яратам. Үлеп яратам!.. Күптән бирле яратам!..

Сәлимә бер үк ваҡытта иҫ киткес һөйөү, һөйәлөүҙе лә, ҡото алынып ҡурҡыуҙы ла анлатҡан ҡараш менән уға күтәрелеп ҡараны ла, аяҡ быуындары йомшарып, кәбәнгә һөйәлде. Уның ҡапыл төҫө ҡасып киткән ирендәре, ирекһеҙҙән:

— Мин дә... Я хоҙай, мин дә...— тип ҡабатлай ине.

Хаммат, үҙ-үҙен онотоп, киленен ҡабаттан ҡосағына ҡыҫып алды. Иренгә ирен ҡушылды. Донъя юҡка сыкты. Ҡайнар мөхәббәттән сарсаған ике йөрәктән башҡа бер нәмә лә йәшәмәй ине хәҙер ерҙә. Тик Хисбулланың, кәртәгә бото ҡыҫылған кәзәләй тазылдап:

— Талаҡ! Талаҡ! Талаҡ! — тип ҡысҡырған тауышы ғына уларҙы был татлы онотолоуҙан тартып сығарҙы. Эйе, Хисбулла был ваҡытта еңгәһен яңы сабынлыкка илтеп, үҙ кәбәне янына кире әйләнеп килеп еткәйне.

Мәсьәлә уйламағанса еңел хәл ителде. Хисбулла, ҡыҙыулыҡ менән өс тапҡыр «талаҡ» тип ҡысҡырғас, шәриғәт законы буйынса, Сәлимәкәйҙе ҡатынлыҡ вазифаһынан ҡотҡарғанын белмәй ҙә ҡалды. Уға хәҙер, ҡайтанан Сәлимәнең ире булыр өсөн, шул уҡ шәриғәт законы буйынса, уны бер кискә икенсе иргә никахлап биреп торорға ла, унан айырып, үҙенә кире никахлап алырға кәрәк ине.



Хисбулла, үҙенен. яңылышыуына шунда уҡ төһшнөп

— Йә, ярар инде, ағай, һеҙҙең тарафтан да, минен, тараф тан да бер хаталыҡ эшләнгән икән, тыныс ҡына бөтөрәйек Ьин киленецде бер кискә никахлап ал да айыр. Мин ҡабаттан киках укытып, хәләл ефет итеп алырмын,— тип эште төҙәтергә булды. Хаммат, әлбиттә, киленен никахлап алды, ләкин айырманы. Улар айырылыр өсөн табышмағайнылар бит

Тап бына ошо көндән һун бер йыл үткәс, Хаммат менән Сәлимә ваҡиғаһы ауылда шаулап тынғас, Таиба әбей Хисбуллаға Бибеште алып бирҙе.

## II

Аҙна-ун көндәр буйы өҙләкһеҙ һибәләп торған йонсотҡос ямғырҙан ер генә түгел, өйҙәр, кәртә-ҡураларға хәтле бурһып, шешенеп бөттө. Нисә көндәр инде бер генә тапҡыр ҙа ер өҫтөнә ҡояш һирпелеп ҡарағаны юҡ. Күрәһен, ул да бүртенгән, һоро йүргәкле күҙҙән биҙеп, ҡайҙалыр тауҙар артында ҡасып йөрөй. Күҙгә күк ергә емерелеп төшә яҙып эйелгән дә, ирен илап ышандырырға өйрәнгән хәйләкәр ҡатын шикелле, һаман шулай бер өҙләкһеҙ шәмәрә лә шәмәрә. һуцлап яуған ямғырға эләгеп, бик мул булмаһа ла, баш биргән тары, борсаҡ, ҡарабойҙай көлтәләрен кинәнеп серетә. Тәбиғәт илгә аслыҡ килтереү юлында яҙҙан башлаған рәхимһеҙ эшен бына шулай дауам итә. Бөтә әйләнәне баҫып алған ҡалын һоро болоттарҙы башҡа ваҡыттарҙағы шикелле ел дә ҡаҡкылап-һуҡкылап таратмай, исмаһам. Ул да ахыры ҡояшлыраҡ, күнеллерәк ерҙәрҙә шаярып йөрөй. Бында тик шәмәргән күк тә бот төбөнән батҡаҡ ҡына хөкөм һөрә. Ошо арҡала Бибештең һағышы ла, ғазабы ла был арала икеләтә артып китте һәр көн бата-сума Энеккә биш-алты тапҡыр һыуға барыу, мал-тыуар ҡарау, өс-дүрт һыйырҙы иртә-кис һауып, тәрбиәләп тороу, ҡатыҡ ойотоу, эркет ҡайнатыу, ҡорот яһау кеүек иҫәпһеҙ-һанһыҙ өй эштәре бөтәһе лә унын еҫтөндә хәҙер. Етмәһә, аҙна һайын бейеме менән ирен мунса яғып индерергә, өҫ-баштарын йыуырға, ямарға ла кәрәк. һәр көн бер төрлө ҡабатланып торған ошондай эштәр, өҫтәүенә, унын, йөрәген, үҙенен, генә түгел, кескәй һенлеләренен яҙмышы ла туктауһыҙ өйкәп кенә тора. Бибештен уйҙары һаман өмөтһөҙөрәк, ҡараңғыраҡ була бара. Уға хатта күҙге болотло күк түгел, ә унын. һағышы шулай донъяны ҡараңғылап торалыр кеүек тойолоп китә. Үҙ күнеленең шулай бойоҡ булған сағында әйләнә-тирәлә ҡояш балҡып тороуы һис тә тәбиғи булмаҫ һымаҡ та күренә башлай.

Шундай үтә.күделһеҙ көндәрҙен.берейһендә ;өйҙә Бибеш кенә тороп ҡалды. Хисбулла ямғыр серетеп бөтөп барған ҡарабойҙайҙы әүенгә һалып, елләтеп буямаҫмы тип, таң-иртәнән тороп баҫыуға китте. Әсәһе уға:

— Янғыҙыңа ауыр була бит, киленде лә алып бар,— тип ҡараһа ла:

— Ярар, әсәй, ыриҙыуан нәмәнен осона-башьша үҙем дә сығырмын әле,— тип Бибеште өйҙә ҡалдырып китте. Таиба өбей уны:

— һай, алйот! һин бисәне йәлләп шаштырырға шәп инде. Шулай итеп быныһынан да ҡолаҡ ҡағырһың әле. Бисә һин йәлләгәнден, ҡәҙерен беләме ни ул! Ахмаҡ! — тип әрләп ҡалды һәм улының артынса уҡ урамға сығып китте. ^ны бөгөн Сәрбиямал сәйгә саҡырғайны. Килен йомшап өйрәнгән Таиба әбей, ғәҙәтенсә, ҡапҡа төбөнә барып еткәс тә, бер-ике ҡат боролоп килеп:

— Килен, мин кисһеҙ ҡайтмам. Бүтән ерҙәргә лә сәйгә саҡырылғанмын. Өйҙө яҡшы ҡара. Килен, ҡул ҡаушырып тик ултыраһы булма, эш тулып ята. Эшлә. Килен, ялҡауыңа , һалышып ултырма, тим, ишетәһенме? — тип ҡат-ҡат киҫәтеп китте.

Бибеш тынлауын белдереп өнһөҙ-һүҙһеҙ генә баш ҡағыа торҙо.

Таиба әбей, ғәҙәт буйынса, өлкән улдарын башҡа айырып сығарып, төп йортта кинйә улы менән тороп ҡалырға тейешле булһа ла, Закиры йүнһеҙ булып сыҡкас, Хисбулланы айырып сығарманы. Үҙенен ғүмер буйы тырышып йыйған малын, көткән донъяһын Хисбуллаға биреп, уны төп йортҡа хужа итеп ҡалдырҙы. Әлбиттә, был әлегә һүҙҙә генә шулай. Асылда, бында ирке сикләнмәгән төп хужа һаман ул үҙе генә. Унан уҙып Хисбулла менән Бибеш бер генә ҡаҙыҡ та ҡаға, бармаҡ буйы сыбыҡ та һындыра алмайҙар был йортта. Хәйер, Таиба әбей бында, үҙ өйөндә генә түгел, хатта башҡа айырып сығарған килене менән улы өҫтөнән дә үҙенен, хужалығын һаҡлап ҡалырға тырыша әле. Уларҙың үҙенән кәңәшһеҙ бер генә эш тә эшләмәүҙәрен талап итә. Шулай ҙа Хамматҡа ҡарата бындай талапты тормошҡа ашырыу еңел булмағас, бигерәк тә Сәлимәгә бәйләнешле мәсьәләләрҙә Хаммат бвтөнләй бер кемден һүҙе, уйы, фекере менән дә иҫәпләшеп торорға теләмәүен асыҡ күрһәткәс, Таиба әбей Хисбулла менән Бибеште улай ҡулдан ысҡындырып ебәрмәҫкә булды. Үҙен Сәлимәгә ныҡ булмауҙа, уны артыҡ йомшаҡ тотоуҙа, шул арҡала уға йөҙгә юйылмаҫлыҡ оят килтерерлек эштәр эшләргә юл ҡуйыуҙа ғәйепләне. Бынан ары аҡыллы буласағын, Бибеште ҡаты тотдсағын һүҙҙә генә түгел, ғәмәлдә лә^



күрһәтергә тырышты. Был туралз= уға осраған бер ерҙә Сәрбиямал да тукып ҡына торҙо.

— һин уны, Таиба еңгә, ҡоро тот. Штобы шаштырма. Өйҙән сығарып, беҙгә лә ебәреп йөрөтмә. Баштан шулай ҡоро тормаһан,, аҙаҡ баш бирмәҫ. Харап уҫал нәҫел бит улар,— тип отконо ул. Ошо арҡала аталары Сәрбиямалдың йортона күсеп килгәнгә өсөнсө ай китһә лә, Бибеш уларҙа бер генә тапҡыр була алды. Унда ла бейеме, ире менән бергә генә. Үҙ өйөнә, үҙ ауылына кире ҡайтыу шатлығынан Сәрбиямал уларҙы бер талҡыр ҡунаҡка саҡырып алғайны. Бибешкә ул көндө үҙенец күҙенә ситтән генә мөлдөрәшеп ҡарап торған Һенлеләрен һөйөргә, бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшергә лә мөмкинлек бирмәнеләр. Өлкәндәр менән бер табынға ултыртып ҡунаҡ иттеләр ҙә ҡайтарып та ебәрҙеләр. Сәрбиямал, исмаһам: «Бибеш берәй көнгә ҡалып торһон, туғандарын күрһен»,— тип тә әйтмәне. Таиба әбей ҙә был турала хәтерләмәне. Бынан һуң Емеште етәкләп Йәнеш бер-ике килеп ҡараһа ла, Бибеш ҡәйнәһенен. күҙ ҡарашынан ҡуркып, уларға бер-ике ауыҙ һүҙ өндәшергә лә ҡыймады. Ә инде хәҙер, кеҙ еткәс, еҫ-баш, аяҡ кейеме булмаған бала-саға, алдағы яҙға хәтле ирекһеҙҙән өйгә бикләнгәс, Бибешкә һеңлеләрен хатта ситтән генә лә күрергә тура килмәй ине. «Ни хәлдә генә йәшәй икән ул бахырҙар?..» — тип монайып уйланыуҙан башҡа бер ни ҙә эшләй алмай ине ул.

Әле лә ул ялан кеүек иркен, ҙур өйҙә япа-яңғыҙ тороп ҡал-'ғас, битен ямғыр тамсылары менән сыбарланған тәҙрә быялаһына терәп, оҙаҡ-оҙаҡ ошо хаҡта уйланып торҙо. Унын. күҙ йәштәре лә ямғыр тамсыларынан ҡалышмаҫка теләгән һымаҡ мул булып тулышып аҡтылар. Ахыр уйлап-илап күНелен бар аҙ бушатҡас, ниндәйҙер өмөтһөҙ ярһыулыҡ менән ул өй йыйыштырырға керешеп китте. Ҡасандыр Сәлимә был кин, иркен буш өйгә лә, йыуаш, килбәтһеҙ Хисбуллаға ла, ҡаты бәғерле ҡәйнәгә лә ылығырға, яратмаған хәлдә лә өйрәнергә, эйәләшергә теләп, ихласлап донъя көтөп йөрөгән сағында, һап-һары итеп ҡырып йыуған стеналарға хәҙер туҙан ултыра башлаған. Себен, тараҡан, үрмәксе эҙҙәре лә күренгеләй. Иҙән таҡталары ла буҙара биреп тора. Ғәҙәттә, бында көҙ көнө, өйҙө тотош йыуҙырып алыр өсөн, ҡыҙҙарға, йәш килендәргә өмә итәләр. Улар уйнай-көлә, йырлай-бейей генә эшләп, өйҙө яңы ғына яһалған йәшник кеүек һап-һары итеп ҡырып йыуып, янăыртып сығып китәләр.

Таиба әбей ҙә ошо арала өмә итеп өйҙәрҙе йыуҙырырға әҙерлзнә. «Ниңә өмәне көтөргә? Үҙем генә йыуып алайым... Йыуып бөтә алырмынмы икан?.. Бөтмәй ни, ул тиклем кертәнгән өй түгел дә баһа.Ысынлап та, бынау бер яғын, ҙур яғын, ғына йыуып ташлайым, исмаһам...>^ . .

Бибеш шулай уйланып тора бирҙе лә яңғыҙ үҙе эшкә тотоноп та китте. Ҡаҙан-ҡаҙан һелтеле һыу әҫәтеп, өҫтәл өҫтөнә ултырғыстар ҡуйып баҫып, ин. элек түбә таҡтаһын йыуып төшөрҙө. Стеналарҙы, урындыҡ, иҙән таҡталарын бысаҡ менән ҡырып йыуҙы. Өй эсе яңырып, тын алырға иркен, рәхәт булып китте. Гүйә өҫтән баҫып торған ниндәйҙер ауыр, ҡараңғы йөк алып ташланды.

Эш оҙаҡҡа һуҙылды. Өйҙө йыуып, ишек алдарын һепереп бөтөүгә ире менән бейеме лә, көтөү ҙә ҡайтты. Һыйыр һауыу, киске тамаҡҡа әҙерләү ваҡыты килеп етте. Бибеш ни хәтле тырышһа ла ҡалған көндәлек эштәрҙе ғәҙәттәге етеҙлек менән эшләй алманы. Уның ҡул-аяғы талып, эштән туктар хәлгә килде. Таиба әбей уны бөгөн эшкинмәгәнлектә лә, һыйырҙың имсәгендә һөт ҡалдырып һауыуҙа ла, ире эштән ҡайтҡансы тамаҡҡа әҙерләмәй торған ялҡау ҡатын булыуҙа ла ғәйепләне.

— Эш, аш күрмәгән ярлы-етемдән нимә өмөт итмәк кәрәк? — тип зарланды. Йыуып, яңыртып ҡуйған өйҙө гүйә күрмәне лә, белмәне лә. Киреһенсә:

— Бысаҡ менән яман ҡырып, иҙәнде, стенаны йоҡартып, үҙәк-мүҙәген сығарып бөткәнһен дә баһа, алйот! — тип битәрләне генә. Ул, Сәрбиямал менән осрашһа, һәр саҡ шулай, Бибешкә ҡарата айырата уҫалланып ҡайта ине.

Был көндөц иртәгеһенә Бибеш көндәге ваҡытта уяныр, һыйыр һауырға сыға алманы. Көсөнән тыш ҡаты эштән һыныҡкан йәш тән еңә алмаҫлыҡ ҡаты йоҡо эсенә инеп сумғайны. Таиба әбей килене уянһын өсөн урындыкты шағыр-шоғор килтереп, ары әйләнеп, бире әйләнеп тә, тамаҡ ҡырғылап та ҡараны. Бибеш уянманы. Ахыр ул үҙе тороп, дөп-дөп баҫып тышҡа сығып китте лә һыйырҙарға быҙауҙарын ҡушып инеп ятты. Бибеш һуңлап булһа ла уянып, күнәген күтәреп аҙбарға сыҡканда, быҙауҙар инәләрен имеп бөтөп, эстәре күбеп тарбайып баҫып торалар. Ҡайһы берҙәре ҡойроҡто сәнсеп, ялан кәртәлә ырғып-һикереп уйнап йөрөйҙәр ине. Бибеш ғәйепле башын түбән эйеп, буш күнәк тотҡан килеш өйгә ҡайтып ингәндә, Таиба әбей, ҡайһы аралалыр тороп кейенергә өлгөргән Хисбулланың танау алдында ҡайыш ҡамсы уйнатып, мейес кеүек кирелеп, иҙән уртаһында баҫып тора ине.

— Былай булһа, һеҙ мине йә тигәнсе бөлдереп бөтөрөрһөгөҙ! Дүрт һыйырҙы бер юлы имеҙгән бит, имгәк! Ни хәтле һеттө әрәм иткән! Ир булһан,, һин бына ошо ҡайыш ҡамсыны ал ла бисәңде туҡма! Икенсеәй йоҡлап ятмаҫлыҡ итеп өйрәт! Ишетәһеңме? Мин ни тим? Мин кемгә әйтәм? Мә ҡамсы, тиҙ бул!..



Бибеш ҡурҡышынан ҡулындағы буш күнәген шалтыратып иҙәнгә төшөрөп ебәрҙе. Унан тағы ла ныгыраҡ ҡаушап, йомран кеүек йомарланып, мейес артына һыйынды.

«Эй хоҙайым, нимә генә эшләйем икән?!»

Таиба әбей тауышын күтәрмәй генә һаман ныҡышты:

— Туҡма, тим, өйрәт, тим, ишетәһеңме!

Йән биҙҙергес меҫкен, баш эймәкле төҫ менән үҙенең аяҡ осона текләп тик кенә торған Хисбулла ҡото осоп мейес артына боҫҡан Бибеш яғына ҡыйыуһыҙ ғына ҡарап алды ла йомшаҡ, баҫалҡы тауыш менән:

— Ҡуйсәле, әсәй, кешене туҡмай алмайым да мин. Теләһән, әйҙә, үҙен. генә мине туҡма ла ҡуй, йәме,— тине.

Таиба әбейгә йәш бала кеүек ҡурҡып мейес артына йәшенгән Бибеш ҡыҙғаныс, ә Хисбулланың ебегән ҡыланышы йән көйҙергөс тә, мәҙәк тә тойолдо. Ләкин ул йомшаҡлыҡ күрһәтеп, эште боҙоуҙан ҡурҡып, Хисбуллаһын ҡамсы менән уңлы-һуллы һуҡҡыларға кереште.

— Һай, ахмаҡ, алйот! Бына ни өсөн бисә яратмай бит һине, бына ни өсөн!.. Туҡмап тотмағас, бисә әҙәмгә һанаймы ни ул! — тип таҡмаҡлай-таҡмаҡлай ҡамсыланы ул.

Һуғышыу-туҡмашыу түгел, ҡаты һүҙ әйтешеүҙе лә күрмәй үҫкән Бибеш ҡурҡышынан да, ебегән Хисбуллаға ҡарата йөрәгендә айырата киҫкен булып уянған йән биҙәү тойғоһонан да тыны быуылып тышҡа ташланды. Үҙ-үҙен онотоп, ҡайҙа барғанын, ни эшләгәнен белмәй, ялан кәртәгә барып инде. Унан артҡы ҡапҡа үтә баҡсаға сығып, күптән түгел картуфы ҡаҙып алынған, инде ҡара батҡаҡҡа әйләнеп ятҡан көпшәк ер аша бата-сума алға йүгерҙе. Ихатанын. Үле Эйеккә барып тоташҡан еренә, «йортто тел-теш тейеүҙән һаҡлау өсөн» ҡороған ат башы һейәге эленгән ҡаҙыҡ тәңгәленә еткәс, артабан ни эшләргә белмәй туҡтап ҡалды. Башын ҡаҙыҡҡа терәп, аптырап тирә-яҡҡа ҡараны. Күҙҙәренән бер өҙлөкһөҙ ҡайнар йәш түгелде.

«Ҡасырға, тормаҫҡа ине бында... Бер минут та, бер секунд та тормаҫҡа ине... Эй-й, ҡайҙа ҡаса, кемдән ярҙам көтә алам һуң мин?!» тип ҡабатланы йөрәге.

Ҡара ҡурғаш кеүек ауыр минуттар күкрәкте ҡыҫты. Бибештен. хәҙер ҡуҙғалыр ҙа хәле юҡ ине. Тап бына шул саҡта кемдер йомшаҡ ҡына итеп унын, башынан һыйпаны.

— Ниңә илайһың, һылыу?..— тип һораны.— Илама. Ярамай,— тине.

Бибеш, әсәләрсә яғымлы тауыш менән әйтелгән был һүҙгә аптырап, күтәрелеп ҡараны. Унын. алдында зифа буйлы, иҫ киткес яҡты ҡарашлы, һылыу бер йәш ҡатын тора. Үҙе ғәжәп һөйкөмлө йылмайып:

— Илама, һылыу, үҫерһен, төшөнөрһөн, ҡотолорһоң...—

Ә хәҙер тәҙ, йәме, илама.. Аңлайһыңмъ!, бирешюә*. Уҫал бул! — тип ҡабатлай ине.

Бибеш, йәшле күҙҙәрен уға төбәп, хәлһеҙ тауыш менән:

— Һин кем? Нимә һейләйһен. Һин, апай? — тип һораны.

— Минме?..-- тип ҡабатлап һораны теге һылыу ҡатын.— Мине танымайһыцмы ни әле һин?.. Ишетмәнен. дәме ни әле? Эй, бисара!.. Бисара!..

Бибеш унын тауышынан ниндәйҙер йәшерен һағыш та бөркөлгән кеүек тойҙо. Был уны тағы ла ныҒыраҡ аптыра-г-ты. -.-•}

— «Кем һун, был апай?.. Үҙе шат та... Үҙе ҡайғылы^ла.) Үҙе бәхетле лэ, бәхетһеҙ ҙә кеүек...» ' •"

Унын был һорауына Үле Эйек яры буйынан ҡысҡырған ҡалын ир тауышы яуап бирҙе:

— Сәлимәкәй, һин ҡайҙа?. Ҡайҙа йүгерҙец?

— Йә, хуш. Уҫал бул. Ебемә! — тине теге матур ҡатын, Бибешкә тағы бер ҡат баштан-аяҡ ҡарап. Унан:

— Мин бында, Хаммат! Инде юғалтты ла! — тип, иркә көлөп, ире яғына йүгерҙе.

«Бына ул ниндәй икән Сәлимәкәй!.. Ҡалай матур!..»— тип, үҙ ҡайғыһын онотоп, аптырап тороп ҡалды Бибеш.— «Уҫал бул, ебемә,— тинеме әле? Был ни тигән һүҙе булды унын.?!»

Хисбулла Бибеште алып ҡайтҡан саҡта Хамматтар ауылда түгел ине. Улар эш эҙләп сығып киткәйнеләр. Ауылда тик улар хаҡында:

«Дингә, йолаға һыймаҫ эш эшләгән аҙғын кешеләр» йәки «Йосоп менән Зөләйха кеүек һөйөшөп ҡауышҡан бәхетле кешеләр» тигән һымаҡ һүҙҙәр генә йөрөй Быларға ҡараги Бибеш Сәлимәне берсә юйылмаҫ ауыр гонаһ эшләгән яман, аҙғын ҡатын, берсә иҫ киткес бәхетле итеп күҙ алдына килтерҙе. Уны тиҙерәк үҙ күҙҙәре менән күреп белергә ашҡынды. Ә инде хәҙер бына уны осратҡас, берҙән, унык үҙе кеүек бик ябай ҡатын булыуына, икенсенән, унын. күҙҙәрендәге шаян, ғорур йылмайыуына ниндәйҙер моң ҡатышыуына, хатта унын тауышында ла ошо мондоң сағылыуына аптыраны:

«Былай булғас, ул да бәхетле түгелме икән әллә?.. Ин бәхетле тигәндәрҙең дә моңланыр урыны бармы икән әллә?..»

«Үҫерһең... Төшөнөрһөн,... Ҡотолорһон. Ә хәҙергә түҙ. Бирешмә!» — тине бит әле ул... «Бирешмә.. Ебемә... Әсәйем мәрхүм дә шулай тип әйтергә ярата ине шикелле?..»

Бибеш турайып баҫты. Битен йыуып ағып төшкән ҡайнар күҙ йәштәрен шәл осо менән ҡат-ҡат һөртөп ҡоротто.

— Эйе шул. Бирешмәҫкә кәрәк шул,— тип өҙөп, ҡысҡырып ук әйтеп алды. «Бейем айыу түгел Ашамаҫ әле»,— тигән уй меиәи ҡыйыу, баҙык атлап, өй яғына үтте.



фı :·Сәлимәкәйҙе нккахлап:.алғас,:Хаммат бөтә хужаяығын элекке ҡатыны Әммөгелсөмгә ташлап сыҡты ла өр-янынан дрнъя көтөргә кереште. Таиба әбей үҙенен иң һәйбәт шәкерт улын хур иткән был боҙоҡ ҡатынды Хамматҡа алдырмаҫҡа, уны өйҙән генә түгел, бөтөнләй ауылдан ҡыуҙырып ебәртергә тырышып ҡараһа ла барып сыҡманы. Ахыр ул, улын үҙ ғаиләһенән бөтөнләй айыртмаҫҡа теләп:

— Ир кеше ике бисә менән йәшәмәйме? Күп ҡатын алыу Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән ҡалған эш бит ул. һин, алйот, ниә бынамын тигән үҙ бисәнде, ҡолонсаҡ кеүек ике баланды, бөтә байлығынды ташлап, шул аҙғын бисәгә эйәреп сығып китәһен?! Башыңа тай типкәндер һинең, юҡһа был тиклем алйотланмаҫ инең,— тип әрләп тә, өгөтләп тә ҡараны — булманы. Хаммат менән Сәлимә үҙҙәренен һукланҡырап булһа ла табылған ярһыу мөхәббәттәрен бер кем менән дә уртаҡлашырға теләмәнеләр. Бөтә ауырлыҡҡа түҙергә, ләкин яҙғы ташҡын кеүек урғылып сыҡҡан ҡайнар һөйөү тойғоһона кер төшөрмәҫкә булдылар. Уйнай-көлә, йырлай-бейей икәүләп туғайҙан тал, ағас ташынылар. Һәр бер ҡаҙыҡты бергәләп ҡаҡтылар. Һәр бер яңы талды бергәләп ҡайырып, бергәләп үрҙеләр. Сыйырсыҡтар шикелле һайрашып, тал сыбыҡтан өр-яңы оя ҡорорға тотондолар. Һөйөү бәхете менән ҡанатланған йөрәктәр үкенеүҙе, бошоноуҙы, беләктәр арыу-талыуҙы белмәне.

Сәлимәнен атаһы ла башта:

— Былай йөҙөмә хурлыҡ килтергәс, һин минең балам түгелһең,— тип бөтөнләй ҡыҙынан ҡул һелтәргә тырышып ҡараһа ла, бала бит, аҙаҡ ғәфү итте. Мәһәре өсөн тип, уға бер ат, бер һыйыр, кәзә-һарыҡ эйәртеп биреп, хужалыҡтың тәүге нигеҙ ташын һалышып ебәрҙе. Атлы-һыйырлы булғас, Хаммат менән Сәлимәгә донъя көтөп китеүе, әлбиттә, ул тиклем ауыр булырға тейешле түгел ине. Ысынлап та, өйләнешеүҙәренә бер йыл тигәндә, улар бәләкәс кенә булһа ла өй эшләп йыйнаҡ, матур, етеш итеп донъя көтөп торалар ине инде. Яҙын улар баҡса тултырып картуф, ҡыяр, сөгөлдөр кеүек нәмәләр сәстеләр. Хамматҡа был йылда ике ғаилә өсөн эшләргә тура килде. Ҡатынын ташлаһа ла, балалары хаҡына, иҫке ғаиләһенен. дә ерен һөрап, ашлығын сәсеп бирҙе. Эш ни хәтле күп, тормош ни хәтле ҡатмарлы, ауыр була барған һайын, ул үҙендә бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс, ныҡышмалылыҡ арта барғанын тойҙо. Әйтерһен Сәлимә м«нән ҡушылыу унын, быҒаса уяулы-йоҡоло яткан икһеҙ-сикһеҙ көс шишмәһен ҡуҙғатып, уны ташҡынлы ҙур ағымға әйләндереп ебәрҙе. Хаммат ысын мәғәнәһе менән бәхетле ине хәҙер. Сәлимә лә бәхетле ине. Шулай ҙа һуңғы ваҡыттарҙа Сәлимәнен. күңелен әйтелмәгән бер уй йыш ҡына борсоп ч-ора. Көндәр, айҙар үтк»н

һайын был борсоу яман шеш кеүек ҙурая, ҡабара, хатта ҡай һы саҡта түҙгеһеҙ әрнеүгә әйләнә бара ине. Ошо арҡала Сәлимә ваҡыт-ваҡыт монайып йырлап йөрөй, үҙ иркенән тыш, ҡайһы саҡ, күҙҙәренән өнһөҙ йәштәр ҙә тәгәрләп китәләр Төндәрҙә, Хаммат баһадирҙарса тәрән, иркен тын алып ғәмһеҙ йоҡлап ятҡан саҡтарҙа, ул ҡапыл уянып китеп, оҙаҡ-оҙаҡ уйланып ятҡылай. Ләкин үҙ йөрәген аяуһыҙ һыҙлатҡан билдәһеҙ борсоуға Сәлимә әле асыҡ төшөнөп тә етә алмай.

«Ни өсөн һун. унын. эсе боша? Өҙөлөп һөйгән Хамматы унының янында. Сәлимә өсөн ул бөтә донъя ваҡлығынан ҡул һелтәне Көткән донъяһынан, ғаиләһенән баш тартты. Ғәйбәттән, шелтәнән дә ҡуркманы. Шулай булғас, уға, Сәлимәгә, нимә етмәй тағы? Яҙмыштын. ниндәй ҡотолғоһоҙ алыҫ ипкене тынғы бирмәй маташа һуң уға? Кем, нимә унын бәхетенә ҡул һуҙырға йыйына?!. Юҡ, юҡ... Бынын. булыуы мөм кин түгел!..»

Бер төндә ул йөрәгенен. әрнеүенә түҙә алмай, уйынын. һун ғы һүҙҙәрен үҙе лә анламаҫтан, ошолай ҡысҡырып ук әйтеп ебәрҙе.

— Ә, нимә? — Ни тиһен, һылыуым? — тип уянып китте Хаммат

Сәлимә, ире яғына әйләнеп, күҙен унын ҡеүәтле күкрәгенә йәшерҙе.

— Юҡ та  Былай ғына  Әллә ниндәй яман төш күреп, һаташып уянып киттемеє.

Хаммат уны, бала кеүек ҡәҙерләп, күкрәгенә ҡыҫты

— Ҡурҡма, тыныс йоҡла, йәме, һылыуым.

Сәлимәнен. күиелендә былай тынысһыҙ уйҙарҙы тыуҙырған сәбәптәрҙен ин ҙурыһы, әлбиттә, Хамматтың бала яра тыуы ине. Нисек кенә тиһәң дә, унын. элекке ҡатынында бер улы, бер ҡыҙы бар бит. Хаммат уларҙы бик ярата. Бынауы туп кеүек булып тәгәрләп үҫеп килгән улы Байрасты ул янынан ҡалдырмай, гел бергә алып йөрөй  Алты-ете йәшлек малайҙы быйыл һабан һөргәндә, ул гел ат башына ултыртып йөрөттө. Уға, етмәһә, һәр аҙымда Таиба әбей ҙә, башҡа күршеләр ҙә Байрастың тап уға оҡшауы, унын кеүек баһадир буласағы тураһында һөйләп кенә торалар. Уңайы килеп сыҡ ҡан һайын уны шундай ул табып биргән ҡатынды биҙәү ҡа тынға алмаштырғаны өсөн ғәйепләйҙәр. Дөрөҫ, Хаммат бы ларҙың бөтәһен дә тыныс ҡына йылмайып, яуапһыҙ ҡалды ра. Ләкин Сәлимә Хамматтың күнеле ҡатынынан һыуынһа ла, балаларынан һыуынмаясағын тоймаймы ни? Берәй кеше унын Байрасынын шәплеге, ҡыҙынын матурлығы тураһынаа һөйләгәндә, Хамматтың күҙҙәрендә ниндәй ғорур шатлыҡ тоҡанып киткәнен күрмәйме ни? Сәлимә һун быға ҡаршы



үҙенең тынғыһыҙ һөйөүенән башҡа нимә ҡуя ала? Ҡасан һуң, ул Хамматҡа ошо Байрас кеүек айыу балаһындай ныҡ, бөр-көт кеүек үткер күҙле малай табып бирер? Табырмы, булырмы унын малайы?.. Әгәр Сәлимә ысынлап та, кешеләр әйтмешләй, биҙәү ҡатын булып сыҡһа, Хамматтың мөхәббәтен һаман хәҙергәсә үҙендә һаҡлап тора алырмы ул? Йәшлек тә, матурлыҡ та үтә. Ә бала һаман үҫә, ҙурая, матурлана рына бара!.. Әгәр Хаммат балаһыҙ тормоштан туя башлаһа, ул ни эшләр?!

Хаммат менән бергә тора башлауға бер йыл үткәс тә үҙендә балаға ҡалыу билдәләре күрмәй, тамам өмөтһөҙләккә би« релә башлаған Сәлимә, быйыл ҡоролоҡтан ашлыҡтары кейөп бөтөү арҡаһында үҙҙәренең аҙыҡ, эш эҙләп ауылдан ситкә сығып китергә мәжбүр булыуҙары, Тимаш баярға барып ҡыр эшенә ялланыуҙары өсөн кейөнәһе урынға һөйөндө генә. Был ҡот оскос һөйөнөс ине. Шуға күрә Сәлимә күңеленән үҙ-үҙен:

«Эй, иҫәр, кешеләр ут йота. Ә һин ҡыуанаһын. Оял!.. Аҡылыка кил. Ҡара, был ҡыуанысын үҙ башыңа төшмәһен!..» — тип күп тапҡырҙар шомланып әрләп тә ҡараны. Ләкин ҡыуаныуҙан үҙен тыя алманы. Мөмкин булһа, ул ғүмер-ғүмергә был ауылға ҡайтмаҫ өсөн ситкә сығып китер, бөтә ауырлыҡҡа түҙер ине. Тик Хамматы ғына унын. үҙ янында булһын, унын. мөхәббәтен кем менән булһа ла уртаҡлашыу ҡурҡынысынан ҡотолһон ғына ине...

Ысынлап та, быйыл Хаммат Сәлимәнен. түҙемлелегенә, етеҙлегенә, егәрлелегенә аптырап та, һоҡланып та бөтә алманы. Унын. ауыҙынан бөтә йәй буйына бер генә тапҡыр ҙа зарланыу, бошоноу, һуҡраныу һүҙен ишетмәне. Ул бесән сабыу, бесән йыйыу эшендә лә, ураҡта ла, хатта урман ҡырҡыуҙа ла ирҙәр менән тиң тороп эшләне. һәр ваҡыт ҡырҙа, урманда ҡунып ятып эшләүҙен ауырлығын тойоуын бер генә хәрәкәт менән дә күрһәтмәне. Киреһенсә, тағы ла шатыраҡ, етеҙерәк, илгәҙәгерәк кенә була барҙы. Эштән бушаған арала үҙен дә, ирен дә һөйеп, тәрбиәләп йөрөтә белә торған хәстәрлекле ҡатын булырға ла, һәр саҡ һандуғас кеүек һайрап, йырлап-бейеп күцел йыуатырға ла өлгерҙө. Йөрәген тотош биләп алған оло мөхәббәт уға бөткөһөҙ көс, дәрт биреп тора ине.

Ҡара көҙ еткәс, Тимаш баярҙың ҡыр эштәре бөткәс, Хаммат менән Сәлимә ауылға ҡайтып килде. Әле Бибеште осратҡанда уларҙың ауылға яңы килеп ингән саҡтары ғына ине. Урамдан уҙып, кеше күҙенә сағылып йөрөмәҫ өсөн, улар кәртә арты яғынан, Үле Эйек ҡашлағынан уҙған берләм юл буйлап, ҡайтып баралар ине. Ошо ваҡыт, Хисбуллаларҙың кәр-

тә артында, баҡса ситәне буйында илап торған бер ҡыҙҙы* күргәс, Сәлимәнең башына:

«Моғайын, Хисбулланың беҙ киткәс алып ҡайтҡан яңы кәләше ошолор!..» тигән уй ҡылт итеп килеп төштө лә уд нисек Бибеш яғына йүгереп киткәнен тоймай ҙа ҡалды. Ҡатындарса ҡыҙыҡһыныусанлыҡ та, әсәләрсә йәлләү ҙә тартты һымаҡ уны. Әллә ниндәй көтөлмәгән осрашыу булды был. Бибештең күңелендә ул:

— Бына бит, кешеләр үлмәйҙәр... Йәшәйҙәр... Мин дә йәшәрмен... үҫермен... бирешмәм әле...— тигән һымағырак өмөт уятһа, Сәлимәнен, йөрәгендә ул йәй буйы үҙен тыныс ҡалдырып торған йәшерен, аҙаплы уйҙарҙы, ҡараңғы шиктәрҙе ҡабаттан ҡуҙғатып ебәрҙе.

«Ҡалай бәләкәс кенә ҡыҙ, бахыр?.. Күп булһа ун ике йәштер. Йә, ярар, үҫер, нығыныр әле...» — тип башта һалмаҡ, иренеп кенә, был хаҡта онотторға тырышып ҡына уйланды Сәлимә. Ләкин уйҙар унан ҡалышырға теләмәне. Уны һаман-һаман тәрәнгәрәк һөйрәне.

«Хисбулланы ярата, һис юғында уға ылыға алырмы икән бахыр...» — тип артабан уйын дауам итте ул. «Әллә ул да минен, кеүек быуынға ултырғансы, унды-һулды айырғансы ғына торормо?..» Бының артынса тағы ла тынғыһыҙыраҡ, борсоулыраҡ уйҙар ағылды.

«...Бала табырмы икән ул? Әгәр Бибеш бала табып ҡуйһа, Хаммат быға нисек ҡарар? Хәйер үҙе менән йылдан ашыу йәшәп балаға ҡалмағас, минен. эшкинмәгәнлегемде белмәйме ни инде ул?! Шулай ҙа... Бибеш бала тапмаһа, мине лә Хисбулла боҙғандыр тип уйларға урын ҡалыр ине, исмаһам... Бәлки, ул ысынлап та шулайҙыр ҙа...»

Тора-бара Сәлимә бер саҡ бала табып үҙен хурлыҡка ҡалдырыуы мөмкин булған был кескәй ҡыҙға ҡарата үҙ күңелендә асыу, көнләү һымаҡ тойғо уяна башлауын тойоп, хатта ҡурҡып та китте. Ә һун, бая, ситән янына барғанда, уның күңелендә Бибешкә ҡарата йәлләү, ябай ҡыҙыҡһыныуҙан башҡа бер нәмә лә юҡ ине лә баһа. Шуға күрә ул илапшешенеп бөткән Бибештең башына үҙенең йылы, еүеш ҡулын һалыуын, уны йыуатыу, тынысландырыу өсөн әллә ниндәй аңлайышһыҙ һүҙҙәр һөйләп ташлауын да тоймай ҡалғайны. Ә хәҙер... я хоҙай, ул ни уйлай?! Шулай уҡ ошо ҡыҙғаныс, кескәй генә ҡыҙға ҡарата ла асыу, үс йөрөтә алырлыҡ яуыз, көнсө кеше микән ни ул, Сәлимә?! Эй алла, үҙ йөрәгендә лә тотош белеп, төшөнөп бөтөп булмай бит. Шулай булғас, кеше йөрәгенә ҡалай баш булмаҡ кәрәк?.. Йә, ошо минутта ХамматтыН уйында ни барын ҡалай белмәк кәрәк?. Кем белә, бәлки, ул улын, ҡыҙын... Улар менән бергә Өммөкәйен дә һағынып ҡайтып киләлер...»



.—-, Йә, кем ул? — тип Сәлимәнең уйын бүлде Хаммат.— Һинең йәш көндәшеңме әллә?

— Эйе.

— Ҡара һин уны, ахыры һин Хисбуллаға һаман да уя клем сит итеп ҡарамайһың?.. Нисек атылып йүгереп китненде тоймай ҙа ҡалдың бит!.. Уйламағайным... Көтмәйнем... Йә, ниндәнерәк ҡыҙ? — тип шаяртты Хаммат.

Сәлимә күңелһеҙ генә яуапланы.

— Ниндәй булырын алда күрербеҙ. Әлегә кескәй генә илаҡ ҡыҙ.

— Шулай тиғен.

Сәлимә уйланып тағы бер аҙ өндәшмәй барғас, көлә биреп:

— Шулай ҙа матур булмаҡсы... Ҙур яҡты күҙле, ап-аҡ йөҙлө... Матур ҡатын булырға оҡшап тора,—тип өҫтәне.

— Шулаймы? — тип ҡабатлап һорап ҡуйҙы Хаммат.— Ҡара һин уны... Хисбулланың бәхете гел матур ҡыҙҙарҙан тағы...

Сәлимә ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы...

— Эйе... Шулай... Бынығы, исмаһам, үҙенә насип булһын инде...

Бынан ары улар өйҙәренә хәтле һүҙһеҙ барҙылар. Был турала һөйләшеү ҙә, уйлау ҙа уларҙың икеһенә лә күнелле түгел икәне асыҡ ине.

## III

Байгилде ағайҙарҙың Илсеғолға күсеп килеүенә дүртенсе йылға китте. Йәй айынын бешкән ҡарбуз, кипкән арыш еҫе менән һуғарылған, себен өйөрө менән геүләгән ҡыҙыу көндәренең береһе. Бөгөн күрше Яҡуп ауылында баҙар. Шуға күрә Илсеғол урамы ла ғәҙәттәгенән йәнлерәк, шаулыраҡ. Иртәнсәк арба тултырып ағас, көрәк-силәк, күмер, дегет тейәп үткән урман яҡ ҡыпсаҡтары, хәҙер берәй ҡаҙаҡ сәй-шәкәр, берәй биш-ун ҡаҙаҡ он һалынған кескәй тоҡсайҙан башҡа бер нәмәһе булмаған буш арбаларын ҡылтырлатып Илсеғол урамы аша бер өҙлөкһөҙ уҙып торалар. Ҡайһы берҙәре, ҡыҙмаса булып алғанлыҡтан, арбаға ҡырын ятып, урамға һыймайҡыскырып йырлап та уҙа. Баҙарсылар араһында, инде алтмыштан уҙһа ла, арбаға ултырыуҙы үҙенә әле һаман ғәрлеккә һанаған, шунын өсөн арбала дилбегә тотоп ултырған ҡатыны йәки ейәне янынан ат уйнатып юрттырып барған егет-карттар ҙа йыш ҡына күренеп ҡала. Шулай уҡ йәйәүләп-йөкмәнеп ҡайтыусылар ҙа юҡ түгел. Тройкаға ҡырын ятып уҙыусылар ҙа бар, әлбиттә. Ғөммүмән, баҙар көн Илсеғол балалары өсөн иң ҡыҙыҡлы көн ул. Улар урам аша

уҙтан бер генә атлыны ла, йәйәүлене лә күрмәй ҡалмайҙар. Улар өсөн бөтәһе лә ҡыҙыҡ, бөтәһе лә мәрәкә. Йәнеш менән Емештең дә бындай көндө урамда, дуҫ иштәре янында булғылары килә. Тик Сәрбиямал ғына уларҙы бушҡа табан туҙҙырып, урамда йөрөтөргә яратмай. «Ни өсөн уларҙы өйөндә тота?! Эшләргә тейештәр!.. Шулай ҙа бөгөн һуңлабыраҡ, кискәрәк ҡалып булһа ла ҡыҙҙарға ла әҙерәк ирек эләкте. Ғөмүмән, бөгөн уларҙың бик һирәк осрай торған бәхетле көндәре ине. Беренсенән, көҙҙә, ҡышты, яҙҙы рудникта, ваҡытлы эштә йөрөп уҙғарған аталары иҫән-һау ҡайтып килде. Ул ғына ла түгел, Байгилде ағай уларға бик матур, шау биҙәк күк ситсанан күлдәклек ад алып ҡайтты. Етмәһә, хәҙер инде бына Сәрбиямал да:

— Барығыҙ, әҙерәк уйнап ҡайтығыҙ,— тип урамға сығырға рөхсәт бирҙе. Күрәһең, ире уға янып торған ҡыҙыл сатиндан күлдәклек тә, кешмир яулыҡ та, хатта итеклек күн дә алып ҡайтҡас, бынын өҫтәүенә он, сәй, шәкәрлек аҡсаны ла мул ғына биргәс, уның кәйефе яҡшырҙы.

Ҡыҙҙар урамға сыҡҡас:

«Ҡайҙа барырға? Уйынды нимәнән башларға?» тигән һымаҡ ҡапҡа төбөндә оҙаҡ ҡына тапанып торҙолар. Хәҙер баҙарсылар һирәгәйеп, урам һил булып ҡалғайны инде. Тик Ғаббас мулланың бер мөйөшө ергә һеңгән, емерек мәҙрәсәһе янында ғына, ғәҙәтенсә, үҙенең анлайышһыҙ, ләкин ғәжәп моңло, яғымлы йырын йырлап, тырнана-тырнана, тиле Ульябай ғына йөрөп ята ине.

...Йәмән илләренән
Ҡалкып кидәр ди.
Йә сәни, йә бәни
Сайран идәр ди...

Бер төркөм малай сыр-сыу килеп унын, артынан эйәрә.
— Ағай, Ульябай ағай, тағы йырла әле.
— Ләйләжанды йырла.
Сүл ғәрәбе шикелле сем-ҡара һаҡалтай, тар ғына битле, ҡылыс танаулы, урта йәштәрҙәге был кешене малайҙар һәр ваҡыт шулай, мәҙрәсәнән сығып күҙгә күренеү менән һырып ала. Ә Ульябай сабый балаларса эскерһеҙ, монһоу ғына итеп балаларға алмаш-тилмәш йылмайып, оялсан, баҫалҡы тауыш менән:

— Йырлайыммы икән ни? Мулла ағайым орошмаҫмы икән һун? — тип һорап ҡуя.— Унан шул уҡ ғәмһеҙ, эскерһеҙ тауыш менән:

— Эй, ҡуй ҙа, йырламайым да, йә мулла ағайым туҡмап ташлар,— ти.



— Йырла, йырла! Туҡмамаҫ. Туҡматмабыҙ,— тиҙәр малайҙар, көлеп.— Беҙ барында ул баҙнат итә аламы ни, ха-ха!..

Ульябай, тағы ғәжәп әҙәпле, оялсан йылмайып:

— һе, шулаймы? Йырлап ебәрәйем һун, улай булғас,— ти. Унан дәрүиштәрсә дәртләнеп, һелкенеп йырларға тотона.

...һәр сәхәр ваҡытында .
Төшөмдә күрәм.
Бән сәни, бән сәни
Ләйләжан, сөям.

— Әйҙә, һылыу, беҙ ҙә шунда барайыҡ. Ульябайҙың йырын тыңлайыҡ,— тине Йәнеш. Емеш ҡаршы төштө:

— Ҡуй, әйҙә, Шәүрәкәйҙәргә барайыҡ. Мин Ульябайҙан ҡурҡам да ул.

Ысынлап та, халыҡ телендә: «Бохарала ла, Сәмәрҡәндтә ла уҡыған икән. Алланың серле эштәренә төшөнөргә теләгән икән. Аҙаҡ, тырышып-тырышып та, бер нәмәгә лә төшөнә алмағас, ошолай аҡылдан яҙып киткән икән...» — тип һөйләнеп йөрөгән һүҙҙәрҙән башҡа бер ни менән дә билдәле булмаған, уның асылда кем, ҡайҙан, ни өсөн бындай хәлгә ҡалғанын бер кем дә белмәгән был ярым-яланғас кеше Емештең күңелендә һәр ваҡыт шомло ҡурҡыу, ҡыҙғаныу уята. Емеш уның янына бармаҫҡа, күҙенә ҡарамаҫҡа, башҡа балалар кеүек уны үсекләмәҫкә тырыша.

Үҙ һүҙле Емештен. ынғайына йөрөргә өйрәнгән Йәнеш ныҡышманы. Улар Шәүрәләргә киттеләр.

Шәүрәләрҙен эсе-тышы һыланып та ағартылмаған тупаҡ өйҙән дә бер һыйырлыҡ лапаҫтан торған йорттары урамдын. Эйек яҡ осонда, Сәрбиямалдарға ҡапма-ҡаршы ултыра. Шәүрәнең атаһы балта оҫтаһы Хәлим ағай бөтә ғүмерен кешеләргә матур-матур өйҙәр һалып, семәрләп-мөһөрләп ҡапҡалар, тәҙрә ҡапҡастарын эшләп уҙғарһа ла, үҙе өсөн бер генә нәмә торғоҙорға ла ваҡыт та, аҡса ла таба алманы. Тапҡан-таянғаны уның ашауҙан, тәнде бер ҡат ҡапларлыҡ кейемдән уҙманы. Әле лә ул өлкән улы Әхмәт менән үҙҙәренен, бай күршеләре Собхан старшиналарға яңы өйлөк бура бурап урманда ята. Күмәк, ҙур ғаиләгә ашарға еткереү ҙә ауыр булғанлыҡтан, Шәүрәнен, әсәһе Зөбәржәт енгә лә Собхан старшиналарҙа аш-һыу бешереүсе булып эшләй. Күп ваҡыт өйҙә бәләкәс ҡустыһы менән Шәүрә генә була. Ә Шәүрәнең Иштуған менән тиндәш ағаһы—шаян, теремек Әхәт—бер ҡасан да өйҙә тормай. Әле лә Иштуған менән икәүләп ҡайҙалыр урам ҡыҙырып йөрөй ине.

Янғыҙ зарығып ултырған Шәүрә ҡыуанып, һикергедэи тәтелдәргә тотондо.

— Эй! Емештәр килде! Йә, ни эшләйбеҙ, нимә уйнайбыҙ? һаҡ таш уйнайбыҙмы? Мин кисә ҡырсындан биш тумалаҡ таш табып апҡайттым... Бына улар. Әллә хан уйнайбыҙмы? Хан уйнаһаҡ, минең бер итәк матур таштарым да бар... Йә, ниңә өндәшмәйһегеҙ, Емеш, Йәнеш!..

— Ҡуй, өйҙә уйнамайыҡ. Тышҡа сығайыҡ,— тине Йәнеш.— Беҙ былай ҙа гел өйҙә ултырабыҙ бит.

— Йәшенмәк уйнайыҡ,— тип өҫтәне Емеш.

Шәүрә итәген арттан ғына төйнәп урындыҡ буйына ебәрелгән нәҙек ботло, күс башлы, ҙур ҡорһаҡлы ҡустыһы Хәсәнгә монайып ҡараны:

— Мырҙам бар бит әле...

— Улай булһа, йәшенмәк уйнамабыҙ, былай ғына, тыщта ғына йөрөрбөҙ, йәме,— тип килеште Емеш.— Урамға сығайыҡ.

Шәүрә ҡустыһына ымланы:

— Кил, мырҙа.

Хәсән имгәкләп урындыҡ ситенә килде лә, ҡыуанып, апаһының муйынына һарылды.

— Әс-сәй?.. Мәм-мәй?..

Шәүрә униң боттарына, ҡулдарына шаяртып, иплап кенә һуҡҡыланы.

— Юҡ, әсәйгә бармайбыҙ. Алмабикә инәй әрләй, мәмәй бирмәй, мәэ-мәэ итә. Әбеү-әбеү була, белдеңме?

Хәсән унын, һайын ҡыуанды. Улар ишек алдына сыҡтылар.

— Инде ни эшләйбеҙ?

— һинең мырҙач булғас, бер ҡайҙа ла барып та, йүгерешеп уйнап та булмай шул...

Йәнеш менән Емеш Илсеғолда дүртенсе йыл йәшәһәләр ҙә башҡа ҡыҙҙарға һаман ылығып етә алғандары юҡ ине әле. Ҡайһы бер ҡыҙҙар уларҙы «ерһеҙ», «килмешәк» тип хурлап үҙҙәренән биҙҙерәләр. Ҡайһы берәүҙәренек күп ваҡыт атаәсәһе өйҙә була. Өлкәндәр булған ерҙә иркенләп уйнап булмай. Ә Шәүрә уларҙы бер ҡасан да кәмһетмәй. Уларҙын өйө лә һәр саҡ аулаҡ була. Етмәһә, ташҡурсаҡ кеүек бәләкәс кенә йомро битле, танау осона ғына өйөлөп төшкән ваҡ шаҙраларында һәр саҡ ысыҡ тамсыһындай тир бөрсөктәре йылтырап торған һөйкөмлө Шәүрә Йәнеш менән йәштәш, Емеш менән тиңдәш ине. Емеш уны үҙенән өлкән итеп иҫәпләмәй, Шәүрә үҙен өлкән итеп тоймай. Улар Емеш менән йән дуҫтар.

Ишек алдына сыҡҡас, ҡыҙҙар үҙҙәрен теләгәнсә йүгереп уйнарға, Эйеккә һыу инергә барырға ҡамасаулаған кескәй Хәсәнде ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап торған саҡта,



уларҙыд ҡолағына Собхан старшиналар яғынан ниндәйҙер көләшеү, һөйләшеү тауышы ишетелде.

— Кемдәр килде икән? Әйҙә ҡарайыҡ,— тип шыбырланы Шәүрә.

— Әйҙә ҡарайыҡ. Нимә бар икән? — тине Емеш тә. Улар Шәүрәләрҙең ишек алды менән Собхан старшиналарҙын, ишек алдын айырып торған бейек таҡта ҡойма янына йүгерҙеләр. Бында, алабута, дегәнәк, кесерткән үләндәре менән ҡапланған ҡойма буйында, таҡтанын, ботак урынын төртеп төшөрөп яһалған ҡуҙҙәй генә бер нисә тишек тә бар. Быны ҡыҙҙар үҙҙәре яһаған. Улар ошонан Собхан старшина ишек алдында барған бай тормошто күҙәтергә яраталар. Әле лә улар дегәнәк япраҡтары аҫтына боҫоп, тын да алмай күҙәтергә керештеләр. Унда бөгөн дә ғәҙәттәге байрамлы тормош дауам итә. Бына Собхан старшина менән унын. ҡатыны Алмабикә байрамса кейенеп күтәрмәлә торалар. Старшинаның өр-яңы ҡара тройкаһының түш кеҫәһенән ҡаҙан кеүек ҙур, түнәрәк ҡорһағына хәтле йыуан көмөш сәғәт сылбыры һалынған. Ул ҙур, итләс ҡулын салбар кеҫәһенә тыҡҡан, ҡыҫҡа аяҡтарын, хәле еткәнсә кикреп, тарбайтып баҫҡан. Күҙәрәйгән елкәһе, терпәйгән ерән мыйығы, текә, тәкәббер ҡарашлы йәшкелт күҙҙәре менән ул нәҫел үгеҙен хәтерләтә. Артыҡ ҙур күкрәкле, ҡалын кәүҙәһенә һис тә хас булмаған нәфис, бәләкәй башына, бай татар ҡатындарынса, ынйылы ҡалпаҡ кейеп ебәргән Алмабикә иренән бер башҡа бейек тә, һауалыраҡ та.

Емештәрҙең иғтибарын бигерәк тә күтәрмәнен. түбәнге баҫҡысында яланғас ал тәнле, күк күҙле ғәжәп матур ташҡурсаҡты ебәк юрғанға төрөп бәпес итеп күтәреп алған Алтынбикә үҙенә тартты. Ҡыҙҙар ҡурсаҡтың матурлығына һоҡланыуҙан телһеҙ ҡалып ултырҙылар. Тәңкә мерйенгә сумдырып, сикһеҙ тәҙөү итеп кейендерелгән Алтынбикә Емештәр бер ҡасан да күрмәгән йәнле ҡурсағы менән бергә ҡыҙҙарға әкиәт батшалығынан был тупһаға янылыш осоп килеп ҡунған ен ҡыҙы кеүек күренде. Йәше менән Шәүрәләрҙән оло булмаһа ла, буйға үҫеп еткән Алтынбикәнең, тап бәләкәс балаларса иркәләнеп, ҡурсаҡ уйнатыуы ла, ҡурсағын берсә атаһына, берсә әсәһенә алып барып:

— Бар, ҡыҙым, мин арып киттем. һин олатайына бар. Өләсәй тип әйт, ҡыҙым. Әсәй, ҡара әле, ҡыҙым һөйләшә белә башлаған! — тип тәтелдәп һөйләнеүе лә, бик иртә быңдай балалыҡты оноткан Емештәргә сикһеҙ сәйер, хатта оят та һымаҡ тойолдо. Йәнеш, хатта бышылдап:

— Эй оятһыҙ. Ҙуп-ҙур нәмә, нисек оялмай ҡурсаҡ уйната? — тип һукранып та ҡуйҙы. Емещ, кердек тә ҡазддй

ләп ултыра торғас, бында ҡысҡырып һөйләшергә ярамауын да онотоп:

— Шәүрәкәй, әллә ҡурсағының йәне лә бар инде? Тап ысын бала һымаҡ ҡарап тора түгелме һуң? — тип ҡысҡырып ебәргәнен тоймай ҙа ҡалды.

— Сеү, биғәләш! — тип шыбырланы Шәүрә.— Әгәр беҙҙең бынан ҡарап ултырғанды һиҙеп ҡалһалар!.. Алмабикә инәйем ботто һуғып һындырыр. Белдеңме?!

Ҡыҙҙар тағы тынып ҡалдылар, Хатта кескәй Хәсән дә тауыш сығарманы. Бармаҡтары менән ҡоро тупраҡты соҡоп, тик кенә ултырҙы. Әйтерһең, был тирәлә телде тешләберәк; торорға, тынды ла тауышланып алмаҫҡа кәрәклекте ул да белә ине.

Собхан старшина тамаҡты ҡыра биреп, ҡыҙҙарҙы тертләтерлек әсе тауыш менән:

— Иҙрис!.. Иблес, тим, ат ек!,.__тип ҡысҡырып ебәрҙе^ Был тауышҡа кәртә-ҡураға терәтеп эшләнгән мал өйөнән, алпан-толпан баҫып, төмрәндәп Иҙрис ҡарт килеп сыҡты. Ҡышын-йәЙ£н өҫтөнән төшмәгән ошо иҫке һоро сәкмәне, көмре арҡаһы, кәүҙәһенә ҡарағанда ла оҙонораҡ һымаҡ булып алға һуҙылған ырғаҡ шикелле ҙур, ҡытыршы ҡулдары, күкшел йөн баҫҡан ялбыр бите менән был ҡарт айыуға оҡшай ине. Айыу кеүек килбәтһеҙ, ялбыр ғына түгел, шундай уҡ көслө лә һымаҡ тойола ине ул. Уны «урыҫ Иҙрис» тип йөрөтәләр. Урыҫ Иҙристең йорт-ере лә, бала-сағаһы ла юҡ. Булмаған да, Кәкүк кеүек япа-яңғыҙ ул. Ә йәш сағында шәп егет булған тип һөйләйҙәр. Шуға уны, һалдатҡа барғас та, бер рус офицеры яратып үҙенә денщик итеп алған. Етеҙ, уяу холоҡло, яҡшы күңелле булыуы, хәйлә-мәкерҙе белмәүе, намыҫлы, батыр һалдат булыуы өсөн яратҡан уны офицер.

— Бындай денщик менән иң ауыр юлды ла еңел үтеп була. Идриска аттың телен белә. Бер кемгә баш бирмәгән аҫау айғырҙар ҙа уның ҡулында шунда уҡ тынысланып, йыуашайып ҡала. Әгәр инде иң яҡшы ат һатып алайым тиһәң, Идрисканан ғына һайлат,— тип маҡтаған. Башҡа офицерҙар шикелле һалдаттарҙы кәмһетеү, ҡағыу-һуғыуҙы белмәгән яҡшы күңелле кеше булған уның хужаһы. Шуға күрә Иҙрис унда денщик булып оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән. Хатта офицер уны үҙе отставкаға сыҡҡас та ҡалдырмаған.

— Әйҙә, Идриска, үлгәнсә үҙемдә торорһоң. Ҡытлыҡ күрмәй йәшәрһең,— тип Мәскәү яғына үҙенең имениеһына алып ҡайтып киткән. Иҙрис үҙе лә, был яҡшы күңелле офицерҙан айырылғыһы килмәй, бигерәк тә шундай хөрмәтле кешенең һүҙен кире ҡағырға баҙнат итмәй, быға риза булған. Аҙаҡ офицерҙың бай, матур имениеһына, ундағы нужаһыҙ, мул тормошҡа эйәләшеп тә алған. Йылдың **күп ваҡытын Мәс**-



кәүҙә, Пётербургта йәкй сит илдәрҙә үткәргән был ғаиләһеҙ офицерҙың байлығын һаҡлап шунда йәшәгән дә йәшәгән. Шулай айҙар, йылдар бер-бер артлы үтеп кенә торған. Иҙрис үҙе лә ярты рус булып бөткән, телен дә, динен дә онота башлаған. Ә офицер һаман элеккесә:

— Идриска барында минең яңылыш төшөп ҡалған һуҡыр биш тинем дә юғалмаясаҡ,— тип маҡтана биреп, тыптыныс, теләгән бер ерендә йөрөй биргән. Шулай олоғайып, бөтөнләй үҙ кеше булып бөттө генә тигәндә, Иҙристең күнеле ҡапыл тыуған яҡҡа тартыла башлаған. Үҙ ауылын ҡайтып күргеһе, үҙ еренә ҡайтып үлгеһе килгән уның. Офицерҙың:

— Хәҙер ҡайтып һин унда астан үләһең бит. Иҫәрләнмә, Идриска, тыныс ҡына йәшәй бир,— тип төрлөсә өгөтләүенә лә ҡарамаҫтан, бер көн күтәрелеп ҡайтып та киткән. Ә ауылда уның ата-әсәһе әллә ҡасан үлеп, онотолоп, уларҙын. бөтә мал-тыуары, йорт йыһазы Иҙристең берҙән-бер ҡарындашы Алмабикәнең ире — Собхан старшина ҡулына күсеп, һеңеп бөткән. Иҙрис ҡартҡа морон төртөр урын да ҡалмаған. Иҙрис ҡайғыһынан эскегә һабышҡан. Хатта офицерҙын,:

— Әгәр эшең барып сыҡмаһа, кире килерһең,— тип биреп ебәргән юллыҡ аҡсаларын да эсеп бөткән. Шул арҡала кире китә лә алмаған. Дөрөҫөрәге, ошондай сусҡа кеүек аунап эскән йөҙ менән хөрмәтле офицерға барып күренергә баҙнат итмәгән ул. Шулай итеп аҡсаһын ғына түгел, өҫ-башын да һатып эсеп бөтөргәндән һун, ошо Собхан старшинаға күсер булып барып ингән. Шунан бирле бына нисәмә йылдар инде уның мал өйөндә йәшәп, ҡалған-боҫҡан ашап, тамаҡ хаҡына эшләп көн күреп килә. Хәҙер уның донъяла берҙәнбер йыуанысы, ҡулына әллә ниҙә бер килеп эләккән аҙ-маҙ аҡсаны эсеп бөтөргәнсә мал өйөнә ҡайтмай урамда аунап, старшина йорто яғына ситтән йоҙроҡ күрһәтеп, әсе тоҙло рус һүгенеүе менән һүгенеп йөрөүҙән тора. Собхан старшина урыны килгән һайын:

— һин уны туған тип, йәлләп асрайһың. Ә ул һинен, йөҙөндән көлә, иблес!— тип һуҡрана. Ләкин кешеләр уның был ҡартты урамға сығарып ырғытыр өсен үҙенен. бөтә этлеген белеп торған халыҡтан ғына тартыныуын яҡшы аңлайҙар. Шуға күрә уның һуҡраныуына һис тә ҡолаҡ һалмайҙар. Ә Иҙрис ҡарт эсеп, асығып, хәлдән тайғансы, аяғына баҫып тора алмаҫлыҡ булғансы шулай ситтә йөрөй-йөрөй ҙә, ахыр яҙмышҡа йәнә баш эйеп, башынан бүркен алып шул «шәфҡәтле» кейәүгә ҡайтып инә. Янынан түҙемдән сыҡҡансы тағы тырышып уға хеҙмәт итә. Түҙеме бетһә, йәнә сәсен-башын туҙҙырып, ҡулына ҡылдары өҙгөләнеп бөткән рус балалайкаһын алып, бөгәләп барған тубыҡтарын ҡатырып, кәүҙәһен һалдаттарса төҙ тоторға тырышып, урамға, туҙанлы юл өҫ-

төнә сығым! баҫа. Унан йөнтәҫ, ҙур йоҙрөғө менән арыҡ күкрәгенә дөпөлдәтә һуғып, ярһып ҡысҡырып ебәрә:

— Видишь, офицер биргән балалайка!.. Офицер биргән!.. Знаешь, офицер менән тройкала елдергән Идриска бит был!

— Урыҫ Иҙрис тағы эсергә керешкән икән...—тиҙәр кешеләр. Быны ишетеп.— Тағы аяғынан йығылғансы эсә икән бахыр...

Ә бөтә нәмәнән тик ҡыҙыҡ ҡына эҙләп йөрөгән бала-са^а шунда уҡ уны һырып ала:

— Уйнап ебәр, олатай!

— Балалайканды зыңғылдат, аяғынды тыпырлат!

— һай, Дунайҙы, һиптер, олатай?..

Иҙрис ҡарт, шуны ғына көткән кеүек, күңелләнеп, балалайкаһын зыңғылдата һуғып, ҡарлыҡҡаи, иҫерек тауыш меиән йырлай-йырлай, ауа-түнә урам буйлап атлай.

Вы поспушайте, ребята,
Что струна говорит.
Что струна говорит!
Да она жениться велит...
Ай, Дунай, вай.Дунай,
Дуиай, веселый Дунай'..

Балалар унын артынан эйпрәләр.

— һай, урыҫ Иҙрис!

— Тиле Иҙрис!

— Дунай Иҙрис теттерә!..

— Башҡортса бер йыр ҙа белмәй...

— Тик Дунайҙы һиптерә!..

Ә Иҙрис ҡарт, унын һайын ҡотороноп, русса частушкалар әйтергә керешеп китә.

Эх, мои родители,
Вы меня не любите.
.- Вы меня не любите,
Утром рано будите...

Иҙрис ҡарт нисек кенә ҡаты иҫерһә лә, унын таҡмаҡтары гел шулай балаларса бер ҡатлы, тыйнаҡ булалар.

Бына шул Иҙрис ҡартты Собхан старшина, йәнәһе шаяртып, «Иблес» тип йөрөтә. Әле лә ул бына тамаҡ төбө менән генә:

— Иблес, ат ек! — тнп бер-ике ҡысҡырҙы ла, ҡарт атты егеп, күтәрмә янына алып килеп туҡтатҡанса, үҙенең ошо «шаянлығына» кинәнеп, эсте ҡапайтып, ҡулды артҡа ҡуйып, тарбайып баҫып торҙо. Унан, уйнаҡлап торған өс ҡара юрға



еғелгәнҡанатлы ер-яны кырандасҡа ҡырын ятып, ҡатыщын янына, Иҙрис ҡартты күсергә ултыртып, ғәжәп тәкәббер төҫ менән елдереп сығып китте. Алтынбикә, ҡурсағын ҡосаҡлап, күтәрмәнән генә уларҙы оҙатып ҡалды. Шәүрә үҙ янында ултырған Емештен. ҡолағына:

— Берәй сит ауылға бараларҙыр,— тип бышылданы.— Улар һәр кис шулай ҡунаҡка китәләр, үәт... Нисек Алтынбикәләрен ҡалдырҙылар әле. Ҙур булһа ла, бер ҙә оялмай, атаәсәһенән ҡалмай йөрей ул, үәт.

Емеш өндәшмәй күҙәтеүен дауам итте. Сөнки унда әкиәттәге кеүек бай ҙа, серле лә тойолған үҙенә башҡа ғәжәп бер тормош дауам итә. Хәҙер унын, бөтә иғтибарын Собхан старщинанын, берҙән-берулы һатыбал биләп алды. Бына ул йыпйылтыр еҙ төймәле, өр-ян,ы китель кейеп, ике ҡулды кеҫәгә тығып, күҙгә кеүек йылтырап торған ҡара шиблитын сәйер шығырлатып, ишек алдында оҙаҡ ҡына ары-бире йөрөй бирҙе лә әле генә атаһы торған урынға — күтәрмәгә менеп баҫты. Тышҡы күренеше менән дә, йөрөш-торошо, ҡырын һыйпаған оҙон ҡара сәсе, ҡыйғасланып, һыҙылып киткән нәҙек кенә ҡара мыйығы менән дә ауылдағы бөтә егеттәрҙән айырылып торған был һатыбал кескәй Емешкә матурлыҡтың да, бәхетлелектен, дә иң юғары нөктәһе булып күренде. Тик унын. атаһына оҡшап артыҡ һалкын, тәкәббер ҡарашлы йәшкелт күҙҙәре генә Емешкә оҡшап етмәйҙәр. Унын. кескәй йөрәгенә нindәйҙер билдәһеҙ хәүеф һалған кеүек булалар.

һатыбал Оло Эйек буйлап Илсеғолдан ун-ун биш саҡрым үрҙә яткан Сәләм ауылында рус-башҡорт училищеһында укый. Училищенын башҡорт ауылдары араһында йолҡонған арыҡ тауыҡтар көтөүе эсенә барып ингән ғорур аҡкош шикелле ҡукырайып, ҡояшлы көндәрҙә Илсеғолға ла ялтырап күренеп яткан ике ҡатлы таш йортон бында «Ташһарай» тип йөрөтәләр. һатыбал ауылдан бер үҙе бына ошо «Ташһарай»-Ҙа укыуы менән дә Емештең иҫен кнтәрә, уға әкиәттәге серле батыр кеүек күренә ине.

«һатыбал! Исеменә хәтле үҙенә башҡа бит унын. Ауылда бер генә исем ул. Сөнки уны ғына, тыуғас, муллаға бер ат биреп, тәҙрә үтә һатып алғандар, етмәһә, һыңар ҡолағыла көмөш алҡа тағып, өҫтөнә ҡырҡ ҡораманан күлдәк кейҙереп тә йөрөткәндәр. Шунан ғына алла уны: «Был ярлы балаһы икән дә баһа: Унын. кемгә кәрәге бар? Әйҙә йәшәй бирһен...» — тип алданып үлтермәй ҡалдырған. Юғиһә уға хәтле Собхан старшинанын улдары гел-гел үлеп кенә торғандар: Ә быныһы шулай һатып алып, «һатыбал» тип исем ҡушкас ҡына йәшәгән. Бына бит ул ҡәҙерле балалар нисек булалар!?» . , ..

Был уйҙан һун Емештен нинәлер ҡапыл зсе бошоп китте.

Ул оҙаҡ текләп талған ҡуҙҙарен ҡулы менән баҫып, ҡойма янында тағы бер аҙ ултыра бирҙе лә һикереп торҙо.

— Әйҙәгеҙ, бынан китәйек.

Ҡыҙҙар урамға сыҡтылар. Шул саҡ, кырандасына ҡырын ятып, атын йән-фарманға саптырып, Усман бай ҡапкаһынан инеп китте. Ҡыҙҙар унын баҙарҙан ҡыҙмаса ҡайтыуын, бындай саҡта йомарт, илгәҙәк булып китеүен яҡшы беләләр.

— Усман бабай ҡайтты. Әйҙәгеҙ йүгерҙек!

— Ана, малайҙар беҙҙән алда өлгөрҙөләр инде!..

— Ысынлап та, бая Ульябай тирәһендә әйләнеп йөрөгән бер төркөм малайҙар, Усман байҙың артынса уҡ, уларҙын ишек алдына инеп тә юғалдылар. Шәүрә менән Емештәр барып еткәндә, Усман байҙың ике ҡатыны уны ике яҡтан тотоп кырандастан күтәреп төшөрөргә маташалар, ә Усман бай, үсеккән бала кеүек ҡарышып, төшмәй ҡарыулаша ине.

Емештәрҙең артынса, ишек алдына тағы бер нисә бала йүгереп килеп инде. Балалар араһында Ҡарасәс әбейҙең ейәнсәрҙәре Сабира менән Сәмиғә лә, Хамматтың Байрасы ла бар ине. Улар бөтәһе лә баҙар көндө Усман байҙан бүләк алып өйрәнгән балалар. Ә Усман байҙың үҙенең балаһы юҡ. Шуға күрә ул баҙар һайын кеҫә тултырып кеше балаларына кәнфит алып ҡайта. Бөгөн унын кеҫәләре балаларға башҡа ваҡыттағыға ҡарағанда ла ҡалынырак күренде. Балалар ҡыуанышып кырандасты уратып алалар.

— Бабай, нихәл?

— Бабай, атыңды туғарайыҡмы?

— Бабай, атыңды мин һуғарам!

Усман бай ҡыймайыраҡ бер ситтә торған Емештәрҙе бармаҡ менән ымлап үҙ янына саҡыра.

— Килегеҙ, ҡурҡмағыҙ. Яҡыныраҡ килегеҙ, ҡара тояҡтар! Ә нимә, манпас ашаһығыҙ килдеме ни, шилмалар?..

Ул балалар ярата, ғүмүмән, Собхан старшина, Ғаббас муллалар шикелле ҡапҡа бикләп, кешенән айырылып ултырыуҙы белмәй. Байлыҡ яғынан да ул, әлбиттә, улар менән тиңләшә алмай. Улар кеүек ялсыларҙан эшләтеп, ҡырын ятып көн итмәй. Айныҡ саҡта бөтә хужалыҡ эшен ике ҡатыны менән бергәләп үҙе алып бара. Дөрөҫөндә, ул үҙ ҡул көсө менән көн күреүсе урта хәлле кеше. Тик, ни өсөндөр, ауылдаштары уны, «Усман бай» тип, байҙар рәтенә индереп йөрөтәләр. Бәлки унын, бигерәк тә әҙерәк төшөрөп алған саҡта, үтә йомарт, киң, бай күнелле булып китеүе балаһыҙлыҡтан башҡа бер нәмәгә бошонмай, һәр ваҡыт шат, шаян, көләс төҫ менән йөрөүе унын хаҡында «бай» тигән фекерҙе уятыуға сәбәп булғандыр. Сөнки, бында күптәрҙең аклауынса, фәкәтбай, етеш кеше генә шулай ғәмһеҙ, шат, үҙ тормошонан риза була ала ине.

Усман бай бөгөн дә бала кеүек шат ине. Бына ул, кырандасында ҡырын яткан килеш, үҙенең баһадирҙарса дәү кәүҙәһенә һис тә хас булмаған нәҙек, сыйылдыҡ тауыш менән кеткелдәп көлә-көлә, кеҫәһенән услап алып ергә кәнфиттәр һибергә тотондо.

— Мә, манпас ашағыҙ!.. Манпас менән һыйланығыҙ, сәүкәләр, хи-хи-хи!..

Балалар этешә-төртешә кәнфит артынан ергә ташландылар. Шәүрә, Йәнеш, Емеш тә башҡаларҙан ҡалышмаҫҡа тырышты. Ә Усман бай, балаларҙың кәнфиттәрҙе ҡаҙ үләне араһынан сүпләп алып бөтеүҙәрен ҡарап, кәйефләнеп ултырҙы ла, анһыҙ ҙа бәләкәс, йомоҡ күҙҙәрен йомолдороп көлә-көлә тағы бер ус кәнфит һибеп ебәрҙе. Ә ҡатындары һукрана-һукрана уны кырандастан күтәреп төшөрөргә маташтылар.

— Әй хоҙайым, ғибрәт, тағы эскәнһен. бит!.. Әле ҡасан ғына ишанға барып, ҡабат эсмәйем, тип тәүбә итеп ҡайтҡайкың да баһа! Тағы тәүбәнде боҙғанһың бит, иманһыҙ!..

— Бына тәүбәң башыңа тешер әле! Алла һаҡлаһын...

— Хи-хи-хи!..— тип ысынлап кинәнеп көлә Усман бай.— Хәҙрәттен шәлкем йүкәһе шәйме ни миңә?.. Шарт итеп өҙөлдө лә китте!..

— Оят бит! Әйҙә, күҙ көйөгө булып ултырма. Тиҙерәк өйгә ин, исмаһам!..

— Үҙегеҙ оялығыҙ! Минә бер малай ҙа табып бирә алманығыҙ,— тип асыуһыҙ ғына ҡарыулаша Усман бай. Унан ике ҡатынын ике яҡҡа этәреп ебәрә лә кырандастан ергә ауып төшә. Ерҙә яткан килеш тағы кәнфиттәр ырғытырға керешә.

— Ашағыҙ, ҡара тояҡтар!.. Манпас ашатҡан олатайығыҙҙы онотмағыҙ.

Емешкә ул тыйнаҡһыҙ дәү бала һымаҡ күренә.

Бына кәнфиттәр ҙә сүпләп бөтөлдө. һәр балаға ин, кәмендә икешәр-өсәр кәнфит тейҙе. Йылғыр Байрас хатта биш-алтыны эләктерҙе. Ул, бары бер генә бөртөк кәнфит алып ҡалған Емешкә мыҫҡыллы ҡараш ташлап:

— Эй, бешмәгән, шуны ғына алдынмы? — тине лә унын яғына ике кәнфит ырғытты.— Ал, бешмәгән...

Емеш алырғамы-юҡмы тип икеләнеп торған арала Әхмәтша ҡараҡтың Байрас ҙурлыҡ улы Моратша, ҡоҙғон кеүек етеҙ ташланып, кәнфиттәрҙе эләктереп алды. Шәүрә лә дуҫын:

— Ысынлап та, бешмәгән шул. Биргәнде лә ала белмәйпең бит! — тиіт шелтәләнe.— Бына мин, мырҙамды күтәргән

көйө лә, дүрт кәнфит алып ҡалдым, үәт. Шелтәне Емеш һүҙһеҙ генә ҡабул итте. Ҡыҙҙар, урамға сығып, ары киттеләр. Уларҙың юлдары бейек манаралы, йәшел түбәле өр-яңы мәсет, Ғаббас муллаларҙың, Кәзә мәзиндәрҙең, тәмле-татлы аш еҫтәре бөркөп торған яҡты бейек өйҙәре, йәй көнө тиле Ульябайҙан башҡа бер кем аяҡ баҫмаған емерек мәҙрәсә эргәһенән үтте. Ләкин ҡыҙҙар, бер ергә төбәп бармаһалар ҙа, быларҙың береһендә лә туҡтамай ауылдың ин осона барып сыҡтылар.

Тешкә йәбешеп, сайыр кеүек һуҙылып торған хуш еҫле йылтыр һары кәнфитте һурып, тауыш-тынһыҙ ғына барҙылар улар. Хатта апаһының елкәһенә бик йәтеш атланып алған нәҙек ботло Хәсән дә, ауыҙ буш булмағас, тып-тыныс барҙы.

Ауыл бер осон Эйеккә, икенсе осон һыртҡа — Ҡыҙҙар тауына терәп ята. Һырт яҡ оста урамдың бер башын Таиба әбейҙәрҙең, икенсе башын Шымбай ҡарттың йорто биләй. Ҡыҙҙар үҙҙәре лә аңламаҫтан башта Шымбай ҡарттар янында туҡтап торҙолар. Был өй ихатаһы, ҡапҡаһы менән тотош бергә, ҡасандыр, бик күптән, эре-эре ҡарағас бүрәнәләрҙән эшләнеп, йылдар үткән һайын тағы ҡараҡ төҫкә ингәнгәме, әллә кеше телендә унын. хужаларынын, көнкүреше тураһында шомло һүҙҙәр йөрөгәнгәме, Емешкә һәр саҡ йән өшөткөс ҡырыҫ, ҡараңғы күренә. Әле лә ул, бында килеп туҡтағас, йөрәгендә өшөтөүгә оҡшаған бер һалҡынлыҡ тойҙо. Шәүрә лә шундай уҡ тойғо арҡаһында, күрәһең, ниндәйҙер яғымһыҙ ваҡиғаны иҫенә төшөрөп:

— Беләһеңме, Емеш, ошо Шымбай бабайҙын, оло улы... Ни теге... Сәрбиямал апайҙың... Эй, ни... Әхмәтша ҡараҡ...— тип ниҙер бышылдай ғына башлағайны ла, шунда уҡ туҡтап ҡалды. Сенки был ваҡытта урам буйында Шымбай ҡарт күренде. Ул һәр саҡ түбән һөҙөп ҡараған күҙҙәрен аяҡ осонан алмай, суфыйланып, һеләүһен шикелле һаҡ, йомшаҡ баҫып, үҙҙәренә ҡайтып инде. Майлап ҡуйылған ауыр ҡара ҡапҡа унын, алдында тауыш-тынһыҙ ғына асылып ябылды. Ҡыҙҙар ҡорт саҡҡан кеүек һиҫкәнеп ситкә тайпылдылар ҙа Таиба әбейҙәр ҡоймаһы янына барып ултырҙылар.

— Бәлки, Бибеш апайым һыуға сығыр ҙа... беҙҙе күрер ҙә... мәрәкә булыр. Тик кенә ултырып торайыҡ, йәме,— тип һөйләнде Емеш.

Ҡустыһын елкәһенә атландырып йөрөй торғас, арып бөткән Шәүрә ҡайҙа булһа ла ултырырға риза ине. Йәнеш ауыр итеп көрһөнөп кенә ҡуйҙы. Ул туғандары менән теләгән саҡта күрешеп һөйләшергә лә ирке булмаған Бибеш апаһынын хәлен Емешкә ҡарағанда яҡшыраҡ анлай ине. Ҡыҙҙар оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырҙылар. Йәнеш Бибеш апаһы тураһында,



Шәүрә, әсәһенең ҡасан эштән ҡайтып, үҙен бала ҡарауҙан ҡотҡарыуы тураһында уйланы. Ә Емеш Шымбай ҡарт менән уныи улы Әхмәтша хаҡында, ауылда йөрөгән шомло һүҙҙәрҙең айышына төшөргә тырышты. Ләкин был ете йәшлек Емеш аңлай торған эш түгел ине, әлбиттә.

Бында һәр ауылда тип әйтерлек халыҡтың ерен-һыуын төрлө хәйләле юлдар менән һатып ашап көн күргән, күптәрҙе ерһеҙ-һыуһыҙ ҡалдырған берәй шыма кешеһе була. Уларҙың ҡайһы берҙәре, үҙҙәренән алданыусылар кеүек үк, бер ҡатлы, мәкерһеҙ булып алдауҙары төҫтәренә сығып торһа ла, ҡайһы берҙәре был эштә бик йышылып, ҡойроҡто бер ҡасан да, бер кемдән дә тоттормаҫлыҡ йылғыр булып ала. Ундайҙары байҙарҙың, муллаларҙың, старшиналарҙын. ин. яҡын ярҙамсыларына әйләнәләр. Тора-бара халыҡтың ерен генә түгел, үҙен дә һатырға, мөмкин булғандын, бөтәһен дә малға, байлыҡҡа әйләндерергә һәләтле булып әүереләләр. Халыҡ бындай кешеләрҙе борон-борондан бирле нәфрәт менән «куштан» тип атап йөрөтә. «Ҡуштан» һүҙе, күрәһең, был яҡта үҙгәреп, шундай боҙоҡ, һатлыҡ кешеләрҙең хас исеменә әйләнеп «каштан» булып киткән. Шымбай бына шундай ин. шыма каштандарҙың береһе ине. Ул Шот, Тимаш баярҙарға, Ырымбур купецтарына халыҡтык ерен һатып заманында күп һыйланған, уларҙан бүләккә яҡшы аттар, көмөш самауыр, буталлы сынаяҡ-сәйгүндәр, башҡа ҡиммәтле нәмәләр алып күп форсить иткән, Собхан старшина, Ғаббас мулла, Кәзә мәзин кеүектәрҙек ҡаҙы-ялын күп ашаған кеше. Ауылды ике яҡлап, Эйек буйлап икешәрөсәр саҡрымға һуҙылған ҙур ике рус ауылынын. һәр бер өйөнә инеп:

— Хи-хи, белеш, мин бит һеҙҙе ерле иттем!.. Ерҙең иң кәттә урынына килтереп ултырттым бит мин һеҙҙе, хи-хи...— тип маҡтанып, үҙ ғүмерендә етерлек көмөшкә лә эскән ул. Дөрөҫ, хәҙер ундай һыйлы саҡтар уға төштә күреп ымһынырға ғына ҡалып бара. Хәҙер һатырға ер юҡ. Ләкин Шымбай каштан аҙ ерҙән дә үҙенә күп файҙа сығарып йәшәй белә торған кеше. Ауылдың күпме ере бар, шул әле һаман уның ҡулында. Һәр йыл сабынлыҡ, сәсеүлекте душ башына бүлеү эше ошо Шымбай ҡарт ҡулынан үтә. Был бүлеүҙә һәр йыл унышлы, яҡшы сәсеүлектәр, һыубаҫар сабынлыҡтар гел хәлле, бай кешеләргә, ә сәсеүлектә иҫке, серек ер, сабынлыҡта соҡор-саҡырлы, ҡыләүекле, түмәрле урын ярлыға тейә. Ьтмәһә, ярлыларҙың ни тиклем ҡаршы килеүенә, ризаһыҙлыҡ белдереүенә лә ҡарамаҫтан, сабынлыҡтар мал башына, ағаслыҡтар мөрйә, өй башына ҡарап бүленә.

Ошо арҡала йыл һайын ер бүлеүҙән байҙар ғына ҡәнәғәт булып ҡала.

— Бәхетле кешеләр һаман да бәхетле,— тип зарлана халыҡ.— Ер бүлгән һайын иң көттә урындар уларға тейй бит!..

Аңлағандары:

— Был Шымбай каштандың этлеге. Ул байҙарҙан мәгәрис алыу өсөн шулай эшләй,— тип раҫлай.— Киләһе йыл уны ер бүлеүгә яҡын юлатмаҫҡа кәрәк!..— тигән була.

Ләкин киләһе йылда ла, унан киләһе йылында ла ер бүлеү эше Шымбай ҡарт ҡулына нисек барып эләккәнен бер кем дә һиҙмәй ҡала.

Шымбай ҡарт ерҙе үҙенә лә, байҙарға ла файҙа килтерерлек итеп бүлеү менән генә ҡалмай, әлбиттә. Ул, бер үк ерҙе бер нисә урыҫҡа һатып, кешеләр араһында хатта үлтерешкә барып етерлек ыҙғыштар тыуҙырыу кеүек эштәр менән дә шөғөлләнә.

Суфыйҙарса һәр ваҡыт түбән генә ҡарап, ҡыҫылып торған күкшел күҙле, йылғыр кәүҙәле был ҡарт йомшаҡ ҡына баҫып, шыбырлап ҡына һөйләшеп бер өҙлөкһөҙ ауылдар, кешеләр араһында йөрөп тора. Уны хәҙер генә был ауылда күрһәләр, хәҙер генә икенсе ауылда, бөгөн генә Ҡыҙыл Мәсет баҙарында күрһәләр, иртәгеһенә Троицк, унын. иртәгеһенә Кершәнлек баҙарында күрәләр. Ни эшләп, ни башҡарып йөрөй ул? Быны бер кем дә белмәй. Тик ҡыҙарынып-бүртенеп, аяғын ҡырын баҫмаҫҡа тырышып, кәүҙәһен уклау йотҡан шикелле тура ҡатырып, әкрен, шым ғына баҫып йөрөүенә ҡарап ҡына кешеләр унын, бөгөн дә юлы уңғанлығын аңлайҙар. Үҙ-ара серле бышылдап:

— Тағы берәйһененең ерен йә үҙен һатып эскәндер инде был каштан,— тип ҡуялар. һуңғы ваҡытта күптәр уны «шымсы» тип тә йөрөтә башланылар.

— Шул шымсылығы менән әҙме кешенен, башына етте, яуыз... Тағы бик күптәрҙең башын ашар әле ул...

Ләкин бер кем дә был һүҙҙәрҙе ҡыҫҡырып, Шымбай ҡарттын, үҙенә ишеттерерлек итеп әйтмәй. Киреһенсә, һәр кем унын, алдында телен тешләберәк торорға тырыша. Урамда, берәй бүрәнә еҫтенә йыйылып, һейләшеп ултырған саҡта, ғәжәп баҫалҡы, изгелекле төҫ менән йылмайып, бесәй шикелле йомшаҡ, һуҙып баҫып Шымбай ҡарт килеп етеү менән, һәр ҡайһыһы, ниндәй ҙә булһа сәбәп табып, был урындан тиҙерәк шылырға ашыға. Хатта унын, улынын, ҡараҡлыҡ менән шөғөлләнеүе хаҡында ла үҙ-ара шым-шым ғына һөйләшеү менән сикләнәләр. Әгәр Әхмәтша урынында башҡа берәү булһа, уны күптән тотоп тукмап, үлтереп ташларҙар ине. Сенки бында ҡараҡка ҡарата үҙ-ара закон шулай. Ҡараҡлыҡты халыҡ алдау, ике йөҙлөләнеү кеүек үк ин, хурлыҡлы эш итеп һанай. Ысын кешегә хас булмаған быдай яраҡһыҙ ҡылыҡты үҙ араларына индермәҫ өсөн иң ҡаты сараны күрә. Бәлки ошоноң өсөндөр, бында ололар ғына түгел, хатта балалар ҙа алдайһың, урлайһың кеүек һүҙҙәрҙе бик һирәк ҡулланалар- Бында, бигерәк тә ярлылар араһында, өй, келәт йәки һандыҡ йоҙаҡлап йөрөү, бер-беренә ышанмау кеүек ғәҙәт бөтөнләй юк. һәр кемдең йорто хужаһынын күңеле кеүек үкшар асыҡ. Ошондай шартта, әлбиттә, Әхмәтшаның ат ҡараҡлығы, унын ниндәйҙер ҡараңғы кешеләр менән бәйләнештә булыуы балаларға ғына түгел, хатта ололарға ла бик ҡаты, ауыр тәҫьир итә. һәр кем был өйҙән йоғошло ауырыуҙан ҡасҡан кеүек ҡасырға тырыша. Әхмәтша ҡараҡты тәртипкә саҡырырға баҙнат итмәгәс, «бәләһенән баш-аяҡ»... тип, уны күрмәмешкә, белмәмешкә һалыша. Ошо арҡала Шымбай ҡарт үҙе лә, улы Әхмәтша ла үҙҙәренен, ҡара кәсебе менән иркенләп көн күрә ине.

Кескәй Емешкә ошондай кешеләр хаҡында уйланып, ни ҙә булһа аңларға, тешенөргә мемкин инеме һун? Юк, әлбиттә. Шуға күрә ул бик тиҙ был уйҙан ялкты.

— Әйҙәгеҙ, ҡайтайыҡ,— тине.— Апайым да әрләр.

— Тәүҙә Бибеш апайынды инеп күрәйек,— тине Щәүрә.— Ул һеҙҙе һағынғандыр.

Йәнеш быға:

— Ҡуй, килеп йөрөгәнде ҡоҙағый яратмай ул,— тип ҡаршы төштө.— Бер көн мин йомош менән генә килгәйнем дә, апайым менән бер ауыҙ һүҙ ҙә һөйләштермәне.

— Килен, бар, мунса яҡ,— тип апайымды тышҡа сығарҙы ла ебәрҙе. Мин унын, артынан эйәреп барайым тиһәм, миңә, ярар, ҡоҙаса, бар ҡайт, ти. Унда Сәрбиямал да көтәлер. Киленгә ҡамасаулап йөрөмә, ти. Мин ҡайтып киттем. Апайым мунса яғынан миңә тилмереп кенә ҡарап ҡалды бахыр...

— Бахыр,— тип ҡуйҙы Шәүрә лә.— Ин уҫал бейемгә тура килгәс, ни эшләһен һуң...

— Әсәй... Мә-мәй,— тип тәтелдәй башланы Хәсән.— Мәмәй — мәмәй!..

— Мырҙам да асыҡты,— тине Шәүрә.— Ярар, инмәһәгеҙ, әйҙәгеҙ ҡайтайыҡ.

Ҡыҙҙар, урамдың ҡап уртаһына төшөп, бүтән бер ерҙә лә туҡталмай ҡайтып киттеләр. Хатта Собхан старшиналарҙың өй артында ятҡан оҙон-оҙон ҡарағай бүрәнәләр өҫтөнә ииыйылып, ғәҙәттәгесә, баҙар күстәнәстәре менән маҡтанышып ултырған бер төркөм ҡыҙҙар янында ла туҡталманылар. Емеш:

— Шул маҡтансыҡтарҙы күрмәгәнгә, ишетмәгәнгә һалышайыҡ,— тип улар яғына боролоп ҡарамай ҙа уҙырға тырыштылар. Ә тегеләр, бөтә көстәрен һалып, үҙ байлыҡтарын күрһәтергә ашыҡтылар. Емештәрҙе һоҡландырған баяғы

ташҡурсағын әле булһа ҡосаҡлап, янындағы ҡыҙҙарҙың иҫен-һушын китәреп, ҡап уртала ултырған Алтынбикә, сәсәкле оҙон кәнфиттәрен баш осона күтәреп, һикереп үк торҙо.

— Бутый-бутый!.. Кәнфиткәй, тәмлекәй!.. Һеҙҙә юҡ шул, юҡ шул, әй!..

Әхмәтша ҡараҡтын, уҫал, ҡомағай ҡыҙы Зәһирә менән Ғаббас мулланын.чмаҡтансыҡ ҡыҙы Гөлйыһан да, береһе перәник, икенсеһе керәндил күрһәтеп бүрәнә өҫтөндә һикеренделәр.

— Уй, тәмлекәй бит әлеү! Һеҙҙә был юҡ бит әлеү!..

Асыҡҡан Хәсән, ҡыҙҙар кәнфиттәрҙе үҙенә бирергә һуҙалар тип аңлап, бөтә көсө менән бүрәнә яғына тартылды.

— Ап-пай... Мә-мәй, ә?

Быны күреп тегеләр балаларға хас аяуһыҙлыҡ менән тағы ла кинәнеп киттеләр.

— Татлыҡай, тәмлекәй, Хәсән, һиңә тәтемәй!..

Емештәр һаман иғтибар итмәнеләр, ишетмәгәнгә һалыштылар. Ләкин был иғтибарһыҙлыҡ тегеләрҙең зәменә тейҙе. Улар был ғорурлыҡ өсөн шунда уҡ үс алырға ашыҡтылар.

— Эй, бахырҙар,— тип шыңғыратып көлөп ебәрҙе Алтынбикә.— Күрмәмеш кеше булып барған булалар бит әле. Ауыҙ һыуығыҙ ҡойолоп барғанын белмәйҙәр тип уйлайһығыҙмы ни, ҡойолдороҡтар! Ха-ха-ха!..

Зәһирә менән Гөлйыһан унан да арттырып ебәрҙеләр.

— Емеш, Йәнеш, килмешәк!..

— Килмешәк, килмешәк.

— Килгән еренә кит ишәк!.. Ха-ха-Хай!..

Емеш түҙмәне:

— Йүгерәйек! — тип бышылданы.— Әйҙәгеҙ улар тәңгәленән тиҙерәк үтеп китәйек.

Ҡыҙҙар бар көскә йүгереп киттеләр.

— Әллә-лә, өрктөңмө? Үҙәгеңә үттеме? — тнп тәтелдәп ҡалды тегеләр.

## IV

Емештәр өйгә ҡайтып ингәндә, күптән ҡояш байыған, эң,ер төшкән, киске аш ваҡыты еткәйне. Йәнеш, оҙаҡ йөрөгән өсөн үгәй әсәһенән үҙенә ныҡ ҡына эләгәсәген һиҙлап булһа ла иҫенә төшөрөп, туп-тура аласыҡҡа йүгерҙе. Ә Емеш, ҡысҡырып илап ебәреүҙән үҙен кескә тыйып, ишек алдында салғы сүкеп булашҡан атаһы янына барып ултырҙы. Ул, ғәҙәттә, атаһын да үгәй әсәһе кеүек үк күреп, ситһенеп йөрөһә лә, әле уға таянғыһы, унан ниндәй ҙә булһа берәй йылы һүҙ ишеткеһе килә ине. Ләкин Байгилде ағай ҡаршыһына килеп, ҙур яҡты күҙҙәрен керпек тә ҡаҡмай үҙенә төбәп ултырған кескәй ҡыҙына бик оҙаҡ бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Уға ара-тирә һынаулы ҡараш ташлап, өнһеҙ-һүҙһеҙ генә салғыларын сүкене лә сүкене. Емеш тә өндәшәне. Ә эңер ҡуйырғандан-ҡуйыра барҙы. Асыҡ зәңгәр күк ҡараһыу төҫкә инде. Һирәк-һаяҡ төҫһөҙ генә йондоҙҙар ҙа ҡалҡып сыҡты. Ахыр, Байгилде ағай салғыларын еүкеп бөтөрөп, аласыҡ янындағы ылаш бағанаһына алып барып элде лә Емеш янына килеп осло тубыҡтарын ҡосаҡлап ултырҙы.

— Йә, ҡыҙым, ни бар?

Күнеле тулған Емеш илап ебәреүҙән ҡурҡып өндәшмәне. Байгилде ағай ҙа ҡабатлап һүҙ ҡатманы, тирләгән устары менән ҡыҙының сәсенән, арҡаһынан иплә кенә бер-ике һыпырҙы ла тынып ҡалды... Улар шул хәлдә оҙаҡ ултырҙылар. Был арала эңер тағы ла ҡуйыра төштө. Йондоҙҙар сағыуланды. Тулған ай ҙа, талғын ғына йөҙөп, бөгөн айырыуса киң, бейек күренгән ҡараһыу күктең ҡап уртаһында, Емештәрҙең баш осона килеп туҡтаны. Емеш күҙҙәренән йәш килгәнсе айға текләне. Күнеле тынысланып, уйҙары ай, күк донъяһына күсеп китте. Ахыр ул, аптырап:

— Атай, ай нин,ә былай ялбыр икән ул? Хас теге сәскә атҡан көнбағыш башы кеүек кенә, эйе бит, атай? — тип һорап ҡуйҙы.

— Ай ялбыр түгел, ҡыҙым. Бәлки, һинен. күҙҙәрен. генә алыҫтан насар күрәлер. Шуға ай һинә ялбыр күренәлер,— тине атаһы.— Мин дә бала саҡта алыҫтан насар күрә инем. Һинең дә үтәр. Йә булмаһа, бер саҡ, аҡса булғас, мин һиңә күҙлек алып бирермен дә һин айҙы кенбағыш башы кеүек итеп түгел, ә анауы үҙебеҙҙең еҙ тас кеүек итеп күрерһен, ҡыҙым, йәме!..

Байгилде ағай бөгөн, нисектер, асыҡ сырайлы, һөйләнсәк һымаҡ ине. Кис тә сикһеҙ матур ине шул. Бына ҡайҙалыр бик яҡында ғына үлән араһында тартай ҡысҡыра.

— Тарт!.. Таррр-рт!..

Әйтерһең һаҙлыҡҡа батҡан да кемгәлер үҙен тартып сығарырға бойора. Уға барҡылдаҡ менән бүҙәнә үҙҙәренсә ҡысҡырып яуап ҡайтара:

— Барҡк!.. Барҡ! Баҡ!..

Әйтерһең барҡылдаҡ тартайға:

— Яҡшы баҡ, ҡарап йөрө,— тип өйрәтә Бүҙәнә:

— Бытбылдыҡ, юҡ булдыҡ! — тип өмөтһөҙ бытылдай. Ә һары сәпсек бик тырышып ниндәйҙер Сәйҙә әбейҙе үсекләй:

— Сәйҙә, Сәйҙә, Сәйҙә әбей!.. Сәйҙә әбей!..

Әллә инде тартайҙы һаҙға батырыусы Сәйҙә әбей тимәксе була.

Ә ҡайҙандыр, тауҙар артынан, бик алыҫтан:

— Са-а-аҡ!.. Су-у-уҡ!.. Са-ҡ! Су-ҡ!..— тигән хәлһеҙ генә

тауыштар ҙа ишетелгеләп ҡала. Бынан Емештен, хәтеренә ҡауыша алмай илап ғүмер иткән ике туған хаҡындағы Саҡ-Суҡ әкиәте килеп төшә лә күҙҙәренә йәш эркелә.

Байгилде ағай ҙа ҡоштар һөйләшеүенә ҡолаҡ һалып оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Унан Емештең башынан тағы бер йомшаҡ ҡына һыйпап:

— Ҡыҙым, ана тегендә тау түбәһенә тейә яҙып торған яҡты йондоҙҙо күрәһеңме?— тип һораны.

— Күрәм,— тип яуап бирҙе Емеш, бик үк асыҡ күрмәһә лә. Сөнки уға атаһының бөгөн үҙе менән шулай һөйләшеп ултырыуы бөткөһөҙ ҡыуаныс бирә, бая урамда ишетеп ҡайтҡан йән әсеткес һүҙҙәрҙе онотторғандай була ине.

— Уны Зөһрә йондоҙ, тиҙәр,— тип дауам итте Байгилде ағай.— Ә теге теньяҡтан көньяҡҡа табан айырса ҡойроҡло көмөш йылан кеүек һуҙылған йондоҙҙарҙы Ҡош Юлы, тиҙәр. Ҡоштар ошо юлдан ҡайтып-китеп йөрөйҙәр, ти...

«Кем һалған икән уларға был көмөш юлды?» — тип аптырап уйлай Емеш. Ләкин өндәшмәй. Байгилде ағай:

— Ә бынауы сүмес кеүек теҙелгән ете йондоҙға Етегән тиҙәр,— тип дауам итә. Унан әкрен генә мөнрәп:

Етегән дә тигән ете йондоҙ,
Ете әйләнә тандар атҡансы...—

тип монло һуҙып йырлап та ала. Унан тағы уйсан ғына һөйләп китә.

— Етегән йондоҙ — ете бүре, ти, ул. Ә бына теге Бәләкәй Етегәнден осонда торған үтә яҡты йондоҙ Тимер ҡаҙыҡ. Уға ваҡ ҡына йондоҙҙарҙан теҙеп яһалған көмөш сынйыр менән бәйләнгән бынауы береһе һары, береһе буҙ төҫлө йондоҙҙарҙы һары ат менән Буҙ ат, тиҙәр. Уларҙы ҡасандыр Тоғро батыр менән Алдар батыр көрәшер алдынан ошо Тимер ҡаҙыҡҡа бәйләп киткәндәр. ти. Эйәләре шул көндән бирле бер-береһен еңә алмай һаман көрәшеп, көрмәкләшеп, ҡайҙалыр йөрөйҙәр, ә меҫкен аттар һаман шул Тимер ҡаҙыҡҡа бәйле тик торалар, ти. һары ат менән Буҙ аттың эйәһеҙ ҡалғанын белгән ете бүре уларҙы ашамаҡсы булып һәр төн ҡыуа, һары ат менән Буҙ ат һәр төн Тимер ҡаҙыҡты уратып сабып ҡаса, ти. Тик таң атҡас ҡына ял итәләр, ти, бахырҙар. Таң атҡас, батырҙарҙың килеп сығыуынан ҡурҡып, аттарға һөжүм итергә ете бүре баҙнат итмәй, ти. Шулай итеп, мең-мең йылдар буйы ҡыуышалар ҙа ҡыуышалар, ти...

Емеш, атаһы шикелле тын, моңһоу итеп:

— Теге батырҙарҙың ҡайһыһы еңер икән, атай? Ҡасан еңер икән? — тип һорап ҡуя. Байгилде ағай таиа уйлап, тынып ултыра бирә лә: .-. ... .• . , . - •



— Ҡасан еңерен белмәйем, ҡыҙым,— ти.— Ә бына ҡасан да булһа барыбер Тоғро батыр еңер тип шикләнмәй әйтә алам...

— Ни өсөн Тоғро батыр енер?— ти тағы Емеш.

Байгилде ағай тағы тынып ултыра. Сөнки уға халыҡ легендаһына нигеҙләп әле генә үҙе уйлап сығарған был әкиәттен аҙағын нисек алып барып бөтөрөү тураһында, ҡыҙына һөйләп бирерҙән алда, эстән бер ни хәтле уйлап алырға тура килә.

— Ни өсөн тиһеңме, ҡыҙым? — тип ҡабатлап һорай ул, бер аҙ ултырғас. Унан Емештең яуабын да көтмәй: — Тоғро батыр көрәшкән һайын көсләләнә, ә Алдар батырҙың көсө кәмей бара, ти,— тип һөйләп китә.— Ә ҡасандыр, көрәшкә тәү башлаған саҡта, Алдар батыр көслөрөк булған тип һөйләйҙәр...

— Ә бына Алдар батыр енеп ҡуйһа? — тип хафалана Емеш.

— Юҡ, еңмәҫ,— ти Байгилде ағай, ышаныслы итеп.— Алдар.батыр нисек кенә көслө, мәкерле булмаһын, барыбер Тоғро батыр бер саҡ еңәсәк!

— Ниңә? — тип ныҡыша Емеш.

— Әйттем бит... Унан һун. ер йөҙөндәге бөтә яҡшы кешеләр унын шулай булыуын теләйҙәр... Теләйҙәр генә түгел, бөтә яҡшы кешеләрҙең көсө Тоғро батырға йыйыла бара.

— Улай булғас, Алдар батырға ла яман кешеләрҙен, көсө йыйыла баралыр бит, атай...

— Йыйылһа ни, ерҙә бит яман кешеләр аҙ. Ә яҡшы кешеләр бик күп. Шулай булғас, ҡайһы батырға көс күберәк барырға тейеш?!

— Ә-ә...— ти Емеш, һуҙып. Уға атаһының был серле философияһы, әлбиттә, аңлашылып етмәй. Шуға ул һүҙҙе үҙенен. йөрәген һәр саҡ ейкәп торған һорауға күсерергә ашыға.

— Атай, беҙҙең унда туғандарыбыҙ... Яҡташтарыбыҙ бармы?

— Ҡайҙа? Күктәме? — тип көлә Байгилде ағай. Сөнки был һорау һис тә һөйләгән әкиәткә тура килмәй.

— Түгел дә... Иҫәнбәттә тим дә баһа,— ти Емеш, үпкәләп.

— Ә, унда?.. Бар. Булмайса ни, бар... Шәһит бабайың, Сыуаҡбикә инәйең...— тип өҙөп-өҙөп һанап сыға Байгилде ағай.— Улар бер туғандан да яҡындар... Унда Бибекәй менән Гөлкәй — һеҙҙең дуҫтарығыҙ бар ине... Үлгәндәр... Ғәжәп, ғәжәп, нисек һеҙгә йоҡманы ул ауырыу? Хәтерләйһеңме, ҡыҙым, шуны... Бибекәй менән Гөлкәйҙе?..

Емеш ендәшмәй. Ул үҙ ауылын хәҙер бетенләй тип әйтерлек хәтерләмәй. Ундағы тормош та, кешеләр ҙә уның хәтерендә ҡасандыр, кемдәндер ишетеп кенә белгән, бик күптән-

ге гүзәл һәм моңһоу бер әкиәт һымаҡ ҡына булып һаҡлана. Ләкин хәҙер Емештең был хаҡта хәтерләп ултырырға ваҡыты юҡ. !Ул, атаһына үҙен борсоған тағы бер-ике һорауын биреп, яуап алырға ашыға.

— Атай,— ти ул, йәнә ҡабаланып,— ниңә беҙ һаман үҙебеҙҙең ауылға ҡайтмайбыҙ?

Был һораүҙан һун. инде Байгилде ағай, ни тип яуап бирергә белмәгәндәй, оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы. Унан үҙ алдына һөйләнгән кеүек әкрен, ләкин ышаныслы тауыш менән:

— Ҡайтырбыҙ әле, ҡыҙым, барыбер ҡайтырбыҙ! — тип ҡуйҙы.

— Ҡасан?..—ти Емеш, ҡыуанып.— Ҡасан ҡайтырбыҙ, атай?!

— Бына тиҙҙән, Тоғро батыр енгәс тә...— ти атаһы, серле йылмайып.

— Эй, юрый әйтәһең икән дә,— ти Емеш, хәтере ҡалып. Тағы күңеле тулып, бик оҙаҡ һөйләшә алмай ултыра. Атаһы ла өндәшмәй. Ахыры ул да ниндәйҙер үҙенә генә билдәле булған уй эсенә инеп сума.

Ләкин оҙаҡламай Емештең башында тағы һорау тыуа.

— Атай, ниңә беҙ ерһеҙ? Ниңә беҙ килмешәк? Ишәк?

Байгилде ағай көтөлмәгән был һорауға ни тип яуап ҡайтарырға белмәй тамам аптыграп ултырған арала, аласыҡтан Сәрбиямал сәрелдәп килеп сыға.

— Атаҡ, сиған балаһы, Емеш! Ниңә тик ултыраһыҡ? Сәй әҙерләһәңсе!

Емеш, йүгереп, атаһы янынан тороп китте. Байгилде ағай, маңлайынан атылып сыҡҡан эре тир бөрсөктәрен усы менән һыпырып, ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы:

«Ҡасан һуң беҙ үҙ ауылыбыҙға ҡайтырбыҙ?!» Эйе, был бала өсөн түгел, уның үҙе өсөн дә хәл иткеһеҙ ауыр, аҙаплы һорау ине.

Уға ҡалай яуап бирәһең?!

Оҙаҡламай күк үлән өҫтөнә балаҫ түшәп, ишек алдына сәй урыны әҙерләнде. Байгилде ағай, Сәрбиямал, Йәнеш, Емеш — дүртәүләп сәй эсергә ултырҙылар. Кис тымыҡ, еләҫ. Тик ауыл артындағы бейек тирәктәрҙән бөтәһе бер юлы пыр тұҙып осоп киткән ҡарғалар, сәүкәләр көтөүе генә был тынлыҡтың мәҙаһын ебәрә. Улар, күккә сөйөп ебәрелгән бүректәр шикелле боларьт, түбә өҫтөндә бер туҡтамай әйләнәләр. Сәрбиямал ҡарға-сәүкәләр сыр-сыуын харап яратыуы тураһында нисәнселер тапҡыр һейләп ала. Ләкин тын кистең йәмен ебәреүсе был тыҡылдауҙар, әллә уларға йыш ҡына Сәрбиямалдың тауышы ла ҡушылғанға, Емешкә һис тә оҡшамай. Байгилде ағайҙың да мәҙаһын ебәрә. Ә ҡарғалар, ҡарышҡан шикелле, бында күсеп килгәне бирле һәрйәй уларҙык



баш өҫтөндә көнөн-төнөн ҡарҡылдап ҡына торалар. Бына бөгөн дә, Емештәр сәй янына барып ултырыу менән улар пыр туҙышып баш осонда әйләнергә керешге, Сәрбиямал да, балаларға күҙҙәрен әйләндереп ҡарап, ғәҙәттәге мыжыуына тотондо. Етмәһә, бөгөн бынын өсөн йәтеш сәбәп ?9 әҙер ине. Ай буйы ҡыуғында йөрөп, дуҫ-ишен һағынып ҡайтҡан Иштуған һаман өйҙә юҡ. Сәрбиямал мыжыуын:

— Был тиклем ялҡау, аҙғын малай булыр икән, айһай!..— тип башлап ебәрҙе.— Ҡайтып ашаны ла сыҡты ла китте. Әйтерһен миндә әндерәй ҡаҙнаһы бар? һиңә әйтәм, ишетһен ҡолағын, штобы улынды тый. Эшләп ашаһын. Миңә бынауы эшкә ашмаған ике ҡыҙынды бушлай ашатып ятҡырғас та етер!..

Таяҡтың бер осо шулай Иштуғанға бәрелеп ҡаҡлыкҡас, Сәрбиямал икенсе осон ҡыҙҙарҙың башына төшөрөргә ашыҡты.

— Йәнеш, сәнселгер, танауынды мыршылдатма.' Нинә уны тартаһың да тартаһың! Ерәнгес.[1]..— Аһ-аһ, Емеш, сиған балаһы, нинә ауыҙынды шул хәтле тасылдатып ашайһын? һай, ҡомағай. Әҙәм рәүешле иплэп кенә ашаһан булмаймы ни!

Был игәүҙең төбөндә, балаларҙы өркөтөп, тиҙерәк торғоҙоп ебәреү, сәй янында үҙе генә иркенләп ҡалыу теләге ята ине, әлбиттә. Сәрбиямал быға һәр ваҡыт бик тиҙ ирешә ине. Бөгөн дә уны ҡыҙҙар оҙаҡ көттөрмәнеләр. Бер-ике ҡабым икмәк менән ауыҙҙарын яндыра-бешерә берәр сынаяҡ сәй эстеләр ҙә тороп та киттеләр. Унан бойоғошоп урамға, ҡойма буйына сығып ултырҙылар. Байгилде ағай, ғәҙәттәгесә, улын да, ҡыҙҙарын да яҡлап ләм-мим һүҙ әйтмәне. Уның ҡарауы Сәрбиямалдың татылдауы балаларҙы урамда тыныс ҡалдырманы.

— Әле шуны әйтәм, бәхетем булһа, аллаһы тәғәлә үҙемә бала бирер ине, тим. Ете-ят балаларҙы ҡарап ултырсы инде... Өсәү бит, өсәү... Өс етем аҫрасы инде... Исмаһам, бынауы, бәләкәсе лә үлмәй бит... Етем үләме ни ул?.. Етемдең тиреһе ете ҡат тип белмәй әйтмәйҙәр шул инде.

Байгилде ағай ҡатынын һөйөп-иркәләп, тынысландырырға, асыуын баҫырға тырышты. Сәроиямал уның һайын ярһыны.

— һин нимә мине йәлләйһең. Яратмайһың бит һин мине. Яратһаң, аяһаң, ошолайтып, минең өҫтөмә ҡырым-сиреүе баланды килтереп ауҙарып ҡуймаҫ инең. «Байгилде Сәғүрәһен бик тә яратҡан икән. Сәрбиямалға ул аптырағандын. көнөнән генә өйләнгән икән», тип кешеләр тиккә генә һөйләмәйҙәр инде. Ә мин ни, бахыр, эскерһеҙ булғас ни, ннэшләйем, ышанам... ,



^Щ

Ул, иламһырап, Байгилде ағай күрмәгәндә күҙҙәренә төкөрөк һөртөп, сылатып та ҡуйҙы.

— Йә, әйт, штобы, дөрөҫөн генә әйт, минеме, әллә һаман шул Сәғүрәнде генә яратаһыңмы?

Йөрәгенең түрендә мәңгелек урынды биләп киткән Сәғүрәһенең иҫтәлегенә лә тап тешөрмәй, Сәрбиямалдың хәтерен дә ҡалдырмай торған аҡыллы яуап табырға тырышып, Байгилде ағай оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы.

— Йә, ниңә өндәшмәйһең? Мин кемгә әйтәм?

Байгилде ағай баҫалҡы ғына йылмайып ҡуйҙы:

— Сәғүрәне нисек яратаһың? Үлгән дә баһа ул... Үлгән кешене яратып буламы ни?.. Уны... иҫкә алып ҡына була...

— Шунан, шунан? Уны һағынып иҫкә алаһың. Шунан?

— Шунан ни шул. һине яратам, әлбиттә...

Атаһының был һүҙе кескәй Емештен. йөрәген утлы ҡыҫҡыс менән ҡыҫып алған кеүек булды. «Минең әсәйемде яратмайым тип әйтте!.. Бынауы ҡара бисәне генә яратам, ти! Ярай, бынан һуң мин дә уны яратмайым... Атай тип әйтмәйем бынан һуң, вәт!..»

Кескәй ҡыҙ, ысынлап та, атаһына булған был асыуын шул көндөң иртәгеһенә үк күрһәтте. Байгилде ағай менән Иштуған иртүк бесән эшләргә китергә әҙерләнделәр. Бына, ат егелеп, арбаға салғы, тырма, һәнәктәр тейәлеп бөттө. Иштуған, дилбегәне тотоп, арбаға менеп ултырҙы. Әллә кисә кис иренән үҙенең күптән теләп тә ишетә алмаған «яратам» һүҙен ишетеп ҡатынлыҡ ғорурлығы ҡәнәғәтләнгәнгә, әллә инде иренең уға Әхмәтшаһы менән теләгәнсә осрашырға һис тә ҡамасауламай, ҡыуығындан ҡайтҡандың иртәгеһенә үк тағы ҡырҙа ҡунып бесән эшләргә китергә йыйыныуына кинәнгән Сәрбиямал да йүгереп йөрөп уларҙы юлға әҙерләне, ҙур ғына юл тоҡсайына аҙыҡ-түлек тултырҙы. Хатта йомартланып китеп, өй ҡыйығынан бер бәйләм ҡаҡланған ҡаҙы ла алып төшөп тоҡсайға тыҡты.

— Исмаһам, берәй тапҡыр булһа ла йүнле аш ашарһығыҙ. Иштуған, һин штобы, ҡаҙыны үҙең ашама, атайыңа ғына ашат. Ишетһен ҡолағың!..

Бына инде бөтәһе лә әҙер булды. Тик Байгилде ағай ғына һаман арбаға менеп ултырмай, аласыҡ янында, ситтә, үҙенә сикһеҙ үпкәле ҡараш ташлап, өнһөҙ-һүҙһеҙ баҫып торған кескәй ҡыҙына текләп, ниҙер уйланып тора ине. Ахыр ул, йомшаҡ ҡына итеп, ҡыҙын үҙ янына саҡырҙы.

— Емеш, ҡыҙым, кил әле, үҙеңде бер һөйәйем!

Емеш урынынан ҡуҙғалманы. һаман шул үпкәле күҙҙәрен атаһына төбәп, баҫҡан урынында тик торҙо. Байгилде ағай уның янына барҙы. Унан бығаса һис тә булмағанса күңеле йомшарып, ҡыҙын иркәләргә, һөйөргә тотондо.



— Ҡыҙыҡайым, бәләкәсем, ниңә миңә былай асыулыһың? Асыуланма, мин бит һине яратам. һин бит минең берҙән-бер бәләкәсем. Башҡа бәләкәс балам юҡ бит минең...

Байгилде ағай хатта Емеште, ысынлап та, бәләкәс бала шикелле итеп, күтәреп тә алды. Ләкин Емеш арыҡ ҡулдары менән атаһының тимер кеүек ҡаты яурындарынан этәреп, уның ҡулынан ысҡынырға тырышты.

— Кит, ебәр, төшөр!..

Байгилде ағайға был кескәй кешенен, билдәһеҙ ҡаты асыуы ҡыҙыҡ тойолдо, ахыры, ул күңелле ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Ай-һай-һай, ҡалай уҫал икән дә баһа минең бәләкәсем! Бигерәк көслө икән был... Ҡара, нисек минең яурынды һындырып алып бара!..

Ләкин уның был шаярыуын Емештең балаға хас булмаған ҡырыҫ, асыулы ҡыланышып шып туҡтатты. Емеш, үҙе лә һиҙмәҫтән, ике ҡуллап, атаһынын. һаҡалына сат йәбеште лә, иҫ киткес асыу һәм күрә алмау менән:

— Ебәр!..— тип бышылданы.

Кескәй баланың күкрәк төбөнән ҡыҫылып сыҡҡан был һүҙ ҙә, уның йәшле ҙур күҙҙәренән атылған ҡырағай асыу ҙа ҡот осорғос ине. Байгилде ағай аптырап ҡыҙына тағы бер аҙ текләп тора бирҙе лә ергә баҫтырҙы. Унан, нисектер, ҡапыл ҡартайып, бөгөлөп төшкән һымаҡ булып, тигеҙһеҙ аҙымдар менән арба яғына китте.

Сәрбиямал да, күрәһең, йәнә аулаҡ ҡалыуын Әхмәтшаһына белдерергә ашығып, кейенеп-яһанып, урамға сығып китте.Ишек алдында үҙҙәре генә ҡалғас, Йәнеш һылыуы янына барҙы.

— Йә, иҫәүән, ниңә, һылыу, улай атайымдыц һаҡалына йәбештец?.. Йә, иҫәүән, атайҙы кеше шулай итәлер шул?'

Емеш һаман шул ярһыулы асыу менән яуап бирҙе.

— Үҙе ниңә минен. әсәйемде яратмайым тип әйтте? Әйтмәһен икенсе.

— Әйтһә ни... Нисек итһен...

— Әйтмәһен. Мин дә уны яратмайым. Үлһен... Әсәйем үлгәс, ул да үлһен!..

Емештең был һүҙенән йомшаҡ күңелле Йәнеш, ҡаты "ЩРЌынып, ни әйтергә белмәй торҙо. Аҙаҡ, әҙерәк тынысланғас ҡына, өлкәндәрсә ауыр көрһөнөп:

^— Кит, иҫәүән, атайым үлһә, беҙҙе кем аҫрар?— тип уйҙы.—- Һин, һылыу, атайым үлһен, тип теләмә. Үгәй әсәйебеҙ йыуашыраҡ, шәфҡәтлерәк булһын ине тип кенә телә, иәме...— тип ейрәтте. Емеш бүтән өндәшмәне.

Был ваҡытта инде уның иғтибарын күрше кәртәнән ише-

телгән көмөш сыцы кеүек яңғырауыҡлы йыр үҙенә тартып алғайны.

...Ерән ҡашҡа аткайым да
Башын сайҡай малҡайым,
Алдарында һолоһо бөтһә,
Һыҙыла йөрәк майҡайым,
Ай-һай, һыҙыла йөрәк майҡайым...

Был Байрастың тауышы ине. Ул әле бары ун йәштәрҙә генә булһа ла, был оҙон көйҙө матур, моңло итеп йырлай белә. Емеш унын, йырын тыңлап ултырырға ярата ине.

Өммөгөлсөмдөң хужалығындағы бөтә ирҙәр эшен хәҙер ошо мыҡты кәүҙәле, һәр ваҡыт асыҡ, яҡты сырайлы, шаян, ҡара малай — Байрас алып бара. Әле лә ул бына ошолай йырлай-йырлай ишек алдында ҡамыт төҙәтеп маташа ине. Эшен бөткәс, ул, ғәҙәтенсә, ситән башына менеп, Емеште үсекләп алырға ла онотманы.

— Бибеш, Йәнеш, Гвлйемеш.
Галйемеш шаҙра имеш!..

Йәнеш уға:

— Кит, юкты һөйләмә, минең һылыуым шаҙра түгел дә ул,— тип ҡысҡырҙы. Ә Байрас һаман таҡмаҡлауын дауам итте. Ул, ни өсөндөр, Емеште һәр ваҡыт шулай үртәргә ярата ине. Әле инде ул Емештең илағанын ишеткәне булмаһа ла:

— Бибеш, Йәнеш, Гөлйемеш.
Гөлйемеш, илаҡ имеш! —

тип тә өҫтәп ебәрҙе.— Ахыр, Емеште берәй һүҙ өндәштереү* ҙән өмөт өҙөп:

— Бибеш, Йәнеш, Гөлйемеш!
Гөлйемеш телһеҙ имеш1..~

тип, ҡул һелтәп, ситән башынан төшөп китте.

Емеш, өндәшмәһә лә, башҡа ваҡытта Байрастың был үсекләүҙәренә һис тә асыуланмай ине. Киреһенсә, унын, был шаян, шат холҡо уға оҡшай ҙа. Хатта ул, башҡа ҡайһы бер малайҙар шикелле, «ерһеҙ», «килмешәк» тип хурламауы менән Емешкә яҡын да тойола ине. Ләкин бөгөн уға Байрастың был эскерһеҙ шаярыуы ла сикһеҙ ауыр тойолдо. Шуның өсөн ул ҡысҡырып илап ебәреүҙән ҡурҡып, Байрас ситән башынан төшөп киткәнсе уға арты менән әйләнеп торҙо. Ул төшкәс, йәшле күҙҙәрен Йәнешкә төбәп:



— Йәнеш,-^ тине.— Нинә беҙҙе бөтәһе лә кәмһетәләр икән?.. Өйҙә үгәй әсәй, урамға сыкһаң ҡыҙҙар, малайҙар.. Етемәк тә... Килмешәк тә... Ерһеҙ...

— Аһ, ерһеҙ булғас — ерһеҙ, килмешәк булғас — килмешәк тиерҙәр инде,— тине Йәнеш ғәмһеҙ^ генә.— Кешенең ауыҙын ҡаплап булалыр шул! Кит, ошо иҫәүән, юкты-барҙы күнеленә ауыр алып, эсте бошорор ҙа торор!.. Әйҙә, лутсы, апайым ҡайтмаҫ элек, йүгереп кенә барып, һыу инеп ҡайтайыҡ, бигерәк тирләтә бит.

— Әйҙә...

Ҡыҙҙар йүгерешеп урамға сыҡтылар. Тап ошо ваҡыт урамға, кәзәкей сабыуҙарын ялпылдатып, баш осона ашъяулыҡтай ҡыҙыл сепрәк күтәреп болғай-болғай, йән-фарманға еабып бер һыбайлы килеп инде.

— һуғыш!.. һуғыш!.. һуғыш!.. Ярман һуғыш башлаған!..

Һыбайлы, һөрәнләй-һөрәнләй, урамды бер-ике әйләнде лә, килгәндәге кеүек, күҙ асҡансы китеп тә юғалды. Кешеләр лерләшеп урамға һибелделәр. Йәнеш менән Емеш тә улар араһына инеп юғалды.

— һуғыш!.. һуғыш!.. һуғыш!..

## Y

Шәһит бабайҙың ашҡаҙан ауырыуы менән яфалана башлауын башта бер кем дә белмәне. Ул һаман элеккесә шул ишек алдында, үҙенен, ғүмер иткән лапаҫы аҫтында, тәпәнтөпән, көрәк-һәнәк яһап, тәгәрмәс туғыны бөгөп, мискә ҡоршап бер өҙлөкһөҙ эшләп тора бирҙе. Хатта был эштәрҙең килере хәҙер унын, үҙенә, ғаиләһенә түгел, ә Ҡормош бай файҙаһына ғына китеп тороуы ла уны эштән һыуытманы. Аслыҡ йылда атһыҙ ҡалғаны бирле Шәһит бабайҙың улы Шаһиморат Ҡормош байҙарҙа ялсылыҡта йөрөй, ә Шәһит ҡартҡа һенәрселек өсөн ағас-ташты Ҡормош бай үҙ аты менән килтертә лә эшләнгән әйберҙәрен, ярты хаҡын да бирмәй, үҙенә ала. Ҡормоштоң уландары хәҙер аршынлы тауар менән генә түгел, көрәк-һәнәк кеүек хужалыҡ әйберҙәре менән дә сауҙа итәләр. Уларға был әйберҙәрҙе Шәһит ҡарт кеүек атһыҙлыҡтан унын, тырнағына барып ҡапҡан һөнәрселәр бушҡа тигәндәй эшләп биреп торалар ине. Шәһит ҡарт та аяғынан тамам йығылғансы ҡулынан балта-бысҡыһын һалманы. Күршеләре унын, көндән-көн шинә барған йөҙөнә, һөйәк менән тиренән генә тороп ҡалған ҡулдарына ҡарап:

— Бабай, ауырыҡһынып тораһыңмы әллә? Был арала йонсоп киткән кеүек күренәһен,,— тип һорап -ҡараһалар ҙа, Шәһит ҡарт уларға, ғәҙәтенсә, ялбыр ҡашы аҫтынан мут ҡына йылмайып:

— Ҡартайтты бит, балалар. Боронғолар:— Ир кеше ил-

лелә — ил ағаһы, алтмышта — аҡһаҡал булыр, етмештә ерән төлкөгә әйләнер, һикһәндә һикереп атҡа менә алмаҫ, туҡһанда туңҡайып китер,— тигәндәр бит. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ил ағаһы ла, аҡһаҡал да, хатта ерән төлкө лә булып булманы булыуын, ә бына туңҡайып китер саҡ бөтә кешегә лә бер тигеҙ килә икән, балалар,— тип тыныс ҡына көләмәсләп яуап ҡайтара ла тағы эшенә тотона. Ә кешеләр шым ғына үҙ-ара ҡайғырышалар ҙа тыналар.

— Ҡылтамаҡ ауырыуына һабышҡан бит бисара. Тамағына бер ҡабым аш та үтмәй икән...

— Эх бахыр, былай ҙа тамағы ашҡа, өҫтө кейемгә туймай ғүмер итте. Ниңә аллаһы тәғәлә уны аҙаҡҡы көнөндә лә астан интектерә икән?..

Бында, ҡылтамаҡ ауырыуы менән ауырыуынды кешегә белдерһәң, ауырыу көсәйә, өндәшмәй түҙһәң, үтеп китә икән, тигән ышаныу йәшәй. Шуға күрә был ауырыуға дусар булған кешеләр элек-электән шулай, йығылғансы һау кеше булып ҡыланып йөрөп үләләр ине. Шәһит бабай ҙа әллә ысынлап та һауығыуына ышаныпмы, әллә инде зарланып-һыҡтанып үҙ аҙаоың менән башҡаларҙы ла аҙапламау өсөнмө, әллә был өмөтһөҙ, рәхимһеҙ ауырыуҙы түҙемле кисерә белеү өсөн уйлап сығарылған һымаҡ был ғәжәп кешелекле ғәҙәткә тыйнаҡ хөрмәт йөҙөнәнме — аҡтыҡ һулышына хәтле ауылдаштарынан ауырыуын йәшерҙе. Зәлифә әбей ҙә бабайының былай хәлһеҙләнеүен, ябығып китеүен аслыҡ йылда бер төптән үлеп киткән Бибекәй менән Гөлкәй ҡайғыһына ғына һылтап ҡалдырырға тырышты.

— Гөл кеүек ике баланы бер юлы ҡара ер ҡуйынына илтеп тыҡҡас, нисек ҡайғырмаҫһын, да, нисек бөтмәҫһен,?.. Әллә шул Ҡормош бай сүплегенән бысраҡ емеш алып ашағанға, әллә инде һалҡын тейеп, икеһенең бер юлы тамағы шеште лә ҡуйҙы бит. Ялланып, ҡыҙарып шеште лә быуып үлтерҙе лә ҡуйҙы шул ожмах ҡошҡайҙарын. Әгәр Бибекәй менән Гөлкәй тере булһалар, кейек ҡаҙҙар кеүек осоп төшөп, яныбыҙҙа йүгереп йөрөһәләр... Эй-й алла!.. Ҡайҙа һуң?.. Шул балалар иҫән булһа, бабай ҙа былай бөгөлмәй ине шул...

Әлбиттә, Шәһит бабайға ейәнсәрҙәренен, ҡайғыһын кисереүе еңел булманы. Кем белә, бәлки, ул ысынлап та ошо ҡайғынан тамаҡ ауырыуына һабышҡандыр ҙа...

Йәйҙең тирә-яҡты йәшенле ямғырҙар ҡаплап алған томра бер көнө. Ҡояш бите ҡанлы томан менән ҡапланған. ^ау өҫтөндә, аждаһа кеүек йөрәкте һурып, ҡыҙғылт монар ята. Әйтерһең, ҡайҙалыр, ил сигендә барған һуғыш майҙанынан, ҡорбандарҙың ҡаны быуланып һауаға күтәрелә.

Өй эсендә тағы ла томраҡ, ҡыҫынҡыраҡ. Эҫелек күкрәкте быуып, тамаҡҡа үрелә. Оцго #эн өҙгөс эҫелеккә түҙмәй, оҙон арыҡ кәүҙәһен көйәнтә кеүек бөгөп, урындыҡта ят-
ҡан Зәлифә әбей ҡартына әленән-әле ҡарап, ауыр көрһөнөп ҡуя:

— Эй алла, һуғыш башланғанға бер йыл тулды бит инде. Дуылда ир заты ҡалмай инде. Туҡтамай ҙа бит, исмаһам. Эй алла.Шаһиморатты ла алып китһәләр, беҙ ни эшләрбеҙ? Кемгә ҡарап ҡалырбыҙ? Исмаһам, һинең һау сағың да түгел бит... Сыуаҡай әбей ҙә Сәхиуллаһы есен хафаланып тора, хәҙер уларға сират етте. Алырҙар. Алмай ҡалдырмаҫтар. Хәзер батшаға аҡһағы ла, туҡһағы ла ярап ҡына тора. Күҙен йомоп, бөтәһен дә бәҙрәт ала бирә, ти.

Сәхиулланы ни, бәләкәй саҡта ат тибеп, тубыҡ һөйәге ярсылғанға ғына алмай киләләр ине бит... Ә беҙҙең Шаһиморатты әлегә беҙ ҡарт, ҡарар кешеләре юҡ, тип ҡалдыралар ине шикелле... Эй алла, һуғыш былай һуҙылһа, ҡарттар ҡайғыһы ла китер шул...

Туҡһанға еткәнсе береһе лә тешмәгән тығыҙ нык тештәрен ҡыҫып йөҙлөк буйында ултырған Шәһит ҡарт әбейенең был зарына бер ни тип тә яуап ҡайтармай. Сөнки былар яңы зарҙар ҙа, яңы ҡайғылар ҙа түгел. Улар хәҙер һәр өйҙә өҙлөкһөҙ ҡабатлана торған төп һүҙҙәр, төп зарҙар. Унан һуң, һүҙ менән ҡайғыны еңеп буламы ни?.. Етмәһә, унын, хәҙер донъя хәлдәре менән ҡыҙыҡһыныр рәте лә ҡалмаған. Шулай ҙа ул әбейенә йыуатыусан, өмөтлө ҡарарға тырыша.

— Йә, зарланма, әсәһе. Әйҙә, мине урамға алып сыҡ. Күгүлән өҫтөндә түшәлеп ултырып, кешеләрҙең үткән-һүткәнен ҡарау ҙа бер ғүмер бит...— ти.

Хәҙер ул аҙна-ун көн тирәһе үҙе генә сығып-инеп йөрөй алмай ҙа башлағайны.

— Унһыҙ ҙа бөткән хәленде бөтөреп йөрөп ни бар?..— ти Зәлифә әбей асыуланмай ғына.— Тик кенә ятып торһаң булмаймы ни?

— Булмай шул. Булмай, әбей.

— Эй, тынғыһыҙ.

— Алып сыҡсәлә, ҡарышма, әсәһе...

— Улай булғас, өҫтөндө алыштырайыҡ. Кеше күҙе алдына был өҫтөң менән сыҡмаҫһың бит.

— Ярар, алыштыр.

Шәһит ҡарт, энер баулы ап-аҡ күлдәк-ыштан өҫтөнә ҡара ел%н кейеп, башына ҡара хәтфә түбәтәйҙе ҡырын ғына һалйп, таяҡҡа таянып, әбейе ярҙамында урамға үлән өҫтөнә сығып ултырҙы.

-^- һай, һәйбәт тә һуң беҙҙек ауыл!.. #

— һәйбәтлеге ҡалманы инде. Оло урам яртылаш ҡыҫ-^~ ҡарҙы. КыҙылтьЯр, Ярсыҡ урамдары ҡороп ҡалды. Байҙар? ҙын, ғына йорттары киңәйгәндән-кинәйә...

— Шулай ҙа һәйбәт „Нисек булһа ла яҡты донъяға ни етә? Ҡаҙерен белеп йәшәргә генә кәрәк ;•

— Белерһен, белмәй ҙә ни,. •..-.,

— Белеп булмай шул — һай, белеп булмай... һай, донъя! һай, ғүмер тигәнең! Баҡтиһән, шулай һиҙҙермәй генә үтә лә китә икән ул!..

Шәһит ҡарт һуҙып-көйләп шулай тине лә тоноҡланған күҙҙәрен ҡайҙалыр алыҫҡа, әбейенән аша текләп, оҙаҡ тынып ултырҙы. Әйтерһен, ошо ауылда уҙған үҙенсә бәхетле оҙон ғүмер юлын тотош күҙ алдынан кисереп сыкты.

Зәлифә әбей тағы һүҙ башлап ҡараһа ла, уны был уй эсенән тартып сығара алманы.

Бер аҙҙан улар янына Сыуаҡбикә әбей ҙә килеп етте,

— Йә, шәпмеһегеҙ? Арыуланаһынмы инде, ҡорҙаш?

Инде уйҙар селтәренән ысҡынған Шәһит ҡарт һап-һау кеше кеүек теремек тауыш менән яуап ҡайтарҙы.

— һәйбәт. Рәхмәт Кисәнән бирле үҙемде егет кеүек тоям. Аллаға шөкөр. Үҙегеҙ ни хәлдә йәшәйһегеҙ?

Сыуаҡай әбей өмөтһөҙ генә ҡул һелтәп ҡуйҙы.

— Ни хәлдә тип, үҙен белмәгән нимә бар инде, ҡорҙаш? Дүрт йыл элек беҙҙен кеүек ярлы-ялпыны аслыҡ ҡырҙы. Әле инде һуғыш... Әгәр уландарҙы ла алып китһәләр, ятып үлеүҙән башҡа сара ҡалманы инде. Ана, кемдәр генә эрәхәт йәшәй...

Сыуаҡай әбей әкрен олпат баҫып мәсеттән көндөҙгө намаҙҙан сығып килгән Әхмәҙулла мулла, Ҡормош бай, һукыр Сапыйҙар яғына асыулы ымлап алды.

— Аслыҡ та, һуғыш та уларға файҙа ғына... Байыған һайын байый ғына баралар. Әле уйлап-уйлап торам да тағы бер уйлап ҡуям тигәндәй, Байгилде ҡәйнеште әйтәм, ошоларҙы белеп яратмаған икән. Бынауы аслыҡта ярлы меҫкендең йортон-ерен бер һыныҡ икмәккә һатып алып бөтөп тағы ла яман байығандары бирле һис тә йәнем һөймәй ошо ҡороғорҙарҙы...

Зәлифә әбей ипләп кенә унын ененән тартты:

— Ярамай. Улай тимә, Сыуаҡбикә. һәр кем үҙ бәхете менән йәшәй. Нисек итәһең... Хоҙай тәғәлә шулай ҡушҡас.

Сыуаҡбикә әбей, ҡулын тағы ла өмөтһеҙерәк һелтәп, тороп ук китте.

— Ошондай боҙоҡ эсленәргә генә бәхетте күрәп биргән хоҙайына әйтер инем дә инде Ярар инде, ҡалып торһон... Әстәғәфирулла, тәүбә, тәүбә... Тфү, тфү!..

— Ай-һай, бик үҙгәреп киттен бит әле һин, кем, Сыуакбикә,— тине Шәһит ҡарт, мут ҡына йылмайып: — Элек һин бер ҙә улай һөйләшмәй торғайнын шикелле.... . . . .._.-.



һөйләшеү генә тиһең... Улай һөйләшкән кешене йәнем ине. Иҫендәлер, Байгилде тсәйнеш менән нисек давайп торғайным... һай, иҫәр... Хәҙер күңелем ҡайтты шул. Вөтәһенән күнелем ҡайтты... Хатта им-томонан да, бынауы •комһоҙ байҙарынан да... Йә, ярай, Шәһит ҡорҙаш, биғәйбә. Ьау булып тороғоҙ. Мин үрге туғайға ҡомалаҡ йыйырға тип китеп барам әле. Бәлки, оно табылһа, ҡомалағы кәрәк булып •куйыр...

Ул, күңелһеҙ генә йылмайып, етеҙ баҫып, елпелдәп үрге оска табан китте. Шәһит бабай ул күҙҙән юғалғансы ҡарап оҙатып ҡалды.

— Хуш, хуш бул, Сыуаҡбикә ҡорҙаш!.. Бәхил бул, ҡорҙаш, ғәйепләштән булмаһын...— тип шыбырланы. Унан йәшле күҙҙәрен үҙенә хафаланып ҡарап ултырған әбейенә күсерҙе.

— Йә, әбей, инде өйгә ҡайтһаҡ та ярай... Ваҡыт...— тине.

Өйгә ингәс, ул сатнап кипкән ирендәрен һалкын һыу менән сылатты ла оҙаҡ ҡына ятып алды. Унан тағы тырышыптырмашып тороп ултырҙы. Бысаҡ, ҡасау алып кисә эшләй башлаған тырмаһын һапларға тотондо. Хәҙер инде тамағынан бер йотом һыу ҙа үтмәгән ҡартынын түҙемлелегенә аптырап та, һоҡланып та бөтә алмаған Зәлифә әбей, эсенә һыймай кейҙөрөп барған ҡыҙғаныу тойғоһона сыҙай алмай:

— Ҡуйсы, етерсе, бабай,— тип ҡуйҙы.— Ғүмер-ғүмергә эш тип йәнеңде бирҙең дә баһа! Эй алла, донъянын эшен кем бөтөрөп үлгән?..

— Эй әбей, әбей,— ти Шәһит ҡарт, йылмайып,— белмәйһең. Бер нәмә лә акламайһык... Ошо эш кенә йәшәтә бит мине. Эш булмаһа, мин әллә ҡасан ер ҡуйынында яткан булыр инем...

— Дөрөҫ. Белмәйем, аңламайым... һинең түҙеменә минең аҡылым етмәй...

Зәлифә әбей күҙ йәшен күрһәтмәҫ өсөн ҡартына арты менән әйләнеп ултырҙы. Шәһит ҡарт тырманы һаплап бөтөп, йөҙлөккә һөйәне лә тағы бер аҙ ятып алды. Унан тағы тороп ултырҙы. Ул бөгөн, ысынлап та, үҙен кендәгегә ҡарағанда еңелерәк, хәллерәк һиҙгән кеүек ине.

— Әбей анау иләгенде алып бир әле. Өр-яңынан ситләп ҡуяйым. Туҙа башлаған түгелме һуң?..

Зәлифә әбей, ғәҙәтенсә, асыуһыҙ ғына һуҡранып, уға ҡаҙан өҫтөндә элеүле торған иләкте алып бирҙе.

— Эй хоҙайым, һис кенә лә тынып ята белмәнең дә баһа! Iик кенә ятып ял итһәсе был!.. Шыпа ас көйөңә ниңә үҙенде "Ул тиклем аҙаплайһың һин, бабай?..

Шәһит ҡарт, был өҙәләнеүҙе ишетмәгән дә кеүек, емөтһеҙ

сәмлелек менән тағы эшкә кереште.

Ахыр, хәлһеҙлектән ҡара тиргә төшөп, ауыр мышнай-мышнай, иләкте лә ҡайтанан ситләп бөттө.

— Мә, әбей, алып эл. Ондо бер юлы күп һалмаһан, бармағың менән матҡып тотоп иләмәһән, оҙаҡҡа сыҙар...

— Ярар, бабай, һаҡлап тотормон...

Зәлифә әбей иләкте әйләндереп-тулғандырып ҡарап торҙо ла ҡаҙан өҫтөнә — үҙ урынына элеп ҡуйҙы.

— Ҡайһылай һәйбәт итеп ситләп тә бөттөн!.. Эй алла, һинен ҡулдарын ҡул түгелдер, фәрештә ҡанаттарылыр улар... Юҡһа бөтә эш ҡулында был тиклем янып тормаҫ ине...

Шәһит ҡарт өндәшмәне. Әбейе ҡаҙан яғына әйләнеп, иләкте ҡарап, һылап-һыйпап элеп, күҙ йәштәрен һерткеләп торған арала, аяҡ-ҡулын йәтешләп урынына һуҙылып ятты ла ҡабат бер ҡасан да асмаҫ өсөн күҙҙәрен йомдо. Әбей әйләнеп ҡарағанда ул:

«Иллә, әбей, үҙенде ҡыҙыҡ иттем дә һун» тигән кеүек, уң ҡашын юғарыраҡ күтәреп, мут ҡына йылмая биреп, рәхәт тыныслыҡҡа сумып ята ине.

— Аһа, был ни ҡыланышың инде, бабай? — тип үҙәләнде Зәлифә әбей.— Әй алла, мулла саҡырып, ясин укыта ла алмай ҡалдыҡ та баһа!

Был үлем шул хәтле тәбиғи, ябай булды, хатта күпте күргән Зәлифә әбей ҙә иларғамы, ҡысҡырырғамы, ҡайҙа булһа ла йүгерергәме белмәй, аптырап ҡалды. Урамдан, тәҙрә тәңгәленән, бер нисә арбаға тейәлгән рекруттар, тальян гармунға ҡушылып, ҡысҡырып йырлап үттеләр.

Ап-аҡ ҡарҙар яуһа ине,
Сана шыуып йөрөһә ине,
Ырымбур ҡалаһы янһа ине,
һалдат аулаҡ ҡалһа ине.

Уларға оҙатыусы ҡатын-ҡыҙ тауышы ҡушылды.

Мендем тауҙын, башына,
Маяҡ һалдым ташына.
Насип булһа, алып ҡайтыр
Алып киткән машина.

Рекруттар уҙып китеүгә, өйгә Шаһиморат менән Сәхиулла йүгереп килеп инде. Уларҙын икеһенең дә ҡулында кескәй генә ҡағыҙ киҫәге бар ине.

— Повестка,— тинеләр улар ингәс тә.— Беҙгә лә китер саҡ етте.

Шаһиморат атаһының аяҡ осона барып ултырҙы.



— Атай, ишетәһеңме, беҙ һуғышҡа китәбеҙ.

Был һүҙ Зәлифә әбейҙе аптырау, ҡатып ҡалыу хәленән тартып сығарҙы.

— Аһа...— тине ул тағы, ни өсөндер, ғәйепле тауыш' менән.— Улым, Шаһиморат, атайын, үлде лә ҡуйҙы ла баһа!..

— Атайым?.. Үлде?!

Шаһиморат йылан саҡкан кеүек һиҫкәнеп, һикереп торҙо. Ҡолағына ышанмай, атаһынын. аяҡтарынан, ҡулдарынан һыйпап, киң, аҡыллы маңлайын баҫып ҡараны. Унан сикһеҙ аптыраулы ҡарашын берсә әсәһенә, берсә Сәхиуллаға күсерҙе.

— Атайым... Үлгән... Ә мин, ни есендәр, ул нисек кенә ҡаты ауырыһа ла, үлмәҫ, бер ҙә үлмәҫ, мәңге йәшәр төҫлө тоя инем... Бына иҫәр...

— Эйе... Шәһит олатай һис тә үлерҙәй кеше түгел һымаҡ ине,— тине Сәхиулла ла, ҡаушап. Унан бер аҙ өндәшмәй торғас:

— Ни эшләйһең бит... Әйҙә, Шаһиморат, үҙебеҙ өйҙә саҡта, ҡәҙерләп ерләп китәйек,— тип өҫтәне.

Шаһиморат, атаһынын аяҡ осона баҫып, бик оҙаҡ тынып торҙо. Унан өнһөҙ-һүҙһеҙ Сәхиулла артынан эйәрҙе.

— Ҡарттарға хәбәр итегеҙ. Муллаға, мәзингә әйтегеҙ. Мәнетте ерләшергә килһендәр,— тип иҫкәртеп ҡалды Зәлифә әбей.

Шәһит ҡарттын. үлеме лә йәшәүе кеүек шулай ғәжәп ябай, енһеҙ-һүҙһеҙ, шау-шыуһыҙ булды.

## VI

Илсеғол ауылының Оло Эйек яҡ осона ҡукырайтып алға сығарып һалынған Сәрбиямалдың ҙур ғына өйө эстән таҡта менән икегә бүленгән. Сәрбиямал өйҙөн кухня хеҙмәтен үтәгән бер тәҙрәле кескәй өлөшөн «бәләкәс яҡ» тип, ҡунаҡ өйв хеҙмәтен үтәгән дүрт тәҙрәле яҡты яғын «ҙур яҡ» тип йөрөтә. Сәрбиямал балаларға ҙур яҡҡа сығып, үҙенен күҙенә сағылып йөрөргә рөхсәт итмәй.

Көҙгө төн. Иштуған, Йәнеш, Емештәр бәләкәс яҡта күптән инде ҡаты йоҡоға сумған. Ҙур яҡта урындыҡтың буйынан буйына түшәлгән мамыҡ түшәк, мамыҡ мендәрҙәр эсенә һеңеп китеп Сәрбиямал да мышнап ята. Тышта бер өҙлөкһөҙ ямғыр һибәләй.

— Шыбыр-шыбыр-р!.. Тап-топ!.. Сәп-сәп!.. Тәс-тәсс! Шыбыр-р-р!..

Байгилде ағай көҙгө ямғырҙын. ялҡытҡыс бер төрлө йырына ҡолаҡ һала-һала, урындыҡ ситендә, тәҙрә янында ултыра. Ормоштоң баҫымы түҙгеһеҙ ауырайып киткән саҡта йоҡо

алмай торған ғәҙәте бар унын. Эйе, был минутта унын уйҙары ла ошо күҙгә ямғыр кеүек тынғыhыҙ hәм биҙҙергес ине. hуғыш. Икенсе күҙ hуғыш бара. Күпселек ирҙәр хәҙер унда, hуғыш майҙанында. Бында тик Собхан старшина улы hатыбал, Ғаббас мулла улы Хөснөлхаҡ, Әхмәтша ҡара-к кеүек тейешле түрәләргә мал-байлыҡ үткәреп тороп ҡалыу-сылар ғына йөрөй, hуғышҡа алынырға тейешлеләрҙән ундай биремhеҙ ҙә өйҙә йөрөүселәр юҡ түгел, әлбиттә. Әйтәйек бына Шәүрәнең атаhы Хәлим ағай. Ул күптән hуғыштын иң ҡайнаған ерендә булыр инелә, тик ғәриплек ҡамасаулай. Йәш кенә сағында уҡ, кемгәлер өй эшләгәндә, ҡыйыктан йығылып тубыҡ быуыны сыҡҡандан hун, бер аяғы ҡыҫҡарып ҡалған унын. Шунан бирле уны «Сатан Хәлим» тип йөрөтәләр. Ул, аҙым hайын hулға янтайып, салғы hелтәгән кеше шикелле, hәр ваҡыт сәйер ялпылдап йөрөй. Оло, мыкты кәүҙәhен hис тә ынғай, тура ғына тота алмай.

Байгилде ағай ҙа ошоғаса «аҡ билет» булып ҡалып килде. Ҡормош байҙар туҡмағаны бирле бер ҙә hаулыҡҡа мандый алманы ул. hуңғы йылдарҙа хатта яҙын-көҙөн йүткеренеп, ябығып-hарғайып та йөрөнө. Сәрбиямал уны әйләнгән hайын:

— Сихут, ҡарүпкә!.. hалдатҡа ла ярамайhын. бит hин эшкинмәгән! — тип битәрләп кенә тора. Эшләтергә тигәндә, әлбиттә, унын ауырыулығын онота. Күп йорттар бөтөнләй ир-атhыҙ ҡалған бер саҡта, үҙ йортонда бер түгел ике ир заты барлығынан теше-тырнағы менән файҙаланырға, уларҙын көсөнән мөмкин булғандың бөтәhен hығып алырға тырыша. Хатта ул иң кескәй Емештән дә бер генә минут та ту ктамай, ни ҙә булhа эшләп, ҡыбырлап тороуҙы, hәр бер ҡапҡан hыныҡты әсе тиргә мансып ҡабыуҙы талап итә. Шул арҡала Байгилде ағай hәр яҙ ҡайтып, ике-өс дисәтинәләп ашлыҡ, көнбағыш сәсә лә, бер көн дә ял итмәй, ҡыуғынға төшөп китә. Эйек, hаҡмар йылғаларын кисеп үтеп, Ырымбурға хәтле барып етә. Бесән ваҡытына хәтле унда таҡта ярыу заводында эшләп ҡала. Унан ҡайтып, бесән эшләп, ашлыкты урып-йыйып, көнбағыштарҙы hуғып алып бөткәс, Сәрбиямзл

тағы:

— Бар, ҡышлыҡҡа берәйhенә зшкә яллан. Балаларына көндәлек ашарлыҡты табып тор штобы. Бында үҙ еремдән сәсеп-йыйып алған ашлығымды hеҙгә ашатып яткырырғэ миндә әндерәй ҡаҙнаhы юҡ. Бында минә ҡыш көнө мал-тыуар ҡарап, утын-hатын ташып торор өсөн Иштуған да етер,—~ тип мыжый башлай. Байгилде ағай, hис үкенесheҙ, хатта бер тиклем ҡыуаныс менән тағы ситкә, рудниктар тирәhенә сЫ' ғып китә... Шулай итеп, бығаса балаларын ас-яланғас итмәй аҫрап килде. Ниндәй генә ауырлыҒктар, кәмhетелеүҙәр күр-^Ьне?! Түҙҙе.

: Байгилде ағай әле, йәшкәҙәгән hоро тәҙрәгә текләп, ^унғы йылдарҙа үҙ башынан кискән хәлдәрҙе иҫен» төшөрөп удтырҙы. Бына унын күҙ алдына Сергей Хитровта уҙарған oшондай уҡ күҙгә бер төн килеп баҫты. Илсеғолға күсегт кил-гзн күҙ ине был. Сәрбиямал уныг, бер осон Илсеғолға терәп, Оло Эйек буйлап өс-дүрт саҡрымға hуҙылған Мраковка ауыльша алып барып, Сергей Хитровҡа эшкэ урынлаштырҙы.

— Бына, знаком, hннә ялсы. Ҡыш к&нө hиндә эшләр. Яҙ, йэй, күҙ, үҙемә бирерhең штобы. Ошоға риза булhаң, хаҡын да күп hорамам.

— Иш, ниндәй аҡыллы! Ха-ха-ха...

— Аҡыллы булмайса, минең ирем дә баhа ул! Яҙ ул минә ҡайтып ашлыҡ сәсергә тейеш!..

Ул шулай оҙаҡ сауҙалашҡандан hуң, Байгилде ағайҙы мал кеүек hатып ҡайтып китте. Ауылға ҡайткас:

— Байгилдене атайымдын белешенә эшкә индереп ҡуйҙым. Юҡhа ул, стражниктар күҙәтеүендә торған кеше, нисек эш табыр ине?—тип маҡтанды.— Етмәhә, сихут та бит әле. Шулай булғас, уны кем эшкә алhын? —тип тә өҫтәне

Сергей ҡарт Мраковкала бер тин өсөн кешенең күҙ алмаhын соҡоп алырға әҙер торған ғәжәп ҡомhоҙ, ҡаты бәғерле байҙарҙың береhе. Унын биш улы, hигеҙ ҡыҙы бар. Ул бөтә уландары, ҡыҙҙары, кейәүҙәре менән бергәләп, Мраковкапа хуторының ярты урамын, ярты ерен биләп ята. Унын hуғыш алдынан ғына Ырымбурҙа кадеттар корпусын тамамлаған офицер улы Федька Рябойҙан башҡа бер улы ла hуғышҡа китмәне. Ҡарт уларҙын бөтәhен дә hаҡлап алып ҡалды. Сергей ҡарттар тоҡомо үҙҙәрен «староверҙар» тип йөрөтәләр. Старовер булмаған кешеләрҙе «поганыйҙар» тип атайҙар. Уларҙан ерәнәләр, hанға hуҡмайҙар. Уларға бер сыңаяҡ сәй эсеү түгел, хатта ҡотоҡтарынан бер сүмес hыу алырға ла рөхсәт итмәйҙәр. Кешеләр менән ҡатнашмайҙар, hейләшмәйҙәр, тиреҫ ҡорто шикелле үҙ йорттарының эсе, тынсыу hауаhы эсендә томаланыц, бөтә әйләнә-тирэнән айырылып мыжғып йәшәйҙәр. Шуға күрә уларға ялсылыҡҡа ла Байгилде ағай кеүек иң аптыраған кеше генә барып инә "Ҙ генә мөмкинлеге булған кеше улар тирәhенән шайтандан кҡасҡан кеүек ҡаса ине.

Уларға ялсы булып ингән йылдағы беренсе тен Байгилде зғаиҙың иҫендә ҡот осорғос hаташыу кеүек булып мәңгегә "аҡланып ҡалған.

Ноябрь айының ҡар ҡатыш быҫҡаҡ ямғыр hибәләп торағ"'„ кҮ?гә төртhәң күренгеheҙ ҡараңғы бер төнө. Байгилде Hга мал өйөндә, hарыҡ бәрәстәре, быҙауҙар бикләнгән

оя өҫтөндәге эләүкәлә ятып йоҡларға рөхсәт иттеләр. Төн. Өй дөм-һуҡыр. Быҙауҙар ояһынан танауҙы ярып әсе, ҡырҡыу еҫ тарала. Тирә-яҡта нимәләрҙер бер өҙлекһеҙ ҡыщ. тырлаша. Сысҡандар сыйылдап һуғыша. Байгилде ағай башта быларға һис тә иғтибар итмәҫкә, үҙен ҡайҙалыр иркен киң ҡырҙа, ҡайын һуттарының шәрбәт еҫе аңҡыған яҙғы урманда, йылмылдаҡ, шаян йондоҙҙарға текләп, йәшел үлән өҫтөндә ятҡан ғәмһеҙ юлсы итеп хис итергә, шулай итеп күңелде алдаштырып йоҡлап китергә тырышты. Ләкин тора-бара был тонсоҡторғос әсе һауа уны бөтөнләй быуа, ниндәйҙер һалҡын табанлы ваҡ, еүеш бөжәктәр ҡолаҡтарҙа, муйындарҙа йүрмәләй башлағас, түҙмәй иҙәнгә төштө. Шырпы һыҙып түбә таҡтаһына, стеналарға күҙ ташланы. Ошо ваҡыт ул ғүмерендә тәү тапҡыр бала шикелле ҡурҡып, сирҡанып ҡысҡырып ебәрҙе.

— һай, мәлғүндәр! Нисек үрсегәндәр!..

Мал өйөнөн. етерлек яғылмауы, бәрәс һәм быҙауҙарҙын. өҙлөкһөҙ еүешләп тороуы арҡаһында күгәреп, бәҫәреп бет-кән стеналарын, түбә таҡталарын тараҡандар, ҡырғаяҡтар бөтөнләй һырып алғайны. Байгилде ағай ҡулына шырпыһын тотҡан килеш яҡ-яғына ҡаранып, иҙән уртаһында баҫып торҙо. Ҡайҙа ғына күҙ һалһа ла, тараҡан, ҡырғаяҡ көтөүе һәрмәүестәрен имәнес ҡыОырлатып, уға текләп торҙолар. Етмәһә, шырпы бызылдауынан уянып, аяҡҡа баҫҡан быҙауҙар әсе еүешлекте тағы ла өҫтәп, иҙән буйлатып ағыҙып ебәрҙеләр. Байгилде ағай үҙ-үҙен онотоп тышҡа атылды. Ләкин ишек алдында ла шул уҡ тын алғыһыҙ ҡырҡыу әсе һауа уны ҡаршы алды. Өйҙәргә ялғап һалынған мал аҙбарҙарынан да, күп мал иҙеүе арҡаһында һаҙлыҡҡа әйләнгән ишек алдынан да шул уҡ быуылдырғыс әселек тарала. Етмәһә, ишек алдында ирektә йөрөгән һыйырҙар, мал өйөнөң тупһаһы яны-на уҡ килеп, быҙауҙарының мөцрәшеүен тыңлай-тынлай, аяҡ аҫтарын өҙлөкһөҙ еүешләп, һауаға яңынан-яңы әселек өҫтәп кенә торалар.

«Ни эшләргә?.. Ҡайҙа ҡасырға?! Их, әгәр ошо балалар булмаһа, бында бер көн тормай, башым һуҡҡан яҡҡа сығып китер инем... Их балалар... балалар, аяҡ-ҡулды бәйләнегеҙ бит һеҙ...»

Байгилде ағай тамам тыны быуылып ҡапҡаға ташланды.

«Урамға сығырға, исмаһам, тын алыр өсөн генә булһа ла, урамға сығырға кәрәк!.. Юҡһа хәҙер быуылып үләм!.-»

Ләкин һис бер ек ҡалдырмай эшләнгән ауыр имән ҡапҡалар көс еткеһеҙ ҙур йоҙаҡтар менән йоҙаҡланған, үтә бейек бүрәнә ҡоймалар йортто тышҡы донъянан бөтөнләй айырған. Был ишек алдына кеше түгел ел дә үтеп инерлек түгел ине. Байгилде ағай ҡороға ырғытылған баль!к шикелле



ары һуғылды, бире һуғылды, бер генә йотом саф һауа эҙләп, тилмереп алыҫҡа, күккә ҡараны. Тик был тынсыу тотҡонлоҡтан ҡотолоу юлын тапманы. Ә таң алыҫ ине. Көҙгө оҙон төндөн. эңере генә ине әле был.

Сәскә, үлән, ер еҫе аңҡытҡан саф һауаны, киңлекте, иркенлекте йәненән артыҡ күреп яратҡан, шунһыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмаған дала кешеһе өсөн ҡот осорғос ауыр булды был төн. Ләкин ни эшләмәк кәрәк? Арғымаҡ та бығауға күнегә бит... Байгилде ағай ҙа әкренләп күнегер ине. Йылдар үткән һайын хатта был тонсоҡторғос әсе еҫте тоймай, тараҡан, ҡырғаяҡтарҙы күрмәй ҙә башлар ине. Ләкин Байгилде ағай унда ҡалманы. Таң атып, байҙын, ҡапҡаһы асылыу менән Мраковканы ташлап сығып китте. Уны ҡасандыр, йәш сағында, үҙе забойщик булып бер нисә йыл эшләп киткән рудниктар тартты. Эшсе бараҡтары үҙҙәренең таҙалығы, яҡтылығы яғынан был әсегән мал өйөнән бик үк өҫтен тормаһалар ҙа, үҙенде ысын кешеләр, дуҫтар, эшселәр ғаиләһенең бер ағзаһы итеп тойғанғамы, унда әллә ниндәй ауырлыҡтар ҙа енелерәк кисерелгән һымаҡ булып унын. хәтерендә ҡалғайны.

Ошо көндән алып, һәр йыл ҡыш рудникта ваҡытлы эшсе булып эшләне ул. Яҙ ҡайтып иген сәсте, ҡышлыҡҡа бесән, һалам әҙерләне, кәртә-ҡура төҙәтте. Көҙөн йәнә рудникка китте. Ғаиләгә, ергә бәйлелек уға бөтөнләй эшсе генә булып ҡалырға ҡамасаулай, ә эшселек ғаилә менән унда тормош ҡороп йәшәрлек мөмкинлек бирмәй ине. Шулай итеп, ике уртала йөрөп был йылдар ҙа уҙып китте. һуғыш сыҡты. Күп эшселәр һалдатҡа алынды. Рудникта эш тағы ла ауырлашты. Рудник хужалары аҙайып, кәмеп ҡалған эшсенән элеккенән дә күп алтын таптырырға тырыштылар. Эш сәғәте ун нкенән, ун етегә күсте. Ә эш хаҡы шул көйө ҡалды. Ашарға ла, йәшәргә лә мөмкинлек ҡалманы. Шунан эшселәр түҙмәй бола сығара башланылар. Эш хаҡын арттырыуҙы, эш сәғәтен кәметеүҙе талап итеп бер көндө хатта эшкә сыҡмай Ҙа торҙолар. Байгилде ағай рудникта һәр саҡ ваҡытлы эшсе генә булып йөрөгәнлектән, эшселәр коллективының эске тормошона артыҡ ныҡлап ҡатнашып китә алмаһа ла, был көндәрҙә түҙемдән сығып, йыш ҡына:

— Байҙар беҙҙең ҡанды имеп йәшәүсе талпандар бит улар. Талпандарҙы һытып бөтөрмәй тороп беҙҙең тәнгә ит ҡунмаҫ,— тип һөйләнеп йөрөне. Эшселәрҙең болаһы һуғыш ваҡытынын, ҡаты законы менән тиҙ баҫтырылды. Байгилде ағай ҙа оҙон теле өсөн шахтанан ҡыуып ебәрелде. Быйыл яҙ булды был хәл. Шунан бирле Байгилде ағай өйҙә йәшәне. " бына хәҙер тағы китергә тура килә. Кем белә, бәлки бөтөн-•"әйгәлер... ....... . . -....•.-

Байгилде ағай, үҙ алдына күңелһеҙ генә йылмайып, түш кесәһен ҡапшап ҡуйҙы.

—• Повестка. Бына, баҡтиһәң, минең дә кәрәк ерем бар икән дә баһа!.. Хәйер, зимакка барыбер түгелме ни?.. Бында рудникта тереләй ер аҫтында серейһең... Ә унда үле көйө, ер өҫтөндә аунап, күҙенде ҡарға соҡор... Тик бына балалар ғына йәл. Улар нисек йәшәрҙәр? Сәрбиямал уларҙы ҡыуып сығармаҫмы? Тукта, уның менән был хаҡта яҡшылап һөйләшергә кәрәк. Әгәр ул, ғүмерҙә булмаҫ байыу хыялын ташлаһа, был тиклем һаран да булмаҫ, балалар менән һәйбәт кенә итеп йәшәп тә торор ине лә бит... Үҙе лә егәрле. Балалар ҙа эшләрлек. Ошо ҡомһоҙлоғо, байбисә булғыһы килеүе генә боҙа шул уны... Аптырарһың, ҡайҙан ингән был уй уның башына? Ҡайҙа алып барып сығарыр?

Байгилде ағай иплəп кенə Сəрбиямалдың юрғанынан тартты,

— Әй, йоҡлайһыңмы?

Сәрбиямалды ла бөгөн йоҡо алмай ине. Ул, ғәҙәтенсә, урынға барып ятҡас, Байгилдене бик оҙаҡ көттө. Бесәй кеүек мырылдап, төрлөсә ҡыланып ҡараны. Уфылдап терлө яҡҡа әйләнде.

— Эҫе, тыным тарыға... Ят инде, тәре кеүек һерәйеп ултырма!..— тип мыжыны. Ахыр, ире, ғәҙәтенсә, үҙенә иғтибар итмәгәс, асыуланып тынды ла сер бирмәҫ өсөн йоҡлап киткән кеше булды.

Унын. башында ла бөгөн тынғыһыҙ уйҙар сыбала ине. Байгилденең үҙенә ҡарата сәйер мөнәсәбәте тураһында уйланы ул.

«һәр кис шулай... Минен. йоҡлап киткәнде көтөп, ятмай ултыра. Йә арты менән килеп ята. Бигерәк тә һуңғы ваҡыттарҙа шулай булып китте... Тәүлә... мине алған йылдарҙа улай түгел ине бит. Хәҙер нинә былай?.. Ерәнәме?.. Ятаймаймы?.. Ысынлап та, балалары өсөн генә, аптыраған өсөн генә миңә бәйләнеп торамы ни? Әллә Әхмәтша тураһында һиҙенә микән? һиҙенгәс, нинә һун әйтмәй, ниңә мине тотоп туҡмамай? Әрләмәй ҙә... Туҡмамай ҙа... hвймәй ҙә... Шундай ир буламы?.. Аҫау айғыр кеүек кешнәп торған бисәне шулай тоталар тиме икән!.. Сырылдатып туҡмаһын да тупылдатып һөйһөн ине... Ул саҡта мин дә Әхмәтшаны онотор инем, бәлки... Эйе, эйе, ошо һалҡынлығы менән гонаһҡа этәрә бит ул мине!... Юҡһа...

Йә инде, ниңә ятмай, ниңә иркәләмәй, исмаһам!..

Сәрбиямал уйының ғәйәт сабырһыҙ ошо нөктәһенә еткән генә саҡта, Байгилде ағай, һуңғы йылдарҙа онотолоп бөткән тип әйтерлек йылы, яғымлы тауышы менән:

!1



— Сәрбиямал, һылыу...— тип ҡуйҙы.— Ишетәһеңме, Сәрбиямал, тим!..

Сәрбиямал ҡаты йоҡонан уянған тауыш менән, иркәләнеп:

— Әүсе...— тигән булды.— Нимә тиһеа, атаһы?..

Байгилде ағайға унан йылылыҡ ипкене бәрелде. Ошо ваҡыт ул үҙенең был уҫал, сая ҡатынды ҡасандыр ысынлап яҡын күреүен, уның ҡуйынында бер нисә минутҡа булһа ла, донъянын. бөтә ауырлыҡтарын онотоп, ял итә алыуын хәтерләне. Шулай була тороп, уны аҙаҡ бөтөнләй инкар итә алыуына ғәжәпләнде.

«Әгәр мин уның менән һалҡын булмаһам, ул минен, балаларға йомшағыраҡ булыр ине бәлки... Ниңә һуң мин уға һалҡын?.. Әхмәтша?.. Эйе, ул... Шул арҡала күңелем тартмай. һөйөр еремдән һөйә, көлөр еремдән көлә алмайым мин уға. Бәлки, был ғәйбәттер?.. Ишетмеш һүҙ күп булыр ул... Мин бит быны бер ҡасан да үҙ күҙем менән күрмәнем дә баһа!.. Иртән иртәнсәк китергә. Сәрбиямал минен уны ысынлап та яратыуымды белмәй ҙә ҡаласаҡ... Ғәжәп... ғәжәп... Сәғүрәнән һун ошо ҡатын минең күңелдә үҙенә урын алһынсы, ә?.. Төшөнмәҫһең кеше күңеленә...»

Сәрбиямал юрғанын һирпеп ташланы.

— Йә, ни әйтмәксе инен? Ниңә тағы өндәшмәйһең, атаһы?

— Эргәңә ятайыммы?

— Аһа!.. һорап тораһың тағы...

Байгилде ағай, ҡайтанан йөрәк биҙмәҫ элек тигән шикелле, ашыға-ашыға сисенде лә йылы юрған эсенә сумды. Сәрбиямал, түҙемһеҙләнеп, ирен ҡайнар ҡосағына алды...

Был төндә улар тәү ҡушылған саҡтағы кеүек йоҡоһоҙ үткәрҙеләр. Ошо төндә Байгилде ағай Сәрбиямалға үҙенең һуғышҡа китәсәген, уны ысын күнелдән яратыуын әйтте. Үҙен көтөүен, балаларҙы ташламауын үтенде. Байлыҡ артынан мәғәнәһеҙ ҡыуыуҙы ташларға саҡырҙы.

— Боҙоҡ күңелле ҡомһоҙ байбисә булғансы, саф йөрәкле, киң күңелле ярлы бисә булһаң, мин һине йәнемдән артыҡ күреп яратырмын,— тине. Сәрбиямалдың донъяһы, мал-тыуары менән байыуҙы өмөт итеү иҫәрлек икәнен аңлатырға тырышты.

Сәрбиямал да был төндә уның бөтә һүҙе менән дә килеште. Ғүмерендә тәү тапҡыр ысын күҙ йәше сығарып иланы. Байгилденен. ҡосағында үткәргән ошо бер төн өсөн ун Әхмәтшаны бирерҙәй булды. «Йә, никә ул китә? Ниҫә ул тәү тапҡыр тип әйтерлек уны шулай ярһып һөйҙө лә... китә?!» тил өҙәлөндө. Ләкин, үкенескә ҡаршы, былар бөтәһе лә уның всөн көҙгө оҙон төн һәм Байгилде йөрәгенең тылсымынан

ваҡытлыса еңелеү арҡаһында ғына тыуған, уҙып китмәле нәфис тойғолар ғына ине, әлбиттә. Әхмәтша ҡараҡ килец, бойороҡло бер ҡараш ташлау менән быларҙың бөтәһе селпәрәмә киләсәге көн кеүек асыҡ ине.

Аталарының һуғышҡа китәһен әлегә белмәгән балалар, бәләкәс яҡта, алмаш-тилмәш мышылдап, йоҡланылар ҙа йоҡланылар. Ә шомло өңшәйеп торған ҡараңғы тәҙрә күҙәнәктәрендә һаман эңерҙәгесә ямғыр тамсылары бейене:

— Тап-топ!.. Тас-тос! Шыбыр-р!.. Шыбыр-р-р!..

## VII

Иштуғандар Илсеғолға күсеп килгәнден икенсе йәйендә булды был ваҡиға. Ҡарасәс әбейҙең берҙән-бер улы Тимербай Собхан старшиналарҙа йылҡы көтә ине. Тимербай егет сағынан уҡ йырлау, ҡурай уйнау, бейеү, йыр сығарыу менән мауығып китте. Тимербайҙың был ҡылығын мәҙәк күреп, кистәрен йәш-елкенсәк унын йылҡы көткән еренән ҡайтмай ине. Тора-бара уның хаҡында «әллә ниндәй көфөр һүҙҙәр һөйләй икән, йәштәрҙе байҙарға ҡаршы откой икән» тигән хәбәрҙәр ҙә йөрөй башланы. Быға үҙенен ғәҙәтенсә, әлбиттә, иң элек Шымбай каштан иғтибар итте. Төн уртаһында бер нисә тапҡыр йәшеренеп кенә көтөүгә яҡын барып, йәштәрҙең һүҙҙәрен оҙаҡ-оҙаҡ тыңлап ятты. Унан Собхан старшинаға барып:

— Ә-ә, ни, түрә, һин был Тимербайҙы нинә эштә тотаһын? Ул, ни, ә-ә, сәпсим ыристан нәмә лә баһа!.. Ышанмаһаң, берәй тен, ә, ни... теге, үрге туғайға, Кафыр Хәбир тирәге янына барып, ҡыуаҡлыкта йәшеренеп тыңлап ят... Шунда һин барыһын да белерһен... Ә, ни, мин бында һөйләп тә тормайым. Тик шуны ғына әйтәм, ул сәпсим ыристан булып бөткән. Ышанмаһаң, әйттем бит, үҙең барып тынла. Бына шунда һин быҒаса ишетмәгәненде ишетерһең... Күрмәгәненде күрерһең. Ана шул Кафыр Хәбир тирәген үҙҙәренә төйәк иткәндәр улар...— тип бер нисә ҡат тукып та сыкты. Собхан старшина унда барырға ла, көтөүсе Тимербайҙың ни һөйләүен үҙ ҡолағы менән ишетергә лә ҡаршы түгел, әлбиттә. Киреһенсә, был эш уны һунарсы эт кеүек елкендереп, мауыҡтырып та ебәрҙе хәҙер. Тик уның бына ошо Кафыр Хәбир тирәге янына барып, уны иҫенә төшөргәһә генә килмәй. ЭДнһыҙ ҙа был тирәк уға һәр саҡ бармаҡ янап:

— һин, кеше үлтереүсе!.. Нахаҡтан ҡан ҡойоусы!..— тнп ҡысҡырып ҡына тора һымаҡ... Етмәһә, Хәбирҙен һунғы һүҙәре уның ҡолағынан, нәфрәтле ҡарашы күҙ алдынан бер ҡасан да китмәй. Хатта хәҙер. тиҫтәләгән йылдарҙан һуң да, йыш ҡына төшкә инеп йөҙәтә. Исмаһам, бынауы Сук тирәк тә ҡоромай бит!.. Ҡарышҡан кеүек һаман үҫә, матурлана ғына бара. Собхан старшина уны нисә йылдар инде ҡырҡтырып ташларға ниәтләп йөрөй. Хатта ҡырҡкан кешегә ҡуйҙар ҙа вәғәҙә иткәне бар. Әммә бер кем дә был тирәккә балта күтәрергә теләмәй. Сөнки бында иҫтәлекле урынға тейгән кешене халыктын ҡаты асыуы, нәфрәте көтә. Был меһәбәт яңғыҙ Сук тирәк тә хәҙер, Хәбир тирәге тип аталғаны бирле, бер ҡасан да балта теймәҫкә тейешле изге ағасҡа, иҫтәлекле урынға әйләнгәйне инде.

Ә бына хәҙер Тимербайҙың ни һөйләгәнен белеү өсөн уға, Собхан старшинаға, тап шул тирәк янына барырға кәрәк. Етмәһә, төндә... Янғыҙ үҙе... Нимә эшләргә?!

Бер нисә көн шундай икеле уйҙар менән ҡаңғырып йөрөнө старшина. Ахыр бер кисте сүместәй йоҙроғон ҡаты төйнәп, теште шығырлатып ҡыҫты ла һыбай үрге туғайға йүнәлде. Ул шулай, үҙен Хәбирҙең әсе нәфрәте эҙәрләгән һайын ҡоторона биреп, яуызлыҡ артынан яуызлыҡ эшләй, бер этлекте икенсеһе менән томаларға тырыша ине.

Бер яғынан Үле Эйектен ураҡ шикелле уралып ятҡан үҙәне менән уратылған, икенсе яҡтан Оло Эйеккә тоташҡан был кин, тын туғайҙың ҡап уртаһындағы кескәй түбәләстә, ҡеүәтле ботаҡтарын ғорур япырайтып, алты ҡоласлы ҡарт тирәк ултыра. Хәбир тирәге. Унын. көмөш япраҡтары бөгөн ниңәлер айырыуса тынғыһыҙ ҡыштырлаша, үҙ-ара нимә тураһындалыр серләшә йәки борсоулы һүҙ, бөткөһөҙ бәхәс алып бара һымаҡ. Нимә хаҡында?.. Бәлки Собхан старшинаның һеләүһен һаҡлығы менән бында килеүе, тирәктән ике-өс аҙым ғына ерҙә, муйыл ҡыуағы аҫтында ятыуы тураһында йәштәргә хәбәр итергә теләйҙәрҙер улар?.. Бәлки...

- Хәбир тирәгенең тирә-яғында, баштары мөнтәлеп, ботаҡтары һынып бөткән муйыл, осҡат, ерек ағастары араһында йылҡы өйөрө һибелгән. Әйләнә-тирәлә йылҡы кешнәгән, өйөр айғыры уктанған, ҡолонсаҡ сырылдаған тауыштан башҡа бер нәмә лә ишетелмәй. Йәмшек ай ҙа, диңгеҙ төбөнә ырғытылған аҡ һуйырташ шикелле, төҫһеҙ генә яҡтырып, күктең иң тәрэн төпкөлөнән тын ғына ҡарап тора. Көньяҡтан иҫкән йылы, йүгерек ел эре, йылтыр ысыҡ тамсылары ҡунған ҡурпыҮ үшәндәрҙең ҡытыршы биттәрен һыйпай-һыйпай, туғай буйлап, шаярып йөрөй. Офоҡта, Ҡыҙҙар тауы битендә, кемвш ҡанатын елпеп, хәҙер-хәҙер ҡалкынып осоп китергә ятҡан серле аҡкош һымаҡ йәйге таң серем итә. Эйе, таң яҡынлаша.,.-Ә Хәбир тирәгенең төбөндә, төтөнһөҙ генә бысҡыған

серектүмәр янында егеттәр, малайҙар Тимербайға сихырланған кеүек текләп һаман ултыралар. Улар араһында Иштуған, Шәүрәнен. атаһы Әхәт тә бар. Собхан старшина л-а һаман ҡайтып китмәй, ҙур ҡорһағын һыҙлата-һыҙлата, ҡыуаҡ аҫтында ята. Ул шулай һәр саҡ ҡорбанына ташланыр алдынан уның «этлеген» үҙ күҙе менән күреп, һөйләгәнен үҙ ҡолағы менән ишетеп белергә ярата. Был унын дөрөҫлөктө табырға, ғәҙел булырға тырышыуынан килмәй, әлбиттә. Кешеләрҙен зарын, унан ризаһыҙлығын ишетеү уға ниндәйҙер хайуандарса ғорурлыҡ, ләззәт өҫтәй. Етмәһә, аҙаҡ, был яуызлыҡты эшләгәндән һуң, уға ҡайһы саҡта нисектер уянырға теләп укталып ҡуйған керле выжданы алдында: «Ул бит үҙе минең менән булышты. Ишеттең бит, нимә эшләмәксе булды? Нисек яманланы бит!.. Әгәр ул әле лә иҫән йөрөһә, тағы нимә һөйләмәҫ, нимә эшләмәҫ ине?» — тип сауҙалашырға мөмкинлек тә бирә.

Ғәмһеҙ Тимербай, уйсан күҙҙәрен берсә айға, берсә быҫҡыған сөрөккә, йә әйләнәһендәге егеттәргә күсереп, еңел, күңелле итеп төрлө хәбәрҙәр һөйләп ултыра. һүҙ башта бүреләр, бигерәк тә көҙгө төндәрҙә уларҙың ҡолонсаҡ һағалап өйөр тирәһендә әйләнеүҙәре, өйөр айғырынның бүреләргә ҡаршы батырҙарса һуғышҡа ташланыуы кеүек нәмәләр тураһында барҙы, Собхан старшина әленән-әле:

— Әллә был, яһил, минең бында ятҡанды һиҙенә микән? Бер ҙә уны-быны һөйләмәй ҙә баһа!..—тип үҙ алдына үҙе мығырланып алды.— Әллә был Шымбай минән көлмәксе булдымы? — тип уны ата-бабаһынан төшеп әрләй-әрләй, йөҙ түбән ятыуҙан сәнсешә башлаған ҡорһағын ыуғылап салҡан әйләнеп ятты. Уның мамыҡ түшәккә өйрәнгән, май бөргән ҡабырғаһына күпереп ятҡан үлән дә ҡаты, йәйге йылы ер ҙә һалҡын ине.

«Китергә микән әллә? Ергә ятып ер ене ҡағылып ҡуйыуы ла бар бит...» — тип икеләнеп тә ҡуйҙы. Шулай ҙа китмәне. Ә Тимербай бүреләр, йылҡылар тураһында хикәйәһен дауам итте.

— Бына шулай, егеттәр, хайуандарға хәтле үҙ балаһын, үҙ яҡындарын бүре ауыҙынан тартып ала... Ә кешеләр?.. Кешеләр үҙҙәре теләп ырғыта...

«һөйлә, һөйлә!..— тип кинәнеп мығырланы хәҙер старшина,— мин һинен. ниндәй ҡолонсаҡ икәненде белеп алайым... Бүренән һаҡларлыҡмы?.. Әллә бүре тамағына ырғытырлыҡмы?..»

Тимербай ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы.

— Бына ошо тирәк төбендә Ғаббас мулла үҙенең берҙәнбер ҡустыһын ҡоторған бүреләр тырнағына ырғытҡан... Эйе... туҡматып үлтерткән... Ә бүреләргә нимә?.. Уларға



ашарға, ҡорһаҡ ҡапайтырға булһа, шул еткән... Әй-й ул бүреләр!-- Ниндәй генә һәйбәт ҡолонсаҡтарҙың баштарына етмәгәндәр улар...

— Ай-һай, яһил, ҡалай уратып алып килеп төрттөрә бит, ә?..— тип мығырланды хәҙер старшина.— Ҡарасәс әбей үҙе лә гел генә: «Хәбирҙең башын ашап старшина булды, Иҙрис кеүектәрҙең тирен түгеп байыны ул, тип мине ғәйбәтләп йөрөй торғайны... Хәҙер инде улы ла минен. менән булыша башлаған икән... Ярай.,. Бүре булғас — бүре. Уның теше һинең тиреңде лә йыртҡыларға етешер әле... Көтөп кенә тор...»

Бүреләрҙән һун Тимербай егеттәргә Кафыр Хәбир тураһындағы фажиғәле хикәйәне һөйләп алды. Тимербай уны, Собхан старшиналар атап йәврөткәнсә, Кафыр Хәбир тип түгел, ә Батыр Хәбир тип һөйләй ине.

Хәбир тураһындағы хикәйә ысынлап та ауыр, фажиғәле хикәйә ине. Телдән телгә, йөрәктән йөрәккә күсеп, халыҡ бәхете өсөн баш һалған батырҙарға бөткөһөҙ хврмәт, яуыздарға ҡарата икһеҙ-сикһеҙ нәфрәт тойғоларын уятып, халыҡ күңелендә үлемһеҙ йәшәп килгән был ваҡиғаға сирек быуаттан ашыу ваҡыт уҙып киткәйне инде. Тимербай кескәй саҡта булған был хәл. Ул саҡта Собхан старшина ла әле хәҙерге шикелле кәбән ҡорһаҡлы бай булмаған. Ә байҙар, муллалар аяҡ аҫтында уралып, байырға, улар рәтенә инергә көсәнеп йөрөгән арыҡ, ҡомһоҙ, ас күҙле йәш бер егет булған. Ғаббас мулланын. берҙән-бер ҡустыһы Хәбир унан да йәшерәк булған. Был ваҡытта Ырымбурҙа, муллалар етештерә торған иң фанатик мәҙрәсәләрҙен береһендә укып йөрөгән. Бында Хәбирҙе атаһы үҙе иҫән саҡта ук урынлаштырып ҡалдырған.

Хәбир кин яурынлы, мөһәбәт, баҙыҡ кәүҙәле, ғәжәп аҡыллы ҡарашлы, төҫкә һылыу егет булып үҫкән. Мәҙрәсәнең ҡаранғы стеналары уның тәбиғәт биргән был көслө сифаттарын кәметә алмаған. йәй көнө ҡунаҡҡа ҡайтҡан арала ла ул ауылдын. һылыу ҡыҙҙарын үҙенә ғашиҡ итеп, Собхан кеүек майкы егеттәрҙең теңкәһенә тейеп, көнләштереп китеп барған. Ҡыҙҙар уны бигерәк тә йырҙа, көрәштә алдына бер кемде лә сығармауы өсөн яратҡандар... Ә мәҙрәсәлә Хәбир ундай ҡылыҡтарын бөтөнләй ташлаған. Баш ҡалкытмай китап эсенә инеп сумған, китаптарҙан, ер аҫтынан алтын эҙләгән ташсы кеүек, йәбешеп ятып ан, белем, хәкикәт эҙләгән. Үҙенсә тормоштон серенә төшөнөргә, донъяны танырға тырышҡан. Мәҙрәсәлә муллалар, хәлфәләр уны укыуға ихлас, зирәк, тырыш булғаныөсөн яратҡандар, уға ҙур киләсәк юраған-Дар. Берәүҙәре ҡарый булыр, икенселәре хәҙрәт, ишан булыр тип тә өмөт иткәндәр. Үҙ мәҙрәсәләрендә шундай шәп, укымышлы кеше етешеүгә маһайып йөрәгәндәр, Ә Хәбир Үҙ алдына тырышып укый торғас, аң, белем яғынан, үҙен

укыткан хәлфәләрҙе күптән уҙып китhә лә, кеселекле, ихтирамлы шәкерт булып ҡалырға, үҙенә ҡарата көнсөлөклө ҡараштар уятмаҫҡа тырышҡан.

Хәбиргә тел ғилемдәре айырыуса енел бирелгән. Ул мәҙрәсәлә ғәрәп, фарсы телдәрен бик яҡшы өйрәнеп алған. Ҡөрьәнде яттан укыған. Унын мәғәнәhенә үҙ телендәге кеүек төшөнгән. Ләкин унан үҙе эҙләгән хәкикәтте таба алмаған. Киреhенсә, ҡөрьәнде ни хәтле яҡшы аңлаhа, шул хәтле диндән айырыла, уға ышанысын юғалта ғына барған. Аҙаҡ шәкерт есөн иң мөкәддәс теләккә ирешә — мулла булып сыға торған йылда ғына бер төндә юҡ та булған. Бер аҙҙан уның христиан динен ҡабул итеүе, Ырымбурҙа духовный семинарияға укырға барып инеүе беленгән.

— Хәбир диндән яҙған!.. Хәбир кафыр булған!.. Урыҫҡа hатылған!..— тигән шомло хәбәр, аяҡ көндә йәшен hуккан кеүек, бөтә мосолман донъяhынын, аҫтын өҫкә әйләндереп, мыжғытып ебәргән. Бөтә ерҙә ошо хаҡта ғына hөйләгәндәр Хәбир исеменә мәсеттәрҙән ләғнәттәр яуған. Хәбирҙен. бер туған ағаhы Ғаббас мулла был тәңгәлдә айырыуса ҙур фиҙәкәрлек күрhәткән. Халыкты мәсеткә йыйып, илай-илай вәғәз hөйләгән. Кафыр ҡустыhын ләғнәтләп бәддоға ҡылған. Хатта уны үлтереү өсен Собхан менән икәүләп бер нисә тапҡыр Ырымбурға ла барып ҡайтҡан. Ләкин Хәбирҙе бер ерҙә лә осрата алмаған. Дөрөҫөрәге, Хәбир укыған ергә уларҙы үткәрмәгәндәр.

Ә Хәбир был ваҡытта бер ни белмәй, бер ниндәй шаушыуға иғтибар итмәй, семинарияла яңы фән, яңы тел, яңы дин өйрәнеп, үҙ йерәген елкендергән hорауҙарға был яңы өлкәнән яуаптар эҙләп ултырған. Мәҙрәсәлә укыған саҡта уҡ йәшерен рәүештә рус телен дә өйрәнеүе, бигерәк тә рус ауылы менән аралашып тигәндәй ултырған Илсеғолда үҫеүе арҡаhында Хәбир был телде лә яҡшы белгән.

Семинарияла христиан динен үҙ ирке менән ҡабул иткән башҡорт егетен яратып ҡаршы алғандар. Стипендия биреп укыткандар. Уҡырға, белем алырға кәрәкле шартты тыуҙырғандар. Йылдар артынан йылдар үткән, Хәбир христиан динен дә энәhенән ебенә хәтле өйрәнгән. Бында ул диндең халыкты наҙанлыкта, ҡаранғылыкта тртоусы, байҙар, батшалар файҙаhына эшләүсе ҡорал булыуын тағы ла асығыраҡ күргән. Семинарияла өйрәнелгән тәбиғәт фәндәре уның дингә ҡарата булған шиген тағы ла арттырған. Тарих, философия, әҙәбиәт ғилемдәре уны көрәшкә рухландырған. Ул индё бынан да ҡасып кітергә, дөрөҫлектө ҡайҙандыр башҡа берәй ерҙән эҙләп ҡарарға теләй башлаған. Ләкин семиғшриянан ҡасыу еңел булмаған. Уны бында хәстәрле ҡулдар ғына түгел, бик уяу, айыҡ күҙҙәр ҙә күҙәтеп торған. .



Семинарияны тамамлағас, Хәбирҙе Ырымбурҙың hүҙе үтерҙәй поптарынан береhенең үтмәй ултырған ҡарт ҡызына ейләндергәндәр. Ырымбурҙағы сиркәүҙәрҙең береhендә поп итеп ҡалдырғандар. Христиан дине үҙенен. тышҡы ялтырауыҡлы күренеше, шаулы, тантаналы ғибәҙәттәре менән ҡайhы саҡта Хәбиргә оҡшап та ҡуйған. Алтын укалар менән биҙәлгән оҙон рясаларға төрөнөп, кадилонан хуш еҫле төтөндәр hибә-hибә, сиркәү сәхнәhендә йырлап йөрөгән саҡта ул үҙен ҙур артист кеүек хис итеп ебәргеләй, ҡайhы саҡта хатта үҙ-үҙен онотоп, ярhыу йөрәк менән тотош бирелеп, шаулы ғибәҙәт эсенә инеп юғала торған булған, Аллаға ғибәҙәт ҡыла килеүселәр был ваҡытта уға, сихырланған кеүек текләп, тынып торғандар. Хәбир үҙенен баhадир кәүҙәhе, сиркәү көмбәҙҙәрен күк күкрәгәндәгеләй дер hелкеткән көслө, ҡалын тауышы менән дә, ҡап-ҡара оҙон сәстәре, тәрән ҡарашы, яҡты, ҡара күҙҙәре менән дә иҫ киткес мөhәбәт, матур, ҡеүәтле hәм аллаға иkhеҙ-сикhеҙ яҡын кеше булып күренгән уларға. Ҡайhы берәүҙәр, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, был йәш попҡа дингә бәйләнешhеҙ ҡыҙыкhыныу менән дә ҡараштыра башлаған. Хәбирҙең был уңышы христиан дин әhелдәренең иғтибарынан, әлбиттә, ситтә тороп ҡала алмаған. Улар был серле попта hунғы ваҡытта дингә ҡарата ныҡ ҡына hыуына башлаған йәштәрҙе ҡайтанан сиркәүгә яҡынайта торған көс күрә, уны артабан академияға ебәреп укытыу, ҙур дин әhеле итеп етештереү ниәте менән әҙерлек эштәре алып бара башлағандар. Уйындың, христиан диненен. тантаналы шауы менән мауығыуҙын, сиге еткән. Академияла ла укып алhа, был дин тырнағынан ҡотолоу тағы ла ауыр буласағын, үҙен. ышанмаған хәлдә лә халыҡты дин менән артабан да ағыулап йәшәүҙең ни тиклем кәбәхәтлеген яҡшы аңлаған Хәбир тағы ҡасырға ҡарар иткән.

«Эйе, ҡасырға, хаҡлыҡты, дөрөҫлөктө тағы бер тапкыр ҡайҙандыр башҡа урындан эҙләп ҡарарға кәрәк»,— тигән ул. Ғәҙәтенсә, оҙаҡ уйлап тормай, был теләген дә тормошҡа ашырған. hыуға баткан кеүек юҡ булған. Бөтә ныҡышып эҙләүҙәр hөҙөмтә бирмәгән. Ахыр рустар, үҙ диненә хыянат иткән өсөн мосолмандар үлтереп ташлағандыр, тигән фекергә килгән. Ә мосолмандар, алла уны йәшендән hуктырып үлтергәндер, зобаниҙарҙан йәки фәрештәләренән күккә күтәреп мендергәндер ҙә тамукка ырғыткандыр, тип тынысланғандар.

Ғаббас мулла был уңай менән мәсеттә оҙон-оҙон вәғәз hөйләгән. Илап-ялбарып:

— Диндән яҙған hәр бер кешене аллаhы тәғәлә шулай язалаясаҡ!.. Я аллам, хаҡ диндән яҙырға юл ҡуйма бәндәләреңә! — тип доға ҡылған. Шуның менән Хәбир хаҡында

һүҙ бөткән. Ғаббас мулла ла тынысланған. Сөнки ул быға-са ҡустыһының диндән яҙыуы.үҙенә шаукым яһар, уға хәҙ-рәт дәрәжәһенә күтәрелергә тотҡар булыр, тип ҡурҡҡан. Шуға күрә Хәбиргә ҡаршы бөтә башҡа муллаларҙан да арт-тырып һөскөртөү алып барған. Инде ҡотолған... Ләкин унын был ҡыуанысы оҙаҡҡа бармаған. Хәбир юғалып өс-дүрт йыл үтеүгә, әле Ғаббас мулла хәҙрәт дәрәжәһенә күтәрелергә лә өлгөрмәҫ элек, бер кисте уға таныш хажи килеп төшкән. Хажи күптән түгел генә үҙенең Мәккәгә, Мәҙинәгә барып, ҡәғбәгә баш ороп, хажда булып ҡайтыуын, хажға барыш-лай Төркиәлә, Стамбулда туктауын, шунда ошо яҡтан ба^ рып урынлашҡан бер сауҙагәрҙән Хәбир хаҡында ишетеүен һөйләгән. Унын, һүҙенсә:

Хәбир поплыҡтан ҡасҡас, ниндәйҙер юлдар менән Төр-киәгә барып сыҡҡан. Университетҡа (дарелфөнүнгә) инеп укый башлаған. Ләкин ике-ес йылдан һуң Россиянан үҙе хаҡында ҡайһы бер һүҙҙәр барып етеүен, түбә өҫтөндә ҡа-ра болоттар ҡуйыра башлауын һиҙеп, унан да ҡасҡан. Хә-ҙерге көндә унын, ҡайҙалығын бер кем дә белмәй икән.

Хажи Хәбир тураһындағы һүҙен:

— Шулай ҙа мин уны терелер, тип уйлайым,— тип бө-тергән.— Хәбир — иблес бит ул. Иблесте хаҡ тәғәлә ҡиәмәт-кә хәтле тере йәшәтер тигән бит Ҡөрьәндә...

— Я рабби, тәүбә-тәүбә! — тип мығырланған Ғаббас мулла.— Кафырҙың йәнен йәһәннәмгә ебәрергә насип ит, аллам!..

Шул ваҡыт ҡапыл унын. иҫенә юлбаҫарҙар хаҡында ха-лыҡ араһында йөрегән һүҙҙәр килеп төшкән. Күҙен түбәгә текләп, кәзә һаҡалын семеткеләп:

«Был бәдбәхет шунда түгелме икән?! — тип тәне эҫеле һыуыҡлы булып тынып ултырған. Ахыр унын ҡонһоҙ күҙҙә-рендә ҡырағай ут баҙлап киткән. Йәбешкәк бармаҡтары үҙ легенән-үҙҙәре йомарланған.— Их, әгәр ул минен. ҡулыма килеп ҡапһа!.. Белер инем...» тигән яуыз ниәт мейеһен бы-раулаған.

Ысынлап та, был йылдарҙа Уралда юлбаҫарҙар шайка-һы булыуы тураһында күп хәбәр йөрөгән. һүҙ генә түгел, эш тә етерлек булған. Тимаш баярҙың, ҡоролоҡ йыл килеүен, иген ҡиммәтләнеүен көтөп, йыл һайын һуғылмай ҡалдыры-ла килгән иген эҫкерттәре бер төн эсендә янып, көлө күккә осҡан. Башҡорт далаһына талпан кеүек ҡаҙалған немец бая-ры Шодтың имениеһын дәһшәтле ялҡын ялмап алған. Ырым-бур менән ауыл баҙарҙары араһында бер туктауһыҙ йөрөп торған сауҙагәрҙәрҙең ылауҙары өҙлөкһөҙ таланған. Улар-ҙың ҡулында юлбаҫарҙар тотторօп киткәи: «һин халыҡты алдап байыған өсөн яза алдьщ!..» тигән яҙыуҙан башҡа бер



нәмә лә ҡалмаған, яҙыуҙың аҙағында һәр саҡ ҡара ҡәләм менән бик матур, асыҡ итеп яҙылған «Үсбай» тигән ҡултам-ға тора икән. Кешеләр бөтә ерҙә юлбаҫарҙарҙың шундай сер-ле һөжүмдәре хаҡында ғына һөйләй башлаған. Тиҙ ара-ла власть органдарының иғтибары ла быға йүнәлтелгән. Ка-ратель отрядтары урмандарҙы, бигерәк тә Тимаш баярҙың көплө урманын ҡат-ҡат һөҙөп сыҡҡандар. Ләкин һөҙөмтә булмаған. Сөнки йомро тояҡлы сыҙам, йылғыр башҡорт ат-тарына атланған был ҡыйыу юлбаҫарҙар есөн Урал ҡуйыны ни тиклем иркен булһа, эҙәрләүселәр өсөн ул шул тиклем тар ҙа, хәүефле лә булған.

Юлбаҫарҙар ябай халыҡҡа ҡағылмаған. Ул ғына ла тү-гел, тирә-яҡта баярҙарҙың имениелары бер-бер артлы янып, көлө күккэ осоп яткан саҡта баяр Крашенинниковтың име-ниеһы ла тып-тыныс йәшәй бнргән. Халыҡ араһында;

— Юлбаҫарҙарҙаң башлығы Үсбай бик укымышлы кеше, имеш. Ул Кершәнник баярҙы башҡорттар менән татыу йә-шәгән өсөн дә, һәйбәт-һәйбәт китаптар яҙған өсен дә ярата, имеш. Шунын, өсөн үҙенең юлбаҫарҙарына уға теймәҫкә ҡуш-ҡан, имеш,— тигән һүҙ йөрөгән. Тора-бара был хаҡта халыҡ шатланып, хатта ғорурланып уҡ һейләй башлаған.

Шайканын. тотолмай оҙаҡ йәшәүе өсөн ҡыуаныуын йә-шермәгән.

— Улар йәйге Урал тепкөлөндә, ә ҡышты Мораҙым йәки Шүлгән мәмерйәһендә уҙғара, ти.Был мәмерйәләрҙән юл донъяһының. бөтә яғына барып сыға, ти. Ул юлдарҙы юлба-ҫарҙарҙын. башлығы Үсбайҙан башҡа бер кем дә белмәй, ти. Ә карателдәр мәмерйәләргә инергә ҡурҡа, ти,— тип кинәнеп һөйләгән халыҡ.

Юлбаҫарҙарҙың атаманы Үсбайҙың матурлығы, батыр-лығы тураһында ла мең төрлө легендалар таралған. Был ле-гендаларҙа ул Эйекте балағын ғына күтәреп аша атлап сы-ғыусы, түбәһе болотҡа тейеп тороусы баһадир итеп тә, хы-зыр-ильяс кеүек арығанға ат, һыуһағанға һыу биреүсе изге йән итеп тә кәүҙәләндерелгән. Юлбаҫарҙарҙың ҡылған эш-тәренә ҡарап халыҡ уларҙы ярлы-ялпы мәнфәғәтен ҡуҙатеү-се, улар өсвн байҙарҙан үс алыусы батырҙар тип таный башлаған.

Халыҡ араһынан ҡыйыу-ҡыйыу егеттәр, ситләтелгән, кәм-һетелгән кешеләр һаман күберәк Уралға ағыла, юлбаҫар-Ҙарға барып ҡушыла торған. Тик атаман Үсбайҙың Хәбир икәнен бер кем дә белмәгән. Хәбир хатта быны үҙенең ин, яҡын юлдаштарынан да йәшергән. Сөнки әгәр үҙенең кемле-ген әйтһә, унын уткәне халыҡты өркөтөр, халыҡты уға ҡар-шы аяҡландырыу өсен байҙарға, муллаларға аҙыҡ булыр, тип ҡурҡкан ул. Хәйер, ҙур, көрәк һаҡаллы, оҙон ҡара сәс-

ле, ҡаты төйөлөп торған ҡалын ҡара ҡашлы, аҙ һүҙле, томһа был кешене сикһеҙ шаян, теремек егет Хәбир менән сағыштырып ҡарау, уға оҡшатыу кемдең дә булһа башына килергә лә мөмкин булмаған. Шулай ҙа был мәсьәлә Хәбирҙе барған һайын нығыраҡ борсоған. Был йәшеренлек, серлелектең ҡасан да бер сиге булыр, көндән-көн ҙурая, киңәйә барған отрядҡа уны таныусы кешеләр ҙә килеп сығыр, шуның менән бөтә план емерелер тип хафаланған ул.

Хәбир, үҙ ғүмерендә төрлө һүрәткә инеп, хаҡлыҡ, дөрөҫлөк эҙләп ҡараған кеше. Ләкин ул бөтә ерҙә берәүҙәрҙең ҡанһыҙлығынан, икенселәрҙең. меҫкенлегенән, ғәриплегенән башҡа бер нәмә лә күрмәгән. Ахыр уға тормоштоң был тигеҙһеҙ ҡоролошо кеше аҡылының ғәриплегенән килеп сыҡҡан мәңгелек тәртиптер һымаҡ тойола башлаған. Күп ваҡыт ул хаҡлыҡ, дөрөҫлөк табыуҙан, ерҙә тигеҙлек урынлаштырыуҙан өмөт тә өҙөп киткән. Уға байҙар үҙ байлығынан ҡәнәғәт булған кеүек, ярлылар ҙа үҙ хәлдәренән ризалыр, муйындарына мэнгелеккә менеп атланған нужа ҡамытын һалып ташлау тураһында баштарына ла килтермәйҙәрҙер кеүек күренгән. Ахыр ул бөтәһенә өмөтһөҙ ҡул һелтәп, ҡалған ғүмерен ҡырағай кеше булып, яңғыҙ йәшәп үткәреү ниәте менән Урал урманына инеп юғалған. Ләкин ул бында ла халыҡ зарынан алыҫ була алмаған. Тормоштан ситләтеп ырғытылған, ләкин көрәшеү, һис юғында үс алыу теләге менән янып йөрөгән батыр егеттәр Урал төпкөлөндә лә аҙ түгел икән. Быны күргәс, Хәбир ҙә, ғәҙәтенсә, күп уйлап тормай, ҡыйыу йөрәк менән юлбаҫарлыҡ юлына инеп киткән. Йылғыр һөжүмдәр менән баярҙарҙың ел-ямғырһыҙ болотһоҙ тормоштарын туҙҙырып, әленән-әле кәйефтәрен боҙоп тороу, уларға ла тынысһыҙ, ҡайғылы тормоштоң нимә икәнен аҙ булһа ла анлатыу теләге уға ҡырағай ҡыуаныс биргән. Юлдаштары унын һәр һөжүмде шул хәтле мауығып, алдан уйлап, оҫта ойоштороуына, ин ауыр, киҫкен минуттарҙа ла юғалып ҡалмауына, һөжүм ваҡытындағы ҡыйыулыҡтарына һоҡланғандар. Аҙ һүҙле, тыйнаҡ холоҡло, хәстәрле мөнәсәбәте өсөн яратҡандар. Тик үҙе тураһында һөйләргә яратмауы, үҙ эсенә ҡаты бикләнеп йәшәүе, унын хаҡында Үсбай тигән исеменән башҡа бер ни ҙә белә алмауҙарына ғына ҡайһы саҡ аптырағандар. Ләкин уға был хаҡта һорау бирергә ҡыймағандар. Ә Хәбир, ябай үс алыу өсөн генә башлап ебәргән был эштен, һаман киңәйә, халыҡ араһынан ҡыйыу егеттәрҙең отрядҡа ағылыуы артҡандан-арта барыуын күреп, халыҡтың ҡасандыр ул уйлағанса уҡ һарыҡ та, меҫкен дә түгеллегенә, юл башлаусы булғанда унын үҙ бәхете өсөн үҙе батырҙарса көрәшкә күтәрелергә әҙер икәнлегенә көндән-көн нығыраҡ ышана барған. Хатта батша — байҙарға ҡаршы бөтә халыҡты баш күтәреүгә әҙерләү тураһында ла хыяллана башлаған. Ләкин быны бер төркөм ҡыйыу егеттәр менән генә эшләп-булмаҫына ла, халыҡ араһына сығып асыҡтан-асыҡ эш алып барырға кәрәклегенә лә төшөнә барған. Шулай ҙа синфи көрәш тарихы менән таныш булмау, көрәштә кемгә таянырға, нисек етәкселек итергә белмәү арҡаһында ул халыҡтын, көсөнә ысынлап ышанып етмәгән. Тик үҙенең бунтарь йөрәгенә генә таянып эш иткән. Тора-бара ул үҙенә был эштә халыҡ араһында һүҙе үтемле ағаһы — Ғаббас мулла ярҙам итә алыр ине. Унын менән һөйләшергә кәрәк ине тигән фекергә лә килгән. Йәнәһе ағаһы үҙен элекке Хәбир итеп ҡабул итһә, был уны йәшеренеп йөрөүҙән дә, ҡасан да булһа берәй таныған кешенән фашланып, халыҡ алдында алдаҡсы булып күренеү ҡурҡынысынан да ҡотолдорасаҡ. Халыҡты баш күтәреүгә әҙерләүҙе лә еңеләйтәсәк, тип уйлаған. Шунан бер төндө, юлдаштарының береһенә лә әйтмәй-нитмәй, Йылсеғолға китеп тә барған. Ағаһының үҙенә ни хәтле асыулы булыуын, үҙ дәрәжәһен күтәреү өсөн берҙән-бер ҡустыһының мәйете аша атларға ла әҙер тороуын башына ла килтермәгән ул. «Әрләр, асыуланыр ҙа ғәфү итер. Ярҙам итмәһә лә тотоп бирмәҫ»,— тип өмөт иткән. Ә Ғаббас мулла Хәбирҙе хатта көтөлгәндән дә яҡшыраҡ ҡабул иткән. Асыҡ йөҙ, хуш күнел менән ҡәҙерләп түргә мендереп ултыртҡан. Алдына аш-һыу ҡуйған. Хәбирҙен, һуңғы йылдарҙағы эштәре хаҡында бер ни ҙә белмәгән-ишетмәгән кешеләй:

— Йә, хуш, мырҙа, һөйләп ебәр... Ҡайҙарҙа булдын,? Ҡайҙарҙа йөрөнөң? Нимәләр күрҙең тигәндәй, эйе, һөйләп ебәр,— тип һораша башлаған. Асыҡ сырай, яҡты йөҙ менән ҡустыһының ҡаршыһына үҙе лә аяҡ бөкләп менеп ултырған. Ә был ваҡытта унын бер улы Собхандарға йүгереп барып, атаһының: «Кафыр Хәбирҙе тотоп, алла ҡаршыһында сауап алайым, власть ҡаршыһында дәрәжәгә ирешәйем тиһәң, хәҙер килеп ет!..» — тигән мәкерле яҙыуын тапшырған. Күптән бирле ошо теләк менән янып йөрөгән Собхан, был хәбәрҙе алғас та, Шымбай каштанды эйәртеп, Ғаббас муллаларға барып та еткән. Ни булғанын уйларға ла өлгөрмәгән, Хәбирҙең башына суҡмар менән шаңҡыта һуғып, аяҡ-ҡулын бәйләп тә ташлаған. Иртәгеһенә Хәбирҙе, Тимербайҙар ултырған ошо Сук тирәккә бәйләп, таш менән бәргеләп үлтергәндәр. Был эштә иң ҙур тырышлыҡ күрһәткән кеше, әлбиттә, Собхан булған. Ә Ғаббас мулла:

— Шулай... Шулай, мосолмандар!.. Кафырҙы үлтереп сауап алығыҙ... Пәйғәмбәр ғәләйәссәләм, кафырҙы үлтергән кеше ожмахҡа туп-тура барып инер, тип әйткән,— тип ситтән һөскөтөп торған. Тукмаусыларҙың бөтә йыртҡыслығын: ...... . . .

— һай, афарин!.. һай, мосолман!..— тип хуплаған. Собхан менән Шымбай унын. һайын ҡотороноп Хәбиргә ташланған. Тирәккә бәйле хәлдә лә үҙенән көслө, мөһәбәт, ҡанға туҙған көйө лә үҙенән матур, һөйкөмлө күренгән был баһадир егеттән Собхан айырата шашынып үс алған.

— Эй, ҡырағай, туҡма, мин барыбер үлмәм?.. Бөтә ерҙә эҙәрләрмен мин һине!..— Тыныс йоҡо бирмәм!.. Иҫеңдә тот!..— тип ҡысҡырған уға Хәбир. Унын ҙур ҡара күҙҙәрендә бөткөһөҙ нәфрәт, сикһеҙ асыу янған...

Ғаббас мулла Хәбирҙе зыяратҡа күмдермәгән.

— Кафырға мосолман зыяратында урын юҡ,— тигән ул, сыйылдап.— Ана Оҙонғол башына, сүплек араһына янғы-*> ҙын бер яры күмеп ҡуйығыҙ.

Кешеләр унын ҡушҡанын еренә еткергәндәр, әлбиттә. Ләкин шул көндән алып был урын сүплек булыуҙан туктаған. Бер кеше лә унда бынан ары сүп түкмәгән. Элек түгелгәндәрен дә бик тиҙ арала ҡуйы йәшеллек баҫып киткән.

Был ҡурҡыныслы фетнәсене тотоуҙа, үлтереүҙә айырыуса тырышлыҡ күрһәткәне өсөн, Ғаббас мулла хәҙрәтлек дәрәжәһенә күтәрелергә тейешле булған. Ләкин яуызлыкты хәйлә-мәкерһеҙ, ап-асыҡтан эшләп, халыҡ алдында дин әһелдәренең абруйын төшөргән өсөн, уны тағы хәҙрәт итмәй ҡалдырғандар.

— Тупаҫһың, халыҡ менән эште оҫта алып бара белмәйһең. Ниңә Хәбирҙе үлтергәндә һиңә унда һерәйеп торорға кәрәк ине? — тип шелтәләгәндәр генә. Ә Собхан власть ҡаршыһында ҙур шөһрәт ҡаҙанған. Старшиналыҡ дәрәжәһенә ирешкән. Бына шул көндән бирле ул алмашсыһыҙ старшина.

Бына шулар хаҡында Тимербай, әлбиттә, үҙ һүҙҙәре менән үҙ ацы дәрәжәһендә, ғәҙәтенсә, йәнле итеп һөйләп сыҡты. Халыҡ өсөн көрәшкән батырҙарға ҡарата йөрәгендә һаҡланған сикһеҙ һоҡланыу, Собхан старшина кеүектәргә ҡарата булған әсе күрә алмау тойғоһо унын. хикәйәһен айырыуса тәьҫирл« итә ине. Шуға ахыры, Хәбир тураһындағы хикәйәне тәү тапҡыр ишетеүҙәре булмаһа ла, егеттәр йотлоғоп тынланы. Иштуған, Әхәт кеүек тынғыһыҙ малайҙарҙын күңеленә ул ғәҙеллеккә, батырлыкҡа өндәгән мәңгелек йыр булып һеңеште.

Хикәйә бөткәс, һәр кем үҙенсә уйға батып, оҙаҡ тынып ултырҙы. Собхан старшина инде түҙемен тамам юғалтты. Берсә хәҙер үк сығып Тимербайҙы Хәбир кеүек үк итеп туҡмап, үлтереп ташларҙай булды. Берсә тешен ҡыҫып түҙергә, бөтә кис буйы ошонда ятып, Тимербайҙың артабан нн һөйләрен тынлап ятырға ҡәһәт итте.

— Ҡара һин уны, яһилде!.. Нн һөйләй бит, ә?.. Нисек һөйләй бит, ә? Йәштәрҙе миңә ҡаршы өндәй бит был яһил!.. Сәпсим яһил!..» — тип ыңғырашты ул. Их, хәҙер үк сығып, эт балаһыкдай итеп, быуып ташларға!..— тип тештәрен шығырлатты. Ахыр бөтөнләй түҙемдән сығып һикереп торҙо. Ауатүнә Оҙонғол ҡабағы аҫтына, атын бәйләп ҡалдырған яҡка табан йүгерҙе. Атка атланып алғас та тыныслана алмай:

— Ярай, йолҡош! Былай булғае, һин урламайынса ла ҡараҡ булырһың! Ат ҡарағы булырһың! Ә ҡараҡка беҙҙә аяу юҡ! Башындың Себер-киткәнен тоймай ҙа ҡалырһың, йолҡош!—тип янай-янай, ауыл яғына ҡарай сапты.

Тынлыкты башлап Иштуған боҙҙо.

— Мин үҫкәс, Хәбир ағай кеүек батыр булам,— тине ул ышаныслы тауыш менән.— Байҙарҙы, баярҙарҙы ҡырам...

Әхәт тә ҡалкынып ҡуйҙы.

— Мин дә.

— Мин дә... Мин дә...— тине тағы бер нисә тауьғш.

— Тнк Ғаббас мулла, Собхан старшина кеүектәргә ағзйың түгел, атайын, булһа ла ышанырға ярамай,— тип иҫкзртте Тимербай.— Хәбир бына ошо тәңгәлдә ҡаты яңылышҡан...

Хәбир тураһындағы хнкәйән&н һун. Тимербай ат ҡараҡгары хаҡында һөйләргә күсеп китте. Унын был хикәйәләре ысын булғанға ҡарағанда уйлап сығарылған мажараларға оҡшай ине. Ниндәй генә нәмә тураһында һүҙ булмаһын, Тимербай уны ҡыҙыклы, мауыҡтырғыс итеп һөйләргә, үҙенсә һәр нәмәгә һығымта яһарға ярата. Әле лә ул Собхан старшинаның йылҡыларын һаҡлап, ҡараҡтар менән үҙенең нисек көрәшеүен, бер нисә ҡараҡка ҡаршы тороп һуғышырға ла тура килгән саҡтарҙың булыуын һөйләп-һөйләп килде лә, уйсан, һалмаҡ ҡараштарын инде күктең ҡабырғаһына ук баҫып, янтайып торған йәмшек айға йүнәлтеп:

— Әлбиттә, ҡараҡлыҡтын да төре бар: берәүҙәр, байлыҡтан шашып, ҡыҙыҡ өсөн йзки ҡомһоҙлоғона барып ҡараҡлыҡка бирелә. Икенселәрен аслыҡ, яланғаслыҡ был юлға этәрә. Шулай ҙа нисек кенә булмаһын, ҡараҡлыҡка яҡшы кеше һатыуға ла бер генә аҙым юл ҡала. Ә бер аҙымды атлауы оҙаҡмы ни?.. Бына шулай ул, егеттәр...— тип һүҙен бөтөрөп ҡуйҙы.

Тимербай, яҡ-яғына күҙ ташлап, йылҡылар бышҡырған, айғыр кешнәгән тауышҡа ҡолаҡ һалып ултыра биргәс, һалмаҡ ҡына итеп:

— Бына,— тип тағы һүҙгә тотондо.— Бына был бер өйөр йылткыны һеҙ барыһы ла тоғро юл менән йыйылған тип уйлайһығыҙмы ни?.. Эй-й, белмәйһегеҙ шул әле... Бында ҡайһы бер төндәрҙә өйөргә унлаған ят йылҡы килеп ҡушылғанын күреп, аптырап ҡалған саҡтарым йыш ҡына була минең... Ҡарайһың.өйөр тирәһендә бөркәнсек ябынған йәки көләпәрә

кейгән ниндәйҙер ят кешеләр сабышып йөрөй. Ҡараҡтарҙыр тиһең... Ат урларға йөрөйҙәрҙер тиһең... Ары сабаһың, бире сабаһың... һөрән һалаһың... Ә тан атҡас ҡараһаң, йылҡы өйөрө кәмемәгән, ә артҡан булып сыға... Аптырайһың... Ҡулынды йәйәһең дә хайран ҡалаһың... Өндәшергә ярамай... Йәшәгең килһә, телеңде тешләп кенә тор... Бына шулай-ул, егеттәр, донъя... Минеңсә, ҡараҡтар менән байҙар араһындағы айырманы табыуы ҡайын ул... Башҡалар нисектер... Иллә мин үҙем...

Ҡапыл яҡында ғына шартлап ҡоро ағас һынды. Тимербай:

— Кем бар?— тип һикереп торҙо. Бөтәһе лә тып-тын булып тыңлап ҡаранылар. Ләкин тауыш ҡабатланманы. Әйләнә-тирәлә йылҡыларҙың тының ҡына мыртлатып көйшәүҙәренән башҡа бер нәмә лә ишетелмәне. Тимербай:

— Ат аяғы аҫтына берәй ҡоро сыбыҡ эләгеп һынғандыр. Башҡа берәй нәмә булһа йәки көтөүгә берәй ят кеше яҡынлашһа, өйөр айғыры хәҙер уҡыранып тауыш бирер йне,— тине лә тынысланып ҡайтанан ултырҙы.

— Тимербай ағай, йә, ҡурай уйнап ебәр әле. Йәки йырлап ал,— тип үтенде Әхәт. Ул арала йыр-бейеүгә, ҡурайға иң әүәҫ малай ине. Тимербай Хәбир тирәгенә арҡаһын терәй биреп, йәтешләнеп ултырғас, бүтәндәр ҙа:

— Йырла, ағай, йырла!— тиештеләр.

— Ярай улай булғас,—тине Тимербай, уйсан ғына көләмһөрәп.— һүҙҙе күп һөйләнек. Хәйерле булһын. Хәҙер йыр менән күңел йыуатып алмай ҙа булмаҫ шул, мырҙалар...

Ул башта бармаҡтарын төкөрөкләп, ҡурайын буйҙан буйға һыпырып алды. Унан, ярһып-ҡалҡынып, «Урал» көйөн һыҙҙырып ебәрҙе. Йәштәр шым булды. Эйек, Оҙонғол буйҙарын иҫ киткес гүзәл ҡурай моцо күмеп китте.

Ҡурайҙан һун Тимербай йырға күсте. Уның ебәктәй йомшаҡ, яҙғы елдәй иркә-нәфис тауыш менән йырлаған оҙон көйҙәре тирә-яҡты берсә йөрәк өҙгөс моң эсендә ойота, берсә тын туғайҙы яҙғы ташҡын кеүек ҡайнар хистор менән күмә йәки, йәш күңелдәрҙе ҡарсыға кеүек елкендереп, зәңгәр бушлыҡҡа осороп алып китә. Күбеһенсә батырҙар, халыҡ өсөн ыҙа күргән, Себер киткән кешеләр тураһында барған был йырҙар тыңлаусыларҙың күңелен тотош биләп ала. Хатта утлауҙа йөрөгән йылҡыларҙын. ҡайһы берҙәре лә, ашауҙан туктап, ут янына яҡын килеп, саф йөрәктән сыҡҡан ысын моңдо тыңлайҙар.

һөйгән генә атым, һай, тимергүк,
Менеп тә генә саптым эңерҙүк.
Шул тимергүк менән елә-саба,
Етә алманым уҙған да ғүмерҙүк,—



тип, Эйек тулҡыны шикелле икһеҙ-сикһеҙ оҙон һуҙып, ярһып, моңайып йырлай Тимербай.

Унан күҙен ала алмай йотлоғоп тыңлап ултырған Иштуғандын башына:

«Көтөүселәр генә шулай шәп йырсы була алаларҙыр?.. Әллә йырсы, ҡурайсы булған өсөн, әллә ҡырҙы, яланды, иректе һөйгән өсөн көтөүсе була микән бындай кешеләр?..» тигән уй килә.

Тимербай оҙон көй тәьҫирендә артыҡ моңайып, тынып ҡалған йәштәрҙең күңелен күтәрер өсөн, үҙе сығарған бәйеттәргә, ҡыҫҡа таҡмаҡтарға күсеп китә:

һатыбал бай, Бай улы.
Итәктәре ҡайыулы.
һатыбалдың манлайына
«һатлыҡ был!» — тип яҙыулы.

Егеттәр был таҡмаҡты дәррәү көлөп ҡаршылай.

Каштан улы Әхмәтша, ти,
Ҡараҡлыҡта тотолған.
Старшина: «Беҙ әшнә»,— тип,
Хөкөм итмәй ҡотҡарған! —

тип Тимербай бер нәмәнән шикләнмәй йырлауын дауам итте. Сөнки ул йырҙын. көсөнә ышана, был йырҙарҙы бөгөн ул үҙе яңғыҙ йырлаһа, иртәгә уны Собхан старшинаға асыулы бөтә кеше эләктереп аласағын белә. Шуның менән, үҙенсә, иҙеүсенән үс ала ине. Ләкин Тимербайға оҙаҡ тантана итергә тура килмәне.

Старшина үҙ һүҙендә торҙо. Шул йәйҙә үк уның ҡушыуы, һатыбалдың ярҙамы менән Әхмәтша ҡараҡ Тимербай көткән өйөрҙән ике атты бер юлы урланы ла, алыҫ баҙарға барып һатып, старшинаға аҡсаһын алып ҡайтып бирҙе. Шунан Тимербайға ҡараҡ тип яла яптылар. Тукмап-иҙеп, кешелектән сығарып, Ырымбур төрмәһенә алып барып ырғыттылар. Аҙаҡ Себергә оҙаттылар. Халыҡ, был эшкә нәфрәтләнеп:

Алмас менән һыҙып яҙалар, ти,
Көмөш йөҙөктәрҙен ҡаштарын.
Бинахаҡтан Себер ебәрәләр,
Арыҫлан егеттәрҙең баштарын,—

тип йыр сығарыуҙан уҙа алманы.

Батыр Хәбир тирәге шыпа яңғыҙ, етем булып ҡалды. Был «ләғнәтле» урындан халыҡ шомланып ҡаса башланы. Тик ара-тирә, эштән арынған арала Иштуған менән Әхәт кенә

бында килеп оҙаҡ-оҙаҡ һүҙһеҙ ултырып китә. Үҙ йөрәктәрендә мәңгелек хөрмәтле урынды биләгән ике йәш батырҙы — Хәбир менән Тимербайҙы иҫкә алыр өсөн дә, үҙҙәре үҫеп еткәс, һис һүҙһеҙ шулар шикелле батыр егет булырға внһөҙ һүҙ ҡуйышыр өсөн дә киләләр улар бында.

VIII

Баҙыян еңгә йәш шул әле. Ҙур ҡайғыны ла тәүләп күрә, донъяла шул хәтле хаҡһыҙлыҡ, тел менән һөйләп биргеһеҙ енәйәт йәшәргә мөмкин булыуына ла тәүләп төшөнә ине. Шуға күрә Тимербай ҡайғыһын ул сикһеҙ ауыр кисерҙе. Бик оҙаҡҡа хәтле унын күҙенән йәш кипмәне, теленән иренең исеме төшмәне. һаташҡан кеше кеүек булып киткән саҡтары ла йыш булды. Нисек шулай булмаһын? Йырҙа әйтмешләй, ун ике йәштән һөйөшөп йөрөп ҡауышҡан кешеләр ине бит улар. Етмәһә, шул хәтле нахаҡ эш, ҡот осҡос яла!..

Тимербайҙың Йәнеш һәм Емеш менән йәштәш ике ҡыҙы — Сабира менән Сәмиғә лә әсәһе менән бергә иланы, унын менән бергә бойоҡто. Ҡарасәс әбей генә сер бирмәне. Дошман түгел хатта дуҫ та унын, күҙендә йәш мөлдөрәгәнен, телендә зар тибрәнгәнен ишетмәне. Килененә дә түҙемле булырға өндәп өгөт-нәсихәт һөйләмәне. Тик һуңғы ваҡытта ул ҡалтырауыҡлы, ҡарт тауыш менән йыш ҡына йырлап-меңрәп ебәрә торған булып китте.

«Ни тип кенә йырлаған була икән, бахыр, бейемем?.. Элек мин унын йырлағанын бер ҙә ишеткәнем юҡ ине лә баһа!..» тип агттырай Баҙыян еңгә. йырҙың айышына төшөнөргә тырыша. Әмәлгә ҡаршы, бейеме гел бер үк йырҙы ҡабатлай:

Ҡара ғына ыласын, һай. балаһыш
Аҫрайыҡ үҫеп тә еткәнсе.
Дуҫтарҙан да бигерәк дошмалдар куп,
һыр бирмәйек үлеп тә киткәнсе.

Ҡарасәс әбей был йырҙы мөнрәп кенә ҡалмай, ҡайһы саҡта әйтемләп әйтеп тә ҡуя. Эйе, бейеме уны сер бирмәҫкә, ғорур булырға саҡыра!.. Күҙҙән йәш күрһәтеп, меҫкенләнеп дошманды кинәндереүҙән ни мәғәнә?.. Юҡ, йәшем сыҡҡансы — йәнем сыҡһын! — ти ул...

Ҡарасәс әбей был йылдарҙа киленена үҙ башынан кискәндәрҙе лә күп һөйләне. Был хикәйәләр ҙә, туралап әйтмәһә лә, килененда үҙендәге кеүек үк ғорур һәм һығылмаҫ ихтыяр тәрбиәләүгә йүнәлтелгәйне, әлбиттә.

— Эй-й... бик йәшһең бит әле һин, килен. Алда ни хәтле йәшәйһең, унан да күберәк күрәһең бар бит әле... Күнегә торорға кәрәк,— тип ҡабатларға ярата ул.— Әй-й... Ниҙәр ки-



леп, ниҙәр китмәи әҙәм башынан... Кем түҙә — шул еңә.

Бер төндө улар бөтөнләй тип әйтерлек йоҡламай уҙғарҙылар. Ҡарасәс әбей килененә үҙ башынан кискәндәрҙе һөйләне.

Айһыҙ ҡараңғы төн. Өй ярым ҡараңғы. Өрлеккә элеп •ҡуйылған бишле лампа мейес алдын ғына яҡтырта. Баҙыян еңгә ике ҡыҙын ҡосаҡлап мейес буйындағы һандыҡ өҫтөндә ултыра. Ҡыҙҙар ялан аяҡтарын йылы кирбескә терәп, әсәләренен, тубығына баштарын һалып, тып-тын ғына мышнап яталар. Ҡарасәс әбей, һуккан дебет шәлгә төрөнөп, аяҡтарын бөкләп, уларға ҡаршы, урындыҡта, йөҙлөк ситендә ултыра. Унын ауыҙынан айһыҙ төн кеүек моңһоу, ләкин атасаҡ таң шикелле өмөтлө һүҙ ағыла.

— Әй-й... ғүмер тигәнен,..- Әле шуны әйтәм, килен, йәш саҡ бер ҙә генә онотолмай икән ул... Көн кеүек хәтерҙә тора икән... Эйе, көн кеүек хәтерҙә... Беҙҙең ауылда ике Карасәс бар ине... Минең аҙашты «Әрпеш Ҡарасәс» тип, мине «Сая Ҡарасәс» тип йөрөткән була торғайнылар...— тип көйлө һүҙып башлап китте ул хикәйәһен...— Әй-й... бер уйлаһаң, сая ла булынған инде... Әле бөгөнгөләй хәтеремдә, бер саҡ, ун ете йәшлек сағымда, атайымдар мине үҙебеҙҙең ауылдың бик бай кешеһенен. улына кейәүгә бирмәк булдылар. Ул егетте беҙҙә «Шаҙра Шафиҡ» тип йөрөтәләр ине. Ә мин Ғәлиулла тигән бер тимерсе егетте яраткан була инем. Теге бай атайыма ҙур ҡалым түләмәксе булды. Бөтә ғүмерен башҡаларҙың байлығына тилмереп уҙғарған әсәйем мәрхүм быға бигерәк тә сат йәбеште.

— Барһаң, шул Шафиҡҡа бараһын, бармаһан, башҡа бер кемгә лә бирәсәгем юҡ. Оялмаһаң, әйҙә, етеү ҡыҙ булып ултырып ҡал, ти. Атайым мәрхүм, урыны ожмахта булғыры:

— Бай бисәһе булырһың, алйот. Бөйөрөңә таянып, ялсы йомшап, гөрләтеп донъя кетәрһең. Илдә абруйын. ҙур булыр, алйот,— тип өгөтләй.

— Битте уны табаҡҡа һалып йөрөтмәйҙәр. Шаҙра булһа ни булған? Шаҙра йөрәк яндыра, тип йырҙа ла йырлайҙар ҙа баһа, иҫәр,— ти әсәйем мәрхүм.

Мин уларға:

— Теләһәгеҙ ни эшләтегеҙ, мин Ғәлиулланан башҡа бер кемгә лә бармайым,— тип киҫәм дә ҡуям.— Әгәр, көсләп шаҙра Шафиҡҡа бирһәгеҙ, минен, кәүҙәмде Эйек төбөнән эҙләгеҙ, тим.— Эй-й йәшлек!.. Үҙем, әйткәндәй, шул Шафиҡҡа бирһәләр, ысынлап уҡ Эйеккә төшөп үлергә тип, уйлап "ҡуйғанмын бит әле. һай йәшлек!.. Теге Шафиҡ тигәне шаҙранан бигерәк аҙғынлығы менән минең йәнемде биҙҙерә ине шул. Йәп-йәш көйөнә, ауылда бер-ике ҡыҙҙың башына еткәйне инде ул. Бөтә ҡыҙҙарға ҡул һалырға ымһынып ҡына

йөрөй ине. Йәнәһе, бай улы булғас, уға ҡыҙҙарҙың барыһының да иҫе китә була...

Мин уны бына шунын, өсөн бигерәк яратмай инем. Йәнем һөймәй ине шаҡшыны!.. Байлыҡ нимә ул?.. Кешемен тигән кеше ул мал менән түгел, йәне, йөрәге менән бай була. Йәне, йөрәге бай кешене генә ысын күңелдән һөйөп була. Ә Шаҙра Шафиҡ кеүектәрҙе...

Ҡарасәс әбей, ытырғанып, ҡул һелтәп ҡуйҙы:

— Аллам һаҡлаһын!.. Әсәйем мәрхүмде әйтәм әле, Шафиҡтың ошо холкон белә тороп, мине уға әрләй-әрләй бир^ мәксе була бит әле.

— Үҙем, мөхәббәт тигән булып, ярлыға барып, ғүмере&Р юҡлыҡ менән үтте. Исмаһам, һин иҫәр булма,— ти. Ә атайым, бахыр, минең изге күңелле кеше ине. Ул мине, әсәйемден, хәтерен һаҡлап ҡына әҙерәк өгөтләп, орошоп маташты ла аҙаҡ:

— Ярар, «Йәне теләгән йылан ите ашаған»,— тиҙәр. Үҙе теләгәс, шул зимагурға барһын әйҙә. Беҙгә үпкәләмәҫ,— тине.

Шулай итеп мин Ғәлиуллама барҙым бына.

Минең Ғәлиуллам, бай булмаһа ла, бынамын тигән егет булды. Ул бейергә, йырларға тиһеңме, ҡурай уйнарға тиһен,-ме, бөтәһен дә булдыра ине... «Һары ла сәс»те йырларға ратҡан була торғайны мәрхүмең...

> Ултырсы әле, сәсең бер үрәйем,
> Торсо, һары сәс, буйың күрәйем.
> (^ыйғас ҡашым, һары ла сәсем,
> һине йәндәй күрәмен...—

тип йөрәк елкетеп йырлап ебәрә лә:

— Ҡарасәс, һинең өсөн, һиңә арнап сығарылғандыр был көй. Һинең һары сәстәреңә арналған, юҡҡа ғына һиңә исемде Ҡарасәс тип ҡушҡандар. һарысәс булырынды белмәгәндәр микән ни? — тип мәрәкәләгән була торғайны... Эй-й-й ғүмер...

Был һүҙҙәрҙән һуң Ҡарасәс әбей, нисектер, йәшәреп киткән һымаҡ булып, тотош яҡтырып тынып ултырҙы. Был ваҡытта уға етмеш йәштең яртыһынан арыны бирергә мөмкин түгел ине.

Бер аҙҙан ул тағыг

— Ә һуң ниндәй тимерсе ине бит! — тип ҡайтанан Ғәлиуллаһын иҫкә алырға керешеп китте.— Хатта булат ҡылыс та ҡоя белә ине. Уға был һөнәрҙең сере Салауат батырға булат ҡылыстар ҡойоп торған бабаһынан быуын-быуындан күсеп килгән икән, тип һөйләй ине халыҡ. Уныһы ысынмылыр, бушмылыр, үҙем белмәгәс, әйтә алмайым. Иллә-мәгәр бысаҡ-һасаҡ, таба-тоба, ураҡ-мураҡ, салғы-малғынын. барыһын да ҡойоп ҡуйған кеүек эшләй ине. Ул инде ат дағалау тиһәң, яҡын-тирәлә уның кеүек оҫта дағалаусы юҡ ине.



Шулай, күгәрсендәр кеүек гөрләшеп, һандуғастарҙай һайрашып бер нисә йыл ғына ғүмер итеп ҡалдыҡ беҙ, килен. Әкиәттәге һымаҡ, йылы айҙай, айы көндәй ҙә тойолманы. Эй-й-й, һөйгән йәр менән ғүмер итеүгә ни етә, килен? Әлеге-баяғы, әйткәндәй, бай булманыҡ. Эшләп кем байыған тигәндәй, үҙен, белмәгән ни эш бар, килен. Эйе, бай булманыҡ, икебеҙ бер тиң тырышып эшләгәс, ас та, яланғас та торманыҡ. Үҙ бәхетебеҙҙе боҙманыҡ. Бесәй балалары шикелле уйнапкөләп йәшәнек. Береһенән-береһе матур, туптай ике улыбыҙ булды... Тик оҙаҡ ҡыуанысҡа ғына булманы. Эй-й... Донъя тигәнең бәхетте кешегә шулай үкенес өсөн, күрһәтә биреп кенә ала күрәһең, килен... Ә донъяла хатта бай булһалар ҙа бәхеттен, ни икәнен бер тапҡыр ҙа татып белмәгән кешеләр ҙә бар бит, килен!.. Ә беҙ... Ә һеҙ... Алланың биргәненә шөкөр тип әйтәйек...

Ҡарасәс әбей һүҙенең ошо ерендә оҙаҡ ҡына туҡтап, төнгө тынлыҡҡа ҡолаҡ һала биреп ултырҙы ла:

— Әле шуны әйтәм, анауы төрөк һуғышы килеп сыҡмаһа, Ғәлиуллам менән беҙ ғүмер буйы бәхеттә йөҙөп йәшәр инек тә бит...— тип артабан һөйләп китте.— Хәйер, бәлки... Донъяның хәлен кем белә...

Бына шулай итеп, ул саҡта беҙҙең бәхетһеҙлеккә ҡаршы һуғыш сығып китте. Ауылдың бынамын тигән йәштәрен, ирмен тигән кешеләрен йыйып алды. Шунда әлеге-баяғы минен, Ғәлиуллам да элэкте шул.

— Эй, бахырҙы...— тип йәлләп ҡуйҙы Баҙыян еңгә.— Алып та киттеләр тиген, ә?..

Ҡарасәс әбей маҡсатына иреште. Киленен һүҙ менән булһа ла йыуата, мауыҡтыра алды. Ул, күңеле күтәрелеп, артабан дауам итте.

— Алып киттеләр генәме һун, килен^ үлтереп тә ҡуйҙылар минец Ғәлиулламды.

— Эй, ҡуйсы инде, бейем...

— Шулай булды, килен. Китеүенә бер йыл тигәндә үле хәбәрен алдым. Полктары менән батшаға ҡаршы күтәрелгәнДәр, имеш, ти, улар. Шуға күрә үҙ батшабыҙ ҡырҙырған, ти, уларҙы...

— Абау, ҡуйсы инде?

Бына шулай итеп, килен, минең Ғәлиуллам йәп-йәш көйө шәһит булып ҡуйҙы. Мин сәскә кеүек сағымдан тол ҡалДыш... Эйе, тап бына һинең кеүек сағымда... Бына бит, донъя нисек килтереп һуға ул, килен...

— Бигерәк ауыр булған икән шул, бейем, һиңә лә.

— Эйе, енел булманы минә лә...— тип тыныс ҡына дауам итте Ҡарасәс әбей.— Минең йәш, халыҡса әйткәндә, тыу бейә кеүек тулап торған саҡ. Етмәһә, «егәрле килен» тигән даным да таралып өлгөргән. Ошонон, өсөндөр инде, Ғәлиулламдын. ҡайғыһын илап бөтөргә лә бирмәй, төрлө яҡтан яусы килә башланы. Ҡайһыһы икенсе бисәлеккә һората. Ҡайһы бер алйоттары хатта бисә айырып алмаҡсы ла була. Үҙемдең ҡайным менән бейемем мал-тыуарлы (ул саҡта беҙ арыу, хәлле генә йәшәй инек, хәҙерге кеүек түгел), баяғыса әйткәндәй, егәрле килендә, ситкә ебәргеләре килмәй. Өлкән улдарына, көндәш өҫтөнә алмаҡсы булалар.

— Теләһәгеҙ ни тип әйтегеҙ, көндәш булып барасағым, кеше күҙ йәшен аласағым юҡ,— тинем мин уларға.— Апһыным үҙе лә бик һәйбәт ҡатын. Уға көндәш булып барырға мин алйотмо? — тинем.— Улай булһа, Сәмиғуллаға алабыҙ,— тиҙәр. Сәмиғулла минең иң кесе ҡәйнешем була. «Хәҙер инде минең өсөн барыбер. Ирһеҙ ҡатын булып, кеше һүҙенә эләгерлек булмаһа ярар»,— тип уйлайым. «Кемгә генә барһам да Ғәлиуллам булмаҫ. Йөрәгемдә унын урынын ала алмаҫ»,—тим.

Шулай итеп Сәмиғуллаға еңгә-бисәлеккә алып ҡуйҙылар. Минә ул саҡта егерме дүрт самаһы ине шикелле. Ә уға, бахырға, уҙа барһа ун дүрт-ун биш булғандыр... Шулай ине шул бахыр... Мәрхүм... Бына ошо һөлөктәй һылыу Тимербайыма яңы атай булыр кеше ана шул Сәмиғуллам булды инде, килен...

— Эй бахырҙы,— тип ҡуйҙы Баҙыян еңгә.

Ҡарасәс әбей баҫалҡы ғына кеткелдәп көлөп алды ла:

— Бына шулай итеп мин ҡәйнешем Сәмиғулла менән тора башланым,—тип артабан һөйләп китте.— Торабыҙ тип ни, никахлап ҡушҡас, ни эшләйһен, ирем бар тиһен, инде. Ә былай ни, ул бала булғас бала инде. Үҙ тиң-тошо менән уйнап, һыу инеп, балыҡ ҡармаҡлап тик йөрөй. Мин бахыр донъя көтәм, уйланып, ҡайғырып ултырырға ваҡыт юҡ. Донъя булғас, икмәге лә кәрәк, сәй-шәкәре лә, бесәне-утыны ла кәрәк, Ашлыҡты ла үҙем сәсәм. Бесәнде лә үҙем сабам, урмандан утынды ла үҙем апҡайтам, бөтәһе үҙ өҫтөмә ҡалды хәҙер.

Сәмиғуллам менән минен, ул саҡтағытормош йәштәр өсөн бер мәҙәк булды. Меҫкен Сәмиғулламды күҙен астырмай мәҙәкләп, ыҙалап бөтәләр. Ҡайһы бер шаяндары юҡ-барҙы өйрәтеп, откоп та ҡайтара. Откоп тигәндәй, иҫкә төшөп китте әле: бер саҡ шулай, эңер төшөп килгән генә мәлдә, мин урмандан утындан ҡайттым да, киске тамаҡҡа әҙерләй һалайым тип, ҡаҙан тирәһендә булашам. Бына бер мәлде ишектән елт итеп Сәмиғуллам килеп инде. Әсәһенә үсеккән бала шикелле, ҡалын иренен турһайтҡан, ҡулына оҙон тал



сыбыҡ тотҡан. Үҙе танауын мырш-мырш тарта. Мин әйтәм, был бахыр, талдан берәй тәтәй яһап уйнарға уйлайҙыр инде, әйҙә уйнаһын, бахыр, күрмәмешкә һалышайым, тим. Уға артым менәнерәк әйләнеп торам. Йәнәһе ҡаҙандан ит алып маташам.

Шунан мин һиңә әйтәйем, килен, теге ир ишараһы, бер саҡ арҡа буйыма сыбыҡ менән сажлатып, һыҙыра тартып ебәрмәһенме!.. Күҙҙәремдән осҡондар осоп китте.

— Әл-ләү-кәй!..— тип, ҡотом алынып, ҡыскырып ебәргәнемде тоймай ҙа ҡалдым. Шулай булмай ни, шыйыҡ тал сыбыҡ бит! Бер ҡат күлдәк үтә бит. Яланғас арҡаны буйҙанбуйға ялландырып сығарған шул...

— һуҡты тигенсе?! Ҡара һин уны!.. Үҙе уҫал ғына булған икән дә,— тип аптыраны Баҙыян еңгә.— Тоҡ-томалға һуҡты тигенсе, ә?!

Ҡарасәс әбей ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы:

— Ҡайҙа ти инде ул бахырға уҫал булыу? Ғүмере буйына бөтә һуғыуы шул булды унын. Унда ла, бахыр, кеше отҡоһона бирелеп кенә һуҡкан. Үҙемдең бер туған ҡайнағам мәҙәк өсөн ҡотортоп ҡайтарған уны.

— Бисәне ир кеше туҡмап тота ул. һин, Сәмиғулла, ниңә киленде туҡмамайһың? Бар, хәҙер үк ҡайт та туҡма. Ату ул үҙенде иргә һанамаҫ. Еңгә-бисә туҡмаһан, ғына ярата ул...— тигән. Шунан ни был, бахыр, ирәйеп киткән булып, тал сыбығы менән минең һырт буйына тартты шул. Үҙе, бахыр, шул ынғайға йүгереп урындыҡҡа менә һалып, Ғәлиулламдың мөйөштә элеүле торған бүре толобоноң артына йәшенде лә илап та ебәрҙе, мәрхүмең.

— Еңгә, ти, асыуланма, ти, мин былай ғына, ағайым әйткәнгә генә һуҡтым... Бүтән бер ҡасан да һуҡмайым, ти.

— Шунан ни әйтәһең инде уға — һыным ҡатып көлдөм дә, ҡыскырып илағым да килеүгә түҙә алмай, йүгереп тышҡа, кәртәгә сығып киттем. Э-й-й, мәҙәк тә... көйөк тә шул...

Ҡарасәс әбей, башын артҡа ташлай биреп, тауышһыҙ ғына тағы бер кеткелдәп алды. Унан килененен. дә йылмая биреп, ихлас тыңлап ултырыуын күреп, кинәнеп, хикәйәһен артабан һөйләп китте.— Тәүге иремдән — Ғәлиулламдан ике бала, Сәмиғулламдан ун бала килтерҙем. Йәмғеһе ун ике бала бирҙе хоҙай. Ғәлиулламдан булған ике улым ғүмерһеҙ булды. Береһе сәсәктән, береһе шунда һалҡын тейеүҙәнмеүлеп ҡалды. Сабыйҙарымды ҡарап ултырыр ваҡыт тапманым шул мин. Эш бит, килен, эш... Сәмиғулламдан гел ҡыҙ таптым. Бары бер улым — ошо Тимербайым ғына нығ булДЫ... Унынһын да күп күреп дошмандар тартып алды... Эй-й... Ниндәй бала ине бит!.. Кешегә яҡшылыҡтан башҡа уйы юҡ "не... Яҡшы кеше Собхан старшиналар есөн күҙгә төш-

кән сүп кеүек инде ул. Эйе, кем күҙҙән сүпте алып ташламаҫ?!

Ҡарасәс әбей көтмәгәндә хикәйәһенең Тимербайға барып теркәлеүенә, киленен ауыр уйҙан арнытыр өсөн башлаған һүҙҙең унын, күңел яраһын ҡуҙғатыусыға әүерелеүенә үҙе лә аптырап ҡалды. Оҙаҡ һүҙһеҙ ултырҙы. Баҙыян еңгә лә тауыш-тынһыҙ ине. Унын ҡулдары үҙ итәгендә йоҡлап киткән балаларының сәстәренән әкрен генә һыйпай, күҙҙәре саҡ-саҡ ҡына быҙлап ултырған лампаға текәлгән. Ләкин ул лампанын, кәрәсине бөтөүен дә, ҡыуығының һөрөмләнеүен дә күрмәй, абайламай кеүек. Эйе, унын, уйҙары тағы ла алыҫҡа, Себер яҡтарына, Тимербайы янына китеп барғайны был саҡта.

Ҡарасәс әбей, килененә текләп оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырғас, үҙенә хас, күтәренке тауыш менән:

— Бына шулай ул донъя, килен,— тип ҡуйҙы.— Ҡайғыға эйелмәй, шатлыҡҡа ирәймәй ҡала алмаған кешеләрҙе ул хатта ҡабат баш ҡалҡытып тора алмаҫлыҡ итеп, бөгөп һалып та ҡуя... Әммә ләкин шуны онотмаҫҡа кәрәк, шатлыҡ та, ҡайғы ла мәңгелек түгел. Кем түҙә — шул еңә...

Баҙыян еңгә уйсан ғына бейеменең һүҙен ҡабатланы.

— Эй-йе... Кем түҙә — шул еңә, тигенсе... Ә бит, бейем, түҙеүе ҡайһылай ауыр!..

Ҡарасәс әбей, шул бер үк йырын йырлай-мөцрәй, балаларға урын йәйә башланы.

...Дуҫтарҙан да бигерәк дошмандар күп,
һыр бирмәйек үлеп тә киткәнсе...

## IX

Илсеғолда йыр, бейеү, уйын-көлкө яраталар. Борондан Ҡаҙмаш, Ҡыҙылташ, Яйыҡ буйҙарында йәйләп йөрөгән саҡтарҙан ҡалған был ғәҙәт. Тик Иштуғандар тыуған ваҡытҡа инде ул ғәҙәткә мөмкинлек тарайған. Ярлылыҡ та, дин дә ҡыҫҡан. Ысын, шәп ҡурайсылар ҙа, йырсылар ҙа аҙайғандан-аҙая барған. Шулай ҙа һуғышҡа хәтле, донъялар имен саҡта, мулла, дин ҡыҫыуына ла, елкәнән мәңге төшмәҫкә менеп ултырған нужаға ла ҡарамай, йәштәргә уйын өсөн үҙ әйөн бирә торған киң күнелле кешеләр табыла торғайны әле. Хатта берәй шәп ҡурайсы килеп сыҡҡанда, уйын өйөнә йәштәр генә түгел, оло-оло ирҙәр, ҡатындар ҙа йыйыла. Бындай саҡта хатта Ғаббас мулла ла айыу кеүек өңөнә боҫоп ята торғайны. Әле ундай егет-ирҙәр бөтәһе лә һуғышҡа китеп бөттө. Ә ҡатын-ҡыҙ, бигерәк тә һалдаткалар, исем сығыуҙан, ирҙәре алдында намыҫһыҙлыҡта ғәйепләнеүҙән ҡурҡа. Хәҙер үҫеп килгән йәш-елкенсәккә ҡыш кендәрендә йыйылып уйнар урын да юҡ. Етмәһә, бөгөн Әхәттәргә күрше ауылдан гармунсы егет тә килгән. Шундай саҡта уйнап-көлөп ҡалмасы инде! Кемдән генә ей һорарға һуң? Сәрбиямалдан яҡшылыҡ өмөт итеп булмай. Әхәттәрҙең өйөндә йыйылып булыр ине лә, улар Собхан старшиналарға күрше торалар. Әле бит бына, көпә-көндөҙ, улар әҙ генә гармун тауышы сығарыу менән, Алмабикә аждаһа кеүек ажғырып килеп тә етте:

— Старшина олатайыңдың ҡолаҡ тебөндә шайтан өҙләтеп ултырырға нисек оялмайһың, Әхәт? — ти.— Хәҙер үк туктат! Өнө-тыны сыҡмаһын! — ти. Үҙ өйөңдә үҙеңә ирек юҡ. Шулай булғас, унда ҡалай итеп уйын йыяһың?!

Иштуған менән Әхәт, ошондай тынғыһыҙ уйҙар менән баш вата-вата, көрт баҫҡан урам буйлап үрге оҫҡа китеп барғанда, Сәлимә менән осраштылар. Ул, зәңгәр күнәктәрен талғын ғына бәүелтеп, Эйектән һыу алып ҡайтып килә ине. Иштуған менән Әхәт, тар юлдан ситкә тайшанып, юл бирҙеләр.

— Шәпме, еңгә?

— Үт, еңгә!

Сәлимә, һығылма көйәнтәһен икенсе яурынына күсереп, егеттәрҙен, ҡаршыһында аҙ ғына туктап ҡалды.

— Шәплеген шәп тә... Бына ағайыцдың кисә килгән хаты һаман укылмай ята бит әле, Иштуған мырҙа...

— Аһ, ул да булған икән зар. Хәҙер инеп укып ташлайбыҙ уны,— тине Иштуған, шаян йылмайып.— Беҙҙең кеүек егеттәргә хат укыу шәйме ни ул? Эйе бит, Әхәт?!

Туңған итектәрен бер-береһенә һуғып, тыпылдап бейеп торған Әхәт был һүҙҙе:

— Эйе лә баһа,— тине күтәреп алды.

Сәлимә ҡайҙа баҫҡанын белмәй ашҡынып артабан китте.

— Ысынлап та, ҡыйын булмаһа, инеп укып ҡына сыҡ әле, мырҙа.

— Ниндәй һүҙ ул, еңгә?.. Ҡыйын булмаһа, имеш. Теләһәң мин хәҙер үк инә алам,— тип ҡысҡырып ҡалды Иштуған.

Сәлимә:

— Эй-й, теләмәгән ҡайҙа ти инде ул!.. Кисәнән бирле йоҡом йоҡо, ашым аш түгел, мырҙа,— тип үҙәлөнде.

— Хәҙер инәбеҙ, еңгә,— тип ҡалды Иштуған. Үҙе ныҡ ҡына итеп Әхәттен. ҡабырғаһына төртөп алды,— Беләһеңме нимә? Әйҙә, хатты укыйыҡ та Сәлимә еңгәнән уйынға өй һорайыҡ!..

— Дөреҫ!..— тип тағы бейеп әйләнеп китте Әхәт.— Былай булғас, уйын була бегөн, Иштуған!.. Сәлимә еңгә тәүәккәл ул. Моғайын, үтенесте кире ҡаҡмаҫ. Әйҙә, бара һалайыҡ, Укый һалайыҡ!

— Киттек! — тине Иштуған. Улар Сәлимәне ҡыуып еттеләр.

Сәлимәнең өйө кескәй генә булһа ла йылы, йыйнаҡ ине. Һалҡын урамда байтаҡтан бирле тапанып йөрөп өшөгән егеттәр, йылыға ингәс, кинәнеп, бүректәрен һалып, бишмәт төймәләрен ысҡындырып ебәрҙеләр.

— Уҙығыҙ, урындыҡҡа ултырығыҙ,— тине Сәлимә. Үҙе, ашыға-ашыға күнәктәрен урындыҡ менән усаҡ араһына эшләнгән кескәй һикегә алып барып ултыртып, өҫтөн һап-һары итеп ҡырып йыуылған ҡарағай таҡта менән ябып ҡуйҙы. Унан күкрәксәһенә һалып ҡуйған ҡалын ғына конвертты алып Иштуғанға һондо.

— Бына, мырҙа, уҡый һал, йәме.

— Хаммат ағайымдан икән!

— Эйе, унан, үҙенән!..— тине Сәлимә, тотош балҡып.— Өсөнсө көн төшөмдә Хаммат менән икебеҙҙең, сағыу ҡояш аҫтында, гөл сәскәле матур бер яланда йөрөгәнебеҙҙе күргәйнем. Күңел үҫергә булған икән. Бына кисә үҙенән хат килеп тә төштө!

Хаммат үткән бер хатында, фронтҡа барғас, ниндәйҙер бер рус һалдатынан рус хәрефтәрен өйрәнеп алыуы, шул арҡала хатҡа адресты хәҙер үҙе яҙа белеүе тураһында ҡыуанып яҙғайны. Иштуған, шуға айырыуса ҡыҙыҡһынып, башта хаттың адресын ҡарап ултырҙы. Уның эре, батыу хәрефтәре, ҡарағай ботаҡтары шикелле төрлө яҡҡа тырпайып, кәкребөкрө булып, конверт тышында сәйер һибелеп яталар ине.

Иштуғандың әкренлеге Сәлимәгә түҙеп торғоһоҙ оҙаҡ тойолдо. Ул, йөрәгенең ашҡыныуын көскә тыйып:

— Уҡый һал, мырҙа,— тип ҡабатланы.— Йәнем түҙмәйсе...

Хатты Хаммат, мәҙрәсәлә өйрәнгәнсә, татар телендә, китапса итеп яҙа. Хатына ҡарап, йор һүҙле, теремек, уяу холоҡло Хамматты күҙ алдына килтереп баҫтырыуы ҡыйын ине.

*«Күҙ нурым кеүек күргән хәләл йәмәғдтем Сәлимәгә, безки хдләл ефетегеҙ Хамматтан күпдин-күп, суҡдин-сүк сәләм күндерәм...»*— тип, ауыр итеп, ижекләп уҡып китте Иштуған. Хаттың. яртыһынан күберәге «шәфҡәтле әнкәмә», «ғәзиз балаларыма», «күрше-күләнгә», «ағай-энегә» тап шундай уҡ күпдин-күп, суҡдин-сук сәләмдәр күндереүҙән тора ине. Сәләмдәрҙән һуң ул: *«Ошо арала дүрт мәртәбә һуғышка кереп, хаҡ тәғәләнең ярҙамы илә сәләмәт сыҡтым...»* — тип үҙе хаҡында дөйөм һүҙҙәр менән генә бер-ике юл хәбәр яҙып ҡуйған да, ғәҙәт буйынса, йырға күсеп киткән. Һәм тап бына ошо йырҙарҙа ғына ысын, тере Хамматты күҙ алдына килтереп баҫтырырға, уның уйын, теләген, тынғыһыҙ ҡыйыу йөрәгенең тибешен аңларға мөмкин ине.



Хаттын, йыр бүлеген ул:

Эйек буйҙары ҡалды инде,
Һары сәскә алды инде.
Һағынышып, һарғайышып,
Хат яҙырға ҡалды инде,—

тигән һымаҡ, һөйөү, һағыныу йырҙары менән башяап ебәргән. Унан һуғыш күренештәрен, һалдат уйҙарын һүрәтләгән йырҙарға күсеп киткән:

Германдар туп аталыр,
Тәтәнө ергә яталыр,
Ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы ҡулһыҙ,
Тилмерешеп яталыр...

Бындай йырҙарҙы Хаммат бик **күп итеп теҙеп яҙып сыҡ**ҡан. Былар араһында:

Ҡояш сыҡһа, ялтырайҙыр
Өй башындағы ҡалай.
Башыбыҙға етә инде
Ҡәһәр һуккыр Николай,—

тигән һымаҡ уҫал, асыулы йырҙар ҙа бар. Сәлимәгә йырҙарҙың баштағылары, ә Иштуған менән Әхәткә һуңғылары күберәк оҡшаны. Ә мөхәббәт тураһындағыларын улар Сәлимә еңгәнең күңеле булһын өсөн генә яҙылған буш йырҙар тип кенә ҡаранылар. Уларса, ошондай дәү, олпат ирҙең һөйөү, һағыныу йырҙарын ихлас күңелдән йырлауы һис тә башҡа һыймай торған эш ине.

Хатты ла, йырҙарҙы ла бер-ике ҡат уҡығас, Иштуған, урындыҡҡа һуҙылып ятып, ҡәләмде ауыҙға ҡабып төкөрөкләй-төкөрөкләй, Сәлимәнән Хамматҡа хат яҙҙы. Был хат та, тап Хамматтың хаты шикелле, башта ауылдың иң кәмендә яртыһынан сәләм күндереү менән тулды. Аҙағы йыр менән бөттө.

Ағын һыуға таҫма һалһаҡ,
Батмай елберләп аға.
Һине уйлап, һине һағынып,
Йәшем мөлдөрләп аға...—

тип йыр артынан йыр әйтеп ултырҙы Сәлимә. Ә Иштуған, тырышып-тырышып, яҙҙы ла яҙҙы. Ахыр хат тамам булды. Иштуған, тирләп-бешеп, еңе менән текә кин, маңлайын һөртөп алды.

— Булды, енгә, хат бешеп сыҡты.

— Эй, тукта әле, мырҙа, тағы бер **генә йырым онотолрп**

ҡалған бит!..— тине Сәлимә, өҙәләнеп.— Шуны ғына өҫтәп ҡуй инде, мырҙа, йәме.

— Ҡана, әйтеп ебәр. Әмәлгә ҡаршы, бынауында, ҡағыҙҙың бер мөйөшөндә, аҡ урын да ҡалған икән.

Иштуған тағы ҡәләмен текөрөкләп яҙырға әҙерләдде.

Ә Сәлимә йырҙы әйтәһе урынға, оҙон һуҙып, моңайып йырлап ебәрҙе:

Эйек кенә һыуы татлы тиҙәр,
Татлынан да телем тәм тапмай.
Яна ла көйә моңһоу йәш йөрәгем,
Ни эшләһәм дә һинһеҙ йәм тапмай.

Унын тауышы ситлектән ысҡынған ҡош йыры кеүек ярһыу ҙа, йәйге кис кеүек серле лә, моңһоу ҙа ине. Сәлимә йырлап бөткәс, йәшле күҙен Иштуғанға йүнәлтеп, унайһыҙланып ҡына йылмайып ҡуйҙы.

— Бына шулайтып өҫтәп ҡуй, йәме, мырҙа!

Сәлимә ырыу-ара тәртип буйынса, был ауылда Хамматтан кесе бөтә ир затына «ҡәйнеш» тип өндәшергә тейешле булһа ла, Иштуғанға, әллә унын сит ауылдыҡы булыуын иҫкә алып, әллә ярҙамсыллығы өсөн яратып, туған кеүек күреп һәр ваҡыт «мырҙа» тип өндәшә. «Мырҙа» һүҙе туғанлыҡ яҡынлығын белдергәнлектән, ҡәйнеш менән еңгә араһында була торған төрлөсә шаярышыу ғәҙәтенә урын ҡалдырмауы менән дә оҡшай ине шикелле уға.

Хатты конвертҡа һалып, ҙур ауырлыҡ менән булһа ла адресын да яҙып ҡуйғас, егеттәр Сәлнмәгә үҙ үтенестәрен әйттеләр:

— Бер кискә генә, ен,гә, өйөндө бирә алмаҫһыңмы икән? Беҙҙең уйнап алғы килә ине,— тине Иштуған.

— Бик шәп гармунсы ла килгәйне,— тип өҫтәне Әхәт.— Өҙҙөрөп уйнай ҙа ҡуя, малай. Бейемәҫ ерендән бейеп китерһең!

Сәлимә был көтөлмәгән үтенескә ни тип яуап бирергә белмәй, икеләнеп, оҙаҡ ҡына уйланып торҙо.

«Нисек булыр икән һун? Бейемем ни әйтер?.. Өммөкәй ҙә берҙе биш итеп Хамматҡа еткерергә әҙер тора бит әле... Минең һүҙемде тыңлап, гел-гел хат уҡып, хат яҙып торған шундай тыңлаулы, изгелекле Иштуғандың һүҙен йығыуы ла ҡыйын инде... Бынауы, күҙгенәһе мелдерәп торған, бәләкәс Әхәте лә йәл. Аяҡтарын тыпырлатып, ҡалай бейегеһе килеп тора бит бахырҙын,!..»

— Бик оҙаҡ уйнамабыҙ. Берәр ҡат ҡына бейешер ҙә сығырбыҙ,— тип ныҡышты Иштуған.

— Шым ғына ултырырбыҙ, еңгә, шаулашмабыҙ,— тип өҫтәне Әхәт. Ахыр Сәлимә, күңеленән шикле уйҙарына ҡул һелтәне лә, тәүәккәл тауыш менән:

— Ярар,— тип ҡуйҙы.— Ярар, уйнағыҙ. Ни булһа ла булыр.

— Бер ни ҙә булмаҫ. Күңелле генә булыр, енгә,— тип -кыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе Иштуған.

Әхәт:

— Бейейбеҙ! — тип баҫҡан еренән бер-ике һикереп төштө. Бынан һуң улар, уйынға иптәштәрен йыйыр өсөн, ашығып урамға сыҡтылар. Ләкин Иштуғанды шунда уҡ Тимербайҙың ҡатыны Баҙыян еңгә эләктереп алды. Уға ла хат уҡып, хат яҙып бирергә кәрәк ине. «Уйын була!..» тигән хәбәрҙе егеттәргә еткереү бурысы Әхәттең бер үҙенә генә төшөп ҡалды.

Иштуғанға Тимербайҙын, хаты, һәр ваҡыттағыса, бөгөн дә бик оҡшаны. Тимербай башҡалар кеүек китап теле менән түгел, ә тап ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшкәндәге кеүек итеп, үҙ телендә яҙа. Шуға унын, хаттарын уҡыуы ла, аңлауы ла еңел була. Тик, үкенескә ҡаршы, унан хат бик һирәк, дүртбиш айға бер генә килә ине.

Тимербайҙын. бөгөнгө хаты каторга больницаһынан сығыр алдынан яҙылғайны. Хат эсенә ул:

— Бынынһы минен, һөйөклө ҡыҙыҡайҙарыма булыр,— тип айырым бер ҡағыҙға, теп-тере һымаҡ бер нисә төрлө шәкел-1Ә бесәйҙәр төшөрөп, улар янына Ғ. Тукайҙың «Мыяубикә» шғырын тотош күсереп тә һалғайны. Иштуған хатты ошо диғырҙы уҡыуҙан башланы. Тимербайҙын. кәләше Баҙыян Ьңгә лә, ҡыҙҙары Сабира менән Сәмиғә лә, Ҡарасәс әбей ҙә ' өйҙә. Улар бөтәһе лә, хат уҡыусыға ҙур хөрмәт менән ҡарап, аяҡтарын бөкләп урындыҡ өҫтөндә ултыралар. Сәмиғәнең янында унын ин, яратҡан дуҫы — ҙур ала бесәй ҙә, хат тыңлағандай булып, ойоп ултыра.

Төштә тычкан һәм күсе халкы
Белән ул эш күрә,—
...Ал аякларға башын куйған да
Йоклый, төш күрә,—

тип көйләп уҡый Иштуған.

Ҡыҙҙарға шиғыр янына төшөрөлгән бесәй һүрәттәре айырата оҡшаны. Тимербай уларҙы күп төрлө шәкелдә төшөргәйне.

Был һүрәттәре хаҡында ул шундай хәбәр яҙғайны:

— Мин, шахтанан руда ташығанда, аяғымды һындырып бик оҙаҡ больницала яттым. Йөрөргә хәл юк... Көн үтмәй. •Зе боша. Ошо ваҡыт Ҡазандан минен, кеүек үк нахаҡтан ^ебер киткән бер егет үҙенең нисектер һаҡлап йөрөткән бер-

ҙән-бер китабын миңә уҡырға бирҙе. Бында ул, моғайын, берҙән-бер татарса китап булғандыр. Мин уны, ҡат-ҡат уҡый торғас, хатта ятлап бөттөм. Төрмә больницаһында Николай Иванович тигән бик һәйбәт врач бар. Ул миңә ҡағыҙ, ҡәләм биреп тора. Бер көн мин эс бошоуға түҙмәй ул биргән ҡағыҙҙарға теге китаптағы һүрәттәрҙе күсереп төшөрә башланым. һәйбәт сыҡтылар. Шунан алып һүрәт төшөрөргә бирелеп киттем. Хатта бер көндө, батырайып китеп, теге Николай Ивановичтың һүрәтен дә яһап ҡуйҙым. Ул, мин йоҡлағанда килеп ҡарап, быны күргән дә, уянғас, яныма килеп:

— Тимерка, әгәр, ти, һиңә бала сағыңда тейешле уҡыу тейһә, беләһеңме, бынамын тигән художник булыр инең һин, ти. Йәнәһе һүрәт төшөрөү оҫтаһы булыр инең, тимәксе бу-ла. Унан йәнә, ҡарап-ҡарап тора ла:

— Талант бит һиндә, талант, тип ҡуя. Таланты ни тигән һүҙҙер инде, уныһын мин, әлбиттә, аңламайым. Ну, шулай ҙа уның маҡтауы күңелгә оҡшай. Как же, ул бит һүҙҙе елгә осора торған алай-былай ғына кеше түгел. Врач! Бына тигән олпат кеше. Шунан һуң ул миңә хатта төрлө буяулы ҡәләмдәр ҙә бирҙе.

— Мә, ти, Тимерка, төшөр, ти. Кем белә, бәлки, кәрәге тейеп тә ҡуйыр, ти. Ни кәрәге булһын инде уның? Тик әле, эс бошҡанда, квн үткәрергә миңә бында ярап торҙо ул. Шул һүрәт төшөрөүгә мауығып, артабан көндәрҙең үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалған саҡтар булғыланы. Бына әле был бесәй һүрәттәрен шул врач биргән ҡәләмдәр менән буяп, уның ҡағыҙына төшөрҙөм. Шулай итеп, мин бында һүрәт төшөрә белеү ҙә бер һөнәр икәнен, беҙ уйлағанса пустяк нәмә генә түгел икәнен аңланым. Ә беҙҙең ауылда бынын өсөн Ғаббас мулла нимә эшләтер ине икән, ә?

— Тәре яһайһын., хәсис! —тип таш менән атып үлтерттерер ине бит!.. Шулай бит, Баҙыян һылыу? Дөрөҫ бит, әсәй?

Күҙҙәренән өҙлекһеҙ мөлдөрәп торған йәштәрен тыйырға тырышып, тыныс ҡына тынлап ултырған Баҙыян еңгә, һалмаҡ ҡына тауыш менән:

— Шулай булмаған ҡайҙа,— тип һуҙып ҡуйҙы.

Ҡарасәс әбей, биттәрен, күҙҙәрен таҫтар осо менән һыпырғылап, ауыр итеп көрһөнөп алды.

— Әйтерең генә бармы!.. Беҙҙен, балалар ни эшләһәләр ҙә гонаһ шул. Уларҙын, балаларының ғәйебе генә күренмәй. Ана бит әле Хөснөлхағы, һатыбал менән икәүләп, ин генә ҡыланмай хәҙер? Аҙып-туҙып, һалдаткалар менән сыуалып, төптө яманаты сығып бөттө бит. Ул ғына ла түгел, әлеге бахыр, анды-тунды белмәй хат эсенә аҡса һалып ебәргән һалдаткаларҙын, хаттары ике йыл буйы ирҙәренә барып етмәй торған бит. Ошо Хөснөлхаҡ бушта сапҡанда хатты ҡояшҡа •ҡуйып ҡарай ҙа икә», кәнбертте асып, аҡсаһын ала ла ҡуя икән. Ә йыртылған хаттарҙы, Көплө урманына алып барып, имән ҡыуышына тығып китә икән. Шунан, улының ошо мутлығы һиҙелә башлағас, Ғаббас мулла уны бушта сабыуҙан туктатҡан ти бит.

Баҙыян еңгәнең күҙҙәренән йәш кибеп, унын. урынына асыулы ут тоҡанып китте:

— Әйтәм, был арала Хөснөлхаҡ гел өй араһында бута-лып йөрөй,— тине ул, ҡаты нәфрәтләиеп.— Ҡара һин уны, сусҡаны!.. Мин дә бит, бейем, хат эсенә бер-ике рәт аҡса һалып ебәргәйнем. Әйтәм, атаһы бер ҙә алдым, тип яҙманы... Щул һорнайған сусҡаның ҡулына кергән икән!..

Ғаббас мулланың оҙон үңәсле, атылып сыға яҙып торған тупаҡ күҙле, суҡмар танаулы улы Хөснөлхаҡты Баҙыян еңгә былай ҙа йәне-тәне менән күрә алмай. Уның эшһеҙ аптырап, урамдан ары-бире үтеп йөрөгәнен тәҙрә үтә күргән һайын:

— Әй, һорнайған, атағаҙ! — тип күңеленән генә булһа ла әрләмәй ҡала алмай ине. Әле инде һалдаткаларҙың, балалар ауыҙынан өҙөп, ирҙәренә ебәргән һумлыҡтарын да урлап ашап тороуын белгәс, был күрә алмауы тағы ла ны ғыраҡ ҡабынып китте. Был хәбар хатта бер аҙға хәтле уға хат тыңларға ҡамасаулап йөҙәтте.

Ә Ҡарасәс әбей тағы бер ҡат ауыр көрһөнөп алды.

— Ни эшләйһең бит, килен. Старшина ла, урядник та үҙ ҡулдарында... Уларға хөкөм юҡ. Урлаһалар ҙа уғры түгел улар. с) минең һөт кеүек таҙа баламды уғры яһап Себер ебәрҙеләр... Йә… шулмы хаҡлыҡ? Эй аллам, ғәҙеллек, дөрөҫлөк тигән нәмә юҡ та һинең был донъявда!.. Беҙҙен. кеүек бер ҡатлыларҙы әүрәтеү өсөн генә уйлап сығарылған буш һүҙҙрҙер ахыры былар...

Был һейләшеүҙән һуң, анһыҙ ҙа бик үк яҡты булмаған өй эсе тағы ла көңгөртләнеп, ҡараңғыланып киткән һымаҡ булды. Иштуған төрлө уй менән тарҡалған иғтибарҙы йыйып алырға тырышып, был күңелһеҙлектә аҙ булһа ла тарҡатыу теләге менән хаттын ғаилә, бала, өй хәлдәренә ҡағылған урындарын ҡыҫҡырып-ҡыҫҡырып ҡабат уҡырға кереште. Тимербай хатының был өлөшөн үҙе ҡайтҡас, матур, рәхәт, тыныс итеп йәшәү тураһында, бәхетле көндәрҙең әле алда буласағы хаҡында өмөтлө, ышаныслы хыялға бирелеп яҙғайны. Хаттың аҙағын:

— Кем белә, бәлки, беҙ ҙә бер саҡ әҙәм төҫлө йәшәрбеҙ эле... Түҙәйек, көтәйек шул көндө... Балаларҙы ла иҫән-һау Үҫтереп, шул көндәргә алып барып еткерәйек...— тип бөтөр-^әйне. Был һүҙҙәр Иштуғандын, күңелен дә билдәһеҙ өмөт менан ҡанатландырып ебәргән һьшаҡ булды. Ләкин Баҙыян еңгә Тимербайҙы бының өсөн сабый тип атаны.

— Бигерәк сабый холоҡло был беҙҙең Тимербай... Бөтә донъя аҫты-өҫтөнә килеп, емерелеп ятҡанда, үҙең каторгала серегәндә, ниндәйҙер яҡшы тормош килеренә ышанып өсөн йә сабый, йә диуана ғына булырға кәрәк шул,— тине.

Ҙур ҡайғы, ауыр тормош менән уҙған был һуңғы өс йыл Баҙыян еңгәне бөтөнләй икенсе кеше яһағайны инде. Ул хәҙер ҡайғынан баҫылып илап-һыҡтап ултырыусы йәш килен түгел. Ә урыны менән бейеме шикелле үҙ уйын, үҙ ҡарашын ҡыйыу әйтергә лә теленән килгән, өй эше генә түгел, ҡыр эше лә ҡулында янып торған баҙнатлы, мөхәббәтенә тоғро, өлгөрөп еткән ҡатын, яҡшы әсә ине. Тик ул Тимербай менән Ҡарасәс әбей шикелле тормошто изге хыял буяуҙарына буяп, булмаҫ өмөттәр, табылмаҫ бәхеттәр менән семәрләп йәшәргә теләмәй. Уны нисек бар шул хәлдә ҡабул итеүҙе артыҡ күрә. Шуға ла ул хәҙер күп ваҡыт бейемен дә, Тимербайҙы ла сабый тип атай.

— Эйе, йә сабый, йә диуана...— тип ҡабатлай ул, ауыр көрһөнөп.— Ә ундайҙарға йәшәү һәр саҡ ауыр була...

Ә Ҡарасәс әбей аҡыллы зәңгәр күҙҙәрен берсә килененә, берсә ейәнсәрҙәренә төбәп оҙаҡ ҡына уйланып ултырғас:

— Ҡуй, килен, улай тимә,— тип ҡаты ғына иҫкәртеп ҡуйҙы.— Өмөтһеҙ нисек йәшәмәк кәрәк? Кешемен тигән кеше, нисек кенә ауыр булмаһын, һәр саҡ яҡшыны өмөт итергә, яҡшыға ынтылырға тейеш. Теләп, ынтылып та барып сыҡмай икән, уныһы икенсе эш... Ә кешене теләүҙән дә, өмөттән дә мәхрүм итергә ярамай. Был ҡанһыҙлыҡ була...

— Улың да шул үҙеңә оҡшаған инде,— тип асыуһыҙ ғына ҡарыулашты Баҙыян еңгә...— Йә сабый, йә диуана!..

Хатты укып бөткәс, Иштуған, Баҙыян енгәнең әҙер сәйен дә эсмәй, ашығып, урамға сыҡты. Уға тиҙерәк ҡайтып, малтыуар ҡарап, кәртә-ҡура эштәрен бөтөрергә лә уйынға килергә кәрәк ине. Тик тағы тура ғына өйгә ҡайта алманы. Уның иҫенә күптән бирле апаһы Бибештен, хәлен белмәгәнлеге килеп төштө.

«Иртәгә, моғайын, утынға йәки бесәнгә китергә тура килер. Өйҙән бер ысҡынғанда йәһәт кенә инеп сығайым әле»,— тип уйланы. Йүгерә-атлай үрге осҡа китеп тә барҙы.

Ләкин ул барьш ингәндә, өйҙә Бибеш тә, Хисбулла ла юҡ. Таиба әбей яңғыҙы ғына түрҙә, мендәр еҫтөндә йөн тетеп ултыра. Иштуғанды ул:

— Эй, ҡоҙа, бик һәйбәт килеп индең бит әле,— тип ҡыуанып ҡаршыланы.— Бик кәрәк инен, әле. Закйр ҡоҙаҡдан хат бар. Шуны укыта алмай зар-интизар булып ултыра инем әле,— тип һөйләнә-һейләнә урынынан тороп Иштуғанға күптән асып укылған бер хат тотторҙо. Иштуған Таиба әбейҙең был хатты Хисбуллаһынан быҒаса ла бер нисә тапҡыр укыткан булыуын, тик, әлеге үҙенен тынғыһыҙ ғәҙәте буйынса, тағы бер ҡат Иштуғандан да укытып ишеткеһе килеүен яҡшы аңлаһа ла, оло кешенең һүҙен йыҡмай, тағы хат укырға ултырҙы.

— Беҙҙең Хисбулла әллә нисек итеп ҡөрьәнсәләп, көйләп укый ҙа, мин бер нәмә лә аңламай ҡалам. һин укыһаң, Закирым менән күҙмә-күҙ килеп һөйләшкән кеүек булам,— тип кинәнеп тыңланы Таиба әбей. Ләкин Иштуғанға Закирҙьщ хаттары оҡшамай ине. Был хаты ла оҡшаманы. Ул һаман элеккесә:

> Галиция ерҙәрен дә һуғыш менән үттек беҙ.
> Дошман ғәскәрҙәрен тапап, Карпатҡа ла еттек беҙ.

Йәки:

> Рәсәй ере икһеҙ-сикһеҙ, һалдаты батыр, етеҙ.
> Батыр һалдаты булмаған илдәр, ҡалалар ерһеҙ,—

кеүек маҡтаныулы, һуғыш менән мауығыулы йырҙар менән тултырып яҙғайны.

Ләкин һуғыштын. башындараҡ күпселек һалдаттарға хас булған бындай йырҙарҙы хәҙер һалдат та, халыҡ та яратмай ине инде. һуғышты һуҙыу менән ҡыҙыҡһынған байҙар, офицерҙар йәки уларҙын, алдауынан ҡотолоп етмәгән һалдаттарҙың йыры ине был хәҙер. Иштуған да Хаммат яҙған кеүек байҙар, батшаларҙы әрләгән йырҙарҙы ярата ине. Ә Закир, күптән эҙләгән тәтәйен тапҡан бала шикелле, һаман шул һуғыш менән мауығып йөрөй, күрәһең. Шуға күрә, уның хатын укығанда, Таиба әбей ҙә, хафаланып:

— Ай, дыуамал, башын ғына һалыр был бала, башын һалыр. Алдын-артын ҡарамай туп аҫтына йәки бүле араһына инер ҙә китер,— тип баш сайҡап ултырҙы. Унан, Хисбуллаһынан яҙҙырыуға ғына ҡәнәғәтләнмәй, Иштуғандан да:

— Берүк, улым, үҙеңде һаҡлай күр. Башыңды дошман бүлеһе аҫтына тыҡма. Берүк, дыуамалланма,— тип һәр һөйләмгә бер нисә «берүк»те ҡушып, ҡат-ҡат тукып хат яҙҙырҙы.

«Бына инде... һуғышта үҙеңде «берүк» һаҡлап буламы икән? Бигерәк ҡыҙыҡ кешеләр был ©лкәндәр...»— тип ғәжәпһенеп уйлай-уйлай яҙҙы Иштуған. Шулай ҙа Таиба әбей нисә тапҡыр «берүк»те әйтһә, шунынса ҡушып, оҙоноҙон хат яҙып бирҙе.

Ә Бибеш һаман ҡайтманы. Ул, мунса яғып, кәртә артында Үле Эйек буйында йөрөй ине. Иштуған, йыуаш Хисбулланан бигерәк ҡаты ҡуллы бейеменән иҙелеп, ауыр

көн күргән апаһын йәлләп тә, уны осрата алмауына үкенеп тә, бошоноп та тышҡа сыкты. Бибеш күренмәсме тип, тирәяҡҡа ҡаранып, ишек төбөндә бер аҙ көтөп торҙо. Ләкин Бибеш һаман күренмәне, ә Иштуғанға ашығырға кәрәк ине. Сөнки был ваҡытта ҡышҡы ҡыҫҡа көн уҙып, ҡырыҫ ҡояш күптән тау артьжа, үҙенен, йылы ояһына төшөп йоҡларға яткан, тирә-яҡты эңер ҡараңғылығы ҡаплаған ине.

Лампа алыуға Сәлимәнен, өйө үҫмер егеттәр менән тулды. Иштуған ғына юҡ ине.

— Үгәй әсәһенән ысҡына алмайҙыр,— тиие Әхәт.— Йә, ярар, давай уйынды башлайбыҙ, егеттәр!..

— Башлайбыҙ!..

Гармунсы — әле мыйыҡ сығырға ла өлгөрмәгән үҫмер егет — ауыл көйөн һыҙҙырып ебәрҙе. Башҡа егеттәр гармунға ҡушылды. Йырҙы иң элек бая Хамматтын, хатын уҡығанда отоп алған йыр менән яңғыратып Әхәт башланы:

Германдарҙың туптары,
Онтап ташлай таштарҙы.
Батша, байҙар йәшәһеи тии,
Юғалтабыҙ баштарҙы...

Уға икенселәр ҡушылды:

Ҡом бураны, ҡом бураны
Ырымбурҙын, урамы.
Әлеге беҙҙең бәхетһеҙ баш
Тағы ла күрә нужаны.

Йырҙ^ан һуң бейеше китте. Егеттәр ялындырмай-инәлтмәй, бер-бер артлы тупылдап төшөп кенә торҙо. Әхәт бөтәһенән дә уҙғарҙы.

Ултырып та, ятып та, түбәгә хәтле һикереи тә, &й эсендә өйөрмә уйнатып әйләнеп тә бейене ул. һуғышҡа киткән атаһы Әхмәттән ҡалған иҫке бишмәттең ендәре, салғыйҙары оҙон булыу ҙа, билгә билбау урынына быуылған йүкә бау ҙа увын, бейеүекең шәплегенә зарар итә алманы. Бөтәһе һоҡланып ҡаранылар. Әхәт элек, егеттәр араһына үҙ тиңдәштәре инә алмаған саҡта уҡ, ошо оҫта бейеүе менән уйындан ҡалмай йөрөүсе малайҙарҙың береһе була торғайны. Әле инде ул бында тиңһеҙ.

Әхәт, бтә донъяны онотоп, гармунсыны арытып йыҡмайынса туктамаҫка булып, сәмләнеп бейене. Гармунсы



егет, йәш булһа ла, тиҙ генә еңелергә теләмәне. Бешеп-тирләп һаман уйнауҙа булды. Ҡарап ултырыусылар ҙа ярышҡа -кушылып, дәртләнеп, йәнләнеп китте. Берәүҙәр бейеүсене, икенселәре гармунсыны •кеүәтләп, алмаш-тилмәш таҡмаҡ әйткеләп ултырҙылар.

Ике тәгәс, бер тәгәс,
Атай, әпир бер кәләш.
һинен, киленең булыр ҙа
Минең күңелем булыр.
һа!.. Баҫ!..
Уйна, өҙҙәр гармуныя.ды,
«Пировский» көйөнә.
һинен. уйнағанды тыңлап,
Ҡыҙҙар күнеле һөйөнә.
Әй-ҙә!.. Әйт шуны!..

Ҡапыл таҡмаҡ та, гармун да туктап ҡалды. Сөнкн кемдер бик ҡаты итеп ишек шаҡыны. Әхәт атылып ишеккә ташланды.

— Иштуған килде, егеттәр!..

Ләкин ишектән Иштуған түгел, ә түңәрәк ҡабаҡ ҙурлыҡ аҡ сәллә күренде. Сәллә аҫтында ҡыраУытып ҡыу ҡылғанға әйләнгән оҙон кәзә һаҡал һәлпелдәп тора ине. Әхәт ҡото осоп артҡа сигенде. Ғаббас мулла ҡорһағын кәпәйтеп өйгә инде,

— Ах, бәдбәхеттәр! һеҙ шулай бында ен туйы ҡороп ятаһығыҙмы ни әле?!

Йәштәр ни әйтергә, ни эшләргә белмәй мөйөшкә йәшенде. Ғаббас мулла, ҡаушап ҡалған йәштәрҙе тағы ла нығыраҡ өркөтөргә тырышып, сәрелдек тауыш менән:

— Тукта, мин һеҙгә уйынды күрһәтәйем әле, хәсистәр! Шайтан туйығыҙҙы туҙҙырайым әле! — тип екеренә-екеренә, йәштәрҙе тукмарға әҙерләнеп, сәкмән ендәрен төрә башланы. Ошо ваҡыт тағы ишек асылды. Бынаһында инде унан ысынлап та Иштуған күренде. Ул, көндеҙ урам буйында оҙаҡ йөрөгән есөн Сәрбиямалдын. ҡаты асыуына эләгеп, ошоғаса өйҙән ысҡына алмай торғайны.

— Әһә, һин дә килеп еттеңме ни әле, хәсис? — тип ҡаршы алды уны мулла. Иштуған бер ҙә аптырамай ғына:

— Эйе лә баһа, олатай,— тип яуап бирҙе.— Икебеҙ ҙә бнк ваҡытлы килгәнбеҙ икән дә баһа! Әйҙә, түрҙән уҙайыге, олатай.

— Телеңә һалышма, хәсис! Беләм мин һине? Бар, миңә башта сыбыҡ алып инеп бир. Унан беҙ һинең менән һөйләшербеҙ,— тип бойорҙо мулла. Иштуған аҙ ғына уйлап, елкәһен һыпыра биреп торҙо ла, баш эймәкле тауыш менән:

— Ә, сыбыҡмы? Була ул. Хәҙер әпкиләбеҙ уны, мулла олатай,— тип тышҡа ташланды.

«Шылды, йәтеш ыҫҡынды»,— тип уйлап алды Сәлимә. Ул ҡыйыуланып уйын ҡарарға килгән бер-ике һалдатка менән мейес артында ғына йәшенеп ултыра ине. Мөйөштә иптәштәре араһында боҫоп торған Әхәттең асыуҙан тыны быуылды:

«Бына һиңә иптәш!.. Бына һиңә дуҫ!..»

— Йылдам йөрө! — тип ҡысҡырып ҡалды мулла. Үҙе, берәүҙе лә сығармаҫ өсөн, ҡаҙан ҡорһағын кәпәйтеп, ишеккә арҡыры торҙо. Иштуған шунда уҡ кире боролоп инде. Уның ҡулында бармаҡ буйы ғына тал сыбыҡ ине.

— Бына, олатай, сыбыҡ булды! — тине ул ярамһаҡлы тауыш менән.— Шыйылдап ҡына торасаҡ. Әйҙә, һыҙыр, кәтрәктәрен бир шуларҙың, олатай!..

Әхәт:

«Эй һатлыҡ!.. һатлыҡ!»—тип көскә ҡысҡырып ебәрмәй түҙеп торҙо. Иштуғандын, ниндәй сыбыҡ алып ингәнен күрмәгән Сәлимә лә хәҙер:

«Шулай уҡ, ысынлап уҡ тиндәштәрен туҡматырға йөрөйме ни был? — тип аптыраны.— Кит, Иштуған да былай булғас, кемгә ышанаһын. да, кемгә таянаһын,?!»

һөрөмләнеп бөткән аҫылмалы бишле лампа яҡтыһында уларға сыбыҡтың үҙе күренмәй, ә исеме генә ишетелә ине бит.

Мулла асыуына сыҙаша алмай сыбыҡты Иштуғандын, битенә ырғытты.

— Йүнлерәген алып инергә булмаймы ни, ахмаҡ!.. Был нимәгә ярай?.. Йүнле сыбыҡ алып ин!..

Иштуған баяғыса ялағай тауыш менән:

— Ә, һиңә күҫәк кәрәкме ни, олатай? — тип һораны.— Бая уҡ шулай тиҙәр уны. Сыбыҡ тигәс ни, мин сыбыҡ ҡына алып индем шул.

— Эйе, күҫәк кәрәк. Бар, тиҙёрәк күҫәк алып ин,— тине мулла, түҙемдән сығып. Үҙе, эстән кинәнеп:

«Ярай, бер ахмағы тура килде бит әле!..» — тип уйлап ҡуйҙы.

— Хәҙер алып инәм, олатай. Бына тигән күҫәк алып инәм,— тип Иштуған тағы тышҡа йүгерҙе.

Сәлимә менән Әхәттең мулланан бигерәк Иштуғанға булған асыуының да, аптырауының да сиге булманы. Улар хәҙер уйын буласағын муллаға белдереүсенең дә Иштуған булыуына шикләнмәй башланылар.

«Бына бит ул, һатлыҡ артынан һатлыҡ тыуып ҡына тора!.. Ышаныслы кешеләр ер тишегенә инеп бөттөләр, күрәһең?..»

Быныһында Иштуған оҙаҡ ҡына юғалып торҙо. Мулла ла, йәштәр ҙә түҙемдән тамам сығып бөттө генә тигәндә, ишек тағы шар асылып китте. Тупһала сана тәртәһен ҡайырып



алып күтәргән Иштуған күренде. Быныһында ул өйгә инмәне. Ә тәртәне генә эскә һондо. Оҙон тәртәнең бер осо бәләкәс өйҙөн урындыҡ йөҙлөгөнә барып төртөлдө, икенсе осо менән тупһанан тышҡа сығып ятты. Шул арҡала ишек ябылмай, шар асыҡ көйө тороп ҡалды. Иштуған баяғыса, ярамһаҡлы тауыш менән:

— Бына, олатай, бик елле күҫәк алып индем. Әйҙә, кәрәктәрен бир шуларҙың! — тине.

Асыуҙан ҡоторонған мулла, күҙҙәре түбәһенә сығып:

— Ах, һин, хәсис, мөртәт!.. Мине шулай мыҫҡыл итмәксе булаһыңмы ни әле! — тип, әсе сыйылдап, Иштуған артынан ташланды. Ләкин Иштуған бик ваҡытлы янтайып, төн ҡараңғылығына инеп юғалды. Өйҙәгеләр уның:

— Йә, ни ҡарап тораһығыҙ! Юл асыҡ бит, егеттәр! — тигән тауышын ғына ишеттеләр. Ошо ваҡытта ғына уларға Иштуғандын, үҙҙәрен был күңелһеҙ хәлдән ҡотҡарыу өсөн шулай төрлө хәйләләр ҡороп, мулланы албырғатып йөрөүе аңлашылды. һәм егеттәр, уның мутлығына кинәнеп, көлөшә-ҡысҡырыша, мулланың уларҙы тоторға тырышып йәйелгән ҡоласы аҫтынан берәм-берәм тышҡа атылып сығып бөттөләр. Өйҙә, мейес артында, ҡурҡыуҙан тубыҡ быуындары ҡалтырап, ни эшләргә белмәй торған һалдаткалар ҙа урындыҡка ырғытылған тальян гармун ғына ятып ҡалды. Уңышһыҙлыктан шашҡан мулла, айбарланып, гармунды тырнап алды.

— һай, бәдбәхет!.. Хәсис!.. Мөртәт! һин бында нимә ҡылып ятаһың?

— То-о-т! Ту-у-тут!..— тип яуап бирҙе уға гармун. Мулла унын. һайын ҡотороноп, гармунды өҙгөләргә тотондо. Гармун да, был тупаҫлыҡҡа нәфрәтләнеп:

— Тот-тот-то-о-о-т!.. Ту-ту-ту! Өф-өф-өф!..— тип мулланы һаман үсекләп ятты. Мулла, тамам шашып, гармунды аяҡ аҫтйна һалып тапай башлағас, Сәлимә түҙмәне. Асыуҙан да, ғәрләнеүҙән дә бөтә ҡурҡыуын онотоп, мейес артынан тәртешкә күтәреп килеп сыҡты ла мулланың сәлләһен осора һуғып ебәрҙе.

— Етәр һиңә, ҡартлас! Улай бик шәп булғас, бар ана ярман менән һуғыш!..

— һай, бәдбәхет, хәсис!— тип мығырланып, ҡаушап ҡалды мулла. Сөнки ул бында, ауылда, дин йолаларын йүнләп белмәгән һәм бик үк белергә лә тырышмаған наҙан халыҡ араһында, үҙен хоҡуғы сикләнмәгән алла илсеһе итеп иҫәпләгәнлектән, үҙенә һөжүм итеү түгел, ҡаршы бер һүҙ әйтеүгә лә өйрәнмәгәйне. Ул Сәлимәнең был ҡырағай ғәҙәтенә йәберһенергә йәки уға мен, төрлө йәһәннәм уты менән янарға ла өлгөрмәне, Сәлимә уның арҡаһына ла тәртешкә

менән бер-икене биргеләп, ишектән тәрткөләп сығарып ебәрҙе.

— Хәеис, бәдбәхет! — тип мығырланды мулла.— Сәлләмде бир, дошман!..

Сәлимә уның иҙәндә аунап яткан сәлләһен, тәртешкә башына эләктереп, тышҡа ырғытты.

— Мә. Тағы бер килеп, шулай бимазалап ҡара!.. Ыштанынды һалдырып, башыңа сәллә итеп урап ебәрермен!..

Лапаç ҡараңғылығына йәшенеп: «Мулла Сәлимә енгәгә бэйләнә башлаһа, нисек ярҙамға барырға?» — тип кәңәшеп торған йәштәр, уның мулла менән эште йәтеш бөтөрөүен күреп, кинәнеп көлөп ебәрҙеләр.

— һай, хәсис!.. Мөртәт! — тип сәрелдәне мулла.— Мосолмандар түгел, йәьжүж-мәьжүждәр бит һеҙ!.. Кафырҙар!.. Зобаниҙар!..

Йәштәр быға ла берҙәм көлөү менән яуап бирҙеләр. Мулла, йәштәр яғына өмөтһөҙ ҡул һелтәп, ҡапҡаға табан йүгерҙе.

Ғаббас мулланың һуғыш осоронда үҫеп еткән йәштәр менән тәү тапкыр яҡындан осрашыуы шулай бөттө.

## X

Байгилде ағайҙың Сәрбиямалға байлыҡ артынан ҡыуыу, ҡомһоҙлоҡ кеүек ғәҙәттәрҙе ташларға саҡырып биргән кәңәштәре үҙе китеү менән көл булып күккә осто.

«Эй, шуны, байлыҡтын. ҡәҙерен беләме шул зимагур!» — тигт кенә ҡуйҙы Сәрбиямал. Байгилде менән уҙғарған һуң ғы кистә, нисектер, күңеле нескәреп китеп, үҙенең дә был фе кергә ҡушылыуы, хатта иренә үҙгәрергә һүҙ биреүе хаҡын да хәҙер иҫкә алырға ла теләмәне. Донъяға, кешеләргә ҡа раш та, хатта Әхмәтша менән бәйләнеш тә шул көйө&ҡалды. Байгилде ағай киткәс айырата иркенләп алған Әхмәтша ҡараҡ Сәрбиямалдың кире яҡтарын тағы ла шаштырырға ғына ярҙам итте. Сәрбиямал хәҙер ауылдын, байҙары менән ярышып Ырымбурға йөрөй. Бүтән ваҡытта, күрше ауылға ғына барһа ла, Иштуғанды күсергә ултыртып йөрөргә яраткан Сәрбиямал ҡалаға, Әхмәтшаһына эйәреп, яңғыҙы сығып китә. Күрәһең, табышын Иштуғанға белдерергә теләмәй.

һуғыш осоронда аҙыҡ-түлек хаҡтары ҡыйбатланып киткән ҡалаға ит, май, ашлыҡ тейәп йыш йөрөү, әлбиттә, Сәрбиямалдың хужалығына йоғонто яһамай ҡалманы. Ул ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бер-ике ат, ике-өс һыйыр, тиҫтәләгән кәзә-һарыҡ хужаһы булып алды. Үҙе лә һимертелгән өйрәк кеүек ялтырап, тайпан-тойпаң баҫып йөрөй башланы. Урыны килгәндә, бөтөнләй Бзтыйма тутай булып ҡыланып, тамаҡ төбө менән генә һөйләшергә тырышты.

— Эһем, эйе, беҙ, ни, яңы байҙар... шулай инде... штобы, булғас булһын тибеҙ...

Ләкин Сәрбиямалдан Батыйма тутайға хәтле ер менән күк араһындай аралыҡ ята. Уның тәҙрәләренә аялай боҙ туңған ҡотһоҙ өйө лә, тапкан табышы ла ауылдың урта байы менән тиңләшергә лә етерлек түгел. Быны Сәрбиямал үҙе лә һиҙә. Көсәнеп тырышып-тырмашып та байый алмауҙың үсен балаларға төшөрөргә, бөтә асыуын уларҙан алырға тырыша ине. Бөгөн иртәнсәк тә ул, шул асыуҙан ҡыскырынып-баҡырынып, өйҙә бер аҙ йөрөнө лә, Емештең алдына бер ҡосаҡ һарыҡ йөнө ырғытып:

— Штобы бөгөн тетеп бөтөр. Иртәгә кейеҙ баҫтырам,— тип сығып китте.

Кәзә мәзиндең ҡатыны Бибисара абыстай уны сәйгә саҡырғайны.

Тышта ғинуар бураны ҡоторона. һалҡын, ҡотһоҙ өйҙә Емеш яңғыҙы ғына ултыра. Йәнеш тышта мал ҡарай, өйгә һыу ташый. Иштуған урамдан утындан ҡайтмаған. Ул һәр көн тип әйтерлек шулай ситтә йөрөй. Тандан тора ла утынға, бесәнгә йәки һаламға китә. Әгәр утын-бесән кәрәкмәһә, Сәрбиямал уны:

— Бар, тал-тирәк ботап, ялан кәртәгә ташла. Штобы тиҙ йөрө. Кәзә-һарыҡ тал-сыбыҡ кимерһә, бесәнгә бәрәкәт .була,— тип туғайға ебәрә. Күҙ асҡыһыҙ буранда ла, сатлама һыуыкта ла, һөйәк-һаяғына үтерлек әсе елдә лә, Иштуған шулай йөрөй ҙә йөрей. Өшөп-туңып бөтә. Шулай ҙа [Емешкә ағаһы үҙенән бәхетлерәк күренә. Ирекtә йөрөй. Көнөн-төнөн үгәй әсәйҙең асыулы ҡарашы аҫтында ултырмай.

«Нисек кенә булһа ла малай кешегә лә, ир кешегә лә еңелерәк шул...— тип уйлай Емеш.— Теләһә, ат егә лә урманға китә, йәки, атайым шикелле, һуғышҡа китә лә бара...»

Емеш бәләкәс яҡтын. ҡараңғы мөйөшөндә оҙаҡ ҡына йөн тетеп ултырҙы. Ләкин йөн аҙ ғына ла кәмемәне. һаман баяғыса шундай күп булып, Емештән аша ҡалҡып, күбә кеүек ҡабарып ята бирҙе. Тотош сайырға ҡатып ойошкан был йөндәрҙе тартып-һуҙып тетә-тетә, Емештең кескәй, нәҙек бармаҡтары талып, һыҙлап бетте. Шунан ул, әҙ генә булһа ла ял итеп, һелкенгеләп йылынып алыу теләге менән ҙур яҡка сығып китте. Унда ла һалҡын, ҡараңғы ине. Емеш урамға ҡараған бер тәҙрәнән, түбәсәй менән ҡырып, йоҙроҡ ҙурлыҡ ҡар йомарлап алып тасҡа ташланы. Унан ҡалған иылтыр боҙ ҡатлауын тыны менән иретеп, күҙҙәй тишек япаны. Шул тишек үтә урамды күҙәтергә тотондо. Өҫ-

башына булмағанлыҡтан, унының көҙҙән бирле урамға сыҡҡаны юҡ ине.

Емештең күҙе иң элек Шәүрәләрҙең өйөнә төштө. Был кескәй өйҙө бөтөнләй тип әйтерлек ҡар күмеп киткән. Мөрйәһенән төтөн дә сыҡмай. Ҡапҡаһынан ингән-сыҡҡан кеше лә күренмәй. Арҡыс-торҡос ҡағып, ике өс һайғауҙан ғына эшләнгән арата ҡапҡа бөтөнләй ҡар аҫтында ҡалып, унының аша тар ғына берләм юл һалынған. Күрәһең, уларға ҡыш буйынса бер генә тапҡыр ҙа атлы сана инмәгән. Йәйәүле лә бик һирәк йөрөгән. Кем йөрөһөн һуң унда?

Өйҙәрендә бәләкәс Хәсән менән Шәүрә генә ултыра. Шәүрәнең ата-әсәһе лә, кесе ағаһы Әхәт тә, Иштуған кеүек үк, бер ҙә өйҙә тора алмай. Өлкән ағаһы Әхмәт һуғыштың башынан бирле фронтта йөрөй. Шәүрә лә, Емеш шикелле үк, ялан аяҡ, күлдәксән булғас, ҡышты зарығып ҡына өйҙә ултырып үткәрә. Уға ла ҡыш икһеҙ-сикһеҙ оҙон да, бик һөмһөҙ ҡырыҫ та тойола инде. Шулай ҙа ул Емештән бәхетлерәк, әлбиттә. Унының атаһы ғына түгел, әсәһе лә бар. Шунының өҫтәүенә ул Емеш кеүек «килмешәк» тә түгел. Унының үҙ ауылы, үҙ араһы бар. Үҙҙәре ярлы ғына булһалар ҙа, бынауы иң бай, иң ҙур ҡара ҡорһаҡтар араһынан бит әле улар...

Емеш ҡарашын ары күсерә:

Собхан старшиналарҙың һырлап-селтәрләп, зәңгәргә буяп эшләнгән өр-яңы ҡапҡаларының алды, урам уртаһына хәтле, тап-таҡыр итеп көрәп ҡуйылған. Бында мал-тыуарҙың, саналы-йәйәүле кешеләрҙең бер өҙлөкһөҙ йөрөп торғанын күрһәтеп, киң юл ҡарайып ята. Ҡапҡаның ике яғындағы йорттарҙан да, мал өйҙәренән аҡһыл зәңгәр күккә, бағана кеүек туп-тура, һоро төтөн һуҙылған.

«Ит бешерәләрҙер... Ҡунаҡ саҡыраларҙыр... Алтынбикә, маҡтансыҡ, ауыҙын йәйеп, иркәләнеп ултыралыр. Йәй көнгө та1иҡурсағын уйнаталыр... Фу, бәпес!- Ҡара ҡорһаҡ!..» — тип екһенеп уйлана Емеш. Был уйға бәйләнеп, унын, башында:

«Ни өсөн Собхан старшина, Ғаббас мулла, Шымбай ҡарттарҙы ҡара ҡорһаҡтар араһы тип йөрөтәләр икән?» — тигән һорау тыуа. «Бай булғанғамы, уҫал булғанғамы, әллә күп ашағанғамы?.. Улай тиһәң, Шәүрәкәйҙәр ҙә шул ара-нан бит әле... Ә бына Бибеш апайҙар, Ҡарасәс инәйҙәр Хаммат ағайҙар кейеҙ ҡорһаҡтар араһынан. Уларҙың араһы ни өсөн былай аталыуын хатта Емеш тә белә. Уға быны Ҡарасәс әбей үҙе һөйләне. Борон бер саҡ, старшина һайлаған көндө, ярлы, арыҡ ҡына бер ҡарт сходка сәкмән аҫтынан эсенә ҙур кейеҙ урап барған, ти. Кешеләр унан көлөп:

— Олатай, ниңә былай эшләнең? — тип һорағас:

— Старшина итеп гел ҡаҙан ҡорһаҡлы, үгеҙ елкәле кешене һайлайҙар бит. Шуға, мине лә һайламаҫтармы икән тип, ҡорһаҡты ҙурайтып килгәйнем,— тип әйткән имеш, ти. Хәҙер инде бына ошо ҡарттың ырыуы кейеҙ ҡорһаҡтар араһы булып ҡалған, ти. Был исем Ҡарасәс әбейгә бер ҙә оҡшамай.

— Борон ата-бабалар үҙ ырыуҙарына айыу, бүре, ҡарсыға, бөркөт кеүек исемдәр ҡуша торған булғандар. Шуға күрә ырыуҙар ул саҡта көслө лә, олпатлы ла, ҡеүәтле лә булған. Хәҙер ни, ҡара ҡорһаҡ та кейеҙ ҡорһаҡ, таҙ ҙа маҙ. Тапҡандар исем! Шулай булғас, ырыуҙарҙың ни рәте ҡалһын һуң? — тип һуҡрана ул.

Ә бына Емеш ошо кейеҙ ҡорһаҡтар араһынан ғына булырға ла бик теләр ине лә бит, юҡ. Булмай. Улар килмешәктәр. Ауылы ла, араһы ла, әсәһе лә юҡ уларҙың...»

Был уйҙан һуң Емеш, бөтөнләй өмөтһөҙләнеп, урамды күҙәтеүҙән туҡтаны. Өшөп-йомарланып ултырҙы. Унының күңелен тағы ла ҡараңғыраҡ, һағышлыраҡ уйҙар солғап алды.

«Әсәһе лә юҡ...— тип ҡабатлап уйланы ул.— Ниңә улай иртә үлде икән минен. әсәйем? Бөтә ҡыҙҙарҙын. әсәһе бар. Бер минең әсәйем юҡ. Минен, дә «әсәй» тип әйткем, «балам» «ҡыҙым» тигән һүҙҙе ишеткем килә лә баһа!.. Әсәй!..— тип ҡысҡырып әйтә алһам ине мин дә... Ул, исмаһам, бер генә тапҡыр булһа ла, «балам!» тип минең башымдан һыйпаһа ине... Эйе, ниндәй бәхетле булыр инем мин ул саҡта!.. Хатта, хатта! Үлһәм дә үкенмәҫ инем...»

Емештен, был һағышлы уйын бүлеп, ҡапыл ҡырҡыу тауыш яңғырап китте.

— Атаҡ-атаҡ, сиған балаһы! Нимә эшләп йөн тетмәй, ҡул ҡаушырып ултыраһың, әрәмтамаҡ!..

Емеш һиҫкәнеп китте. һикереп тороп бәләкәс яҡҡа, үҙенең эш мөйөшөнә йүгерҙе. Ярһыған Сәрбиямалдын, тос, ҙур йоҙроғо унының арҡа буйына, башына бер нисә тапҡыр дөпөлдәп һуғылып ҡалды.

— Ҡара һин уны, сәнселгере, мин сыҡҡас та нисек рәхәтләнеп йәйрәп ултырып алған бит, ә? Бына мин һиңә күрһәтермен нисек тик ултырыуҙы, әрәмтамаҡ!

Сәрбиямал, бәләкәс яҡҡа сығып, мөйөшкә ынтылырға ҡулы етмәгәс, уклау алып Емештең башына тағы бер-ике төшөрҙө лә:

— Ҡара, әгәр бөгөн тетеп бөтөрмәһәң, йәневде алырмын! — тип, ҡырҡ ҡатмарлы ҡыҙыл сатин күлдәгенең кин, итәктәрен услап күтәреп, һелкетә баҫып, ҙур яҡҡа сығып китте. Емеш бар көскә тырышып йөн тетергә керешге. Тәҙрә боҙона ышҡылып йыуылған бармаҡ биттәре шунда уҡ ҡайтанан ҡара сайыр менән ҡапланды.

Оҙаҡламай, үҙенән ҙур күнәктәр күтәреп, Йәнеш, нисән-



•6 Заказ 733

селәр тапҡыр, һыуҙан ҡайтып килде. Унын, көйәнтәһе һығьь лып, иҙәнгә тейә яҙып торған күнәктәренең төбөнә, ҡылыс: тарына, яланғас үксәләре буҙарып күренгән тишек итегенең ҡыйыш үксәләренә суҡмарланып боҙ ҡаткан. Алама яулытс аҫтынан сығып торған сәстәре ҡырауыткан, бейәләйһеҙ ялан-ғас ҡулдары күгәреп-кыҙарып туцып бөткән.

— Атаҡ-атаҡ!.. Эй, һәпрә, ни эшләп шул хәтле оҙаҡ йө-рөнөң? Моғайын, һырғалаҡ эйеп йөрөгәнһеңдер әле, ҡәһәр һуҡҡыры! — тип уны ла Сәрбиямал әсе ҡысҡырып ҡаршы алды. Өйрәнгән ғәҙәте буйынса, ауыр, тос йоҙроҡтарын Йә-нештең башына алып барып та төшөрҙө. Йәнеш әллә итеге тайып, әллә йоҙроҡтан янтаям тип, ҡапыл сайҡалып китте лә ике аяғы ике яҡҡа ҡайырылып ауып төштө.

— Эй, әҙәм актығы, эшкә ашмаған! Әрәмтамаҡ! — тип теҙҙе Сәрбиямал, яр һалып. Унан Йәнештең боҙланып тунған сәстәренән тартып торғоҙоп, күнәктәрен тотторҙо ла арҡа-һына тағы бер төртөп, тышҡа сығарып ебәрҙе.

— Бар, ҡайтанан бар. Йәһәт ҡайт, йәнеңде алырмын!..

Сәрбиямал Байгилде ағайға, балаларҙы ташламаҫҡа тип вәғәҙә биреп ҡалһа ла, уларға ҡарата булған ҡатылығын көндән-көн арттыра ғына бара ине.

Йәнеш үҙәк өҙгөс тауыш менән сеңләп илай-илай тағы һыуға китте. Емешкә унын, тотош һыуланған күлдәк итәктә-рененң тышҡа сығыу менән туңып, яланғас арыҡ боттарына ҡыптырлап бәрелә-һуғыла барғаны оҙаҡҡа хәтле ишетелеп торған кеүек булды.

«Әгәр минең аяғыма берәй нәмә булһа, һыуҙы икәүләп ташыр инек, исмаһам»,— тип апаһын йәлләп, әсенеп уйлан-ды ул. Үҙе, күҙҙәренә килеп тулған йәштәрҙе көсләп тыйып, һаман йөн тетеүендә булды.

— һырғалаҡ эйеп йөрегәндер, йәне сыҡҡыры!.. Итек та-банын туҙҙырып, һырғалаҡ эйгәндер!— тип тиргәнде Сәр-биямал.— Бына шул итегең бөтһә, аяғыңдың тиреһен кейеп йөрөрһен. әле, һәпрә!..

Эйектең күгәреп, шып-шыма булып тунған боҙо өҫтендә итек менән шыуып һырғалаҡ эйеп уйнау бында ҡыҙҙарҙын яраткан уйыны ла бит. Ләкин Йәнештен, уға күңеле төш-мәүен, етмәһә, унын табаны ҡупкан итегенең һырғалаҡ эйер-гә эшкә ашмауын Сәрбиямал яҡшы белә, әлбиттә. Тик уға, ғәҙәте буйынса, кемгә лә булһа бәйләнергә, тиргәнергә кәрәк. Бына ул хәҙер баяғынан да яманыраҡ итеп Емешкә ҡысҡы-рып ебәрҙе:

— Нимә ҡарап ултыраһың, сиған балаһы! һыуҙы һөртөп ал!

Сәрбиямал ҡушмайынса, эшен ташлап, иҙән Һөртергә төшөргә ҡыймай ултырған Емеш йүгереп йөрөп эшкә тотон-до. Яңаҡтарына боҙ ҡатканлыҡтан, йүнләп ябылмаған ишек-тән һырҡырап ингән һыуыҡ һауа иҙәндәге һыуҙы туңдыра ла башлағайны инде. Емеш, ялан аяҡтары менән уларҙы иретеп, -кат-кат ҡоротто.

Аяғына өр-яңы ҡара быйма кейгән, елкәһенә ҡуйы сәскә* ле, күпереп торған һуккан дебет шәл һалған Сәрбиямал, мейес буйындағы ҙур һандыҡҡа ултырып, ғәҙәте буйынса, Йәнеш менән Емештең ата-бабаһын, нәҫел-ырыуын ҡал-дырмай теҙеп әрләргә, ҡарғарға тотондо. Унынҫа, Йәнеш, Емеш, Иштуғандан яман, унын үҙенән яҡшы кеше донъя-ла юк ине.

— Эй-й, исмаһам, үлеп, ҡырылып та бөтмәйҙәр бит. Ошо эшкинмәгәндәргә ҡарап йөрәгем боҙолоп бөтә бит. Аяулы бала булһалар, әллә ҡасан дөмөгөрҙәр ине бит...

Унын был ярһыуы иҙәндән урындыҡҡа, урындыҡтан мейес башына үрле-ҡырлы һикереп уйнап йөрөгән кәзә бәрәстәре-нең береһе итәгенә килеп менгәс кенә баҫылды.

— Уй, ҡараҡай! — тип ҡапыл йөҙө яҡтырып китте Сәр-биямалдың.— Өшөнөңмө ни, шаян! Ят, йылын!..

Ул, сем-ҡара йылтыр йенлө шаян кәзә бәрәсен итәгенә яҡкырып, шәленең осо менән ябып ҡуйҙы. Ҡара бәрәс, мырт-мырт көйшәй-көйшәй, күҙҙәрен йомоп, рәхәтләнеп тынып ҡалды.

— Эй, ҡараҡайым, шаяным, матурым! — тип тәтелдәне хәҙер Сәрбиямал.

Ҡара бәрәстең бәхетенә көнләшеп, һандыҡ өҫтөнә һике-реп килеп менгән бөҙрә йөнлө аҡ бәрәнде лә Сәрбиямал итә-генә һыйҙырҙы.

— Аппаҡайым, бөтөркә сәсем! — тип иркәләне ул уны ла.

Сәрбиямал үҙенең малдарын, ҡош-ҡорттарын сикһеҙ ярата, оҫта, ихлас тәрбиәләй. Уларҙы «минең һарығым», «ми-нең кәзәм», «минең ҡаҙым», «минең атым», тип, һәр береһе-нә «минең» һүҙен ҡушып ҡына атап йөрөтә. Хатта оҙаҡ йә-шәүҙән күҙҙәре бөтәшеп, башы таҙға әйләнгән ҡарт ата бе-сәй — Мыраубайға ла «минең»де ҡушмай әйтә алмай ине. Тик Мыраубай, ни өсөндөр, уны бик үк яратмай. Әле лә ул пандыҡ өҫтөндә һуҙылып йоҡлап яткан еренән үҙен ҡуҙғатып итәгенә алған, «минең Мыраубайым», «минең бесәйкәйем» тип ҙур итләс устары менән һыйпай башлаған Сәрбиямалға иәшел күҙҙәрен аҡайтып ҡараны ла, тамаҡ тебө менән, йәм-пеҙ итеп:

— Мың-ғ-ға-у!..— тип ҡысҡырып, арт аяҡтары менән тибеп, төшөп китте.

— Ҡәһәр һуҡҡыр, ботомдо ҡалай яман сапсып алды!— тип ҡарғанып ултырып ҡалды Сәрбиямал. Унан Емеш бығаса ла күп тапкырҙар ишеткән легенданы ҡабатларға керешеп

китте: — Эт кенә ул кешенең ысын дуҫы була, ти. Теге донъяға барғас, хоҙай унан: «Хужаң яҡшы ҡаранымы, асыҡтырманымы?»— тип һорағанда, хужаһы донъялыҡта үҙен ни хәтле асыҡтырһа ла: «Юҡ, асыҡтырманы, хужам бик һәйбет тәрбиәләп аҫраны»,— тип әйтер, ти, Ә бесәйҙе ни хәтле ҡәҙерләһәң дә, һыйлаһаң да: «Хужам асыҡтырҙы, яҡшы ҡараманы»,— тип әйтер, ти. Шуның өсөн ашағанда күҙен йомоп ашай, ти, бит ул, яуыз. Хоҙайға: «Насар ҡараны, асыҡтырҙы»,— тип ошаҡлар өсөн, ашатҡанды күрмәмешкә һалышып, күҙен йома, ти, ләғнәтең!..

Был легенданың аҙағы ла, ғәҙәттәгесә, бесәйҙең асыуын Емештәргә төшөрөүгә күсте.

— Бына һеҙ ҙә тап шул Мыраубай кеүек. Ҡәҙерҙе белмәйһегеҙ. һырт йөнөгөҙҙө тырпайтып ҡына йөрөйһөгөҙ!..— тип ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Бәхеткә ҡаршы, шул саҡ унын. янына иң яратҡан кәзә бәрәсе — тирәк япрағы шикелле өҙлөкһөҙ елпелдәп торған аҡ ҡойроҡло, ҡылыс ҡолаҡлы, ҡуш һырғалы, күк билдәш бәрәс менеп баҫты. Шундай уҡ һылыу, иркә, тик ҡара билдәш тә күк билдәш артынан ҡалышманы. Улар бығаса урындыҡта йоҡлап яталар ине. Сәрбиямал бәрәстәрен алмаш-тилмәш итәгенә алып һөйҙө, усынан икмәк ашатты. Иркәләнергә айырата оҫта булған күк билдәше хатта унын ҡулынан бер шаҡмаҡ шәкәр ҡабып, һырғаларын йәлпелдәтеп, башын һелкә-һелкә, шатырлатып, ашап та ебәрҙе. Бигерәк матур, бигерәк шаян бәрәстәр шул улар. Емештең дә уларҙы һөйгөһө, иркәләгеһе, улар менән ҡыуышып уйнағыһы килә. Ләкин мөмкинме һуң?! Сәрбиямал уға хатта бәрәстәренә төбәп ҡарарға ла рөхсәт итмәй:

— Күҙ тейҙерәһең! Ҡарама минен бәрәстәремә! — тип ҡысҡырып ҡына тора.

Емеш, нисәнселер тапҡыр, ғәйәт әсенеп, Сәрбиямалды был фекергә килтергән күңелһеҙ бер ваҡиғаны иҫкә алды.

Бынан ике йыл элек, Емешкә ете генә йәш саҡта, яҙ кене булды был үкенесле ваҡиға. Уға хәтле Емеш бәрәстәрҙе лә, быҙауҙы ла теләгәнсә һөйә, иркәләй ала ине. Хатта бәрәстәрҙе итәгенә яткырып йоҡлата ла ала ине ул. Йылыҡай ғына була торғайны. Ә хәҙер, имеш, уларға ҡарама ла. Берәй бәрәс килеп: «Әйҙә, уйнайыҡ!»— тип итәгендән тешләп тартҡанда ла күрмәмешкә һалыш. Анһатмы ни был?! Дөрөҫ, теге эсе күпкән ларылдаҡ быҙау менән адра һарыҡ бәрәндәрен һөйҙөрмәгәнгә Емеш үкенмәй ҙә. Ләкин бынауы шаян кәзә бәрәстәрен бигерәк ярата бит ул. Уларға ҡарамай һис тә түҙә алмай.

Йә, унын бәхетһеҙлеген арттырыр өсен генә булды инде был хәл... Емештең күңеленән бер ҡасан да сыҡмаҫ инде ул...



Яҙғы матур бер көн ине. Сәрбиямалдың бер оя өйрәге бәпкә сығарҙы.

— Оло Эйеккә ебәрһәң, бәпкәләрҙе төйләгән тибер. Бар, щтобы йәһәт кенә өй артына — баҡсаға — соҡор ҡаҙып, күл яһағыҙ,— тип бойорҙо ул.

Йәнеш менән Емеш көн буйы ҡаҙып, ярты метр тәрәнлегендә ҙур ғына түңәрәк соҡор яһанылар. Ҡырсындан, тишек тасҡа тейәп, терлө таштар ташынылар. Сәрбиямал соҡорҙоң тебөнә ваҡ ҡырсынташтарын теҙҙе. Улар өҫтөнә аҡ таштар һибеп һалды. Бынан ары Йәнеш менән Емеш көн буйы Эйектән һыу ташынылар. Ахыр «күл» әҙер булды. Йәшкелт йылтыр ҡауырһынлы, бөҙрә ҡойроҡло һылыу ата өйрәк менән бәләкәс кенә, төҫһөҙ һоро инә өйрәк «күл» ситендә бейейбейей бәпкәләрен йөҙҙерә башланылар. Шулай күпмелер көн үтте. Йәнеш менән Емеш унда һәр иртәнсәк һыу ташыны. Көндөҙ бәпкәләр йөҙҙө. Унан Емеш көн буйы ошо «күл» янында бәпкәләрҙе көтөп ултырҙы. Бик күңелһеҙ, ялҡтырғыс эш ине был. Ҡыш буйы һалҡын вйҙә япа-яңғыҙ ултырып ялыҡкан Емештен, күңеле ҡырға, туғайға, һыу буйына тартыла, унын да башҡа ҡыҙҙар шикелле йүгереп уйнағыһы, көлгеһе килә. Ә өйрәк бәпкәләре унын, зарын аңламай, һыу инеп сығалар ҙа тәңкәләй ҡанаттарын елпелдәтеп ҡағыналар, балғалаҡ һабы шикелле ялпаҡ суҡыштарын алға һуҙып себен ҡыуып йүгерәләр, «күл» ситендәге ҡаҙ үләндәрен өҙөп ашайҙар. Ҡайһы бер шаянығаҡтары, себендәр йәки ҡуңыҙҙар тигән булып, Емештең ярылып ҡатҡан аяҡ бармаҡтарын да суҡып тарталар. Йөҙөп йөрөй торғас, «күл» төбөнән ылымыҡ эҙләргә керешәләр. һыу өҫтөндә осло ҡойроҡтары ла, ҡара тәпәйҙәре генә йәлпелдәп тора. Йөҙөп ялҡкас, тағы «яр» ситенә сығалар, бешкән йомортҡа, эремсек ҡушып болғатып ҡуйған көрпәне талашып-һоғаланып ашарға тотоналар. Унан:

— Сип-сип!.. Бип-бип! —тип, йоҡларға теләүҙәрен белдерәләр. Инә өйрәк:

— Баҡ-баҡ! Баҡ-баҡ!..— тип, иркә генә һөйләнеп, бәпкәләрен ҡанат аҫтына йыйып алып ята. Ата өйрәк ҡырынмырын ҡараштырып, күк йөҙөн күҙәтә-күҙәтә, улар янында баҫып тора. Емеш тә иртәнән кискә тиклем уларҙы һаҡлап «күл» янында ултыра. Сәрбиямал күп ваҡыт уға көн буйына бер һыныҡ икмәк бирергә лә «онота».

Бер аҙҙан был «күлгә» ике оя ҡаҙ бәпкәһе лә өҫтәлде. Емештең тотҡонлоғонон иге-сиге күренмәне. Ул берсә өйрәк, берсә ҡаҙ бәпкәләренә, йәки шунда уҡ сипылдашып йүгереп йөрөгән тауыҡ себештәренә текләп, моңайып, уйланып һаман ошонда ултыра бирҙе.

«Өйрәк бәпкәләренен. суҡыштары ниңә былай йәмһеҙ,

тупаҫ икән? Үҙҙәре, етмәһә, шундай ҡомһоҙҙар. Туйыуҙы ла белмәйҙәр. Ни һалһаң шуны һоғаланып сәйнәмәй йотоп бөтөрәләр... Тауыҡ себештәре тәүҙә бик матур булалар. Суҡыштары беҙ кеүек, күҙҙәре елбәҙәк кеүек кенә була. Көҙҙәләре уларҙың һары күбәләккә, тәпәйҙәре ҡыҙыл сәскәгә оҡшай. Ә аҙаҡтан, үҫә-үҫә йәп-йәмһеҙ тауыҡҡа әйләнәләр. Йә, ниңә үҫәләр икән инде? Шул матур ғына көйө ҡалһаларсы инде... Бөтә нәмә лә шулай тыуа, үҫә, үләме икән ни?.. Хатта бынауы ағастар ҙа... Ниңә былай? Ни өсөн? Уны үҙгәртмәй, иң матур бер сағында ғына туктатып булмаймы икән ни? Мин дә шулай үҫермен, ҡартайырмын... унан үлерменме икән? Уй, ниндәй ҡурҡыныс!.. Былай булғансы, тыумаған ғына булһамсы мин!..»

Емеш ошондай аңлайышһыҙ, ҡатмарлы уйҙарҙан арына алмай ултырғанда, бер ҡаҙ бәпкәһе унын. янына килде лә:

— Би-бип! Бип!?— тип, балтырынан суҡып тартты.

— Кит әле,— тине Емеш, уны әкрен генә ситкә этәреп.— һине ямаҡ тимәйем бит мин. һин матурһың, һинен бөтә ереӊ дә килешле. Ниңә һин мине суҡыйһың?!

— Ға-ға-ға-ға! — тип асыуланды инә ҡаҙ. Ата ҡаҙ:

— Ҡацк! Ҡаңк!— тип һөрән һалды ла ы-ыҫ-ҫ! тип муйынын һуҙып, Емештен, ботон күгәрткәнсе тешләп тә алды. Етмәһә, ҡанаттары менән дә бәргеләне.

Сәрбиямалдың «голландский» тип йөрөткән был оҙон муйынлы күкһел аҡ ҡаҙҙары, хужаһына оҡшап, бик үсалдар, сарғалар. Уларҙан Емешкә шулай бик йыш эләгә ине. Әле лә юкка ғына сарбайлаған ҡаҙҙарынын. тауышын ишетеп баҡсаға йүгереп килеп ингән Сәрбиямал ҡапыл:

— Атаҡ, атаҡ! Өйрәк бәпкәләремә нимә булған?! Ниңә ҡараманың, күҙең сыҡҡыры! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Емеш тертләп һикер(.п торҙо.

— Нимә булған һуң, апай!

— Күрмәйһеңме ни, әйләнсек булғандар ҙа баһа! Был ни ғәләмәт нкән? Ни генә эшләйем икән!? — тип үҙәләнде Сәрбиямал, ҡото осоп. Емеш, ни эшләргә белмәй, берсә өйрәк бәпкәләренә, берсә үгәй әсәһенә ҡарап, ни әйтергә белмәй, аптырап тора бирҙе. Бәпкәләр баянан бирле муйындарын бер яҡҡа ҡыйшайтып «күл» тирәһендә төрлөһө төрлө ерҙә әйләнеп йөрөйҙәр ине. Емеш уйнайҙар, яңы уйын тапҡандар икән тип кенә уйлағайны. Хәҙер, үгәй әсәһенең сәбәләнеүенә ҡарап, ул да ҡурҡты.

«Ысынлап та, нимә булған һун, уларға?!»

Был һорауға яуап биреүсе булманы. Бәпкәләр, Сәрбиямалдың «ах, ух!» итеүенә лә, әрләү, ҡарғауына ла ҡарамай, шулай әйләнеп йөрөнө-йөрөнеләр ҙә, бер-бер артлы үлде лә



бөттөләр. Бер оя өйрәк бәпкәһенән бер генә тереһе лә ҡалманы.

— һинең күҙең генә тейҙе, сиған балаһы! Йоторҙай булып текләй ҙә ултыра инең, күҙең сыҡҡыры!.. Бынан һуң шулай минен, ҡош-ҡортома, мал-тыуарыма күҙ төшөргәненде күрәйем. Күҙҙәренде сокоп алырмын! — тип Емеште әрләй-ҡарғай иланы Сәрбиямал. Ғәйепле башын түбән эйеп, ҡатҡан арыҡ аяҡ бармаҡтарына ҡарап, телһеҙ ҡатып торған Емешкә был ваҡытта өйрәк бәпкәләре лә, үгәй әсәһе лә сикһеҙ ҡыҙғаныс тойолдо. Уның үҙен генә ҡыҙғаныр кеше юк ине.

Бына шунан инде Сәрбиямал уға малдарына түгел, хатта үҙенә төбәп ҡарарға ла рөхсәт итмәй.

— Тура ҡарама, күҙең сыҡҡыр! — тип кенә тора шул...

Емеш иҙәнде һөртөп, ҡоротоп бөтөүгә, баяғынан да ҡатыраҡ өшеп, күгәренеп, Йәнеш ҡайтып инде. Уның яулыҡ аҫтынан туҙып сыҡҡан оҙон ҡара сәстәре лә, илап йомшарған танауы, ауыҙы ла, күлдәк итәге лә баяғыға ҡарағанда ла нығыраҡ боҙланып тунғайны.

— Эй, әҙәм аҡтығы, йылдамыраҡ йөрөһәң ярамаймы!? Әрәмтамаҡ! — тип, ғәҙәтенсә, асыулы утлы күҙҙәрен үтә сәнсеп ҡаршы алды Сәрбиямал. Емеш, апаһы тағы ла йығылып китер тип ҡурҡып:

— Шунда, ишек тебөнә ултырт! — тип бышылданы. Унан, күнәктәрҙе берәмләп, бәләкәс яҡҡа, һике өҫтәнә ташыны. йәнеш, өшөгән аяҡ-кулдарының һыҙлауына түҙә алмай, сенләп илай-илай бәләкәс яҡка уҙҙы. Ләкин Сәрбиямал уға шунда уҡ:

— Йәнеш, бар утын әбин! Мейес яҡ! Күрмәйһеңме ни, көн кисләп килә!— тип екеренде.

— Үҙем алып инәм, апай! — тине Емеш. Сәрбиямалдың яуабын да көтмәй, бер ҡат күлдәктән, ялан аяҡ, ялан баш көйө тышҡа, ялан кәртәгә йүгерҙе. Унда, Иштуған ағаһы кисә ҡырҡып, бурап ҡуйған ҡоро утындар ята ине. Үҙ йомшо менән кәртәгә көнгә бер нисә ҡат шулай яланғас йүгереп барып ҡайтыу унын, өсөн яцылыҡ булмаһа ла, был сатлама һыуыкта утын күтәреп, яйлап атлап ҡайтыу еңел булмаясағы күренеп тора ине. Ләкин Емеш хәҙер ул турала түгел, ешөгән апаһына әҙ генә булһа ла йылынырға мөмкинлек биреү тураһында ғына уйланы. Ул, ике ҡулы араһына арҡыры ағас ҡуйып, ҡосағын кинәйтеп, үҙе ҙурлыҡ утын күтәреп алды ла өйгә табан йәһәт кенә атларға тырышты. Ләкин утын ауыр, аяҡтар, ҡарышҡан шикелле, алға түгел, артҡа баҫалар ине. Утынлыҡтан өйгә хәтле булған юл икһеҙ-сикһеҙ оҙон тойолдо. Баҫкан һайын табандын, бер ҡат тиреһе ҡубып ҡалған һымаҡ булды. Әсе өйөрмә ел, енел сепрәк күлдәкте кү-

тәреп, сәнскеле ғинуар ҡарын уның яланғас тәненә һыланы. Кескәй арыҡ тән ҡурмас кеүек ҡурылды. Шулай ҙа Емеш утынын ташламай ишеккә килеп етте. Тик, ҡул буш булмағас, ишекте тартып асып булмай ине.

— Асығыҙ! — тип ҡысҡырҙы ул, ҡыймай ғына. Уны ишетеп ишеккә йүгергән Йәнеште Сәрбиямал ситкә этәреп ебәрҙе.

— Асма, тора бирһен! Икенселәй үҙенә ҡушмаған эшкә ҡыҫылмаҫҡа һабаҡ булыр!

— Асығыҙ!— тип ҡабатланы Емеш.— Туңам бит!..

— Тун, үл! — тип ҡысҡырҙы Сәрбиямал.— Ай-һай, шәп кеше икән! Йәлләүсе, яҡлаусы кеше табылған икән!?

Өйҙә Йәнештең үкһеп илағаны, нимәләрҙеңдер дөбөршатыр ауғаны ишетелде. Бына нимәлер лап итеп иҙәнгә йығылып төштө. Шул ыңғайға әсе тауыш менән ҡысҡырып та ебәрҙе. Күрәһең, Сәрбиямал ишек асырға тырышҡан Йәнеште тибеп осорҙо. Шулай ҙа Йәнеш ишекте килеп асты. Емеш, тешен ҡыҫып, өндәшмәй өйгә инде. Тышта, ишек төбөндә, боҙланып ҡатҡан ҡар өҫтөндә, кескәй ике ҡанлы табан эҙе генә ятып ҡалды.

Емеш утындарҙы бәләкәс яҡҡа, мейес алдына алып барып һалғас, тиҙ генә урындыҡҡа менеп, аяҡтарын күлдәк итәгенә төрөп ултырҙы. Йылыла аяҡтар ҡарға баҫып торғандағынан да ҡатыраҡ һыҙлай башланы. Емештен. бөтә донъяны яңғыратып, ҡысҡырып илағыһы килде. Ләкин ул, ғәҙәтенсә, өндәшмәне лә, иламаны ла. Тештәрен ҡыҫып, моңло күҙҙәрен ҡайҙалыр текләп тик ултырҙы. Йәлләр ҙә, ярҙам итер ҙә кеше булмағанда, илап ни эшләһен һуң ул! Тик йомшаҡ күңелле Йәнеш кенә түҙмәне, һылыуын да, үҙен дә йәлләп, иланы ла иланы. Сәрбиямал:

— Тым, тым! Күҙең сыҡҡыры, йәнең йәһәннәмгә киткере! — тип, ҡарғанып, ҙур ауыр йоҙроҡтары менән уның башын, арҡаһын төйгөсләп, сәстәрен йолҡҡолап та ҡараны, булманы. Йәнеш күҙҙәре, биттәре шешенеп беткәнсе үкһеп иланы ла иланы. Үҙенең был ҡанһыҙ, шәфҡәтһеҙ тормошҡа булған бөтә асыуын, нәфрәтен, ләғнәтен гел шулай әсе күҙ йәше менән йыуа ине ул.

Оҙаҡламай эңер төштө. Сәрбиямал Йәнеште туҡмап, ҡарғап та тымыҙа алмағас, кискелеккә һауыр өсен һыйырҙы алып инергә үҙе сығып китте. Уның ҡыҙыл ала тукал һыйыры кисә төндә генә быҙаулағайны.

Сәрбиямал һыйырҙы ейгә алып йнеп өр-яңы аҡ ҡалай күнәккә гөбөрләтеп һауырға тотондо. Тукал һыйыр, оҙон телен сығарып, алдына бәйләп ҡуйылған быҙауын, меңрәймөнрәй, ялап таҙартырға кереште.

Емеш үҙен йәй көне, ошо туҡал башы менән булһа ла,



осраған бер ерҙә һөҙөп ырғыта торған был уҫал һыйырҙың үҙ быҙауын шундай яратып ялап тороуын да, Сәрбиямалдың гөбөрләтеп һыйыр һауыуын да, ҡарҙай аҡ, көпшәк һөт күбеҡтәренен, ҡабара-күбәйә күнәккә тула барыуын да ҡарап торорға ярата. Ул, Сәрбиямал шикелле, Ниндәйҙер үҙенә генә хас бер көйгә таҡмаҡлатып, сикһеҙ оҫта итеп һыйыр һауа белгән башҡа ҡатынды белмәй. Сәрбиямал хатта он иләгәндә лә, оҙон бармаҡтарын иләктең ситенә тыпырлатып, ниндәйҙер күңелле бер көй сығарып һуға кеүек. Хатта уның ошо аушаңлап, тайпанлап атлауы ла уның үҙенә генә билдәле булған бер көйҙө ҡабатлай кеүек тойола уға. Ғөмүмән, был уҫал, булдыҡлы ҡатындың һәр хәрәкәте, һәр эше ниндәйҙер үҙенә генә хас бер ритмды ҡабатлай, енһеҙ йыр булып яңғырай һымаҡ тойола Емешкә. Ул хатта ошо эше менән ҡайһы саҡта Емеште сихырлағандай була. Уның күңелендә һәр эште Сәрбиямал кеүек оҫта итеп эшләп ҡарау теләген уята.

«Эй, бирһен ине, рөхсәт итһен ине... Мин дә тап уның шикелле итеп эшләй алыр инем...»

Әле лә бына ҡыҙыҡһыныусан, тынғыһыҙ күңеле уны, аяҡ табандарынын. йөрәккә үтеп һыҙлауын да онотторοп, һыйыр һауған яҡҡа тартты. Ул иплəп кенә, ҙур яҡҡа сыҡҡан ишек яғына һөйәлеп, ҡурҡыуҙан да, һоҡланыуҙан да тыны ҡыҫылып, Сәрбиямалдың һыйыр һауыуын күҙәтә башланы.

Уға ла шулай итеп гөбөрләтеп һыйыр һауып ҡарарға ине!.. Ҡасан һуң Емеш үҫеп етер?! Эй, үҫмәһә лә, хәҙер ҙә һауа алыр ине лә ул. Былтыр йәй кәзә һауып ҡарағайны бит инде. Белә ине... Беренсе тапҡыр ғына булһа ла тап үгәй әсәһе кеүек гөбөрләтеп һауғайны... Йәйге бер кис ине унда. Улар Шәүрә менән урамда уйнап йөрөйҙәр ине. Бик һуң ине шикелле инде. Урамда һәр бер йорт ҡапҡаһы алдында ятҡан ҡаҙ көтөүҙәре менән мәсет буйына һырышҡан кәзәләрҙән башҡа бер кем дә ҡалмағайны. Ошо ваҡыт Шәүрә мәсеттең нигеҙенә үк менеп ятҡан ҙур бер аҡ кәзәне мөгөҙөнән тартып торғоҙҙо ла:

— Мә, Емеш, тотоп тор. Мин һауып ҡарайым... Беләмме икән? — тине.

Емеш башта:

— Ярамай. Ул бит беҙҙең кәзә түгел! — тип ҡаршы тешеп ҡараһа ла, һауып ҡарағыһы килеү теләге уның был ҡурҡыуын енде. Шунан улар мәсет буйында ятҡан әллә нисә кәзәне, алмаш-тилмәш, ергә һауып сыҡтылар. Емеш уларҙы тап үгәй әсәһе кеүек гөбөрләтеп, таҡмаҡлатып һауырға тырышты. Харап ҡыҙыҡ булды ул кисте. Улар иртәгә лә шулай кәзә һауып ҡарарға, нисек тә кәзә, һыйыр һауырға өйрәнергә һүҙ ҡуйышып өйҙәренә ҡайттылар. Шәүрә өйгә ҡайтҡас бы-

ны әсәһенә һөйләп, көзә һауа белеүе менән маҡтанырға ла онотманы. Ләкин Зәбәржәт еңгә ҡыҙын ҡаты орошто.

— Аҡты ергә һауыу ҙур гонаһ. Кешенең көзәһен һауыу икеләтә гонаһ. Бына хоҙай үҙегеҙҙе бының өсөн тамуҡта яндырыр әле,— тине. Шуға улар бүтәнсә көзә һауманылар. Сөнки ҡыҙҙарҙың икеһенең дә тамуҡта янғыһы килмәй ине. Шулай ҙа көзә һауа белә инде улар.

«Эй, һыйыр һауып та ҡарарға ине...»

— Күҙең сыҡҡыры, ниңә текләп тораһың, сиған балаһы?! Һыйырымдың елененә, минең бармаҡтарыма күҙ тейҙермәк булаһыңмы, яуыз!..

Емештең күҙҙәре Сәрбиямалдың һыйыр имсәге араһынан ҡот осорғос асыу менән үҙенә төбәлгән күҙҙәре менән осрашты. Ул, бойоғоп, ҡайтанан бәләкәс яҡҡа сыҡты. Был ваҡытта Йәнеш илауҙан туҡтап мейес яғып ебәргәйне. Тирә-яҡ йылынып, яҡтырып киткәйне. Емеш, урындыҡҡа менеп, мейес ҡаршыһына ултырҙы.

— Аяғың һыҙлаймы, һылыу? — тип шыбырлап һораны Йәнеш.

— Юҡ,— тине Емеш,— йөрәгем...

Улар янып бөтөп барған утҡа текләп һүҙһеҙ тынып ҡалдылар. Емеш мейестә ут янғанын ҡарап ултырырға ла ярата ине. Шуға, әле генә Сәрбиямалдан ишеткән йерәк әрнеткес һүҙҙәрҙе лә онотоп, утҡа текләп ултырҙы. Бына башта сей утындар, ҡабынып китә алмай аҡһыу боҫ сығарып, күнелһеҙ быҫҡып яталар. Унан бер-бер артлы тоҡанып, шартлап-дөрләп, күңеллэнеп янып китәләр. Ҡыҙыллы-күкле шаян ялҡын, мейес эсенә һыймай, борғолана-һырғылана, әйтерһең, Емеште йоторға теләп, ҡыҙыл телдәрен сығарып ялана башлай. Тора-бара әкренләп ялҡын һүрелә, ваҡ, ҡыҙыл ҡуҙҙар шиңә, кесерәйә, ахыр бер-бер артлы, һуңғы тапҡыр айырата ныҡ яҡтырып балҡып китәләр ҙә, Емештең күңелендә бөткөһөҙ һағыш уятып, һүнәләр... Көлгә әйләнәләр...

Ниңә ошо утты ла һүндермәй гел-гел генә яндырып тороп булмай икән? Гел-гел ошолай ут алдында йылынып ҡына ултырһаң ине лә бит... Ҡайҙа һуң?! Ундай рәхәттең ғүмере ҡыҫҡа була шул унын,. Йылы йәй ҙә шулай күҙ асып йомғансы уҙып китә бит... Ә бына ҡыштың да, Емештәрҙең бәхетһеҙлегенең дә иге-сиге юҡ...

Емеш ошондай әрнеүле уйҙар менән баш ватҡан арала, Йәнеш мейестен, йүшкәһен ябып, ауыҙын томалап та ҡуйҙы. Бәләкәс яҡта ҡараңғылыҡ урынлашты. Йөрәк өҙгес ҡуйы ҡараңғылыҡ. Ҡасан, исмаһам, Сәрбиямал лампа тоҡандырырға рөхсәт итер?!

Һыйырҙы һауып сығарғас, Йәнеш, малдарҙы төнгөлөккә бикләп, бесән һалып инде. Унан киске сәй эсергә ултырҙылар. Ләкин Сәрбиямал шунда уҡ, ғәҙәте буйынса, ҡашын асыулы төйнәп:

— Ҡарышып йөрөй ул. Уға нимә, үҙе тапҡан мал түгел, кешенеке йәл түгел! — тип, утындан һаман ҡайтып етмәгән Иштуғанды әрләй башлағас, балалар бәләкәс яҡҡа сығып китергә ашыҡтылар. Сәрбиямал:

— Ятығыҙ. Лампа ҡабыҙып, кәрәсинде әрәм итәһе булмағыҙ штобы! — тип бойороп ҡалды. Унан, майлап-баллап оҙаҡ итеп сәй эскәс, ҡаты кикереп:— Бәрәкалла, биргәненә шөкөр! — тип һөйләнә-һөйләнә, урын йәйеп йоҡларға ятты.

Йәнеш менән Емеш тә, бәләкәс яҡтын, ҡатҡан балаҫы өҫтөнә әсәләре бар саҡтан ҡалған ҡолаҡсындай ике мендәрҙе ырғытып, бер алама ҡорама юрғанды икәү ябынып, йомарланып яттылар. Тәҙрәнән дә, ишектән дә буран уйнап торған өй шунда уҡ һыуынып, ҡотһоҙ булып та китте. Кеслө буран өй ҡыйығына инеп, тәҙрә ҡапҡастарына ултырып туҡтауһыҙ үкерҙе, олоп йөрәккә бөткөһөҙ мон, ҡайғы һалды. Алама юрған туңған тәнде лә, өшегән йөрәкте лә йылытманы. Шулай ҙа көн буйы эш менән арыған Йәнеш, юрғанды башынан аша бөркәнеп, тыны менән аҙ ғына тәнен йылытҡас, һаташа-баҫлыға, ауыр йоҡоға сумды. Ҡараңғы, һалҡын өйҙә Емеш кенә уяу ҡалды. Ул һәр ваҡыт шулай кистәрен ҡурҡып, уйланып оҙаҡ-оҙаҡ йоҡлай алмай ята. Танда ул, ауыр, аңлайышһыҙ уйҙарҙан тамам арып, иҙрәп йоҡлап ҡына китеүгә, Сәрбиямал тора ла уларҙы уята:

— Йәнеш, тор, һыуға бар, мал ҡара. Емеш, сиған балаһы, тор, минең урынымды йый, өйҙө йыйыштыр!..

Ошо арҡала бер ҡасан да Емеш туйғансы йоҡлай алмай ине. Бөген дә уйҙар уны йөҙәтте. Иң элек ҡурҡып, борсолоп ағаһы тураһында уйланы ул.

«Ниңә һаман ҡайтмай икән? Аҙашманымы? Туңып үлмәнеме? Бүре ашаманымы икән?..»

Был уйҙарҙан һуң Емешкә өй тағы ла һалҡын, тағы ла ҡотһоҙораҡ булып китте. Хатта тәҙрә ҡапҡастарын өҙлөкһөҙ шаҡылдатып, мөрйәлә, ҡыйыҡта өҙлөкһөҙ олоп йөрөгән эсеһалҡын елдәрҙен. тауышында ла бөгөн ниндәйҙер айырата шомло ҡурҡыныс, билдәһеҙ ҡайғы ишетелә кеүек тойолдо уға. Аҫтағы каК таҡта ла бөгөн көндәгенән ҡатыраҡ, өҫтәге алама юрған да элеккенән йоҡараҡ ине. Ҙур яҡта, мамыҡ түшәк, мамыҡ мендәрҙәр эсенә күмелеп, бесәй кеүек татлы йоҡоға сумған Сәрбиямалдын, бер өҙлөкһөҙ уф... пуф!.. иткән тауышында ла ниндәйҙер асыулы янау ишетелә һымаҡ... Емеш үҙен хәҙер-хәҙер бына ошо ҡот осорғос ел-дауыл-•пы, ҡар буранлы уҫал ҡыш ҡуйынына ташланыр ҙа юҡҡа сығьф тоҫлө тоя. Ул, күҙҙәрен сырт йомоп, был тойғонан ҡото-•лорға, йоҡларға йәки ниндәй ҙә булһа йылыраҡ, күнеллерәк

уйҙар уйларға тырыша. Шул ваҡыт унын иҫенә ҡасандыр атаһы һөйләгән «һары ат менән буҙ ат» әкиәте килеп төшә. Әкиәт артынан атаһы ла унын күҙ алдына килеп баҫа. Үҙенең ҡасандыр унын үлеүен теләүен дә хәтерләй.

«Ни телем барып шул һүҙҙе әйттем икән?! Эй хоҙайым, теләгем ҡабул булып ҡына ҡуймаһа ярар ине... Атайым һау ғына ҡайтһын ине... Атайым да үлһә, ағайым да урмандан ҡайтмаһа, үгәй әсәй беҙҙе иртән үк ҡыуып сығарыр... Беҙ ҙә туңып үлербеҙ...»

Йөрәк өҙгөс әсе һыҙғырған ҡотороноҡо буран Емештең уйына тағы ла ҡатыраҡ шом өҫтәне. Күңеллерәк уй уйлау теләге барып сыҡманы.

«Эй, исмаһам, тиҙерәк кенә таң атһын ине инде, таң!..— тип өҙгөләнде Емеш.— Ҡасан атыр һун, был таң?Ь

Бына төн үтте. Буран баҫылды. Офоҡто ҡыҙыл нур солғап алды. Тик Емештәрҙең өйе генә һаман ҡараңғы ине. Уларҙың ҡалын боҙ менән ҡапланған тәҙрәләренән таң яҡтыһы үтеп инә алмай ине әле. Емеш тамам түҙемдән сыҡты. Йөрәге алҡымына килеп тороп ултырҙы.

«Ағайым һаман юҡ! Ағайым ҡайтманы бит!? »

Шул саҡ унын өмөтһөҙ йөрәк өнөн ишеткәндәй, яман шағырлап урам ҡапҡаһы асылып китте. Ауыр йеклө сана сыйылдап, шығырлап ишек алдына уҙҙы.

«Ағайым ҡайтты!.. Ағайым үлмәгән!..»

Емеш уҡ кеүек атылып һикереп торҙо. Лампа ҡабыҙҙы. Ишекте шар асып, ялан аяҡ, күлдәксән көйө ағаһына ҡаршы сығырға булды. Ләкин шул арала, ҡаты ҡарҙы сыйылдата баҫып, өйгә Иштуған йүгереп килеп инде. Уны баштан-аяҡ ҡырау баҫҡан. Бүрек ҡолаҡтарында суҡланып боҙ алҡалар һалынып тора. Биттәре, ҡолаҡтарына хәтле кейеме менән бер төҫ — аҡ төҫкә ингән. Емештең ҡотороноҡо ҡыуанысы ҡаты борсолоу менән алмашынды.

— Ағай!...—тип ҡысҡырып ебәрҙе ул.—Ағай, биттәрең туңған да баһа!.. Ап-аҡ булып туңған!..

— Сикһеҙ ҡаты һепертмә буран булды. Юлдан яҙлығып, .аҙашып йерөнөм,— тине Иштуған иҫе китмәй генә. Унан туңған итеге өҫтенә ҡатҡан ҡарҙарҙы ҡулы менән ҡуптарып алып, битен, танауын, ҡолаҡтарын ыуырға тотондо. Оҙаҡламай Сәрбиямал да уянып тороп ултырҙы.

— Атаҡ, атаҡ! Тағы оҙағыраҡ йөрөй бирһәңсе, эшкә ашмаған! һин мине шул атһыҙ ҡалдырырға ғына йерөйһең инде, ыристан!.. Көрән бейәмдең башына етергә йөрөй-

Емеш" таяҡтын икенсе башы үҙенә лә ҡағыла башлауҙан -куркып, тиҙ генә юрған аҫтына инеп ятты. Күнеле тынысла-
кып, тиҙ генә юр ҫ те
нып, шунда уҡ йоҡлап та китте.



# XI

Был көндөң иртәгеһенә Сәрбиямал Бибисара абыстайҙы -кунаҡка саҡырып алды. Унын менән бергә ҡыҙы Айһылыу ҙа килде. Сәрбиямал бөгөн Иштуғанға ла, утынға-бесәнгә бармай, өйҙә торорға рөхсәт итте. Иштуған, был көтөлмәгән бәхеткә аптырап, ҡайҙа баҫҡанын белмәй, ҡыуанып йөрөне.

Кәзә мәзинден, әлморон сәскәһе шикелле алһыу йөҙлө, ҡолонсаҡ кеүек шаян, теремек ҡылыҡлы берҙән-бер ҡыҙы Айһылыуға бары ун ете генә йәш ине әле. Шулай ҙа ул егәрлелектә лә, һылыулыҡта ла үҙ тиндәштәренән уҙғарғайны инде. «Ырымбур шәле» тип йөрөтөлгән ин, нәфис, иң йомшаҡ шәлдәрҙе бәйләүҙә унын менән бер ҡыҙ ҙа ярыша алмай. Шәл бәйләү — унын ҡыҙ ғүмеренең ин, гүзәл биҙәктәренән береһе булып тора. Был һөнәрҙән башҡа Айһылыуҙы күҙ алдына килтереп баҫтырыуы ла, хатта ураҡҡа ла, ял иткәндә бәйләрмен тип, был эшен тотоп бара ине ул. Шуға күрә ҡайһы бер көләмәс һүҙле кешеләр унан:

«Егеттәр төшөндә Айһылыуҙы, ә Айһылыу шәл бәйләүҙе күрә икән»,— тип шаяртып көлә лә башлағайнылар инде.

Ысынлап та, Айһылыуҙын, ҡыйғас ҡашына, тал сыбыҡтай зифа буйына ғашиҡ булып, уфтанып йөрөүсе егеттәр ҙә аҙ түгел хәҙер. Унын исеме егеттәрҙең йырҙарында ла йыш ҡына янғырай башлағайны инде.

Айһылыуым, айҙай балҡып,
Нур һибелэ йөҙөндән,
Алтын нурҙар ала йондоҙ
һинен. яҡты күҙендән.

Айһылыуға күҙе төшөп йөрөүселәр араһында хатта Собхан старшинанын. үтә тәкәббер улы Һатыбал да бар ине. Ул хәҙер,бигерәк тә еткән егеттәрҙең күбеһе һуғышта булған өсөн дә, старшина улы булғаны өсөн дә үҙен Илсеғолда ғына түгел, бөтә Ырымбур губернаһында ин, беренсе дәрәжәлә торған кейәү егете тип иҫәпләй. Унын, теләген кире ҡағырҙай ҡыҙҙар әле донъяға тыумаған. Шуға ул, Айһылыуға иғтибар күрһәтеп, өметләндереп тә, яусы ебәрмәй көйөндөрөп тә, бер аҙ ыҙалап ләззәтләнеү теләге менән һәр аҙнала, аталарына ҡунаҡка ҡайтҡан һайын, ниндәй ҙә булһа берәй сәбәп табып, Кәзә мәзиндәргә инергә, үҙенең еҙ төймәле ҡара кейемдәре, шығырлап торған ялтыр шиблиты менән Айһылыуҙың күҙ алдынан метеор шикелле балҡып уҙырға тырыша. Ниндәй ҙә булһа берәй ҡыҙҙы ысынлап яратыу, ялҡынлы мехәббәт утында яныуҙы ябай ауыл егеттәренең ғәҙәте тип һанап, түбәнһетеп ҡараған, үҙе инде күптән уҡ минутлыҡ ләззәттәр менән ҡәнәғәтләнеп йәшәргә өйрәнгән был егет, әлбиттә, Ай-

һылыуға ла ысынлап ғашиҡ түгел. Тик инде шундай һылыу ҡыҙҙың үҙенә күҙе төшөүен тойоу, башҡа егеттәрҙен, уға булған өмөтөн һындырыу кинәндерә уны. Айһылыуҙы йәшерен мөхәббәт утында яндырып ғазаплаясағына тамам ышанып, ҡуҡырайып йөрөй. Дөрөҫ, ул әлегә осраған бер ерҙә Айһылыуға ҡаш һикертеп, күҙ ҡыҫып үтеү менән генә ҡәнәғәтләнә. Унынса, ошондай дан егеттең күҙ ҡыҫыуы ғына ла ниндәйҙер Кәзә мәзиндең ҡыҙы булған Айһылыуҙы аҡылдан шаштырып ҡыуандырырға, бөтә башҡа егеттәргә төкөртөргә тейеш.

Үҙ-үҙен яратыу, үҙ хәленән артыҡ ҡәнәғәт булыу менән мауыҡҡан һатыбал, осрашҡан һайын, үҙенә ҡарата Айһылыуҙың яҡты күҙҙәрендә сикһеҙ екһенеү уты балҡып китеүен күрмәй ҙә, аңламай ҙа. Ә Айһылыу уны, ысынлап та, йәнетәне менән күрә алмай. һатыбалдың бөтә ялтырап торған кейеме, шыма ялтыр сәсе, танау аҫтынан ике яҡҡа һөлөк кеүек һалынып төшкән нәҙек мыйығы, бөтә йөрөшө-торошо уға сикһеҙ ят һәм биҙҙергес тойола. Ә инде һатыбал, үҙенең сәнсә ҡарап торған тәкәббер ҡоро күҙҙәрен ҡыҫҡылап, ҡаш һикертеп маташа башлаһа, Айһылыуҙың йөрәген хатта ерәнеү ҡатыш ҡурҡыу солғап ала. Ул тиҙерәк ҡасырға, күҙ алдынан юғалырға тырыша. Бындай саҡта һатыбал тағы кинәнеп, хихылдап ҡала. Йәнәһе, ҡыҙҙы оялтты. Ҡыҙҙың йөрәгенә ут һалды...

Кәзә мәзин менән Бибисара абыстай, һатыбалдыц иғтибарына маһайып, ҡайҙа баҫҡандарын белмәй йөрөйҙәр.

«Айһылыу старшина килене буласаҡ!.. Ғүмере балда, майҙа йөҙөп уҙасаҡ!.. Тик йәһәтерәк яусы ғына ебәрһен ине...»

Ә ҡыҙҙары был хаҡта бөтөнләй икенсе уйҙа ине:

«Үлһәм үлермен, әммә ләкин һатыбалға бармам. Яратмайым, күрәлмәйем шул һөйкөмһеҙҙе! Маҡтансыҡты!»

«...Иштуған?! Бына, исмаһам, егет тиһәң дә егет... үҙ тиңем дә...»

Иштуған хаҡында Айһылыу йыш уйлай, үҙенән бер генә йәшкә елкән булған, кәңгер, оҙон буйлы, атаһына оҡшап, һөрмәле ҡара күҙле, көмрө танаулы был егетте күргән һайын уның йөрәге ниндәйҙер билдәһеҙ шатлыҡ менән тула. Уға ҡараған һайын ҡарағыһы ғына килеп тора. Иштуған урамдан үткән саҡта Айһылыу тәҙрәлә була. һәр көн, һис юғында бер генә тапҡыр булһа ла, Иштуғандың юлында осрап, мөхәббәт тулы шаян ҡараштарын уға төбәп, йылмайып үтмәһә, уның күңеле булмай. Иштуған да, быны һиҙгәндәй, ваҡыты булғанда, Кәзә мәзиндәр тәңгәленән көнөнә ете ҡат уҙа. Ә бына кисә улар һыу буйында осраштылар. Айһылыу кер сайҡай ине. Иштуғли ат һутярырға төштө. Улар тәү тапҡыр шулай икеһе генә күҙгә-күҙ ҡарашып яп-яҡын килеп баҫтылар. Шуға ахыры ҡаушап, хатта бик оҙаҡ бер һүҙ ҙә өндәшә алмай торҙолар. Унан Иштуған ҡабаланып, ҡыҙарынып, Айһылыуға кескәй генә бер ҡағыҙ һондо.

___Мә, уҡы. Күптән бирә алмай йөрөй инем.

— Ҡуй ҙа... Кәрәкмәй ҙә... Әсәйем асыуланыр,— тине Айһылыу, ҡыҙарынып. Шулай ҙа хатты алып алмиҙеүе аҫтына йәшерҙе.

Был көндө Айһылыу үҙен ҡайҙа ҡуйырға, нисек тоторға белмәй аптыраяы. Берсә осоноп, шарҡылдап көлгөһө, шаярғыһы, берсә, ҡысҡырып илағыһы килде. Йәки тәрән уйға сумып, шәлгә төрөнөп оҙаҡ-оҙаҡ өндәшмәй ултырҙы. Әсәһенең һүҙҙәрен йә ишетмәне, йә яңылыш яуап биреп уны аптыратты.

һылыу йөҙөнә берсә алһыулыҡ, берсә аҡһыулыҡ йүгерҙе. Алмиҙеүҙә, йөрәк янында ғына ятҡан кескәй ҡағыҙ киҫәге уның тыныслығын бөтөнләй тартып алды. Ә уҡып унда ни яҙылғанын белер өсөн, Айһылыу һис тә яңғыҙ ҡала алмай ине. Киреһенсә, Бибисара абыстай бөгөн:

— Әллә сырхап тораһыңмы, ҡыҙым? Ниңә бик бойоҡһоң? Кер сайҡағанда өшөнөңмө әллә? — тип һис тә генә уның янынан китмәне. Шулай кис етте.

Бәлки хәҙер Айһылыуға хатты уҡып алырға ла мөмкин булыр. Бына Бибисара абыстай ҡомған күтәреп тышҡа сығып китте. Ә Кәзә мәзин әле мәсеттән киске намаҙҙан ҡайтмаған. Хәҙер өйҙә, аш өйөндә, Айһылыу яңғыҙы ғына ине. Ул, ашыға-ҡабалана алмиҙеүенән хатты алып, дөрләп янған усаҡ алдына барып ултырҙы.

Айһылыуҙы атаһы, берәй муллаға бирермен, абыстай булыр тип, үҙе, өйҙә генә уҡытып, хәреф танырға, ижекләп булһа ла уҡырға өйрәткәйне. Айһылыу хәҙер үҙенең ошо белеменә лә сикһеҙ шат ине. Әгәр ул бер ни ҙә белмәһә, Иштуғандын хатын уға кем уҡып бирер ине?!

Айһылыу тирләй-бешә:

— Ай-ай-ай-һы-лыу-у... я-я-яра-та-м... бе-бе... бер-р... кү-кү-күкүрергә... йә-йә-н... а-а-та-м... атам...— тип, өҙөп-өҙөп ижекләп, көскә уҡып сыҡты. Унан хатты йөрәгенә баҫып ҡолағында яңғыраған ниндәйҙер ғәжәп бер көй ыңғайына оҙаҡ-оҙаҡ тирбәлеп ултырҙы. Шулай итеп ул хатта атаһының ишектән ҡайтып ингәнен дә тоймай ҡалды. Ә Кәзә мәзин, ҡыҙының ҡулында ҡағыҙ киҫәге күргәс, шунда уҡ шиккә төштө.

— һай, дуңғыҙ! Ниндәй ҡағыҙ ул?

— Ә был ни, мин...— тип бөтөнләй юғалып ҡалды Айһылыу. Атаһына ни әйтергә, хатты ҡайҙа йәшерергә лә белмәне. Кәзә мәзин емтеккә ташланған ҡоҙғон тиҙлеге менән хат-

ты тартып алды ла, ашығыс рәүештә күҙ йөрөтөп сыҡкас, ҡәһәрләнеп усаҡҡа ырғытты:

— Дуңғыҙ!

Хат ҡапыл, яҡты балҡып, елпелдәп янып китте лә, ҡара көл ҡалдырып, шунда уҡ һүнеп тә ҡуйҙы. Уға ҡото осоп теклəп торған Айһылыу:

— Уй, атай, ни эшләүең. был? — тип ҡысҡырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды.—Ниңә яғаһың уны?..

— Икенсе мин һинең бындай хат алғанынды күрәйем! Башынды өҙөрмөн, ишет, дуңғыҙ ҡыҙ!..

Ул арала ҡомғанын шалтыратып, ҡабаланып килеп ингән Бибисара абыстай ҙа, эштең нимәлә икәнен һиҙеп, ирен әрләргә керешеп китте:

— Әйттем мин һиңә, ҡыҙ балаға уҡыу кәрәкмәй, тип. Уҡытма, уҡыу-яҙыуға өйрәтмә, тинем. һүҙемде тотманын,. Ана хәҙер күрҙеңме инде. Ҡыҙ кеше яҙа белһә, егеттәр менән яҙыша башлай. Шуға күрә уны уҡырға-яҙырға өйрәтергә ярамай, тип муллалар белмәй әйткәндәрме ни?..

— Хаты ла кемдән бит әле... Бер йолҡоштан, ерһеҙҙән,— тип көйөндө Кәзә мәзин. «һатыбалдан булһа бер хәл ине»,— тигән уйын көскә ҡысҡырып әйтмәй тотоп ҡалды.

— Мин, Сәрбиямал әхирәткә әйтеп, ул йолҡоштоң кәрәген бирҙерәйем әле...— тип туҙҙы Бибисара абыстай.— Арт һабағын уҡыттырайым әле мин уның!..

Кәзә мәзин менән Бибисара абыстай шулай берећенәнбереће уҙҙырырға тырышып һуҡранды, тиргәнделәр ҙә, ғәҙәттән тыш был хәлде яйлап тикшереү, кәңәшеү өсөн, ян.ы өйгә сығып киттеләр. Айһылыу, йәшле күҙҙәрен усаҡтағы ҡара көлгә төбәп, ҡараңғы өйҙә яңғыҙы ултырып ҡалды.

Иртәгеһенә Кәзә мәзиндәр, Сәрбиямалды саҡырып алып, был хаҡта бик оҙаҡ кәңәшләштёләр. Шул кәңәш буйынса Бибисара абыстай бөгөн Айһылыуҙы алып Сәрбиямалдарға килергә булды. Сөнки улар Айһылыуға әүрәтеп кенә тотмағанда, Иштуғандың ҡатындар һүҙен тыңлап өйҙә ултырмаҫын беләләр, ә Иштуғанға, үҙенең Кәзә мәзиндәр ҡапҡаһын ҡағырлыҡ егет түгеллеген төшөндөрер өсен, бик күп кенә һүҙҙәр һөйләргә кәрәк ине.

Сәрбиямал ҡунаҡтарҙы, ғәҙәтенсә:

— Эй-й, әйҙүк, әхирәт, түрҙән уҙ!.. Ҡалай һәйбәт килеп еттегеҙ әле,— тип, үтә үҙәләнеп ҡаршыланы.— Әйҙә, һылыу, сисен,— тип, хатта Айһылыуҙың арҡаһынан тыпылдатып һөйөп-һөйөп алды.— Бигерәк һәйбәтһең дә инде!.. Тел өҫтөнә һалып ҡылҡылдатып йотоп ҡына ебәрерлекһең,— тип маҡтаны.

— Бабай ҙа сит ауылға китеп барҙы. Өйҙә йәм дә юҡ. Шуға ҡыҙымды алдым да һеҙгә килдем әле,— тип һөйләнде Бибисара абыстай. Үҙе, өшөгән ҡулдарын ыуа-ыуа, ин, үргә, ҡабартып ҡуйылған мамыҡ мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы.

— һәйбәт булған. Шәп иткәнһең, әхирәт. Исмаһам, бер һөйләшеп, серләшеп ултырырбыҙ. Эйе бит, әхирәт...— тип ихлас күңел менән тәтелдәне Сәрбиямал. Хатта уның сыҫкан күҙҙәрендәге ҡорос саҡҡылары ла һүрелеп, күҙ караштары яғымлыланып киткән һымаҡ булды. Иштуған да ҡунаҡтарҙы хөрмәт итеү өсөн Сәрбиямалға ихлас булышып йөрөнө. Мунсаға ла, өйгә лә яғырға етерлек утын ҡырҡты, Үле Эйектән мәке тишеп биреп, Йәнеште алыҫтан һыу ташыуҙан ҡоткарҙы. Сәрбиямал аш, бауырһаҡ бешереп, бәрәмәстәр яһап, мейес янында үҙе ҡайнашты. Ә Бибисара абыстай Сәрбиямалға йөн ойоҡ бәйләп ултырған Емешкә тәмләп-яйлап теге донъя, тамуҡ, ожмах хаҡында үҙенең бөткөһөҙ оҙон, йөрәк өшөткөс ҡурҡыныс әкиәттәрен һөйләне. Ул һәр саҡ шулай осраған берәүгә динде, алланы иҫкә төшөрөп, өгөт-нәсихәт һөйләп китеүҙе үҙенең изге бурысы итеп һанай ине. Ә бөгөн уның был әкиәттәрен тыңларға өйҙә Емештән башҡа эшһеҙ кеше юҡ. Үҙенең ҡыҙы Айһылыу, уның туйҙырып бөткән был әкиәттәрен ишетмәҫ өсөн, бәләкәс яҡҡа, Сәрбиямал бешерен-гән яҡҡа сығып, шәл бәйләргә ултырҙы. Шулай итеп, Бибисара абыстайҙын, ҡарамағында бер аҙға хәтле Емеш кенә ҡалды. Аш-һыу өлгөргәнсе күп кенә ваҡыт үтте. Бибисара абыстай был ваҡыт эсендә Емешкә урлыҡ, тоғоролоҡ, гонаһ, сауап, тамуҡ, ожмах тураһында меңтерлө әкиәт һөйләргә өлгөрҙө.

Был әкиәттәрҙең һәр береһе, һис һүҙһеҙ, кешенец бик кескәй генә яңылышы, бәләкәй генә ярамаған эше өсөн дә теге донъяла мен. төрлө язаға дусар ителәсәге тураһында ниндәйҙер ғәжәп бер кинәнеү, ләззәтләнеү менән тасуирлауға ҡайтып ҡала. Уларҙы тыңлағанда Емештең тыны ҡыҫыла, күҙ алдары ҡараңғылана. Теге донъяла ла рәхәт күреп булмаҫына төшөнөп, өмөтһеҙлеккә бирелә, шулай ҙа әкиәтте бирелеп, йотолоп тыңлай. Ә Бибисара абыстай уның һайын рухланып дауам итә ине.

— Бына ҡиәмәт ҡубыр, ти. Бөтә үлгән кешеләр терелеп сират күпере янына барырҙар, ти. Ураҙа тотҡан, намаҙ уҡыған, ҡорбан салған кешеләр ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер сират күперен, шул ҡорбандарына атланып, саптырып сығыр ҙа китерҙәр, ожмахҡа туп-тура барыр ҙа инерҙәр, ә ҡорбан салмаған кешеләр табандары ҡылысҡа ҡыйылып, урғып ҡайнап яткан тамуҡҡа түкмәсеп төшөр ҙә китерҙәр, ти...

„— Былай булғас, ожмах та байҙар өсөн генәме ни, абыстай ннәй? — тип аптырай Емеш.

— Ниңә улай булһын, бына ғибрәт! — тип асыулана абыстай.

Емештең күҙҙәренә йәш тула. Ул, өмөтһеҙ сәмләнеп:

— Ә ҡорбан салырға малы булмаһа? Эштән бушап, намаҙ уҡырға бара ла алмаһа? Уҡый ҙа белмәһә, ни эшләй?..— тип һорауын дауам итте.— Бына мин дә белмәйем. Бәлки, белер ҙә инем... Уны миңә бер кем дә өйрәтмәй бит! Ниңә алла бөтә кешене лә бай ғына итеп яратманы икән һуң, абыстай инәй?..

Бибисара абыстайҙың йөҙө ҡомһарып китте.

— Кит, йүнһеҙ... Әстәғәфирулла, тиген, иманһыҙ! Алланың эштәре тураһында уйланырға яраймы ни? Гонаһ була бит! Уйлау — шайтан эше ул, белдеңме? Һине, бынауындай итек башындай ғына баланы, шайтан ҡотортоп шундай кафыр һорауҙар бирҙерә инде ул, тәүбә, тәүбә!..

Емеш, «гонаһлы» башын түбән эйеп, тынып ҡала. Уға сикһеҙ ҡурҡыныс. Сөнки ул бер ҡасан да уйламай тора алмай. Унын. уйҙары бер ҡасан да алланын. эштәренә барып тоташмай  ҡалмай.

Оҙаҡламай мунса ла өлгөрҙө. Сәрбиямал менән Бибисара абыстай тәүге мунсаға китте.

— Әйҙә, һөйләшеп алһындар,— тип шыбырланы Бибисара абыстай, әхирәтенә күҙ ҡыҫып.— Мин Айһылыуға һатыбалдан яусы килеүен, ошо арала килешергә тороуыбыҙҙы әйттем. Хәҙер ул быны Иштуғанға әйтер. Унан егетең һатыбал менән ярышырға яраймы, юкмы икәне хаҡында уйлап ҡарар, шулай бит, әхирәт?

— Дөрөҫ. Әйҙә, танауы төшһөн. Юғиһә был Иштуған, атаһы киткәне бирле, бөтөнләй минең донъямда үҙен хужа күреп йөрөй башланы. Хатта кәләш алыу тураһында уйларға ла баҙнат итә бит, оятһыҙ... Аҙғын!..

Улар шулай һөйләшә-кәңәшә мунса инделәр. Йәнеш һаман, мунсаға һыу ташып, тыштан инмәне.

Өйҙә Емеш, Иштуған, Айһылыу ғына ҡалды. Айһылыу, иң оҫта ҡулдар эшләгән мәрмәр һын шикелле матур кәүҙәһен ағартылған балсыҡ стенаға терәп, бешеп тулышҡан сейә шикелле һутлы ирендәрен нығ ҡымтып, кесле ихтыярҙы аңлатҡан аҡыллы, баҙыҡ ҡараштарын ҡайҙалыр алыҫҡа төбәп, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә шәл бәйләп ултыра. Унын ғәжәп нәфис, нәҙек оҙон бармаҡтарының йөрөшөнә күҙ эйәрмәй. Ялтыр ҡорос энәләр наҙлы ғына сыңлаған ыңғайға, унын янында ятҡан дебет йомғаҡ талпына-һелкенә кәмей, кесерәйә, ә шәл арта, уға төшкән гүзәл биҙәктәр бөтөнәйә, асыҡлана бара. Емеш менән Иштуған, берсә Айһылыуҙың һылыу йөҙөнә, берсә унын ҡулдары тыуҙырған сихри матурлыҡҡа һоҡланып, тын да алмай унын ҡаршыһында ултыралар.



Айһылыу ҙа ҡайһы саҡта онотолоп хатта бәйләүҙән туҡтап ҡала. Унын. күҙҙәре Иштуғанға төбәләләр... Улар шулай күҙгә-күҙ ҡарашып оҙаҡ тынып ултыралар. Ахыр Айһылыу оялсан ғына йылмайып ҡуя ла ашығып эшен дауам итә. Йылмайған саҡта унын ике битендә лә, эйәгенең осонда ла кескәй генә соҡорҙар хасил була. Сынаяҡ кеүек аҡ, тигеҙ тештәренән һылыу битенә аҡ нур һибелә. Ошо йылмайыуҙан Сәрбиямалдың көсөргәнешле тынлыҡ, йәки әрләү-тиргәү һеңешкән, көҙге япраҡ кеүек ҡотһоҙ, сирҡаныс өйөнә Бибисара абыстай һөйләгән шәфҡәт фәрештәһе килеп инған кеүек, унын нурҙан яһалған нәфис ҡанаттарынан өй эсенә йылылыҡ, рәхәтлек бөркөлгән кеүек була.

«Э-й, гел генә шулай күңелле булһын ине беҙҙең өй...»— тип уйлана Емеш.

Айһылыу унын арҡаһынан йомшаҡ ҡына һөйә лә, Иштуған яғына шаян ҡараш ташлап:

— Бик нығ текләп ултыраһың. Бәйләргә өйрәнгең киләме әллә, бикәс? — тип һорай.— Бәйләгең килһә, өйрәтәм.

«Бикәс!.. Был һүҙҙе бит еңгәләр генә әйтәләр!.. Айһылыу апай минең еңгәм булырмы икән ни?.. Эй хоҙайым, шундай матур еңгәм булһа!..»

Емеш, ҡаты тулҡынланыуҙан тыны ҡыҫылып, тауышын көскә ҡыҫтап сығарҙы:

— Өйрәнгем килә шул...

Айһылыу уға иҫ киткес яғымлы, һөйкемлө итеп тағы бер йылмайып алды:

— Улай булһа, бар, тиҙ генә берәй йомғаҡ йөн, бер пар ойоҡ энәһе тап. Өйрәнгәндә ойоҡ энәһе менән йөн дә ярай ул.

Емеш быға уҙ күңеленән «бикәс» һүҙен еҫтәне лә, кәзә бәрәсе шикелле ырғып-һикереп, ҙур яҡҡа йүгерҙе.

Иштуған менән Айһылыу бәләкәс яҡта икәүҙән-икәү генә тороп ҡалды. Улар был көтөлмәгән бәхеттән алйып, хатта башта бер һүҙ ҙә өндәшә алмай торҙолар. Йөрәктәренең ярһыуы алһыу нур булып биттәренә бәреп сыҡты. Күҙҙәрен бәхет томаны ҡапланы. Ә ашығырға, һөйләшәһе һүҙҙәрҙе тиҙерәк һөйләшеп ҡалырға кәрәк ине. Ахыр Иштуған үҙен нисек кәрәк шулай ҡулға алды. Ҡыйыу булырға тырышып, Айһылыуҙың һаман бәйләүҙән туҡталмаған ҡулынан йомшаҡ ҡына һыйпап ҡуйҙы.

— Айһылыу, уҡыныңмы?.. Хатты?..

Айһылыу йәшле күҙен уға тебәне:

— Мине һатыбалға бирмәк булалар...

— Яусы килдеме ни?!

— Белмәйем. Әсәйем, килде, ти. Етмәһә, ул үҙе, ниндәй Ҙә булһа бер һылтау табып, беҙҙән сыҡмай ята. Миңә әллә

нисек итеп текләй... Иштуған, ҡурҡам мин унан! Алып ҡас мине!.. Ер ситенә алып ҡас, ишетәһеңме?.. Ҡасайыҡ!..

Иштуған әсе йылмайып ҡуйҙы:

— Йәйәүме?!

Айһылыу ҡапыл уның беләгенән ҡыҫып тотоп алды. Күҙҙәренә йотлоғоп ҡараны:

— Ат тап!.. Егет кеше ат тапмаймы ни?! Беҙҙең бәхет хәҙер ҡыл өҫтөндә генә тора, аңлайһыңмы, Иштуған?!

Емешкә Сәрбиямалдың ҡайҙалыр һандыҡта, төргәктәр араһында, ятҡан нәҙек ойоҡ энәһе менән йөнен табырға ла, тапҡас, уны һорамай-нитмәй алыу өсөн батырлыҡ еткерергә лә еңел булманы. Энә менән йөндө бер алып, бер ҡуйып, оҙаҡ ҡына икеләнеп торҙо ул. Шулай ҙа шәл бәйләргә өйрәнеү теләге ҡурҡыуҙы еңде. Ахыр ул, өлкәндәрсә ҡул һелтәп:

— Йә, туҡмаһа, туҡмар!..— тине лә, кескәй генә бер йомғаҡ йөн менән ойоҡ энәһе тотоп, бәләкәс яҡҡа атылды.

— Бына, еңгә... әй, апай, таптым!..

Айһылыуҙың, һуңғы һүҙенә ни тип яуап ҡайтарырға белмәй аптырап ҡалған Иштуған еңел һулап ҡуйҙы:

«Йәйлабыраҡ уйлағас, кәңәшкәс, бер юлын табырмын бәлки. һәр хәлдә уны ятҡа бирмәм... Бик булмаһа, уны ла, үҙемде лә үлтерермен...»

Айһылыу баяғыса шат, шаян булырға тырышып, Емешкә ҡарап йылмайып, бармаҡ янаған булды.

— һай, шаян!.. Еңгә тип әйтә яҙҙың түгелме һун?

— Еңгә булырға яҙһын...— тине Иштуған. Унан, үҙ һүҙенән үҙе оялып, ҡып-ҡыҙыл булып китте. Емеш оялышынан да, ҡыуанысынан да ҡулындағы йомғағын ҡайҙа ҡуйырға белмәне.

— Шулай булһын ине лә бит...— тине Айһылыу, ауыр ғына көрһөнөп.— Әйҙә, ултыр, бикәс, өйрәтәйем.

Уҡың күбәләк ҡанаттары шикелле елпелдәп торған оҙон ҡуйы керпектәренең осонда, сәскә өҫтөнә ҡунған иртәнге ысыҡ кеүек, йылтыр тамсылар йымылдап тора. Айһылыуҙың янына уҡ килеп, урындыҡ ситендә баҫып торған Иштуғандың күҙҙәрендә лә ҡаты тыныслыҡ сағыла ине хәҙер. Айһылыу, Емештең ғәжәпһенеп үҙенә текләп тороуынан уңайһыҙланған һымаҡ, күҙҙәрен ҡапыл ғына ебәк менән сигелгән аҡ батист яулыҡ менән һөртөп алды. Унан тағы баяғыса матур, һөйкөмлө йылмайып:

— Ҡана, бикәс, йөнөңдө бир. Үҙең бынауында яныма ғына ултыр. Мин һиңә шәлдең ситен, телдәрен нисек бәйләргә өйрәтермен,— тине.— Уртаһын һин уның былай ҙа беләрһең...

Был һүҙҙәрҙән һун Емештең генә түгел, Иштуғандың да күңеле асылып, йөҙө яҡтырып киткән һымаҡ булды. Ул да, кәзәкейенең түш кеҫәһенән сигелгән ҡулъяулыҡ алып, үҙ һүҙләләнеп бүлтәйеп торған ҡалын ирендәренә, бейек, көмрө танауына тейҙереп, оҙаҡ ҡына еҫкәп торҙо ла, тағы Айһылыуҙың ҡаршыһына барып ултырҙы.

«Моғайын, ағайыма был матур ҡулъяулыҡты Айһылыу апай биргәндер...» — тип, ҡыуанып уйланды Емеш. Ул еткән ҡыҙҙарҙың үҙҙәренең һөйгән егеттәренә ҡулъяулыҡ, янсыҡ сигеп биреүҙәрен, ә егеттәрҙең уларға көмөш йәки баҡыр аҡсанан һуғылған балдаҡ йәки хушбый, көҙгө, еҫле һабын бүләк итеүҙәрен күптән ишетеп белә ине. Шуға күрә, хәҙер ағаһы өсөн хатта борсолоп та ҡуйҙы:

«Ағайым, бахыр, Айһылыу апайға нимә генә биргән булды икән? һабын йәки еҫле май алырға уның аҡсаһы юҡ бит... Исмаһам, башҡалар шикелле балдаҡ һуға ла белмәй бит ул...»

Ләкин Айһылыу уға был хаҡта оҙаҡ уйланырға ирек бирмәне. Уның арыҡ яурынынан иркә генә ҡосаҡлап, үҙенә яҡынырaҡ тартып ултыртты ла, шәл ситенең беренсе күҙҙәрен нисек алырға, нисек башларға, ҡайҙа күҙ арттырырға, ҡайҙа кәметергә кәрәклекте ентекләп өйрәтергә тотондо.

Емеш уның өйрәтеүен бер әйтеүҙә үк күңеленә һеңдерә генә барҙы. Быңаса ла ойоҡ, шарф кеүек әйберҙәрҙе күп бәйләгән Емешкә шәл бәйләргә өйрәнеү ауыр булманы. Ул шунда уҡ энәләрҙе етеҙ, ышаныслы йөрөтөп, шәл ситен бәйләп алып та китте.

Емештең файҙаһы тейерҙәй эшкә өйрәнеүен күргәс, Сәрбиямал һорауһыҙ энә менән йөнгә тейгәне өсөн асыуланманы. Киреһенсә:

— Ярай, һәйбәт булған. Мин һиңә кешеләрҙән йөн, дебет апҡайтып торормон, һин бәйләрһең. Әҙ булһа ла, тамаҡ хаҡынды ҡайтарырһың,— тип кинәнде генә. Емештең ул көндәге ҡыуанысының иге-сиге булманы. «Ул шәл бәйләй белә!.. Бынан ары ул үҙ тамағына үҙе эшләп табасаҡ!..»

Был бәхетле көн, болот аҫтынан балҡып ҡалған көҙгө ҡояш кеүек, күҙ асып йомғансы уҙып та китте. Кискә табан ҡунаҡтар ҡайтырға йыйындылар. Аҙаҡҡы тапҡыр күмәкләп сәй эсеп ултырғанда, Бибисара абыстай, алдан ҡорған план буйынса, Сәрбиямалға Айһылыуҙы ошо арала эйәле-башлы итергә тороуҙары тураһында бик кинәнеп, шапырынып һөйләргә кереште.

— Собхан старшиналарҙан был арала көн дә яусы килә әле, әхирәт. Айһылыуҙы һатыбалға һоратып йөҙәтәләр бит, әхирәт,— тип ярһый-ҡабара һөйләне ул.— Көн дә килә... көн дә...

— Аһа, ысынмы? Хәйерле булһын, ҡалай һәйбәт булған!

•— Әйтмә лә, әхирәт, шул тиклем ҙур дәрәжәле егеттең

беҙҙең бәләкәс кенә ҡыҙыҡайға күҙе төшкән дә ҡуйғансы!.. Унһыҙ йәшәй алмайым. Әгәр ҙә Айһылыуҙы алып бирмәһәгеҙ, был донъяла йәшәмәйем, тип әйтә ти хатта...

— Китсе-китсе, әхирәт, ҡара һин уны!.. Күктән көткәнде хоҙай ерҙән биргән дә ҡуйған да баһа!..

— Әйтмә лә, әхирәт. Бына, шулай итеп, был арала көн дә яусы ебәрә шул. Аллаға тапшырып, беҙ ҙә тәүәккәлләргә булдыҡ инде.

— Бик һәйбәт булған, бик шәп.

— Атаһына ла, минә лә егет бик оҡшай. Инша алла, ҡыҙыбыҙға ла оҡшар тигән өмөтөбөҙ ҙур.

Бибисара абыстай, һәр һүҙ артынан, эре генә тамаҡ ҡырып, ҙур күкрәген кирә биреп ҡуйҙы. Сәрбиямал да:

— Атаҡ, ат-аҡ, шундай егет тә оҡшамағас?! Оҡшар,— тип күтәреп алды. Унан бик ихласлап: — Мал тиһәң, малы, дан тиһәң, даны, төҫ тиһәң, төҫө, һын тиһәң, һыны бар. Тирәк кеүек егет бит ул һатыбал. Уҡымышлылығы хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Бисер булырлыҡ егет,— тип теҙеп сыҡты.— Хоҙай мөхәббәттәрен генә бирһен.

Бибисара абыстай, был күтәрмәләүгә кәйефләнеп:

— Шулай булһын. Амин, әхирәт. Ауыҙында бал да май,— тип кинәнеп ултырҙы. Унан Иштуған яғына ҡырын күҙ ташлап алды ла, ҡаты ғына итеп: — һатыбал әйтә, ти, кем дә кем, берәй бүтән егет, Айһылыу менән минен. араға твшөргә уйлаһа, үлеме минең ҡулдан буласаҡ, тип әйтә, ти, хатта!

— Китсе, ысынлапмы, абау хоҙайым! — тип ҡурҡып киткән булды Сәрбиямал.— Булыр, булыр. Харап дыуамал егет бит ул. Леүәлбиры ла бар тиҙәр шикелле уның.

— Барҙыр, барҙыр. Бай улында, старшина улында ни нәмә генә булмаҫ тиһең?.. Ярай, булғаны яҡшы. Юҡ-бар егеттәргә ҡыҙыбыҙ тирәһендә сыуалмаҫҡа яҡшы булыр.

— Эй, кем баҙнат итһен, әхирәт? һатыбал менән ярышыр егет бармы ни, әхирәт? Юҡ, юҡ! Ҡайҙа ул!..

Өлкәндәрҙең сәй эскәнен ҡарап мейес буйында һөйәлеп торған Емештең йөрәге өрөккән тай шикелле дулап китте.

«Нисек, ни өсөн һатыбалға?.. Ул бит минең ағайымды ярата!.. Ағайым да... Айһылыу апай мине «бикәс» ти ҙә баһа ул!..»

Емеш, аптырау һәм йәберһенеүҙән ни эшләргә белмәй, берсә Айһылыуға, берсә Иштуғанға ҡараны. Улар икеһе лә баштарын түбән баҫып, күҙҙәрен керпек аҫтарына йәшереп тик ултыралар. Уларға был һүҙҙәр нисек тәьҫир иткәнен дә, был минутта уларҙың нимә уйлауҙарын да белеп булмай. Юҡ, юҡ, барыбер билдәле. Был һүҙҙәрҙе ишетеүе уларға ла еңел түгел. Ана, Айһылыуҙың оҙон керпектәренең осонда, тап баяғы кеүек, ынйылай йәш бөрсөгө төшөргә ҡурҡҡан һымаҡ



дерелдәп тора. Иштуған ағаһының да төҫе ҡасҡан. Уның апаҡ булып, ағарынып киткән битендә ян.ы ғына күпереп сыҡҡан һаҡал-мыйығы айырыуса ҡара булып, айырылып күренә. Сынаяҡ аҫтын ултырткан оҙон, арыҡ бармаҡтары әкрен генә ҡалтыраған һымаҡ булалар. Ә Бибисара абыстай менән Сәрбиямал сатнап торған ғәмһеҙ, ҡоро тауыш менән> береһенән-береһе уҙҙырып, һатыбалдарҙың нисә өйөр йылкыһы, нисә көтөү һыйыры, нисә табор һарығы булыуы, күпме ҡалым түләйәсәге, кейәү бүләге итеп Кәзә мәзингә бүре тун, Бибисара абыстайға төлкө тун бирергә әҙерләнеүе һәм башҡалар тураһында бәйнә-бәйнә теҙеп һөйләп сыҡтылар.

«Ниңә Иштуған ағайым бер һүҙ ҙә әйтмәй икән, исмаһам? Айһылыуҙы мин яратам бит уны! — тиһә лә ҡуйһа ни була икән?.. Айһылыу апай ҙа өндәшмәй. Бына Таһир менән Зөһрә бит улай булмаған... Аҡтыҡ һулыштарына тиклем тартышҡандар. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу ҙа шулай... Әллә әкиәттә, кнтапта ғына кеше ҡыйыу буламы икән?» — тип өҙгөләнеп, бөтә йөрәктән көйөнөп уйланды Емеш. Ләкин уның уйынан бер ни ҙә уҙгәрмәне. Сәй эсеп бөткәс, Бибисара абыстай, ҡыҙына инде бер кем менән бер ауыҙ һүҙ ҙә һейләшергә бирмәй, үҙ янынан ебәрмәй ашыҡтырып алып ҡайтып китте. Сәрбиямал менән Иштуған уларҙы ҡапҡа төбөнә хәтле оҙата сыҡты. Емеш, улар Собхан старшиналар тыҡрығынан уҙып киткәнсе, тәҙрәнән ҡарап торҙо. Улар һепертмә буран эсенә инеп, унын алыҫтан насар күрә торған күҙҙәренән юғалғас ҡына, бәләкәс яҡҡа сығып, бәйләү эшенә тотондо.

Ә Иштуған шул сығыуҙан төн уртаһына тиклем өйгә ҡайтманы. Улар Әхәт менән икәүләп, туңып, ҡалтырап бөткәнсе урамда, буран аҫтында йөрөнөләр. Иштуған янып-көйөп дуҫына, әгәр ошо арала ниндәй ҙә булһа берәй сара күрмәгәндә Айһылыуҙы һатыбалға бирәсәктәрен, ул саҡта үҙенең донъяла йәшәмәйәсәген һейләне.

— Их, әгәр атым булһа, Айһылыуҙы алыр ҙа ҡасыр инем. Их, ат, ат!.. Ҡайҙан ғына табырға һуң уны?.. Ниндәй генә егеттәрҙе таһылһыҙ итмәй был атһыҙлыҡ!

Әхәт дуҫына:

— Ҡыҙға иҫ китеү — ахмаҡлыҡ,— тип төшәндөрергә тырышты.— Мин һис тә улай булмам. Ҡыҙҙарҙы мин яратмайым,— тине.

— һин әле яратып ҡарамағанға ғына шулай һөйләй алаһың,— тине Иштуған.— Нисегерәк тә иҫен, китер әле... күрербеҙ.

— Етмәһә, кемгә иҫең китә бит әле: Кәзә мәзин ҡыҙына,— тип асыуланды Әхәт.— Бибисара абыстай һиңә бирәме ни уны?

— Ҡарап ҡарарбыҙ... Айһылыу, бәлки, атаһын ыңғайлатыр?

— Ҡарап тораһы юҡ. Бибисара абыстай ул ҡыҙын йә байға, йә муллаға бирергә әҙерләй. Ә Кәзә мәзин унының һүҙенән сыҡмаясаҡ.

Иштуған быға ҡаршы һүҙ тапмай. Сөнки ул да Кәзә мәзиндең үҙ һүҙе, үҙ тауышы юҡлығын һәм булмаҫын белә. Шәкерт сағында уҡ маллы-барлы бай ҡыҙға, ошо Бибисара абыстайға өйләнгән көндән алып үҙ тауышын, үҙ һүҙен юғалтҡан кеше ул. Хатта аҙанды үҙ тауышы менән түгел, әаратаға бото ҡыҫылған кәзә тауышы менән әйтеп, ғүмергә үҙенен, хас исемен юғалтҡан, тик «Кәзә мәзин» генә булып ҡалған бит ул. Шулай булғас, унан нимә көтәһең?

— һиңә Айһылыуҙы онотоуҙан башҡа сара юҡ,— ти Әхәт, уйланып.

— Айһылыуҙан башҡа миңә йәшәү юҡ,— тип яуап ҡайтара уға Иштуған. Бынан һуң улар һүҙһеҙ, һәр ҡайһыһы үҙенсә уйланып, урамды тағы бер-ике ураталар ҙа өйҙәренә ҡайталар.

## XII

Собхан старшинаның улы һатыбал башта Ғаббас мулла мәҙрәсәһендә, һуңынан Ташһарайҙа рус-башҡорт училищеһында ноҡотлоғо, ялҡаулығы арҡаһында һәр класта икешәр йыл ултырып уҡый торғас, балалыҡ ҡына түгел, үҫмерлек, егетлек сағының уҙып китеүен тоймай ҙа ҡалды. Уның иптәштәре әллә ҡасан ике-өс бала атаһы булып бөтҡәйнеләр инде. Ә ул һаман Иштуған кеүек йәш егеттәр менән ярышып ҡыҙҙар артынан саба. Ата-әсәһенең өйлән тигән һүҙенә:

— Өлгөрөрбөҙ әле. Кәләш ҡасмаҫ,— тип кенә яуап ҡайтара ине.

Бибисара абыстайҙын. маҡтаныуы ғына ҡалды. һатыбалдан яусы килмәне. һатыбал был өмөттө бер һүндереп, бер тоҡандырып һаман улар тирәһендә сыуалды. Айһылыу менән Иштуған да, уның юрый ғына сыуалыуына тамам ышанып, тынысланды. Өмөткә бай йәшлек уларҙа ҡасан да булһа бер ҡауышыу теләген ҡанатландырҙы. Шулай бер йыл ваҡыт уҙып китте. Был ваҡыт эсендә әйләнә-тирәлә тормош та, кешеләр ҙә үҙгәрә, танымаҫлыҡҡа әйләнә барҙы. Ил сигендә барған ҡаты һуғыштарҙың, ил өҫтөнә төшкән ауыр бөлгөнлөктәрҙең кешеләргә шауҡымы ҙурайҙы. Фронт хатТары, йыр, бәйеттәре менән ауылға һәр көн дары, һөрөм, ҡан еҫтәре эйәреп килә. Ҡайғы ҡошо, ҡара ҡанатын аяуһыҙ елпеп, әле бер өйҙөң, әле икенсе өйҙөң түбәһенә ҡуна. Әле бер, әле икенсе ғаиләгә «вафат булды», «шәһит үлде», «әсир төшкән» йәки «ҡаты яраланды» тигән ҡыҫҡа, ләкин йөрәккә мәңге төҙөлмәҫ һағыш һалған хәбәр килеп тора. Кешеләр ҡайғылыраҡҡа, асыулыраҡҡа әйләнә бара. һуғышты ла, һуғыш асыусыларҙы ла асынып әрләүселәр, ҡарғаусылар артҡандан-арта. Ә ҡаланан килеп етеп торған «буржуй», «забастовка», «революция» кеүек өр-яңы һүҙҙәр был бөркөүлектә тағы ла ҡуйыртып, ауылды тағы ла тулҡындырып ебәрә. һәр кем ниҙер көтә. Нимәгәлер әҙерләнә һымаҡ. Батшалыҡтың, байлыҡтын нигеҙе ҡаҡшай барғаны көндән-көн асығыраҡ үҙен һиҙҙерә

«Иәшәп ҡалырға кәрәк,— тип ҡарар итә һатыбал.— Шаярып йөрөү етер». һәм ауылда һатыбалдан Айһылыуға яусы килеүе тураһында тағы хәбәр йөрөй башлай. Иштуған менән Айһылыуҙың хәсрәте тағы артты. Тап шул көндәрҙә Сәрбиямалдын, ҡаланан юлы уңып, кәйефе яҡшырып ҡайтҡан бер сағында, иртүк уларға Ҡарасәс әбей килеп инде.

Сәрбиямал уны, ғәҙәт буйынса, яҡты йөҙ, ихлас күңел менән ҡаршы алды.

— Әйҙүк, еңгә, түрҙән уҙ. Килеп бик һәйбәт иткәнһең әле, еңгә,— тип илгәҙәкләнде.— Әле яңы ғына балаларға, ниңә, исмаһам, Ҡарасәс еңгәм килеп сыҡмай икән? Эс бошҡанда һөйләшеп, күңел асылып ҡала торғайны, тип кенә һөйләп алғайным әле,— тип, арттырып та ебәрҙе.

Ҡарасәс әбей, ишек төбөндә таяғы менән калуш быймаһын ҡалдырып, түргә уҙҙы. Емеш уның аҫтына мендәр алып килеп һалды.

— Йомшаҡҡа ултыр, инәй.

— Рәхмәт, ҡыҙым, ҙур үҫ,— тине Ҡарасәс әбей.— Йә, хуш! — тип һуҙып, битен, ҡаштарын, күҙҙәрен һыйпап ҡуйҙы.— Йә, ни хәлдә генә ятаһығыҙ, балалар? һин, Сәрбиямал, һеҙ, ҡыҙҙарым, шәп кенә тораһығыҙмы? Мал-тыуар, ҡошҡорт именме? Байгилде кейәүҙән хат-хәбәр бармы? Иштуған ҡайҙа? — тип берәм-берәм һорашып сыҡты.— Туҡта, мин әйтәм, Сәрбиямалға барып, донъя хәлдәрен белеп, ҡала күстәнәсе менән сәй эсеп ҡайтайым, тип килеп сыҡтым әле,— тип һөйләнде.

Сәрбиямал, өтәләнеп:

— Эй, һүҙгә мауығып, самауыр ҡуйырға ла онотоп торам, иҫәр. Йәнеш, ҡыҙым, тиҙ генә самауыр ҡайнатып ебәр! — тип ҡысҡырҙы.

Ул сит кеше барҙа балаларға гел шулай иркә тауыш менән «ҡыҙым» тип кенә ендәшә, Сәрбиямалды белмәгән кеше уны етем балаларға шәфҡәтле әсә булыуҙа өлгө күреп, маҡтап китә. Ләкин Ҡарасәс әбейҙе ундай тышҡы ялтырауыҡ менән генә ышандырыуы ауыр. Быны Сәрбиямал үҙе лә аңлай. Шулай ҙа унын. алдында тағы ла татлы теллерәк, иркә тауышлыраҡ булып китә ине.

— Ярар, Сәрбиямал, ашыҡтырма, мин яйлап ултырмаға килдем,— тине Ҡарасәс әбей.— Ашығыс эшем юҡ.

Оҙаҡламай Йәнеш урғып ҡайнаған еҙ самауырҙы, елтерәтеп, йөҙлөк буйына еҙ батмусҡа алып килеп ултыртты. Емеш ашъяулыҡ алып килеп түшәне. Эре биҙәкле ҡара батмусҡа сынаяҡтар теҙҙе. Сәрбиямал ҡунаҡ килгәндә генә тотона торған күк биҙәкле сәйнүгенә йөҙҙә биш номерлы ҡытай сәйен, Ҡарасәс әбейгә күрһәтә биреп, балғалаҡ тултырып һалды ла, гөберләтеп һыу ағыҙып, бороҡоп ҡайнап торған самауыр башына ултыртты. Һандыҡ төбенән шәкәр, монпаси, шкафтан ҡаҡ, аҡ май, һары май, хатта кибеп беткән ал төҫлө перәник тә табып сығарҙы. Мамыҡ мендәр кеүек күпереп торған Ырымбур ҡаласын да йәлләмәй турап ташланы. Унан, сит кеше килгәндә генә һөйләшә торған баяғы татлы тауышы менән:

— Ҡыҙҙарым, әйҙә, һеҙ ҙә ултырығыҙ — тине.

Емеш менән Йәнеш, ашауҙан бигерәк Ҡарасәс әбейҙең һөйләйәсәк һүҙен тыңларға мөмкинлек тыуғанға ҡыуанып, сәй янына килделәр.

Сәрбиямал, ҡунаҡ менән үҙенә ҡаймаҡ һалып, ҡаты итеп сәй яһап ултыртты.

— Эҫеләй генә эсеп ебәрәйек, еңгә.

Ҡунаҡ килеү хермәтенә ҡыҙҙарҙы ла онотманы. Өҫтө алынған һөттө һалып булһа ла, уларға ла берәр сынаяҡ сәй яһап бирҙе.

— Эсегеҙ, ҡыҙыҡайҙарым. Ҡарынығыҙ асҡандыр.

Унан, үҙенең етем балаларға шул тиклем шәфҡәтле булыуына үҙе һоҡланып, Ҡарасәс әбейгә әҙәпле генә йылмайып ҡарап алды. Йәнәһе, ул быны күрәме икән?.. Шулай ҙа ул үҙенең мәрхәмәтлелеген аҙағына хәтле еткереү ниәте менән булһа кәрәк, ҡыҙҙар өсөн махсус бешерелә торған екһендергес тары икмәген күрһәтмәй, улар алдына ашъяулыҡта ятаята ҡатып, күгәреп бөткән бойҙай икмәге һыныҡтарын өйөп һалды, хатта балғалаҡ осона элеп, турғай суҡышындай аҡ май ҙа алып бирҙе.

— Ашағыҙ, туйығыҙ, балаҡайҙарым.

Ахыр, Емештең ни хәтле асыҡһа ла кеше һынығын ашамай торған «яуыз» ғәҙәтен иҫенә төшөрөп, уға хатта бер телем ҡалас та ҡырҡып ырғытты. Йәнеш, майҙы иң аҙаҡҡы ҡабым һынығына ҡушып, иҫ киткес ләззәт менән ҡабып ебәргәс, тағы ла бирмәҫме икән, тип ултыра бирһә лә, Сәрбиямалдың асыулы ҡарашын күреп, өмөт өҙөп, сәй янынан торҙо. Ә Емеш Сәрбиямал аҙаҡ ырғытҡан бер телем ҡалас менән бер сынаяҡ сәй эскәс, теге майҙы усында ыуалап, ярылып бөткән ҡулдарына, битенә, ирендәренә һөрттө лә, көләмһәрәп:



— Май ашаны икән ти,— тип тороп китте.

Емештең һуңғы һүҙе, Сәрбиямалдын, кеше килгән саҡта балаларға һәйбәт, йомшаҡ булып ҡыланыу ғәҙәтен онотторооп, эште боҙоп ҡуя яҙҙы.

— Бына, ишеттеңме, еңгә? — тип ҡуйҙы ул, үҙенең ғәҙәттәге ҡоро, тимер тауышы менән,— күрҙеңме?! Боронғолар «етем быҙау аҫраһаң, ауыҙын. тулы һый булыр. Етем бала аҫраһаң, алдың тулы ҡый булыр», тип белмәй әйтмәгәндәр шул. Кеше ҡалдығы, тип һыныҡ икмәк ашамай ул ҡойто!.. Май бирһәң, гел шулай битенә һылап китә. Шулай яуыз бына ошо Емеш тигәне. Өлкәндәре ише генә түгел. Эсе тулы этлек кенә, яуыздың!..

Ҡарасәс әбей унын, зарын тауыш-тынһыҙ ғына тыңлап бөттө лә, нисектер, һоҡланған тауыш менән:

— Ә үҙе харап һылыу ҡыҙ булмаҡсы был Гөлйемеш,— тип, бөтөнләй көтөлмәгән һүҙ әйтеп ҡуйҙы.— Ул бөгөлөп торған оҙон ҡара керпектәр тиһеңме, түм-түңәрәк һөрмәле ҡара күҙҙәр тиһеңме, мәрйен кеүек теҙелеп киткән ваҡ ҡына тығыҙ тештәр тиһеңме... «һирәк тешле кешенен. ауыҙында һүҙ ятмай. Тығыҙ тешленен, ауыҙынан һүҙ сыҡмай» тип боронғолар белеп әйткәндәр шул. Унын, Гөлйемеште әйтәм, донъяһынын. бөтә әсе-сөсөһөнә бирешмәй, өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡаршы тора торған кеше булаһы әле үк күренеп тора. Ул инде, хоҙай ҡушып, үҫеп алһа, һөйләп тормаҫ, эшләр... Собханалла, килмәгән бер ере юк, балаҡайҙың!.. Хоҙай биргәс бирә икән бәндәһенә... Күҙ ҡараштары бигерәк аҡыллы, бигерәк моңло бит әле... Бәхетһеҙ йәки ғүмерһеҙ генә булмаһа ярар ине... Алла үҙе һаҡлаһын инде баланы...

Сәрбиямал: «Ғүмерһеҙ генә булһа, бик ярар ине»,— тигән уйын саҡ ҡына ҡыҫҡырып әйтмәй ҡалды. Ә Ҡарасәс әбей бер ни аңламаған кеүек Емеште маҡтауын дауам итте:

— Сәстәре һуң!.. Сәстәрен әйтәм, ҡара ебәк дүнгәләктәрҙән теҙеп яһалғанмы ни?! Сөмөкәй урындағы тулҡын кеүек бетөрөлөп ята бит!.. Биткәйҙәре лә ҡойоп ҡуйған кеүек йоҡа ғына. Ҡаштарын әйт әле һин унын... Нисек ҡыйылып, дуғаланып торалар бит... Собханалла, килмәгән ере юк шул... Әле бит бала ғына. Ҡыҙ булып еткәс, нисек булыр, күрерһең!..

Был һүҙҙәрҙән һуң ул зәңгәр күҙҙәрен Сәрбиямалдан аша алыҫҡа төбәп, ҡыуаныслы йылмайып оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Унан:

— Әсәһе мәрхүм, шулай һылыу булғандыр, моғайын,— тип һығымта яһап ҡуйҙы.

Ҡарасәс әбейҙең шулай тоҡ-томалға Емеште маҡтап алып китеүе Сәрбиямалды түҙемдән сығарҙы. Ул үҙе лә аңғармаҫтан:

— Атаҡ, еңгә, ҡайҙан ул әсәһенә оҡшаһын, ти,— тип ҡыс-

ҡырып уҡ ебәргәнен тоймай ҙа ҡалды.— Әсәһе ни унын харап ямаҡ, сиркәтәү генә бер нәмә булған тиҙәр ҙә баһа... Был ни, берәй сиғандан, уйнаштан тыуғандыр күп булһа. ТөҫөГ лә, холҡо ла төптә сиған бит унын! Шундай һауалы, ярлы тәкәббер... Ай-һай-һай, хоҙайым күрһәтмәһен!.. Яуызлыҡта ла бөтәһенән дә үткәрә. Күреп тораһың бит, төҫө менән дә бер туғанына ла оҡшамаған!..

— Ҡуй, Сәрбиямал, улай тимә. Гүрҙәге кешегә яла яҡма,— тип ҡырт киҫеп туктатты Ҡарасәс әбей уны.— Сәғүрәне бөтә белгән кешеләр Гөлйемеште әсәһенә оҡшаған тип һөйләйҙәр. Төҫө менән дә, зирәклеге менән дә төптә әсәһе булған да ҡуйған, тиҙәр.

Ҡарасәс әбейҙен. һүҙен бәләкәс яҡтан, бүлмә таҡтаһы аша ишетеп ултырған Емештең ҡыуанысы сиктән ашты. Бығаса, ул үҙенең сиғанға оҡшауы, Сәрбиямалдын, әйләнгән һайын үҙен сиған балаһы тип битәрләүе өсөн ҡайғыра, кәмһенә, хоҙайҙан үҙен бер төн эсендә атаһы йәки Иштуған ағаһы төҫлөгә әйләндереп ҡуйыуҙы һороп төндәр буйы йоҡламай сыҡҡан саҡтары күп була ине. Ә хәҙер бына Ҡарасәс инәһе:

— Гөлйемеш әсәһенә оҡшаған! — тине. Ә Емешкә бынан да ҙур маҡтауҙың кәрәге юҡ ине.

«Әсәйемә оҡшағанмын мин!.. Сиғанға түгел!..»— тип ярһыны унын йөрәге. Етмәһә, Ҡарасәс әбей уныщ исемен дә башҡалар шикелле «Емеш» тип ҡыҫҡартмай, «Гөлйемеш» тип тулыһынса әйтеп һөйләүе менән дә уны бер башҡа күтәреп ебәрҙе.

Сәрбиямал ҡарагөйҙө. Унын йөҙөнән яһалма яғымлылығы юғалып, күҙҙәрендәге ҡорос саткылары күбәләй күперенеп китте. Ул, тыны быуылып, бик оҙаҡ өндәшә алмай ултырҙы. Ә Ҡарасәс әбей, быны күрмәгән дә белмәгән һымаҡ, баҫалҡы, тыйнаҡ ҡына тауыш менән, ашыҡмай-ҡабаланмай һөйләүен дауам итте. Унын тауышы мул һыулы тәрән йылғанын, ағышын хәтерләтә ине.

— Матурлыҡ бик һәйбәт нәмә бит ул, Сәрбиямал... һай-й! Матурлыҡ!.. Мин үҙем дә йәш саҡта матур ғына булдым. Эйе, ысын. Хәҙер уны һөйләһәң, әҙәм ышанмаҫ, көлкө кеүек тойолор... «Ҡыҙҙар бетәһе лә матур була, был ямаҡ бисәләр ҡайҙан килеп сығалар икән һуң!» — тип аптыраған ти бит бер егет. Дөрөҫ тә шул. Ҡайһы арала китеп күҙҙән юғала һуң ул матур саҡтар?.. һай-й-й, йәш саҡтар!.. һай, сәскә кеүек матур саҡтар!..

Эйе, матур ғына түгел, бик сая ла инем мин дә йәшлектә...

Ҡыҙ саҡта ла, хәҙер ҙә ул тиклем матурлыҡ менән маҡтаныр рәте булмаған Сәрбиямалға, Ҡарасәс әбей был һүҙҙәрҙе үс иткән кеүек, унын яраһына тоҙ һибер всөн ҡарышып



һөйләй кеүек тойолдо. Ул бер нисә тапҡыр ҡунағына ҡаты-•ҡаты ҡарап та алды. Ләкин Ҡарасәс әбей һаман уға ҡырын күҙ ҙә һалмай, унан аша ҡайҙалыр сиккә, алыҫҡа, Сәрбиямал күрмәгән, һәм бер ҡасан да күрмәйәсәк, ғәжәп серле, мауыҡтырғыс, билдәһеҙ гүзәллеккә текләп, иҫ киткес мөһәбәт, ғорур булып, ниндәйҙер эске нур менән яҡтырып ултыра бирҙе.

«Был нимә әйтмәксе була? Нимәгә алып барып сығырға маташа? Аңламайым...— тип, тағы ла ҡатыраҡ аптырап ҡуя Сәрбиямал.— Тиктәҫкә генә килмәгәндер... һуҙғылай-борғолай алыҫтан уратып нимәгәлер һуктырырға маташалыр был...»

Ҡарасәс әбейҙең үҙенен, уй-фекерен туралап ҡына әйтмәй, әллә ҡайҙан, бик алыҫтан, тау юлы кеүек бормалы, һикәлтәле бөгәлөштәрҙән әйләндереп йөрөтөп килтереп сығара торған ғәҙәте унын йәнен биҙҙерә. Ә Емеш, киреһенсә, Ҡарасәс әбейҙең шулай һөйләүен ярата. Бында уға ниндәйҙер сер, тәрән мәғәнә бар һымаҡ тойола. Ҡарасәс әбейҙең һүҙҙәре, Бибисара абыстайҙың дини әкиәттәре шикелле, күңелдә ауыр, шөбһәле тойғо уятмауы, киреһенсә, күҙ алдын яҡтыртып, нисектер, күңелде еңеләйтеп, донъяла йәшәүе ул хәтлем үк ауыр ҙа, ҡурҡыныс та түгел икән... тигән һымаҡ яҡты уйҙар уятыуы менән дә оҡшай Емешкә. Сөнки Ҡарасәс әбей иң фажиғәле, ауыр хәлдәрҙе лә үҙенә генә хас өмөтлө, яҡты буяуға буяп һөйләй белә.

«Йә, һөйләй башлаһын ине инде... Нимә һөйләр икән инәйем был килеүҙә...» — тип сабырһыҙлана Емеш. Ә Ҡарасәс әбей беҙ кеүек осло тубығын сәнсеп, тау түбәненә ығышҡан ҡарт ҡайын төпһәһе шикелле суҡайып түрҙә, мендәр өҫтөндә тыныс ҡына ултыра. Йырларға әҙерләнгән йырсы шикелле һирәк-һаяҡ тамаҡ ҡырғылап, тарҡау ғына йылмайып та ала. Күк тамырҙары ташып торған тарамыш бармаҡтары саҡ ҡына дерелдәп, үҙенен, таҫмалар, уҡалар баҫып эшләнгән күлдәк иҙеүен, ҡарҙай аҡ таҫтар ситтәрен һыпырғылап, төҙәткеләп үтәләр. Әле булһа йәшлек сағыулығын юғалтмаған асыҡ зәңгәр күҙҙәре, инде бик күп ваҡ, тәрән һырҙар менән сыйылғыланып, сырышып бөткән ҡаҡса йөҙөнә берсә ғәжәп йылы, һөйкөмле нур бөркөп, тын ғына баҙлап яналар, берсә ҡыйыу йылтырап тоҡанып китәләр. Был саҡта ул һуңғы осошҡа әҙерләнгән ҡарт инә бөркөттө күҙ алдына килтерә.

Был кен ул, ғәҙәтенсә, «Ғәлиуллам, Сәмиғуллам, Тимербайым...» — тип, оҙон-оҙаҡ үҙенең тормош юлын да һөйләп ултырҙы. Ҡарасәс әбей ҙә, Сәрбиямал кеүек ҡайһы бер һүҙҙәргә, бигерәк тә яҡындарының исемен әйткәндә, «йым», «ем» ялғауҙарын ҡушып һөйләргә ярата. Ләкин был ялғауҙарҙы ул Сәрбиямалҫа «кәзәм», өйөм», «икмәгем» тип милкенә бәйләп түгел, ә яратыу, үҙ итеүҙе аңлатыу өсөн генә ҡуллана.

Сәрбиямалдың бик үк зур булмаған еҙ самауыры берике бушап, ҡайтанан өҫтәлде. Яңыртылған самауырҙы башлап, Ҡарасәс әбей шәкәрҙе ҡыҫҡыс менән борсаҡтай ғына итеп ваҡлап ҡаба-ҡаба, ашыҡмай ғына, бер рәттән өс-дүрт сынаяҡ сәй эсеп ебәрҙе. Унан тағы:

— һай-й-й, ғүмер тигәнең...— тип, көйлө һуҙып ҡуйҙы.— Бына шулай күпте күргән баш был, Сәрбиямал... Юҡҡа ғына «Сая Ҡарасәс»тән «Сәйхур Ҡарасәокә әйләнмәгән был баш...

Емеш менән Йәнеш Ҡарасәс әбейҙең һаман мауыҡтырғысыраҡ була барған хикәйәһен бүлмә таҡтаһы аша һаман кинәнеп тыңлап ултыралар. Тик Сәрбиямал ғына:

«Бының һүҙенең бөгөн бигерәк тә осо-башы юҡ бит әле... Бнбисара әхирәттәргә барып, туйға нисек әҙерләнеүҙәрен белешеп ҡайтырмын тигәйнем бит... әле»— тип сабырһыҙлана ине.

— Сәйхур Ҡарасәс тигәндән, мин бәләкәс саҡта беҙҙең ауылда Сафура тигән сәйхур әбей була торғайны,— тип бөтөнләй икенсе һүҙгә күсеп китте ул хәҙер.— Уның хаҡында: «Сафура әбейҙе сәй эсереп һис тә туйҙырып булмай икән. Ул бер ыңғайҙан биш самауыр сәй эсә икән. Өс самауыр сәйҙе эсеп бөткәс, таҫтар аҫтынан «былт» иттереп бер ҡолағын сығарып ҡуя икән. Был, йәнәһе, уның «яртылаш туйҙым» тигәнен аңлата була. Биш-алты самауырҙы эскәс, ике ҡолағын да тышҡа сығара икән. Ауылда ҡайһы бер мәҙәк яратыусан кешеләр уның, ошо күл ҡабырсағы шикелле һарғайып бөрөшкән ҡолаҡтарын күреп келер өсөн генә лә уны саҡырып сәй эсерә торған булғандар»,— тип һөйләй торғайнылар. Бына инде хәҙер мин шундай булып алдым. Ни эшләйһең бит... Ғүмер уҙа, кеше туҙа... Эй-й, шулай булмаһа:

Ебәк билбауҙарҙы туҙмай тиҙәр,
Сит-ситенән кителеп туҙа икән.
Был ғүмеркәйҙәрҙе уҙмай ҙа тиҙәр,
Килке-милке килеп тә уҙа икән...

тип йырламаған да булырҙар ине... Шулай бит, Сәрбиямал?..

Сәрбиямал һаман алсаҡ, ҡунаҡсыл булырға тырышты. Уның һүҙен:

— Шулай булмаған ҡайҙа ул, еңгә,— тип күтәрмәләне. Ҡарасәс әбей уйсан ғына итеп:

— Шулай, Сәрбиямал, барыһы ла үтә. Аҡҡан һыу кеүек аға,— тип, артабан һөйләп китте.— Бөгөн һин йәш, иртәгә ҡарт. Бөгөн бар, иртәгә юҡ... Барыһы ла үтә. Күҙ асып йомғансы ла туҡтап тормай. Тик бер генә нәмә — яҡшылыҡ ҡына тороп ҡала. Кешенең ҡылған яҡшылығы онотолмай. Үҙең үлгәс тә, уны телгә алыусы табыла. Шуға күрә, ҡулдан килгәнсә гел генә яҡшылыҡ эшләп торорға кәрәк тә бит... Эй-й, ҡайҙа һун?! Дөрөҫ, яманлыҡ һәр саҡ алдан, яҡшылыҡ арттан йөрөүсән була. Бына шул кешемен тигән кеше арттан йөрөгәнде алдан күрергә тейеш тә бит...

Яҡшылыҡ, яманлыҡ хаҡындағы үҙенә бик үк аңлайышлы булмаған был өмөтлө-өмөтһөҙ һүҙҙәр тәьҫирендә Емеш оҙаҡ ваҡыт уйға сумып, онотолоп ултырҙы. Ул арала Ҡарасәс әбей, күрәһең оҙон-оҙаҡ һүҙен ослап та ҡуйғайны. Сәй ҙә эселеп бөткәйне. Ҡарасәс әбей хәҙер урындыҡ ситенә төшөп, аяҡтарын иҙәнгә һалындырып ултыра. Ә Сәрбиямал бик инсафлы, әҙәпле төҫ менән уның ҡаршыһында, мейес буйында баҫып тора ине.

«Эй, һүҙҙең аҙағын ишетмәй ҡалдыш... Ҡарасәс инәйҙең нинә килгәнен белеп булманы... Бушҡа ғына килмәгән бит инде ул...» — тип көйөндө Емеш. Ләкин тегеләр һүҙҙең йәбешкәһенә яңы ғына килеп еткәйнеләр әле.

— Бына шулай, Сәрбиямал,— тип дауам итте Ҡарасәс әбей,— «Ай киттем, йыл киттем, энә буйы ер киттем» тигәндәй, минең бөгөнгө оҙон һүҙҙең йәбешкәһе шунда: йә, бер изге эш эшләп, яҡшылыҡ ҡылып ташла әле, Сәрбиямал. Донъялыҡта ла, әхирәттә лә сауабын күрерһең...

— Ата-аҡ, ниндәй эш ул, еңгә? — тип аптырай Сәрбиямал.— Минең ҡулдан килерҙәй эшме һун, ул?

— Килерлек. Бик килерлек,— тип ҡырт киҫә хәҙер Ҡарасәс әбей.— Тап һин булдыра торған эш. Айһылыуға яусы ебәр. Бына шул. Бер-береһен өҙөлөп һөйгән ике йәште ҡауыштырап, сауабын ал. Юҡһа, үҙең беләһең, Кәзә мәзин уны һатыбалға бирергә йөрөй, ти бит. Ҡыҙы барҙын. — наҙы бар, ти. Ҡыҙы булғас, бер тапҡыр ҙа яусы ебәрмәгән Иштуғанды көтөп тора алмаҫ шул. Бибисара абыстай һинең әхирәтең бит. һәр хәлдә ул әхирәт дуҫынын, һүҙен кире ҡаҡмаҫ. Юҡһа, әйтәм бит, һатыбалға бирмәкселәр...

— Бирһә, бирерҙәр, хәл юҡ,— тине Сәрбиямал ҡоро тауыш менән. Уның күҙҙәренә ҡунған яһалма мөләйемлек ҡапыл юйылып, һалҡын ҡорос саҡҡыһы баҙлай башланы.

— Бирерҙәр тип ни, кем, Сәрбиямал, ул тиклем йәнһеҙ булма әле,— тип Ҡарасәс әбей ҙә ҡаты бошоноп китте.— Үҙең белмәгән ни бар. Айһылыу һеҙҙең Иштуғанды ярата ла баһа!.. Унан башҡа бер кемгә лә бармайым тип әйтә, ти бит!..

— Әйтеү менән ни ул, еңгә, аты-туны, малы-тыуары булмаған көйгә, Иштуғанға ниндәй кәләш ти ул?!

— Ай-һай,— тип бөтөнләй көйендө хәҙер Ҡарасәс әбей.— Үҙең белмәгән ни бар тигәндәй. Айһылыуҙы әйтәм, төҫ тиһәң, төҫө, эш тиһәң, эше, аҡыл тиһәң, аҡылы бар. Етмәһә, Иштуғанды бик ярата. Нинә шул ике баланы Саҡ менән Суҡ кеүек итеп зарыҡтырып йөрөтөргә?„ Йә!..

— Хәл юҡ,— ти Сәрбиямал, һаман шул һалҡын, ҡоро тауыш менән.— Яусы ебәрһәң дә бирмәҫтәр. Бибисара әхирәт, ерһеҙгә, килмешәккә, мәһәр түләр әмәле булмаған хәйерсегә ҡыҙ бирер хәлем юҡ. Иштуғанығыҙ юҡҡа ымһынып йөрөмәһен, тип әллә нисәмә рәт әйткәне бар минә. Шулай булғас, был алйот Иштуған нәмә емөт итеп маташалыр, белмәйем.

— Әллә шулай ҙа яусы ебәреп ҡарайбыҙмы, Сәрбиямал? — тип ныҡышты Ҡарасәс әбей.— Боронғолар, ятып ҡалғансы — атып ҡал, тип бушҡа ғына әйтеп китмәгәндәрҙер. Әйҙә, беҙҙән ҡалмаһын. Бар, тиген, хәҙер үк үҙем яусы булып барам. Кеше араһында яусы булып йөрөй торған ғәҙәтем булмаһа ла, һинең есен, Иштуған өсен яусы булып барырға ла әҙермен. Яусылыҡ өсөн алым да там итмәйем...

Сәрбиямал яһалма сабырлығын бөтөнләй юғалтып, ҡырҡыу тауышҡа күсте.

— Юҡ, еңгә, булмай. Булмаҫты хоҙай һөймәҫ, ти. Булмаҫ нәмә менән булашмайыҡ, Ҡарасәс еңгә. Килен әйттерергә беҙҙең байлығыбыҙ ҙа юҡ. Етмәһә, атаһы ла һуғыштан әллә ҡайта, әллә юҡ тигәндәй...

— Шулай тиген, ә?..— тип өмөтһөҙ һуҙып ҡуйҙы Ҡарасәс әбей.

— Шулай,— тине Сәрбиямал, хәҙер үҙенең асыл ғәҙәтенсә, өҙөп.— Шулай! Үҙ йортома кемдәрҙелер килтереп, донъямды уртаҡларға тормайым әле. Кәрәк икән, ана тора юлы. Дүрт яғы ҡибла. Үҙе донъя көтһөн, үҙе мал тапһын да үҙе өйләнһен. Берҙе түгел биште алһын. Унда минең эшем юҡ...

Ҡарасәс әбей, тағы ауыр һуҙып:

— Шулай-й тиген,— тип, Сәрбиямалға тәү күргән кеүек ғәжәпһенеп текләп торҙо ла: — Ярай, бигәйбә, мин әле тик йәштәргә бер ярҙам итеп булмаҫмы тип кенә килгәйнем... Иштуған үтенгәнгә генә... ул, әгәр апайым, Айһылыуҙы алып бирһә, яҡшылығын мәңге онотмам. Үҙ әсәйемдән артыҡ күреп, ғүмер буйы ҡәҙерләрмен, хөрмәтләрмен, тип ялынғанға ғына,— тип, һөйләнә-һөйләнә тороп, ишек төбендәге калуш быймаһына табан атланы. Ошо ваҡыт, ҡапыл, йүгерешеп, Ҡарасәс әбейҙең ике ейәнсәре Сабира менән Сәмиғә килеп инде. Уларҙың шәп йүгереүҙән тындары бөтөп, артыҡ ҡыуаныстан телдәре көрмәлгәйне.

— Ҡәртсәй! Ҡәртсәй! Ҡәртсәй, атайым!..

— Атайым, ҡартсәй!

Ҡарасәс хафаланып китте.

— Ни булған? Тимербайыма нимә булған, **балалар?..** Әллә берәй насар хәбәр килдеме?

— Кайтты!



— Атайыш ҡайтты!

— Китсе, китсе, ысынмы, бәпестәрем!..

— Ҡайтты! Ҡайтты! Әйҙә, тиҙ бул, ҡәртсәй!..

Сабира менән Сәмиғә ҡәртсәйҙәрен икеһе ике яҡтан ҡултлап, елтерәтеп алып сығып киттеләр.

— Аһа, ситек менән йүгереп китте лә баһа алйыған ҡарсыҡ! Калуш быймаһын да, таяғын да онотто!..— тип һөйләнеп ҡалды Сәрбиямал.— Мә, Йәнеш, алып барып бир.

Йәнеш, Сәмиғәләрҙең атаһын барып күрергә мөмкинлек биргән был хәлгә ҡыуанып, Ҡарасәс әбейҙең калуш быймаһы менән таяғын тотоп, улар артынан йүгерҙе.

Сәрбиямал уның артынса, сәс толомонан тотоп типкеләйһуҡҡылай, Емеште лә тышҡа сығарып ырғытты.

— Бар, туң, дөмөк, сиған балаһы! Күҙемә күренәһе булма! Бынан һуң мин һинең кеше алдында ауыҙ асып һүҙ әйткәнеңде күрәйем!

Емеш был язанын, баяғы үҙе әйткән: «Май ашаны икән ти»,— тигән һүҙ өсөн икәнен дә, инде быны Сәрбиямалдың хәҙер теле талғансы онотмаясағын да яҡшы аңлай ине. Ләкин хәҙер был хаҡта уйлап, нинә әйткәненә үкенеп торорға уның ваҡыты юҡ. Тыш һалҡын. Етмәһә, Емештен, дә Тимербай ағайҙы барып күргеһе килә. Шуға ул да ялан аяҡ, ялан күлдәк көйө йүгереп, уларға китте. Сәрбиямал кеүек зәһәр, уҫал ғинуар еле туңып үлергә теләмәгән кескәй ҡыҙҙың артынан һыҙғыра-көлә ҡыуып китте.

## XIII

Ғаббас мулла менән осрашыуҙан һуң, Сәлимә йәштәргә теләгән ваҡытта үҙ өйөндә уйнарға рөхсәт итә торған булып китте.

— Әйҙә, уйнағыҙ. Шуға үс итеп, ейҙә дер һелкетеп бейегеҙ,— ти ул, ҡырт киҫеп. Был һүҙҙе әйткәндә, уның уйынсаҡ күҙҙәре үҙ һүҙлелек һәм ҡыйыулыҡ менән балҡып китәләр. Былай ҙа алһыу биттәренә ҡарағускыл ҡыҙыллыҡ йүгерә. Күрәһең, мулланын шул көндәге ҡырағай ҡыланышы Сәлимәнең һаман күҙ алдынан китмәй.

Йәштәр, ысынлап та, һуңғы йылдарҙа бында йыш йыйылалар. Сәлимә әйтмешләй, бөтәһенә лә үс итеп өйҙө дер һелкетеп бейейҙәр, уйнайҙар. Ә Ғаббас мулла хәҙер был өй янынан ситләберәк үтергә тырыша.

Бигерәк тә быйыл, һуғыштың өсенсө ҡышында, уйынға һәүәҫкәрҙәр күбәйеп китте. Сәлимәнең өйө хәҙер йәш-елкенсәктең генә түгел, күп һалдаткаларҙың да күнел асыу төбәгенә әйләнде. Хатта бында хәҙер үҙенен, баҙыҡ кәүҙәле, сабыр холоҡло ҡатыны Баҙыян еңгәне эйәртеп, Тимербай ҙа килә башланы.

7 Заказ 733

1

Ул, теге ваҡытта шахтала таш төшөп иҙгәндән һуң, уң аяғы тубығынан төҙ ҡатып, ябығып, ҡартайып, бынан бер ай элек һис тә кетмәгәндә ҡайтып инде. Ауылда унын ҡайтыуы хаҡында төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Берәүҙәр уны, Себерҙән ҡасып ҡайтҡан икән, тип һөйләйҙәр. Икенселәр, амнистияға эләккән икән, тиҙәр. Ә Тимербай үҙе:

— Срокты тултырып ҡайттым. Бинахаҡҡа биш-алты йыл Себер етмәйме ни? — тип кенә яуап бирә.— Мин хәҙер шәп итексе, һеҙгә мин һәйбәт итектәр тегермен, һеҙ минә астан үлмәҫлек эш хаҡы түләрһегеҙ. Шулай итеп беҙ ҙә йәшәп китербеҙ,— тип шаярта. Үҙенең каторгала большевиктар менән осрашып, тотош бер мәктәп үтеүен, коммунистар менән фекерҙәш булып ҡайтыуын әлегә бер кемгә лә әйтмәй. Итек тегергә өйрәнеүен генә һөйләй.

— Мин теккән итекте кейгән кеше бер ҡасан да таймай. Етәһе еренә туп-тура барып етә,— тип мәрәкәләй. Ысынлап та, ҡайтыуына бер ай ваҡыт үтеүгә, ул инде бер нисә кешегә бик һәйбәт итек тегеп бирергә лә өлгөрҙө. Кешегә ҡушамат тағырға яратыусы ҡайһы берәүҙәр уны «итексе Тимербай» тип тә йөрөтә башланы.

Тимербайҙың ҡайтыуына бигерәк тә Собхан старшинаның эсе боша.

«Мин, был ғүмерлеккә китте тип, тыныслап йөреһәм, алты йылда ҡайтты ла килде. Етмәһә, донъялар боларып, ярлыялпы баш Ҡүтәреп торған саҡта бит әле... Юҡ, уны ҡайҙа булһа ла оҙатырға кәрәк»,— тип уйлай ул. һәм Шымбай ҡартҡа Тимербайҙы күҙҙән ысҡындырмаҫҡа ҡуша.

Тимербайҙын. ҡайтыуына ғына түгел, уйынға һәүәҫләнеп китеүенә лә ауылда һәр кем үҙенсә баһа бирергә, уны үҙенсә ғәйепләргә йәки яҡларға тырышты. Әйтәйек, Сәрбиямал йәки Бибисара абыстай кеүек, үҙҙәрен изге күңелле, динсән итеп танытырға теләп көсәнеүсе кешеләр уны аҙғынлыҡта ғәйепләнеләр. Үҙ-ара сәңгелдәшеп:

— Йөрөй шунда, ҡартайғанда тыртайған! Етеп килгән ике ҡыҙы бар. Ә үҙе һорнайып уйынға йөрөй, гонаһ шомлоғо,— тип әрләнеләр. Ә йәштәр уны, донъяны күп күргән, күп белгән кешене, үҙ араларына ҡыуанып, хөрмәтләп ҡабул иттеләр. Оло башын кесе итеп унын уйынға килеүе йәштәр өсөн ҙур ҡыуаныс булды. Хәбир тирәге төбөндә һөйләгән онотолмаҫ хикәйәләре, йырҙары, таҡмаҡтары менән дә, Себерҙән имгәнеп, ҡартайып ҡайтып килһә лә һаман элеккесә шат күңелле, өмөтлө кеше булып ҡалыуы менән дә ул йәштәр күңелендә легендар батыр булып урын алды. Йәштәр уға һутлы сәскәне тойған бал ҡорттары кеүек һырышты. Әлбиттә, Шымбай каштан да уйын өйө тирәһендә өйөрмә шикелле өйрөлөп кенә йөрөнө. Ләкин унда инергә, Тимербайҙың ни һейләгәнен ишетергә, ни ҡыланғанын күрергә уға һис тә тура килмәне. Сөнки уйын Шымбай кеүек ҡарттар йөрөй торған урын түгел. Унда барып инергә уға һис бер һылтау юҡ. Тамам аптырағас, ул бер нисә тапҡыр Собхан старшинаға кәңәшкә лә барып сыҡты.

— Ә-ә-ә... ни...— тине ул, тотлоғоп, ҡалтыранып. Ул һәр ваҡыт берәй этлек эшләргә йыйынғанда шулай ҡалтыранып, тотлоғоп һөйләшә башлай ине.— Түрә, һинең борсолоуың бушҡа түгел и-икән, ә, ни... был Тимербайҙы хәҙер сәпсим юлдан яҙып ҡайтҡан икән тип һөйләйҙәр. Алла ла, мулла ла, батша ла сәпсим кәрәкмәй... Бөтә кеше ҡарға кеүек бер теҫ, бер иш, бер тиң булһын, тип әйтә, имеш, ти... Сәпсим-гупсим аҙған, ти... Коммун булып ҡайтҡан, ти, ул. Сәпсим бәлшәүник, ти...

— Ти-ти-ти!..— тип мыҫҡылланы уны старшина.— Ти менән нимә эшләп була? һин быны үҙең ишетеп бел... Йәки шаһиттар тап.

— Бе-белл-лер инем дә бит... Бел-ләһең, ул быны минен, алдымда һөйләмәй. У-йында, йәш-ш-елкенсәккә, һалдаткаларға һөйләй. Ә у-уйынға мин инә алмағанды анлайһын, бит...

— Үҙең инә алмаһаң, берәй ышаныслы кеше тап тим бит!

— Эй, түрә, үҙ-үҙең белмәгән ни бар... Ундай кеше бармы ни хәҙер?..

— Йә, ярай, миңә зарланыусы кәрәкмәй,— тип екереп бүлдерә уны старшина.— Минә һин эш менән кил. Бәлки, һин унда минең үҙемә барырға ҡушмаҡ булаһындыр, ә? Хи-хи... Теге ваҡыттағы кеүек... «Кафыр Хәбир» тирәге төбөнә барып яткан кеүек, ә! Хи-хи... Йәтеш килеп сыҡҡайны бит, ә?! Тик хәҙер ул замандар уҙыбыраҡ китте шул... Кешеләр уҫалыраҡ та, уяуыраҡ та булып баралар. Ә беҙ хәҙер ер аҫтында йылан кейшәгәнде ишетергә тейешбеҙ. Аңланыңмы, ағай...

— Аң-ланым, түрә, аң-лайым.

— Аңлағас, юлын тап. Беҙ Тимербайҙын, эҙенә төшөргә тейешбеҙ. Юҡһа ул үҙе тиҙҙән беҙҙең эҙгә тешер. Аңланыңмы?..

Был һөйләшеүҙән һуң Шымбай каштан уйын барған өйгә нисек үтеп инергә йәки берәй ышаныслы кешене индереп тыңлатырға кәрәклегетураһында оҙаҡ баш ватты. Ул, әлбиттә, Тимербайҙың Себерҙә, каторгалағы большевиктар менән осрашып күҙе асылып ҡайтыуы, хәҙер бындағы йәштәрҙең күҙен асыу өсөн, уйын өйөн файҙаланыуы хаҡында асыҡ уҡ белеп етмәһә лә, унын бында бушҡа йөрөмәҫенә төшенә. Ошоно белеп, түрәләр алдында тағы бер тапҡыр хеҙмәт күрһәтеп ҡалыу ниәте менән яна ине. Ләкин Шымбай каштан ни

хәтле уйлаһа, тырышһа ла үҙенең шымсылыҡ эшенәярҙам итерҙәй кеше таба алманы. Йәштәр Хәснәлхаҡ, Әхмәтша, һатыбалдар алдында асыҡ һөйләшмәйҙәр. Башҡа һатлыҡ кешене ауылдан табырға мөмкин түгел. Ни эшләргә? Ахыр, ул бының өсөн үҙенең ейәнен, Әхмәтшаның ҡурҡаҡ йәнле, арыҡ тәнле сиркәтәү генә улы Моратшаны файҙаланырға булды. Һәр бер уйын булған көндө уны әрләй-туҡмай унда ебәрҙе. Ә уйындан уны егеттәр ҡыуып сығарҙылар. Ғәҙәт буйынса, уның йәшендәге малайҙар әле уйынға йөрөмәйҙәр. Икенсенән, ул Шымбай каштан тоҡомонан булыуы менән дә йәштәрҙе екһендерә ине. Ләкин Моратша, йәштәр нисек кенә ҡыумаһын, һаман уйынға йәбешеп ятты. Ишектән ҡыуып сығарһалар, тәҙрәгә, тәҙрәнән ҡыуһалар, мөрйәгә барҙы. Иланы, ялынды, йәштәрҙең аяҡтарына көсөк кеүек шыңшып уралды. Сәлимәнең өйө янынан китмәне. Сөнки уға ҡарттаһы шулай ҡушҡайны. Ахыр, был малай менән көрмәкләшеү йәштәрҙе туйҙырҙы.

— Ярай, йөрөһөн. Уйын күргеһе киләлер. Була ул шундай иртә һәүәҫкәр малайҙар,— тинеләр улар. Әхәт, үҙенен, ун ике йәштән уйынға йөрөй башлауын хәтерләп, Моратшаға бәйләнеүҙе беренсе булып туҡтатты.

— Тик шуныһы ғәжәп. Мин бейеү-йырлаү менән өлкән ағайҙарҙан үҙемде яраттырып, ваҡытынан алда уйынға инеү хоҡуғын алғайным. Ә был илап-һыҡтап, талашып-тартышып инә. Үҙе йырлай ҙа, бейей ҙә белмәй бит әле бахыр,— тине ул, көләп.

— Ярай, йөрөһөн әйҙә. Баланың ғәйебе юҡ. Уны ситкә тибергә ярамай,— тине Тимербай.

Моратша уйында ҡалды. Көҙөрәйеп, сүбәге сығып торған алама бүркенә бөтөнләй сумып, эт талаған кеүек өҙгөләнеп бөткән оҙон һары тире тунына уранып, мейес буйындағы эскәмйәгә, йәштәр араһына тығыҙлап инеп ултырҙы. Был көндө уйында үҫмер егеттәр генә түгел, һалдаткалар, һуғыштан яраланып ҡайтҡан һалдаттар ҙа байтаҡ ине. Хатта Тимербай ҡайтҡаны бирле уйындан ҡалмай йөрөгән урыҫ Иҙрис тә бөгөн башта уҡ килеп ултырғайны. Уйын бейеүҙән башланды. Егеттәр яңғыҙ ҙа, икешәрләп тә, күмәкләп тә бейенеләр. Моратшаға бигерәк тә Әхәттең бейеүе оҡшаны. Ул, бишмәт еңдәрен ҡанат кеүек елпелдәтеп, ултырып та, ятып та, түбәгә хәтле һикереп тә бейей ине. Егеттәрҙән һуң ёңел йүгереп Сәлимә лә, ойота баҫып Баҙыян еңгә лә бейеп алды. Тимербай яғымлы ғына йылмайып:

— Һай, әллә кемдең бисәһе лә, әллә кемдең килене,— тип уларҙың бейеүен күтәрмәләп ултырҙ.ы. Шулай итеп, был ике-ес йыл эсендә уйынға йөрөүселәрҙең һаны, сифаты, уйындарҙың төрө лә үҙгәргәйне.



Бейеп арығас, йәштәр йырлаштылар. Йырға Тимербай ҙа ҡушылды. Йырҙан һуң тағы бейештеләр. Моратша күҙҙәрен кепеслэтеп, аптырап тик ултырҙы. Бында, уның ҡарттаһы әйткәнсә, зобаниҙар ҙа, мегәҙлә шайтандар ҙа, әллә ниндәй ҡурҡыныслы һүҙҙәр һейләп, кемдәрҙелер үлтереү, бөтөрөү тураһында кәңәшләшеп ултырған юлбаҫарҙар ҙа күренмәне. Малай йыр-бейеүҙән бик тиҙ ялкты, ҡайтып йылы юрған аҫтына инеп йоҡлау тураһында хыяллана башланы. Хәҙер уны бында ҡарттаһынын:

— Уйын бөтмәйенсә ҡайтаһы булма! — тигән ҡаты иҫкәртеүе генә көсләп тота ине.

Тора-бара бүтән йәштәр ҙә арыны, күрәһең, уйын-көлкө, йыр, бейеү әкренләп һүрелде. Ахыр бөтөнләй тынды. Бөтә кеше шым, уйсан булып ҡалды. Ошо ваҡыт иң аҙаҡҡы булып бейеүҙән туҡтаған Иштуған урындыҡҡа, Тимербай янына барып һыйынып ултырҙы ла:

— Йә, ағай, берәй нәмә һөйләп ебәр әле,— тине.

— Эйе, һөйлә, Тимербай,— тип уның һүҙен башҡалар ҙа күтәреп алды.— Һин һөйләгәндә тыңлаһаң, әллә ни эшләп күңел иркенәйеп киткән һымаҡ була...

Ошондай мөмкинлекте күптән көткән Тимербай йомшаҡ ҡына тамаҡ ҡырып ҡуйҙы.

— Нимә һәйләйем икән һуң?

— Башындан үткәндәрҙе. Себерҙә күргәндәреаде,— тип бер нисә тауыш бер юлы яуап бирҙе уға.

— Эй мырҙам, һөйләп тә бөтөлдө шикелле инде...— тине Тимербай. Ҡалын ҡара мыйығын борғолап, әҙ генә уйланып ултырҙы. Урыҫ Иҙрис тә, башҡалар ҙа уға яҡыныраҡ шылышты. Бында донъя күргән кешенең башынан үткән хәлдәрен һөйләтеп тыңлап ултырыу борон-борондан килгән ғәҙәт ине. Әйтәйек, бына урыҫ Иҙрис үҙенең һалдат сағынан ҡалған иҫтәлектәрҙе ошо герман һуғышы башланғансы һөйләне. Тик хәҙер генә ул күк мыйығын һыпырғылап, ялбыр ҡаштары аҫтынан бөркөт күҙҙәрен йылтыратып тик кенә ултырырға яратыусан булып китте. Сөнки ул иҫәр түгел. Үҙ хикәйәләренен, иҫкереүен, донъяға хәҙер бөтөнләй икенсе, яңы кешеләр тыуыуын ул йөрәге менән тойоп аңлай. Ул хәҙер ошо яңы кешене яҡшыраҡ, яҡынданыраҡ күрергә, унын, аша донъяла булып ятҡан һәм буласаҡ хәлдәрҙе асығыраҡ төҫмөрләргә тырыша. Тимербай менән һәр бер осрашыуҙан үҙенең ҡарт күнелендә ниндәйҙер йылылыҡ, өмөт саткыһы уянғанын, күнел күге ниндәйҙер, әлегә асыҡ булмаған, ләкин һаман сағыулана, киңәйә барған яҡтылыҡ менән һуғарылғанын тоя ул. Уны, ҡарт һалдатты, йәштәрҙең үҙ кеше итеп, хөрмәтләп ҡаршылауҙары ла ҡыуандыра. Бигерәк тә Тимербайҙың хәстәрле, йылы мөнәсәбәте шатландыра уны. Ул хатта һуңғы ваҡыт-

та, ошо Тимербайҙың улдарса хәстәрлелек менән биргән кәңәшен тыңлап, эсеүҙе лә һирәкләтте.

— Собхан старшинаға, әлбиттә, һинең эсеп, иҫәр булып йөрөүең яҡшы. Ә беҙгә һиндәй ҡарт һалдаттың айныҡ булыуы, кәрәк саҡта көс-хәлсә йәштәргә ярҙамға әҙер тороуы кәрәк. һин беҙҙән. менән бер юлдан бара торған кеше... Беҙгә кәрәкле кеше һин. Иҙрис ағай... Үҙ кешебеҙ. Аңлайһыңмы? Бына шулай ул донъя...

Тимербайҙың был һүҙҙәре уны ҡыуандыра ла, өмөтләндерә лә. Шул уҡ ваҡытта ышанғыһыҙ ят та һымаҡ тойолоп ҡуя. Ул яңғыҙ саҡта был һүҙҙәр тураһында йыш ҡына уйлап ала. Терпе мыйығы аҫтынан мут ҡына йылмайып:

«һе, Иҙрис ҡарттың да кемгәлер кәрәге булһын, имеш!.. Ғәжәп... Аңламаҫһың, ҡыҙыҡ кеше был Тимербай. Нимәгәлер ышана, ниндәйҙер яңы тормош, яңы бәхет көтә... Ярай, ышанһын, көтһөн... Мин дә йәш саҡта ышана инем... Йәшлек ул бәхеткә, шатлыҡҡа ирешә алыуы менән түгел, ә шуға һис шикһеҙ ирешермен, тип ышаныуы менән матур ҙа...»— тип уйланып, үҙ алдына фәлсәфә һатырға ла ярата ул. Ә шулай ҙа Тимербайҙың һүҙҙәрен мауығып, өмөтләнеп тыңлай. Әле лә ул шундай уҡ тойғо менән тыңларға кереште.

— Мин Себерҙә бер ҡарт эшсе менән осраштым. Уны теге бишенсе йылда баш күтәргән өсөн ғүмерлек каторгаға оҙатҡандар. Бына шул ҡарт эшсе аҙ ғына буш, аулаҡ ваҡыт булһа, минен, кеүек тун, кешеләр менән һөйләшергә ярата торғайны.

— Егетмен тигән кеше бәхетте күктән көтөп ятмай...— тип ҡабатлай ине ул.— Бәхетте уны яулап алалар...— Рус эшсеһе ине ул. Лена приискыһынан ине. Донъяны ла, нужаны ла күп күргән кеше ине... Үҙе ҡарт, ауырыу кейө лә ҡанаты һынған бөркөт кеүек осорға талпынып йөрөй ине ирең... Эй мырҙам...

Тимербай һәр ваҡыт һүҙҙе шулай Себерҙә осратҡан берәй кешенен. яҙмышы, эше менән тыңлаусыларын таныштыра, уны яраттыра, йәлләтә лә, унан әйтергә теләгән үҙ уйын, фекерен шул кеше исеменән һөйләп алып китә. Шул арҡала унын, һүҙҙәре тыңлаусыларға үҙ теләген, фекерен көсләп тағыу булып түгел, ә ябай хикәйә, тормош дөрөҫлөгө булып барып етә һәм шуға күрә ышандырыу көсө лә ныҡлы була ине. Шунын, өҫтәүенә унын һөйләмендәге Себергә ебәрелгәнгә хәтле ҡулланылмаған «эй мырҙам» тигән моңһоу ғына ҡушым да әңгәмәгә ниндәйҙер әйтеп бөтөлмәгән мәғәнә, сер өҫтәгән, уны тағы ла ағымлыраҡ, яҡыныраҡ иткән һымаҡ тойола ине.



— Беҙ күп ваҡыт, бигерәк тә кистәрен, землянкаларҙа үҙебеҙ генә ҡалғас, ошо эшсе янына йыйыла торғайныҡ. Ә ул беҙгә бәхеткә ирешеү юлдарын өйрәтергә тырыша торғайны. «Беләһегеҙме, егеттәр,— ти торғайны ул, шыбырлап ҡына,— беҙҙең бәхет Сәмреғоштоң алтын тажы аҫтындағы сихырлы ситлектә бикле ята, ти, бит ул!.. Хәҙер эшселәр, һалдаттар, хатта крәҫтиәндәр ҙә берләшеп, ана шул бәхет бикләп ҡуйылған ситлекте ҡыйратырға йыйыналәр, ти. Әгәр ысынлап та был эш барып сыҡһа, Сәмреғош үҙенен. ҡауырһындарын да йыйып ала алмаясаҡ, ти... Халыҡ бит ул йылға. Тау йылғаһы. Ул бер таша, күтәрелә башлаһа, ай-яй-яй!.. Тик берҙәм генә күтәрелһен... Яңғыҙ-ярым күтәрелеүҙән генә мәғәнә юҡ»,— ти.

Дөрөҫтө һөйләй шул. Беләһегеҙ бит. Хәбир батыр яңғыҙярым күтәрелеп нимәгә ирешкән?.. Эй-й мырҙам...

Бына шулай ҡыҙыҡ кеше ине ул эшсе. Гел шулай ябай халыҡтың тормошо, көрәше, эше хаҡында һөйләп, шул халыҡты ирекке, бәхеткә алып барып сығарыу хаҡында хыялланып тик йөрөй ине. Ә үҙе бит ауырыу ҙа, ҡарт та ине... Эй мырҙам...

Ирекке сығыр көн еткәнсе йәшәрлек тә түгел... Бына шулай, мырҙам!..

— Эй бахыр!..

— һай, ирең!..

Кемдәр ҡайҙа ғына серемәй ҙә ниндәй генә ыҙа сикмәй был донъяла!

һүҙ башланғас, Моратша ла урындыҡҡа яҡыныраҡ килеп ултырҙы. Ҡарттаһы уға ҡолаҡты һаҡ торорға, кем нәмә һөйләй, бөтәһен дә отоп алып ҡайтырға ҡушып ебәргәйне.

Тимербай күҙ ҡойроҡтарында тауыҡ тәпәйҙәренең эҙе һымаҡ булып ятҡан батыу йыйырсыҡтары менән тотош йылмайып алды.

— Бына шул ҡарт эшсе беҙгә Ленала эшселәрҙе нисек атыуҙарын һөйләне... Тәндәрең сымырлап китерлек хәлдәр... ышаныуы ла ҡыйын хатта. Ә эш һөйләгәндән дә яманыраҡ булған...

Тимербай әкрен, һалмаҡ тауыш менән, Ленала булған ҡанлы ваҡиғалар тураһында теге эшсенән ишеткәндәрен һейләп китте.

Иҙрис ҡарт, Сәлимә, Иштуған, Әхәттәр:

— Большевик тигәндәре кемдәр була икән һуң ул?

— Ленин тигәне лә шул большевикмы әллә бүтәнсәме икән?

— Теге эшсене әйтәм, үҙе ғүмерлек катрҙа булһа ла, бер саҡ ҡотолоуға, бәхеткә ышанЫп ята тигән, ә? Йә инде бахыр-

ҙы,— тип, терләсә һорау бирә-бирә, ҡыҙыҡһынып тыңлаланылар.

Был һүҙҙәрҙе йоҡо аралаш, арлы-бирле генә ишетеп ултырған Моратша, иртәнсәк ҡарттаһының:

— Йә, ни һөйләштеләр? — тигән һорауына:

— Тимербай ағайым Сәмреғош тураһында әкиәт һөйләне. Кешеләрҙең бәхете Сәмреғоштоң алтын тажы аҫтындағы тимер ситлектә бикле ята, тип әйтте... Ҡарттай, ул бәхет ни нәмә икән һун, ул? Ҡош кеүек нәмәме икән ни? Тажды алып ырғытһаң, ситлекте асһаң, осор ҙа китерме икән, ә, ҡарттай? — тип ғәжәпләнеп һораүҙан башҡа бер нәмә лә әйтә алманы.

— Нисек? Ниндәй әкиәт? Ниндәй бәхет? Ә-ә-ә, ҡалайыраҡ һөйләне тиһең әле?— тип, Шымбай ҡарт ни хәтле ныҡышып ҡараһа ла, Моратша шунан арттырып бер ни ҙә әйтә алмаған, унын. ике ҡолағын бер юлы бороп, кәзә бәрәсе кеүек баҡыртты ла, ҡама бүркен баҫып кейеп, Собхан старшиналарға китеп барҙы.

«Сәмреғош тураһында әкиәт һәйләне тиһең, ә? Тимербай уйында әкиәт һөйләп ултырһынсы, ә? Быны нисек аңларға?»— тип үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә барҙы ул. Ләкин старшинаның ҡапҡа янында бер төркөм ҡатындарҙын, сыр-сыу килеп шаулашып йөрөгәнен күргәс, тиҙ генә тыҡрыҡҡа боролдо ла, арт ҡапҡанан инергә ниәтләп, кертҡә бата-сума урам артынан китте.

«Сәмреғош... Бәхет... Ситлек...» — тип, үҙ алдына үҙе һейләнеп, мығырланып барҙы. Ахыр, һүҙҙең ҡайҙа төрттөрөүенә төшөнөп:

— һай, шилманы, бына нәмә һөйләй икән ул!..— тип ҡысҡырып, әлгә-тәгәрәй алға йүгерҙе.

Бөгөн иртәнсәктән бирле Собхан старшинаның ҡапҡаһы янында бер төркөм һалдаткалар ҡайнаша ине.

Тыштан мал-тыуар тәрбиәләп килеп ингән Баҙыян еңгә, йеҙлөк буйында, бүкән өҫтөндә, кемгәлер быйма төпләп ултырған Тимербайға борсоулы ҡараш ташлап, тәҙрәгә күрһәтте.

— Ана, ҡара, бисәләр нимә эшләйҙәр? Көрәш... көрәш... ти инең... Бына, күр инде... һин генә отҡоған тип әйтәсәктәре көн кеүек асыҡ инде...

— Ни бар, әсәһе? Нимәгә һуҡранаһың? — тип, Тимербай ҙа урынынан тороп тәҙрәгә барҙы. Был ваҡытта Сәлимә үҙе кеүек унлаған һалдатканы эйәртеп, ҡысҡыра-шаулаша Собхан старшинаның эстән бикле ҡапҡаһын, тәҙрә ҡапҡастарын шаҡылдатып йөрөй ине.

— Ҡара ҡорһаҡ, сыҡ!.. һуғыш буйынса беҙҙен, пусабияны ашап һимереү етер һиңә!..



— Хәҙер үк сығып беҙҙең аҡсаларҙы таратып бир!..

— һуғыш бөтһөн!.. Ирҙәребеҙҙе ҡайтарығыҙ!..

— һуғышыу бик яҡшы булһа, үҙ улыңды ебәр!.. Үҙең һуғышҡа бар!..

Тимербай, терпе мыйығын борғолап, тәҙрә аша был күренеште кинәнеп күҙәтеп торҙо.

«Әйҙә, әҙләп булһа ла шулай семеткеләй башлаһындар әле... шулай була ул, эй мырҙам...»

Үҙ һүҙҙәренең елгә осмауын күреү уны кинәндерә ине, әлбиттә.

— Был Сәлимә старшинаны ла, Ғаббас мулла шикелле итеп, өйрәтеп алырға уйлай,— тине Баҙыян еңгә.— Тик белмәйем... Был юлы үҙенең ауыҙы бешеп ҡуймаһа ярар ине.

— Өйрәтһәләр, шәп булыр. Күптән өйрәтергә ваҡыт уларҙы, ҡара ҡорһаҡтарҙы! — тип Ҡарасәс әбей ҙә һүҙгә ҡушылды. Ул да икенсе тәҙрәнән был шау-шыуҙы күҙәтеп тора ине.

Ләкин һалдаткаларға Собхан старшинаны өйрәтергә тура килмәне. Ҡайҙандыр ҡапыл килеп сыҡҡан урядник Алексей уларҙы аты менән тапата яҙып, пыр туҙҙырып, таратып ебәрҙе.

— Таралығыҙ, ахмаҡтар!.. Юҡһа хәҙер үк бөтәгеҙҙе лә тотоп төрмәгә оҙатам!.. Ишеттегеҙме, аңра һарыҡтар, төрмәгә!

Тимербай, һепереп алғандай буш, тын булып ҡалған урамға текләп, тәҙрә янында оҙаҡ ҡына уйланып торҙо ла, Баҙыян еңгәгә һис тә таныш булмаған, ят, ләкин ғәжәп моңло бер көйгә әкрен генә йырлай-йырлай эшенә тотондо.

Ҡуҙғал, уян, ләғнәт ителгән
Ҡолдар һәм астар донъяһы!..

## XIV

һалдаткаларҙы ҡыуалап ебәргәс, Собхан старшинала һыйланырға йыйынып ултырған урядник Алексей, береһе кәнгер оҙон буйлы, ҡалын ҡара ҡашлы, икенсеһе яурынтаҡ, тәпәш кәүҙәле, етеҙ хәрәкәтле ике егеттең урамдан үтеп-сүтеп йөрөгәнен тәҙрә аша күҙәтеп тора бирҙе лә борсоулы тауыш менән:

— Былары кемдәр тағы? — тип һораны.— Нимә эшләп урамда буталып йөрөйҙәр? Әллә теге бисәләр кеүек былары ла һинең ҡапканы ҡағырға йөрөйҙәрме, түрә?.. Булыр ҙа. Донъялар бик боларып тора бит... Бисәләрҙең бөгөнгө ҡыланыштары ла беҙгә шуны иҫкәртә, төшөнәһеңме, түрә?..

— Төшөнәм, Лексей Петрауис, бик төшөнәм... Шымбай

ағай был егеттәрҙе лә һәр саҡ күҙ уңында тота,— ти старшина, үгеҙ ҡарашын урядникка төбәп.— Хи-хи-хи... ваҡыты, урыны килгәнде кетеп кенә йөрөйбөҙ... Беҙҙә ул яҡтан эштәр нисауа ҡуйылған, Лексей Петрауис...

— Һаҡ булырға,— тип ҡабатлай урядник.— Төшөнәһеn,-ме? Тимербайҙың эше түгелме былар? Бөтәһен алдан белеп торорға кәрәк. Юҡһа бөгөн бисәләр, иртәгә йәштәр... Унан бөтә халыҡ ҡуҙғалып яғанан ала башлар... Эйе, үҙең белмәгән нимә бар? Төшөнәһеңме, түрә?

— Төшөнәм, яҡшы төшөнәм, Лексей Петрауис,— тип тутыйғош кеүек бер һүҙҙе ҡабатлап торҙо старшина. Был ваҡытта ул да тәҙрә янына килеп баҫҡайны.

Ә Иштуған менән Әхәт, өшөп-туңып, һепертмә буран йүгергән буш урамда һаман ары-бире йөрөнө лә йөрөнө. Уларҙың бөгөн һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй, кәңәшеп кәңәштәре берекмәй ине.

Башта һүҙ һалдаткаларҙың урынлы талаптары хаҡында барҙы. Ысынлап та, күпме түҙеп торорға мөмкин? Был күпкән ҡорһаҡтын, һалдат пособиеларын нисә йыл буйы үҙ кеҫәһенә һалып килеүе бөтә кешегә билдәле бит. Тик быға ҡыйып әйтеүсе, ҡурҡмай талап итеүсе генә булманы. Иллә Сәлимә еңгә шәп бисә лә һуң. Тәки старшинанын, ҡотон алды бит. Урядник килеп сығып ҡына эште боҙҙо. Юҡһа улар старшинаны урамға һөйрәп алып сыҡмайынса туҡтамаҫтар ине...

Һүҙ бынан һун, ер мәсьәләһенә күсеп китте. Был хаҡта Тимербайҙан ишеткән һүҙҙәр егеттәрҙең башынан сыҡмай ине.

— Завод, фабрик — эшселәргә. Ер — крәҫтиәндәргә булырға тейеш. Ерһеҙҙәр ерле булһындар... Большевиктарҙың иң ҙур башлығы Ленин үҙе шулай тип әйтә, ти! — тип, ярһып шыбырлай Иштуған.— Шуның өсөн бөтә эшселәрҙе көрәшкә саҡыра, ти... Их, ер, ер... Әгәр минең ерем булһа...

— Әгәр беҙҙең, дә еребеҙ булһа,— тип ҡабатлай Әхәт, ҡырҡа йәнләнеп...— Булдырырға кәрәк уны. Беҙҙең ер ҡайҙа? Собхан старшиналар, Тимаш баярҙар ҡулында. Тимербай ағайға осраған теге ҡарт эшсе әйтмешләй, күмәкләп күтәрелергә лә, уларҙы бәреп-йығып, ерҙе үҙ ҡулыбыҙға кире ҡайтарып алырға кәрәк. Мин Тимербай ағайҙың һүҙенән ошоно аңланым. Юҡһа ерҙе бер кем дә беҙҙең ҡулға алып килеп тоттормаҫ. «Алма беш — ауыҙға төш!» тип ятыуҙан эш сыҡмаҫ.

— Дөрөҫ, көрәшергә кәрәк,— тип яуаплай Иштуған.— Бәхеттең нигеҙе ерҙә ята. Тик бына ҡасан, нисек итеп көрәшкә башларға? Был хаҡта Тицербай ағай ниңәлер бер ни ҙә



һөйләмәй бит әле... Ә беҙ нимә беләбеҙ? Бынауы һалдаткалар шикелле сыр-сыу килеп урамға сығыуҙан, унан урядник күренеү менән тырым-тыраҡай ҡасып бөтөүҙән ни файҙа?

Әхәт ризаһыҙлыҡ белдерҙе.

— Беҙ ни беләбеҙ, имеш! Белмәҫкә беҙ нимә? Бәләкәстәрме әллә? Аллаға шөкөр, йәш еткән. Һиңә, ун дүрт йәшеңдән алып һаҡал-мыйыҡ баҫҡан егеткә, үҙ йәшеңде түгел, хатта егерменән ашыуҙы биреп була. Ә минең буйым бәләкәс булһа ла йоҙроҡтарым тос. Тимер кеүек.

Ул ат тояғы кеүек йомро йоҙроғон ҡаты йомарлап баш осонда болғап алды.

— Бына нисек!

— Уныһы дөрөҫ.

— Беҙ ҙә көрәшкә тотонмаҡас, кем тотонор? Юҡ, урамда сүп тибеп йөрөү етер беҙгә!..

— Ә нисек башларға?

— Әйҙә, Тимербай ағайымдан инеп һорайбыҙ. Өйрәтһен.

— Дөрөҫ. Өйрәтһен.

Егеттәр ашығып Тимербайҙарға инеп киттеләр.

Собхан старшина урядниктың ҡабырғаһына йомшаҡ ҡына төртеп алды.

— Ана, күрҙеңме, Лексей Петрауис?

— Эһе.

— Бына бит, аяҡтары ҡайҙа тарта бит уларҙың!.. Был ыристан Тимербайға, Лексей Петрауис, бер сара күрергә ваҡыт.

— Ваҡыт.

Тимербай егеттәрҙең ҡыҙып-ярһып һөйләгән һүҙҙәрен быйма төпләүҙән туҡтамай ғына тыңланы. Аҙаҡ уларға оҙаҡ ҡына йылмая биреп ҡарап торғас, ауыр ғына һуҙып баш сайҡап ҡуйҙы.

— Йәшерәкһегеҙ шул әле, мырҙалар, йәшерәкһегеҙ... Ашығып, алдан тамған бер-ике тамсынан яҙғы ташҡын ҡупмай бит ул... Бына тиҙҙән яҙ етер. Ярҙай боҙҙарҙы аҡтарып ташлар, ер өҫтөнән һөмһөҙ ҡышты ҡыуыр. Шул саҡ түҙемһеҙ тәүге тамсыларға ла, ташҡынға ҡушылып, оло диңгеҙгә табан ағырға юл асылыр... Юғиһә ул иртә тамсылар яҙ ҙа яһай алмаҫтар, үҙҙәре лә файҙаһыҙға юҡҡа сығырҙар...

— Эй ағай, һин әллә нәмә һөйләйһең дә. Беҙҙе бөтөнләй балаға һанайһың,—тип Иштуған уға үпкәлеҡараш ташланы.

Әхәт, ҡырт киҫеп:

— Беҙ кинәйәле һөйләшкәнде аңлайбыҙ ул,— тип белдерҙе.— Һин, ағай, беҙҙе тура һөйләп кенә өйрәт.

— Ә көрәш ул уйынсыҡ түгел, мырҙалар. Уяу баш менән тотонмаһаң, бик тиҙ билде һындырып ҡуйырға ла була...

— Уяу баш ҡалай була?..

— Иртә ҡыҫҡырған кәкүктен, башы ауырта, тигән мәҡәл дә шул хаҡта һөйләй...

Егеттәр Тимербай менән һөйләшеүҙән, уның әле Иштуғандарҙың көсөнә лә, һүҙенә лә ышанып етмәүен, уларҙы малайға һанауын аңланылар. Шуға намыҫланып, үҙҙәренең көрәш өсөн өлгөрөп еткән егет булыуҙарын раҫларлыҡ ниндәй ҙә булһа берәй етди эш эшләргә кәрәклек тураһында тағы уйланып, ҡапҡа төбөндә оҙаҡ ҡына тапанып торҙолар. Ошо ваҡыт Әхәт ҡапыл йәнләнеп, Иштуғандың еңенән тотоп тартты.

— Эй, Иштуған, теге суҡ тирәкте «Кафыр Хәбир» тирәге тип түгел, «Батыр Хәбир» тирәге тип йөрөтөргә кәрәк хәҙер. Бына шәп була! «Батыр Хәбир!» тирәге! Шәп сыға бит, әй!

— «Батыр Хәбир» тирәге,— тип ҡабатлап ҡуйҙы Иштуған да.— Шәп сыға! Дөрөҫ була. Уны Тимербай ағай элек үк шулай атай торғайны... Шулай бит?...Ләкин... Ләкин... Беҙ бит нисек көрәшкә тотоноу тураһында һөйләшә инек түгелме һуң әле?.. Ә бының...

— Тап шул турала! — тип Әхәт дуҫынын, һүҙен бүлде.— Бына шул Батыр Хәбир кеүек Тимаш баярҙың имениеһына барып үрт һалайыҡмы әллә, тимәксемен.

— Ә мин әллә улар Батыр Хәбирҙе туҡмаған кеүек итеп, һатыбалды тотоп туҡмайбыҙмы, тип уйлап тора инем,— тине Иштуған. Ул һуңғы ваҡытта Айһылыу тирәһендә артыҡ йыш сыуалған һатыбалға айырата үсле ине.

— Собхан старшинаның үҙен туҡмап, Иҙрис бабайға бөтә малын тартып алып бирһәк нисек булыр?..— тип тә ҡараны Әхәт.

Иштуған оҙаҡ ҡына уйланып торғас:

— Юҡ, былар ҙың береһе лә ярамай. Көрәште, минеңсә, улай башларға ярамай,— тигән фекергә килде.

— Ә ҡалай һуң? — тип ярһып китте Әхәт.— Ҡул ҡаушырып, тик ятыпмы ни?..

— Белмәйем,— тип аптыраны Иштуған.— Ни тип тә әйтә алмайым... Шулай ҙа Тимербай ағай, яңғыҙ-ярым көрәшкә сығыуҙан мәғәнә юҡ. Дәррәү... Күмәкләп... Бергәләп, тигәйне түгелме һуң?..

— Белмәйем...

Тәҙрә үтә уларға күҙ һалғылап, итек тегеүен дауам иткән Тимербай:

«Был егеттәр берәй баш-баштаҡлыҡ эшләп ҡуймаһындар. Яҡшылап һөйләшергә, етди аңлатырға кәрәк булыр,— тигән фекергә килде.— Бынан ары уларға, йәштәргә, ваҡытты күберәк бүлергә кәрәк...»

Ә урядник менән старшина, егеттәрҙең хәрәкәтендә шикләнер урын күренмәгәс, тынысланып, урындыҡҡа барып ултырҙылар. Унда, шау биҙәк итеп төрлө кизенән һуғылған щаҡмаҡлы ҡыҙыл ашъяулыҡ өҫтөнә, бай һый әҙерләнгәйне.

— Йә, Лексей Петраусис, шараптан ауыҙ итәйек.

— һинең һаулыҡҡа!

Улар тәүге рюмкаларҙы теп күтәрә эсеп ебәреп, табаҡтағы ҡуй осаһына үрелеүгә, кемдер сабырһыҙлыҡ менән ишек ҡаҡты. Старшина, ашыҡмай ғына шешәләрҙе, рюмкаларҙы шкафҡа йәшергәс, ҡоро ғына тауыш менән:

— Кем бар? — тип һораны.

— Мин... Б-бы-был мин... Тү-ү-түрә...

Шымбай икәнен белгәс, старшинаның йөҙө яҡтырып китте. «Берәй хәбәр алып килгәндер...»

Шулай ҙа ҡырыҫ тауыш менән endәште.

— Ин әйҙә.

Эләгә-тәгәрәй Шымбай каштан килеп инде. Ул кәртә артынан көрт ярып йүгергән, осло ерән һаҡалына сукланып боҙ ҡатҡан.

— Әс-сәләмәғәләй-күм, түрәләр!.. һаумы, нәсәлник! — тип татлы йылмайып, ишек төбөндә туктап ҡалды ул. Был ваҡытһыҙ йөрөгән ялағайҙы күргәс, старшинаның да, урядниктың да кәйефе боҙолоп ҡуйҙы. Улар, ҡапыл тештәре һыҙлап киткән кеше һымаҡ булып, йәмһеҙ сирылып ҡуйҙылар.

— Ни бар? һөйләп ебәр...— тине старшина, инеүсегә ҡарамай ғына.

— Ни эш бетөрөп йөрөш, һунарсы? —тип теләмәй генә йылмайҙы урядник.

Шымбай каштан, бүлмәгә таныш ҡырҡыу еҫ ҡалдырып, үҙе юҡ булған шешәне йәлләп, өҫтәлдәге ҡуй осаһына ҡомһоҙ күҙҙәрен төбәп, өндәшә алмай торған арала, старшина, сабырһыҙланып, ҡырҡыу тауыш менән башҡортсалап өндәште.

— Ниңә ваҡытһыҙ йөрейһөң? Үҙ урыныңды беләһеңме һин, юҡмы?

Ләкин Шымбай каштан, әйтерһең, быны ишетмәне лә. Урядникка майлы күҙҙәрен мөлдөрәтеп төбәп:

— Әфәнделәр!..— тип өҫтәлгә табан бер аҙым атлап ҡуйҙы.— Әфәнделәр, быны нисек аң-ларға!.. Тимербай уйында әк-иәт һөйләй, ти!..

— Әкиәт?!

— Ниндәй әкиәт? — тип ҡыҙыҡһынып китте тегеләр. Ә Щымбайға шул ғына кәрәк ине. Ул, саҡырыуҙы ла кетмәй, сәкмәнен сисеп ырғытты ла, устарын ыуа-ыуа, ҡабаланып Урындыҡҡа барып ултырҙы.

— Әк-иәт һөйләй ти шул. Сәмреғош хаҡында һөйләй, ти. Им-мештер, Сәм-реғоштоң ал-тын тажы аҫтында алтын ситлек бар. Алтын оит-лектә бәхет ҡошо бикле ята. Ал-тын таж-

ды ос-сора һуҡһаң, алтын ситлек асыла. Шунан бәхет ҡошо иреккә сыға. Шунан бөтә кеше лә бәхетле була, тип әйтә, ти... Бы-на нисек бит ул? Бы-ны ҡалай аңларға, түрәләр?

Старшина Шымбай каштандың был һорауы өсөн:

— Сәмреғош тураһында әкиәт борон-борондан йөрөй ул. Ошомо алып килгән яңылығың? — тип орошоп ташларға әҙерләнгәйне лә, урядниктың әкиәткә бик нык иғтибар иткәнен күреп, ендәшмәне. «Әйҙә, ҡарт килеп ингәнгә кәйефе боҙолмағас ярар...»

Ә урядник ысынлап та:

— Сәмреғош хаҡында әкиәт тиген, ә? — тип ҡыҙыҡһынып китте.— М-да, Сәмреғоштоң тажын осора һуҡһаң, тн икән, ә?

Шымбай каштан уға, кәзә һаҡалын һәлпелдәтеп, әленәнәле баш ҡағып ултырҙы. Сөнки ауыҙ буш түгел ине инде. Ул ике яңавына ла тертелдәп ятҡан ҡуй майын ҡабалана-ҡабалана тултырып, тешһеҙ ауыҙы менән мөйтәңләп әүәләргә тотонғайны.

Старшина уның сысҡан тотҡан бесәй күҙҙәре кеүек уҫал мызлап торған йәшел күҙҙәренә текләп:

«Эй, ҡомһоҙ, ҡомағай!.. Ҡасан да бер туя белерһеңме икән һин, юҡмы?..» — тип ерәнеп уйлап алды ла шешәне кире өҫтәлгә ҡуйҙы.

— Үҙ кеше бит, Лексей Петрауис. Бергәләп күтәрәйек.

— Дөрөҫ, әйҙә рәхим итһен,— тине урядник, ҡабаланып. Уның уйын хәҙер ахыры араҡы түгел, ә Шымбай каштан алып килгән яңы хәбәр биләп алғайны. Тимербайҙың был әкиәте ҡайҙа, кем адресына йүнәлдерелгәнен яҡшы аңлай ине ул.

Урядник бер стакан араҡыны, ауыҙҙы ҡапыл юғары күтәреп, ерәнгес ҡыткылдатып йотоп ебәргәс:

— Әкиәт һөйләй тиген, ә?.. Ҡыҙыҡ!.. Йә, нисегерәк тип һөйләй тинең әле? — тип тағы бер ҡат Шымбайҙан һорашып алды. Унан старшина менән Шымбай каштанға Тимербай артынан нык күҙәтергә ҡушып, бешкән ашты ла йүнләп ашамай, ятҡан араҡыһын да эсеп бөтмәй волосҡа сапты. Уның ҡулында бығаса ла Тимербайҙың, бигерәк тә баҙар көндәрендә, баҙарға килгән халыҡ араһында тап ошондай ук һүҙҙәр һөйләп, халыҡты отҡоп йөрөүе тураһында яҙылған доностар бар ине. Шымбай каштандың был һүҙенән һуң, Тимербай тураһында икеләнер урын ҡалманы.

«Батшаға ҡаршы халыҡты отҡой икән! Ҡайтҡан еренә кире оҙатырға кәрәк быны!»

Шымбай каштан менән Собхан старшина Тимербайҙан тағы нисек ҡотолоу тураһында бик оҙаҡ баш ваттылар. Ләкин бер ҡаҙан ит менән нышып тултырылған ҡорһаҡ тәнде



ойотоп йоҡоға тартты. Улар әлегә бер ни ҙә уйлап сығара алманылар.

## XV

Байгилде ағай фронтта күп кенә яҡташтарына тап булды. Улар араһында күптәнге дуҫы Никита менән бергә Иҫәнбәт егеттәре — Сәхиулла менән Шаһиморат та бар ине. Байгилде ағай уларҙы электән дә бер туған ҡустылары кеүек яҡын күрҙе. Әле инде фронтта, үлем тырнағы аҫтында, бер часҡа тура килеү уға ниҙер әшкәрткән, уларҙың яҙмышын ниндәйҙер серле еп менән беркеткән кеүек тойолдо.

— Уйламағанда осрашыу! Ҡалай һәйбәт булды әле. Иҫәнбәтте ҡайтып күргән кеүек булдым,— тип ҡыуанды Байгилде ағай.

— Бергәләп илде ҡайтып күрергә яҙһын,— тине егеттәр. Улар ҙа өлкән һәм ятҡан ағайҙы осратыуҙарына шат ине. Шулай ҙа был осрашыу Байгилде ағайға ҡайғылы бер хәбәр ҙә алып килде. Был — Шәһит бабайҙың үлеү хәбәре ине.

— Исмаһам, ҡәберенә бер ус тупраҡ та һала алманым... һуғышта булмаһам, йәйәүләп булһа ла йыназаһына барып етер инем...— тип үкенде Байгилде ағай.— һай, ниндәй кеше ине бит!.. Ниндәй кеше ине...

Көндәр, аҙналар, айҙар үтте. Яҡташтар, яурынға-яурын терәп, күп тапкырҙар бергә атакаға барҙылар. Бөлдөргөс позицион һуғыш нужаларын бергә татынылар. Ләкин һуғыш — аяуһыҙ яҙмыш, бер саҡ уларҙы тағы төрлөһөн-төрлө яҡҡа туҙҙырып ебәрҙе.

Сентябрь айының ҡараңғы төнө ине. Байгилде ағайҙар, позиция тотоп, асыҡ окоптарҙа яталар. Өҫтән ҡар ҡатыш ямғыр ҡоя. Шинелдәр, итектәр һыу эсеп бүртенеп бөткән. Имәнес... Сирҡаныс...

Таң һыҙылып килә ине инде. Атыш туҡталыбыраҡ торған саҡ ине. һалдаттар төрлөһө-төрлөсә бөршәйеп, мылтыҡтарына таянып, шымып ҡалғандар. Тик Никита менән Байгилде ағай ғына бер-береһен йылытырға тырышып, арҡаға-арҡа терәп, сүкәйеп ултырғандар ҙа әкрен генә һаман һөйләшәләр:

— Арыуҙың да, йонсоуҙың да сигенә сығылды бит, туған. Ә һуғыштың иге лә, сиге лә күренмәй...— ти Никита.

Байгилде ағай өмөтһөҙ ҡул һелтәй:

— Үлмәйенсә ҡотолоп булмаҫ, ахыры. Ҡарышҡан шикелле, пуляһы ла килеп теймәй бит әле.

Никита уның ҡабырғаһына терһәге менән ҡаты ғына төртөп ала.

— Йә, йә, һөйлә бушты!

— Билдән батҡаҡҡа батып, көнө-төнө окопта ятыуға ҡарағанда үлеү артыҡ түгелме ни?

— Түгел. Окопта мәңге ятмабыҙ...

— Беҙгә тормош барыбер еүеш окоптан йылыраҡ булманы. Булмаҫ та...

— Ни һөйләйһең һин, Байгилде? Быңдай саҡта һин үҙ турыңда түгел, ә балаларың тураһында уйла... Мин шулай итәм... Уларҙын. — беҙҙең балаларҙың — бөгөнө-иртәне тураһында уйлайым. Уларҙы беҙҙән бәхетлерәк итеү өсөн көрәшеп йәшәгем килә. Ошо теләк миңә һәр саҡ көс, түҙем бирә...

— Мин дә шулай теләйем дә бит...

Окопҡа еүеш ҡыҙыл мәте өҫтөнән, селәүсен кеүек шыуышып, ят бер һалдат килеп төшә. Байгилде ағай менән Никита, һикереп тороп, мылтыҡтарына тотондо.

— Туҡта! Кем был?..

— Сеү, шауламағыҙ,— тип шыбырлай ят һалдат.— Күрмәйһегеҙме ни, үҙегеҙ кеүек рус кешеһе. һалдат,— ти. Унан үҙенә тоҫҡалған ике мылтыҡты бер ҙә иҫе китмәй генә яланғас ҡулы менән ике яҡҡа этәреп уҙа ла окоп төбөнә ултыра.— Шырпы юҡмы, егеттәр? Ҡана, төтәтеп ебәрәйек әле. Минең шырпы һыуланып ҡуйған, шабаш!

Ул ғыж-ғыж йүткерә. Арыҡ, йонсоу тәненә һис тә хас булмаған уяу ҡарашын әле бер һалдатҡа, әле икенсеһенә күсерә. Күренеп тора — үҙ кеше. Байгилде ағай гимнастерка кеҫәһенән шырпы алып уға һуҙа.

— Ниңә булмаһын шырпы? Бар. Мә, рәхим ит.

— Рәхмәт,— ти теге һалдат,— тартабыҙ икән.

Ләкин шырпы һыҙылмай. Еүешләнгән.

— Хәҙер үҙем ут ҡабыҙам,— ти Шаһиморат.— Көтөп торогоҙ.

Ул шинель итәге менән ҡаплап саҡма саға башлай. Ә теге ят һалдат, ҡыҙыҡһынып, үҙенә өнһөҙ-һүҙһеҙ текләп тороусыларға иғтибарлап ҡарап сыға ла ауыр ғына көрһөнөп ҡуя:

— Их, братцы, булманы. Был шырпы ла ебегән. Ах, шабаш! Тәмәке лә төтәтеп булмай бит, исмаһам...

Байгилде ағай уға ғәжәпләнеп тә, йәлләп тә, яҡын уҡ барып текләп тора.

«Ҡалай таныш тауыш... Ҡайҙа ишеттем һуң, мин был тауышты?.. Нисектер бик яғымлы ла, яҡын да һымаҡ...»

Ләкин хәтерләй алмай. Юҡ, ул был ротанан түгел. Бында улар бер-береһен яҡшы беләләр. Ә был — таныш та, таныш түгел дә...

Ят һалдат уның еүеш яурынынан дуҫтарса ҡағып ала.

— Йә, гимнастерка кеҫәһендәге шырпы ла һыуланған



бит, шабаш! Шунан кеше — һалдат нисек түҙергә тейеш, ә? һин быға нисек ҡарайһың, брат?

— һалдат нисек ҡарай ала? — тип ситләтеп кенә яуап ҡайтара Байгилде ағай.

— Эйе, һалдат нисек ҡарай ала?..

Ят һалдат башын баҫып, әҙерәк уйланып ултырғас, тирә-яҡҡа һынаулы ҡараш ташлап, тағы:

— Ах, шабаш! — тип ҡуйҙы.— Төтәтке килә бит әле. Ҡайһығыҙҙа ҡоро шырпы бар, егеттәр?

Бер генә һалдатта ла ҡоро шырпы табылманы. Ә Шаһиморат һаман саҡманан ут сығара алмай ине.

— Их, иптәштәр,— тип, әсенеп китте теге һалдат.— Беҙҙең яҙмыш — эт яҙмышы бит, ә? Йә, ни өсөн, кем өсөн беҙ ыҙа сигәбеҙ? Беҙгә был һуғыштың ни кәрәге бар?

Башҡалар еңһөҙ-һүҙһеҙ тапанып торалар.

— һуғыш батшаларға, байҙарға ғына кәрәк бит ул,— ти теге һалдат, ярһып.— Уларға һуғыш — байлыҡ, алтын өҫтәй. Ә беҙгә, эшсе-крәҫтиәнгә, нимә? Беҙ үләбеҙ, ҡырылабыҙ, бөләбеҙ генә. Бына нимә ул һуғыш беҙҙең өсөн!..

Уға бер кем дә, бер ни тип тә яуап ҡайтармай. Байгилде ағай ҙа һаман үҙенең: «Ҡайҙа ишеттем һуң, мин был тауышты?.. Ҡайҙа күрҙем был кешене?» — тигән уйынан ҡотола алмай тора. Ул арала был ят һалдат уға туп-тура төбәп:

— Бына,— ти,— һин, брат, әйтеп ебәр әле, ҡасандан бирле ошолай батҡаҡҡа батып, дары, ҡан еҫе еҫкәп окопта аунайһың?

— Мин икенсе көҙ,— тип яуап бирә Байгилде ағай.— Мин һуғыштың башынан түгел.

— һин икенсе кеҙ. Ә мин бына өсөнсө көҙ,— ти теге һалдат.— Йә, әйт әле, браток, шул осорҙа беҙ нимәгә ирештек? Нимә яулап алдыҡ? Алда беҙҙе ниндәй яҙмыш көтә?

— Нимә көтһөн? Бер ни ҙә.

— Бына шул-шул. Бер ни ҙә,— тип эсенеп дауам итә һалдат.— Быңдай һуғыш ул эшсе, батраҡҡа хәйерселектән, нужанан башҡа бер ни ҙә бирмәне, бирмәйәсәк тә... Ә бына азатлыҡ өсөн, әйтәйек, ер, икмәк өсөн батша, байҙарға ҡаршы һуғышһаң... Унда бер хәл... Унда өмөт итергә лә була...

— Саҡма ҡабынды, егеттәр! Мәгеҙ, төтәтегеҙ!

Шаһиморат ныҡыша торғас, саҡма сағып, тәмәке тоҡандырып ебәрҙе.

— һай, рәхмәт. Йәшәйбеҙ, былай булғас,— тип ҡыуанды ят һалдат.

— Эйе, саҡма ҡабынды. Йәгеҙ, күмәкләп төтәтеп ебәрәйек,— тине Никита.

Улар ен, эсенә йәшереп кенә махорка төтәтергә ултырҙы-

лар. Ят һалдат һаман тынманы. Әсе махорканы йотлоғоп һура-һура:

— Бына шулай, братцы — тип тағы һүҙ башлап китте.— һуғышты бөтөрөргә кәрәк. Мылтыктарҙы лучше батшаньщ үҙенә, офицерҙарҙың күҙенә төбәргә лә, бөтәбеҙ бер тауыштан:

— Бөтһөн һуғыш! Бөтһөн батшалар, байҙар! Йәшәһен эшсе-крәҫтиән азатлығы! — тип һөрән һалырға. Беҙҙең был һөрәндән ер тетрәһен, батша һарайҙары емерелеп төшһенГ Дөрөҫ һөйләйемме, братцы!

— Дөрөҫ! Хак һүҙ! — тине Байгилде ағай.

— Күптән ваҡыт. Елкәне бет етерлек таланы инде. Етер, мунса кәрәк!— тип ҡеүәтләне Никита. Теге һалдат тағы ла йәнләнеп китте.

— Үҙебеҙ көрәшмәһәк, беҙгә бәхетте алла ла, мулла ла, батша ла алып килеп тоттормаҫ... Был хаҡта большевиктарҙың йырында бик асыҡ әйтелгән... Ишеткәнегеҙ бармы?

Ул ғыжылдап торған ҡалын һалмаҡ тауыш менән әкрен генә йыр башлап ебәрҙе:

Никто не даст нам избавления:
Ни царь, ни бог, и ни герой.
Добьемся мы все освобождения
Своей собственной рукой...

һалдаттар таныш түгел, шулай ҙа ғәжәп яҡын, ағымлы йырҙың айышына төшөнөргә тырышып, тынып ҡалдылар. Шул саҡ Байгилде ағай ҡапыл, сикһеҙ ҡыуанып ҡысҡырып ебәрҙе:

— Матвей! Был һин бит!.. Хәтерләйһеңме, һуғыш яланын, госпиталде?..

— Йәнәш койкала...— тип элеп алды Матвей, кин. йылмайып.— Хәтерләйһеңме, һин төҙәлеп сығып киттең. Мин һаман койканан тора алмай ятып ҡалдым...

— Эйе, яткан көйө лә беҙгә ил, донъя хәлен белеп һөйләп аптырата инең... Ҡысҡырып китаптар укый инең...

— Онотмағанһың... Бр*аток...

Байгилде ағай менән Матвейға артыҡ һөйләшергә тура килмәне. Окопҡа күҙе түбәһенә сығып офицер йүгереп килеп инде.

— Ҡас! — тинеләр һалдаттар. Яурынға-яурын терәп, Матвейҙы йәшерергә тырыштылар.

— Кем бында бунтовщиктар йырын йырлай? Кем батша хәҙрәттәренә ҡаршы отко тарата? Әйтегеҙ, сусҡалар! Аңра һарыҡтар!..

Федька Рябой шулай аҡыра-ҡысҡыра, һалдаттарҙы этептөртөп, артҡа үтте һәм окоптан үрмәләп сығып барған Мат-



вейға нагандан атып та ебәрҙе. Матвей, тауыш-тынһыҙ, окоп төбөнә шыуып төштө. Никита менән Байгилде ағай уға ярҙамға ташланды. Яҡындан атыу арҡаһында ут ҡабынып киткән шинелде һүндерҙеләр. Йөрәген тыңлап ҡаранылар. Ләкин һун ине инде.

— Тап йөрәгенә тейгән,— тине Никита.

— Большевик... тиҙәр ине уны... госпиталдә...— тип шыбырланы Байгилде ағай. һалдаттарҙы ата-бабаһы, нәҫелнәсәбенән алып һүгеп, әле береһенең, әле икенсеһенен, танауынан ҡан туҙҙыра һуғып маташҡан Федька тамағына килеп тығылған ҙур ҡайғы төйөнөн йота алмай тонсоғоп торған Байгилде ағайҙың артына килеп тибеп ебәрергә лә, Матвейҙың кәүҙәһен рәтләп, һуҙып һалып маташҡан Никитаның яурынбашына наган төйҙәһе менән аяуһыҙ тондорорға ла өлгөрҙө.

— һеҙ, сусҡа морондар, ниңә большевикты яҡлайһығыҙ?!

Байгнлде ағай менән Никита, асыуҙан һәм ҡайғынан бөтә ҡурҡынысты онотоп, үлемесле һуңғы алышҡа әҙер булып, турайып баҫтылар.

Кулак Сергей Хитровтың уртансы улы Федька Рябой тән,кә ҙурлығы эре һары шаҙра менән ҡапланған быжыр битле, ағы әйләнеп, ҡан һауып торған сәгер күҙле офицер, ул бында үҙенең ҡанһыҙлығы, кешелекһеҙлеге менән дан тота. һис ғәйепһеҙгә һалдатты һуғыу, тукмау ҙа, хатта атып йығыу ҙа уның өсөн бер ни тормай. Шуға күрә һалдаттар уны йәне-тәне менән күрә алмайҙар. Уның кеше тукмауҙа ҙур тәжрибәһе бар. Кешене ҡалай һуғып йығырға ул яҡшы белә. Бына ул ин, элёк теҙемдең башында торған Шаһимораттың танауына ҡаната һукты. Сәхиулланын. ҡолаҡ төбөнә аяуһыҙ тондороп, иҫәңгерәтеп йыкты. Никита тәңгәленә килеп еткәс, ҡолаҡ тебенә етеп торған ҙур ауыҙын йырып:

— Әһә, яҡташ? Нихәл? — тип мыҫҡыллап көлдә лә, Никитаның нәфрәт тулы зәңгәр күҙҙәренә тебәп, аяуһыҙ һелтәнде. Ләкин Никита уның ҡулын һелтәгән ыңғайы шаҡара тотоп алды. Теш араһынан ҡыҫып сығарылған дәһшәтле тауыш менән:

— Сабыр ит, барин! Аҡрын!.. Ҡулың һынып ҡуймаһын,— тип иҫкәртте.

Ошоно ғына көтөп торған Байгилде ағай, йоҙроғон ҡаты йомарлап, офицерҙың бөйөрөнә йүнәлтте. Федька Рябой, йылан кеүек йомарланып, еүеш окоп төбөнә ауҙы.

— Тауыш-тынһыҙ ғына бөтерергә кәрәк йыланды! — тип бышылданы Никита.

Улар күмәкләп офицер өҫтөнә ташландылар. һәр кем үҙ иоҙроғо менән офицерҙың ҡабырғаһын ҡапшап ҡарарға, күптән бирле йыйылып килгән асыуын алырға ашыҡты. Тик

уларға был эштәрен аҙағына алып барып еткерергә тура килмәне. Таңды үлемесле ут сәсеп, ер һелкетеп ҡаршылаған дошман артиллерияһынынтәүге снарядтарынан береһе был окопҡа тура килде. Окопта ҡан, балсыҡ, ҡар бөтәһе бергә буталды. Ҡаты яраланған Никита менән Байгилде ағай тағы лазаретка эләкте.

Федька Рябой ҙа лазаретта ғына иҫенә килде. Уның беренсе һүҙе Никита менән Байгилде ағай тураһында булды.

— Ҡайҙа улар? Бунтовщиктар, большевиктар! Атырға! Үлтерергә!

Ләкин врачтар был һүҙҙәрҙе ҡаты яралынын, һаташыуы тип ҡабул иттеләр. Шулай ҙа ул, һауыға башлағас, ҡулына ҡәләм тоторлоҡ булғас, был хаҡта тейешле урынға хәбәр итергә онотманы:

— Байгилде менән Никита — большевиктар. Батша офицерына ҡул күтәреүселәр. Уларҙы, һис кисекмәҫтән тотоп, төрмәгә оҙатырға. Һуғыш осоронон, хәрби законы буйынса ҡаты яуапҡа тарттырырға!..— тип талап итеп яҙҙы ул. Ҡағыҙ йөрөп, ғәйеплеләрҙе эҙләп тапҡансы ике-өс ай ваҡыт уҙып китте.

Тышта ябалаҡлап, йылы, епшек ҡар яуа. Яраларҙы бәйләү бүлмәһендә улар икәү генә: талған күҙле, артыҡ аҡһыу йөҙлө йәш ҡатын — медсестра Марина ла, һул ҡулы яурынынан ала гипсҡа ҡатырылған булһа ла, йөҙөнән әсе ҡышҡы елгә янған ҡаралыҡ һаман бөтөп етмәгәнлектән, йәш, сәләмәт, көслө күренгән Байгилде ағай.

Марина баянан бирле Байгилде ағайҙың ҡулынан гипсты аҡтара. Үҙе унын. шоморт ҡара бөҙрә һаҡал баҫҡан ғәйрәтле йөҙөнә, киң күкрәгенә һис тә хас булмаған моңһоу, һөрмәле күҙҙәренә яратып ҡарап-ҡарап ала.

«Нинәлер һәр саҡ шулай ҡарай ул миңә. Ни эшләп минә генә булһын? Бөтә донъяға, бөтә кешегә шулай һөйеп ҡарай ул. Уның йөрәгенен. һәйбәтлеге ҡарашында сағыла... яҡшы күцелле ҡатын»,— тип, һалмаҡ ҡына уйланып ултыра Байгилде ағай. Сестра ғәжәп ҙур һаҡлыҡ менән һаман гипсты телгеләй.

— Ауыртмаймы?

— Һеҙҙең шәфҡәтле ҡулығыҙ тотонған урындың ауыртыуы мөмкинме һун? — тип шаярта Байгилде ағай.— Йәлләмәй аҡтарығыҙ.

Марина тыйнаҡ ҡына йылмайып ҡуя.

— Һөйләйһегеҙ тағы...

Уның аҡһыу битенә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерә. Ул тағы ла һылыу, һөйкемле булып китә. Байгилде ағай уға оҙаҡ-оҙаҡ текләп ултыра.

«Ниндәй һәйбәт ҡатын...»



Сестраның гипс аҡтарған ҡулдары әкрен генә ҡалтырай, йөҙөнә моңһоулыҡ йүгерә.

— Миңә улай төбәп ҡарамағыҙ! — ти ул, уңайһыҙланып.— Һеҙҙең күҙҙәрегеҙ шундай ҡаралар... Утлы күмер кеүектәр...

— Булһа ни... Насармы ни?

— Түгел... һәйбәт... Ләкин ҡарарға ярамай...

Байгилде ағай һау ҡулы менән Маринаның арҡаһынан бала кеүек һөйөп ҡуя.

— Их, Марина, Марина, балаҡай! Ҡыҙым кеүек күрәм бит мин һине. Минең дә ҡыҙҙарым бар...

Маринаның йөҙөн,) тағы ла ҡуйыраҡ ҡыҙыллыҡ йүгерә.

— Теймә. Ярамай.

Байгилде ағайға үҙен өс ай буйына ихлас күңел менән тәрбиәләп, яғымлы ҡараштары менән иркәләп торған был изге күңелле ҡатынды ҡалдырып китеүе ҡыйын һымаҡ тойолоп китә.

«Бер ҡараһаң, ғәжәп ҡыҙыҡ был тормош: кешеләр осрашалар, танышалар, туғанлашалар, ҡайһы берҙәре ратышып та ҡуялар хатта... Унан айырылышалар. Башта ауыр, моңһоу була. Унан онотола... Онотолмай торғандары ла була, әлбиттә. Әйтәйек, бына Сәғүрә, Шәһит бабай, Никита, Сыуаҡай әбей, Матвей... Моғайын, Марина ла онотолмаҫ...»

— Булды,— тип Марина уның уйын бүлә.— Булды, гипсты алып бөттөм. Хәҙер тағы һуғышырға мөмкин. Ярсылған һөйәктәрең тоташып бөткән.

— Рәхмәт, Марина һылыу...

Байгилде ағай, ниндәйҙер бер кәрәкле һүҙен онотҡан шикелле, сестраның ҡаршыһына баҫып туҡталып ҡала. Маринаның уға төбәлгән зәңгәр күҙҙәрендә йәш бөрсөктәре йымылдай.

— Бына шулай... һәр саҡ шулай күренә лә китә лә юғалаһығыҙ... Минең ирем дә юғалды... үлде... Беләһеңме, ул бер хатында үҙен тап бына һинең кеүек бер башҡорт егете һуғыш майҙанынан күтәреп алып сығыуын яҙғайны: «Юҡһа мин унда ҡан һауып үлә инем, ярам бик ҡаты ине»,— тип яҙғайны... Шунан ул был яраһынан һауыҡты, тик аҙаҡ барыбер үлде... Бигерәк батыр, үҙен аямаҫ кеше ине шул минең ирем. Бына мин һине минең иремде ҡотҡарған шул башҡортҡа оҡшатып яҡын күрҙем... Хатта шул башҡорт үҙе һиндер кеүек тойола... һинең ошо ҡулдарың. минең иремде күтәргәндер, ошо ҡара күҙҙәрең уны күргәндер һымаҡ... Шуға улар миңә бик яҡын тойолалыр һымаҡ...

Байгилде ағайҙың йөрәген ниндәйҙер яҡты нур тишеп үтте. Ул үҙе лә аңғармаҫтан, сестраны бала кеүек ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫты.

— Их, Марина, Марина!.. Балаҡай!.. Ниндәй яҡшы күнелле ҡатын һин!.. Ирендән, исемә кем инә, һылыу?

— Матвей...

Ошо ваҡыт коридорҙа ниндәйҙер тупаҫ тауыштар яңғырап китте. Кемдәрҙер Байгилде ағайҙың исем, фамилияһын әйтеп ҡысҡырҙы. Оҙаҡламай бүлмәгә лазареттың баш врачына эйәреп ике полицай килеп инде. Улар Байгилде ағайға бер кем менән бер һүҙ һөйләшергә лә ирек бирмәй, арлы-бирле кейендереп, этеп-төртөп, лазареттан алып сығып киттеләр.

«Федька Рябой тере икән, яуыз! Их, шунда үлтереп өлгөрөп тә булманы бит, исмаһам...— тип, үкенеп уйланды Байгилде ағай.— Никита ла эләкте инде былай булғас...»

Марина, башы әйләнеп, ҡағыҙ кеүек ап-аҡ булып стенаға һөйәлде.

— Әй алла! Әй алла, был ни эш?! Ниңә уға тейәһегеҙ?!

Байгилде ағай, ишек төбөнә еткәс, һуңғы тапҡыр уға боролоп ҡараны:

— Хуш, Марина һылыу! Бөтәһе өсөн дә рәхмәт!..

## XVI

Иртәгә баҙар тигән көндө, төштән һун, Сәрбиямал өрян,ы ауыл санаһына күптән түгел алған көрән атын ектереп, Иштуғанды күсергә ултыртып, Яҡуп ауылына китеп барҙы. Ул ҡайһы саҡта шулай баҙарға бер көн алдан китеп, үҙенә эйәреү өлгөһө булған Батыйма тутайға төшөп ҡунып, үҙенсә күңел асып, форсить итеп ҡайтырға ярата. Ҡалаға яңғыҙ үҙе йөрөһә лә, баҙарға күсерһеҙ бармай. Бынын. менән Батыйма тутай алдында үҙенен, дә унан кәм түгеллеген күрһәтергә маташа ине. Ул, ысынлап та, йыуанлыҡта ла, өҫтөнә кейгән төлкө тун, бүре толоп, дебет шәл, аяҡтағы ҡыҙыл сыбар ҡала быймаһы менән дә Батыйма тутайға оҡшап уҡ тора ине хәҙер.

Сәрбиямал, ларҫ-лорҫ баҫып, санаға сығып ултырҙы ла, аяҡтарын янға һалындырып, тар кузлаға саҡ һыйып урынлашҡан Иштуғандын, арҡаһына, сабырһыҙланып, твртөп алды.

— Ҡыу! Штубы шәп кенә елдереп алып бар!

Ат ығышып ҡына ҡуҙғалды. Сәрбиямал Йәнешкә һуңғы бойороҡтарын туҡыны:

— Илла донъямды, мал-тыуарымды яҡшы ҡаракыҙ! Әгәр ҙә мәгәр, анауы бәрәсләргә торған оздай һарығымдын, бәрәсен туңдырып ҡуйһағыҙ, йәнегеҙҙе алырмын! Ҡолағығыҙ ишетһен штубы!

Йәнеш, ғәҙәтенсә, өнһөҙ генә тыңланы. Сана, шағыр-шоғор килеп, ишек алдынан саҡ сығып китте. Йәнеш ҡапҡаны



ябып ингәс, ҡыҙҙар был иректе ҡалыуға ҡыуаныстарынан тындары бөтөп, бер аҙға хәтле ни әйтергә, ни һөйләргә белмәй, аптырашып торҙолар.

Быйыл ҡыш, донъялар имен булмағас, Сәрбиямал Ырымбурға йөрөүҙән туҡталғайны. Өй хәҙер бик һирәк аулаҡ ҡала ине.

Ахыр, Емеш телгә килде:

— Йә-неш! — тине ул, ашҡынып.— һин миңә итегенде биреп тор әле.

— Ниңә?

— Ҡыҙҙар йыяйыҡ!.. Аулаҡ аш бешерәйек. Ҡалай мәрәкә булыр, эйе бит, апай!..

«Апай!..» Аулаҡ ҡалыу ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй ашҡынған йөрәктән атылып сыҡҡан был ябай һүҙҙән Емештен, үҙенә лә, Йәнешкә лә сәйер тойолоп китте. Улар тағы бер аҙ өндәшә алмай торҙолар. Сөнки быға саҡлы Емеш нисек кенә теләһә лә үҙен ошо йомшаҡ күңелле, илаҡ Йәнештән өлкәнерәк тойоп, уға һис тә апай тип әйтә алмай яфалана. Ә үҙен,-дән өлкән кешегә «апай» тип ололап ендәшмәү бында ҙур ғәйеп һанала ине. Хәҙер бер тапҡыр әйткәс, бынан ары был һүҙҙе Йәнешкә ҡарата ҡулланыу ҙа Емеш өсөн ауыр булмаясаҡ. Шуға күрә был ябай ғына һүҙ ошо минутта, унын, күңеленә бөткөһөҙ еңеллек биреп, ә Йәнеште бер илегә үҫтереп ебәргән кеүек булды. Инде Йәнеш, апай кеше, үгәй әсәһенен. асыуланыуынан ни тиклем генә ҡурҡһа ла, Емештең был ҡыйыу теләгенә ҡаршы килә алманы.

— Ярар, улай булғас... Бар, һылыу, тиҙ генә йөрө түлке,— тине.— Әтү мин мал ҡарарға һуцлап ҡуйырмын.

— Хәҙер! — тине Емеш, өҙөп.— Хәҙер генә әйләнеп ҡайтырмын, апай!..

Емеш Йәнештең йөн шәлен ябынып, итеген ҡуңалтаҡ көйө генә аяғына эләктереп алды ла, ҡурпылдата баҫып, өйҙән сығып та китте. Ул хәҙер ҡыҙҙар йыйыу өсөн генә түгел, бер һылтауҙан күҙҙән бирле йүнләп күрмәгән Бибеш апаһына хәтле барып етеү өсөн дә ашҡына. Был аҙ һүҙле, ғәжәп сыҘамлы кескәй ҡыҙҙа тормошҡа, әйләнә-тирәгә, кешеләрҙен. яҙмышына ҡарата һис бер ни менән дә тотоп тыйғыһыҙ ҡайнар ҡыҙыҡһыныу менән бергә, тормоштоң ниндәй генә тупаҫлығы ла баҫа алмаған тынғыһыҙ балалыҡ хисе лә һаҡланып килә. Һәм ул, саҡ ҡына мөмкинселек булыу менән, шулай ярһып тышҡа бәреп сыға. Был саҡта, ғәҙәттә, бойоҡ Емеш иң шаян, иң күңелле, иң тотоп торғоһоҙ уйынсаҡ балаларҙың береһенә әйләнеп китә ине. Әле лә Йәнеш унда ошо ҡоторонҡо йөнлелек уянғанын күреп: «Берәй эш боҙоп ҡына ҡуймаһа ярар ине»,— тип, хафаланып, һалҡын иҙәнгә ялан аяҡ ба-

çып тороп ҡалды. Ә Емеш ул а^ала ҡойон шикелле осоп үрге осҡа, Таиба әбейҙәргә барып та етте.

Таиба әбей Хамматы менән Закиры һуғышҡа киткәс, бөтә әсәлек мөхәббәтен, электән дә «шәкерт улым» тип айырып ҡәҙерләгән Хисбуллаһына күсерҙе. Хисбулланың ун. күҙе күрәғарау булыу арҡаһында, аҡ билет булып, һуғышҡа китмәй ҡалыуын алланың үҙенә ҡарата булған мәрхәмәте тип иҫәпләне. Хисбулланын, алдында хәҙер элеккесә ҡайыш ҡамсы ялтыратыу ғәҙәтен бөтөнләй ташланы. Ике һүҙенен, берееһендә уны «бәпесем» тип кенә атап йөрөттө. Бибештән дә уны йән-тән менән яратыуҙы, ҡәҙерләүҙе, уға хеҙмәт итеүҙе талап итте. Бибеште бөтә кешенән көнләп, өйҙән бер аҙым ситкә ебәрмәй, бикләп тигәндәй тотто. Шулай ҙа Бибеш йылданйыл үҫә, ҙурая, тән яғынан ғына түгел, аҡыл, холоҡ яғынан да өлгөрөп етә барҙы. Хисбуллаға килеп тора башлауына биш-алты йыл тигәндә, ул инде Иштуған шикелле нәҙек оҙон буйлы, ҡыйылып киткән ҡара ҡашлы, тау сейәһе кеүек алһыу йөҙлө ҡатын булып үҫеп етте. Уның күҙ ҡараштары һаман уяуыраҡ, аяҡ баҫыуҙары ла ышаныслыраҡ була бара ине хәҙер.

Таиба әбейҙең йәш сағын хәтерләгән кешеләр уның хаҡында:

— Тап бейеме кеүек өҙә баҫып йөрөй. Килен бейем оҫкағынан ярала тип белмәй әйтмәгәндәр шул. Бының да, бейеме шикелле, ҡулынан да, теленән дә килер, ахырыһы, шулай булыры күренеп тора,— тип һөйләй ҙә башланылар инде. Ә ҡайһы берәүҙәре:

— Алманын. аҫылын ҡорт ашай тигәндәр бит. Дөрөҫ шул. Был Хисбулла, атаһы мәрхүмгә оҡшап, ебегән генә нәмә булды... Ә ҡатындың ниндәйенә тура килде! Таиба әбей ҙә донъяны яңғыҙ үҙе көткәйне, Бибеш тә шулай булыр, ахырыһы,— тип һоҡланып та, йәлләп тә ҡуялар.

Бибеш, ысынлап та, эште бик ярата. Өйҙә лә, ҡырҙа ла хәҙер уның ҡулында эш янып ҡына тора. Уға хәҙер Таиба әбей ҙә бәйләнер урын таба алмай. Ә инде сигеү, бәйләү кеүек ҡул эштәрендә ул хатта Таиба әбейҙең үҙенән дә уҙҙырып ебәрә. Таиба әбейҙе хәҙер Бибештең аҙ һүҙлелеге, үҙе менән дә, улы менән дә һаман асылып һөйләшмәүе генә борсой.

«Нимә уйлай? Нимәгә әҙерләнә? Хисбулланы яратамы ул, юҡмы? Бынnetwork ла Сәлимә кеүек бер саҡ күтәрелеп сығып китмәҫме?..»

Таиба әбейҙең был борсоулы һорауҙарыша Бибештен, һаман буйҙаҡ йөрөүе лә килеп ҡушыла.

«Исмаһам, бала ла килтермәй бит. Балаһы булһа, ратмаһа ла, өйрәнеп, эйәләшеп китер ине...»

Ә Бибеш был ғаиләлә үҙен һаман ваҡытлы, ялсы ҡыҙ һымаҡ итеп тоя. Бында уның йәрәген биләгән әле бер нәмә лә юҡ.

«Донъя кешегә бер битен, бер артын күрһәтә, тиҙәр бит... Минә лә ул гел генә артын күрһәтеп тормаҫ... Бәлки, берәй саҡ битен дә күрһәтер...» тигән өмөт менән генә йәшәй ул. Яратыу тойғоһо ла әле уға таныш түгел. Ул тик:

«Һин ир ҡатыны итеп бирелгән икәнһең, торорға, тоғро ҡатын булырға, бөтәһенә күнегергә тейешһең. Үҙ йерәк яран,-ды асып, кеше көлдөрөргә ярамай» тигән, үҙе уйлап тапҡанмы, әллә быуаттар буйы туҡылып, быуындан быуынға күсеп килгәнме, ҡаты ҡағиҙәне генә беләә. Шул ҡағиҙәгә өнһөҙһүҙһеҙ буйһоноп йәшәй бирә ине.

Бына ошо моңһоу Бибеш апаһын һағынып, тәүге мөмкинлек менән йүгереп килде Емеш. Ләкин Таиба әбейҙен, өйө уны элек-электән, нисектер, тарта ла, ҡурҡыта ла ине. Әле инде «барырға, апайымды күрергә» тип ҡыйыу ғына уйлаһа ла, инеү менән бөтөнләй оялып, уңайһыҙланып, ишек төбөндә, мейес буйында туҡталып ҡалды. Өй ғәжәп йылы, яҡты. Ҡаҙанда талғын ғына ҡайнап ултырған һимеҙ иттән өйгә тәмле еҫ таралған. Иҙәндәре генә түгел, стеналарына хәтле һап-һары итеп ҡырып йыуылған был ғәжәп таҙа, иркен өй Емешкә әкиәттәге батша һарайы кеүек матур күренә. Бөгөн ул бигерәк таҙараҡ, яҡтыраҡ, матурыраҡ һымаҡ. Ул үҙенен, алама күлдәге, башынан һалам олторағы сығып торған тайыш итеге, йыртыҡ шәле менән бында үҙен бөтөнләй юҡка сыҡҡан, бөткән итеп тойҙо.

«Йә, бынауындай сүмәлә төҫлө өҫ-башым менән ни тип кешегә килеп индем икән? Тиҙерәк, йәһәтерәк сығып китергә кәрәк бынан!..» — тип, кәмһенеп уйланды ул. Ләкин урынынан ҡуҙғала алманы. Әйтерһен, был өй эсендәге йән йылытҡыс һөйкөмлөлөк уны баҫҡан еренә ҡаҙаҡлап ҡуйҙы.

Емеш барып ингәндә, әле ул һөйләгән ыҫпай мейес шикелле ап-аҡ йөҙлө, ҙур олпат кәүҙәле, киң битле Таиба әбей, урындыҡта ҡолас ташлап, йөн сиратып ултыра. Эйәк осондағы ҙур ҡара миңенә үҫкән бер семтем йөн, уның былай ҙа көслө ихтыярлы, ҡырҡыу йөҙөнә тағы ла олпатлыҡ өҫтәгән һшаҡ була.

Емеш, был мингә текләп:

«Ҡыш кенә нисек тере йерей һуң был себен?» — тип аптырай. Уның алыҫтан насар күрә торған күҙҙәре минде себен итеп күрһәтә.

— Емеш ҡоҙаса, нисек кенә килеп сығаһы иттең, байғош!.. Өшөгәнһеңдер бит, меҫкенкәйем. Тышта ҡалай буран бит!.. Февралдә гел шулай күҙ асҡыһыҙ буран була ул,— тип, изгелекле йылмайып ҡаршыланы уны Таиба әбей.— Уҙ, ҡоҙаса, ултыр, йылын,— тине. Ул хәҙер Бибеште ратҡан

кеүек унын, һенлеләрен дә яҡын күрә, уларҙы яҡты йөҙ, яҡшы һүҙ менән ҡаршы ала башлағайны. Ләкин уның «байғош», «меҫкен» тигән һүҙҙәре Емешкә оҡшамай. Емештең байғош та, меҫкен дә булғыһы килмәй. Ғөмүмән, үҙен етем тип йәлләгән кешеләрҙе яратмай ул. Был йәлләүҙә унын, ауыр яҙмышына һис бер еңеллек килтермәй торған яһалмалыҡ, кәмһетеү бар кеүек тойола уға. Ә унык кәм дә, кәмһетелгән дә булғыһы килмәй. Шунлыҡтан ул, ғәҙәттә, үҙен йәлләп һөйләнә башлаған кешеләрҙен, янынан тиҙ генә китеп бара. Мөмкин булһа, ҡабат ундай кешенең янына бер ҡасан да килмәй. Ләкин ул бөгөн бынан, Таиба әбейҙәрҙән, был һүҙҙәрҙән һуң да тиҙ генә сығып китә алманы. Таиба әбейҙең көләс, мөһәбәт йөҙөнә, ышаныслы тыныс тауышына, унын ҡасандыр ирҙәр менән ярышып кәбән һалып дан алған, әле хәҙер ҙә үҙҙәренең баҙыҡлығын юғалтмаған, бағана кеүек мыҡты беләктәренә ҡарап:

«Их, мин дә унын кеүек ҙур, көслө булһам ине... ул саҡта мин дә бер кемдән ҡурҡмаҫ инем... Бер кемдә-н дә... Хатта үгәй әсәйҙән дә...» тип уйланып, һаман шул мейес буйында баҫып тора бирҙе. Ә Бибеш, бейеме алдында һеңлеһенә һүҙ өндәшергә ҡурҡып, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә Емешкә ҡараштырып түрбаш яҡта, ҙур ағас табаҡта һалмалыҡ ҡамыр баҫыуын дауам итте. Унын. ҡолонсаҡ тояғы шикелле кескәй йомро йоҙроҡтары ниндәйҙер үҙенә генә хас бер ритм менән ҡамыр өҫтөндә бер туктауһыҙ бейейҙәр,Тос йоҙроҡтары аҫтында сөсө ҡамыр ҡыуыҡланып шарт-шорт ярылып тора. Емеш белә. оҙаҡ баҫыуҙан һап-һары булып, һағыҙланып киткән бындай ҡамырҙан һалманы ҡағыҙҙай йоҡа итеп йәйеп була. Ундай һалма иҙелмәй ҙә, ойошмай ҙа. Егәрле килендәр һалмалыҡ ҡамырҙы гел шулай һағыҙланғанса баҫалар.

Ҡамыр баҫҡан ыңғайға, Бибештек сәсендәге сулпылары ла беләгендәге суклы беләҙектәре лә:

— Сылтыр-сылтыр... сылт-сылт!.. Сынғыр-сынғыр!.. Зын.!.. Зын!..— тип таҡмаҡлап торалар. Әйтерһен, Бибеш ҡамыр баҫмай, ә ниндәйҙер үҙенә генә хас бер көйгә бейеп тора.

«Мин дә шулай эшләй алыр инем,— тип уйлай Емеш.— Их, ҡасан мин дә ошо Бибеш апайым кеүек матур, егәрле килен булырмын икән?.. Уй, бейем кеше бынауы Таиба ҡоҙағый кеүек уҫал булһа?.. Ниңә шул тиклем уҫал икән ул?.. Йыуаш бейемдәр буламы икән?..»

Емештең был һорауына күңел төбөнән кемдер:

— Булыу ҡайҙа ул!.. Хатта, хатта мәскәй әбей булып, килененең елек майын һурған бейемдәр ҙә була ти ул,— тип яуап биргән кеүек булды. Ошо ваҡыт ҡылт итеп унын. хәтеренә «Ҡыҙыл үгеҙ башын күпһенде лә ҡәйнәм...» тигән әкиәт килеп төштө. Уның тәне һыуыкһып, арҡа буйҙары сымырлап ктте. Үҙенең ҡурҡыныслығы һәм ниндәйҙер үҙенә хас моңһоулығы менән һәр саҡ Емештең бөтә йөрәген биләп ала торған был «Ҡыҙыл үгеҙ башы» әкиәтендә лә уның кеүек етем ҡыҙҙың фажиғәле яҙмышы тасуирлана ине: «Бына бер етем ҡыҙҙы алыҫҡа, урман артына, кейәүгә биреп ебәрәләр. Уның бейеме уҫал ғына түгел, ә мәскәй әбей булып сыға. Килененең көн дә елек майын һурып, һарғайтып, киптереп бөтөрә. Ахыр, бөтөнләй үк ашап ҡуйырға теләп, уны аталарына ҡунаҡҡа ебәрә. Килен бахыр, быға ҡыуанып, артынан килгән туры атын егеп, ике ҡыҙын ултыртып, күстәнәскә бер ҡыҙыл үгеҙ башы, ете икмәк һалып юлға сығып китә. Ә уның артынан бейеме, мәскәй әбей булып, ҡыуып етә лә:

— Бер икмәгеңде бир. Атыу үҙеңде ашайым! — тип ҡысҡыра. Теге килен, меҫкен, бер икмәген ырғыта ла атын ҡыуалап алға саба. Бер аҙҙан бейеме тағы ҡыуып етә. Тағы:

— Бер икмәгеңде бир, юҡһа үҙеңде ашайым! — тип һөрән һала. Шулай итеп, ете икмәкте лә, ҡыҙыл үгеҙ башын да, ике ҡыҙын да берәм-берәм алып ашап бөтә. Ахыр килеп атын да тартып алып ашай. Килен, меҫкен, бейеме атты ашаған арала, йәйәүләп йүгереп ата йортона барып етә. Был ваҡытта төн уртаһы ауған, атайҙары ҡаты йоҡоға талған була. Хәле бөтөп йүгереп килгән килен ишек ҡағып:

— Атай, атай, ишек ас! — тип ҡысҡыра.

— Минең ҡыҙым төндә йөрөмәҫ! — тип яуап бирә атаһы.

— Апай, апай, ишек ас!

— Беҙҙең ҡыҙыбыҙ төндә йөрөмәҫ,— ти үгәй әсәһе. Унан ҡыҙ:

— Ағай, ағай, ишек ас! Еңгә, енгә, ишек ас! — тип ҡысҡырып ҡарай. Улар ҙа:

— Беҙҙең ҡарындаш тендә йөрөмәҫ.

— Беҙҙен. бикәс төндә йөрөмәҫ...— тип яуап ҡайтаралар. Ул арала теге мәскәй әбен килеп етеп киленен дә ашап китә. Ишек тотҡаһына килендең бер тотам сәсе генә уралып тороп ҡала. Иртәнсәк ағаһы мал ҡарарға сыҡҡанда был сәсте табып ала ла:

— Скрипкамдың ҡылы өҙөлгәйне, ҡалай шәп булды бит әле,— тип ҡыуанып, скрипкаһына ҡуйып, уйнап та ебәрә. Шунан бөтәһе лә аптырап ҡалалар. Сөнки нисә уйнаһа ла, скрипка быҒаса бер ҡасан да булмаған иҫ киткес матур, моңло көйгә:

Ҡыҙыл үгеҙ башын күпһенде лә ҡәйнәм,
Ете икмәгемде күпһенде лэ ҡәйнәм,
Ике һылыу ҡыҙымды күпһенде лә ҡәйнәм,
Сапсан туры атымды күпһенде лә ҡәйнәм,
Минен, йәш ғүмеркәйемде күпһенде лэ ҡәйнәм,
Бөтәһен дә йотоп бөттө минен. мәскәй ҡәйнәм!..—

тип йырлап тик тора, ти. Ошонан һуң ғына улар төндә ишек ҡаҡҡан үҙ ҡыҙҙары булыуына төшөнөп, илаша-сыулаша башлағандар, ти. Ләкин эш үткәс, илауҙан ни файҙа? Күңелең яҡшы булһа, һин кәрәк саҡта йәллә, эш үтмәҫ элек ярҙам ҡулынды һүҙ!..»

Таиба әбей тәрән уйға батып, юғалып ҡалған Емешкә ҡарап баш сайҡап торҙо ла, тағы бер тапҡыр:

— Емеш ҡоҙаса, ниңә ултырмайһың? Ниңә ағас кеүек ҡатып мейес буйында тик тораһың,? — тип ҡабатланы.

Был тауыш Емеште һиҫкәндереп, уятып ебәрҙе. Емеш үҙ уйынан үҙе оялып ҡып-ҡыҙыл булып китте. Ләкин урынынан һаман ҡуҙғалманы. Таиба әбей унан һынаулы ҡарашын алмай, тағы бер тапҡыр башын сайҡап ҡуйҙы ла, бойороу тауышы менән Бибешкә өндәште:

— Килен, итенде һоҫ. Бешкәндер. Ҡоҙасаны ит менән һыйлайыҡ.

Шундай бойороҡто ғына көтөп торған Бибеш, ҡамырын лап иттереп туҡмас таҡтаһына һалды ла, эре-эре киҫәкле иттәрҙе ҡаҙандан алып ашлауға бушата башланы. Уның баянан бирле Емеште ашатып, тамағын туйҙырып ебәргеһе килеп тора ине. Ул ентекле ҡарашлы, ғәжәп уйсан ҙур ҡара күҙле, бүрек кеүек ҡабарып торған ҡалын бөҙрә сәсле кескәй һеңлеһен сикһеҙ ярата ла, йәлләй ҙә ине. Шуға уны яңғыҙ осратҡан саҡта ниндәй ҙә булһа берәй йылы һүҙ әйтеп, йыуатып, күңелен күтәреп китергә тырыша. Емеш әллә ниҙә бер үҙҙәренә килеп инһә, уны ашатып, тамағын туйҙырып ебәрергә ашыға. Ләкин уға быны эшләргә һис тә тура килмәй. Емеш, быныҡ өсөн апаһына һүҙ тейер тип ҡурҡып, бер ҡасан да унан аҙыҡ алып ашамай. Әле инде Бибеш Емеште Таиба әбейҙең һыйынан да баш тартыр тип һис тә уйламай ине. Бына ул ашыға-ҡабалана итте һоҫоп, бейеменең алдына алып барып ултыртты.

— Бешкән, бейем. Иҙелә лә башлаған.

— Ярар, һәйбәт,— тине Таиба әбей. Сиратып ултырған йөнән бер ситкә альш ҡуйҙы. Мейес соҡалтаһындағы үҙенән биҙәк сығарып эшләнгән ауыр суйын ҡомғанды алып ундағы эҫе һыу менән ҡул йыуҙы ла ҡайтанан урындыҡҡа ултырҙы. Унан, Емешкә яратып ҡарап, ашыҡмай ғына ит турарға тотондо.

— Ултыр тигәс, ултыр инде, ҡоҙаса, ит ашарға ултыр. Юҡһа үҙенде килен итмәм.

Ул Емеште ҡайһы саҡ шулай килен итәм тип мәрәкәләргә ярата ине.

— Емеш егәрле ҡыҙ булмаҡсы. Уны Байрамғәлемә кәләш итеп алып бирмәй булмаҫ,— тип мәрәкәләй ине ул яйы килгән һайын.



Ошо бер ҡатлы шаяртыуы
ҡыҙҙы әҙ генә булһа ла йыуа
асырға теләй ине шикелле. Лә|
дырмай ҙа, көлдөрмәй ҙә. Кр
күңеленә ниндәйҙер ауыр тойғо
та, уның тиҙерәк үҫеп, Бибеш а
лен булып етешеү теләген һүн

Дөрөҫ, Таиба әбейҙең Байр
уйынса, ауылда иң һәйбәт ма,
оҡшап эре һөйәкле, асыҡ йөҙл
был малай үҙенең ҡыйыулығы,
гө менән дә үҙ тиҫтерҙәренән Н1
ба әбейҙән башҡа кешеләр Бай{
тә уны Байрас тип атай. Хатта б
дәйҙер билдәһеҙ йылылыҡ, тан!
үрелеп үҫеп барғанын да тойоп
лен итәм»,— тип мәрәкәләүе ген|
ты һүрелтә, уны Байрастан а|
билдәһеҙ шатлыҡты аңлайышһи
китә ине. Әле лә уның «килен» -.
яғымлы, һөйкөмлө өйҙө, ҡапыл
дауыл кеүек тышҡа ырғытты. У.l
ҡа атылғанын белмәй ҙә ҡалд

— Туҡта, алйот... Ашамай
гергән апаһынан тоттормаҫ ө
шөп, аяғын да ауырттырҙы. Шу^
һе кеүек ырғып-һикереп урам *б*\
«Йә, төптө ас бит инде... Астан]
аҙыҡ алып ашамаҫ... Йә, алй(
ҡапҡа төбөндә тороп ҡалды.

Ҡарасәс әбейҙәрҙен. өйө Таиб
аша ғына торһа ла, Емеш уларға
на өшөнө. Шуға күрәмелер, сәй>
ыҫмала, балауыҙ еҫе аңҡып торғ
йәмле тойолдо. Ул барып ингән;
кемгәлер сәйгә киткән. Сабира м
рәһен, улар бөҙҙа һырғалаҡ эйе|
алды яҡ тәҙрә янында, түмәр
Ул Емеште:

— Бәй, нисек туңмай килег
яғымлы йылмайып ҡаршы алды|
дағы һандыҡтан, үҙ янынан, уғ;

— Ултыр, йылын, һылыу.

Емеш өнһөҙ-һүҙһеҙ генә һан|
өшөгән ҡулдарын мейескә тәрәп *й*
нә күҙ йөрөтөп сыҡты. Ул бында]

се тапҡыр килгәйне. Шулай ҙа өйҙә Емештең иғтибарын тартырлыҡ яңы бер нәмә лә күренмәне. Һаман шул Емештәрҙеке шикелле боҙ менән ҡапланған кескәй тәҙрәләр, сепрәктән һуғылған балаҫ түшәп, арҡыры-буй юрғандарҙың мөйөштәренә бер-ике ас мендәр һалып ҡуйылған тар урындыҡ, ап-аҡ итеп ағартып, ҡаҙ үте менән йөм-йәшел семәкәй биҙәктәр төшөрөп матурлаған бәләкәс кенә мейес, урҙала элеүле торған бер-ике күлдәк тә, ишек янындағы оҙон ағас сөйҙәрҙән сосорап төшкән йүкә ҡамыт менән йүкә дилбегә. Бөтә байлыҡ ошо. Былар Емеш өсөн яңылыҡ түгелдәр ҙә. Уларҙы Емеш бығаса ла күп күргән. Бында уның бөтә иғтибарын үҙенә тарткан берҙән-бер нәмә Тимербай тегеп ултырған бәләкәс кенә ҡара күн итек булды. Емештең ундай итекте бер ҡасан да былай яҡындан күргәне юҡ ине.

Тимербай был итекте елкәһенә еҙ башлы ҡаҙауҙарҙан төрлө кәкерсәктәр, семәкәйҙәр яһап, беҙ кеүек нәҙек бейек үксәгә бәләкәс кенә еҙ даға ҡағып, әле генә тегеп бөтөрөп ултыра. Ул, ахыры үҙ ҡулдарының оҫталығына үҙе лә һоҡланып, итекте әйләндереп-тулғандырып ҡарап ҡуя. Емеш тә үҙенең генә түгел, бәлки ауылдағы күпселек ҡыҙҙарҙың ирешә алмаҫлыҡ хыялдарының береһе булған был итекә һоҡланыуын йәшерә алмай текләп ҡалды.

«Их, уны бер генә тапҡыр, һис юғы бер генә тапҡыр кейеп ҡараһан. ине!..»

Тимербай ҙа, уның уйын аңлаған һымаҡ, ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы.

— Эйе, Емеш ҡарындаш, һин кейһәң ине был итектәрҙе, Собхан старшинаның маҡтансыҡ Алтынбикәһе түгел!.. Эй... Ҡайһылай килешер ине һиңә, ә?..

Уға яуап биреүсе булманы. Тик бер аҙҙан ул ниндәйҙер эске ышаныс менән, ҡырҡыу ғына итеп:

— Ярар, бошонмайыҡ, ҡарындаш,— тип ҡуйҙы.— Кем белә, былдай итекте хәҙер Алтынбикә кейһә, киләсәктә, бәлки, һин кейерһең... Шулай бит, ҡарындаш?..

Унан ҡапыл, нимәгәлер түҙеме бөткән һымаҡ, теге итекте урындыҡҡа ырғытып бәреп, һикереп тороп китте лә, ҡулдарын артҡа ҡуйып, һылтыҡлай-һылтыҡлай тар иҙәнде берике әйләнеп сыҡты. Аҙаҡ, ишек үр яғына эшләнгән бәләкәс кенә кәштәлә яткан йоҡа ғына алама китапты үрелеп алып, Емеш менән Баҙыян еңгә алдына килеп баҫты.

— Тыңла әле, ҡарындаш, мин һиңә бер шиғыр укыйым.

Шиғыр, йыр, әкиәт кеүек нәмәләрҙе йәне-тәне менән яраткан һәм үҙенең яралы күңеленә шуларҙан ғына ял тапкан ЕмеШ, былдай иғтибарға тулҡынланып, ҡып-ҡыҙыл булып китте. Ә Тимербай, бармағын төкөрөкләй биреп, китаптын, анһыҙ ҙа нык туҙыуҙан өҙөлөп төшөргә торған биттәренә ыҫмала эҙҙәре ҡалдыра-ҡалдыра аҡтарып, нимәлер эҙләргә тотондо. Ахыр, бик риза төҫ менән:



— Бына: «Баҫҡыс»,— тип ҡуйҙы.— Ғабдулла Тукай тигән етемдән кеше булған бер шағир яҙған быны! Тыңла.

Емеш Тукайҙың «Мыяубикә»һен белә ине инде. Ағаһы Иштуған теге ваҡытта Тимербайҙын, Себерҙән «Мыяубикә»ие тотош күсереп, бесәй һүрәттәре төшөрөп ебәргән хатын Карасәс инәйҙән һорап алып ҡайтып уларға ла укып ишеттергәйне. Емеш хатта ул шиғырҙы шунда үҙе ятлап та алып -ҡалғайны. Әле был шиғырҙы ла ятлап ҡалырға тырышып, тын да алмай тыңлап ултырҙы. Ә Тимербай шиғырҙы татарсалап, арыу ук шыма итеп, көйләй биреп укый ине. Ул шиғырҙың:

> Югаргы басма мәгърур, «мин югары, сез түбәнсез», ди.
> Ничек гали минем урыным, түбәнгеләр, күрәмсез, дн.
> Бер адәм килде лә шул чакта әйләндерде баскычны,
> Түбәнге басмалар менде, югаргысы түбән төште! —

тигән һуңғы дүрт юлына айырыуса баҫым яһап, кинәнеп укып бөттө лә Емешкә ҡарап яғымлы итеп йылмайҙы.

— Йә, ҡарындаш, аңланыңмы инде?

Емешкә был шиғыр ҙа оҡшаны. Хатта ул унын ҡайһы бер юлдарын ятлап та алып ҡалды. Шулай ҙа уның ни әйтергә теләүе, әлбиттә, аңлашылып етмәне. Ул шиғырҙарҙы тик шул тура мәғәнәһендә генә анлай ала ине әле. Шуға ул Тимербайҙың һорауына:

— Юҡ...— тигәнде аңлатып баш ҡына ҡаҡты.

Баҙыян еңгәй ҙә, Емеш кеүек үк, бер ни ҙә аңламаны, ахыры, Тимербайҙы иғтибарһыҙ ғына ситкә этәрҙе.

— Йә, дәрүиш, һин ул китаптарың менән малай-шалайҙың башын әйләндергәс тә етер. Емеште аптыратма.

Емешкә Тимербай ағаһы ҡыҙғаныс булып китте:

«Ниңә шундай һәйбәт кешене дәрүиш ти икән Баҙыян еңгәм?!»

Бынан һун. Баҙыян еңгә ашъяулыҡтан ҙур бер телем икмәк алып иреткән һары майҙы ҡалын итеп һөрттө лә Емешкә тотторҙо:

— Мә, һылыу, ашай тор. Ҡарының асҡандыр.

Был ауылда бала кеше, бигерәк тә етем бала өйгә килеп инһә, майлап икмәк, ҡорот, ит тотторocc йәки ҡатыҡ, һөт һалып биреү ғәҙәте йәшәп килә. Ә етем, меҫкен булғыһы килмәгән Емеш, ни тиклем генә аслыҡтан йөҙәһә лә, бер кемдән Дә был хөрмәтте ҡабул итмәй. Биргән әйберҙәрен алып ашамай. Үҙен «етем» тип айырата йәлләп, ашатырға теләүсе кешеләрҙән хатта ҡаса торған ҡырыҫ ғәҙәтен Тимербайҙар-



••1

ҙа ғына онота. Уларҙа ғына ул үҙен, нисектер, тиң, үҙ кеш-е итеп тоя ала. Әле лә ул Баҙыян еңгәнең ҡулынан һис тә ҡарышмай икмәкте алды ла, үҙенең бүре кеүек ас булыуын күрһәтмәҫ өсөн, ашыҡмай, һоғаланмай ғына ашарға кереште. Ә Тимербай, яраткан уйынсығы тартып алынған бала шикелле шымып, йәнә баяғы итегенә барып тотондо.

Ул арала уйнап арыған Сабира менән Сәмиғә лә ҡайтып инде. Улар артынса уҡ тигәндәй, оҙон, арыҡ кәүҙәһен тағы ла нығыраҡ дуғаландырып, әлеге йышылып, йылтырап бөткән ҡыуал таяғына таянып, Ҡарасәс әбей ҙә ҡайтты. Уның төҫө борсоулы, тынысһыҙ ине. Ул, ғәҙәтенсә, таяғын мөйешкә һөйәп, калуш быймаһын ишек төбөндә сисеп ҡалдырҙы ла:

— Алла, эй алла, яман телдәрҙән үҙен, һаҡла!..— тип һөйләнә-һөйләнә урындыҡҡа, мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы. Унан ҡартлыҡтан ғына түгел, борсолоуҙан да, һуңғы ваҡытта күреүе насарая төшкән асыҡ зәңгәр күҙҙәрен кепесләтә биреп, берсә улына, берсә килененә ҡарап, тарамыш ҡулдары менән ҡаҡ тубығына түҙемһеҙ һуҡҡылап ултыра бирҙе лә хафалы тауыш менән һүҙгә кереште.

— Ҡара әле, улым, Тимербай... Илдә бик тынысһыҙ һүҙҙәр йөрөй бит әле, улым. Собхан старшина ла, Ғаббас мулла ла һиңә бик яман теш ҡайрайҙар икән, тип һөйләйҙәр. «Көфөр һүҙ һөйләп, иблес китаптары уҡып, бисә-сәсәне, йәш-елкенсәкте аҙҙырып ята. Беҙ уның арт һабағын уҡытырбыҙ әле!»— тип әйтәләр, имеш, ти. Теге яуыз, Шымбай каштан, һинең хаҡта белгәнен-белмәгәнен түкмәй-сәсмәй уларға еткереп тора, имеш, ти... Бүре ҡан эсмәй тора алмаған кеүек, кеше башы ашамай көн күрә алмай бит ул да... Эй алла... Кеше тиген инде шуны!..

— Ярар, әсәй, улай бик үк көйөнөп китмәйек әле,— тип, йомшаҡ ҡына өндәшеп туҡтатты уны Тимербай.— Хәҙер мине улай уҡ еңел ашай алмаҫтар әле...

— Эй, әйтте! — тип, әсе мыҫҡыл менән йылмайып ҡуйҙы Баҙыян еңгә.— һинең ишеләрҙең генә башын ашағанмы ни улар?

— һине лә Хәбир кеүек итеп ҡуймаһындар, тип хафаланам мин, улым,— тип өҙәләнде Ҡарасәс әбей.— Үҙең дә бигерәк һаҡһыҙһың. Иртәгә баҙар бит... Һин бына тағы унда бармай ҡалмаҫһың әле... Бер эшең, бер йомошоң булмаһа ла китерһең... Быны мин алдан уҡ һиҙеп торам...

— Барам, әсәй, барам. Дөрөҫ һиҙенәһең,— тип һаман көләмһерәп кенә ҡарыулашты Тимербай.— «Бүренән ҡурҡҡан урманға бармаған», тиҙәр түгелме һуң, әсәй?

— Шулай тиҙәр ҙә бит...

— Бүренән ҡурҡып урманға бармай, утын алып ҡайтып өйҙө йылытмай, туңып үлергә яраймы ни? Мин ҡурҡ, һин ҡурҡ... Улай булғас, гәйепһеҙҙән ыҙа сигеүселәрҙе ҡотҡарыу өсөн кем көрәшер? Көрәштән баш тартырға беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ, әсәй. Ә кем кемден, башына етерен әле алдан әйтеүе ҡыйын. Минеңсә, Собхан старшиналарға ла ҡапҡан һайын ҡалья ғына эләгеп тормаҫ...

— Шулайын шулай ҙа бит... һаҡ булған яҡшы,— ти Ҡарасәс әбей, еңелеп.— Бәлки, улым, һин иртәгә баҙарға бармай торорһоң?..

— Эй, бейем, ниңә шуға һүҙенде әрәм итеп ултыраһың? — тип, ҡул һелтәп, Баҙыян еңгә лә тағы һүҙгә ҡушылды.— Былдай эштә ул беҙҙең һүҙҙе тыңламай ҙа, беҙ уға был эшкә кәңәш бирә алмайбыҙ ҙа. Шулай булғас, йә, уның үҙенә тапшырайыҡ та ҡуяйыҡ инде. Үҙенә лә аллаға тапшырайыҡ, бейем...

— Баҙыян, һин дөрөҫ әйттең,— тип, ҡатынына һейөп ҡарап ҡуйҙы Тимербай.— Донъяла әсәй йәки ҡатын һүҙе менән генә йөрөп булмай торған эштәр ҙә була бит... Үҙегеҙ беләһегеҙ, минең аяҡ шәп түгел. Күп йөреп, халыҡты күреп булмай. Ә баҙар... хәҙергә, миңә иң уңай урын. Унда халыҡ үҙе йыйылып килә. Теләгәнсә күр, һөйләш...

— Шулайын шулай ҙа... Улар ошо баҙарҙа уҡ һиңә нииндәйҙер бер яуызлыҡ эшләргә йыйыналар, буғай. Күңелем шулай һиҙенә. Теге каштандың тел төбө шуға барғандай тойола, тиҙәр,— тип Ҡарасәс әбей һаман улын өгетләүен, уны һаҡ булырға димләүен дауам итте. Был аңлайышһыҙ һүҙҙәрҙең иге-сиге булмаҫын тойған Емеш, Тимербайҙың ҡулындағы теге ҡупшы итекҡә тағы бер ҡат моңһоу ҡараш ташлап алды ла, Сабира менән Сәмиғәнең ҡолағына үҙенең ни өсөн килеүен әйтеп, йүгереп тигәндәй өйҙән сығып китте. Уға Шәүрәне, Хәсбиямалды, унан тағы башҡа бер нисә ҡыҙҙы күрергә кәрәк ине әле.

## XVII

Ҡыҙҙар саҡырып ҡайтҡас, Емеш бөтә сынаяҡ, сәйгүн, тәрилкә кеүек нәмәләрҙе тоҙ менән ышҡып, йылтыратып йыуып ултыртты. Унан ватылыр-боҙолорҙай әйберҙәрҙе мөйеш-һәйештәрен сысҡан кимереп, быҙау ялап бөткән, «Нух заманынан» ҡалған быялалы шкаф эсенә йәшерҙе. Урындыҡты бер ҡат балаҫ менән генә ҡалдырып, мендәрҙәрҙе, арҡыры-буй юрғандарҙы урын өҫтөнә өйөп һалды. Иң аҙаҡтан иҙәнде, ек-йөғон ҡалдырмай, һап-һары итеп, бысаҡ менән ҡырып йыуып сыҡты. Ә Йәнеш малдарҙы ҡараны. Һыу эсереп, төнгә етерлек бесән һалып, лапаҫтарға ябып ҡуйҙы. Унан өйгә һыу алып килде, мейес яҡты. Өй эсе йәмләнеп, таҙа, яҡты булып китте. Ҡараңғы төшөүгә, Емеш, өрләк урта-



8 Заказ 733

һындағы аҫылмалы етеле лампаға тултырғансы кәрәсин һалып, торбаһын һөрөмдән таҙартып тоҡандырып ҡуйғас, өй тағы ла йәмләнде. Оҙаҡламай ҡыҙҙар ҙа килә башланы. Бында аулаҡ ҡалған өйгә йыйылып, уйнап-көлөп, йырлап-бейеп, бергәләп төн үткәреү, ҡайһы саҡта бергәләп аулаҡ аш та бешереп ашау ҡыҙҙарҙың яратҡан ғәҙәттәренән береһе ине. Әгәр инде аулаҡ өйгә йыйылған саҡта берәй әкиәтсе, йырсы әбей ҙә булһа, кисә бигерәк тә күнелле уҙа. Элек бындай кисәләргә үҙенен бөтмәҫ-төкәнмәҫ гүзәл әкиәттәре менән тағы ла йәм биреүселәрҙең береһе Ҡарасәс әбей була торғайны. Ҡыҙҙар уны үҙҙәре йыйылған бер урынға саҡыралар, ул һис ялындырмай килә. Уларҙың уйын-келкө, йырбейеүҙәрен ҡарап ултыра, яҡтас, тан. атҡанса төрлө әкиәттәр, тарихтар һөйләп сыға торғайны. Уның әкиәттәрен Емеш һәр ваҡыт йотлоғоп тыңлай, һәр береһен отоп ала бара ине. Ләкин Ҡарасәс әбей хәҙер артыҡ ҡартайыбыраҡ киткәнлектәнме, әллә башҡа маҙаһы күбәйгәнлектәнме, һуңғы йылдарҙа был ғәҙәтен ташлағайны. Хәҙер берәй урында аулаҡ өйгә йыйылғанда, әкиәтсе әбей урынын Емеш менән Шәүрә алмаштыра ине.

Аулаҡ өйгә саҡырылған ҡыҙҙарҙан иң элек, бер туҫтаҡ тары ярмаһы, ярты йомғаҡ аҡ май күтәреп, Баҙыян еңгәнен. ике ҡыҙы Сабира менән Сәмиғә килде.

Оҙаҡламай, әсәһенең алама шәленә төрөнөп, ялан аяҡ йүгереп Шәүрә лә килеп етте. Уның артынса, ҡараҡ Әхмәтшаның үҙенә оҡшап, аҫтан һөҙөп ҡарап торған йәшел күҙле, уҫал ҡыҙы Заһира, Тулыбай суфыйҙың. илаҡ, йыуаш холоҡло, тыржыҡ танаулы ҡыҙы Хәсбиямал, Ғаббас мулланын, ҡолонсаҡ кеүек шыма, йылғыр, һылыу ҡыҙы Гөлйыһан аллыартлы килеп инделәр. Заһира Йәнешкә бер туҫтаҡ тары ярмаһы тотторҙо ла, шәлен, бишмәтен мейес буйындағы һандыҡ өҫтөнә ырғытып, һикертә баҫып, хужаларса түргә уҙҙы. Ул бөтә ерҙә шулай үҙен хужа, баш итеп тота, бүтән бер кем менән дә иҫәпләшмәй. Ошо холҡо өсөн, унан да бигерәк ҡараҡ Әхмәтшаның. ҡыҙы булғаны өсөн Емеш уны яратмай ине. Ул Заһираны хатта аулаҡ өйгә лә саҡырмағайны, Заһира, шуға үс итеп, килеп инеү менән урындыҡтын түренә менеп, аяҡ бөкләп ултырып алды ала:

— Ай-һай, минән башҡа ғына аулаҡ йыймаҡсы булғандар икән былар, ҡорсаңғылар!.. Бына, әйтмәһәгеҙ ҙә, килдем, вәт! — тип бер һүҙгә биш яуап ҡайтарырға әҙерләнеп, бетә ҡыҙҙарға үҙенең уҫал, йәшел күҙен йөрөтөп сыҡты. Унан ҡаршы өндәшерҙәй кеше күренмәгәнгә күңеле бөтөп, өйҙөң бер мөйөшөнән икенсеһенә йүгереп уйнарға керешеп тә китте.

Бынан һун. ҡайһы ярма, ҡайһы май, һөт, ҡайһы кәрәсин тотоп тағы бер нисә ҡыҙ килде. Был килтерелгән нәмәләрҙе



Йәнеш ихлас күңел, шат йөҙ менән ҡабул итеп торҙо. Уны бигерәк тә кәрәсин ҡыуандырҙы. Сөнки ул үгәй әсәһенең, берәй ергә киткәндә, икмәк-тоҙҙо ғына түгел, хатта кәрәсинде лә иләләп үлсәп китеүен яҡшы белә ине.

Тора-бара бында Собхан старшинаның ҡыҙы Алтынбикәнән башҡа бөтә ҡыҙҙар тип әйтерлек йыйылды. Алтынбикәне бындай кисәләргә йөрөтмәүҙәрен белгәнлектән, ҡыҙҙар уның юҡлығына иғтибар ҙа итмәнеләр. Үҙҙәренә иркенләп күңел асыу мөмкинлеге тыуыуға ҡыуанып, кем уҙарҙан уйнарға, көлөргә, йүгерергә, бейергә тотондолар. Ҡаҙанда тотош һөттә генә ҡайнап, тары бутҡаһы бытылдай башланы. Бутҡа бешереүсе ҡыҙҙар:

Бутыр-бутыр бутка бешә,
Уртаһына май тешә,
Килгән ҡунаҡ беҙгә төшә,
Беҙгә төшмәй кемгә тешһөя,
Беҙҙә майлы бутка бешә,—

тип таҡмаҡлай-таҡмаҡлай, усаҡ тирәһендә бейешеп йөрөнөләр,

Оҙаҡламай бутҡа ла бешеп сыҡты.

— Тары ярмаһы һыуҙа икегә, һөттә иллегә ярылырмын, тип әйтә ти ул. һеттә генә бешкәс, ҡалай тиҙ өлгөрҙө,— тип ҡыуана-һөйләнә, Йәнеш менән Сабира уны ҙур ағас табаҡка һоҫтолар. Унан бутҡа уртаһына ҡыҙҙар алып килгән бөтә майҙы һалып, көскә күтәреп урындыҡҡа, ашъяулыҡ өҫтөнә алып килеп ултырттылар. Ҡыҙҙар һәр ҡайһыһы үҙе алып килгән ағас ҡалаҡты тотоп, ашъяулыҡ янына ярым түңәрәк яһап йыйылыштылар. Был аулаҡ ашта бай ҙа, ярлы ла, оло ла, кесе лә юҡ. Бында һәр кемдең алөшө ингәнлектән, уға һәр кем тигеҙ хужа. Шуның өсөн, ахыры, был бутҡа башҡа бутҡаларҙан тәмлерәк тә, уны ашауы күңеллерәк тә була ине. Ҡыҙҙар башта бик яратып, һәр кем үҙ алдынан ғына тырнап, майға алмаш-тилмәш манып, әҙәпле генә ашанылар. Аҙаҡ, туя башлағас, шаярыу китте. Иң элек уҫал Заһира шаярырға кереште:

— Урал тауынан йылғалар көньяҡҡа ҡарай ошолай ағып төшәләр ти ул!..— тип, майҙы үҙ яғына йырып ебәрҙе.

— Төньяҡҡа ла ағып төшәләр ти,— тип Шәүрә лә майҙы үҙ яғына йырҙы.

Уның артынан башҡа шаяндар эйәрҙеләр. Бутка уртаһында ай кеүек түңәрәк булып йымылдап ятҡан иреү май хәҙер, төрлө яҡҡа тармаҡтар ебәреп, сәскә атҡан көнбағыш башына оҡшап ҡалды.

— Май хәҙер ай түгел, ҡояш булды,— тип көлдө Шәүрә.

Шаярыуҙан Емеш тә ситтә ҡалманы: ,

..— Ахыр заман еткәс, донъя ошолай болғана, ти ул, ҡыҙҙар!..— тине лә бутҡаны тотош болғатып ебәрҙе. Бөтөнләй майҙа йөҙгән бутҡа тағы ла тәмлерәк булып китте. Ҡыҙҙар уны тағы ла яратыбыраҡ ашай башланылар. Шулай ҙа ашап бөтөрә алманылар. Туйғандан ҡалған бутҡаны Заһира, Шәүрә, Емештәр ҡыҙҙарҙы көсләп һоғондорорға, һоғонмай ҡаҫҡан ҡыҙҙарҙы ҡыуып йөреп биттәрен, баштарын буярға керештеләр. Өй эсе йүгереш, көлөш, сыр-сыу менән тулды.

Шулай итеп бутҡаны түгеп-сәсеп бөткәс, Емеш:

— һәпәләк уйнайыҡ, ҡыҙҙар! һәпәләк!— тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ул хәҙер ситлектән ысҡынған ҡошсоҡ кеүек шат, шаян ине.

— Уйнайыҡ! Кем тәү башлап күҙ бәйләй? Шыбаға тотайыҡ!— тип шаулашты ҡыҙҙар.

— Шыбаға кәрәкмәй, үҙем иң тәүҙә бәйләйем,— тине Емеш.

Унан үҙенен. күҙен, танау аҫтынан күреп йөрөрлөк итеп йәтешләп, яулыҡ менән бәйләне лә, ҡыҙҙарҙы пыр туҙҙырып ҡыуып тота ла башланы. Ҡыҙҙар, сыуылдашып, урындыҡтан иҙәнгә, иҙәндән урындыҡҡа йүгереп ҡастылар. Ләкин Емеш уларҙы бик тиҙ тотоп бөттө. Бынан һун Заһира, Сәмиғә, Шәүрәләр күҙ бәйләне. Ахыр яулыҡ илаҡ Хәсбиямалға килеп етте.

— Күренмәйме? Был нисә бармаҡ?— тип, бармаҡтарын күрһәтеп тикшерә-тикшерә, Емеш унын, былай ҙа йәмшек, таржыҡ танауын бөтөнләй йәмшәйтеп бәйләп ҡуйҙы.

Хәсбиямал, ун дүрт-ун биш йәштәрҙәге ҡыҙ булһа ла, үҙенен. артыҡ йыуаш, ебегәнлеге арҡаһында, Емештең был мутлығына бер төрлө лә ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Бер ни күрмәгән хәлдә, ҡулдарын ышаныслыҙ, килбәтһеҙ һуҙып, ярҙан осорға торған кеше төҫлө ҡыйыуһыҙ, ҡурҡаҡ аҙым менән ҡыҙҙарҙы ҡыуа башланы. Емеш униң ыҙаһын арттырырға теләп:

— Шым булығыҙ!— тип бойороҡ бнрҙе. Ҡыҙҙар шым булып, аяҡ остары менән генә йөрөнеләр. Хәсбиямал, әле шкафҡа, әле һандыҡҡа барып бәрелеп, иҙән уртаһында әйләнде лә әйләнде. Ахыр ул, кемде булһа ла тотоуҙан бөтөнләй өмөт өҙөп, үпкәләп яулыҡты сисеп ырғытам ғына тигәндә, ҡыҙҙарҙан береһе тотторған булды да тағы шымдылар. Хәсбиямал тағы бушҡа һәрмәләнеп йөрөй бирҙе. Шулай итеп был уйын Хәсбиямалдың:

— Әй, мыҫҡыл итәһегеҙ ҙә... Йәшенеп бөткән булаһығыҙ! Икенсе һеҙҙен. менән уйнамайым!—тип, иламһырап, күҙенең бәйен сисеп ырғытканға хәтле дауам итте.

Бынан һуң ҡыҙҙар «йөҙөк йәшереш», «айыу бабай», «хан



һәм вәзир», «осто, осто!» уйындарына күсеп киттеләр. Емеш бигерәк тә «осто, осто!», «беҙ, беҙ, беҙ инек» уйындарын ярата ине. Был уйындар кешенен. откорлоғон, һәләтлелеген, түҙемлелеген һынауға ҡоролған булыуҙары менән оҡшайҙар ине уға.

«Беҙ, беҙ, беҙ инек!..» уйыны башланды. Ҡыҙҙар түңәрәккә йыйылып ултырҙылар. Уйын башлаусы Сабира:

Беҙ, беҙ беҙ инек,
Беҙ ун ике ҡыҙ инек,
Таҡталыҡҡа йәйелдек,
г Таң атҡансы юйылдыҡ, һәп!—

тигән саҡта, башҡа бөтә ҡыҙҙар ҙа «һәп» тинеләр ҙә тындылар. Кем оҙаҡ түҙеп, һөйләшмәй-көлмәй ултыра ала, шул ен,ә. Кем ин, тәү башлап көлә, йә һөйләшә, униң маңлайына сиртәләр. Әлбиттә, бында бөтә ултырышы, ҡыланышы менән нисек тә кешене көлдөрер өсөн генә яралған Шәүрә, Сабира, Заһира кеүек шаяндар барында көлмәй сыҙап ултырыуы бик еңел булмай.

Был уйында күбеһенең маңлайына бер-ике ҡат сиртеү эләккәс, ҡалғандарын, шул иҫәптән Емеште лә, көлдерөү, һөйләштереүҙән өмөт өҙөлгәс, «осто, осто!..» уйынына күсеп киттеләр. Был уйындын, тәртибе, ҡош исемдәре әйтелгәндә, осто тип ҡул күтәреп, осмаҫ әйберҙәр исеме әйтелгәндә, ҡулды күтәрмәй ҡалыуҙан тора ине. Уйынды Заһира башланы. Ҡыҙҙар уға эйәреп, бармаҡтары менән урындыҡ таҡтаһын сүкей-сүкей бик оҙаҡ:

— Осто-осто-осто!— тип ултырҙылар. Шунан Заһира ҡапыл:

— Ҡаҙ осто!— тип ҡулын үргә күтәреп ебәрҙе. Был ваҡытта тиҙ уйлап өлгөрә алған ҡыҙҙар бөтәһе лә униң артынан:

— Ҡаҙ осто!— тип ҡулдарын юғары күтәрҙеләр. Ҡул күтәрмәй ҡалған ҡыҙҙарҙың маңлайҙарын ҡыҙартҡансы сирттеләр. Заһира, «торна осто», «ыласын осто», тип, оса торғандарҙы әйтеп тора ла ҡапыл «мендәр осто!»... «самауыр осто!» тигән һымаҡ берәй осмаҫ нәмәне ҡыҫтырып ебәрә. Тиҙ уйлап өлгөрә алмағандар, «мендәр осто!» тип, униң ынғайына ҡул күтәреп, маңлайҙарына сиртеү алалар.

Бынынһында ла сиртеү күберәк Хәсбиямал, Сәмиғә, Шәүрәләр иҫәбенә теште. Хәсбиямал аңралығы, Сәмиғә ғәмһеҙлеге арҡаһында сиртелһә, Шәүрә кеше көлдөрөү өсөн шаянлыҡ уйлап ултырыу арҡаһында абайламай ҡалып сиртелә ине.

Ә бейеү башланғас, Шәүрәнән уҙҙырғаны булманы. Ул күбәләктәй осоп, орсоҡтай зыр әйләнеп, ҡолонсаҡтай юрға-

лап, бөтә йәне-тәне менән бирелеп бейене. Әхәт егеттәр араһында булһа, Шәүрә ҡыҙҙар араһында ин. оҫта бейеүселәрҙең береһе ине. Ул бейегән һайын иптәштәренең күҙ алдында танымаҫлыҡ булып һылыулана, үҫә, ҙурая барған кеүек тойола. Әйтерһең, ул бейемәй, ә, сәхнәгә сығып, батша ҡыҙы йәки ен ҡыҙы ролен уйнай ине.

Ярты төн үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Лампала кәрәсин дә бөткәйне инде. Ә ирекә һыуһаған ҡыҙҙарҙың уйын-көлкөһөнөң иге-сиге күренмәй ине. Иң элек Йәнеш аҡылға килде.

— Ятайыҡ, ҡыҙҙар, етер!—тине ул, өлкән кешеләрсә, етди төҫ алып.— Йоҡлайыҡ!..

Унан Емеш менән Зәһира, Шәүрәләрҙен. ҡаршы тороуҙарына ҡарамай, ҡыҙҙарҙы урындыҡтан ҡыуып төшөрөп, йоҡларға урын түшәне лә, лампаны һүндерҙе. Ҡыҙҙар:

— Әлеп ят! Әлеп ят!— тип, Ғаббас мулланың мәҙрәсәһендәге шәкерттәрҙән ишетеп ҡалған һүҙ менән, бербереһен ҡыҫтай-ҡыҫтай, урындыҡҡа көскә һыйып, теҙелешеп яттылар. Инде, ғәҙәт буйынса, йомаҡ өйөшөү башланды.

— Өй түбәһендә алама юрғаным ята, йә тап!— тип, быны Сабира башлап ебәрҙе. Ҡыҙҙар уға:

— Йондоҙло күк!— тип кем уҙарҙан ҡысҡырышып яуап бирҙеләр. Сөнки, һәр бер йомаҡ өйөшөү ошонан тигәндәй башланып киткәнлектән, уны белмәгән бер ҡыҙ ҙа юҡ ине. Быныӊ артынса шулай уҡ күбеһенә таныш йомаҡтар һибелеп китте: «Өй ҡыйығында ярты икмәгем ята», «Китеп бара — юлы юҡ, һоҫоп, алдым — урыны юҡ!». Унан: «Метрей башлы, мең күҙле», «Оҙон-оҙон өс ҡолаҡ, осонабашына кем сығыр? Сыбар ала көйгәнәк йоморҡаһын кем табыр?» кеүек ҡатмарлыраҡ йомаҡтар килеп сыға башланы. Был ваҡытта баш ватыусылар:

— Затын әйт! Заты ниҙән! Ағастанмы, таштанмы, йәнленәнме, йәнһеҙҙәнме?— тип талап иттеләр.

Йомаҡтан һуң ҡыҙҙар әкиәткә күстеләр. Әкиәт һөйләүгә иң әүәҫ ҡыҙҙар Емеш менән Шәүрә ине. Ин. башта Шәүрә һөйләне. Уның әкиәттәре гел таҙҙар тураһында булды. Ярыш майҙанына, кәзә тәкәһенә атланып, иң алдан барып еткән, ундағы бөтә батырҙарҙы, хатта үҙ ағайҙарын да еңеп, батша ҡыҙын кәләшлеккә алып ҡайтҡан, ендәрҙе егеп, бер төн эсендә алтын һарай һалдырған, аҡбуҙ атҡа атланып, күҙ асып йомғансы ерҙе әйләнеп сыҡҡан, бер йөк күмерҙе бер йөк алтынға алмашҡан, ер йөҙөндәге бөтә һылыу ҡыҙҙарҙы йотоп тороусы ун ике башлы аждаһаны үлтереп, ҡыҙҙарҙы үлемдән ҡотҡарған, ҡыҫҡаһы, донъяла эшләй алмаған бер генә эше лә булмаған, ҡарап тороуға



хөрт кенә, ә үҙҙәре тинһеҙ көслө, ҡыйыу аҡыллы, йор һүҙле, яҡшы күңелле таҙ батырҙар тураһында һөйләне ул.

Зәһира унан:

— Үҙенең атаһы таҙ булғас ни, таҙҙар тураһында ғына һөйләй шул, бахыр,— тип, мыҫҡыллап келөп тә ҡараны. Ләкин туктата алманы:

Шәүрә уға:

— Минең атайым таҙ түгел, йылтыр баш ҡына,— тип яуап ҡайтарҙы ла артабан һөйләп китте. «Таҙ» тип бөтә кеше тарафынан ҡыйырһытылыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең шаянлығын, мутлығын, көләмәслеген һис тә юғалтмаған, уйнай-көлә, бөтә ауырлыҡты еңеп сыға белгән, тыйнаҡ һәм яҡшы күңелле егеттәр, ысынлап та, Шәүрәнең ин, яратҡан батырҙары ине.

Ғөмүмән, Шәүрә үҙе әсәһенә оҡшап төҫкә һылыу ғына булһа ла, атаһынын, ҡасандыр таҙ булып, хәҙер ҡояш кеүек ялтырап ҡалған башы өсөн дә, аҡһаҡлығы өсөн дә ауыһыҙ тиңдәштәренән күп кәмһетелеүҙәр ишетә ине. Ләкин ул үҙе шул әкиәттәге таҙ батырҙар шикелле һис нәмәгә иҫе китмәй торған шат ғәҙәте арҡаһында, быларҙы мыҫҡыллаусы менән бергә көлөшөп, уйын-көлкөгә һабыштырып, еп-ен,ел үткәреп ебәрә белә. Тик һәр нәмәне ауыр, тәрән кисерә торған Емеш кенә дуҫын йәлләп:

«Йә, кешеләр ниңә былай үҙенән башҡаларҙың гел насар яғын ғына күрергә яраталар икән? Йә, аҡһаҡ Хәлим ағайҙың ниндәй шәп балта оҫтаһы булыуын бер ҙә телгә алмайҙар. Ә таҙлығын да, аҡһаҡлығын да онотмайҙар. Йә, ниңә таҙлыҡ та, аҡһаҡлыҡ та уға ғына килде икән? Ни булһа ла шул бер бәхетһеҙгә була бит ул!..»— тип әсенеп уйламай ҡала алмай. Уға, хатта ҡайһы саҡта, Хәлим ағай шуның өсөн ғәрләнеп ауылда тормай, гел ситтә йөрөйҙөр кеүек тә тойолоп китә ине.

Ул әле лә ошо хаҡта уйланып ятҡан арала Шәүрә һуңғы әкиәтен һейләп бөтерөп:

— ...Мин дә туйҙа булдым. Кисә барҙым, бөгөн ҡайттым. Атымды, Емеш, һиңә алып килеп туғарҙым,— тип ослап ҡуйҙы. Был әкиәт һөйләү сираты Емешкә килеп еткәнен аңлата ине. Әлбиттә, Емеш бынын. өсөн көйөнмәне. Ул быны күптән ашҡынып көтөп ята ине инде. Ул әкиәтте тыңлау менән бергә үҙе лә һөйләргә ярата. Тик уның әкиәттәре таҙҙар тураһында булмай. Уға ҡараңғы зиндан эсенән ҡул-аяғы сынйырлап ырғытылған, унан аҡҡош ҡанатына яҙып һейгән ҡыҙына хат ебәргән Алпамышалар, һөйгән егетен зиндандан ҡотҡарып алған Барсынһылыуҙар, айыуға атланып, дошманға ҡаршы яуға сыҡҡан Ҡамыр батырҙар, киң далаға дейеү пәрейҙәренең аяғын да баҫтыр-

май, халкын тыныс йәшәтеусе Ерәнсәй батырҙар, Сәмреғошҡа атланып, ер аҫты батшалығынан ер өҫтөн килеп сығыусы Ертаныстар оҡшай. Ул Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу әкиәтен, тап Ҡарасәс әбейҙән ишеткәнсә, тотош шиғыр менән һөйләп сыға. Был ваҡытта ул үҙе лә бөтә әйләнә-тирәһен онотоп, иҫ киткес гүзәл, мауыҡтырғыс әкиәт донъяһына инеп юғала. Үҙен дә шул ваҡиғаларҙың ҡатнашсыһы итеп тоя, ҡайғыны ла, ҡыуанысты ла батырҙар менән бергә кисерә башлай. Ә инде үгәй әсәйҙәр, етем ҡыҙҙар тураһындағы әкиәттәрҙе һөйләргә тотонһа, үҙенен, гедә түгел, бөтә тыцлаусыларҙы ла ауыр кисерештәр эсецә эйәртеп алып инеп китә ине. Әле лә ул батырҙар тураһындағы күтәренке рухлы әкиәттәрҙән һуң үгәй әсәйҙәргә, етем ҡыҙҙарға күсеп китте. Ҡыҙҙар берәм-берәм тына, йыуашая, уйсанлана барҙы. Хатта ғәҙәттә тик ятыуҙы, уйсанлыҡты белмәгән сая Зәһираға хәтле йыуашайып, тынып ҡалды. Өй эсендә ауыр кесөргәнешле тынлыҡ урынлашты. Ә Емеш һөйләне лә һөйләне. Бына тунған тәҙрәләр, ҡарағайлы ҡышҡы урман кеүек булып, күкһелләнеп асыла башланы. Тимәк, оҙон төн үтеп, офоҡта таң һыҙылды. Ҡыҙҙар татлы йоҡоға сумды. Тора-бара Емеш менән Сабира ғына уяу ятып ҡалды. Инде әкиәтте туктатырға ла ваҡыт. Ләкин нимә эшләргә? Емештең дә, Сабираның да йоҡоһо килмәй. Уларҙың әле һаман һөйләшкеләре, уйнағылары, шаярғылары килә ине.

Улар артабан ниндәй уйын табырға тип уйланып, бер аҙ тынып, иптәштәренен, татлы мышнауын тыңлап яттылар. Ахыр Сабира серле генә итеп:

— Емеш!..— тип бышылданы.— Йоҡлап бөттөләр...

— Әйе шул!..

— Әйҙә...

Улар әкрен генә шыуып иҙәнгә төштөләр.

— Ни эшләйбеҙ?

— Ҡыҙҙарҙың биттәрен ҡоромға буяйыҡ!.. Мәрәкә булһын!

— Әйҙә!..

Емеш менә Сабира, ҡаҙан төбөнән ҡором тырнап алып, шым ғына ҡыҙҙар янына килделәр.

Бергә йыйылған ерҙә һәр ваҡыт көлкө өсен ниндәй ҙә булһа берәй мутлыҡ эшләүселәр табыласағын белгән ҡыҙҙар бик һаҡ йоҡлайҙар. Күбеһе юрый ғына йоҡлағанға һалышып ята. Шунлыктан Емеш менән Сабираға күп ҡыҙҙарҙын. янынан көлә-көлә кире сигенергә тура килде. Зәһира кеүек уҫалдар хатта яңылыш, йоҡо аралаш кирелеп-һуҙылып киткән булып, уларҙы иҙәнгә осора тибеп тә төшөрәләр. Шаянлыҡҡа шаянлыҡ менән яуап ҡайтарыу



Емештәрҙең күңелен тағы ла күтәрә. Улар иҙәнгә йығылып төшкән ерҙә аунап ятып көләләр-көләләр ҙә тағы үҙҙәренен, ҡырағай шаянлыҡтарына тотоналар.

Ҡыҙҙар араһында иң ҡаты йоҡлаусы Шәүрә менән Гөлйыһан булып сыҡты. Емештәр ҡолонсаҡ кеүек йылғыр, зифа буйлы, һылыу йөҙле Гөлйыһанды айырата кинәнеп ҡоромға буянылар. Бынан һуң улар тағы бер тапҡыр Зәһираның битен буярға йәки уның сәсүрмесенә берәй •^шылтырыҡ нәмә тағып ҡуйырға тырышып ҡаранылар. Ләкин Зәһира уларҙы тағы иҙәнгә тибеп тешөрҙө. Был сая ҡыҙ ҡуян кеүек уяу, һаҡ ине. Ахыр улар, Зәһиранан көлөүҙән өмөт өҙөп, илаҡ Хәсбиямалдың сәс толомона самауыр торбаһы менән һоҫко тағып ҡуйҙылар ҙа, Хәсбиямал ҡуҙғалған һайын уларҙын, бер-береһенә бәрелеп шалтырауына ҡыуанып, иҙәндә аунап ятып көлдөләр. Унан тамам таң яктырып, өй эсен күгелйем нур баҫҡас, урынға менеп, юрған бөркәнеп яттылар. Инде уларға иртәнсәк, ҡыҙҙар торғас, был мәҙәктән күтәреләсәк шау-шыу, көлкөнө көтергә һәм бер ни белмәгән булып быны кинәнеп күҙәтергә генә ҡалды.

Ҡыҙҙар йоҡонан тора ла башланылар. Төнгө шаянлыҡты күреп көлөшкән тауышҡа, һоҫко менән торбаны шаңғырлатып, Хәсбиямал да тороп ултырҙы. Көлөү тағы ла көсәйҙе. Был тауыш ғәҙәттә иң ҡаты йоҡлаусы Шәүрәне лә уятты. Ул һикереп тороп ултырҙы ла янында яткан Гөлйыһанға ҡарап:

— Абау, биғәләштәр, ни эшләткәндәр бит аҡ ҡына битен!— тип ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Ә үҙенде һуң!.. Үҙеңдең битенде ҡара!—тине Гөлйыһаи да. Тештәре генә йылтырап йылмайҙы. Был ваҡытта ул да һикереп тороп ултырғайны.

Бынан ары инде йоҡоһонан уянмаған бер ҡыҙ ҙа ҡалманы. Хатта Емеш менән Сабира ла «каты йоҡонан» уянып киттеләр. Өй эсен ҡырағай ҡыуаныс күмеп китте. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Буш күнәктәрен шыңғыр-р!.. иттереп, тыш яҡҡа, ишек алдына ултыртып, ҡурҡынған төҫ менән йүгереп килеп ингән Айһылыуҙы күреп, улар бер юлы туктап ҡалдылар. һәр ҡайһыһының башына: «Нимә булды икән?»— тигән тынысһыҙ уй килде. Сөнки Айһылыуҙың йөҙө артыҡ борсоулы ине.

— Емеш һылыу, Сәрбиямал апай ҡайҙа?— тип һораны Айһылыу, ҡабаланып. Унан яуап биреүҙе лә көтмәй:

— Мине һатыбалға бирәләр!.. Кисә кис яусы килде... һөйләшеп-килешеп бөттөләр!..— тине лә, үкһеп илап, кире тышҡа йүгерҙе.

Емеш унын, Эйеккә һыуға китеп барышлай ғына инеүен, Сәрбиямалды түгел, Иштуғанды эҙләүен аңланы.

«Эй алла, ни эшләргә һуң?.. Ағайым да өйҙә юҡ бит әле, исмаһам!..»—тип көйөнөп китте. Уйын-көлкөнөң ҡыҙығы бөттө. Ҡыҙҙар бөтәһе лә бойоғоп, ҡайғырышып өйҙәренә таралдылар.

Теләмәгән кешегә көсләп бирәләр. Ниндәй ҡәһәрле һүҙ был «бирәләр»... Был һүҙ кескәй генә ҡыҙҙарҙың да йеҙҙәренә ғәмһеҙ шаянлыҡ, уйын-көлкө әҫәрен дауыл кеүек осороп алып китеп юҡҡа сығарҙы.

Шулай итеп бер ни ватмай, әйбер боҙмай, тыныс ҡына үтеп киткән төн ҡыуанысһыҙ таң менән алмашынды. Инде йөҙөндә төнгә ҡыуаныстың, шаянлыҡтың эҙе лә ҡалмаған Емеш, өлкәндәр кеүек уйсан ғына ҡуҙғалып, мейескә ут яғып ебәрҙе. Урын-ерҙе йыйҙы. Унан мейес янындағы ҙур һандыҡ өҫтөнә ултырҙы ла үгәй әсәһененән. батмус ҙурлыҡ көҙгөһөн тубығына ҡуйып, туҙған сәстәрен тарарға кереште. Ул арала кәртәгә мал ҡарарға сығып киткән Йәнеш тә өйгә ҡайтып инде. Шатырлап янып ятҡан мейес алдына барып өшәгән ҡулдарын йылытты.

— һылыу, һин самауыр ҡуй. Сәй эсәрбеҙ, йәме? Мин теге оздой һарыҡты ҡарауыллайым. Ул бәрәсләргә йөрөй шикелле,— тип тағы тышҡа сығып китте. Ләкин Емеш ойошҡан сәстәрен яҙып тарап бөтөрөргә лә өлгөрмәне, Йәнеш, боҫорап быуы сығып торған бәләкәс кенә бөҙрә ҡара бәрәс күтәреп, ҡайтанан өйгә килеп тә инде. Бәрәс артынан ҡыу сыбыҡ кеүек яланғас, нәҙек ботло сыбыртҡы ҡойроҡло булғаны өсөн оздой тип аталған аҡ һарыҡ та баҡыра-баҡыра эйәреп инде. Йәнеш шат ине. Ул аяҡтары ҡайыш кеүек бөгөлөп торған ҡара бөҙрә бәрәсте иҙәнгә баҫтырырға тырышып:

— Бәрәсләгән дә! Әлдә сыҡҡанмын. Юҡһа, бәрәсе туңып ҡуйһа, апайым ни эшләтер ине беҙҙе, әйе бит, һылыу?— тип һейләнде. Емеш өндәшмәне, унын уйы Айһылыу алып килгән янылыҡ тирәһендә йөрей ине.

Аҡ һарыҡ менән ҡара бәрәс, өйгә инеү менән, сыр-сыу килеп баҡырырға кереште. Уларға ишек төбө яҡ мөйөштә торған быҙау ояһындағы ҡара билдәш менән күк билдәш бәрәс тә, быҙау ҙа ҡушылды. Өй эсе быҙау, кәзә-һарыҡ бәрәстәренең ығы-зығыһы менән тулды. Теге яңы бәрәсләгән, әбей битле оздой һарыҡтын. тауышы айырта мөхәббәтһеҙ, тупаҫ ине. Етмәһә, ул Емеште үсекләгән кеүек унын алдына уҡ килеп баҫып, йәмһеҙ һоро күҙҙәрен баҡырайтып:

— Баһа-а-а!..— тип баҡырып тора. *

Былай ҙа эсе бошоп ултырған Емеш, һарыҡтың мөхәб-? бәтһеҙ ҡыланышын үҙенә күрһәтергә теләп, ул баҡырғаҫ



сакта ғына көҙгөнө унын ҡаршыһына тотто. Аңра һарыҡ, үҙен көҙгөлә күреү менән, ысынлап та, «ниндәй йәмһеҙ, •ҡот осорғос хайуан!..» тип уйлап булһа кәрәк, йөрәге ярыла яҙып ҡурҡты ла, ни эшләгәнен белмәй, тәҙрәгә ташланды һәм, бер һикереүҙә тәҙрә күҙгәнәгеп ватып, тышҡа атылып сығып та китте. Күҙ асып йомғансы булған был хәлдән Йәнеш тә, Емеш үҙе лә бик оҙаҡ телһеҙ торҙолар. Ватылған күҙгәнәктән йәшенле болот кеүек урғылып ингән әсе һалҡын, яланғас аяҡтарҙы өҙөп семетә-семетә, уларҙы көскә иҫкә килтерҙе. Шунан һуң ғына Йәнеш үҙенең ҡолаҡсындай мендәрен тотоп тәҙрәгә ташланды.

— Әй алла, бигерәк ҡоторҙоң, бигерәк шаярҙың шул!.. Ошо күрәсәген, булғанға ғына шашҡанһың икән. Йә, апайым үлтерә бит инде беҙҙе?!

Емеш бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Ул яҙмыштың бөтә көтөлмәгән этлектәрен шулай өндәшмәй ҡаршы алырға күптән әйрәнгәйне инде.

Төш ауыуға урам ҡапҡаһы шағыр-шоғор асылып китте. Тотош ҡылау менән ҡапланған сабан ат һалмаҡ атлап кәртә яғына үтте. Ҡыҙҙар баҙарсыларҙы ҡаршылай сығырға ла, урындарынан ҡуҙғалырға ла булдыра алманылар. Оҙаҡламай өҙә баҫып Сарбиямал үҙе килеп инде. Унын. йөҙө ғәйәт асыулы ине.

Ул мендәр тығып ҡуйылған күҙгәнәкте тыштан уҡ күреп өлгөргәйне.

— Тәҙрәмде, күҙгәнәгемде ватҡандар, ҡәһәр һуҡкыр-ҙар!..— тип оҙон һуҙып, әсе сыйылдап ҡысҡырып ебәрҙе ул. Унан, ендәрен һыҙғанып, ҡорбанына ташланырға әҙерләнгән айыуҙай алпан-толпан баҫып, йыуан бармаҡтарын ҡот осорғос тырпайтып, ҡыҙҙарҙын. өҫтөнә килә башланы.

— Ке-м ватты?! Ке-м?! Бы-яламды кем ватты, тим, ер йоткорҙары!..

Йәнеш менән Емеш, ҡоттары осоп, артҡа сигенделәр.

Сәрбиямал ҡорбандарының үлем алдындағы аҙабын һәм үҙенеҫ бынан алған ләззәтен оҙағыраҡ һуҙырға теләгән һымаҡ, һөжүм менән көтәү араһын балалар әкренләп сигенеп, бәләкәс яҡтың урындыҡ йөҙлөгөнә барып терәлгәнсә алып барҙы. Ә йөҙлөккә терәлеп, инде сигенергә һис бер юл ҡалмағас, балаларҙың баш өҫтөндә баянан бирле бөркет тырнаҡтары шикелле тырпайып торған ҡулын:

— һә!..— тип, бер юлы түбән төшөрҙө лә, ике ҡыҙын, сәс толомонан матҡып тотоп, бер тартыуҙа иҙәнгә йыҡты. Аяғын күтәреп тибергә әҙерләнде. Шул сакта ҙур яҡтан:

— Әхи-рәт!..— тигән сабырһыҙ тауыш ишетелде.— Әхирәт, һин ҡайҙа?!— Сәрбиямал ҡорбандарын йәһәт

кенә ҡулынан ысҡындырып, бер ни булмаған кеүек, татлы йылмайып, ҙур яҡҡа сығып китте.

— Эй-й, әхирәткәйем килгән дә баһа!.. Әйҙүк, әйҙүк, әхирәт. Түрҙән уҙ! Йә, нисек килеп сығаһы иттең, әхирәт?..

— Ярай, һуҙып-муҙып торорға ваҡыт юҡ, әхирәт. Бик ашығыс саҡ,— тип һөйләнә-һөйләнә Бибисара абыстай түргә уҙҙы. Унан, тәмләп-тасуирлап, Айһылыуҙы кисә кис һатыбалға биреп, никах укытыуҙары, ошо арала туй буласағы, Сәрбиямалды, үҙҙәренең яғынан туйға ҡатнаша алмаһа ла, туй ваҡытында аш-һыу бешереп, ҡоҙа һыйлз* шып йөрөр өсөн үҙҙәренә бер нисә көнгә ҡунаҡҡа саҡырырйГ ға кнлеүе тураһында һәйләй башланы. Емеш, үҙ ҡайғы?г һын онотоп:

«Ысын икән!.. Айһылыу апайҙы ысынлап шул һемһөҙгә бирәләр икән!..»—тип тағы янып-көйөп, Айһылыу менән ағаһы хаҡында уйланып китте. «Эй, ағайым ни генә эшләй инде, бахыр?..»

Йәнеш үҙҙәрен әлегә тукмауҙан ҡотҡарған был хәбәргә ҡыуанырға ла, көйөнөргә лә белмәне. Ә был хаҡта әлегә бер ни белмәгән Иштуған атын туғарып бесәнгә ҡушты ла, ; өйгә инеп тә тормаҫтан, урамға йүгерҙе. Ул тиҙерәк Әхәтте күрергә, кисәнән бирле үҙе ишеткән-күргән ғәжәп хәлдәр : тураһында уға һөйләй һалырға ашҡына ине.

Кисә кис Иштуғандар барып төшкәндә, Батыйма тутайҙың тиреҫ, дегет, күн, тимер, әсе кәбеҫтә, тағы әллә ниндәй серетмә еҫтәре борҡоп, танауҙы ярып килгән киң, бысраҡ ишек алды тәртәләрен юғары күтәреп тығыҙлап урынлаштырылған йөклө саналар, сана янына бәйләп ҡуйылған аттар менән туп-тулы ине. Бында көрәк-һәнәк, тәпән-төпән тейәп килгән урман яғы һөнәрселәре лә, аршынлы тауар менән һатыу итеүсе ваҡ сауҙагәрҙәр ҙә, былай, баҙар күрер өсөн генә килгән буш саналы фортундар ҙа күп ине. Баҙарсыларҙын, ҡайһы берҙәре йөктәге әйберен һаҡлап, атын тәрбиәләп тышта, санаһы янында йөрөй, ҡайһылары, өйҙә стенаға беркетеп эшләнгән тәҫһеҙ көрән буяулыоҙон ширлектәрга теҙелеп, йоҡомһорай биреп сәй эсә. Аҙ яғылыу өҫтөнә, ингән-сыҡҡан кешенең күплегенән дә нык һыуынған ярым ҡараңғы өй ҡырыҫ, ҡотһоҙ. Тәҫһеҙ көрән буяулы ла ҡырылып бөткән оҙон өҫтәлдәге күпкән ҡорһаҡлы, күгәргән еҙ самауырҙын, ялҡау ғына шыжылдауы, уның янырға, өлгөрмәгән дымлы күмеренән өй эсенә таралған зәнхәр төтөн был өйгә тағы ла ҡотһоҙлоҡ өҫтәй. Сәй эсеүселәр самауырҙан йылымса һыуҙы шабырлатып сынаяҡтарға ағыҙалар ҙа:

— һыу ҡайнап та сыҡмаған. Күмерен йәлләй ҡомһоҙ бисә. Ә ҡунған есөн дә, ошо йылымса һыуын эскән өсөн дә хаҡты бер ҙә Ырымбурҙағынан кәм алмай! — тип һуҡраналар.

Иштуғандар ҙа, ишек алдына саналарын тығыҙлап һыйҙырғас, өйгә инеп, ишек төбө яҡтағы ширлеккә ултырҙылар. Улар менән бер үк ваҡытта бында килеп ингән Тимербай кәзә мөгөҙө кеүек кәкре махоркаһынан ҡуйы күк төтөн борҡотоп ултырған эре һары һипкелле, етен ҡашлы бер һалдат менән, бик ҡыуанып:

^ — Никита белеш, һин донъяла бармы ни эле?— тип ҡосаҡлашып күреште лә бөтә кис буйы унан айырылманы. Улар нимә хаҡындалыр ҡыҙып-ҡыҙып һөйләштеләр. Иштуғанға был Никита тигән һалдат ғәжәп һөйкөмлө күренде. Ул донъяны күп күргән, күпте белгән кешегә оҡшай ине. » Ә ундай кешенең һүҙен тыңларға Иштуған да бик ярата. Шуға күрә ул Тимербай менән Никитаға яҡын уҡ килеп ултырҙы. Сәрбиямалдың да күҙе сәй эсеүселәр яғында йөрөһә лә, ҡолағы ла, иғтибары ла был яҡта булды:

«Быныһы ниндәй керәшин тағы? Ҡайһылай мауығып һөйләшкән булалар, ҡорсаңғылар!.. Ни һөйләшәләр икән, белһәң ине».

Күбеһенсә, әлбиттә, Никита һөйләне. Күп һуғыштарҙа булып, күпте күреп, күпте белеп, большевик булып ҡайтып килгән Никитанын, һөйләп һүҙе бөтөрлөк түгел ине хәҙер. Ул тышҡы күренеше менән дә, эстән дә танымаҫлыҡ булып үҙгәреп, боронғоса әйткәндә, ысын мәғәнәһе менән ир етеп ҡайтып килгәйне. Никитанын. телендә әлдән-әле «Петербург», «эшселәр», «Ленин», «болшевиктар» тигән һүҙҙәр йыш ҡабатланды. Иштуған был һүҙҙәрҙе Тимербайҙан ишетеп белә ине инде. Ләкин Никита «самодержавие», «стачка», «забастовка», «восстлние», «революция» кеүек Иштуған бығаса һис тә ишетмәгән өр-яңы һүҙҙәрҙе лә ҡуллана ине. Иштуған Никитаныц бышылдап кәкре мөгөҙлө махорканы йотлоғоп һура-һура ярһып һөйләгән был һүҙҙәренән, яҙа-йоҙа ишетеп булһа ла, ҡайҙалыр, кемдәрҙендер, батшаны ҡолатыу, илгә тыныслыҡ, ирек, бәхет яулап алыу өсөн ҡаты көрәш алып барыуын аңланы. «Их, миңә лә шул көрәштә ҡатнашырға ине!.» — тип ашҡынды Иштуған. Ә тегеләр һаман һөйләштеләр ҙә һөйләштеләр. Иштуған, тыңлай торғас, арып, күңелен солғап алған дауыллы шатлыктан тамам иҙрәп, хәлһеҙләнеп ширлеккә ауҙы. һәм шунда уҡ иҫ киткес сағыу ҡояш нуры аҫтында мең төрлө нур сәсеп, балҡып яткан икһеҙ-сикһеҙ киң йылға ярына барып та сыҡты. Йылғала ишелеп-аҡтарылып боҙ китә. Тирә-яҡты иҫ киткес көслө яҙғы ташҡын ҡапланған. Ошо ваҡыт ниндәйҙер бик таныш, яҡын тауыш уға:

• ' — Яҙ етте, яҙ!.. һин дә бер кескәй тамсы бит... Ҡушыл

шул оло ташҡынға!.. Ҡушыл да аҡ!.. Урғып-ҡайнап ағып кит. Оло диңгеҙгә барып ет! — тип бышылданы.

— Эйе, эйе!.. Ал мине, ташҡын, ҡуйыныңа!.. Эйе, эйе, минен, дә шашып-ярһып аҡҡым, оло диңгеҙгә барып ҡушылғыш килә!— тип ҡабатланы Иштуған. Унан, баҫҡан еренән иреп-ишелеп, боҙҙар араһына инеп сумды. Тау-тау боҙҙар уны сәнскеле боҙло ҡосаҡтарына ҡыҫып алдылар ҙа, шарҡылдап көлә-көлә, өйрөлтөп, түкмәстереп йылға уртаһына табан ағыҙып алып киттеләр. һыуыҡтан һәм ҡурҡыныслы ярһыуҙан Иштуғандың тыны быуылды.

— Туктағыҙ, ебәрегеҙ!.. Тонсоғам, үләм!— тип ҡысҡырып, ул ширлектән иҙәнгә ауып төштө. Унан, өшөп-ҡалтырап, бик оҙаҡ иҫенә килә алмай, иҙән уртаһында баҫып торҙо.

«Ҡайҙа һуң мин?.. Был кемдең өйө? Ниңә бер кеше лә юҡ?..

Ысынлап та, был ваҡытта төн уҙған, ҡышҡы ҡырыҫ ҡояш ҡалҡҡан, Батыйма тутайҙар тәңгәлендә генә яткан ҙур майҙанда күптән баҙар башланған. Фатирсылар, берейе ҡалмай, шунда китеп бөткәйнеләр.

Әхмәтшаһын осраткан Сәрбиямал да, кисә Иштуған йоҡлап китеү менән, бынан шылғайны. һәм әле булһа уның менән ҡайҙалыр юғалып йөрөй ине. Иштуған, йоҡоһонан ҡапыл айнып, тышҡа ташланды.

«Тукта, теге һалдатты осратып, «восстание», «революция» нимә ул тип һорарға кәрәк. һорайым. Барам да һорайым. Тик Тимербай ағайым ғына уның янында булмаһын ине...»

Өлкән кешеләр һөләшкәндә йәш кешенең һүҙгә ҡатнашыуы әҙәпһеҙлек иҫәпләнгәнлектән, кисә был хаҡта ул Никитаға бик теләһә лә һорау бирэ алмағайны.

Иштуған барып еткәндә, баҙар майҙаны халыҡ менән шығырым тулы ине. Ул ит, май, тире һатҡан лавкалар рәтенән, сана, тәртә, септә, шәлкем йукәләр таратып ташланған түбәләс урындан йүгереп тигәндәй уҙҙы ла, төрлөһө-төрлө нәмә тотоп, ҡайнап торған халыҡты терһәге менән көскә йырып, майҙан уртаһына табан ынтылды. Унда, ҡасандыр, кемдер ташлап ҡалдырған ҡорғаҡһыған ҙур дегет мискәһе өҫтөнә баҫып, кемдер ҡул болғай-болғай ҡыҙып-ярһып ниҙер һөйләп тора ине. Иштуған, халыҡты йырып, алға уҡ килеп сыҡкас, был кешенең кисәге Никита икәнен белеп, аптырап ҡалды: «Нимә һөйләй икән һуң был һалдат?..»

Мискәнең ике яғында һаҡсы һалдаттар кеуек баҫҡан кешеләр араһында Тимербай ҙа бар. Бер ситтәрәк урядник Алексей, Собхан старшина, һатыбал, Хөснелхаҡ, улдары, кейәүҙәре менән Сергей Хитровтар тора. Улар аптыраған да, ҡаушаған да һымаҡ күренә.

«Ғәжәп?! Был ни ғәләмәт?!»—тип туҙемһеҙләнеп уйланды Иштуған. Ләкин уға Никитаның һүҙен ишетергә тура килмәне, сөнки ул барып етеүгә, Никита:

— Ура, йәшәһен революция!— тип һөрән һалды ла, һыңар ҡултыҡ таяғына таянып, мискә өҫтөнән ергә һикерҙе.

— Ура-а!.. Бөтһән һуғыш!.. Бөтһөн иҙеүселәр! Йәшәһен хөрриәт!..

— Туктағыҙ, шауламағыҙ, һарыҡтар!..

— Өйрәтмә, буржуй! Етер һиңә!— тип төрлө тауыш менән ҡотороноп шауланы майҙан. Ул арала кемдәрҙер Тимербайҙы күтәреп тигәндәй мискәгә мендереп баҫтырҙылар. Ул башындағы ҡолаҡсын бүркен һыпырып алын, ҡулына йомарлап тотто ла, ғәжәп шат, ярһыу тауыш менән:

— Иптәштәр!..— тип, һалҡын саф һауаны яңғыратып, ҡысҡырып ебәрҙе. Гөжләп торған майҙан тағы тын булып ҡалды.

— Иптәштәр!— тип ҡабатланы Тимербай.— Батша төшкән!.. Төшөргәндәр!.. Ғүмер буйы ярлы халыҡтың елкә итен суҡып сейләтеп бөткән Сәмреғоштоң суҡышын һындырғандар!.. Ҡулдан бығау өҙөлдө, иптәштәр!.. Йәшәһен азатлыҡ!.. Бөтһөн һуғыш!.. Завод эшсегә, ер крәҫтиәнгә булһын, иптәштәр!.. Бөтһөн буржуйҙар!.. Йәшәһен бөтә донъя революцияһы, иптәштәр!..

Тимербайҙан һун. майҙан тағы бал ҡорто күсе шикелле мыжғып китте.

— Батша төшкән!.. Дөмөккән икән, ҡәһәр һуҡҡыры. Күптән шулай кәрәк ине. Исмаһам, күптәр ошо көндә имен-иҫән өйҙә йөрөр ине...

— һай, иҫәрҙәр, батшаһыҙ ни ғәләмәт йәшәмәк кәрәк?! Яҡшы булмаҫ был!.. Берәй афәт ҡубыр әле бына, күрерһегеҙ!..

— Батша төшкәс, һуғыш та бөтөрмө икән? Я хоҙай, бирһен хоҙай... Шулай ғына булһын!..

Иштуған, төрлө телдә, төрлөсә ҡабатланһа ла, асылда бөтәһе лә ошо һүҙҙәргә ҡайтып ҡалған был дөйөм шаушыуҙан илдә бик ҙур ваҡиға булыуын аңлап, ҡыуанырға ла өлгөрмәне, баштан-аяҡ өр-яңы ҡара кейемдәре менән бөтә баҙар халҡынан айырылып торған һатыбал мискә өҫтөнә барып менде. Ул да, Никита менән Тимербай шикелле, халыҡҡа ҡарап әсе яңғырауыҡлы тауыш менән:

— Ағай-эне! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Иштуған янында торған бер оло ғына ағай:

— Был ҡыҙыл ауыҙға ни ҡалған икән? Йә, һөйләп

ебәр. Тыңлап ҡарайыҡ,— тине. Башҡалар ҙа, күрәһең, шулай уйлап, тынып ҡалдылар.

— Ағай-эне,— тип дауам итте һатыбал.— Батшаны дөмөктөрөп бик һәйбәт иткәндәр. Шул кәрәк уға, яуызға. Инде, ағай-эне, беҙ немецты ла еңеп, һуғышты еңеү менән тамамлап ҡуйырға тейешбеҙ! Беҙ батша өсөн түгел, Рәсәй өсөн, әсәбеҙ Рәсәй иленең даны өсөн һуғышабыҙ!— тип һөйләргә кереште.

Батша тешөүҙән бигерәк, Тимербайҙарҙы ҡайтанан йышыштырыу планы өҙөлгәнгә эстәре бошҡан Собхан старшина менән Шымбай каштан, ҡуҡырайышып, бер тауыштан:

— Дөрөҫ!

— һай, афарин!— тип ҡысҡырып ебәрҙеләр.

Урядник Алексей уларға асыулы ҡарашын йүнәлтте.

— Нисек афарин? Батшаны төшөрөп яҡшы иткәндәр тигәнгә афаринмы?

— Юҡ, юҡ. Немецты еңгәнгә хәтле һуғышырға кәрәк ти бит! Беҙ ҙә шуға ҡул ҡуябыҙ.

— Ә-ә, улаймы? Унһына мин дә ҡул ҡуям,— ти урядник һәм, терпе мыйығын борғолап, ҡалын тауыш менән:—Дерөҫ, афарин! Беҙ немецты батшаһыҙ ҙа еңербеҙ!—тип ҡысҡырып ебәрә... Уларҙың тауышын төрлө яҡтан ҡеүәтле яңғыраған:

—• Кәрәкмәй,һөйләмәһен!..

— һуғыш һәйбәт булһа, үҙе барып һуғышып ҡараһын был ҡыҙыл ауыҙ!

— Етәр!..

— Долой!— тигән ҡеүәтле һөрәндәр күмеп китте.

— Их, һатыбал, маҡтансыҡ, һинең дә ауыҙың бешер көн бар икән!..» — тип кинәнде Иштуған. Үҙе, бөтә кешенән арттырып:

— Долой!— тип ҡысҡырҙы.— Һөйләмәһен буржуй, етәр!

һатыбал артынса, ҡылыс-мылтыҡтарын шылтыратып, мискә өҫтөнә Федька Рябой барып мендe. Ул, лазареттан сыҡҡас, бер ай ял итергә кисә генә ауылға, аталарына ҡайтып төшкәйне. Бегөн унын артынса килеп еткән батша төшөрөлөү хәбәре лә, Никитаның ҡулға алынмаған булыуы ла уның асыуын ҡабарткайны. Ул, мискә янында үҙенә ғорур күрә алмау менән ҡарап торған Никита яғына зәһәрле ҡараш ташлап:

«Шайтан алғыры... Әгәр һинең терелекте, быңдалыҡты белгән булһам... Кисә... Ҡайтҡас та эт кеүек атып үлтергән булыр инем. Ә бөгөн... һағыраҡ булмаһаң, бынауы ҡоторонған халыҡ үҙеңде эт итер...»— тип уйлап алды ла, иҫерек, ҡарлыҡҡан тауыш менән:



— Граждандар!..— тип ҡысҡырҙы. Шул ынғайға уҫал, бүре күҙҙәре тар маңлайына һикереп менеп ултырҙы.— Граждандар, беҙ Рәсәй кешеләре, беҙ Рәсәй өсөн үлгәнсе, еңгәнсе һуғышырға тейешбеҙ!.. һеҙ был Никита, Тимербай кеүек зимагорҙарҙы тыңламағыҙ!.. Улар немец шпиондары. Улар большевиктар!.. Беҙҙең сафтарҙы тарҡатып, немецҡа рәсәйҙе һатмаҡсы булалар улар!..

— Долой!..

, — һөйләһен!..

- — Етәр!..— тип, майҙан тағы төрле тауыш менән шаулап китте. Кемдер ҡапыл мискәне тибеп, тәгәрәтеп ебәрҙе. Мискә менән бергә Федька Рябой ҙа ергә ауып төштө. Бынан һуң тағы Никита, Тимербай, бер нисә яралы һалдат һөйләне. Иштуған, ҡарашын берсә һөйләүсегә, берсә халыҡҡа йүнәлтеп, кемдең һүҙе улар өсөн яраҡлы икәнлегенә төшөнөргә тырышты. Ләкин был ғәйәт буталсыҡ, ярһыу һүҙҙәрҙән нимә лә булһа аңлауы, ни булыуын, бигерәк тә алда нимә булырына аныҡ төшөнөү ҡыйын ине. Шулай ҙа күпселек халыҡтың, бигерәк тә тар ғына кәзә һаҡалын семеткеләп, көләс ҡыҫыҡ күҙҙәрен мелдөрәтеп, Никита менән Тимербайға һоҡланып текләп торған Хәлим ағайға, Әхәттең атаһына, ҡарап, Иштуған илдә бик ҙур ҡыуанcыслы ваҡиға булыуын, бынан ары тормоштон, бөтәнләй башҡа юлдан китергә тейешлеген бөтә йөрәге менән аңланы. һәм ул, ҡыуаныcынан ни эшләргә белмәй. Хәлим ағайҙы ҡосаҡлап алды.

— Ағай, былай булғас, бынан һуң беҙ ҙә ерһеҙ булмабыҙ бит, ә?.. Беҙҙең кеүектәргә кен килә бит, ағай!..

— Булмабыҙ, мырҙам, булмабыҙ,— тине Хәлим ағай, унын башы аша ҡайҙалыр алыҫҡа текләп.— һеҙ, балалар, атайығыҙ кеүек, минең кеүек интегеп, үҙ илеңдә, үҙ ереңдә үҙе килмешәк булып һөрөлөп, кәмһетелеп йөрөмәҫһегеҙ... Бәхетле булырһығыҙ һеҙ!.. Аңларға, төшөнөргә кәрәк быны, балалар! Бөтә йәнең-йөрәгең менән төшенөргә кәрәк!

Унын тауышы нисектер ят булып, алыҫтан килгән һымаҡ ҡалтырап сыҡты. Иштуған уға аптырап ҡараны. Уның ҡалын, ялбыр ҡаштары ҡаты төйөлгән, тағы ла нығыраҡ ҡыҫылған күҙҙәрендә йәш бөрсөктәре йымылдай ине. Әхәттең атаһын да үҙ атаһы кеүек һәр саҡ ныҡ, көслө, ҡеүәтле итеп күрергә ейрәнгән һәм ошоноң өсөн уларҙы ныҡ яратҡан Иштуғанға быңдай йомшаҡлыҡты күреү ғәжәп тә, ауыр ҙа булды. Шуға ул, башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмай, тиҙ генә унын янынан ситкә тайпылды. Ә Хәлим ағай, халыҡ менән уратып алынып, һаман ниҙер һөйләп, нимәлер аңлатып маташҡан Никита менән Тимербай янына табан китте...

Баҙарҙа күргән, ишеткән ошо ғәжәп хәлдәр тураһында дуҫына тиҙерәк һөйләргә ашыға ине хәҙер Иштуған. Улар урам уртаһында осраштылар. Сөнки был ваҡытта Әхәт тә, Иштуғандың ҡайтҡанын күреп, уға үҙе бында ишеткән күңелһеҙ яңылыҡты хәбәр итергә ашығып, йүгереп килә ине. Ул, Иштуған янына килеп етеү менән, түҙмәй:

— Эй, дуҫ, эш хөрт бит!.. Айһылыуҙы кисә һатыбалға биргәндәр. Иртән ҡоҙа киләсәк!.. Ҡушасаҡтар!— тип ҡысҡырып ебәрҙе. Иштуғандың күҙ алдары ҡараңғыланып, бөтә ярһыу шатлығы һыу һибеп һүндерелгән ҡуҙ һымаҡ булды.

— Ни һөйләйһең?.. Ҡайҙан белдең?! Кем әйтте?!

— Айһылыу бөгөн иртәнсәк үҙе һеҙгә кереп әйтеп сыҡҡан, Шәүрә миңә һөйләне... Емештәр әйтмәнеме ни һиңә?

«Нимә эшләргә? Ҡалай итергә?.. Их, Айһылыу... Айһылыу!

Бер яҡтан шундай шатлыҡ... Революция!.. Ирек!.. Икенсе яҡтан ошондай оло ҡайғы!.. Нинә ҡайғы менән ҡыуаныс һәр саҡ шулай бер-бер артлы йөрөй икән?!»

— Әйҙә, Тимербай ағайыма барып кәңәш һорайыҡ,— тине Әхәт, ҡапыл ағарынып, төҫө ҡасып киткән дуҫын йәлләп.— Әйҙә, ул, моғайын, берәй аҡыл өйрәтер...

— Эйе, унда Айһылыу менән Иштуған ҡайғыһы ғына ине ти... Беләһеңме, хәҙер...

Әхәт, теш араһынан әсе һыҙғырып, унң һүҙен бүлде:

— Беләм. Ишеттем. Эшселәр батшаны ҡолатҡан! Петербурҙа революция!.. Батша фьють!... Ха-ха!

Әхәт бөтә йөрәктән рәхәтләнеп, ҡыуанып көлдө. Унан тағы етди тонға күсеп:

— Атайымдан ишеттем. Ул һөйләне,— тип өҫтәне. Шаян ғына күҙ ҡыҫып алды.— Бына шуның өсөн дә Айһылыуҙы хәҙер ятҡа бирмәҫкә кәрәк тә... Шундай саҡта байҙарҙан өлөш ашатып тороу яраймы ни?.. Элек булһа, мин үҙем үк һиңә, кәрәкмәй, булашма, тиер инем. Хәҙер беҙҙең бәхетте тартып алырға уларға ирек бирергә ярамай. Етер, тим. Әйҙә, Тимербай ағайыма бармаһаҡ, Иҙрис олатайыма булһа ла кәңәш итәйек... Ул беҙҙә атайым менән сәй эсеп ултыра... Батша төшөрөлөүе хаҡында һөйләшәләр. Әйҙә, уның янына инәйек.

Әхәт, ҡапыл ишетеүҙән булһа кәрәк, уйлай йәки ни ҙә булһа эшләү һәләтен юғалтҡан дуҫын һөйрәкләп тигәндәй үҙҙәренә алып инеп китте.



— Кәңәшәйек, һөйләшәйек... Юкһа беҙ икәү генә бер ни ҙә эшләй алмайбыҙ. Иҙрис олатай беҙ уйламаған берәй юлын уйлап табыр ҙа ярҙам да итер, бына күрерһең...

— Ысын уҡ бирәләрме икән ни, Әхәт?.. Бәлки, буштыр. Былт-ыр ҙа буш булып сыҡҡайны бит?

— Былтыр Һатыбал яусы ебәрмәгәйне. Бибисара абыстай үҙе генә шапырынып йөрөгәйне.

— Айһылыу, улһәм үлермен, һатыбалға барырға риза булмам, тигәйне лә баһа.

;. — Эй, һөйләйһең тағы!..— тип ҡул һелтәп ҡуйҙы Әхәт.— ТЕыҙ кешенән ризалыҡ һорап торалармы һуң улар!.. Көсләп һатҡандар ҙа мулла олатайҙан никах уҡытҡандар. Мулла олатай никах уҡыған саҡта башта:

— һин, һатыбал ибни Собхан, Айһылыу бине Кәзә мәзин (әй, яңылыштым), Айһылыу бине Әхмәтсафа ҡыҙын хәләл ефетлеккә риза булып алаһыңмы?— тип һораған.

— Риза, мулла ағай, бик риза,— тигән һатыбал. Шунан мулла олатай, әлбиттә, күҙ буяу өсөн, шаршау яғына ҡарап:

— һин, Айһылыу бине Әхмәтсафа, һатыбал ибни Собханға хәләл ефетлеккә барырға ризаһыңмы?— тип һораған. Унан, шаршау артынан, Бибисара абыстай, Айһылыу булып:

— Риза, мулла олатай, бик риза, бик һәйбәт,— тип яуап биргән. Айһылыу был ваҡытта иҫһеҙ-осһоҙ икенсе өйҙә илап ятҡан...

Иштуған, ни эшләгәнен белмәй, дуҫының беләгенән тотоп алды:

— Ҡайҙан белдең, нисек ишеттең һин быны, Әхәт?! Алдайһың бит, шаяртаһың бит һин мине!..

Әхәт, һалҡын ҡанлы булырға тырышып:

— Ҡайҙан белдең? Нисек ишеттен, имеш,— тип көлөп ҡуйҙы.— Уны ни үҙ ҡолағың менән ишетеүҙең кәрәге бармы ни? Бөтә ҡыҙҙарҙы ла шулай һаталар бит... һинең Айһылыуын, өсөн генә айырым тәртип уйлап сығарырҙар тип беләһеңме әллә? Минең беләкте ул тиклем маҡып тотма, дуҫ... Көсөңдө һаҡла... һатыбалды йоҙроҡ һуғышына бик шәп тип һөйләйҙәр...

Иштуған аңһыҙ рәүештә дуҫының, беләгенән һығып тотҡан ҡулын ҡапыл тартып алып, кесәһенә тыҡты.

— Йә, ярай, көлмә, Әхәт... Миңә һин уйлағандан да ауырыраҡ... Әйҙә, ысынлап та, берәйһенә кәңәш итеп, берәй сара күреп ҡарарға кәрәк. Йә үлергә, йә Айһылыуҙы яулап алырға!.. Башҡаса миңә йәшәү юҡ...

— Дөрөς, Айһылыуҙы буреләр ауыҙынан тартып алырға кәрәк...

Улар йүгерә-атлай Әхәттәр ҡапҡаһына инеп юғалдылар.

## XIX

Батша төшөрөлгән ҡыш та, яҙ ҙа, йәй ҙә һиҙелмәй уҙып китте. Инде һалҡын, сирҡаныс көҙ ҙә килеп етте. Ләкин Емештәрҙең тормошонда әлеге яҡшы яҡҡа үҙгәреш күренмәне. Байгилде ағайҙан да күптән бирле хат килмәй башланы. Ә Сәрбиямал элеккегә ҡарағанда ла уҫалыраҡҡа, асыулыраҡҡа әйләнә барҙы. Ватылған күҙгәнәк өсөн дә, кемдәрҙендер батшаны төшөрөп донъяны болартып ебәргәне, хәҙер шул арҡала үҙенә Ырымбурға барып һатыу итеп йөрөр өсөн юлдың ҡурҡыныска әйләнеүе өсен дә, һуңғы ваҡытта телсән булып киткән Иштуған өсөн дә уларҙан ҡаты үс ала. Емеш менән Йәнешкә ҡарата булған ҡатылығын түҙеп торғоһоҙ хәлгә еткерә. Ә ҡыҙҙар, унын әрләү-туҡмауҙарына, асыҡтырыу-өшөтөүҙәренә ҡарамай, һаман йәшәй бирәләр. Йәштәре лә уларҙын, үҫә барҙы. Аяҡ-ҡулы ептәй, эсе гептәй генә булып торһа ла, Йәнешкә ун өс, ҡарап торорға Йәнештән мыҡтыраҡ булһа ла, айырата бойоҡ, монһоу күҙле Емешкә ун бер йәш тулды. Уларҙын холҡондағы ҡайһы бер айырмалы яҡтар тағы ла асығыраҡ булып, күҙгә ташланып тора башланы. Йомшаҡ күңелле Йәнеш хәҙер тағы ла илағыраҡҡа әйләнде. Донъяның бөтә ҡәһәрле эштәренә ул сәғәттәр, көндәр буйы туктамай үкһеп илау менән яуап бирә. Унын. был илауын Сәрбиямалдың бөтә булған уҫаллығы ла туҡтатырға, еңергә көсһөҙ. Сәрбиямал ни тиклем нығыраҡ туҡмаһа, Йәнеш шул тиклем ҡысҡырыбыраҡ илай. Ә Емеш, киреһенсә, тағы ла Катыраҡ үҙ эсенә бикләнә. Уны, туҡмау түгел, үлтерһәң дә, ауыҙынан бер ауыҙ һүҙ, ялыныу, аҡланыу йәки илау тауышы сығарырға мөмкин түгел. Шунын өсөн уға күп ваҡыт Йәнештән дә нығыраҡ эләгә. Сәрбиямал уны күп ваҡыт үҙе йәки Йәнеш боҙған эш өсөн дә ғазаплай. Унын: «Юҡ, апай, быны мин түгел, Йәнеш йәки һин үҙең эшләнең»,— тип әйттергеһе, унын, аҡланып маташҡанын күргеһе килә. Ләкин Емеш өндәшмәй. Ғәҙеллек, намыҫлылыҡ тигәндең нимә икәнен дә белмәгән кеше алдында аҡланып маташыуҙын кәрәге бармы ни?

Иштуған, киреһенсә, был көндәрҙә нык үҙгәреп, ҡыйыуланып китте. Сәрбиямалдан бер ҙә ҡурҡмай башланы. Сәрбиямал уны элеккесә, рәхәтләнеп, кинәнеп әрләйем тип:

— Зимагур!— тиһә, Иштуған уға:— Юҡ, зимагур түгел, батрак. һинең батрагың,—тип яуап бирә. Сәрбиямал:— Ерһеҙ, килмешәк,— тип әрләй башлаһа:

— Мин хәҙер ерһеҙ түгел. Ер эшләгән кешегә булырға тейеш, тип әйткән Ленин... — тип ебәрә. Етмәһә, Сәрбиямалға: — һин эксплуататор!— тип тә ҡысҡыра. Был һүҙҙе ишеткәс, Сәрбиямалдың былай ҙа сысҡан күҙҙәре тағы ла төпкәрәк батып, зәһәрле баҙлап, маңлайына менеп китә. Быны күреп Емеш: «Ни тигән һүҙ икән һуң был эсколатыр?»—тип аптырай. Ә Сәрбиямал, Иштуған өйҙән сығып кңтеү менән, Емеш менән Йәнеште:

:— Бына һеҙгә ер!.. Бына һеҙгә хөрриәт!.. Бына ошолай була ул эсколатыр!..— тип туҡмарға керешә.

«Эсколатыр тигәне ошо туҡмау була, күрәһең»,— тип уйлай Емеш. Ғөмүмән, был көндәрҙә Емешкә аптырай торған нәмәләр бик күбәйеп китте. Хәҙер талаш-тартыш уларҙың ейендә генә түгел, бөтә ауылға таралды. Кешеләр көн һайын тип әйтерлек урамға, берәй бүрәнә өҫтөнә, йәки кемдендер ҡапҡа төбөнә йыйыла ла талашалар, йыйыла ла талашалар. Бер көн хатта, йылыраҡ булғас, Емеш тә, сход барған ергә сығып, аяғы туңғансы был талашты тыңлап торҙо.

Унда ла һүҙ һаман батша, буржуй, ер, хөрриәт, эксплуататор тураһында барҙы. Емеш бында Тимербай ағай менән Никитаның ғына түгел, үҙенен. ағаһы Иштуғандың да, һатыбалдарға, Хөснөлхаҡтарға асыулы ҡарап:

— Етер һеҙгә, һоро ҡорттар! Беҙҙең көн килде хәҙер! Ер беҙҙеке!.. Власть беҙҙеке!..— тип ҡысҡырғанын ишетеп, ҡото осоп урамдан йүгереп ҡайтып китте. Унан көн буйына аптырап:

«Йә, ниңә талашалар? Ниңә һуғышалар? Ниңә минең баҫалҡы ғына ағайым да, ер тиһәң, йәнен-тәнен биреп һуғышырға әҙер тора? Талашмай-һуғышмай ғына ерле булып булмаймы икән ни?»— тип уйланып йөрөнө.

Батша төшә һалғас та, теге-был булып китмәҫме тип һиҫкәнеп, йәки тәхетенә батша кире ултырғас, ҡоҙалашып йөреү күңеллерәк булыр тип исәпләп, Айһылыуҙың туйын ҡыштан көҙгә кисектергәйнеләр. Көҙ уларға яңы көйөнөстәр алып килде. Батшаны тәхеткә ҡайтарыу түгел, Петербургта эшселәр, һалдаттар берләшеп, Ваҡытлы хөкүмәтте лә ошо кендәрҙә генә ҡолатып ташланылар. «Восстание», «революция», «Ленин», «большевиктар» тигән ялкынлы һүҙҙәр Илсеғол урамдарында элеккегә ҡарағанда ла кеслерәк яңғырай башланы.

— Ашығырға кәрәк. Аҙаҡ бөтөнләй һун, булып ҡуйыуы мөмкин!..— тине һатыбал.

— Әйе, тыныс кендәрҙең тиҙ ҡайтыуына, былай булғас,

ышаныс аҙ,— тине старшина. Улар туйҙы көтөлгәндән дә шәберәк итеп, күп ҡоҙалар саҡырып уҙғарырға йыйындылар. Ике яҡтан да ҙур ҡалым, мәһәр билдәләнде. Туйға ая ҡаҙыһы сыҡҡан йылҡылар һуйылды. Селләләге кеүек һалҡын, һепертмә буран ажғырып торған бер көндө түбәнге остан үрге осҡа ун биш саналы ҡоҙа килеп төштө. Кәзә мәзиндәр уларҙы туйҙа ҡатнашыусы туған-ырыуҙарына таратып бирҙеләр. Үҙҙәрендә төп ҡоҙа — Собхан старшиналар ғына ҡалды. Сәрбиямал был көндө, әхирәтенә аш-һыу бешерер өсөн, иртүк Кәзә мәзиндәргә китте. Иштуған да унын артынса ҡайҙалыр сығып юғалды. Өйҙә Емеш менйн Йәнеш икеһе генә ултырып ҡалды.

Төнгә ҡаршы буран тағы ла көсәйҙе. Емештәрҙен, былай ҙа һалҡын, күңелһеҙ өйҙәре, Сәрбиямал әйтмешләй, эт бәйләһәң торғоһоҙ булып ҡотһоҙланды. Йәнеш менән Емеш, төн еленен, шомло, ҡоторонҡо йырын тыңлап, йылымса мейескә һөйәлеп, һандыҡ өҫтөндә ултырҙылар. Йоҡлап китеп, Сәрбиямал ҡайтҡанда, ишек аса алмай ҡалыуҙан ҡурҡып, төн буйы керпек тә ҡаҡмаҫҡа, һәр саҡ уяу булырға тырыштылар. Ләкин оҙон төн буйына бер кем дә уларҙын ишеген ҡаҡманы. Әйтерһең, әйләнә-тирәлә асыулы ел һәм Емеш менән Йәнештен. ҡайғылы ауыр уйҙарынан башҡа бер нәмә лә йәшәмәй ине бөгөн.

«Төн үтеп, таң атып килә... Апайым да, ағайым да һаман ҡайтмай,— тип бошоноп уйлана Емеш.— Ярай, апайым ҡайтмаҫ та... ул туйҙа йөрөй. Ҡунаҡ. Ә ағайым ҡайҙа икән?.. Ҡайғынан башын ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөймө икән бахыр... Айһылыу апай ни эшләй икән?! Бына бит... кешеләр хатта үҙ балаларын да йәлләмәйҙәр. Шулай булғас, беҙҙен, үгәй әсәйгә ни үпкә?!»

Был уйҙарға бәйләнеп, Емештен күҙ алдына Бибеш апаһының яҙмышы ла килеп баҫа. Бибештен, яҙмышы уға, ысын тормошта булғанға ҡарағанда, уҫал үгәй әсәй, яуыз бейем, аҡыллы, һылыу етем ҡыҙ тураһында ул белгән бик күп әкиәттәрҙең береһе кеүек кенә тойола башлай.

«Эйе, уны ла бит ошолай илатып-һыҡтатып һатып ебәргәндәр... Етмәһә, ниндәй кешегә?.. Ниндәй бейемгә бит әле!..»

Емештең уйҙары, Бибештән һуң, тағы ағаһына, унан атаһына, тағы үҙҙәренең хәсрәтле яҙмышына күсеп китә. Ни генә уйлаһа ла, кемдең яҙмышын күҙ алдына килтерһә лә, бәхетһеҙлектән башҡа бер нәмә лә күрә алмай ул. Кешенең бөтә ғүмере аслыҡ-яланғаслыҡ, ҡайғы-хәсрәт, үкенес-көйвнөстәрҙән һәм өҙөлгән өмөттәрҙән генә торған ҡот осорғос бер дөңгәләк булып күҙ алдына килеп баҫа... һәм унын тынғыһыҙ кескәй йөрәге, был дүңгәләктән ыс-



-кыныу юлын уйлап табырға тырышып, ситлектәге ҡош кеүек талпына, ҡағына, ашҡына башлай. Уға бөгөн өй эсе айырата тар, тын алырға һауа ҡыҫыҡ, ҡалҡынып торорға түбә тәпәш кеүек тойола. Ләкин кескәй баланың тыпырсыныуынан ни мәғәнә бар һуң? Унын тыуыуы донъяға бер ниндәй яңылыҡ та өҫтәмәгән кеүек, һыҙланып, ғазапланып ошо рәхимһеҙ дүңгәләк эсендә быуылып һәләк булыуынан да донъя бер ни ҙә юғалтмаясаҡ. һаман шулай ҙа үҙ ваҡытында көҙ, ҡыш, яҙ булыр. Ҡояш та элеккесә үҙенең терелткес нурҙарын ер өҫтөнә берсә йомарт, берсә һаран ғына бөрк өп торор... Оло Эйек тә һаман шулай берсә ташып, берсә таллығындағы һандуғастар моңон тыңлай-тыңлай тын, наҙлы ғына шылтыратып ағыр ҙа ағыр... Эйе, эйе, унын уйлауынан, теләүенән түгел, хатта үлеүенән дә бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк...

Емеш, балаға хас булмаған шундай аңлайышһыҙ ауыр уйҙарҙан тамам иҙрәп, ултырған еренән ойоп китте. Бына буран туҡталды. Төҫө ҡасҡан сырхау йөҙ һымаҡ тоноҡ алһыу булып таң һыҙылды. Унан ҡырыҫ ҡояш тау артынан иренеп кенә күтәрелеп ҡараны ла, ҡыҙыл билбауҙарын елберләтеп ебәреп, офоҡтон, тоноҡ битенә әҙерәк кенә йән индерҙе.

һандыҡ өҫтөндә ултырған килеш танғы татлы йоҡоға сумған ҡыҙҙар, ҡапыл бик ҡаты ишек ҡағыуға һиҫкәнеп, икеһе бер юлы иҙәнгә һикереп төштө.

— Ни бар? Кем унда?

— Апайымдыр. Аса һал, Йәнеш!

Йәнеш ашығып ишектең элгесен ысҡындырҙы ла ҡото осоп артҡа сигенде.

— Абау, кемдәр былар?..

Күҫәк-сукмарҙар күтәреп, Әхмәтша ҡараҡ, Һатыбал, Хөснөлхаҡтар дөбөр-шатыр өйгә килеп инделәр. Йәнеш менән Емеш, бүренән өрккән кәзә бәрәстәре шикелле тыпырлашып, бәләкәс яҡҡа ҡасып сыҡтылар ҙа, урындыҡҡа менеп, ҡараңғы мөйөшкә һырынып торҙолар. Асыҡ ҡалған ишектән аҡтарылып ингән һалҡын һауа, аждаһа шикелле бөтөрөлөп, урындыҡҡа килеп менде лә балаларҙың яланғас аяҡтарына, билдәренә урала башланы. Теге кешеләр ҙә, улар артынан эйәреп, бәләкәс яҡҡа сыҡтылар. Асыулы тауыш менән:

— Иштуған ҡайҙа? Ағайынҡайҙа? Төндә өйҙә булдымы? Кемдәр менән булды?— тип һораша башланылар. Нимәләрҙер тип янанылар, ҡурҡыттылар, «Ҡыҙыл», тип, «большевик» тип, «караҡ» тип кемдәрҙелер һүктеләр. Емеш менән Иәнеш, был уҫал күҙҙәргә текләп, телдәрен түгел, хатта

бармаҡтарын да ҡыбырлата алмай, таш ҡурсаҡтар шикелле. ҡатып тик торҙолар. Ә тегеләр:

— Эй, телһеҙҙәр! Япалаҡтар!— тип тағы бер аҙ ҡысҡырынды-баҡырындылар ҙа ҙур яҡҡа сығып киттеләр. Унда өйҙөң аҫтын өҫкә килтереп аҡтарыныրға, эҙләнергә керештеләр. Урындыҡ аҫтарын, иҙән аҫтарын аҡтарып, урынергә хәтле туҙҙырып бөттөләр. Улар сығып, аяҡ тауыштары һил булғас, ҡыҙҙарға ҡайтанан йән инде. Йәнеш йүгереп барып асыҡ ҡалған ишекте япты. Емеш, тиҙ генә тәҙрә менән быяланы иретеп, урамға күҙ ташлаған ыңғайға, ҡото осоп ҡысҡырып ебәрҙе.

— Йәнеш, ҡара әле! Урам тулы кеше!.. Нимә булды икән? Ут сыҡтымы икән әллә?..

— Сеү, шаулама! Ҡайҙа, нимә бар? Ат-аҡ, теге суҡмарлы кешеләр Тимербай ағайымдарға инеп киттеләрсе... Унда нимә эшләйҙәр икән?..

Ҡыҙҙар, ни уйларға, ни эшләргә белмәй, аптырап ҡалдылар. Ошо ваҡыт уларға, әсәһенең әлеге бер ҡалын шәленә төрөнөп, Шәүрә йүгереп килеп инде. Уның теремек йомро күҙҙәрендә бығаса таныш булмаған тантаналы осҡон баҙлай ине.

— Ҡыҙҙар! Йәнеш! Емеш!— тип ашығып шыбырланы ул.— Айһылыу апай ҡасҡан! Үәт мәрәкә булған! Үәт һатыбал ағайға үсем булған!..

— Ҡасан?.. Нисек ҡасҡан?..

— Ысынмы, Шәүрә?! һөйләй һал!

Шәүрә, дүҫтары янына урындыҡҡа менеп, аяҡ бөкләп ултырҙы.

— Сабыр итегеҙ. Тын алырға ирек бирегеҙ, бығәләштәр!

Емеш менән Йәнеш түҙемһеҙләнеп икеһе ике яҡтан уны тартҡыланы.

— Тын алмаһан. да ярар, һөйләй һал!

— һөйлә тиҙерәк!

Шәүрә, күҙҙәрен шаян йүгертеп, шыбырлап һүҙгә керешһе. Ҡыҙҙар бер аҙға хәтле урамдағы хәлде онотоп торҙолар.

Батша төшөрөлгәс тә, Яҡуп ауылында төҙөлгән волость комитетының башына Сергей Хитровтың өлкән улы Феропонт Хитров ултырып алды. Комитеттың ағзалары ла һатыбал, урядник Алексейҙың улы фельдшер Метрофан кеүек бай малайҙарынан тора ине. Был комитетты һайлауҙа алдау, өркөтөү, янау юлдары менән Федька Рябой иң актив роль уйнаны. Бер айлыҡ отпускыһын тотош ошо маҡсатҡа файҙаланған Федька Рябой үҙ эшенән ҡәнәғәт ине. Ул часыйға китер алдынан, ағаһының ҡулын ҡаты ҡыҫып, ғорурлыҡ менән:

— Йәшәйбеҙ, Феропонт Сергеевич,— тип ҡуйҙы.— Йәшәйбеҙ, Власть беҙҙең ҡулда. Алда ла шулай булыр. Ырымбурҙа губерна комитетына ла беҙҙекеләр һайланған, тиҙәр. Хатта комиссар ҙа ниндәйҙер помещик ...ский, ти. Белдеңме?..Шәп бит! Революцияны йолҡоштар яһаны, ә беҙ, ҡыйын булһа ла, власты ҡулға алдыҡ... Хи-хи... шулай бит, Феропонт Сергеевич?

Феропонт, ҡыуаныслы йылтырап киткән бүре күҙҙәрен тзоара күҙлек аҫтына йәшереп, йомшаҡ ҡына йылмайҙы.

— Шулай инде... Алла ҡушҡас, нисек итәһең...

— Ҡара, аяуһыҙ бул. Власты ҡулдан ысҡындырма!

— Хәлдән килгәнсә тырышырбыҙ. Тик һин унда оҙаҡ юғалма. Ҡоралһыҙ власты тотоуы ауыр булыр. Беләһең бит, фронттан бик телсән булып ҡайтҡан Никиталар, каторжник Тимербайҙар...

— Эйе, улар менән минең иҫәп өҙәһе көн алда әле... Әҙерәк көтәйек... Эйе, эйе, сабыр итәйек. Улар беҙҙен. ҡулдан ысҡынмаҫ...

— Ысҡынмаҫ.

— Ә хәҙергә һин улар менән әшнә бул.

— Бөтһөн батшалар! Байҙар! Йәшәһен революция,— тип йышыраҡ ҡысҡыр. Аңланыңмы, ха-ха!

— Беләбеҙ...

Ағай менән ҡусты, тағы бер ҡат ҡул ҡыҫышып, оҙаҡ ҡына күҙгә-күҙ ҡарашып торғас, бер-береһенән ҡәнәғәт булып айырылыштылар.

— Бирешмәбеҙ. Хитровтар тоҡомо!..

Волость комитетының байҙар ҡулына эләгеүен Тимербай ауыр кисерҙе. Никита менән үҙенең волость етәкселегенә ярлы батрактарҙы, фронттан ҡайтҡан һалдаттарҙы һайлатыу өсөн алып барған көрәштәренең уңышһыҙлыҡҡа осрауын күреү еңел булманы. Инде Ваҡытлы хөкүмәт ҡолатылыуы, ҡалаларҙа восстание барыуы, власть башына эшсе, һалдат, батрак депутаттарынан һайланған Советтар килеүе хаҡында ошо көндәр эсендә генә килеп еткән ҡыуаныслы хәбәрҙәрҙең, етмәһә, кисә, ҡышты рудниктар тирәһендә эшләп үткәреп ҡайтып килгән Хәлим ағай менән һөйләшеп ултырғандан һуң, үҙҙәренең бындағы эшенә унын, тағы ла нығыраҡ эсе боша башланы.

«Рудниктарҙа ла миллионер Рәмиевтар тоҡомон пыр туҙ-



"РИг?-"

ҙырғандар. Унда ла власть эшсе, һалдат депутаттары Советы ҡулына күскән. Ә бында, ауылда халыҡ әле тарҡау. Етмәһә, һаман байҙарға, муллаларға күберәк ышана. Их, әҙерәкбеҙ шул... Күмәгерәк булып, бергәрәк эш алып барырға ине...»

Тимербай бөгөн, бына иртәнге сәй янында ла, тик ошо хаҡта ғына уйлап, баш ватып ултыра.

— Йә, атаһы, нимәгә шымып киттең. Эс, сәйең һыуына бит...— ти Баҙыян еңгә, уға яратып ҡарап.— Был арала бик уйсан булып киттең әле...

— Уйланырлыҡ та шул,— ти Ҡарасәс әбей, ипләп кенә сәйен һемереп.— Донъяларҙың бик болғанып торған сағы бит... Күралмаусылар ҙа күп... Алла үҙе генә һаҡлаһын... Бынауы Собхандар, һатыбалдар, батшаны Тимербай ғына бәреп төшөргәндәй күреп, күҙҙәре менән йоторҙай булып тик йөрөйҙәр бит...

Тимербай өндәшмәй уйын дауам дтә:

«Йә, батша төшөрөлгәнгә бер йыл тулып килә. Ә беҙҙең волость башҡарма комитетында һаман байҙар хөкөм һөрә. Совет маскаһы кейгән байҙар... Бер уйлаһаң, ундайҙар бит икеләтә хәтәрерәк... Ундайҙарға ҡаршы көрәшеүе тағы ла ауырыраҡ... Юҡ, былай ярамай. Беҙгә хәҙер волость комитетына ҡайтанан һайлау үткәреү, унда ярлы, батрак, һалдат вәкилдәрен ултыртыу өсөн ныҡлап көрәшкә тотонорға кәрәк... Йәки, бына ундағы, рудниктағы кеүек, эшсе, һалдат, крәстиән депутаттарының Советын төҙөргә лә, волость комитетына төкөрөп, үҙебеҙҙең власть менән эш итә башларға кәрәк... Тукта, Никитаға барып был хаҡта кәңәш итеп ҡайтайым әле... Беҙгә хәҙер, көстәрҙе бер ергә туплап, берҙәм эш итмәй ярамай... Юҡһа ул унда... мин бында».

Тимербай сынаяғындағы сәйен йәһәт-йәһәт кенә һемерҙе лә ҡабаланып тороп кейенә башланы.

— Атаһы, ҡайҙа китергә йыйынаһың,?— тип Баҙыян еңгә лә урынынан торҙо. Ләкин шунда уҡ төҫө ҡасып, хәлһеҙләнеп кире ултырҙы.

— Ата-аҡ! һатыбалдар күсәктәр күтәреп беҙгә инеп киләләрсе!..

Ҡарасәс әбей ҙә:

— Аһа!.. Ысын да баһа!..— тип, ҡаты хафаланып, тороп баҫты. Ул арала тегеләр, сәләм дә бирмәй, дөбөр-шатыр өйгә инеп тулдылар.

## XX

Иштуған менән Әхәт, Айһылыу **мәсьәләһе** яңынан ҡуҙғалып киткәс, кәңәш итешергә теләп, башта бер аҙға хәтле Тимербай тирәһендә уранғылап йөрөнөләр. Ләкин, нисек кенә теләһәләр ҙә, ауылда Февраль революцияһынан һуң власть башына ултырып алған кулактарға һәм уларҙың ялсыларына ҡаршы көрәшкә ярлы-батрак, һалдатты ойоштороу ниәте менән янып йөрөгән Тимербайға был турала мөрәжәғәт итергә ҡыйманылар. Тимербай Иштуған менән Айһылыуҙын. мөнәсәбәте хаҡында бер ни ҙә белмәне. Дөрөҫөрәге, был хаҡта Баҙыян еңгәнән ишеткеләп ҡалһа ла, балалыҡ, йәшлек ғәләмәте тип кенә ҡараны. Ә Кәзә мәзин менән Собхан старшинаның ҡоҙа булышыуы уны ҡыҙыҡһындырманы ла, аптыратманы ла:

«Ҡарға ҡарғаның күҙен суҡымай...»

Иштуған менән Әхәт был ваҡыттарҙа ике ут уртаһында йәшәне. Ҡалаларҙан, һуғыш майҙандарынан иҫкән дауыллы революцион тулҡын уларҙы азатлыҡ, ер, икмәк өсөн көрәшкә саҡырҙы, бөркет кеүек юғарыға, ҡояшҡа табан осорға елкендерҙе. Айһылыуҙы юғалтыу ҡайғыһы аяҡҡа тышау булып уралды, йөрәкте йылан булып һурҙы, улар был ике ут дүңгәләге эсенән нисек, ни төҫлө ысҡынып сығыу юлын таба алмай оҙаҡ аҙапландылар. Ҡыш көнө теге ваҡытта урыҫ Иҙрискә кәңәш итеп ҡарау ҙа бер ни ҙә бирмәне. Ул:

— Тапҡанһығыҙ ҡыҙ өсөн көйөнөр саҡты! Һеҙҙең кеүек егеттәр ана ҡалала батшаны, байҙарҙы пыр туҙҙырып ята. Ә һеҙ... Тфү, көҙгө себештәр!—тип әрләп кенә ебәрҙе. Ә хәҙер, бына иртәгә туй була тигән көндө, тамам өмөтһеҙләккә бирелеп, Әхәттәрҙен өйөндә ултырған егеттәрҙен. янына үҙе үк килеп инде. Был көндө ул иртәнсәктән бирле элеккесә иҫереп, ике-өс кенә ҡылы ҡалған балалайкаһын зыңҡылдата һуғып, урамда йырлап йөрөй ине. Әле лә ул Әхәттәргә:

Ай, Дунай, вай, Дунай,
Дунай, веселый Дунай!..—

тип иҫерек тауыш менән йырлап килеп инде. Егеттәр, уның ваҡытһыҙ эсеп йөрөүенә тағы ла эстәре бошоп, уға арттары менән әйләнеп торҙолар. Иҙрис ҡарт уларҙы, ҡолаҡтарынан тартып, үҙенә ҡаратты ла, ялбыр күкшел ҡаштары аҫтынан мут йылмайып:

— Икеһе лә бошонҡо. Икеһе лә асыулы. Ай егеттәр, егеттәр!.. Ҡыҙ ҡайһығыҙҙы ярата һуң һеҙҙең? — тип һораны.

Егеттәр өндәшмәй күҙҙәрен ситкә йәшерҙеләр.

— Әйтегеҙ. Юҡһа ҡыҙҙы өкө тырнағынан ҡотҡарыу юлын еирәтмәйем...

— Иштуғанды ярата...— тине Әхәт, һаман уға боролоп ҡарамай.— Иштуғандың һөйгәне ул...

— Ә һинен?— тип шаяртты Иҙрис ҡарт.— һинең һөй-

гәнендә ҡотҡарырға кәрәкмәйме ни? Хәҙер бит хөрриәт. Бөтә тотҡондар ҙа ҡотҡарылырға тейеш... Хи-хи!..

— Мин ҡыҙҙарҙы яратмайым,— тине Әхәт, асыуланып.— Минен, муйыныма элмәк кәрәкмәй.

— Ни өсөн һун, бошонаһың улай булғас?

— Иштуған есөн... Ул, Айһылыуһыҙ йәшәй алмайым, ти бит...

Әхәттең теремек күҙҙәре хатта йәшкәҙәп китте. Уға был темаға һөйләшеүе сикһеҙ ауыр. Шул уҡ ваҡытта дуҫына берәй ярҙам итеп булмаҫмы тигән өмөт уны һөйләшергә мәжбүр итә ине.

— Улай тиген... Йәшәй алмайым тип әйтә, тиген, ә? Иштуған улым, шулай уҡмы ни, ә? Ай-яй-яй!..

Иҙрис ҡарт ысын күңелдән кеткелдәп көлөп алды.

— һай балалыҡ! һай иҫәр йәшлек!..

Иштуғандың ҡаты төйөлгән ҡаштары аҫтынан ҙур ҡара күҙҙәре асыулы балҡып, йоҙроҡтары йомарланып китте.

— Олатай, һин беҙҙе үртәргә килдеңме ни?!

— Юҡ, юҡ, улым, ниңә үртәйем ти!

Иҙрис ҡарт, көлөүҙән туктап, етди тауышҡа күсте.

— Киреһенсә, һеҙгә, шилмаларға, ярҙам итеп булмаҫмы тип килдем... Үҙегеҙ бит теге саҡта, батша төшөрөлгән саҡта, ҡыш көнө... олатай, берәй кәңәш бирсе, тигәйнегеҙ бит. Ул саҡта ярҙам кәрәкмәй ҙә ине. Хәҙер күрәм: кәрәк. Дөрөҫ бит, ә?

Егеттәр икеһе бер юлы унын, йымылдап торған хәйләкәр күҙҙәренә төбәлде. Ул ысынлап та ап-айныҡ ине.

— Ысынмы, олатай?

— Ҡалай итеп?

Иҙрис ҡарт, ғыжылдап йүткерә-йүткерә, урындыҡҡа ултырҙы.

— Мин, күп уйлай торғас, ошондай фекергә килдем... Булдыра алһағыҙ, ҡыҙ һеҙҙеке. Булмаһа, һеҙгә лә, миңә лә үлем. Улар батша юҡ тип тормаҫтар... Бында әле улар һаман үҙҙәре батша...

Ул, иҫерек булып ҡыланып, урамда ҡысҡырып йөрөүҙән ҡарлыҡҡан тауыш менән шыбырлай-ғыжылдай егеттәргә Собхан старшинаның тройкаға егеп йөрөй торған өс ҡара юртағын эйәрләп бирергә ҡарар итеүен һөйләне.

— Был урлау түгел, үҙебеҙҙекен алыу. Улар минең аттарым. Минең атайымдың ҡара бейәһенән таралған ҡара юртаҡтар бит улар. Старшинаныҡы түгел. Әйҙә, менегеҙ ҙә сабығыҙ. Ул юртактарҙы ҡыуып етерлек бында башҡа ат юҡ... Никита әйтә, унда, ҡалала, ҡыҙыл гвардия төҙөлөп ята, ти. Барығыҙ ҙа шунда яҙылығыҙ. Унан һеҙгә бер бай ҙа ҡурҡыныс булмаҫ. һеҙ уларҙың үҙҙәрен ҡур-кытырһығыҙ... һай шилмалар, дөрөҫ әйтәмме?

Иҙрис ҡарт, ҡара юрғаларҙы алыу өсөн ҡасан, нисек килеү хаҡында ла егеттәргә аңлатып бөткәс, балалайкаһын зыңҡылдата һуғып, тағы урамға сығып китте:

— Ҡарағыҙ! Күрегеҙ! Офицер биргән балалайка. Офицер менән тройкала ҡырын ятып йөрөгән Идриска булыр был!..

Ул, йөнтәҫ йоҙроғо менән ҡаҡ күкрәгенә һуғып, ҡапҡа төбөндә бәүелеп-сайҡалып, шулай ҡысҡырынып тора бирҙе лә урам буйлап йырлап китте:

...Вы послушайте, ребята,
Что струна говорит,
Что струна говорит...

— Былай булғас, дуҫ, ат булды,— тине Иштуған, ҡыуанып.— Тик быны Айһылыуға нисек белдерергә?

— Бынының мин үҙем эшләрмен,— тине Әхәт, етди тауыш менән.— һин, давай, хат ҡына яҙ.

— Нимә тип?

— Иртәгә, туйҙың тап ҡыҙған сағында, эйәрле өс ат менән һине Әхмәтша ҡараҡтарҙыц арт ҡапҡаһы төбөндә көтөп торабыҙ. Ҡапҡаны ас та сыҡ,— тиген.

— Ни өсөн Әхмәтша ҡараҡтарҙың кәртә артында?— тип аптыраны Иштуған.

— Сөнки Айһылыуҙы йәшереү өсөн уларҙан да ышаныслы өй тапмаясаҡтар.

— һин шулай тип уйлайһыңмы?— тине Иштуған, өмөтһөҙләнеп.— Былай булһа, Айһылыу уларҙын. өйөнән ысҡынып сыға алмаясаҡ!

— Унының өсөн ҡайғырма. Үҙем бөтәһен дә рәтләрмен. Йә, тиҙерәк яҙ.

Әхәт төрлө ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар араһында алйып ҡалған Иштуғанға әйтеп тороп хат яҙҙырып алды лы ашығып сығып китте.

— һин күренгеләп йөрөмә! Ошонда, беҙҙә ултыра бир.

Ауылда, фанатиктарса дингә бирелеүе, бөтә тапҡан-таянғанын мулла, мәзингә ашатып, ярым ас-яланғас йәшәүе, байҙар, муллалар менән ярышып мәсеткә йөрөүе менән суфый исеме алған Тулыбай ҡарттың өлкән ҡыҙы Шәмсиәне Шымбай ҡарт Әхмәтшаға әйттергәндә, ин, элек унын аҙ һүҙле, йыуаш, баҫалҡы холоҡло булыуына иғтибар итте. Уларға

телһеҙ хеҙмәткәр кәрәк ине. Шәмсиә уларҙың был теләген тулыһынса аҡланы. Еген аттай эшләне, ҡайны-бейеменең дә, иренең дә эшенә ҡыҫылманы. Хатта Әхмәтша ҡараҡтың Сәрбиямал менән булған яҡын бәйләнешен дә күрмәне лә, белмәне лә. Әхмәтша ҡараҡ үҙе лә, Шымбай ҡарт менән әбейе лә, Шәмсиәнең ниндәй ҙә булһа үҙ уйы, үҙ теләге булыуын, уның нимәнәндер риза булмау мөмкинлеген баштарына ла килтермәнеләр. Уның эске донъяһы менән бер ҡасан да ҡыҙыҡһынған кеше булманы.

— Ғүмер буйы аслы-туҡлы торған Тулыбай ҡарт ҡыҙына бынан да артыҡ нимә кәрәк?^- тип кенә уйланы улар.

Ике яҡтан һис бер яратышыуһыҙ, әллә ниҙә бер осраҡлы рәүештә генә яҡынлашыу һөҙөмтәһе булып донъяға килгән ике бала — Заһира менән Моратша ла — хатта әсәләренән алыҫ булып, ҡарттаһы, ҡәртсәһе янында йөрөп, уларға оҡшап үҫте. Әсәләрен бер ҡасан да һанға һуҡманылар.

Бөгөн Айһылыуҙы кейәүгә ҡушырға әҙерләү өсөн еңгә һайлағанда, Кәзә мәзин менән Бибисара абыстайҙың хәтеренә, тап Әхәт әйткәнсә, ин, элек ошо Шәмсиә килеп төштө. Унан да ышаныслы, унан да баҫалҡы еңгә табырға мөмкин түгел ине. Етмәһә, ҡыҙ йәшереү өсөн дә Әхмәтша ҡараҡтарҙың өйө иң ышаныслы урын буласаҡ. Собхан старшиналар ҙа Кәзә мәзиндәрҙең был фекерен хупланылар. Әхәт, Собхан старшиналарҙа аш-һыу бешереп йөрөүсе әсәһенән ишетеп, был хаҡта кисә үк белгәйне инде.

Хәҙер кисекмәҫтән Шәмсиә еңгәне күрергә, уны үҙҙәренең яғына ауҙарырға кәрәк ине. Әхәт ошо ниәт менән көн буйы һыу юлын ҡарауылланы. Шәмсиәне һыу юлында осратып һөйләшергә теләне. Ул ни өсөндөр, Шәмсиә еңгә ярҙам итмәһә лә, уларҙың уйын бирәүгә лә әйтмәҫ, тип ышана ине.

Ләкин ҡарышҡан шикелле бөгөн һыуҙы Заһира ташыны. Шәмсиә еңгә күренмәне. Ахыр Әхәткә, Иҙрис ҡарттан башҡа бер кем белмәҫкә тейешле серҙе, Иштуғанға әйтмәй генә, Сәлимә еңгәгә барып сисергә, унан ярҙам һорарға тура килде. Сәлимә менән Шәмсиә араһында, күптәргә билдәле булмаған яҡын дуҫлыҡ, яҡынлыҡ йәшәй. Шәмсиә үҙ хәлен Сәлимәгә генә һөйләп илай ала. Сәлимәне үҙе кеүек серҙе ҡаты һаҡлай белгәне өсөн ярата. Ә Сәлимә уны бүреләр араһында йәшәгән һарыҡ кеүек күреп йәлләй, ҡулынан килгәнсә уны йыуатырға тырыша ине. Әле инде Әхәт үҙҙәренең серен сискәс, Собхан старшинанан теге ваҡытта пособие өсөн алынмай ҡалған үсен хәтерләп, ҡыуана-көлә, туҫтаҡ тотоп Шәмсиәләргә йүгерҙе.

— Тыныс бул, ҡәйнеш. Бөтәһе лә һеҙ теләгәнсә булыр. Шәмсиәләрҙән үтескә он һорарға барам...



Әхәт Сәлимәне, Иштуған Әхәтте көтеп, аҙаплы бер-ике сәғәт ваҡыт үтте. Ахыр, шаян күҙҙәре тағы ла ялтырап, Сәлимә ҡайтып килде.

— Булды,— тине ул, серле шыбырлап. Гүйә үҙенең сая йәшлеген хәтерләне.— Булды. Шәмсиә бөтәһен дә эшләйәсәк. Тик үҙегеҙ генә уяу булығыҙ.

— Ы-ысын булырмы икән был, еңгә?— тип ҡыуанысынан хатта тотлоғоп торҙо Әхәт.— Буш һүҙ генә булып сыҡмаҫмы икән?!

Сәлимә уның ҡытыршы сәсенән һыйпап, арҡаһынан тупылдатып һөйҙө лә моцһоу ғына итеп өҫтәп ҡуйҙы:

— Эй, иҫәркәй... Белмәйһең шул әле һин... Шәмсиәнең дә, исмаһам, башҡа ҡыҙҙы һөйгәне менән ҡауыштырып булһа ла үҙ бәхетһеҙлегенән үс алғыһы килмәйме ни?.. Өнһөҙ-һүҙһеҙ булғас та, Шәмсиәнең йөрәге юҡ тип беләһеңме ни?..

Әхәт ҡыуанысынан ҡайҙа баҫҡанын белмәй өйҙәренә, Иштуған янына ҡайтып китте.

Туйға хәтле ул-был булып ҡуймаһын тип, ишек алдындағы кескәй өйгә бикләп ҡуйылған Айһылыу янына еңгәләр килделәр. Сымылдыҡ, шаршау ҡороп, мамыҡ түшәктәр түшәп, кейәү менән ҡыҙға урын әҙерләй башланылар. Унан илай-һыҡтай хәлдән тайған Айһылыуҙы күтәреп торғоҙоп, көсләп кейендерҙеләр, биҙәнеләр.

Бейек үксәле, еҙ дағалы ҡыҙыл итек, селтәр, ҡашмау, шау уҡанан торған тәнкәле, мәрйенле ҡара атлас елән — былар бөтәһе лә кейәү бүләге ине.

— Уй, ҡалай үҙенә кейем килешә, Айһылыу. Тел өҫтөнә һалып, тылҡап йоторлоҡ ҡына булдың бит, бикәс!..— тип һоҡланды Шәмсиә.— Бигерәк һылыуһың шул... Старшина улының күҙе төшмәҫлек түгел шул...

— Йә, кем өсөн мине кейендерәһен? Кем өсөн биҙәйһең бит, еңгә?!— Айһылыу үкһеп илап тағы урындыҡҡа барып ауҙы.— Уй, ысынлап уҡ мин шул мөхәббәтһеҙ һатыбалдыц ҡатыны булырмынмы ни? Иштуған!.. Иштуған, ниңә һин мине ҡотҡармайһың?..

Шәмсиә ипләп кенә уның башынан, ҡулдарынан һыйпаны.

— Илама, бикәс, өмөтһөҙ булма. Кем белә, бәлки һин Донъяла иң бәхетле ҡыҙ булырһын, әле... Яратырһын. да... һөйөрһөң дә... һөйөлөрһең дә, тигәндәй... Шулай бит, апһын?..

Сымылдыҡты һаман рәтләп маташҡан икенсе еңгә, был яҡҡа ҡарамай ғына:

— Шулай булмаған ҡайҙа ул, килен...— ти.— һатыбалды әйтәм, үҙе бай, үҙе укымышлы, үҙе матур... һөлөк кеүек һыҙылып торған ҡап-ҡара мыйыҡтары ғына үҙе ни тора!.. Башҡа ҡыҙҙарға ундай кейәү тәтеһә, эһем-эһем тип, ырғып-һикереп төшөрҙәр ине... Ә был, алйот!..

— Әйтмә лә,— ти Шәмсиә, апһынын хуплап. Үҙе иплэп кенә Айһылыуҙың усына Иштуғандың хатын һала.— Әйтмә лә... Өмөтһөҙ булырға яраймы ни... Кем белә... бәлки...

Айһылыу, илауҙан туктап, ҡомған алып тышҡа сығып китә.

— Еңгә, мин битемде йыуып инәйем әле?

— Бар, бар, бикәс,— ти Шәмсиә, уны һөйөп.— Битеңде йыу, кершән һөрт. Уйна, ҡөл, беҙгә лә күңелле булыр.

Айһылыу тыштан, бөтөнләй икенсе кеше булып, йөҙө яҡтырып килеп инде.

— Еңгәләрем, йәнекәйҙәрем, һеҙ ысынлап та дөрөҫтө һөйләйһегеҙ. Ниңә мин илайым әле? Бына алйот!.. Ҡыуанырға кәрәк. Барығыҙ, әсәйемә әйтегеҙ, минең дә башҡалар кеүек ҡыҙ ғүмеремдең аҙаҡҡы сәғәттәрен тиң-тоштарым араһында уйнап-көлөп үткәргем килә.

— Бына шулай. Күптән шулай кәрәк ине,— тине Шәмсиә, ҡыуанып.

— Үәт аҡыллы һүҙ әйттең, исмаһам,— тине икенсе еңгә.

Улар ҡыуаныслы хәбәрҙе шунда уҡ Бибисара абыстайға еткерҙеләр. Оҙаҡламай өй тулып ҡыҙҙар йыйылды. Улар йырлап, бейеп, ҡумыҙ тартып, кискә хәтле кейәү өйөндә уйнап ултырҙылар. Айһылыу көндәгенән дә шат, көләс ине. Ул бетәһенән күберәк йырланы, бейене, уйнаны, көлдө. Тегебыл һылтау табып, кейәү өйөнә бер-ике тапҡыр инеп сыҡҡан Бибисара абыстай, Кәзә мәзинде ҡоҙалар янынан саҡырып сығарып:

— Эй, ҡара әле, әй, ҡыҙыбыҙ бик шат та баһа!.. Ә мин уйлағайным...— тип хәбәр итмәй булдыра алманы.

— Әйттем бит... юрый ғына илайҙыр, тип... Ҡатын-ҡыҙҙың хәйләһен төшөнмәҫһең уның. Ах, шилма, кейәүгә биргәнгә ҡыуана тип әйтмәһендәр, тип илап ҡыланған икән. Ҡара һин уны...— тип мәзин дә кинәнеп китте.

— Былай булғас, ҡурҡаһы юҡ. Боронғоса ҡыҙҙы йәшереп, килендәргә, ҡыҙҙарға кейәүҙән бүләк алырға ирек ҡуйырға кәрәк.— Шулай бит, атаһы,— тине Бибисара абыстай, ҡыуанып.— Юҡһа мин, ҡыҙҙы алдан бикләгән көйө кейәүҙе унын. янына ғына индереп ҡушһаҡ, йоланы боҙған өсөн халыҡ ғәйебенә эләгербеҙ, тип хафаланып тора инем әле.

— Дөрөҫ, ярай, йоланы һаҡлайыҡ. Тик ҡара, ышаныслы өйгә йәшерһендәр.

— Ул турала хафаланма. Мин Шымбай ҡайнағалар өйөн



һайланым инде. Шәмсиә килен ни ул, бахыр, ни ҡушһаң, шуны эшләй бит ул. Әйҙә ҡыҙҙар уның өйөнә йәшерһендәр.

— Ярар, ярар, әсәһе, үҙең ҡара,— тине Кәзә мәзин, ҡабаланып,— беләһең бит, мине унда ҡоҙалар көтә.

Ул, төмерәнләп, ҡайтанан ҡунаҡ өйөнә инеп китте.

Туй дауам итте. Мискә-мискә буҙа эселде. Тотош бер йылҡы ите ашалып бөттө, иҫәпһеҙ-һанһыҙ ҡаҙылял һоғонолдо. Төн уртаһы етер алда, бөтәһе лә ялтырап, уйнаҡлап торған етеҙ аттарға атланып кейәү егеттәренең уртаһында бер үҙе күк юрғаға менеп, эт өрҙөрөп, ат уйнатып, һатыбал килеп төштө. Ул, тантана ҙурыраҡ булһын өсөн, өйҙән генә түгел, ә укыған еренән — Ташһарайҙан урап килгәйне. Кейәү егеттәре лә шул училищелағы егеттәр ине. Батша төшөрелөүгә ете-һигеҙ ай үтһә лә, училище таралмағайны әле.

Еңгәләр кейәүҙе, аттан аҡ кейеҙ өҫтөнә төшөрөп, ҡыҙ өйенә оҙаттылар. Ә кейәү егеттәре, кейәү бүләге һалынған дүрт тотҡалы, терлө мөһөрҙәр менән семәкәйләп эшләнгән ағас һандыҡты көскә күтәреп, туй барған өйгә инделәр. һандыҡ ҙур тантана менән табын уртаһына ҡуйылды. Ғәҙәт буйынса, һандыҡты асыу, кейәү бүләген алыу хоҡуғы есөн ярыш башланды. Кем күберәк мал, аҡса һала, һандыҡты шул аса. Бүләкте шул ала.

— Бер һарыҡ! — тип, һандыҡты дөпөлдәтә һуғып, ярышты Кәзә мәзин үҙе башлап ебәрҙе.

«Бай кейәүҙең бүләге бер һарыҡлыҡ ҡына булыр әле»,— тип уйланы ул.

— Бер быҙау!

— Тана!

— Ҡолонсаҡ!

— Тай!..— тип ҡоҙалар береһенән-береһе уҙҙырырға тырышты. һандыҡ бер өҙлөкһөҙ гөпөлдәп кенә торҙо. Шулай ҙа Кәзә мәзиндән уҙҙырған кеше булманы. Ул, нисек кенә булмаһын, кейәү бүләген башҡа кешенән алдырып, әрәм итергә теләмәй ине. Шуның өсөн ул иң аҙаҡҡы тапҡыр:

— Бер ҡонан!— тип, һандыҡты гөпөлдәтә һуҡҡас, ҡабат йөҙрөк күтәреүсе булманы. Сөнки был һандыҡ асыу өсөн ғәҙәттә булмаған йомартлыҡ ине.

Бына һандыҡ та асылды. Ҡоҙалар ашығып бүләккә күҙ ташланылар. Ләкин быға са бай кейәүгә маһайып, күркә кеүек ҡабарып йөрөгән Кәзә мәзин ғәрлегенән ҡысҡырыш илап ебәрә яҙҙы, сөнки кейәү бүләгендә ябай аҡ ситсанан тегелгән күлдәк-ыштандан башҡа бер нәмә лә юҡ ине.

«Йә, нимә тип ҡырталаштым бит! Оят! Оят!..— тип ғәрләнеп уйланды ул. Хатта уртаса бай кейәүҙәр ҙә, күлдәк-ыштандан тыщ, бүләккә елән йәки сапан, ситек, калуш һала

торғайны!.. Көлдәк етендән, яға-еңе сигелгән була торғайны бит!.. Ә был, ҡормош, тфү!..»

Ул эстән шулай әсе тиргәнеп, төкөрөп ҡуйҙы. Ҡайһы бер ҡунаҡтарҙың, мыйыҡ аҫтынан көлөп ултырыуы уның ғәрлеген тағы ла арттырыл ебәрҙе. Ул хатта, һандыҡтан кейәү күстәнәсен алып, табынға ҡуйырға ла онотоп, сәбәләнеп ҡайҙалыр сығып китте. Кейәү егеттәре һандыҡтан сәксәкте үҙҙәре алып табынға ҡуйҙылар. Туй дауа.м итте.

Төн уртаһы ауғас, ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар йоҡо урындарына таралғас, ҡыҙ эҙләү башланды. Урам ҡатын-ҡыҙ, йәштәр, бала-саға менән тулды. Енгәләр өйҙән өйгә йөрөп ҡыҙҙы эҙләнеләр. Ғәҙәт буйынса, еңгәләр кейәүҙән буләк алмыйынса ҡыҙҙы «тапмайҙар». Ҡыҙҙы таба алмағас, кейәүҙелә алып сығып, үҙҙәре менән эйәртеп йөрөтәләр, унан бер нисә тапҡыр бүләк алғас ҡына ҡыҙҙы «табалар». Әле лә еңгәләр үҙҙәренең был ғәҙәттәренә тоғро ҡалдылар. Урамды бер ҡат әйләнеп сығып, ҡыҙҙы тапмағас, кейәү артынан киттеләр. Ләкин һатыбал ҡыҙҙы эҙләп урамда йөрөргә, ябай кейәүҙәр көнөнә ҡалырға теләмәне. Үҙен саҡырып килгән еңгәләргә инде ҡиммәте бөткән көмөш тәңкәләр ырғытты ла:

— Тиҙерәк табып алып килегеҙ,— тип бойороп ҡына ҡуйҙы. Еңгәләр күңелһеҙ генә сығып, туп-тура Әхмәтша ҡараҡтарға, ҡыҙ йәшеренгән ергә киттеләр. Ҡыҙ эҙләүсе төркөм, сыр-сыу килеп, еңгәләр артынан эйәрҙе.

Эҙләүселәр барып ингәндә, ҡыҙҙар уйнап-көлөп, бейепйырлап арып, төрлөһө-төрлө ерҙә боҡайышып йоҡлап яталар ине. Айһылыу уларға:

— һаман эҙләп килмәйҙәр ҙә килмәйҙәр. Йәгеҙ, ял итеп алайыҡ, әхирәттәр,— тип үҙе тәү башлап мөйөшкә барып ауғайны. Көн буйы эш менән арыған Шәмсиә еңгә лә, түрьяҡта, стенаға һейәлеп, йоҡлап ултыра ине. Ҡаты итеп ишекте ҡаҡтылар, ул, һиҫкәнеп, күҙен тырнап аса-аса, ишеккә йүгерҙе.

Йоҡоло тауыш менән:

— Кем бар?— тип һораны.

— Ҡыҙ һеҙҙәме?

— Юҡ.

— Ас, тиҙәр.

— Бүләге ниҙән булыр?

—Ас!Ас!

Шәмсиә ишекте асып ебәреүгә, ҡыҙ эҙләүселәр дөбәршатыр өйгә инеп тулдылар.



— Айһылыу, бикәс, тор,— килделәр!

Шәмсиә уның өҫтөндәге юрғанын тартып алды.

— Ата-аҡ! Айһылыу ҡайҙа булған?!

Ул аптырап та, ҡуркып та башҡаларға ҡараны. Юрған аҫтында, Айһылыу урынында, Шымбай ҡарттың алама толобо ғына ята ине.

— Айһылыу! Айһылыу! Сыҡ, йәшенмә, алйот!

— Айһылыу, тим, һин ҡайҙа?..

Был һорауға бер кем дә яуап бирә алманы. Төн буйы яуған ҡар һәм һепертмә буран уларҙың эҙен һылап-һыйпап йәшереп ҡуйғайны.

Еңгәләр ары йүгерҙеләр, бире йүгерҙеләр. Мейес артын, урындыҡ, иҙән аҫтарын, ҡыйыҡ эсен, кәртә-ҡура араһын байҡап сыҡтылар. Ҡыш буйы һис бер асылмаған арт ҡапҡаның бөгөн шар асыҡ тороуын күреп, аптырап ҡалдылар. Унан:

— Ҡасҡан! Бөтөнләй киткән!— тип ҡысҡырып, илайуфылдай, Кәзә мәзиндәргә йүгерҙеләр. Ҡыҙ эҙләүсе төркөм терлө тауыш менән шау-гөр килде:

— Нисек ҡасҡан? Ҡайҙа?

— Кем уны сығарып ишекте элеп ҡалған?

— Кем менән ҡасҡан?

— һай, бешмәгән, әрпеш, йоҡосо Шәмсиә!..

— Бер ни белмәй йоҡлап ятып ҡалған!.. Ха-ха-ха!.. һай, мәрәкә булған!

Был шау-шыуға бөтә урам хәрәкәткә килде. Ҡоҙағыйҙар ҙа сыуылдашып урамға сыҡты. һатыбал да, ҡыҙҙы илатаһуға эҙләтеп ыҙалау маҡсаты менән осон бик ныҡ йәшереп быуған ал билбауын ҡәһәрләнеп сисеп ырғытып урамға ташланды.

— Тоторға! Ҡыуырға! Ҡыуғын ебәрергә! Кемдәр бара?!

— Ҡасҡындарҙы тотоп, һөйрәкләп алып ҡайтыусыға минән бер ат! — тип ҡысҡыра Собхан старшина.— Бер дүнән ат!

Кейәү егеттәр һатыбал менән бергәләп ҡыуғын сабырға ризалыҡ белдерҙеләр.

— Тик шәп аттар ғына булһын. Беҙҙең аттар төн буйы сабышып йөрөп арып бөттеләр,— тинеләр.

— Атай, яҡшы аттар кәрәк!— тип ҡысҡырҙы һатыбал.— Ҡыуып етерлек, тапап үтерлек аттар булһын!

Асыу һәм ғәрләнеүҙән башын юғалтҡан старшина, ауыр кәүҙәһен еңел күреп, үҙ йортона табан йүгерҙе.

— Әйҙәгеҙ, минен. ҡара юртаҡтарға менегеҙ! Ғүмерҙә бер кемгә нуҡтаһын тоттормаған ҡара юрғаларымды ла йәлләмәйем! Тик ҡыуып етегеҙ генә!

Улар аталы-уллы, аллы-артлы ҡыуышып, үҙҙәренә ҡайтып инделәр. Ләкин уларҙы бында тағы ла ҙурыраҡ хурлыҡ

ҡаршыланы: старшинанын, тройкаға ғына егеп йөрөй торған бер төҫ өс ҡара айғыры торған ағас аҙбарҙың ҡапҡаһы шар асыҡ ине. Ҡапҡаны бикләгән бығыу-йоҙаҡ ҡайыра һурып аяҡ аҫтына ырғытып ташланғайны...

— Ах, аттарым! Юрғаларым!.. Кем урлаған! Кем баҙнат иткән?!— Собхан старшина башын тотоп, бала кеүек сеңләп ергә ултырҙы.— Юрғаларым! Ыласындарым!.. Ай-й-й!

Һатыбал, йүгереп барып, мал өйөнән Иҙрис ҡартты ишек алдына һөйрәкләп алып сыҡты.

— Иблес! Ҡарт урыҫ, аттар ҡайҙа? Юрғалар ҡайҙа булды, тим! Ах, иҫерек баш!

— Ипле, кейәү, эй, мыр-р-ҙа, иплэп тотонсәле!.. Туй ҡыуанысынан аҙыраҡ ҡына төшөргәйнем шул...— тип, теле көрмәлеп һөйләнде Иҙрис ҡарт.— Ни тиһең?.. Ат ек, ти-һеңме? Хәҙер... Сей-час, господа!..

Һатыбал ҡәһәрләнеп уны тибеп осорҙо ла тағы атаһына ташланды.

— Ни эшләйбеҙ, атай?!

— Ҡыуырға! Тоторға! Үлтерергә!— тип мығырланды старшина.— Йәндәрен йәһәннәмгә ебәрергә!..

Улар янынан Кәзә мәзиндәргә йүгерҙеләр. Һәм бер-ике минуттан Һатыбал үҙенең кисә менеп килгән күк юртағына, кейәү егеттәр ҙә үҙ аттарына менеп, төрлөһө төрлө юл менән сабышып, ауылдан сығып киттеләр.

Собхан старшиналарҙын ишек алдында ҡар өҫтөндә иҫерек Иҙрис ҡарт ҡына ҡысҡырып йырлап ятып ҡалды.

Ай, Дунай, вай, Дунай,
Дунай, веселый Дунай!..

Был ваҡытта Кәзә мәзинден өйөндә лә буран ҡупты. Собхан старшина Кәзә мәзинден барлы-юҡлы һаҡалын да йолҡоп алып бөттө.

— Ҡайҙа ҡыҙың? Ахмаҡ! Һаҫыҡ кәзә тәкәһе! Һин минән көлмәксе булдыңмы ни әле? Йәнеңде алай бит хәҙер!..

Кәзә мәзин ҡусҡар кеүек йомарланып, ҡалтырап төштө.

— Ғәйепһеҙмен! Биллэһи-валлаһи ғәйепһеҙмен, ҡоҙа! Үлтермә, зинһар! Күбәләктәй ғәзиз йәнемде һәләк итмә, ҡоҙа...

Ә йорттон. ҡоҙағыйҙар урынлашҡан яғында сыр-сыу тағы ла яманыраҡ булды. Бибисара абыстай менән Алмабикә ирҙәр шикелле һаҡалға йәбешмәһәләр ҙә, ғүмерлек дошман булып айырылыштылар.

— Ыстырам! Оят! Хурлыҡ! Әҙәм хурлығы! Әйттем, шул хәйерселәр менән ҡатнашмайыҡ, тип. Әйттем. Тыңламаны.



Атаһы-инәһе хәйерсе булған ҡыҙ байҙың, байлыҡтың ҡәҙерен беләме ни ул, тинем,— тип теҙҙе Алмабикә.— Йә, кем кем, беҙҙең йоҙҙән көлдө бит, ә?! Бер эшкинмәгән аҙғын ҡыҙ бит!.. Кәзә мәзин ҡыҙы бит! Я раббым!..

Бибисара абыстай уға:

— Һинең үҙенден, улың эшкинмәгән. Ай-һай, эре кеше булып, эсен кәпәйтеп, ауыҙын шапайтып, сымылдыҡта, ботон бөкләп, көтөп ултырған булған бит әҙәм аҡтығы! Ҡыҙҙың аҫылына унан башҡа күҙ һалыусылар ҙа барын белһен ине!— тип ҡарыулашты.

— Әсәһенә оҡшап, ҡыҙы ла аҙғын булыр, тип әйткәйнем дә, һүҙем хаҡ булып сыҡты. Һин ни үҙең дә Әхмәтсафаға йәбешеп тигәндәй барғайның да баһа!

— Эйе шул. Барҙым да, торҙом да, ни әйтерһең! Ни эшләтерһең?!

— Бына нимә эшләтермен, аҙғын, кәнтәй!

Алмабикә Бибисара абыстайҙың битенә ласлата төкөрөп сығып китте. Бибисара абыстай унын артынан бер биҙрә йыуынтыҡ һыу һибеп ҡалды.

— Минең өйөмдән эҙең-юлың юйылһын, гөбөргәйел!

Урам, ҡыҙыҡһынып, ҡапҡа төбөнә йыйылған халыҡ тер^ кемөнөң ҡоторонҡо көлөүе аҫтында ҡалтыранды.

— Ха-ха-ха!

— Ха-ха-ха!..

* * *

Төн. Айһыҙ, йондоҙһоҙ төн. Ноябрҙең тәүге яртыһы ғына булһа ла, тышта декабрь һыуығы хөкөм һөрә. Әсе ел берсә ҡороған тирәк ботаҡтарына, берсә ҡыйыҡ һаламдарына бәйләнеп, көйөнөп, һыҙғырынып йөрөй. Собхан старшиналарҙың йортонда бер кем дә юҡ. Өй ҙә, ҡапҡа ла йоҙаҡлы. Тик мал өйөндә кисәнән бирле айнымаған урыҫ Иҙрис кенә аунап ята. Уны ҡустыһының туйына саҡырырға ла онотҡандар.

Бына төн уртаһы яҡынлаша. Әхәттәрҙең өйө яғындағы ҡойма янында ғына кәкүк тауышы яңғырап китә.

— Кә-күк! Кә-күк!..

Был Иҙрис ҡарттың, ваҡыт етте, тигән һүҙе. Баянан бирле ошоно түҙемһеҙләнеп кетөп торған Әхәт менән Иштуған, ҡойма аша үрмәләп, Собхан старшиналар ишек алдына төшәләр...

Юрғалар бикле торған һарайҙың йоҙағын ҡайырып алыу, аттарҙы тотоу, йүгәнләү, эйәрләү, арт ҡапҡаны ҡерәп асыубөтәһе лә зыйлап һыҙғырған әсе ел тауышы аҫтында тыныс ҡына эшләнә. , . • • -

— Ҡыйыу булығыҙ! Өркмәгеҙ! Һеҙ Собхан старшинаның юрғаларын түгел, үҙ юрғаларығыҙҙы эйәрләнегеҙ!— тип шыбырлай Иҙрис ҡарт.— Осоғоҙ! Иҙрис олатайығыҙҙы ғәйепләмәгеҙ!..

Егеттәр тулҡынланыу һәм ҡурҡыуҙан бер ни ҙә өндәшә алмайҙар. Уларға үҙ йөрәктәренен, дөпөлдәүе бөтә ауылға ишетелер, хәҙер-хәҙер бөтә кешене аяҡҡа баҫтырыр кеүек тойола. Шулай ҙа тәүәккәлләгән эштән баш тартырға уйламайҙар. Аттарҙы етәкләп, Әхмәтша ҡараҡтарҙың арт ҡапкаһына табан йүнәләләр. Иҙрис ҡарт, яңынан иҫерек булып, мал өйөнә инеп ята.

Әхмәтша ҡараҡтарҙың арт ҡапҡаһы ла, алдан һөйләшелгәнсә, асыҡ тора. Иштуған, ашығып, ошо ҡапҡанан инеп юғала. Әхәт өс юрғанын, теҙгененән кескә тотоп, кәртә артында тороп ҡала.

Ҡыҙҙар йәшенгән өйҙә тауыш-тын юҡ. Ҡайтарып ҡуйылған етеле лампа өй эсенә тоноҡ ҡына һарғылт яҡтылыҡ бөркә. Айһылыу, башын ҡуйып, тыңлап ятырға тейешле тәҙрә, шомло өнөрәйеп, ҡарайып тора. Иштуған, күнел йомшартырҙай уйҙарҙан алыҫ булырға тырышып, ҡыйыу баҫып тәҙрә янына килә. Алдан һөйләшеү буйынса нәҙек кенә тауыш менән бала әтәс булып ҡысҡыра.

— Ки-ки-кү-үк!..

Көтә, тыңлай. Тағы ҡысҡыра. Тағы көтә. Ай, йыл кеткән кеүек тойола уға. Уның аяҡ быуындары ҡалтырай.

— Әгәр Айһылыу ысынлап йоҡлап ҡуйһа?..

Юҡ, бына тәҙрәнән еңел генә күләгә елпелдәп үтте. Саҡсаҡ ҡына ишек шығырлағандай булды. Иштуған ишеккә ташланды. Ҡулына кескәй генә төйөнсөк тотоп, Айһылыу килеп сыҡты.

— Иштуған!..

— Айһылыу!

Улар бер-береһенә табан ынтылып бер аҙым атланылар ҙа, артабан ни әйтергә, ни эшләргә икәнен онотҡандай, ҡаушап тынып торҙолар. Аяҡтар ҡаҙаҡлаған кеүек бер урында ҡалды. Әсе ел уларҙы ҡағып-һуғып, тартҡылап үтте. Әйтерһең:

— Иҫегеҙгә килегеҙ, ашығығыҙ!— тип иҫкәртте. Иштуған беренсе булып үҙен ҡулға алды. Һәм ҡыйыуһыҙ, килешһеҙ генә хәрәкәт яһап, Айһылыуҙың ҡулына ҡағылды.

— Әйҙә, киттек, Айһылыу!

— Киттек!.. — тине Айһылыу, шыбырлап.— Киттек!..

Улар етәкләшеп, арт ҡапҡаға йүгерҙеләр. Айһылыу кәртәлә өҫтөнә ирҙәр кейеме кейеп алды.

Улар, өсәһө өс юрғаға атланып, оло юлға ҡарай саптылар. Көҙгө ел, ҡайҙандыр ҡар табып һибәләп, уларҙың юлдарын күмеп, йәшереп ҡуйҙы. Ирек тойғоһо менән ашҡынған йәш йәрәктәрҙе лә, тояҡ аҫтарынан оҫҡон сәсрәп торған арғымаҡтарҙы ла тыйып торорлоҡ, ҡыуып етерлек донъяла көс юҡ ине хәҙер...



Һатыбал менән Собхан старшинанын, асыуының да, ғәрлегенең дә иге-сиге булманы. Шул арҡала улар хатта үҙҙәренең хәҙер ниндәй осорҙа йәшәүҙәрен дә онотоп, тап боронғоса үс алыу юлына баҫтылар.

Тирә-яҡты илле, алтмыш саҡрым тирәләп сабып йөрөп эҙләү бер һөҙөмтә лә бирмәгәс, улар Әхмәтша ҡараҡ, Шымбай ҡарт, Хөснөлхаҡ һәм бер нисә кейәү егете менән бергәләп ауылды тентергә керештеләр. Иң элек улар Сәрбиямалдарҙы, Хәлим ағайҙарҙы тентенеләр. Әхәт менән Иштуғанды эҙләнеләр. Сөнки һатыбал Иштуғандың Айһылыуға күҙе тешөп йөрөүен белә, тик Айһылыу үҙен ошо килмешәккә алмаштырыр тигән уй уның башына килмәй ине. Әле инде Айһылыу юғалғас, уның иҫенә иң элек ошо Иштуған менән уның айырылмаҫ дуҫы Әхәт килеп төштө. Ләкин улар бөгөн һыуға батҡан кеүек юҡ булғайнылар.

— Тимәк, Айһылыуҙы улар урлаған!.. Тимәк, аттарҙы ла!.. Был бит ҡолаҡ ишетмәҫ, аҡылға һыймаҫ эш!.. Шул маңҡа малайҙарҙың ҡулынан килә торған эшме ни был? Түгел. Тимәк, уларға кем дә булһа берәй ҡарт төлкә булышҡан! Кем? Бынауы каторжник Тимербайҙан башҡа кем булһын?..— тип, төкөрөк сәсеп ҡысҡырынды һатыбал. Эйәрсендәре уның һүҙен дөрөҫләргә ашыҡтылар.

— Дөрөҫ. Дөп-дөрөҫ. Улдыр. Тимербайҙыр.

— Ул бит күптәнге ат ҡарағы!—тип ҡысҡырҙы Собхан старшина. Шымбай ҡарт, уның тирәһендә төмөрәнләп:

— Йәштәрҙе аҙҙырыусы шул Тимербай бит ул! Байҙың аты — беҙҙең ат. Бар, ал, эйәрлә лә сап. Бай кәләше — беҙҙең кәләш. Урлап ал да, ҡосаҡла ла ят, тигәндер,— тип мөжөлдәне.

Улар, бер һылтауҙан өҙөлмәй ҡалған элекке иҫәптәрен дә өҙөү өсөн, ҡотороноп Тимербайҙарға барып инделәр.

— Аттарҙы ҡайҙа оҙаттын, ҡараҡ!

— Ҡыҙҙы кемгә биреп ебәрҙең, каторжник?

— Ат хаҡын башың менән түләрһең!

Ни булыуына әле асыҡ төшөнөп етмәгән Тимербай:

— Ни бар? Ниңә шашаһығыҙ?— тип аптырап китте. Ҡотороноған төркемдө тынысландырырға, аҡылына ҡайтырырға тырышты. Ләкин тегеләр уның һүҙен ишетергә лә теләмәне-

ләр. Ҡырағай тауыш менән ҡысҡыра-баҡыра, урамға һөйрәкләп алып сыҡтылар ҙа туҡмарға ла керештеләр... *

Ҡыҙҙын, һәм аттарҙың урланыуы Собхан старшиналарға иң элек Тимербайҙан үс алырға бер сәбәп буласағын яҡшы аңлаған Сәлимә бесән санаһына йәһәт кенә ат екте лә Ивановка яғына сапты.

Һуңғы яраһынан төҙәлеүгә февраль революцияһы булып киткәс, ауылға ҡайтҡан Никитаның Ивановкала ауыл Советы председателе булып эшләүе мәғлүм ине уға.

«Һатыбалдар Тимербайҙы туҡмайҙар, үлтерерҙәр. Совет хөкөмөн алып киләйем...»— тип ашыҡты ул. Уның үтә һиҙгер йөрәге был юлы ла алдаманы.

Шәүрә был төндә булып үткән ғәжәп хәлдәрҙе Емеш менән Йәнешкә көскә һөйләп бөтөп, ҡыҙҙар ҡайтанан тәҙрәгә ҡапланғанда, был ҡырағай үс алыуҙың ин, ҡыҙған еаҒы ине.

— Абау, кемде туҡмайҙар икән!— тине Шәүрә, оҙон һуҙып. Йәнеш уға ҡушылды.

— Ысын да баһа!.. Уй...

Ә Емеш:

— Ағайымдарҙы тотҡандарҙыр! Ағайымды туҡмайҙарҙыр!..— тип йөрәк ярғыс тауыш менән ҡысҡыра-ҡысҡыра урамға атылды.

Ул барып еткәндә, Ҡарасәс әбейҙәр тәңгәлендә, һатыбал, Хөснөлхаҡ, Әхмәтша ҡараҡ, Собхан старшина, Шымбай каштандар — бөтәһе лә күҫәктәр күтәреп, Тимербайҙы туҡмап яталар. Тимербай, тегеләр һуғып йыҡҡан һайын, туҡмаусыларҙың салғыйҙарына йәбешеп, итектәренә тотоноп яңынан торорға тырыша. Үҙе ҡысҡырмай ҙа, өндәшмәй ҙә. Тик туҡмаусыларҙың әһ! әһ! тип ҡуйыуҙары:

— Аттар ҡайҙа, ҡараҡ! Фетнәсе!— тип ҡысҡырыуҙары ғына ишетелә. Һуғыштан сатан йәки сулаҡ булып ҡайтып килгән бер нисә һалдат та, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға сыулашып, бер ярҙам да итә алмай, тирә-яҡта йүгерә. Туҡмаусылар уртаһында Тимербай менән, уны яҡлап, таяҡ аҫтына ташланған Ҡарасәс әбей генә бәүеләп йөрөй. Баҙыян еңгә, кәл кеүек күгәреп, бер ситтә, ҡар өҫтөндә ята. Бер нисә ҡатын уны күтәреп торғоҙорға маташа. Ләкин ҡурҡыуҙан беләктәренең көстәре алынып бер ни ҙә эшләй алмайҙар.

— Әллә үлде инде?!

— Һуштан яҙған, һуштан яҙған!— тип илашалар.

Сабира менән Сәмиғә лә ялан аяҡ, ялан баш көйө, йөрәк өгөс тауыш менән ҡысҡырып илай-илай, ҡарға бата-сума йүгерешеп йөрөйҙәр. Емеш тә, үҙ-үҙен онотоп, ҡысҡыра-ҡысҡыра, туҡмаусылар тирәһендә әйләнә башланы.

— Уй, үлтермәгеҙ! Туҡмамағыҙ, ағайҙар, олатайҙар, ҡуйығыҙ!

Шымбай каштан бер-ике тапҡыр Емештең ҡолағын ҫәйтартып ситкә алып ырғытты.

— Һиңә ни бар бында, көсөк! Юғал күҙемдән!

Емештең, күҙ алдары ҡараңғыланып, донъя баш түбән түңкәрелеп китте. Ләкин ул ауыртыуҙы тойманы. Һаман шулай ниҙер ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡар өҫтөндә йүгереп йөрөй бирҙе. Ә байҙар, иҫ киткес һалҡын ҡан менән, Тимербайҙы туҡмауҙы дауам иттеләр.

Ҡарасәс әбей, уларҙың берсә ҡулына, берсә таяғына барып тотоноп, һуғыуҙың күпселеген үҙ тәненә алырға тырышып, һаман уртала ҡайнашты. Һуғып йыҡҡһалар, туҡмаусыларҙың салғыйҙарына, итектәренә тотона-тотона, йән әсеүе менән тороп аяҡҡа баҫты. Түңәрәктән ситкә алып ырғытһалар, туҡмаусыларҙың бот араларынан имгәкләп уртаға үтеп, улына ярҙамға ташланды. Ә Тимербай тамам иҫен юғалтып, ҡанлы ҡар өҫтөнә ауғас, Ҡарасәс әбей уны үҙ кәүҙәһе менән ҡапланы. Уның күп эш күргән тарамыш ҡулдары, үрелеп үҫкән тал кеүек, улынын, биленән ҡыҫып алды. Дошмандарҙың ҡырағай ҡысҡырыуы, әрләү-хурлауҙары түгел, арҡаға яуған аяуһыҙ күҫәктәр ҙә уны улын яҡлауҙан баш тарттыра алманылар.

## XXI

Байгилде ағай, «ауылдаштар осрамаҫмы?» тип, кеше төшөрөү йорттарына инеп-сығып бер аҙ йөрөнө лә, ҡала ситендәге ташландыҡ бер ҡойманан елле генә имән ҡаҙыҡ ҡайырып алып, йәйәүләп юлға сығып китте.

«Юлда берәйһе осрап ултыртыр әле...»

Ҡояш яңы ғына ҡалҡып килгән саҡ. Тәүге ҡырпаҡ ҡар менән ҡапланған иҡһеҙ-сиҡһеҙ дала, аяҙ күҙ ҡояшының һарғылт нурҙары аҫтында күкле, йәшелле, ҡыҙыллы елбеҙәктәр һирпеп, йылҡылдап ята. Ҡайҙа ғына ҡарама — иҡһеҙ-сиҡһеҙ бушлыҡ, иркенлек. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ оҙон дала юлы. Байгилде ағай, әлбиттә, был юлды үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр ғына йәйәүләп үтмәй. Бик күп йөрөлгән, йөрәккә иң яҡын ерҙәрҙең береһе булып ҡалған юл инде был.

«Эй-й, нисек һағындырған ул!» Өс йыл элек ул бынан һуғыш ҡырҙарына табан уҙғайны. Ҡайтырмын, тағы ошо юлдан йәйәүләп уҙырмын тип өмөт итеү ҙә ауыр ине ул саҡта. Ә шулай ҙа бына ул тере. Ул ауылына, балалары янына ҡайтып бара. Көнө лә ҡалай һәйбәт, ҡояшлы бит әле. Тен-

дә генә ҡалай буран ине. Инде яҙ көнө кеүек йылынып, ҡояш нурҙары менән йымылдап та китте. Их, һәйбәт тә һун был, донъя!.. Шулай ҙа аяҡтар ҙа, йөрәк тә элекке түгел. Йөҙ саҡрымды йәйәү үтеүе еңел булмаҫ. Кем дә булһа осрап ултыртмаһа, ҡыйын булыр...

Байгилде ағай үҙ янынан өҙлөкһөҙ тип әйтерлек уҙып торған атлы-саналы кешеләрҙең бөтәһен дә ентекләп ҡарап уҙғара. Ләкин әлегә бер таныш та күренмәй. Ә түләп ултырырға кеҫәлә бер тин дә юҡ.

«Көндәр буранлап китмәҫ элек ҡайтып етһәм, шәп булыр ине...» Байгилде ағай алыҫҡа, бик алыҫҡа йәйелеп, күк ситенә барып тоташҡан ҡар далаһына, түбәһенә әле ҡар ятмаған яланғас түбәләстәргә яратып, ҡыуанып ҡарай-ҡарай, оҙаҡ-оҙаҡ уйланып бара. Унын күҙ алдына, ни өсөндөр, иң, элек Марина килеп баҫа. Эйе, жандармдар уны тотоп, госпиталдән алып сығып киткән саҡта, Маринаның. һылыу йөҙөнә ҡурҡыу йүгерҙе. Ул ошо дала ҡары кеүек ап-аҡ булып китте. Ҡалтыранған ирендәре:

— Был ни эш? Ни өсөн һеҙ уны ҡулға алаһығыҙ?!— тип шыбырланы... Ул, башы әйләнеп, стенаға һөйәлеп тороп ҡалды...

Был Марина хаҡында Байгилде ағайҙың күҙ алдында мәңгегә һаҡланып ҡалған һуңғы күренеш ине.

«Ҡайҙа ул хәҙер Марина? Ни хәлдә? Йә, был һуғыш кемдәрҙең генә бәхетен тартып алып бөтмәне бит?.. Йә, исмаһам, Марина хаҡына Матвей тере ҡалһасы... Нисек ярата бит ул уны... Их Марина, Марина, беҙҙе — үҙҙәрен дә бәхетле итә алмаған кешеләрҙе — шул тиклем өҙөлөп ятатырға яраймы икән һуң?!»

Байгилде ағайҙын. уйҙары һукғы ваҡытта үҙ башынан кискән хәлдәргә күсеп китә.

«Уйламаған, көтмәгән дәрәжәлә уңайлы ҡотолоу!.. Ошонан һуң бәхетһеҙмен тип нисек телем барып әйтә алам?..»— тип, үҙ алдына оҙаҡ ҡына йылмайып, кинәнеп бара ул.

Ысынлап та, һис тә көтөлмәгән дәрәжәлә бәхетле ҡотолоу булды был.

Уны ҡулға алғас, шунда уҡ үҙенең часы торған ҡалаға оҙаттылар. Карцерға яптылар. Туҡмау, аҙаплау башланды. Уны ниндәйҙер ҙур политик ғәйепле кешеләр менән мөнәсәбәттә булған кеше итеп ҡабул иттеләр. Армияла тарҡатыу эше алып барған, революцияға саҡырған большевиктарҙың исемдәрен атап әйтеүҙе, уларҙың мәкерле эшен асып һалыуҙы, офицерға һөжүм итергә отҡоған кешене тотоп биреүҙе талап иттеләр. Ләкин ул нимә белә ине? Белһә лә әйтмәҫ ине, әлбиттә.

Өндәшмәүенә, нык түҙем булыуына ҡарап, уның үҙен дә большевик тип уйлап булһа кәрәк, язалауҙы ауырайтҡандан-ауырайта барҙылар. Бөтә яуызлыҡты ҡулланып, унан кәрәкле мәғлүмәттәр, ниндәйҙер исемлектәр алырға маташтылар. Ә Байгилде ағай һаман өндәшмәүҙе, түҙеме бөткәндә һуштан яҙыуҙы ғына блдыра алды. һуңғы тапҡыр ул ҡарағы, еүеш карцерҙа иҫенә килгән саҡта, яҡында ғына ниндәйҙер көслө шау-шыу, берәм-һәрәм атыш тауыштары ишетелде. Туҡмалып, иҙелеп бөткән, таш кеүек ауыр тәнен иҙәндән, ҡан еҫе аңҡыған еүеш һалам өҫтөнән, көскә һөйрәп күтәреп аяғына баҫты.

«Ниндәй тауыш? Тотҡондарҙы аталар, күрәһең? Мине лә бөгөн таңда атмаҡсылар ине. Хәҙер атырҙар... Йә, ярай, барыбер...»

Байтилде ағай камераның түбә таҡтаһы янындағы кескәй генә ҡыяҡ тәҙрәгә тилмереп ҡараны. Уға үрелеп менергә хәл юҡ ине. Хәйер, унан ҡараһаң да, күктәге кескәй болоттан башҡа бер нәмәне лә күрергә мөмкин булмаҫ ине.

Бына, тауыштар бөтөнләй яҡыная барып, төрмәнен, ишеге алдына күсте. Йоҙаҡтар, сынйырҙар сыңланы. Бына кемдер, приклад менән һуғып, уның камераһының да йоҙағын бәреп ватты, ишекте шар асып ебәрҙе. Ҡараңғы камераға сағыу ҡояш нуры бәреп инде.

— Сыҡ, иптәш! Революция! Азатлыҡ!

Байгилде ағай, үҙ-үҙен онотоп, камера алдында дуҫтарса йылмайып торған рус һалдатының ҡосағына ташланды.

— Эй, иптәш! Рәхмәт, иптәш!..

Байгилде ағай унын, исемен дә, фамилияһын да, кем, ҡайҙан икәнлеген дә белмәй. Ләкин уны һәр саҡ, һәр урында күҙен йомоп та таныясаҡ. Ундай кешене онотоу мөмкин түгел.

Был ваҡиғанан һуң ул тағы оҙаҡ ҡына госпиталдә ятты. Туҡмау, язалау эҙҙәрен яманы. Унан Ваҡытлы хөкүмәт тигәндәре: «Еңгәнгә хәтле һуғышырға!» тип уны тағы фронтҡа ҡыуҙы. Октябрь революцияһы көндәрендә ул инде үҙ частары торған ҡалала власты эшсе-һалдат депутаттарынан төҙөлгән Советтар ҡулына алыу өсөн барған көрәштә актив ҡатнашты. Аҙаҡ уны, күп яфаланған, яраланған ҡарт һалдатты, ауылына ҡайтарып ебәрҙеләр. Төрлө станцияларҙа аунай-тәгәрәй, емерек юлдар, ҡыйралған вагондар араһынан мең-мең саҡрым юлдар үтте ул. Ахыр бына бөген үҙ ауылына ҡарай юлға сыҡты.

«Их, тиҙерәк ҡайтып етергә, балаларҙы күрә һалырға ине. Ни хәлдә генә йәшәйҙәр икән улар?..»

Төш ауып килгәндә, Байгилде ағайҙы йөк тейәлгән ун>
лаған ылау ҡыуып етте. Был Сергей кулактың уландары ине;

— Эй, белештәр, ултыртып алып ҡайтығыҙ әле! к

— Йөк ауыр. Ултыртып булмай, белеш. I

Байгилде ағай, һәр береһе берәр тонна йөк тартырлыҡ көслө көр аттар егелгән тиҫтәләгән сананы уҙғарып, юл ситендә оҙаҡ ҡына баҫып торҙо.

«Тегендә, ҡалала революция. Ә бында һаман элеккесә икән әле... Бында ҡайтанан революция яһайһы бар икән әле...»

Мраковка хуторының ҡаты ҡуллы, ҡомһоҙ күҙле б-айы Сергей ҡарт һәр саҡ игенселек менән шөғөлләнде. Бығаса ундай хужаға осрамай, йәш ҡыҙ шикелле наҙланып, йүгән күрмәгән ҡонан арҡаһы шикелле йымылдап ятҡан, һөтлөгәндәй һутлы башҡорт далаһында уның байлығы айлап түгел, көнләп үҫә, киңәйә, күбәйә барҙы. Уның тиҫтә-тиҫтә дисәтинәләрҙән торған баҫыуҙары ҡыҫырлыҡты белмәне, Ҡоролоҡҡа сыҙам аҡ тукал, ҡыҙыл тукал бойҙайҙар бын? да йыл һайын диңгеҙ кеүек тулҡынып, ат инеп китһә күренмәҫлек бейек, ҡуйы булып үҫте. Эйек буйлап саҡрымдарға һуҙылған йәшелсә баҡсаларында бөткеһеҙ ҡарбуз, ҡауын, картуф, ҡыяр өлгерҙе.

Ерҙең тәмен белгән, кәрәк булһа, ғөж кеүек уның ҡыртышын да ашарға әҙер торған был ҡомһоҙ хужаға өс-дүрт йылға һуҙылған һуғыш байыу юлын тағы ла киң асып ебәрҙе. Сергей ҡарт һуғыш буйына һәр көн Ырымбурға тиҫтәләгән йөк ашлыҡ, йәшелсә оҙатып торҙо. Был ылауҙар ҡаланан ауыл өсөн ҡытлыҡ әйберге әйләнгән тоҙ, шырпы, кәрәсин тейәп ҡайттылар. Шулай итеп һуғыш уға бығаса ишетелмәгән, хыял итергә лә мөмкин булмаған байлыҡ алып килде. Етмеш йәштә булыуына ҡарамаҫтан, мыҡты, олпат кәүҙәле, болғансыҡ күҙгә күк төҫлә асыулы, йыртҡыс ҡарашлы, ҡарға суҡышы кеүек осло танауынан башҡа бөтә битен сәсе менән бергә ҡушылып үҫкән оҙон ялбыр, ерән йен баҫҡан был ҡарт Эйек буйының ундырышлы далаларын, хуш еҫле мең төрлө сәскәләргә күмелгән һыубаҫар туғайҙарын бик яратты. Уларҙы үҙ ҡулына алып бөтөү юлында хатта үҙенең староверлығын да ваҡытлыса онотоп тороуҙан, Шымбай каштан, Собхан старшина кеүектәрҙе йыш ҡына саҡырып һыйлауҙан да тартынманы, Әлбиттә, бының өсөн уға ҡарсығынан нык ҡына әрләү ҙә эләгә ине.

— Шул поганыйҙарҙы ни тип эйәләштерәһең? Сынаяҡһыҙ, ҡалаҡһыҙ ҡалдыраһың бит мине. Улар ашаған табаҡһауытты ташлай барам бит мин. Аңлайһыңмы һин шуны?..— тип һуҡыранды уның. ҡарсығы. Сергей ҡарт быға ҡаршы күкшел күҙҙәрен ялбыр, ерән ҡаштары аҫтынан уҫал, хәйләкәр йылтыратып, ауыр, йөнтәҫ ҡулдарын бер-береһенә шапылдатып һуғып, ыуалап ҡына ҡуйҙы. Ул һәр саҡ үҙ эшенән бик риза булған саҡта шулай итә: ҙур устарын шап-шоп һуғып, ыуалап ала. Был уның ҡыуаныу билдәһе.

— Эй ҡарсыҡ, сынаяҡ-калаҡ нимә ул? Беләһеңме, мин бөгөн Сергей Хитровтың ерен нисә дисәтинәгә арттырҙым? Бер нәмә лә белмәйһең бит һин, ахмаҡ бисә!.. Их, һуғыш ҡына тағы ла оҙағыраҡ һуҙылһын... Ул саҡта Илсеғолдоң бөтә ере минең ҡулға инеп бөтәсәк, белдеңме? Их-ма, ул саҡта Сергей Хитровты бында ғына түгел, бөтә Рәсәй беләсәк... Помещик! Хужа! Яңы, ысын хужа! Аңлайһыңмы, ахмаҡ бисә... Шул-шул, аңламайһың шул... Бисә булғас, бисә инде, һинән ни көтәһең?.. Хи-хи-хи!

Ләкин тормош Сергей ҡарттың алыҫтарға һуҙылған был татлы хыялының билен һындырып ҡуйҙы. Ҡалала сыуалыштар башланып китте. Эшселәр, һалдаттар унда батшаны ҡолатып ҡуйҙылар. Фронттарҙа рәт бөттө. Халыҡ һуғышты бөтөрөүҙе талап итә. Уның ғүмер буйы ҡорған ҙур, төпһөҙ тоҙағына байлыҡ тигән шыуғалаҡ кейек, инде тамам инеп бөтөп муйынынан ҡыҫыла ғына тигәндә, тоҙаҡтың йөйҙәре шытылырға тотондо.

Шулай ҙа, волоста үҙ улы ултырыуҙан файҙаланып, ул әле сауҙаны дауам иттерә. Улдарын, хатта бығаса эсеп-иҫереп йөрөүҙән башҡа бер нәмәне белергә теләмәгән кесе улы Апанасты ла хәҙер Ырымбур юлынан ҡайтармай. Бөгөн дә, ағаларынан күп артта ҡалып булһа ла, Апанас та ҡаланан ҡайтып килә ине. Байгилде ағай йөк өҫтөнән йығылып төшә яҙып бәүелеп килгән иҫерек Апанасты ҡысҡырып уятты.

— Эй, Апанас Сергеич! Ҡолап төшәһең бит!

Апанас иҫерек күҙҙәрен юл ситендә баҫып торған Байгилдегә тебәне.

— Һин кем?

— Байгилде. Хәтерләйһенме, Илсеғолдоҡо...

— Әй, Байгилька, беләм, беләм... һин ҡайҙан былай?

— һуғыштан ҡайтып киләм.

— Ә-ә, һалдат?! Әйҙә. Алып ҡайтам.

Байгилде ағай йөк өҫтөнә менеп ултырҙы.

— Ҡана, атты үҙем тотайым.

• Эш һөймәҫ Апанас, кинәнеп, дилбегәне бирҙе лә, йөк өҫтөнә һуҙылып төшөп йоҡлап та китте. Аттар яй ғына юрттылар. Был кен тыныс ҡына үтте. Ләкин юлда, бер хуторҙа ҡунып, Апанас тағы нык ҡына төшөрөп алғас, икенсе көнгә юл йән биҙҙергес булды. Етмәһә, өйгә яҡынайған һайын, ваҡыт та әкренерәк уҙған кеүек ине.

— Байгилька, ишетәһеңме, Байгилька!— тип, теле көрмә

леп, тәтелдәй Апанас. Унын, ғәҙәте шулай. Нык эсһә, бер үҙлөкһөҙ һөйләнергә, маҡтанырға ярата.

Байгилде ағай өндәшмәй генә атты ҡыуа бирә. ;ч

— На, хайуан! Атла!..

— Байгилька, минең Федька ағайым да, уҙған ҡыш һалдаттан ҡайтып, ҡунаҡ булып китте. Беләһеңме, ул кем? Офи-; цер. Байгилька, беләһеңме, беҙ хәҙер нисек байыныҡ?.. Ни-< сек беҙҙең хутор ҙурайҙы?.. Танымаçһың да. Тиҙҙән Мраков-т ка менән Каргалка бергә тоташасаҡ та ике уртала ятҡан Ил-- сеғолдо ҡыçып күккә осороп ебәрәсәк. Хи-хи-хи, атайым әйтә, беҙ, ти, болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотабыҙ, ти. Белдеңме, яңы хужа донъя көтә белә ул, ти. Хи-хи-хи... Ә Федька әйтә:

— Большевиктар, ер крәçтиәндәргә булырға тейеш, тип әйтәләр. Шулай булғас, бына немецты еңеп, һуғышты бөтөрөп ҡайтабыҙ ҙа Илсеғолдон, ерен тотош тартып алабыҙ. Етер уларға, башҡорттарға, ергә баш булып ятырға, ти.

Байгилде ағай тыныс, сабыр булырға тырышып:

— Һеҙҙең былай ҙа ерегеҙ етерлек тә баһа, Апанас Сергеич,— тип, ипләп кенә ҡаршы төштө.— Мраковка ерененң өстән ике өлөшө һеҙҙең ҡулда... Илсеғол ере лә һеҙҙен, ҡулға инеп бөтөп бара...

— Дөрәç,— ти Апанас, тәкәббер кирелеп.— Ә атайым менән Федька, ерҙең күпселеге генә түгел, тотошо ла беҙҙеке булырға тейеш, тиҙәр, вот. Дөрөç әйтәләр. Май янына май килешә бит ул, Байгилька!..

Байгилде ағай Сергей ҡарттар тоҡомондағы иң аңғыраһы, эскесеһе булған был кешенең шапырыныуын тыңламаçҡа, мәғәнәһеҙ һүҙ менән эсен бошормаçҡа тырыша. Ләкин Апанас тынмай. Унын, бер өҙлөкһөҙ һөйләгеһе, кәйефенек шәплеген кем менән булһа ла уртаҡлашҡыһы, маҡтанғыһы килә. Шуға күрә, Байгилденен, өндәшмәүенә лә ҡарамай, һөйләүен дауам итә:

— Атайым әйтә, башҡорттарҙын, ерен үҙ ҡулыма әләктереп бетһәм, мин помещик буласаҡмын, ти. Бына тигән ысын помещик, ти, белдеңме, Байгилька? Ул саҡта, ти, башҡорттар ғына түгел, үҙебеҙҙең Мраковка, Каргалка рустары ла минең уста бейерҙәр, ти, вот. Их, Байгилька, ул саҡта беҙ йәшәр ҙә инек һуң, ә?.. Ул саҡта, Байгилька, мин һине үҙемә күсер итеп алыр инем... һин ошолай ат тотоп мине һөйәркәләремә алып йөрөр инең... Йөрөр инең бит, ә, Байгилька?! Беләһеңме, нисек күп минең һөйәркәләр!.. Бөтә һалдаткалар минеке!.. Их, йәшәр ҙә инек һуң, ә, Байгилька?!

Байгилде ағай түҙемен юғалтып ҡырҡыу тауышҡа күсә:

— Был өмөтөгеҙҙөң хәҙер ҡойроғо өтөлгән, Апанас Сергеич!



Апанас ҡырын ятҡан еренән турайып ултыра.

— Нисек өтелгән? Ҡалай етөлгән? Был ни тигән һүҙең, Байгилька?

— Заманы уҙыбыраҡ киткән, тим. Хәҙер һеҙгә ҡуржынды ҡыçыбыраҡ тоторға тура киләсәк... Беләһеңме, Петербургта эшселәр нимә эшләгәндәр?!

— Ә, шаярма,— тине Апанас тәкәббер тауыш менән.— Самай заманы килгән дә инде. Атайым шулай ти. Минең атайым белеп һөйләй ул!..

Апанас тирә-яҡта ниндәй үҙгәрештәр булып ятҡанын төшөнөргә теләмәгән кеүек, Байгилде ағайҙың һүҙ төбө ҡайҙа барып төртөлгәнен дә аңламаны. һәм бер аҙ тынып барғас, йәшерен тауыш менән тағы:

— Беләһеңме, Байгилька,— тип һүҙ башланы,— Федька ҡыш ҡайтҡанда атайыма былай тип әйтеп китте:— Беҙ, тине, волоcҡа большевиктар килһә лә, отолмабыҙ. Большевиктар булып кейенеп, ҡоралланып алырбыҙ ҙа, башҡорттарға, һеҙ — ер хужалары. Большевиктар ер хужаларын үлтереп бөтөрөргә тейеш, тип әйтербеҙ ҙә ҡырырға тотонорбоҙ, ти. Ха-ха-ха!.. Шунын менән эш тә бөтөр. Улар бит һарыҡтар, ышаныусандар. Ысынлап та беҙҙе большевиктар үлтерә икән тиерҙәр ҙә, властарға барып хәбәр ҙә итмәçтәр. Ә ул арала беҙ уларҙы тары сүпләгән тауыҡ кеүек, берәм-берәм сүпләп йотоп та бөтөрербеҙ. Унан ер кемгә ҡала? Беҙгә, әлбиттә. Анауы атһыҙ-һыйырһыҙ Петрушкалар менән Андрюшкаларға ер нимәгә кәрәк?— ти. Шәп уйлап сығарған бит Федька, ә, Байгилька? Атайым да унын. был һүҙен хупланы, вот. Фронттан мылтыкты күберәк алып ҡайтырға ҡушты. Бына нисек бит ул, Байгилька, эштәр!.. Ә һин... һин быға нисек ҡарайһың, Байгилька? Мин был һүҙҙәрҙе мейес башында йоҡлап ятҡан сағымда ғына ишетеп ҡалдым. һин тағы быны атайыма әйтеп ҡуйма. Улар мине йоҡлай, иçерек тип белеп кенә һейләштеләр. Шаяраһың, Апанас үҙе иçерек булһа ла, ҡолағы айныҡ унын. Мылтыҡ ҡына алып ҡайтһын әле Федька, башҡорттарҙы мин үҙем иң элек ҡыра сығырмын. Атайым Да, Федька ла: «Ай да, ялкау Апанас!.. Ай, эскесе Апанас! Бына ул ниндәй егет икән!..»— тип, аптырап та ҡалыр. Бына күрерһең.

Байгилде ағайҙың асыуының иге-сиге юҡ ине. Шулай ҙа Ул, был маҡтансыҡты һөйләндереп бөткәнсе тыныс булырға тырышып, ғәмһеҙ тауышҡа күсте.

— Барып сыҡмаç шул...

— Нисек барып сыҡмаç?— тип ҡыҙып китте Апанас.— Минең атайым менән Федька ҡасан уйлаған эште алып барып сығармай ҡуйғаны бар? Шаяраһың, Байгилька, белмәйһең әле һин беҙҙен. тоҡомдо!..

— Шулай ҙа был уйығыҙ барып сыҡмаç, Апанас Сергеич,— тип ҡабатланы Байгилде ағай.— Большевиктар ерҙе крәçтиәнгә тиҙәр икән, ул байға тигән һүҙ түгел. Ярлыға, батракка тигән һүҙ. Унан бит большевиктар ярлы башҡорттоң ерен түгел, ә байҙарҙың, помещиктарҙың ерен тартып алырға ҡуша. Байҙар ни ул, Апанас Сергеич, урыçта ла, башҡортта ла бар... Урыç байы ла, башҡорт байы ла бер. Ярлылар тоже бер... Икеһен дә бер ҡамыт ҡыҫа...

Был һүҙҙәрҙән Апанас айнып ук киткән һымаҡ булып, Байгилдегә аптырап ҡараны.

— Ни һөйләйһең һин, Байгилька? Большевиктарҙың ни әйткәнен ҡайҙан белдең һин?

Байгилде ағай мыйыҡ аҫтынан ғына көлөп ҡуйҙы.

— Әһә, башты тилегә һалып йөрөһәң дә бик үк иҫәр түгел икәнһең һин, Апанас Сергеич!.. Ҡалай ҡапыл һағайып киттең!..

— Кем әйтте тим һинә?— тип, Апанас ауа-түнә тороп, Байгилде ағайҙың яғаһына йәбеште.— һин улар менән әшнәме әллә, йолҡош?..

Байгилде ағай уны, терһәге менән генә этәреп, кире санаға йыҡты. Унан Апанас тағы тырмашып тороп дилбегәгә йәбеште.

— Әйтәһеңме, юҡмы?.. Өндәшмәйһен? Ҡурҡтың? Эй, һарыҡ!.. Иҫеңдә тот! Федька мылтыҡ алып ҡайтҡас та, мин тәү башлап һине атып үлтерәсәкмен. Дөрөç, һинең ерең юҡ. һине үлтереүҙән файҙа булмаясаҡ. Шулай ҙа был уçал телең өсөн бер пуляны йәлләмәм мин һинән, яраймы, Байгилька? Ишетәһеңме, маңлайыңа бер пуля минән һуңғы бүләк булыр, хи-хи-хи!

Байгилде ағайҙың түҙеме бөттө. Ул атты юл ситенә бороп сығарып көрткә батырҙы ла, сананан һикереп төшөп, Апанастың хихылдап көлөп ултырған шамбы ауыҙына ҡан түҙҙырғансы һуғып ебәрҙе.

— Мә берҙе! Мә биште! Мә, ал, һуңғы бүләкте!..

— һин ни эшләйһең, йолҡош?!— тип ҡото осоп ҡыҫҡырынды Апанас.— Тукта хәҙер! Ишетәһеңме, мин һиңә бойорам...

Байгилде ағай Апанастың толоп яғаһынан тағы ла ныҒыраҡ ҡыҫып алды ла тимер ҡыҫҡыс кеүек ҡаты, һөйәлле йоҙроғо менән уңлы-һуллы төйгөсләргә тотондо.

— Ҡотҡарығыҙ!.. Үлтерәләр!.. Разбой!.. тип ҡыскырҙы Апанас. Ләкин уның тауышын төндәге кеүек тағы ҡоторона башлаған әсе ел менән йәйәүле бурандан башҡа ишетеүсе лә, тыңлаусы ла булманы. Ахыр, Апанас эштең етди икәнен һиҙеп:

— Байгилька, етер, туҡмама, үлтермә, ҡалдыр бер юлға,— тип, ерәнгес тауыш менән ялына, илай башланы. Ә Байгилде ағай уны ҡыҫҡыртып, аҡыртып, ҡулы талғансы туҡ*цаны* ла, ҡайтанан, санаға ултырып, атты юлға төшөрҙө.

— На, хайуан!..

— Атайыма әйтәм!.. Себергә ебәртәм!— тип иланы хәҙер Апанас.

Байгилде ағай уға боролоп ҡарамай ғына:

— Әгәр һин минен, туҡмағанды әйтһәң, мин һеҙҙең нindәй яуыз план ҡороп ятыуығыҙҙы бөтә Мраковкаға, Илсеғолға еткерәсәкмен. Унан халыҡ һеҙҙе ни эшләтергә үҙе белер,— тип иҫкәррте. Апанас, Байгилде ағай яғына ҡото осоп ҡарана-ҡарана, ҡыйыуһыҙ тауыш менән:

— Әйтәм, барыбер әйтәм!— тип мығырланды.

Был ваҡытта улар Илсеғолдан өс саҡрым алыçлыкта яткан Ивановка хуторына килеп еткәйнеләр. Байгилде ағай сананан ергә һикереп төштө.

— Мә, тот дилбегәнде, Апанас Сергеич. Мин бында ҡалам.

Апанас, ҡурҡышынан бөтөнләй айнып, атын туҡмайтуҡмай алға сапты. Байгилде ағай һуғыштан алда, Червяктан китеп ошонда, тирмәнселә, засыпкасы булып эшләй башлаған дуçы Никитаның ғаиләһенә кереп хәл белеп сығырға булды.

«Бәлки, Никита үҙе лә терелеп ҡайтҡандыр. Күрергә кәрәк. Сергей Хитровтарҙың, был яуыз ниәттәрен уға һөйләргә кәрәк. Юғиһә улар, ысынлап та, халыҡты советҡа ҡаршы аяҡландырып ҡуйыуҙары бар...»

Байгилде ағай төн буйы яуған өйөрмә буран күмгән оло юл буйлап, Ивановканың арғы осона, тирмәнгә табан йүнәлде.

«Артабан нисек йәшәү, нимә эшләү хаҡында ла кәңәшләшермен» тнп уйланы ул. Теге ваҡытта, Ҡормош байҙарҙан туҡмалған саҡта үҙен ҡәҙерләп, тәрбиәләп аяҡка баçтырған был ғаилә менән унын. араһында ғүмерлек дуçлыҡ йәшәй. Байгилде ағай иң ауыр саҡтарҙа һәр ваҡыт кәңәшкә ошо ғаиләгә килә ине. Әле лә уны Никитанын. һылыу йөҙлө, асыҡ күңелле ҡатыны менән оҙонса арыҡ буйлы, атаһына оҡшап эре-һары һипкелле улы Алеша, яҡын туғандары кеүек күреп, ҡыуанып ҡаршы алды. Түргә уҙырға, сәй эсергә, йылынырға саҡырҙылар. Никитаның да күптән түгел ҡайтыуын, тик уны әле генә Илсеғолдан бер ҡатын килеп ҡабаландырып алып китеүен һөйләнеләр.

— Бик ашығыс китте. Унда ни булғанын һорашып та ҡала алманым,— тине Никитаның ҡатыны. Алеша, ашығып:

— Байҙар ниндәйҙер этлек эшләргә йыйыналар ти унда,— тип хәбәр итте. Байгилде ағай, яһаған сәйен дә эсеп

тормай, ҡайтырға ашыҡты. Юл көрт. Атлауы ауыр. Аяҡтар алға баҫаһы урынға артҡа баҫҡан кеүек була. Ә йөрәк ашығырға ҡуша. Ниндәйҙер бәхетһеҙлек тойған кеүек сабырһыҙ тибә.

«Ниндәй хәлдәр бар икән унда?.. Иштуғанға бер-бер хәл булмаһа ярар ине,— тип хафалана Байгилде ағай.— Исмаһам, тағы бер атлы кеше осраһын ине».

Ул бер саҡрымлап ер үтеүгә, ауыл санаһына һөлөк кеүек йылғыр оҙонса кәүҙәле, нәҙек оҙон ботло, кескәй генә йомро тояҡлы ғәжәп һылыу ҡара юртаҡ еккән бер кеше уны тапата яҙып, зыйлатып уҙып китте. Байгилде ағай уға юл биреп ҡалды.

— На, ҡара юрға!.. Елдер егетте!..

Байгилде ағай: «Кем булды һуң әле был?»— тип уйларға ла өлгөрмәне, теге кеше ҡапыл кире боролоп, буран борҡс*-топ, унын, янына килеп туҡтаны. :

— Әйҙә ултыр, һалдат, алып ҡайтайым!.. Ха-ха-ха!.. Үҙе шул ыңғайға көлә-көлә йырлап та ебәрҙе:

Зимагор булды башҡайым,
Нисек өйгә ҡайтайым!..

Ха-ха!.. Әссәләмәғәләйкүм!

— Вәғәләйкүмәссәләм!— тип яуап бирҙе Байгилде ағай.— Усман бай түгелме һуң был? Ҡайҙан киләһең, бай?..

Усман бай, йырын туҡтатып, ғәжәп көр тауыш менән:

— Ултырып ҡал, һалдат! Юҡһа осам!..— тип ҡабатланы.— Күрмәйһенме ни, минен. ҡара юрға күккә осорға талпына бит!.. Тукта, һин Байгилде түгелме һуң әле? Бәй-бәй, был ни ғәжәп хәл?!

— Тап үҙе, Байгилде ҡустың...

— Ултыр.

Ысынлап та, уның аты ла, үҙе лә хәҙер осоп күҙҙән юғалырға торған әкиәттәге дейеү батырға оҡшай ине. Байгилде ағай тейен етеҙлеге менән санаға һикерҙе. Ул арала Усман бай дилбегәһен ҡағып та ебәрҙе, ҡара юрға уларҙы алып та осто. Атынан да, үҙенән дә ғәжәп риза булған Усман бай Байгилде ағайға ғорур, шаян ҡараш ташлап алды.

— һиҙәһеңме, Ырымбурҙан киләм. Петербурҙа эшселәр баш күтәргән, ти. Батшаны ла, байҙарҙы ла күтәреп бәргән, ти. Шуны ишетеп, бөтә байҙар, купецтар Ырымбурҙан ҡаса, ә мин Ырымбурға барҙым. Хи-хи, ҡыҙыҡ бит, ә? Ырымбур урамын пыр туҙҙырып сабып йөрөнөм-йөрөнөм дә ҡайтып киттем. Өлгөргәне юлдан тайшанып ҡалды, өлгөрмәгәне тапалып ҡалды. һай, егеттәр!.. Бына ғәләмәт әй, ә? Шәп бит, ә, Байгилде? Кешеләр Ырымбурҙан ҡаса, ә мин Ырымбур урамында пыр туҙҙырып ат саптырып йөрөйөм, хи-хи...



Минең ҡара юрғам көнгә йөҙ саҡрымды уйламай ҙа уҙа бит ул. Бына мин кисә генә унда инем. Ә бөгөн ейгә ҡайтып та еттем. Нисегерәк, ә? Бер тәүлектә йөҙ илле саҡрым! Йөрөш тиһән. дә йөрөш, исмаһам!

Байгилде ағай унық көр, сағыу тауышына һис тә хас булмаған ялыныс-аяныс бөркөп торған күҙҙәренә аптырап, баһадирҙарса мыҡтылығын юғалтмаған мөһәбәт кәүҙәһенә һоҡланып ҡарап алды: «Кәүҙәгә һаман ныҡ икән әле ҡартың...»

• — Эй сабып йөрөйөм Ырымбур урамында, эй сабып йөрөйөм,— тип Усман бай һөйләүен дауам итте.— Кемдәрҙер юлға арҡыры төшөп мине туҡтатмаҡ була. Ҡайһы берәүҙәре арттан атып та ҡала. Ә мин атымды ҡамсылап сабыуымды ғына беләм. Эй, пуля етәме ни минең арғымаҡҡа!.. На, елдер, арғымағым!.. Ос әйҙә! был донъяла һинең менән минән башҡа кем бар?!

Байгилде ағай Усман байҙың күп эсеү һәм ниндәйҙер ғаилә ҡайғыһы арҡаһында аҡылы инәле-сығалы булып китеүе тураһында Иштуғандын, хаты аша күптән белһә лә, был хәтле итеп күҙ алдына килтермәй ине әле. Шуға ул хәҙер нн тип һүҙ ҡушырға ла белмәне. Хәйер, бында өндәшеп тороуҙың кәрәге лә юҡ ине. Уның үҙенең дә, атының да берәр упҡынға барып осмайынса ярһыуҙан туҡтамаясағы асыҡ ине.

— Эй ҡыҙыҡ, Петербурҙа нимәлер булған ти. Шунан ҡурҡып, бөтә байҙар Ырымбурҙы ташлап ҡасалар. Большевиктар килә, большевиктар!—тиҙәр. Ә мин бер кемдән дә ҡурҡмайым. **Мин** бер кемгә лә баш эймәйем. **Үҙем** баш, **үҙем** түш!— тип һаман шулай бер **һүҙҙе** ярһып һөйләнде ул.— **Үҙем** баш, **үҙем** түш! Минә алла ла, мулла ла, батша ла юҡ. Улар бөтәһе лә шәлкем йүкә. һуҙыла ла, өҙөлә лә... Ха-ха-ха! Эйе, эйе, тап беҙҙең хәҙрәттең шәлкем йүкәһе кеүек!.. Кәрәкмәй улар миңә береһе лә. Етер!.. етер!.. Ҡотолдом мин уларҙан!.. Ысҡындым. Ел кеүек иректе мин хәҙер!..

«Күрәһең, был ысынлап та аҡылдан ныҡ тайған... Эйе, араҡы менән күп шаярҙы шул...» — тип уйлап алды Байгилде ағай. Ләкин һаман бер ни ҙә өндәшә алманы. Уҡ кеүек осоп барған ат тояғы аҫтынан сәсрәгән ҡар осҡондары уның ҡуйынына, танауына тула, ә Усман бай һаман һөйләй ҙә һадләй ине. Бына оҙаҡламай улар бесән санаһына егелгән ауыр йөрөшлө эш атын сыбыҡ менән сыптыра-сыптыра сабып барған Никиталарҙы ҡыуып етеп, көрт ярып уҙып та киттеләр. Байгилде ағай ҡулын баш осона күтәреп:

— Никита!— тип, ә теге — Байгилде!— тип ҡысҡырырға ғына өлгөрөп ҡалды.

Усман бай Илсеғолға ҡайтып етә килә атын тағы ла ямanыраҡ ҡыуа башланы. Оҙаҡламай тыҡрыҡтан дөбөр-шатыр

үтеп урамға барып инде лә, санаһын ҡапыл ҡәйелтеп, үҙ йортона боролоп инеп юғалды. Күрәһең, уның һәр минутта? ҡайтыуын көтөп, ҡатындары ҡапҡаны асыҡ тоталар ине. Байгилде ағай, сана ҡырҡыу боролоп ҡәйелгән ыңғайы ситкә ырғып китеп, юл ситендәге көпшәк ҡар өҫтенә йығылып ҡалды.

— Аллаға шөкөр,— тине Байгилде ағай, көлемһөрәп.— Муйын да, арҡа ла һынманы.

Ул шинеленә һырышҡан ҡарҙы ҡаға-һелкә тороп баҫты. Үҙенән ике-өс аҙым ары ырғып төшкән кәкре таяғын барып алды. Уңға-һулға боролоп, урамды байҡаны. Шул саҡ унын. күҙенә Тимербайҙарҙың өйө янында барған сыр-сыу салынды.

«Кемделер туҡмайҙар түгелме?.. Иштуғандымы әллә?Ь Байгилде ағай, таяғын баш осона күтәреп, шул яҡҡа йүгерҙе.

— Эй, таралығыҙ! Таралығыҙ, тим!..

— Кем ҡысҡыра?

— Кемдең беҙҙә ни эше бар?

— Бы-бы-был Байгилде зимагур түгелме һуң?

Туҡмаусылар, бер генә минутҡа туҡтап, ҡан баҫҡан күҙҙәрен уға төбәнеләр. Байгилде ағайҙын ҡапыл ҡурҡытып, өркөтөп ебәреү планы барып сыҡманы.

— Бы-бы-бының үҙен ҡаҡҡылап алғанда нисек була?— тип шыйылданы Шымбай.— Үҙен өйрәткәндә тим... Кеһ-кеһкеһ...

Старшинаға ярамһаҡланыу өсөн ул бөгөн үҙенен. ғәҙәттәге һаҡлығын да онотоп ебәргәйне.

— Үҙенме? Шәп була,— тине старшина.— Улы өсөн атаһы яуап бирһен!..

Туҡмаусылар бетә яҡлап Байгилде ағайҙы уратып алды. Таяҡтарын күтәреп уға яҡынлаша башланы. Ҡатын-ҡыҙ, бала-саға тағы ла ҡатыраҡ сыулашырға-илашырға тотондо. Байгилде ағай имән таяғы менән төрлө яҡҡа һелтәнде:

— Яҡын килмәгеҙ! Үлтерә һуғасаҡмын!..

Уны ураткан дүңгәләк кесерәйгәндән-кесерәйҙе.

Туҡмаусыларҙың иғтибарын үҙенә тартыу хаҡына булһа ла, кемделер үлемдән ҡотҡарыуына Байгилде ағай шат ине.

«Никита килеп еткәнсе, нисек тә шулай албырғатып тороп булһа...— тип, артыҡ борсолмай ғына уйланды ул.— Үлгәндә лә был ҡоҙғондарҙың бер-икеһенең мейеһен сәсрәтеп үлергә кәрәк...»

Ләкин, бәхеткә ҡаршы, Байгилде ағайға был ҡот осҡос минутты кисерергә тура килмәне. Урам осона килеп ингән Никита нагандан һауаға бер-ике атып ебәреүгә, туҡмаусылар . көшөл шикелле өндәренә ҡасып бөттө. Урам күҙ асып йомғансы буп-буш булып ҡалды. Бығаса, ярҙамға ташланырға ҡурҡып, яҡ-яҡта йүгерешкән ҡатын-ҡыҙ Байгилде ағай менән Никитаға туҡмалған кешеләрҙе берәм-берәм күтәреп, өйгә алып инергә, уларға тәүге ярҙамды күрһәтергә булышты.

Баҙыян енгә менән Тимербай оҙаҡ иҫкә килмәне. Ә Ҡарасәс әбей иҫен юғалтмағайны. Ул, өйгә индереп, урындыҡҡа һуҙып һалғас, үҙе менән йәнәш ятҡан улына боролоп:

— Балам!.. Тимербайым!.. Ыласыным ми-не-ң!..— тип өҙөп-өҙөп бер-ике генә һүҙ әйтте лә йән дә бирҙе. Ирҙәр бүректәрен һалып, ҡатындар ҡулдарын йөрәктәре тәңгәлендә ҡаушырып һүҙһеҙ тынып ҡалдылар. Өлкәндәргә эйәреп өйгә инеп тулған Сабира, Сәмиғә, Емеш һәм башҡа балалар ҙа, бүренән өрккән һарыҡ бәрәндәре шикелле бер мөйөшкә өйкөлөшөп, тын да алмай шымып торҙолар. Өйҙә бер нисә минутҡа сикһеҙ ауыр ҡайғы һәм ғәжәп ҙур хөрмәтте аңлатҡан тынлыҡ урынлашты. Был Ҡарасәс әбей менән — батыр, ғорур әсә, бөркөт йөрәкле, ысын кеше менән — һуңғы хушлашыу ине.

Бынан һуң Никита Тимербай менән Баҙыян еңгәне, үҙен алып килгән егеүле санаға тейәп, Ташлыға, элекке Тимаш баяр больницаһына алып китте. Унда элекке баярҙың ҡырын ҡарауына ла иғтибар итмәйенсә, ябай халыҡҡа һәр саҡ ярҙам ҡулын һуҙырға әҙер торған ғәжәп оҫта хирург, изге күңелле кеше, Иванов тигән врач эшләй ине.

— Тимербайҙың ҡабырғалары һынғанға оҡшай. Бында тик врач ҡына ярҙам итә аласаҡ,— тине Никита.— Ҡатынына ла ул ярҙам итер.

Шулай итеп, әлегә туҡмаусыларҙы эҙләп-тотоп маташырға бер кемдең дә ваҡыты булманы. Сөнки Тимербай менән Баҙыян енгәгә ашығыс ярҙам күрһәтергә кәрәк ине.

Никиталар киткәс, Байгилде ағай өйгә ҡайтып бала-сағаның хәлен белергә лә Ҡарасәс әбейҙе кумеү сараһын күрергә тигән ниәт менән ашығып урамға сыҡты. Өшөү һәм ҡурҡыуҙан тештәре тешкә һуғылып шаҡылдап, Сабиралар менән мөйөшкә һырынып торған Емеш шул саҡта ғына атаһын абайлап артынан йүгерҙе.

— Атай! Атай, тим, тороп тор!.. Мин дә һинең менән...

Байгилде ағай ялт итеп артына боролдо.

— Бәй, ҡыҙым, Емеш?! һин дә быңдамы ни?.. Ни хәл? Эй, туңып бөткәнһен, дә баһа, ҡыҙым!..

Ул Емеште кескәй бала шикелле итеп күтәреп алды.

Сөгөлдөр кеүек ҡыҙыл күк төҫкә ингән аяҡтарын үҙенең шинель салғыйҙары менән ураны.

— Эй-й... Ҡыҙым... Йә, һейләп ебәр, өйҙә ни хәлдәр бар? Иштуған ағайың нинә күренмәй?

Емеш, ғәҙәттәге ҡырыҫлығын онотоп, ҡыҙыл боҙға әйлән^

гән ускәй генә ҡулдары менән атаһынын, муйынынан ҡыҫып ҡосаҡланы. Ләкин бер һүҙ ҙә әйтмәне. Ҡурҡыу ҙа, ҡайғы ла, атаһы ҡайтҡан өсөн ҡыуаныу ҙа бер юлы сағылған уйсан ҙур ҡара күҙҙәрен атаһының яурынына ғына йәшерҙе. Унең бөгөнгө күргәндәрен, кисергәндәрен тел менән һөйләп, аңлатып бирергә мөмкин инеме һуң? Етмәһә, ул үҙ башынан кискәндәрҙе һөйләргә өйрәнмәгән дә, атаһы ла уға былдай һорау менән үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр ғына мөрәжәғәт итә ине шикелле. Эйе, тәү тапҡыр. Сөнки ул бигерәк тә Иштуғандың хәлен белергә ашыға ине. Ләкин Емеш уның был сабырһыҙ һорауына бер ни тип тә яуап бирә алманы. Тик тағы бер тапҡыр атаһының муйынынан ҡыҫып ҡосаҡланы ла:

— Төшөр, атай, мин бәләкәс түгел бит. Йүгереп кенә ҡайтайым,— тине.

— Күтәреп кенә алып ҡайтайым, ҡыҙым,— тине Байгилде ағай.— Нисек мин һине тағы ҡарға ялан аяҡ баҫтырайым?!

Емеш был һүҙгә өлкәндәрсә тыныс ҡына йылмайып яуап бирҙе:

— Тәү тапҡырҙыр шул.

Унан атаһынын. ҡулынан аҡ ҡарға һикереп төштө лә урам буйлап йүгереп китте. Ул хәҙер берсә ер өҫтөнән ел ҡыуып йөрөткән көҙгө имән япрағына, берсә селлә һыуығы бәреп төшөргән һоро турғайға оҡшай ине. Байгилде ағай Емештең, ысынлап та, күтәреп йөрөтөрлөк түгеллеге, бәләкәс, бәпес сағы ошолай һөйөү-иркәләү күрмәй күптән уҙып китеүе тураһында әсенеп уйлана-уйлана унын. артынан эйәрҙе.

# Өсенсе бүлек

Был көндө Таиба әбей иртәнән төнгә хәтле Сәлимәләрҙә булды. Уландарының һуғыштан иҫән-һау ҡайтыуы хөрмәтенә ул Сәлимәне ғәфү иткәйне. Уны хәҙер элеккесә яратҡан килендәренең береһе итеп иҫәпләй башлағайны. Әлбиттә, был Сәлимә өсөн ҡыуанyслы хәл булды. БыҒаса Хаммат үҙ янында булһа ла, әсәһе, туғандары үҙен ҡабул итмәгәс, унын күңеле бик үк тыныс түгел, үҙен һәр саҡ улар алдында ғәйепле тойоп йәшәү ауыр ине уға. Ә хәҙер Таиба әбей ғәфү итеү менән уның күңеленән ошо ауыр йөк алып ташланды. Ул бының өсен ikheҙ-сикheҙ ҡыуана, бейемен әленән-әле саҡырып, ҡәҙер-хөрмәт итеп тороу менән күңеленең бөткөһөҙ рәхмәтен күрһәтергә тырыша ине. Әле бына бөгөн дә ул иртүк Хамматты ебәреп, Таиба әбейҙе үҙҙәренә саҡырып алды.

— Йома көн бит. Бейем бөгөн беҙҙә ҡунаҡ булып ултырһын. Бер эш тә эшләмәһен,— тине ул. Хаммат үҙенең ҡырҡыу, талапсан, ләкин ғәжәп ғәҙел холоҡло, ир йөрәкле әсәһен нык ярата, ысын күнелдән хөрмәт итә, Сәлимәнең дә уны яратыуы, хөрмәт итеүе өсен ҡыуана ине.

Был көндө Сәлимә мунсаны тандан тороп яғып, томалап ҡуйғайны. Бейеме килеү менән, ул уны тәүге мунсаға алып китте. Мәтрүшкә һәм башҡа шундай хуш еҫле май сәскәләре ҡушып бәйләнгән ҡайын япрағы менән бейемен ҡат-ҡат сабып, йылы, таҙа һыу менән ҡойондороп өйгә алып ҡайтып яткырғас, Хаммат менән үҙе мунса инеп сыҡты. Унан өсәүләп тирләй-бешә сәй эстеләр. Бынан һуң Таиба әбей тағы ла ял итергә ятты. Ә Хаммат ашыға-өтәләнә сығып китте. Фронттан ҡайтҡан һалдаттар менән ярлы, батрактарҙың бөгөн кис йыйылышы булырға тейеш ине.

— Әсәй, һин ҡайтма. Мине көт, киленең янында бул, йәме,— тине ул, һөйкөмлө йылмайып,— ҡунаҡ бул.

— Ярар, балам, ярар,— тип ҡалды Таиба әбей.— Көтөрмөн. Бөгөн ҡайтмам.

Сәлимәнең әле генә айҙай балҡып торған йөҙөнә ҡара болот йүгерҙе.

— Тиҙ ҡайт. Оҙаҡ йөрөмә. һине көтә-көтә, көтөк булып бөткәнмен инде...

— Тыры-шыр-мын!..

Хамматтың был һүҙе, ишеккә ҡыҫылып, өҙөлөп ҡалды. Сәлимә ауыр көрһөнөп, ҡулдарын, бармаҡтарын өҙгөләй-өҙгеләй, сәй янына килеп ултырҙы.

— Эй алла, бер ҙә генә өйҙә тора алмай шул. Ни булды быға? Әллә ҡайҙа ашҡына ла тора. Элек, һуғышҡа хәтле, һис тә улай түгел ине бит... һуғыштан әллә нисек булып, бөтөнләй икенсе төрлөгә әйләнеп ҡайтты ла килде... һуғыш, буржуй, спекуляция, көрәш...— тип, мин аңламаған әллә нәмәләр һөйләй ҙә сыға ла саба, сыға ла саба... Әллә инде...

Сәлимә һүҙенең: «Әллә инде хәҙер мине яратмай... Әллә инде Өммөкәйенә кире ҡайтырға йөрөй...» тигән яғын эстән генә уйлап, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы. Ә Таиба әбейҙе бөтөнләй икенсе уй борсой ине. «Тирә-яҡ бер ҙә генә тыныс түгел. Бөтә халыҡ байға ла ярлыға айырылып, талашырға-тартышырға кереште. Бының аҙағы яҡшыға булмаҫ. Хамматым да бигерәк уҫаллашып, байҙарға үсле булып ҡайтты. Анауы һатыбалдар уға бер-бер хәл эшләп ҡуймаһалар ярар ине. һай, донъялар, бигерәк тә яман болғанып тора... Етмәһә, Закирым да һатыбалдар яғында йөрөй башланы... Бына нисә көн инде Ташһарайға китте лә батты. Нимә эшләй торғандыр инде унда? Эй был балаларҙы!.. һай, был балалар, ата-әсәгә көйөк өсөн генә тыуалар ахыры улар...»

Ләкин Таиба әбей был хәүефле уйҙарын йөҙөнә аҙ ғына ла сығарманы. Ә ҡоро, ҡырҡыу ғына итеп, килененең һүҙен бүлде.

— Әллә-мәллә тип, бушҡа күңеленә хәсрәт һалып ултырма. Ирмен тигән ир өйҙә ятып сыҙар заманмы ни хәҙер? Күрмәйһеңме ни, илдә ниндәй эштәр бара?.. Байҙар һуғып билеңде һындырырға йыйынғанда күҙ йомоп, ҡул ҡаушырып өйҙә ятһындар өсөн үҫтерҙемме ни мин уландарҙы?!

— Уныһы шулай ҙа, бейем...

— Шулай булғас, хоҙаның биргән бәхетенә ҡәнәғәт була бел! Күрмәйһеңме, бынамын тигән күпме ирҙәр һуғышта баш һалды. Шөкөр, тиген, алйот! Ирең һау-сәләмәт ҡайтты.

— Уныһы ла дөрөҫ шул...

Таиба әбейҙең был һүҙҙәренән һуң Сәлимәнең күңеле әҙерәк тынысланған, йөҙө яҡтырған һымаҡ булды. Улар һөйләшә-көлөшә оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Әңер төштө. Өйгә шәм алынды. Сәлимә малдарын ҡарап ябып, өйгә утын-һыу ташып, киске эштәрен бөтөргәс, тағы самауыр ҡойоп ебәрҙе. Килен менән бейем, Хаммат ҡайтмаймы, ҡапҡа шығырлап асылмаймы тип, тыш яҡҡа ҡолаҡ һала-һала, картуфтың эсен соҡоп, филтә һалып эшләнгән май шәм бышылдауы аҫтында тағы бер тапҡыр оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Ләкин Хаммат һаман ҡайтманы ла ҡайтманы. Таиба әбей менән Сәлимә оҙаҡ көткәндән һуң арып урын йәйеп яттылар. Тик икеһен дә йоҡо алманы. һәр ҡайһыһы үҙенсә уйланды, үҙенсә хафаланды. Ахыр, бына төн уртаһына яҡын, ҡапыл урам ҡапҡаһы шығырлап асылып китте.

— Килен, ишетәһеңме? Ҡайтты,— тине Таиба әбей, еңел һулап. Сәлимә һикереп тороп май шәмде ҡабыҙҙы.

— Я хоҙай, ҡайтыр көнө лә бар икән!..

Ул арала булмай кемдер ҡаты сабырһыҙланып ишек ҡаҡты.

— Әсәй!.. Әсәй!.. Сыҡ әле, әсәй!..

— Аһа, был Хамматтың тауышы түгел дә баһа!..— тине. Сәлимә ишектән кире сигенеп. «Хисбулла бит был!»—тигән уйын әйтә алманы. Сөнки был уның өсөн һис тә көтелмәгән хәл ине. Хисбулла менән айырылышҡандан һуң, улар бер ҡасан да осрашҡандары, һөйләшкәндәре, хатта бер-береһенә ҡырын күҙ ҙә һалышҡандары юҡ. Улар бер-береһе хаҡында ямандан-яҡшынан телгә алып һүҙ һөйләмәй, бер-береһенән. тупһаһына аяҡ баҫмай йәшәйҙәр. Ниндәй сәбәп алып килде икән бында Хисбулланы бөгөн?..

Таиба әбей хафаланып тороп ултырҙы.

— Кем тауышы һуң? Ниңә асмайһың, килен? Кем бар унда?

— Әсәй, тим, әйҙә, тиҙерәк өйгә ҡайт! Мин һине алып ҡайтырға килдем!

Таиба әбей имгәкләп барып иҙәнгә төштө.

— Аһа, был Хисбулла түгелме һуң? Нимә эшләп йөрөйһөң, алйот, төнө менән?.. Имсәк имгең килдеме әллә, бәпес? Йә, элгесте ысҡындырҙым, ин, һөйлә, нимә бар?

Хисбулла тыштан ҡысҡырҙы:

— Инмәйем, әсәй. Тиҙ кейен. Өйгә ҡайтайыҡ! Минең улым бар!.. Киленең, ул тапты!..

Хисбулланың ғәҙәттән тыш шат тауыш менән әйтелгән был яңылығы Таиба әбей менән Сәлимәгә аяҙ көндә йәшен һуҡҡан кеүек тәьҫир итте. Улар икеһе бер юлы ултыра төштөләр. Сәлимәнең ҡулындағы май шәм ҡайҙалыр ырғып китеп, өйҙө ҡуйы ҡараңғылыҡ баҫты.

— А-таҡ! Нимә ти?!

— Ысынды һөйләйме был, алйот!..

— Ысын, әсәй. Әйҙә, тиҙ бул.

Ғәҙәттә көйөнөстө лә, ҡыуанысты ла тыныс, олпат ҡаршылай торған ҡаты ихтыярлы Таиба әбей әле бөтөнләй

юғалып ҡалды. Ҙур устары менән тубыҡтарына шапылдатып һуға-һуға:

— Китсе-китсе, улыбыҙ бар тигенсе, ә? Ейәнем бар тигенсе, ә? Нисек һуң мин быны бер ҙә абайламағанмын, ҡарт алйот!.. Бибеш ауырлылыр тип кем уйлаған? Бына ғәжәп, бына алланың ҡөҙрәте, ай, балаҡайҙы, ул тапты тигенсе, ә? — тип, көйләп, һөйләнеп ултырҙы. Үҙе һаман урынынан ҡуҙғала алманы.

Сәлимәнен, бер һүҙ өндәшергә лә, ҡуҙғалырға ла көсө етмәне. Уның йөрәген көнләшеү йәки күрә алмау ғына түгел, ә «бынан һуң йәшәргә ни ҡала!» тигән һымаҡ, ҡаты өмөтһөҙлөккә яҡын бер тойғо солғап алды.

— Әсәй, тиҙ бул, мин көтәм!— тип ҡабатланы Хисбулла.— Мин тышта, ишек алдында көтөп торам.

Таиба әбей май шәм һүнеп бөтөнләй ҡараңғы баҫҡан өйҙә бишмәтен дә, быймаһын да таба алманы.

— Килен! Нимә тауыш-тынын, сыҡмай?.. Ҡайҙа юғалдың? Шәм ҡабыҙ, көпөмдө табып бир!

Бейеменен, был айныҡ бойороғо Сәлимәне аңына ҡайтарҙы. Ул көлдөксәгә оҙон сыра яндырып ҡуйҙы ла, бейемен тиҙ генә кейендереп, тупһанан етәкләп төшөрөп ебәрҙе.

— Йығылып ҡуйма, бейем!

Тыш яҡта, ишек янында көтөп торған Хисбулла үҙенә һис тә хас булмаған шаян тауыш менән:

— Йығылмаҫ! Күтәреп алып ҡайтырмын! — тип яуапланы.

Сәлимә, ишекте ябырға ла онотоп, яңаҡҡа һөйәлеп, бик оҙаҡ юғалып торҙо. Хисбулланын, һүҙҙәре, әйтерһең, уның йөрәк итен йыртып, әсе тоҙ һипте. Ә Хисбулла был ваҡытта һаман:

— Әсәй, улым бар! Бына тигән, ып-ысын, йомро малай бар!—тип, көлә-һөйләнә, әсәһенең аяғын ергә тейҙермәй елтерәтеп, үҙҙәренең өйөнә табан йүгертә ине инде. Әлбиттә, был һүҙҙәрҙе ул Сәлимәне сәмләндерер өсөн дә, уныҡ алдында маҡтаныр өсөн дә һөйләмәй. Тик уның ҡыуанысының шул хәтле иге-сиге юҡ, ул һейләмәй түҙә алмай. Был турала әсәһенә йәки Сәлимәгә генә түгел, ә бөтә донъяға ҡысҡырып һерән һалғыһы килә уның. Таиба әбей ҙә улынан кәм ҡыуанманы. Ул да, үҙенә хас булмаған сабырһыҙ тауыш менән:

— Эй, китсе-китсе, ошондай көндә өйҙә тормасы, йә? Эй, балаҡайҙы... Эй, бисараны... Нисек кенә тыуҙырҙы икән һуң?.. Кем генә кендек инәһе булды икән һуң? Әллә, улым, юрын ошолайтып алдап алып ҡайтырға булдыңмы мине?—тип бер туктауһыҙ тәтелдәне.— Бына һиңә кәрәкһә, иләмәгәнһуҡмаған, ҡайным һиңә бер күлдәк, тигән һымаҡ булды



ла ҡуйҙы ла баһа был, улым? Бына ғәжәп!..— тип аптыраны.— Әйтмәне лә, белгертмәне лә бит, өндәшмәҫ! Ҡыҙ ҡорһаҡты, әйтмәгәс, белеп буламы ни уны!.. Унан ҡайһы берәүҙәр күкрәк менән күтәрә. Ундайҙы ла тиҙ генә һиҙеп булмай... Йә, белдерһә ни була инде, байғош!.. Был тиклем дә тешләнмә, һере нәмә булыр икән кеше, эй алла!—тип кейөнөп тә алды.— һин дә әйтмәнең бит, исмаһам, ахмаҡ! Әллә һин дә белмәнеңме, алйот!?

Ләкин Хисбулла әсәһенен. бер генә һорауына ла яуап ҡайтарырлыҡ, унын, һүҙҙәренең асылына төшөнөрлөк хәлдә түгел ине. Ул тик бер генә һүҙҙе белә ине хәҙер:

— Улым бар, әсәй, улым бар!..

## II

— Үә-үә-үә! Үә, ә-ә!..

Был өр-яңы замандын өр-яңы кешеһенен донъяға һалған беренсе һөрәне ине. Уның артынса Бнбеш кендек инәһенең:

— Улың бар, килен!.. Ҡарасы, туптай улың бар!..— тигән ҡыуаныслы, һоҡланыулы һүҙен ишетте...— Ҙуп-ҙур, һәп-һәйбәт, шәпле малай. Ҡалай көр тауышлы.

— Күр-һә-т ә-але, ең-гә...

— Мә, ҡара, күр.

Баҙыян енхә аҡ йүргәккә төргән йомро башлы, ҡып-ҡыҙыл кескәй генә йомарсаҡты күкрәгенә ҡыҫып, йәтеш кенә итеп күтәреп алды ла илап, ҡысҡырып торған ауыҙына бер балғалаҡ май, бер балғалаҡ бал ҡаптырҙы.

— Ауыҙ-моронон. май булһын, йортоң-ерең бай булһын!

Унан баланы ҡысҡырта-ҡысҡырта Бибештең янына алып барып һалды.

— Рәхим ит, килен. Ҡарай ғына, күрә генә күр. Улан һинеке.

— Рәхмәт...— тине Бибеш, ап-аҡ ирендәрен көскә ҡыбырлатып.— Рәх-мә-әт, еңгә!..

— Ниңә миңә рәхмәт? Үҙеңә рәхмәт. Туптай улды эһ тә итмәй тупылдаттың да ҡуйҙың бит. Шундай киленгә рәхмәттән башҡа ни әйтәһең! Етмәһә, ауырлы икәнеңде лә бер кем белмәне. Ярай әле мин уйламағанда килеп индем. Юғиһә, нимә эшләр инең, ә? Бейемең өйҙә юҡ. Кем кендек инәһе булыр ине? Йә, иҫәркәй, улай йәшереп йөрөргә яраймы ни?!

Баҙыян еңгә шулай һөйләнә-һөйләнә, бала йыуындырған ялғаш, ҡомған, таҫтамалдарын йыуып-йыйып, самауыр ҡуйып ебәрҙе. Унан иҫенә төшөп:

— Эй-й... Хисбулла ҡәйнешкә һөйөнсөләйем әле! Ул бахыр, теге өйҙә йәне сыға яҙып, көтөп тора торғандыр!— тип,

ашығып, ҡаршы өйгә сығып китте. Ә Бибеш әле генә кисергән ауыр аҙаптан талған ҡуҙҙәрен улына төбәне. Арыҡ аҡ бармаҡтары менән иплəп кенə уныңҡыҙыл маңлайынан, йом* шаҡ, эҫе биттәренән һыпырҙы. Унан, сикһеҙ бәхетле йылмайып, ҡуҙҙәрен йомоп ятты.

«Бала... Бала!.. Ҡалай йөрәккә яҡын була икән ул бала!..»

Бибеш бындай рәхәт, татлы талсығыуҙы ла, тел менән һөйләп биргеһеҙ бындай оло ҡыуанысты ла ғүмерендә тәү тапҡыр кисерә ине. Уның күңеле ысын, ҙур бәхет, бөткөһө^ шатлыҡ, ниндәйҙер ялҡынлы ғорурлыҡ менән ташып тул^ ғайны был минутта. Әйләнә-тирәләге бөтә тормош та, кешеләр ҙә, хатта был ҡырыҫ донъя ла уға тәү тапҡыр шулай иҫ киткес матур, һөйкөмлө, яҡын булып, уның улы менән бергә ҡайтанан тыуған кеүек тойола ине. Хатта ул үҙе лә өр-яңынан тыуған сикһеҙ бәхетле, шат һәм донъяла йәшәүҙе бөтә йөрәктән өҙелеп һөйөүсе бөтөнләй икенсе бер кеше ине хәҙер. Бала менән бергә тыуған был ғәжәп ҙур, оло шатлыҡ тойғоһо хәҙер уның бөтә йәнен-йөрәген солғап алды. Ул, изге бәхет ҡошоноң иркә ҡанаттарында талғын ғына тирбәлә-тирбәлә, бығаса бер ҡасан да татылмаған ҡаты, тыныс йоҡо эсенә инеп сумды.

Баҙыян еңгә һөйөнсөләргә сыҡҡанда, Хисбулла, ҡайҙа баҫҡанын, ни эшләгәнен белмәй, ситлектәге айыу шикелле бер үҙе бер өйҙә ары-бире йүгереп йөрөй ине. Баҙыян еңгәне күргәс, ул тағы ныҕыраҡ түҙемһеҙләнеп китте:

— Йә, ни бар, еңгә? Бибеш тереме? һөйләй һал, еңғә, Бибешкә бер-бер хәл булманымы?

Баҙыян еңгә көлә-көлә уны ситкә этәрҙе.

— Тукта, килбәтһеҙ, шул тиклем өтөп алып барма! Бибешкә ни булһын? Бала тапҡандан кеше үләме ни, иҫәр! Улың бар бит, һөйөнсө! һөйенсө тим, килбәтһеҙ!

— Уй, еңгә!.. Уй, Бибеш!.. Улым!.. Еңгә?!—Хисбулла ике ҡуллап берсә күкрәгенә, берсә башына тотоноп, ни эшләргә белмәй, өйҙөң төрлө мөйөшөнә барып бәрелеп-һуғылып йөрөй башланы.— Уй, ысынмы, еңгә?.. Кем бар, тиһен. әле, еңгә?.. Улым, тиһеңме әле, еңгә?!

— Улың бар, тим, килбәтһеҙ, мәхлүк, һөйөнсө! һөйөнсөһөнә ни бирәһең, тим!... Тиҙерәк әйт тә, миңә Бибеш янына сығырға, уға сәй эсерергә кәрәк,— тине Баҙыян еңгә.— Ә һин, бар, әсәйеңде алып ҡайт. Мин ҡайтҡас, киленде тәрбиәләргә кеше кәрәк булыр.

Хисбуллаға, күрәһең, был һүҙҙәрҙең, әсәйеңде алып ҡайт, тигәне генә барып етте. Ул үҙе лә аңламаҫтан, Баҙыян еңгәне һығып ҡосаҡлап, маңлайынан үпте лә:

— Мин хәҙер, еңгә!— тип, ҡысҡырып көлә-көлә тышҡа атылды. . ......: .---•.'



,— һай мәхлүк!—тип ҡалды Баҙыян еңгә. Унан:

«Бигерәк бала көткән икән, бисара. Ҡыуанысынан бөтөнаҡылын юйҙы. һөйөнсөгә бүләк әйтергә кәрәклек тә башына килмәне, бахырҙың» тип, уйлана-һөйләнә ҡайтанан Бибеш янына сыҡты.

Бибеш үҙе лә, улы ла тәрән, татлы йоҡо эсендә иҙрәп ята ине. Баҙыян еңгә әкрен генэ уның аяҡ осона барып ултырҙы.

«Бахырҙы... Баланы... Ҙур аҙаптан имен-иҫән генә ҡотолдо әле, ярай...— тип, Бибеш өсөн ҡыуанып уйланды Баҙыян еңгә.— Ярай әле мин килеп индем. Юғиһә, ни эшләр ине... Ә Хисбуллаһы, оло сабый, бер ни белмәй бит. Хатта, ҡатынының ауырлы икәнен дә белмәгәндер әле ул, мәхлүк... Алдан белһә, был тиклем аҡылынан шашып, аптырап ҡалмаҫ ине... Бына һиңә ир!.. Эй, ташҡа үлсәйем, ҡуй инде...»

Ысынлап та Бибештең ауырлы икәнен үҙенән башҡа бер кем дә белмәне.

Таиба әбей: «Килен был арала таҙарып, йомроланып алды. Күрәһең, үҫеүҙән туктап, ит ҡуна башланы», тип уйланы. Хисбулла: «Бибеш мине хәҙер бетөнләй ҙә яратмай. Яҡын да юлатмай. Ҡыҙҙар кеүек буйҙаҡ йөрөгәс, үҙенә төҫ сығып китте»,— тигән фекерҙә булды. Ә Бибеш үҙенең ауырлы икәнен белһә лә, тыуҙырыу ваҡытынын, ҡасан, ни төҫлө булырға тейешлеге хаҡында бер ни ҙә белмәй ҙә, был хаҡта кемдән дә булһа һорашып, аңларға теләмәй ҙә ине. Шулай айҙар үтте лә үтте. Уҙған төндө ауырып-һыҙланып сыҡты. Ниндәйҙер түҙгеһеҙ ҡаты ауыртыу унын. биленән семтеп тота ла ебәрә, тота ла ебәрә ине.

«Билемә һалҡын тейгеҙгәнмендер, ахыры»,— тип уйланы ул. Ләкин был хаҡта, ғәҙәтенсә, бер кемгә бер ни өндәшмәне. Көндәгесә иртән тороп бер нисә көйәнтә һыуға барҙы. һыйыр һауҙы. Өй йыйыштырҙы. Иртәнге сәй әҙерләне. Сәйҙән һуң, Таиба әбейҙе Хаммат килеп алып китте. Хисбулла урманға утынға барып, төнләтеп кенә ҡайтып килде. Ә Бибештен, билендәге ауыртыу көсәйгәндән-көсәйҙе. Ул хәҙер шундай ҡаты ауырыған саҡта үҙенең өйҙә япа-яңғыҙ булыуына ҡыуана ине. Сөнки бил хәҙер шул хәтле ҡаты ауырта, уға ултырырға ла, ятырға ла бирмәй. Билдән, эстән тотоп алған саҡта хатта теште шыҡырлатып ҡыҫып та ҡысҡырмайыңғырашмай түҙеп булмай. «Ошондай саҡта тегеләр өйҙә булһа, мин нисек итер инем?— тип уйланы ул.— Йә, тиҙерәк, улар ҡайтҡансы, был ауырыу уҙып китһен, йәки мин тиҙерәк үлеп кенә ҡуйһам ине. Был тиклем аҙаплы ауырыуҙан үлеү еңелерәк булыр... Үләһең, тынаһың... Ҡотолаһың... Бер ерең Дә ауыртмай... Бер ни ҙә кәрәкмәй... Эй хоҙайым, тик иманлы үлем генә бир... Был донъянан китеүемә үкенер урыным юк...»

Бибеш шундай иң аҙаплы минуттарҙың береһен кисергән

саҡта уларға Баҙыян еңгә килеп инде. Хаммат уны: «Бар, еңгә, әсәйемдәргә барып кил әле. Закир ҡайтманымы икән? Ҡайтҡан булһа, хәҙер үк йыйылышҡа килеп етһен!..» тип йомошҡа ебәргәйне. Баҙыян еңгәнен үҙенең дә уларға барғыһы килә ине. Сөнки теге ваҡытта туҡмалып, ауырып ятыуҙан һуң Бибеште күргәне, хәлен белгәне юҡ. Ә Бибеште ул үҙ балаһы кеүек күреп йәлләй, мөмкин тиклем уға ярҙамға: килеп торорға тырыша ине.

Баҙыян еңгә барып инеү менән Бибештең һау түгеллеген аңланы.

— hиңә ни булды, килен? Ауырыйһыңмы әллә?— тип ҡурҡып китте ул.— Бик яман төҫөң ҡасҡан даһа!.. Ҡайһы урынын, ауырта?

— Би-ле-м!..— тине Бибеш, тешен ҡыҫып.— Билемдән түҙҙермәй.

— Ҡана, ят әле, биленде һыйпап ҡарайым,— тине Баҙыян еңгә, хәҙер үҙенең ни өсөн килгәнен дә онотоп:—Аһа, һин ауырлы ла баһа, килен!.. Балаға ауырыйһың да баһа һин!..

— Әлләсе...— тине Бибеш, ҡыҙарынып.— Бәлмәйемсе.

Баҙыян еңгә бер ни белмәй ишек төбөндә ҡамыт төҙәтеп ултырған Хисбулланы пыр туҙҙырып әрләп, икенсе өйгә ҡыуып сығарып ебәрҙе.

— Ярай, Бибеш йәш кеше. Белмәй. һин ни уйлап ултыраһың, аңра, иҫәр!..

Хисбулла, ҡамытын мөйөшкә күтәреп бәреп, аптырап урынынанан һикереп торҙо.

— Әйтмәгәс ни... Ай алла, ҡайҙан ғына беләйем һун, еңгә? Ни генә булыр икән һуң, еңгә?

— Ни булһын? Ул йәки ҡыҙ булыр, килбәтһеҙ! Бар, бар ҡамасаулап торма!

Баҙыян еңгә сисенеп ташлап, һыу йылытып, йүргәк-фәлән әҙерләп алыуға, Бибеш ул да тыуҙырҙы...

Әле инде Бибешкә яратып, текләп, шуларҙы тағы бер ҡат башынан кисереп ултырған Баҙыян еңгә еңел һулап:

«Әлдә генә килеп еттем дә баһа. һәләк була ине бит бала?!— тип ҡабатланы. Унын, һуңлаған борсолоуына ҡушылған кеүек, Бибеш тә йоҡо аралаш йылмайып ҡуйҙы.

Оҙаҡламай, шәп йүгереүҙән дә, көтөлмәгән ҡыуаныстан да тындары бөтөп, таһылдашып Таиба әбей менән Хисбулла ҡайтып инде. Баҙыян еңгә уларҙы, ғәҙәт буйынса:

— һөйөнсө, улығыҙ бар!—тип ҡаршы алды.

— һөйөнсөһөнә бер һарыҡ,— тине Таиба әбей.— Бер оло һарыҡ!

— Минән бер күлдәк. Сатин күлдәк, еңгә!— тине Хисбулла, ҡысҡырып, килбәтһеҙ шарҡылдап келеп.— Бая, албырғап, әйтмәй киткәнмен, еңгә!..

— Рәхмәт,— тине Баҙыян еңгә.— Улды ҡыуанып, тигеҙлек менән үҫтерергә яҙһын.

— Шулай булһын, шулай булһын. Амин.

һөйләшкән тауышҡа Бибеш уянып күҙен асты. Таиба әбей өтәләнеп килеп унын, янына ултырҙы.

— Йә, киленкәй, хәлең нисек? Ни ашарға, ни эсергә теләйһең?..— тип киленен юрған аша тыпылдатып һөйҙө.— Әйт, балам!.. Балаҡайым, тим!..

Унын тауышы бығаса бер ҡасан да булмаған рәүештә яғымлы, хәстәрле ине. Ә Бибештең аяҡ осонда баҫып торған Хисбулла ҡыгуанысынан күләргә лә, берәй һүҙ әйтергә лә белмәй бер аяғынан икенсеһенә күсеп, айыу шикелле аушаңлап тик торҙо. Унын ҡыйыуһыҙ йыуаш ҡарашлы зәңгәрһыу күҙҙәренән йәш мөлдерәй ине.

Бибешкә ул бөгөн ғүмерендә тәүге тапҡыр ошо килбәтһеҙлеге менән дә, балаларса бер ҡатлылығы, эскерһеҙлеге, бирелгәнлеге менән дә яғымлы ла, яҡын да булып китте. Эйе, ул унын улының атаһы, донъяла иң яҡын кешеһе ине хәҙер.

Бибеш үҙ күңелен солғап алған был яңы, ят тойғоға ғәжәпләнеп тә, ҡыуанып та, берсә Хисбуллаға, берсә бейеменә ҡарап, оялсан ғына йылмайып, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә ята бирҙе. Күҙҙәрендә оло бәхет — әсәлек бәхете балҡыны. Унын *аҡ* мәрмәрҙән ҡойоп эшләнгән кеүек һылыу йөҙө томһа һалҡынлығын юғалтҡас, тағы ла һейкөмлөрәк, тағы ла матурыраҡ булып китте. Таиба әбей уны бала кеүек итеп һөйә-һөйә:

— Нимә ашағың килә, килен? Ҡорот һыулап, майлап, борослап эсерәйемме?

— һурпа эскең киләме, балам?

— Баллап, майлап ҡаты сәй эсәһеңме әллә, килен?— тип бер-бер артлы һорау яуҙырып ҡына ултырҙы.

Бибеш, эйе тигәнде аңлатып, баш ҡаҡты. Ысынлап та, унын бығаса бер ҡасан да булмаған рәүештә тәмле итеп ашағығһы, татлы итеп йоҡлағыһы, келәс-шат булып йәшәгеһе килә ине.

«Ах, ниндәй матур, ниндәй һәйбәт икән дә баһа был донъя!.. Мәңге йәшәһәң ине унда!..»

Таиба әбей менән Баҙыян еңгә, Бибешкә ашарға әҙерләп, өй эсендә ары-бире йүгерҙеләр. Хисбулла урынынан ҡуҙғала алмай берсә Бибешкә, берсә унын янында тыныс ҡына йоҡлап яткан кескәй генә йылы йомарсаҡҡа текләп, уларға үҙенең ҙур, килбәтһеҙ ҡулдары менән тейергә батырсылыҡ итмәй, телһеҙ ҡалып, һаман йөҙлөк ситендә баҫып торҙо. Ә Бибеш уға тағы бер ҡат шат, бәхетле йылмайып ҡараны ла күҙҙәрең йомдо. Тик бала тыуҙырған әсә генә татып белергә на->

сип булған иҫ киткес татлы, тәрән йоҡо уны тағы үҙ ҡосағына алды.

Донъяның бөтә ғәҙелһеҙлегенә үс иткән кеүек, Бибеш һуңғы йылдарҙа көндән-көн үҫә, һылыулана, тау сейәһе шикелле бешеп өлгөрә генә барҙы. Инде хәҙер ул, нескә билле зифа һынын һығылтып, көйәнтәләп урамдан уҙған саҡта, уфтанып: «Йә, шундай ҡатын Хисбуллаға әрәм булһынсы!.. Төшенмәҫһең был алланың эштәренә. Кемгә нимә бирергә кәрәкте һис тә уйлап тормай бит, алйот!..» тип уйлап тороп ҡалыусы егеттәр ҙә бар ине инде. Кеше ҡатынына күҙ ташлау, һүҙ өндәшеү ғәйеп булһа ла, «еңгә» тигән булып, шаяртырға, Бибештең ынйылай ваҡ тештәрен күрһәтеп аҙ ғына булһа ла йылмайғанын күреп һоҡланырға ынтылыш яһап ҡараусылар ҙа юҡ түгел ине. Хатта бығаса үҙе генә ауылда бер һылыу булып өйрәнгән Сәлимә лә хәҙер уға ситтән генә көнсөлөклө ҡараш ташлап уҙа. Тыштан әйтмәһә лә, күңеленән Бибештең һылыулыҡта үҙенән уҙыуын танырға мәжбүр була ине. Тик бығаса уны әлегә бер генә нәмә һөйөндөрә ине. Бибештен, дә балаһы юҡ. Тимәк, Хисбулла ғәйепле тип иҫәпләргә була әле. Тимәк, Сәлимәгә әле бала көтөргә урын бар...» Әйҙә, минән матур булһа булһын, тик бала ғына тапмаһын»,— тип теләй ине Сәлимә. Ә Бибеш быларҙың береһен дә тойманы. Әйләнә-тирәгә лә, йылмайыулы йәки асыулы йөҙгә лә, ҡаты йәки татлы һүҙгә лә берҙәй үк һалҡынлыҡ, иғтибарһыҙлыҡ һаҡлап йәшәй бирҙе. Ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡара ҡаштары, бөгөлсәк оҙон керпектәре күләгәләгән ҡаҡса аҡ йөҙө мәрмәрҙән эшләнгән һын кеүек һалҡын, томһа ине уның. Бер кем дә керә алманы уның күңел һандығына. Ул ҡаты йоҙаҡлы, бөтә кешегә бер тигеҙ бикле булды. Хатта уны бығаса Таиба әбей ҙә ямандан-яҡшынан бер һүҙ өндәштерә алманы.

«Әйҙә, үҙенә оҡшаған, йөрөй бирһен,— тип ҡул ғына һелтәй торған булды ул да.— Тик Сәлимә килен шикелле бер саҡ аҙып ҡына китмәһен...» тип теләне. Ләкин йылдар кешене генә түгел, ҡая таштарҙы ла үҙгәртә бит. Бибеш тә йылдар үткән һайын әкренләп үҙгәрә, ғаиләгә лә, Хисбуллаға ла эйәләшә барҙы. Нисек кенә тыңлаусан, ҡурҡаҡ булыуына ҡарамаҫтан, әсәһенең ҡамсыһын үҙ елкәһенә алыу хаҡына булһа ла, һәр саҡ Бибеште яҡлап килеүе, әсәһе күрмәгәндә, хатта бында бер ир ҙә эшләмәгән өй эштәренә хәтле эшләшеп, мөмкин хәтле уның хәлен еңеләйтергә тырышып тороуы, бала кеүек бер ҡатлы, ғәҙел, тоғро холоҡло булыуы менән Хисбулла һуңғы ваҡытта Бибештең күңелендә асыуға ҡарағанда күберәк йәлләү, хатта бер тиклем ылығыуға яҡын, үҙ кеше итеп ҡарау тойғолары ла уята башлағайны. Әлбиттә, быларҙың береһе лә әле яратыу тойғоһо түгеллеген Бибеш үҙе аңламаһа ла, ир уртаһы йәшенә етеп килгән Хисбулла яҡшы белә ине. Шуға ул, бөтә көсө менән Бибештең күңелен яуларға тырышып, үҙе лә аңламаҫтан үҙгәрә, яңыра, йәшәрә барҙы һымаҡ. Ул хатта һуңғы йылдарҙа, йома йәки ғәйеттәрҙән башҡа көндө, мәсеткә лә йөрөмәй башланы. Ситек-калушын, сапанын ташлап, башҡа ирҙәр шикелле аяғына күн итек, өҫтөнә ҡара кәзәкей кейеп, билде ал билбау менән ҡыҫып быуып ебәрҙе. Хатта бер саҡ баҙарҙан, күптән түгел һалдаттан ҡайтҡан ҡустыһы Закирға оҡшатып, башына ялбыр папаха, өҫтөнә Хаммат ағаһыныҡы шикелле көнгә янып бурыл төҫкә ингән һалдат гимнастеркаһы һатып алып кейеп тә ҡайтты. Бының өсөн Таиба әбей уны саҡ ҡына тотоп тукмаманы.

— Күрмәгәндең күргеһе килә. Күргәндең ҡоҫаһы килә, тигән ошо була инде. һай, ахмаҡ!.. һыйырға септә килешәме ни?— тип тиргәне ул. Ә Бибешкә ҡыҙыҡ булды. Ул күҙҙәренән йәш сыҡҡансы көлдө. Хисбулла Бибеште көлдөрә алғаны өсөн сикһеҙ шат ине. Ул бынан һуң был гимнастерканы һис тә өҫтөнән һалмаҫ булды. Ысынлап та, папаханы ҡырын һалып, билде ҡыҫып быуып ебәргәс, ул ап-арыу иргә оҡшап китте.

Шулай итеп, килбәтһеҙ мәҙрәсә ғәҙәттәрен, суфый кейемдәрен әкренләп ташлай барған һайын ул Бибешкә теремерәк, һөйкөмлөрәк күренде. Бығаса бар кеүек тә күренмәгән Хисбуллаға ул ары-бире төбәп ҡараштырып, хатта һирәк-мирәк йылмайыштырып та ҡуйғылай башланы. Ә уның өсөн Бибештең бер йылмайыуы терелткес дарыу ине. Ул әллә низә бер Бибештең йылмайыуына ирешә алһа, үҙен ун йылға йәшәреп киткәндәй тоя, аҙналар, айҙар буйы ҡайҙа баҫҡанын белмәй йөрөй ине. Эйе, тыштан ҡарағанда буш, юҡ һымаҡ ҡына күренһә лә, күкрәгендә изге, хатта нескә хисле тип әйтерлек йөрәк йөрөтә ине Хисбулла. Шуға ул Бибештең өнһеҙ ризаһыҙлығын сикһеҙ ауыр кисерә ине. Хәҙер инде бындай тойғоларҙы ҙур бәхет тойғоһо баҫып китте. Эйе, Хисбулла донъяла иң бәхетлеләрҙең бәхетлеһе хәҙер. Уға Бибеше ул табып бирҙе. Бибеш уны ярата! Бынан да ҙур ниндәй бәхет көтөргә мөмкин уға?!

Шулай уйлап ҡыуанды Хисбулла. Ә Таиба әбей менән Баҙыян еңгә уға:

— Ни эшләп һерәйеп тораһың? Ултыр.

— Ултыр, тиҙәр, килбәтһеҙ, айыу!— тип, асыуһыҙ ғына иҫкәртеү яһай-яһай, үҙ эштәрендә булдылар. Хисбулла һаман илай-көлә ҡатынынаң аяҡ осонда баҫып торҙо.

«Ҡалай ултырып түҙмәк кәрәк?.. Юҡ, ул Бибештең аяҡ осонда мәңге шулай баҫып торорға риза... Тик Бибеш кенә һау булһын... Бибеш кенә бәхетле булһын...»



10 Заказ 733

Хисбулланың башында ҡабатланған ошондай уйҙарҙы аңлаған кеүек, Бибеш йоҡо аралаш, сабый бала шикелле, шат йылмайып ҡуя. Эйе, Бибеш тә бәхетле ине был минутта. Эй, әсәлек бәхетенә ни етә?!

Таиба әбей иҙелгән ҡоротка һалыр өсөн һары май алып инергә тип ишек алдына, келәткә сыҡҡанда, ҡапҡа янына әле генә килеп туҡтаған Хаммат менән осрашты. Ул бер атты эйәрләп менгән, ә икенсе бер эйәрле атты теҙгененән етәкләп алғайны.

— Аһа, ете төн уртаһында нимә ҡыланып былай йөрейһең?— тип аптырап та, хафаланып та киттс Таиба әбей.— Ни эшләп өйөнә ҡайтмай йөрөйһөң, тим?..

— Әсәй, Закир ҡайтманымы?— тип һорау менән яуап ҡайтарҙы Хаммат.— Һаман теге эттәр янында йөрөймө әле ул?

— Ҡайтманы шул әле.

— Мин уны хәҙер барып алып ҡайтам. Буржуй малайҙарына һатылып йөрөмәһен,— тине Хаммат, ҡырт киҫеп.— Бөгөн үк алып ҡайтам.

— Йөрөмә. Һатыбал үлтереп ҡуйыр үҙенде. Закир ни иҫәҡыл йыйып, аңды-тунды төшөнгәс, үҙе лә улар янында ҡалмаҫ. Ҡайтыр,— тине Таиба әбей.

— Юҡ, мин уны бөгөн барып тукмап алып ҡайтам,— тип, үҙ һүҙлеләнеп ныҡышты Хаммат.— Әле үҙе үк ҡайтып килмәнеме икән, тип белешергә генә килгәйнем. Бая, энерҙә, Баҙыян еңгәне һеҙгә ебәргәйнем, ни өсөндөр, килеп әйтмәне.

— Эй-й, һүҙгә албырғап әйтмәй ҙә торам. Беҙҙен улыбыҙ бар ҙа баһа! Баҙыян еңгән. ни, килгән дә кендек инәһе лә булып ҡуйған!— тине Таиба әбей, балаларса шат, яңғырауыҡлы тауышҡа күсеп.— Бибеш килен һис тә көтмәгәндә ул табып бирҙе лә баһа!

— Шулаймы ни?..— тип ҡыуанып яуапланы Хаммат.— Хисбулланын, улы булған икән. Һәйбәт... ҡотлайым, ҡот лайым. Шулай тип әйт уға, әсәй.

— Аһа, әйт тип ни, әйҙә үҙең инеп сыҡ. Төн уртаһы булһа ла, ҡыуаныстан бергәләп ултырып сәй эсәйек.

— Юҡ, әсәй. Ваҡыт юҡ, иртәгә эсербеҙ. Мин бөгөн Закирҙы елтерәтеп алып ҡайтырға тейешмен.

Хаммат шулай тине лә, атына шарт һуғып, елдереп китеп тә барҙы.

— Хаммат, улым, йөрөмә! Өйөңә ҡайт! Килен көтәлер!— тип ҡысҡырып ҡалды Таиба әбей. Унан, борсоулы көрһөнөп:—Эй балалар, балалар!..— тип һөйләнә-һөйләнә, келәткә китте.— Ни менән генә бөтә инде был хәлдәр? Һай заманалар, бигерәк ҙурайып, буталсыҡ булып китте шул. Кем ҡайҙа барырға, ни эшләргә белмәй шул...



III

Никита менән Байгилде ағай, волость комитетына барып, Тимербайҙы туҡмаған Илсеғол байҙарына сара күреүҙе, Собхан старшина, Шымбай каштан, Әхмәтша ҡараҡ кеүектәрҙе ҡулға алыуҙы талап итеп йөрөнәләр ҙә, бер ни ҙә барып сыҡманы. Комитет председателе Феропонт Хитров уларҙын. Илсеғол байҙарының йыртҡыслыҡтары тураһында ярһыулы нәфрәт менән һөйләгән һүҙҙәрен арлы-бирле генә тыңланы ла:

— Беҙ башҡорттарҙың эштәренә әлегә ҡыҫылырға теләмәйбеҙ. Уларҙың ырыу-ара үҙ закондары бар. Ә революцияның унан мөһимерәк эштәре етерлек. Беҙгә ниндәйҙер башҡорттарҙың үҙ-ара һуғышын тугел, ә немец менән һуғышты уңышлы хәл итергә кәрәк. Ил, Россия ҡурҡыныста. Немец емереп килә. Етмәһә, большевиктар һалдаттарҙы һуғышҡа ҡаршы отҡоп, беҙҙең фронтты ҡаҡшата. Әсәбеҙ Россияны немецҡа һатырға әҙерләнәләр. Һеҙ, ир кеше булһағыҙ, беҙгә ниндәйҙер Собхандарҙы түгел, ә фронтты ташлап, ҡасып ҡайтҡан дезертирҙарҙы тотоп, ҡайтанан фронтка оҙатырға ярҙам итегеҙ!— тип, оҙон-оҙаҡ нотоҡ уҡырға кереште. Унын кем тирмәненә һыу ҡойоуы күптән асыҡ ине. Никита менән Байгилде ағай уға ҡул һелтәп кенә сығып киттеләр. Бына инде ул көндәргә йылдан ашыу ваҡыт үтте. Ләкин Собхан старшина ла, урядник Алексей ҙа боронғоса тып-тыныс йәшәп ята. Революцияның тәүге көндәрендә бер тиклем шикләнеп, шымыбыраҡ торһалар ҙа, волость һаман үҙ ҡулдарында ҡалғас, яңынан терелеп, тиреҫ ҡорто кеүек ҡайнаша башланылар. Сергей Хитров элеккегә ҡарағанда ла ҡотороноборак игвн менән һатыу итергә кереште. Һатыбал, Хөснөлхаҡтар Ташһарайҙа отряд йыйнап яталар. Үҙҙәренә ҡаршы кешеләр менән ҡырҡа бәрелешкә әҙерләнәләр. Һуңғы көндәрҙә:

«Инглиздәр, французлар, японлар бергәләшеп совет власын бөтөрөргә булғандар икән. Чехословактар баш күтәргән икән, Иҙел, Яйыҡ буйҙары казактар ҡулына күскән, имеш» тигән кеүек шомло һүҙҙәр таралды. Байҙар, иҫке донъяның кире ҡайтаһына ышанып, тағы ҡуҡырайышып йөрөй башланы. Өйөндә ятып йоҡларға ҡурҡҡан, аптыраған, алданған "Р?әр, егеттәр берәм-берәм Ташһарайға, һатыбал отрядына ағыла башланы. Ошо ағымға әле күптән түгел генә һуғыштан ҡайҡкан Закир ҙа эйәрҙе.

— Ниңә һәр көн үлем көтөп өйҙә ятырға? Лучше һуғы-

10*

шып үлһән,— тине лә, атҡа атланып, Ташһарайға йүнәлде.

Ә Федька Рябой фронттан урлап алып ҡайтҡан мылтыҡ-ҡылыстар менән ҡустыларын, кейәүҙәрен, еҙнәләрен баи?ган-айаҡ ҡоралландырып, төнгө енәйәтен тағы ла ҡотороноп дауам итте.

Бер көндө һатыбал, тамам батырайып, Федька Рябойҙың ошо яуызлығын большевиктарға, советҡа япһарып, Илсеғолдо тотош үҙ яғына ауҙарырға ниәтләп ҡайтып килде.

Уның теге ваҡытта Тимербайҙы тукмағаны бирле ауылға ҡайтып күренергә баҙнат иткәне юк ине. Әле инде, ҡайтыуына түгел, урамға, Усман бай йорто алдында яткан ҡарағай бүрәнә өҫтөнә йыйылған халыҡ янына барып, уларҙы үҙенең отрядына яҙылырға димләргә лә тотондо.

— Беҙ милләт өсөн көрәшәбеҙ. Кем үҙ милләтен ярата — беҙгә ҡушыла.

Бүрәнә өҫтөндә, күпкән ҡорһағын ҡосаҡлап, Собхан старшина ла ултыра. Шымбай каштан, Ғаббас мулла, Әхмәтша ҡараҡтар ҙа бар. Аҡтар етеп килеү шатлығы уларҙың төҫтәренә, күҙҙәренә яҙылған. Улар һатыбалдын һүҙен:

— Эйе, шулай, бик дөрөҫ. Бик хуп!— тип хуплап ултыралар. һатыбал унын һайын ҡуҡырайып китә.

— Беҙ, башҡорттар, бөтәбеҙ бер туған. Беҙҙә бай ҙа, ярлы ла юк. Беҙ бөтәбеҙ бер тиң, беҙгә берҙәм булырға кәрәк. Юғиһә беҙ бөтәбеҙ!..

— Тукта! Тынып тор!—тип унын һүҙен бүлә Байгилде ағай.

— һинә кем контр һүҙ һөйләп йөрөргә рөхсәт итте әле?

Улар, Тимербай, Хаммат, Хәлим ағай бергәләп, һатыбал артынса бүрәнә янына йыйылып килгәйнеләр.

— Дөрөҫ! Долой контрҙы!

— Ай-һай!.. Бай ҙа, ярлы ла юк, имеш!.. һеҙҙең менән мин бер буламмы инде былай булғас?—тип мыҫҡыллы көлә Хәлим ағай.— Мин һеҙгә ей эшләйем, ҡатыным аш-һыу бешерә, улым, һатыбал, һинең менән бер йәшлек Әхмәтем, һуғышта башын һалды, ә һеҙ? Ә һин?.. Шулай булғас, как же, беҙ бер тиңдәр! Тиң булмаған ҡайҙа ти ул?!

— Нисек оҫта тәтелдәргә өйрәнгән был һатыбал!— ти Тимербай.— Кемдәрҙе алдарға килгән?.. Кем һинә ышана тип беләһең? Яҡшылыҡ менән үксәнде күтәр. Юҡһа...

Тукмалыуҙан һуң артыҡ ябыҡ, йонсоу күренһә лә, айырата асыҡ янып торған шоморт ҡара күҙҙәренен, асыу һәм нәфрәт сәсеп, Тимербай һатыбалға яҡын уҡ килеп баҫа. Унын. бер яғында баһадир кәүҙәле Хаммат, икенсе яғында йоҙроҡтарын ҡаты йомарлап Байгилде, Хәлим ағайҙар тора. Байҙар яғы ла аяҡ үрә баҫа. Сход ике төркөмгә бүленә.



— Ишетәһеңме,— ти Тимербай,— ишетәһеңме, һатлыҡ йән! Бүре бер ҡасан да һарыҡҡа дуҫ була алмай.

— Беҙҙең волость һаман байҙар ҡалдығы ҡулында,— ти Хаммат.— Шул арҡала ошоға хәтле һатыбалдың һатлыҡ отряды ла, Федька Рябойҙың бандиттары ла йәшәп килә...

— Шуға беҙҙең волоста, Совет хөкүмәтенең ер тураһындағы декреты һаман тормошҡа ашырылмай,— тип күтәреп алды Байгилде ағай.— Бына Собхан старшиналар һаман йөҙәр дисәтинә ер иметь итәсәк! Был дөрөҫмө? Түгел!

— Феропонт Хитров байҙарҙың бындағы бөтә этлеген үҙәккә белдермәй баҫтырып ята,— тип Тимербай тағы һүҙгә ҡатнашты.— Беҙ яҙған хаттарҙы ла үткәрмәй. Күптән ҡыуырға кәрәк уны волостан.

— Дөрөҫ!

— Етер!

— Эй, йолҡоштар, ҡотороп ҡалығыҙ! Аҙаҡҡы көнөгөҙ етә!

— Буржуйҙарға үлем!— тип, төрлө тауыш менән шаулай сход. Тимербай күҙенә ҡан тулып айбарланып торған һатыбалға табан атлай.

— Тотоп үҙәккә оҙатырға кәрәк уны! Юҡһа халыҡты алдап һәләкәткә алып барасаҡ!

— Тоторға!

— Тукмарға!..

Ярлылар яғы дәррәү һатыбалға ташлана.

— Тейеп ҡара, большевик эте! Мә, ҡаҙал!

Бүрәнә өҫтөнән һикереп тешөп, ҡасып барған һатыбал, үҙ артынан етеп барған Хамматҡа төбәп, револьверҙан атып ебәрә. Пуля, бүрәнә өҫтөндә кирелеп баҫып, кеше ынғайына:

— Буржуй! Контр! Долой!—тип, ҡулдарын килбәтһеҙ болғап, сходта ишеткән һүҙҙәрҙе аңһыҙ рәүештә ҡабатлап торған тиле Ульябайҙың ҡарынын ярып үтә. Ульябай епшек ҡар өҫтөнә ҡапланып төшә. Ә һатыбал, ата-ата сигенеп, үҙҙәренен. ҡапҡаһы алдында бәйле торған атына һикереп менә лә хәҙер-хәҙер ҡуҙғалып китергә яткан яҙғы боҙ өҫтөнән аръяҡҡа сабып сыға. Шулай итеп ул тағы ҡулдан ысҡына.

Ярлылар комитетының ғәҙәттәгесә Өммөгөлсөм өйөндә барған бөгөнге йыйылышы тап бына ошо хәлдәргә арналғайны.

— һатыбал, Федька Рябойҙарға ауылда Совет власын ҡаҡшатырға юл ҡуймаҫҡа. Уларға ҡаршы ҡырҡа көрәш башларға!

Ошо маҡсат өсөн кестәрҙе бергә туплап, берҙәм хәрәкәт итеү теләге менән был йыйылышҡа Ивановка ярлылар комитетының етәксеһе Никита ла килгәйне.

Йыйылыш, байҙар һәм уларҙың ялсылары ҡулында булған врлость башҡарма комитетын ҡыуыу, ауылда Совет власын нығытыу өсөн хәҙер урындағы ғына көстөң етмәүен билдәләп, үҙәктән ашығыс ярҙам, ҡорал һорарға ҡарар итте. Бығаса үҙәккә был хаҡта белдереп яҙылған ҡағыҙҙарға бер төрлө лә яуап булмауын иҫкә алып, Никита унда барып ҡайтырға булды. Ошо уҡ йыйылышта фронтовиктарҙан һәм ауыл ярлыларынан контрреволюцияға ҡаршы көрәш өсөн боевой дружина төҙөргә ҡарар ителде. Дружинаның командиры итеп Октябрь революцияһын Петроград урамдарында, баррикадала ҡаршылаған Хаммат, комиссары итеп Тимербай билдәләнде. Был дружина Федька Рябойҙың бандиттарына һәм һатыбалдың милләтсе отрядына ҡаршы ла бөгөндән аяуһыҙ көрәш башларға тейешле булды. Хәл бик киҫкенләшкән саҡ булғас, Никита ошо йыйылыштан һуң уҡ ҡалаға йүнәлде. Ул, ҡар иреп бөтөп, юл ҡалмаҫ элек, барып етеп, унан ярҙамға отряд һәм ҡорал алып ҡайтырға тейеш ине.

Ләкин дружинасыларға Никита ҡайтҡанды көтөп ятырға мөмкин түгел ине хәҙер. Уларға һис кисекмәҫтән ҡорал кәрәк. Быны һатыбал отрядының ҡорал складын баҫып алыу юлы менән генә табырға мөмкин ине.

— Ә ул ҡоралдың ҡайҙа, нисек һаҡланыуы беҙгә билдәле,— тип һөйләне Тимербай был кисте.— Хәҙер уны нисек ҡулға төшөрөү тураһында ғына һүҙ бара...

— Эйе, яҙ бит, яҙ... Оло Эйек боҙо ҡуҙғалырға тора. Ашығырға кәрәк.

— Яҡуп күперенә көн ҡалһа, ҡыйын булыр.

— Боҙ бит бөгөн-иртән китергә тора.

— Шуға ашығырға кәрәк тә.

— Ашығырға тигән һүҙ аҙ. Хәҙерҙән, бөгөн төндән дә ҡалмай...— тип һүҙҙе тамамланы Тимербай.— һеҙ шуға ризамы, иптәштәр?.. Батырлыҡ та, йылғырлыҡта етерме шуға? Аңлағыҙ, дошман беҙгә ҡарағанда һан яғынан да, көс яғынан да өҫтөн тора...

— Беҙҙә тәүәккәллек көсле. Тәүәккәлләгән таш ярған тиҙәр бит,— тине Байгилде. ағай.

— Дөрөҫ. Эй молодецһың да инде, Байгилде ағай,— тип, ғүмер буйы тәүәккәллеккә, батырлыҡҡа таянып йәшәгән Хаммат бала шикелле ҡыуанып китте.

— Улай булғас, шулай хәл иттек,— тине Тимербай. Аҡһауын белдертмәҫкә тырышҡан һымаҡ, еңел баҫып урынынан торҙо.— Киттек!..

— Киттек.

Улар йыйылыштан һуң, өйҙәренә ҡайтып, ғаиләләренә белдереп тормай, шунда уҡ юлға сыҡтылар.

Байгилде ағай, Тимербай, Хамматтар һыбай алдан төштө.



Хәлим ағай менән Байрас ат тотоп ике сана менән арттан эйәрҙе. Дружинасыларҙың ҡулында Хаммат фронттан алып ҡайтҡан берҙән-бер мылтыҡтан башҡа ҡорал юҡ ине.

Сәлимә урамға сығып, Өммөгөлсөмдәрҙең өйөндә шәм һүнгәнлеген күргән саҡта, улар Сәләм ауылына етеп баралар ине инде.

Сәләм ауылында улар Ташһарайҙың артында, ҡайынлыҡ араһында туҡтанылар. Унан Хаммат, Байгилде, Тимербай тауыш-тынһыҙ ғына Ташһарайға киттеләр. Хәлим ағай менән Байрас сана янында ҡалды.

Байрасҡа был серле төн яман ҡурҡыныс та, үтә ҡыҙыҡ та тойолдо.

«Мылтыҡтарҙы тиҙерәк кенә алып килһендәр ине,— тип ашҡынып теләп ултырҙы ул.— Атайым мине лә атырға өйрәтер ине. Мин дә буржуйҙарға ҡаршы һуғышыр инем...»

«Имен-иҫән генә әйләнеп килһендәр ине инде», тип теләне Хәлим ағай.

Тен айһыҙ, ҡараңғы. Ялан буйлап яҙғы ҡырҡыу ел йүгерә. Бөрөгә уҙған ҡайындарҙы, ҡорғаҡһыған ҡоймаларҙы ҡаҡҡылап-һуҡҡылап уята. Хаммат кисә төндә үҙе разведкаға килгән саҡта, ҡаҙауын һурып әҙерләп киткән ике таҡта янына килеп сүкәйҙе.

— Ошонда. Ана, ишеге өңшәйеп торған землянка. Элек унда училищеның йәшелсә баҙы булған. Хәҙер һатыбалдың ҡорал склады.

Байгилде ағай менән Тимербай, тынды ла һирәгерәк алырға тырышып, ҡойма ярығы аша эскә төбәләләр.

Землянканың шомло өңөрәйеп торған ишеге төбөндә ике һаҡсы тора. Улар әкрен генә мөңөрәшеп ниҙер һөйләшәләр.

«Күренеп тора: һаҡта тороп өйрәнмәгәндәр... Ата-әсәләрен йәки кәләштәрен һағынып һөйләшәләрҙер, бахырҙар... Бына хәҙер шуларҙы бәлки үлтерергә лә тура киләсәк бит. Бай малайҙары булһа бер хәл. Алданған ярлы-ялпы булыуҙары ла бик мөмкин бит...» тип уйлай Байгилде ағай. Үҙе, керпек тә ҡаҡмай, ҡойма ярығы аша уларҙы күҙәтә.

Бына һаҡсыныц береһе йәтешләнеп ергә, землянка ишеге төбөнә ултырҙы. Икенсеһе лә уның янына сүкәйҙе. Тәмәке төрәләр. Береһе хатта мылтығын һөйәп тә ҡуйҙы.

«Эй ғәмһеҙҙәр! Күренеп тора шул: ысын һалдат түгелдәр...»

— Ваҡыт...— тип шыбырлай Тимербай.— Тәүәккәлләнек.

Хаммат ҡойманың ике таҡтаһын тауыш-тынһыҙ ғына алып ситкә һөйәй. Улар ерҙән күләгә шикелле шыуып, эскә үтәләр.

Ҡайҙалыр бик яҡында ғына шыңғырлатып ат кешнәп

ебәрә. Төн уртаһы еткәнде белдереп, йоҡоло әтәс ҡысҡыра. Яҙғы ел төнгөлөккә туңаҙыған ҡар битен әлдән-әле һыйпап үтә. һаҡсылар, тәмәке тартыуҙан туктап, бер генә минутҡа йоҡомһорап, тынып ҡалалар. һәм ошо минут дружинасыларҙың уңышын хәл итә. Улар һуғыштағыса ҡыйыу һәм тәүәккәл эш иттеләр. Күҙ асып йомған арала, ике һаҡсы ла, ауыҙҙарына бейәләй тығылып, бәйләп ташланды. Складҡа юл асылды. Бында бер дружинаға ғына түгел, тотош бер отрядҡа етерлек мылтыҡ, ҡылыс булып сыҡты. Байҙар отрядының етди рәуештә һуғышҡа әҙерләнгәне асыҡ ине.

Күп тә үтмәй, ауыр йөк тейәлгән ике сана шағыр-шоғор һыҙғырып юлға сығырға әҙерләнде. Байгилде ағай менән Тимербай бәйләп ташланған һаҡсыларҙың мылтыҡтарын да үҙ елкәләренә аҫып алдылар.

Ошо ваҡыт һаҡсыларҙын, береће, тырмаша торғас, ауыҙына тығылған ҙур бейәләйҙе теле менән этәреп төшөрҙө лә:

— Байгилде ағай!..— тип шыбырлап өндәште:

Байгилде менән Хаммат, әгәр ҡысҡыра ҡалһа, мылтыҡ приклады менән башын йәнсей һуғырға әҙерләнеп, икеһе бер юлы һаҡсыға эйелде.

— Ни бар?!

һаҡсы ҡурҡышынан көскә тауышын сығарып шыбырланы.

— Унда... Баҙ артында... һалам аҫтындл .. Бүләмит тә бар...

Хаммат Байгилде ағайҙың беләгенән ҡыҫып:

— һин шәйләп тор. һөрән һалмаһын!—тине лә һеләүһен тиҙлеге менән һаҡсы әйткән урынға йүгерҙе. һәм күп тә үтмәй, пулеметтты һөйрәп сана янына үтте.

— Максимка!.. Майлап урап һалып ҡуйғандар... Әп-әҙер!

Байгилде ағай үҙҙәренә бындай ҙур ҡорал бүләк иткән егетҡә эйелде.

— һин, мырҙам, ҡайҙан?

— Иҫәнбәттән! . •• • .

— Кем улы?

— Сыуаҡай әбей улы.

— һай ахмаҡ, Сәхиулламы ни?! һин ни эшләп бында?

— Ҡормош байҙың улы ла, Әхмәҙулла мулланың улы ла бында бит.

—Булһа ни. һинең уларға ниндәй бәйләнешең бар?

— Улар ни халыҡ өсөн көрәшәбеҙ тиҙәр бит. Халыҡ өсөн бай малайҙары көрәшкәндә беҙгә ни эшләп ятырға?

Сәхиулла үҙ янында хәрәкәтһеҙ ятҡан бәйле һаҡсыға күрһәтте.

— Бына ул да беҙҙең ауылдыҡы. Көтөүсе Сәғит...



___һай ахмаҡтарН һеҙ Совет яҡлы түгел, ә байҙар яҡлы булып Советҡа ҡаршы көрәшергә сыҡҡанһығыҙ ҙа баһа!..

Байгилде Сәхиулланың ҡул-аяғын бәйҙән ысҡындыра башланы.

— Ҡара, мырҙам, әгәр тауыш сығара торған булһаң, ошо урында юҡ итермен. Шулай кәрәк булыр. Сыуаҡай еңгә улы тип тормам.

— Ни эшләп ҡысҡырайым ти, ағай. һин ҡайһы яҡта, мин шул яҡта инде. Әгәр белгән булһам...

— Хәҙер бел инде... Ауылға ҡайтып, һатыбал отрядының ^байҙар мәнфәғәтен күҙәтеүсе икәнен аңлат. Ярлылар уға •ҡаршы көрәшкә сыҡһындар...

— Шаһиморат ағай ҙа шулай тигәйне лә...

Байгилде ике һаҡсыны ла бәйҙән ысҡындырҙы.

Ул арала пулеметты санаға һалып килеп еткән Хаммат Байгилденең был эшен хупланы.

— Дөрөҫ. Шулай кәрәк. Большевиктар аңһыҙлыҡ арҡаһында яңылыш юлға баҫҡан кешеләрҙе үлтермәйҙәр.

Байгилде Сәхиулла менән Сәғиттең икеһен ике санаға ултыртты. Үҙҙәре Тимербай менән арттан һыбай эйәрҙеләр.

— Әйҙә, беҙҙең, ауылға хәтле ултырып барығыҙ. Унан ары нисек тә ҡайтып етерһегеҙ.

Хаммат:

— һеҙ ҡайта тороғоҙ. Хәҙер артығыҙҙан ҡыуып етермен, тип тороп ҡалды. Байгилде ағай менән Тимербай унын был һаҡһыҙ эшен нисек кенә хупламаһалар ҙа, уны алдына алған уйынан кире күндерә алманылар.

— Беҙгә ҡорал ғына түгел, кеше лә кәрәк. Мин Закир өсөн дә һатыбал менән көрмәкләшергә тейешмен,— тип нығышты ул.— Ә һеҙ барығыҙ. Мылтыҡтарҙы иҫән-һау алып ҡайтып етегеҙ.

Унан икенсе санала ат тотоп ултырған улын — Байрасты ҡосаҡлап арҡаһынан тыпылдатып һөйөп:

— Минең алмашсым — Байрасым бар. Ул атаһы тапҡан ҡоралды ҡулынан ысҡындырмаҫ. Иҫән-һау тейешле ергә алып барып еткерер. Шулай бит, бөркетөм! — тине лә ҡуйы ҡараңғылыҡ эсенә инеп юғалды.

«Атай, ҡалма. Мин ҡурҡам, бергә ҡайтайыҡ»,— тип әйтһеһе, атаһының муйынына һарылып туктатҡыһы килде Байрастың. Ләкин атаһы үҙенә тиң күреп, ошондай ҡурҡыныс эштәргә бергә алып йөрөткән егет кешегә ундай йомшаҡлыҡ килешәме һуң? Ул тешләнеп түҙҙе, сер бирмәне. Ә ниндәйҙер билдәһеҙ ҡурҡынысты тойоп, кин, асылған күҙҙәренән тыйылмай ағып төшкән эре йәш тамсыларын ҡараңғыла бер кем дә күрмәне.

Хаммат кире боролоп Ташһарайға барып ингәндә, уның күп бүлмәһендә ут юҡ ине. Тик училище ваҡытында спорт бүлмәһе хеҙмәтен үтәгән ҙур залда ғына ут яна, унан кемдендер ҡыҙып-ҡыҙып телмәр һөйләгән тауышы ишетелә. Ишек төбөндә торған йәш кенә һаҡсы Хамматты — иҫке һоро шинелле, күн итекле һалдатты — шикләнмәй ҙә эскә үткәрҙе. Хаммат, аҡрын-һалмаҡ ҡына баҫып, залға уҙҙы, ин, артҡы ширлеккә барып ултырҙы. Сәхнәлә ҡыҙып-ҡыҙып ниҙер һөйләп маташҡан ораторға текләп тынып ҡалған һалдаттарҙан уға иғтибар итеүсе лә, уны таныусы ла булманы. Ләкин Хаммат бөтәһен дә күрҙе. Бына сәхнәлә, йәшел буҫтау ябылған оҙон ағас өҫтәл артында, һатыбал, Хөснөлхаҡ, Феропонт Хитров, урядник Алексейҙың дьяконға оҡшатып кейенеп алған улы Митрофан, тағы шундай бер нисә кеше ултыра. Улар, бер-бер артлы тороп, һалдаттарға өгөт-нәсихәт һөйләй. һәр бер һүҙ большевиктарҙың йыртҡыслығы — Рәсәйҙе немецҡа һатыуҙары, бында халыҡты үлтереү, ҡырыуҙары, илде, динде, мөлкәтте һаҡлау өсөн батыр егеттәрҙең көрәшкә сығырға тейешлектәре хаҡында барҙы. Англия, Франция, Америка илдәренең дә Рәсәй халҡын үлеп-ҡырылып бөтөүҙән ҡотҡарып ҡалыу өсөн көрәшкә сығырға әҙер тороуҙары, батыр рус отрядтарының шәп эштәре башҡорттарҙын, да был көрәштә, үҙҙәренең ҡыйыу, һуғышсан халыҡ икәнлектәрен күрһәтергә тейешлектәре хаҡында һөйләнде. һалдаттар, был һүҙҙәргә текләп, ауыр, хәүефле уйҙарға сумып, өнһөҙ-һүҙһеҙ ултырыу менән яуап бирҙеләр. Уларҙын, күбеһенен башында:

«Ҡайҙа һуң дөрөҫлөк? Кемгә ышанырға хәҙер?»— тигән аҙаплы һорау әйләнә ине.

Бына ораторҙар һөйләп бөттө. Залда тәрән тынлыҡ урынлашты. Председателлек итеүсе Феропонт Хитров:

— Кем һөйләргә теләй?— тип залға ҡарап һорау бирҙе.— һейләгеҙ. Ил өсөн, халыҡ өсөн изге көрәшкә һеҙ әҙерме, юҡмы, әйтегеҙ. Беҙ үҙәктән алыҫ, беҙҙе бер ярҙамсыһыҙ яҙмыш ҡосағына- ырғытып ҡуйҙылар. Беҙгә үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡларға, бының өсөн бер һөңгө аҫтына, үҙебеҙҙең батыр егеттәребеҙ янына йыйналырға кәрәк. Улар беҙҙе нисек яҡларға белерҙәр. Беҙ уларға ышанабыҙ. Хаҡмы һүҙем? Йә, әйтегеҙ? Кем һөйләй?..

— Мин һейләргә теләйем,— тип ҡул күтәрҙе Хаммат. Феропонт та, һатыбал да аптырап, хатта ҡаушап ҡалдылар.

«Хаммат!.. Большевик! Ул бында ҡайҙан, ҡасан килеп ингән?»



феропонт, үҙен нисек кәрәк шулай тынысландырып, ҡаушағанын һиҙҙермәҫкә тырышты:

— Мин һалдаттарға һүҙ бирәм. һиңә түгел, һеҙ былай ҙа күп һөйләйһегеҙ. Халыҡты тыңлап ҡарайыҡ.

— Ә мин талап итәм,— тип һерәнләне Хаммат.

— һөйләһен! һүҙ бирегеҙ!— тип шауланы зал.

Дәү, мөһәбәт көүҙәһе менән тәпәш залды тотош тултырып, күкрәк киреп, Хаммат сәхнәгә менеп баҫты. Бер аҙ ваҡыт залға һүҙһеҙ текләп торҙо. Уның ҡыйыу ҡараштарынан атылған көслө асыу һәм алданған халыҡтарға ҡарата булған сикһеҙ йәлләү тойғоһо залдағыларҙың йөрәктәренә үтеп инде. һалдаттар урындарында тынысһыҙ ҡыбырлашып ҡуйҙылар.

— Иптәштәр!—тип башланы Хаммат һүҙен.— Иптәштәр, мин был әфәнделәр шикелле оратор түгел, мин һөйләп өйрәнмәгәнмен. Мин һалдат. Мин крәҫтиән. Мин һеҙҙең иптәшегеҙ, һеҙгә шуны ғына әйтәм: Совет хөкүмәте — хеҙмәтсән халыҡ хөкүмәте — йәшәй, йәшәйәсәк. Бына был Феропонттар, һатыбалдар, Метрофандар, Хөснөлхаҡтар бөтәсәк, уларға алданмағыҙ. Таралығыҙ. Өйҙәрегеҙгә ҡайтығыҙ. Йәки ҡыҙыл ғәскәр сафына яҙылығыҙ. Юҡһа бында тиҙҙән үҙәктән ҡыҙыл ғәскәр киләсәк. Феропонттар, һатыбалдар менән бергә һеҙҙе лә туҙҙырасаҡ! Ҡараҡ бесәй шикелле төндә килеп ҡоралһыҙ, ярҙамсыһыҙ кешеләрҙе атып үлтереп йөрөүселәр улар, большевиктар түгел, ә ошо уҡ ултырған кешеләрҙең эше. Улар халыҡты юрый советҡа ҡаршы аяҡландырыр өсөн эшләйҙәр быны!.. Аңлағыҙ!

— Долой!

— Етер!

— һөйләһен!

— Тотоғоҙ! Ҡулға алығыҙ!

— Теймәгеҙ!—тип ҡотороноп шауланы зал, ә Хаммат был шау-шыуҙы еңеп, ғәжәп көслө тауыш менән:

— Закир! Әйҙә, ҡайттыҡ!— тип ҡысҡырып ебәрҙе. Яғандан һөйрәкләп алып ҡайтҡанды көтмә.

Алғы рәттә үк ултырған Закир, тыңлаулы бала шикелле, һикереп торҙо. Хаммат әкрен-һалмаҡ баҫып сәхнәнән төштө. Унан тағы бер ҡат:

— Бында — байҙар, контрҙар отрядында ярлы уландарына урын юҡ. Таралығыҙ! Ҡыҙыл ғәскәр сафына яҙылығыҙ! — тип ҡысҡырҙы ла, башын ғорур күтәреп, ишеккә табан атланы. Закир һәм тағы бер нисә һалдат уның артынан эйәрҙе.

— Тотоғоҙ! Ебәрмәгеҙ! Атығыҙ!— тип сәрелдәне һатыбал. Ләкин һалдаттарҙан бер генә кеше лә Хамматтарҙың юлын бүлмәне. Улар һуғышҡа хәтле, бәйгеләрҙә көрәшеп,

бетә тирә-яҡ батырҙарын еңеп бөткән Хамматты беләләр. Беләләр генә түгел, уның менән ғорурланырға, уны хөрмәтләргә өйрәнгәндәр. Күрәшсе — батыр бында иң ҙур хөрмәткә һәм яратыуға лайыҡ кеше. Шулай булғас, бында уға кем ҡыйып ҡул күтәрһен?.. Уға ҡул күтәргән кешегә халыҡ ләғнәте ятасағын белмәйме ни улар?..

Шулай итеп, Хамматҡа ҡаршы күтәрелеп торорҙай кеше табылманы. Хатта халыҡтың был ғәҙәтен белгән һатыбал да, һалдаттарҙы үҙенә ҡаршы аяҡландырыуҙан ҡурҡып, бында асыҡтан-асыҡ уға ташланырға баҙнат итмәне. Ә ҡасан улар был кетәлмәгән ҡыйыулыҡ алдында ҡаушап та, юғалып та ҡалған һалдаттарын тәртипкә килтереп ҡыуа сыҡ^ ҡанда, Хаммат менән Закир елә-саба Илсеғолға етеп баралар ине инде.

Юл ыңғайында Закир бында килгәс тә кемдәр араһына эләгеүен яҡшы аңлауын, үҙ урыны большевиктар яғында булыуына төшөнөүен һөйләне.

— Улай булғас, нимә ҡарап өс-дүрт көн буйы йөрөнең?— тип асыуланды Хаммат.— Ағайындың һинең арттан йөрөүҙән башҡа эше юҡ, тип белдеңме ни?

— Мин уларҙың мылтыҡ-ҡылыстары ҡайҙа һаҡлана икән, уларҙы нисек, ҡасан баҫып алырға булыр икән, тип белергә йөрөнөм,— тине Закир.

— Белдеңме һуң?—тип, мыйыҡ аҫтынан мут ҡына йылмайып көлөп ҡуйҙы Хаммат.— Беҙҙең дружинаға һис кисекмәҫтән ҡорал кәрәк бит.

— Белдем.

— Ҡайҙа?

— Баҙҙа... Тик унда һаҡсылар тора...

— Ә, шулаймы ни?—Хаммат тағы кинәнеп көлдө.

Күренеп тора. Ул үҙҙәренең бөгөнгө эштәренән ғәйәт риза ине.

— Улай булғас, давай, юл башла!— тине ул, тағы ла күңеллерәк йәнләнеп.— Ул ҡорал беҙҙеке булырға тейеш.

— Ярай, пожалуйста.

— Ҡасан?

— Иртән. Таң алдында уҡ. Пожалуйста.

Хаммат шарҡылдапкөлөп ҡустыһының арҡаһынан дуҫ•ҫарса ҡағып алды.

— Ысынмы, мырҙа?

— Ысын. Тик ҡыйыу егеттәрең генә булһын.

— Ҡорал да бар. Егеттәр ҙә бар, еңәбеҙ, мырҙа!..

— Еңәбеҙ.

Улар,аттарын тағы ла күңеллерәк елдереп, ауылға барып инделәр.



## IV

Хаммат Сәлимәне көслө ихтыярлы, үҙ-үҙенә ныҡ ышанған, донъяның, ыбыр-сыбыр ваҡлыҡтарынан юғары торған, ғәҙел, тоғро йөрәкле ир һөйөүе менән һәйҙө. Уньщ Сәлимәгә булған ҡайнар мөхәббәтен йылдар ҙа, фронт, ут-һыу шауҡымдары ла ҡаҡшата алманы. Ул үҙенең ғүмер юлында Сәлимәне осра-ғыуы менән бәхетле. Был бәхеткә ул хатта уй менән дә кер төшөрмәй һаҡлай ине. Дөрөҫ, ауыр һуғыш йылдары уға, ирмен тигән кешелә, ҡатын-ҡыҙ мөхәббәтенән дә мөҡәддәсерәк икенсе бер бөйөк тойғо — Тыуған илгә, иҙелгән халыҡҡа ҡарата булған ҡайнар һейөү тойғоһо ла йәшәргә тейешлеген, халыҡ бәхете өсөн көрәшеп йәшәүҙән дә оло бәхет юҡлығын ныҡ ҡына төшөндөрҙө. Шуға ул Февраль, Октябрь көндәрендә Петроградта, эшсе халыҡ менән бер сафта тороп, иҙеүселәргә ҡаршы баһадирҙарса көрәште. Шуға ул ауылға ҡайтып төшкәндең иртәгеһенә үк, Никита, Тимербай, Байгилделәр менән бер сафҡа баҫып, ғәҙел көрәшкә тотондо. Ауылда әле көрәш бик ҡатмарлы, көсөргәнешле. Ул әлегә көрәш тәжрибәһе бик үк ныҡ булмаған Хамматтарҙан, Тимербайҙарҙан күп көс, ғәҙәттән тыш ныҡышмалылыҡ талап итә. Уларҙың бөтә ваҡытын ғына түгел, кәрәк икән йәнен-тәнен һорай. Әлбиттә, ошо арҡала, күп ваҡыт уға һейгән Сәлимәһенә иғтибар итергә, элеккесә ҡанмаҫ иркәлек менән солғап алырға ваҡыт та аҙ ҡала. Ә быларҙын, бөтәһен дә Сәлимә үҙенсә аңлай. Унынса Хамматтың һөйөүе һыуына бара. Уны элеккесә яратмай. Ул Өммөгелсөме менән мәшғүл хәҙер. Ә Хаммат өсөн Өммөгөлсем күптән инде аҡыллы, ябай ҡатын, һәйбәт балалар тәрбиәләп үҫтереүсе, хөрмәткә лайыҡлы, эшсән, баҫалҡы әсәнән башҡа бер кем дә түгел. Дөрөҫ, Өммөгөлсөм Хамматтан һуң иргә барманы. Хатта арыу ғына кешеләрҙән килгән яусыларҙы ла кире ҡаҡты.

— Уңмаған юлды ҡыума тигәндәр. Иргә барып бер тапҡыр уңмағас, икенсе тапкыр барып торорға ла теләмәйем,— тип кенә яуап бирҙе. Тегеләй-былай ҙа йөрөмәне. Улы менән ҡыҙын һәйбәт, эшлекле итеп үҫтерҙе. Кем белә, уның күңелендә бәлки Хамматтың ҡасан да булһа балалары янына әйләнеп ҡайтыуына ышаныс та, емөт тә һатҫланып киләлер. Ошо емөт бәлки уға йәшәүгә, эшләүгә көс тә бирәлер. Ләкин ул бер ҡасан да үҙенең был өметөн Хамматҡа түгел, хат-ᵀа үҙенең иң яҡын, ҡайғылаш дуҫтарына ла әйтмәне. Балаларында ла Хаммат менән Сәлимәгә үслек, дошманлыҡ тәрбиәләргә тырышманы. Был хаҡта һүҙ аҫкан кешеләрҙе:

— Ни эшләйһең бит. Язмыштыр,— тип кенә ҡырт киҫте ~ Яҙмыштан уҙмыш юҡ, тигәндәр бит боронғолар...

Хамматтын, күңелендә Өммөгөлсөмгә урын булмаһа ла, буйға етеп килгән улы менән ҡыҙына иң нескә аталыҡ хисе һаҡлана ине. Бигерәк тә, һуғышта, ут эсендә ятҡан саҡта, уның күңелендә һәр саҡ Сәлимә менән бергә ошо балалар ҙа булды. Үлем менән йөҙгә-йөҙ килгән саҡта: «Әлдә үҙ урыныма ҡалырлыҡ улым, Байрасым, бар»,— тип йыуанды. Ә инде һуғыштан ҡайтып, киң күкрәкле, олпат кәүҙәле, яҡты сырайлы, мөһәбәт ир булыры күренеп торған үҫмер Байрасты күргәс, ҡыуанып та, һоҡланып та бөтә алманы.

— һай, егетең, тип шаяртты ул улын.— Баһадир булмаҡсыһың да баһа!.. Әй, уҙған ғүмер... Бына бит, мин дә әле яңы ғына тап һинең кеүек текә ҡарашлы, тос йөҙрөклө малай инем...

Ул мөмкин булған урында Байрасты үҙ яныгнан ебәрмәҫкә тырышты. Ҡайһы саҡтарҙа, икәү генә булғанда, уның ҡаты, ҡуйы сәсенән һыйпап:

— Замандар үҙгәрә, улым... һәйбәт замандар килә. Минә һинең кеүек кенә сағымдан уҡ, әсәйем әрләгг-туҡмап, кәләш алып биргәйне. Ә мин һине улай итмәм. Уҡытырмын. Кеше итермен. Бына байҙарҙы, контрҙарҙы туҡмап, ҡыуып ҡына бөтәйек әле. Ауылға өр-яңыса мәктәп асып ебәрербеҙ. һин шунда уҡып, беҙ елкә менән татып тәшөнгән хаҡлыҡты яңы китаптарҙан уҡып белерһең... Әй улым, бәхетле буласаҡһың һин, бәхетле... Кәләште лә һин үҙең... ҡасан теләһәң шунда... кемде яратһаң шуны алырһың, улым,— тип, Байрасҡа бик үк аңлашылып етмәгән нәмәләр хаҡында һөйләп тә ала.

Байрас та атаһын ярата. Уның ауылда ин олпат кәүҙәле, баһадир кеше булыуы өсен дә, һалдат булыуы өсөн дә ысын күңелдән ғорурлана. Ике һүҙенең береһендә:

— Их, мин дә атайым кеүек булһам ине, әсәй, ә? Минен, атайым матур ҙа, көслө лә, аҡыллы ла, эйе бит, әсәй, ә? — тип, үҙе лә аңламаҫтан, әсәһенең йөрәк яраһына тоҙ һибеп кенә тора. Ләкин Өммөгөлсөм быларҙың бөтәһенә теш ҡыҫып түҙеү менән генә яуап бирә ине. Ә үҙенең бала килтермәүе арҡаһында һаман киҫкенләшә барған көнсөлөк тойғоһонан һуҡырайған Сәлимә быларҙың бөтәһен дә үҙенсә аңланы.

Әле инде Хисбулла менән Таиба әбейҙең аяҡ тауышы һил булғас, Сәлимә бөтөнләй юғалып, башына еҫ тейгән кеше шикелле, бәүелә-сайҡала урындыҡҡа, тоноҡ ҡына ай нуры һыҙылып ингән урам яҡ тәҙрә янына барып ултырҙы. Тыныслыҙ ҡараштарын берсә көлдөксәләге янып бөтөп барған сыраға, берсә тәҙрә үтә алыҫ күккә, алтын мөгөҙөн ашыға-ашыға ҡара болот юрғанына йәшереп маташҡан ураҡ



айға төбәне. Ҡапыл күңелен солғап алған, тик әлегә бик үк асыҡ билдәле булмаған, көс еткеһеҙ ауыр һорауға яуап эҙләне.

«Бибештең... Хисбулланың улы бар... Тимәк, Хисбулла боҙмаған мине?! Мин үҙем ғә-йеп-ле. Быны хәҙер бар ауыл беләсәк!.. Хаммат ни әйтер бынан һуң? Биҙәү ҡатын менән ғүмерен зая уҙғарырға күнерме ул?..»

Бына сыра янып бетөп көлгә әйләнде. Ураҡ ай, ҡара мамыҡ юрғанына төрөнөп, йоҡларға ятты. Кескәй өйҙө ҡуйы • ҡараңғылыҡ ҡапланы. Ә Сәлимә һаман шул урында ултырҙы ла ултырҙы. Уйҙары уны алыҫ үткәндәргә алып инеп китте. Ин. элек уның күҙ алдына оҙон ботло, ҡалын ике томлолo, йондоҙ кеүек балҡып торған сөм-ҡара үткер күҙле йүгерек-етеҙ ҡыҙ килеп баҫты. Был уның бала сағы ине. Сәлимә ҡул ҡамышы шикелле ашығып-атлығып бик йылдам үҫеп етте. Зифа буйлы, шаян-шат күҙле, тынғыһыҙ күңелле һылыу ҡыҙ булып етте. Уны кейәүгә бирҙеләр... Шул көндән алып уның күңеленең тынғыһыҙлығы артҡандан-арта ғына барҙы. Башҡа ҡыҙҙар кейәүгә баралар ҙа тыныс, һәйбәт, риза булып йәшәй бирәләр. Башта ҡатын, унан әсә, ә унан инде уҫал йәки изге күңелле бейем булып, имен генә донъя көтәләр. Шунан башҡаны улар теләмәйҙәр ҙә, кетмәйҙәр ҙә. Борон-борондан ул шулай булып килгән һәм шулай ҡаласаҡ. Тик бына Сәлимә генә ниңәлер улай була алманы. Уның күнеле зарығыуҙан, моңланыуҙан, нимәнелер, кемделер эҙләүҙән, көтеүҙән тынманы. Ниндәйҙер оло бәхет, ысын ҡыуаныс көттө. Эйе, ашҡынып, зарығып кәттө ул... Был көтөү бушҡа ғыла булманы, әлбиттә. Ул көткәнен, эҙләгәнен тапты. Уға ысын, оло бәхет килде. Ул — Хаммат ине. Уның Хамматҡа булған иҡһеҙ-сиҡһеҙ мөхәббәте ине был. Эй-й...

Сәлимә, күҙҙәрен ҡулы менән ҡаплап, оҙаҡ ваҡыт бәүелеп ултырҙы. Йөрәгендә Хамматҡа булған ярһыулы тойғоһо, уның, ҡеүәтле ҡосағында тәү тапҡыр татыған онотолмаҫ бәхетле минуттары ҡабатланды. Ул хатта йөрәгенә түҙмәй һикереп тороп китте лә, шашҡан күҙҙәрен ҡараңғылыҡҡа төбәп:

«Эй-й!..— тип тағы бер-ике ҡысҡырып ҡуйҙы.— Йә, ошонан һуң нисек тормошҡа зарланаһың? Кем мине бәхетһеҙ тип әйтә алыр?.. Кем?.. Бетә кеше лә ундай бәхетте татып ҡараһын ине әле!.. Мин әле лэ һөйәм. Мин әле лә бәхетле... Эй-й, нисек яратам мин уны!.. Нисек йән атам мин уның өсен!.. Эй-й!.. Хаммат!.. Хамматым, йәнем минең!.. Ә ул? һаман элеккесә яратамы һуң мине?.. һыуынманымы һуң ул?..»

Сәлимә ҡайтанан урынға барып ултырҙы. Уның шик тулы ҡараштары өйҙөң дәм-һуҡыр мөйөштәренә тебәлде: «Яратамы ул мине әле лә?!.»

Ошо ваҡыт уның күҙ алдынан Хаммат һуғыштан ҡайтҡаны бирле уҙған дүрт ай ваҡыттың һәр бер көнө, һәр бер сәғәте теҙелеп үтә башланы.

Бына Хаммат тәү ҡайтып ингән көн. Сәлимә бер ни белмәй өйҙә, япа-яңғыҙы ғына, йырлай-йырлай, балаҫ һуғып ултыра ине. Кемдер ишек ҡаҡты.

— Хужалар өйҙәме? Инергә яраймы?—тип өндәште. Был тауыштан Сәлимә ҡойолоп төштө. «һин кем?» тип өндәшергә лә, көрөҫ артынан ҡалҡынып сығырға ла хәле етмәне. Ул арала теге кеше шарт баҫып өйгә килеп тә инде.— һаумыһығыҙ!..

Ул баһадир кәүҙәле, иҫке һоро шинелле, арҡаһына юл моҡсайы менән ҡушлатып мылтыҡ аҫҡан, көн-ел ҡағып, ҡыҙыл ҡара төҫкә ингән һалдат ине.

— Аһа!.. Хаммат, һин түгелме һуң был?—тине Сәлимә. һикереп торҙо. Көрөҫ артынан тиҙерәк сығырға, иренен, ҡосағына ташланырға теләне. Ләкин ҡарышҡан шикелле һоҫаһындағы епкә сырмалып ҡына бөттө. Аяғын күтәреп көрөҫтән ашатлап сыға алманы. Хаммат мылтығын, шинелен һалып ишек төбөндәге сөйгә элде лә, Сәлимәне бала кеүек итеп, көрөҫ араһынан күтәреп алып, үҙенең тубығына ултыртты.

— Сәлимәкәй! һылыуым!..

— Йәнем! Йәнем!.. Хамматым, был һин бит!.. һин ҡайттың, бит!..

Улар күпмелер ваҡытҡа бер-береһенең ҡосағында юғалып ҡалдылар. Унан Сәлимә осоп-йүгереп самауыр ҡайнатты, мунса яҡты... Аш бешерҙе... Бер туктауһыҙ йүгерҙе, һөйләне, көлдө, ләкин арыманы, талманы... Әйтерһең, хәҙер уның өсөн кемдер башҡа берәү эшләй, йүгерә, уйнай, килә ине... Сәлимәне ул көн аптыратҡан һәм ҡурҡытҡан бер генә әйбер булды. Ул да Хамматтың мылтығы ине.

— Ниңә алып ҡайттың уны? Әллә һуғыш һаман бөтмәнеме? Әллә тағы китәһеңме?— тип хафаланды ул. Хаммат быға йә ғәҙәттәге тыйнаҡ, ләкин Сәлимәнең йәрәген көйҙөрөп ала торған ниндәйҙер көслө ялҡын сәсеп торған күҙҙәрен аҙ ғына ҡыҫа биреп, тығыҙ аҡ тештәрен ялтыратып, йылмайып ҡына ҡуйҙы. Йәки:

— Кәрәге булыр әле, һылыу. Беҙ тегендә, Петербурҙа, батшаны ла, Ваҡытлы хөкүмәтте лә ҡыйратып ҡайттыҡ та бит... Ләкин бында Собхан старшиналар, урядник Алексейҙар, Хитровтар тып-тыныс йәшәп яталар ти бит әле... Байгилде ағайҙы юлда осраттым. Ул бик эсе бошоп шул хаҡта һөйләп килде. Кем белә, бәлки тағы берәй тапҡыр мылтыҡҡа тотонорға тура килер... Кәрәкмәһә, бик яҡшы. Прикладын һиңә утынға сапҡылап бирермен,— тип шаяртты.



Ҡайтҡан көндән алып, Хаммат ысындан да, Никита, Байгилде, Тимербайҙар менән бергәләп, ниндәйҙер көрәш, йыйылыш, талаш-тартыш эсенә инеп сумды. Етмәһә, был йыйылыштар гел Өммөгөлсөмдөң, Хамматтың элекке ҡатынының, өйөндә була. Сәлимә был хаҡта нисә тапҡыр Хамматҡа һорау биреп ҡараны:

— Ни өсөн бүтән кешелә, йәки беҙҙә йыйылмайһығыҙ? Өммекәйҙең өйө генә өйме ни?..

Хаммат уның был һүҙенә тағы шул үҙенсә ғәжәп яғымлы һәм тыйнаҡ ҡына итеп йылмайҙы ла:

— Эй һылыуым!— тип Сәлимәнең биленән ҡыҫып һөйөп кенә ҡуйҙы.— Эй һылыуым... Кешеләрҙә йәшәү йәки үлеү ҡайғыһы... Ә һиндә көнсөлөк ҡайғыһы... Ундай уйҙар менән йәшәр саҡмы ни хәҙер?..

— Ә ниңә унда йыйналаһығыҙ?— тип ныҡышты Сәлимә.— Башҡа кешелә булһа мин дә һинең менән бергә йөрөр инем.

— Беҙҙең өй бәләкәс. Байгилдене. үҙ өйө юҡ. Тимербайҙарҙа Баҙыян еңгә ауырый. Теге туҡмалыуҙан һуң һаман аяҡҡа баҫа алмай. Шулай булғас, Өммөгөлсөмдөн, өйөнән дә уңай урын юҡ шул, һылыу. Унан һуң ул өйҙе бит мин түгел, комбед председателе Байгилде ағай һайлаған. Тимәк, иң ышаныслы өй тип тапҡан... Ул бит минән бер ай элек ҡайтҡан кеше. Тимәк, мин ҡайтҡанға хәтлем ул унда ярлы-батракты йыйып һөйләшә башлаған. Шулай булғас, мин быны ҡалайтып үҙгәртәйем?.. Үҙең уйлап ҡара?..

Хаммат менән һөйләшкәндә, Сәлимә был һүҙҙәргә ышана, Хамматтың дәлилдәре менән килешә лә. Ләкин Хаммат китеп, өйҙә яңғыҙ үҙе тороп ҡалыу менән йөрәген тағы көнсө уйҙар телгеләй башлай. Шул арҡала быйыл ҡышты ул нисәмә кисте өшөп-туңып, Хамматты ҡарауыллап, Өммөгөлсөмдөн, өйө тирәһендә йөрөп уҙғарҙы.

Тик Хаммат был өйгә һәр саҡ кешеләр менән инде, кешеләр менән бергә сыҡты. Шулай ҙа Сәлимәнең күңелендәге көнсөлөк һүрелмәне... Ә бынан ун көн элек булған йыйылыш ваҡытында, урамда Шымбай каштан менән осрашҡандан һуң, инде был көнсөлөк Сәлимәне быуып үлтерә яҙҙы.

Төн. Айһыҙ-елһеҙ төн. Көндөҙ ирей биреп, өҫтө быялаланып ҡатҡан ҡытырмаҡ ҡар аяҡ аҫтында кертләп, сатнап ята. Хамматты көтә-көтә түҙемдән сыҡҡан Сәлимә, ҡалын ҡара шәленә төрөнөп, ғәҙәтенсә, йән атып Өммөгөлсөмдәр яғына йүгерә.

«Тукта, йыйылыш таралманымы? Хаммат яңғыҙ тороп ҡалманымы? Ут һүнмәнеме?.. Юҡ.юҡ, халыҡ таралмаған... Ут һүнмәген... Хаммат йыйылышта ултыра...»

Ул, ашығып, йүгереп килеүҙән хәле бөтөп, урам уртаһын-

да туктап бәүелә-тирбәлә оҙаҡ ҡына баҫып торҙо. Тын алышын һирәкләтергә, йөрәк ярһыуын баҫырға тырышты. Бында килеп етеп, ут һүнмәгәнлеген күргәнсе унын йөрәге һәр саҡ шулай атылып сыға яҙып тулай ине.

«Тукта, сеү, ҡайҙалыр, кемдер, кеткелдәп көлгән һымаҡ була. Кем икән ул? Уға бында ни кәрәк икән?..» Сәлимә был билдәһеҙ кеше менән осрашмаҫ өсөн кире әйләнеп йүгермәксе булды, ләкин аяҡтары уны тынламаны. Өммөгөлсөмдәрҙең урам яҡ тәҙрәһенә йәбешеп, эскә ҡарап торған оҙон кәкре ҡара шәүлә уға табан шыуышып килә башланы.

— Кеh-кеh-кеh... Мәйтәм, Сәлимә ки-ки-лен, Хамматын тү-тү!.. Ана, ҡара, элекке бисәһен итәгенә алып \⁷лтырған... Ә һин урамда... Хи-хи... һай, бисара... һин дә киләһең дә, тәҙрәнән үрелеп ҡарарға ҡыймай китәһен... Мин дә, һине йәлләп, килештереп, ҡараштырып йөрөйөм... Килгән һайын, уны Өммөгөлсөмө менән бергә күреп, эсем өҙөлә... Мәйтәм, шундай ҡатынын, Сәлимәһен ташлап, зарыҡтырып... Шу-лай, иргә ышанма, иҙелгә таянма, тигәндәр бит... Улар бөтәһе лә...

Сәлимә:

— Етер, ҡарҡылдама, ҡара ҡарға! Өнөн быуылһын!— тине лә өрккән ҡолонсаҡ шикелле, атылып ҡараңғылыҡ эсенә инеп юғалды.

Шымбай каштан, эсен тотоп:

— Кеh-кеh-кеh...— тип, зәһәрле кеткелдәп, көлөп ҡалды.

Әлбиттә, Сәлимә унын. был һүҙҙәренә ышанманы. Өйҙә Хаммат менән Өммөгөлсөмдөн. яңғыҙ түгеллеген дә, Шымбай каштандыңда тәҙрәнән Сәлимәнеҡайғыртып ҡарапйөрөмәүен дә аҡыл менән якшы төшөнә ине ул. Ә йөрәк?.. Йөрәк һаман үҙенекен итте... Хаммат ҡайтҡанда, унын. йөрәге туктап, аяҡ-кулы һыуынып бөткәйне. Фронтта тиҙ ярҙам күрһәтергә өйрәнеп ҡайтҡан Хаммат юғалып ҡалманы. Нишатыр спирты еҫкәтеп, аяҡ-кулына эҫе һыулы шешәләр ҡуйып, йән индереп алды.

— Сәлимәкәй, һинең йөрәгең шәптән түгел икән. Тыныс булырға тырыш, борсолоу, ярһыуҙан һаҡлан,— тип кәңәш бирҙе. Күкрәгенә ҡыҫып ҡосаҡлап, йылытып алып ятты. Сәлимәнен, ауырыуы үтте. Ләкин шул көндән алып унын йөрәге айырата ярһыу, тыныҫһыҙ булып китте. Саҡ ҡына уйлана башлаһа, тамаҡ төбөнә килеп ултырған һымаҡ булып, тынын быуып ҡына торҙо. Ә бығаса көсләп тигәндәй баҫып килгән көнсөлөк осҡоно янар тауға әйләнде. Бына-бына вулкан ата башлар, унын, ҡайнар массаһы Хаммат менән Сәлимәнең үҙен генә түгел, ә бөтә донъяны баҫып, күмеп китер төҫлө ине. Яны тормош, көрәш тип ашҡынып йөрөгән Хаммат Сәлимәләге был тәрән үҙгәреште абайламай ҡалды.



Дрып-талып ҡайтты ла, ҡайһы саҡта үҙен көтөп йөҙәгән Сәлимәһенә берәй йылы һүҙ әйтергә, күкрәгенә ҡыҫып һөйөр-гә лә онотоп, мендәргә башы тейеү менән, үлек кеүек ҡаты йоҡоға тала торған булды. Иртән торғас, тағы көрәш донъяһына ташланды. Сәлимә аҡылһыҙ ҡатын түгел. Ул үҙҙәренең нindәй дәүерҙә йәшәүен, илдә яцы тормош өсөн аяуһыҙ көрәш барыуын, был башҡаларҙың ғына түгел, унан, Сәлимәнән дә ҡорбан талап итеүен, бик үк асыҡ төшөнмәһә лә, күнеле менән һиҙенеп белә. Шуға күрә мемкин тиклем сабыр булырға, Хаммат өйҙә юҡ саҡта башынан кискән бөтә ваҡ, көнсөл уйҙарҙы улҡайтыу менән оноторға тырыша. Ләкин Хаммат ейҙән сығыу менән тағы-тағы көйөргә-яныpға керешә ине. Әле инде ошо минутта уға Хамматтың һуңғы ваҡыттағы бөтә эше, ҡыланышы, йөрөшө-торошо унын Сәлимәнән һыуыныуын, Өммөгөлсөмөн күрмәйенсә түҙә алмауын дөрөҫләгән, кире ҡаҡыһыҙ дәлилдәр булып унын күҙ алдына килеп баҫты. Етмәһә, тап шул ваҡытта унын хәтеренә бер көн әхирәте Шәмсиә һөйләгән шикле бер һүҙ ҙә килеп төштө.

— Өммөгөлсөмдө күрҙеңме, әхирәт?.. һинең менән бер төҫтән күлдәк кейгән бит!..

— Нисек?.. Минең менән бер төҫтән?!

— Аҡ борсаҡ төшкән... Күк сатиндан...

— Кейһә ни... Баҙарҙа бер төҫ тауар аҙмы ни?! Алып һатарҙар йөрөтә бит хәҙер ул тауарҙы.

— Шулай ҙа бит... Ул әйтә, ти бит... Атаһы ҡыҙына күлдәклек алып биргәйне. Ҡыҙым шуны миңә бирҙе лә ҡуйҙы: «Әсәй, һин кей. Миңә атайым тағы алып бирер әле», ти. Байрасы ла һылыуының һүҙен ҡеүәтләй: «Әсәй ал. Был тауар һинә килешә», ти. Шунан ни, өҫтөмә лә бөтөп киткәйне, тектем дә кейҙем әле. Ни булһа булыр... тип әйтә, ти... Бейем һөйләне.— Ана, Хаммат Сәлимә хәтле Сәлимәһенән һыуынып, иҫке бисәһенә яңы күлдәклек алып биреп йөрөй... Ә һин Әхмәтшаңды Сәрбиямалдан көнләп маташҡан булаһың. һиңәме һуң ирҙе итәгеңә бәйләп тоторға?! Хатта бына Сәлимә лә тота алмай, ти. Тик, әхирәт, һин был һүҙгә ышанма. Минең бейем харап ғәйбәтсе бәндә ул...

Дөрөҫ, Сәлимәгә был һүҙҙе ишетеүе ул саҡта ла еңел булманы. Аяҡтары һығылып-бөгөлөп саҡ өйөнә ҡайтып йығылды. Щулай ҙа ул көндө Сәлимә үҙен енде. Сөнки Хамматтың ҡыҙына күлдәклек алып биреүен ул белә. Быны ҡыҙы әсәһенә биреүе лә бер ҙә ғәжәп түгел икәненә төшөнә ине ул. Ләкин хәҙер был уға Хамматтың ғәйепле булыуын раҫлай торған дәлил булып тойолдо.

— Шымбай ҡарт дөрөҫтө һөйләй: иргә ышанма — иҙелгә таянма!.. Хаммат Өммөкәйенә минең менән бер иш күл-

дәк кейҙергән... Ул Өммөкәйенә кире ҡайтҡан! Мине ташламаҡсы була!.. Ташлай... Ташлаған... Ә мин... Ә мин...— тип ыңғырашты Сәлимә. Унан, һикереп тороп, ғәҙәттә булмаған ашығыслыҡ менән кейенә башланы.

«Ә мин, иҫәр, ышанып өйҙә ултырам!.. Туҡта, барайым. Тағы бер тикшерәйем... Әгәр... әгәр, ысын булһа, үлтерәйем... үләйем...»

Ул атылып тышҡа сыҡты. Төн тап теге ваҡыттағы, Шымбай ҡартты осратҡан төндәге кеүек ҡараңғы, ҡырыҫ ине. Көнъяҡтан үткер яҙ еле иҫә. Офоҡта, Сағылтау өҫтөндә, тар •ҡара таҫма менән билен быуып, тоноҡ ярты ай салҡан төшөп ята. Өҫтө быялаланып туңған ҡытырмаҡ ҡар теге, уның йөрәген яра яҙған, төндәге кеүек аяҡ аҫтында шыҡһыҙ ҡыштырлай, кертелдәй. Урам тын. Кешеһеҙ. Ара-тирә эт сәңкелдәгән, һыйыр мөңрәгән йәки йылҡы уҡыранған тауыштар ғына был тынлыҡты әҙерәк боҙоп ҡуя. Ә ҡайҙалыр алыҫта, үрге туғай яғында, олоған бүре тауыштары уға шом, ҡурҡыныс өҫтәй. Ләкин Сәлимәнең быларға иғтибар итер хәле юҡ. Уға тиҙерәк барып етергә лә Өммөгөлсөмдәрҙең өйөндә лампа янамы, йыйылыш барамы-юҡмы икәнен белә һалырға кәрәк. Унан һуң... унан һуң...

Бына ул ҡытырмаҡ ҡарҙы кертләтеп, уя-емерә баҫып, йүгерә-атлай урам буйлап китте. Ғәҙәттәгесә, был өй тәңгәлендә ҡапыл туҡтап ҡалды. Күҙҙәрен бар көскә асып, йотлоғоп тәҙрәләргә текләне. Өйҙә ут юҡ ине. Шәм һүнгәйне. Йөрәк тундырырлыҡ ҡараңғы, ҡырыҫ тынлыҡ хөкөм һөрә ине хәҙер был өйҙә. Сәлимә, әллә һаташаммы, яңылышаммы тип, күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, керпектәрен һыпырғылап ҡараны. Әллә иҫемде юғалта башлайыммы тағы тип, беләктәрен семеткеләп алды. Юҡ, был һаташыу ҙа, иҫтән яҙыу ҙа түгел ине. Өммөгөлсөмдөң өйөндә ысынлап та ут һүнгәйне бөгөн... Сәлимә бөтә донъяны яңғыратып ҡысҡырып ебәреүҙән үҙен көскә тыйып ҡалды. Алға атларға ла, кире йүгерергә лә белмәй, тыны бөтөп, йөрәге тамағына килеп тығылып, ҡул ҡамышы шикелле сайҡалып торҙо. «Үлергә... үлтерергә!.. үрт һалырға!..» тигән ҡот осорғос уйҙар уның мейеһен ярып үтте. Ошо ваҡыт унын, артында ғына бер көнгө ерәнгес кеткелдәү яңғыраны.

— Кеһ-кеһ-кеһ! Мәйтәм, ир-гә ышынма, и-иҙелгә таянма!.. Хаҡмы һүҙем?! Бына шу-лай була ул!.. Кәһ-кәһ-кәһ!..

Сәлимә хәҙер был зәһәрле һүҙгә ни тип яуап ҡайтара алманы. Тома һуҡыр тәҙрә яғына тағы бер тапҡыр ҡараны ла эләгә-тәгәрәй кире йүгерҙе.

Бөтә донъя хәҙер Шымбай каштанға ҡушылып уны мыҫҡыллай, аҡылынан шашып, ҡотороноп көлә һымаҡ тойолдо уға.



— Кеһ-кеһ-кеһ!.. Ха-ха-ха!..

Шымбай каштандың зәһәрле көлөүе унын, йөрәгендә -кабынған был аяуһыҙ утка кәрәсин һипте. Уның аяҡ быуындары тотмаҫ, күҙе аҡты-ҡараны айырмаҫ булды, ул көскә өйенә ҡайтып йығылды.

«Инде ни эшләргә? Был ҡайғыға, был хурлыҡҡа нисек сыҙарға?.. Өммөкәйҙең өйөндә шәм янмай!.. Ут һүнгән!.. Тимәк, Хаммат унда ҡалған!.. Күрәһең, ул Бибештең улы булыуын ишеткәндер!.. Бала табырға эшкинмәгән биҙәү ҡатын менән артабан торорға теләмәгәндер!.. Нимә эшләргә миңә хәҙер?! Үлергә!.. Эй үлем, ал мине, үҙ ҡуйыныңа!.. Минең бүтән йәшәр хәлем ҡалманы!..»

Сәлимә, һыуынып барған мейескә һөйәлеп, тапма тотҡандағы кеүек ҡалтырай-ҡалтырай, шундай шомло уйҙарға батып торҙо.

«Үлергә!.. Үлергә!..»— тип ҡабатланы күңеле. Ул, һикереп тороп, ашыға-ҡалтырана ниҙер эҙләргә тотондо. Ахыр ул тимер-томор араһынан, һәрмәнеп, Хамматтың элек һунарға барған саҡта итек ҡуңысына тығып йөрөтә торған ҙур салғы бысағын табып алды. Осон, йөҙөн һыйпап ҡараны.

«Бына ул!.. Бына ул мине ҡотҡарасаҡ нәмә! Ул ниндәй һалҡын! Ҡалай үткер!.. Үлергә!..»

Күҙҙәрен сырт йомоп, бысаҡты йөрәге тәңгәленә терәне. Шул саҡ унын мейеһен йәшендәй телеп үткән ниндәйҙер яңы уй бысаҡты йөрәк тәңгәленән ситкә тибәреп ебәрҙе:

«Туҡта... Мин ниңә үҙем генә үләм әле? Мин үлгәс, Өммекәй рәхәтләнеп донъя көтәсәк!.. Юҡ, ул кинәнмәһен!.. Мин үлгәс — ул да үлһен!.. Хамматымды үҙем менән бергә алып китергә тейешмен мин!..»

Үҙенең ҡоторонҡо уйы менән ярым аҡылын юйған Сәлимә Хамматтың ишектән килеп инеүен тойманы.

— Сәлимә! һылыу! Сәлимә, һин ҡайҙа? Ниңә ишеген, асыҡ! Ниңә шәм яндырмайһың?..— тип, хафаланып һөйләнә-һөйләнә, урындыҡты һәрмәп Сәлимәне эҙләне Хаммат. Йәйелгән түшәктең бушлығын белгәс, тағы ла ҡатыраҡ борсолоп шырпы һыҙып ебәрҙе лә күптән бирле кәрәсинһеҙ, өрләктә буш элеүле торған аҫылмалы шәмгә үрелде. Ошо ваҡыт көнсөлөктән тамам аҡылын юғалтҡан Сәлимә уҡ кеүек атылып һикереп торҙо ла Хамматтын. лампаға үрелгән ҡулы аҫтына бысаҡ ҡаҙаны.

— Хуш, йә-не-м!

Хаммат бысылған тирәк шикелле герһөлдәп иҙәнгә ауҙы. Хатта «эһ!» тип әйтергә лә өлгөрә алманы. һыҙылған Щырпы лампаға барып етә алмай осоп төштө лә, иҙән буйлап ағып киткән ҡанға тура килеп, шажылдап һүнде.Өй эсең

баяғынан да ҡуйыраҡ ҡараңғылыҡ ҡапланы. Ярым аҡылдан яҙған Сәлимә тиҙерәк үҙ йөрәгенә лә сәнсер өсөн эҫе ҡанға мансыла-ҡысҡыра өтәләнеп бысаҡты эҙләне. Ләкин таба алманы.

«Эйеккә йүгерергә! Мәкегә төшөп үлергә!.. Йәһәтерәк мәкегә төшөргә!..»

Ул ҡанлы ҡулдары менән сәстәрен өҙөп-йолҡоп, ҡысҡыра-ҡысҡыра урам буйлап Эйек яғына йүгерҙе.

— Хамматты... Хамматымды... йәнемде... үл-терҙем! Мин үлтерҙем!.. Мин үл-те-реүсе!..

Оло Эйек юлы осһоҙ-ҡырыйһыҙ алыҫ, Сәлимәнен. аяҡтары балауыҙҙан эшләнгән һымаҡ йомшаҡ, хәлһеҙ булып сыҡты. Ул бер .аҙым атлай ҙа йығыла, тора ла йығыла. Ҡар өҫтөндә уның ҡанлы ҡулдарынан дәһшәтле эҙҙәр ҡала бара ине. Бына ул һуңғы көсөн йыйып, тағы бер-ике аҙым атланы ла герһөлдәп ҡар өҫтөнә ауҙы. Шул саҡ унын, йөрәген утлы уҡ тишбп үткән һымаҡ булды. Тамаҡҡа йоҙроҡ ҙурлыҡ тейөн тығылды. Әйләнә-тирәләге бөтә донъя күм-күк булып аҫты-өҫкә әйләнеп китте лә Сәлимәнең өҫтөнә түңкәрелеп төштө.

Ул йөрәк өҙгөс тауыш менән:

— Хамма-ты-ы-м!..— тип өҙөп-өҙөп тағы бер тапҡыр ҡабатланы ла тынды. Шуның менән уның өсөн бөтәһе лә бөттө, ҡайғы ла, шатлыҡ та, выждан ғазабы ла уның өсөн йәшәмәй ине инде хәҙер.

Иртәнсәк уны үлек хәлендә таптылар. Ә Хаммат тере ҡалғайны. Ләкин күп ҡан юғалтҡанлыҡтан хәле ауыр ине. Уны больницаға оҙаттылар.

## V

Шулай итеп был ҡырыҫ ҡыш та уҙҙы. Апрель ҡояшы Емештәрҙең тәҙрәһен ҡаплап алған ҡалын күк боҙҙо йыуып төшөрҙө. Өй эсе бер аҙ күтәренкеләнеп китте. Емештең, ситлектәге ҡош кеүек, иреккә һыуһаған йөрәге түҙемһеҙлек менән тышҡа тартыла башланы. Уның ҡулдары шәл бәйләүҙә булһа ла, йөрәге хәҙер ҡырҙа, һыу буйында, туғайҙа, шарлауыҡтар янында гиҙә. Әҙ генә булһа ла был ялҡтырғыс эшен ҡалдырырға, иреккә осорға мөмкинлек бирерҙәй берәй сәбәп килеп сығыуын түҙемһеҙлек менән зарығып көтә. Бындай мөмкинлек бары тик Әхмәтша ҡараҡ килгән саҡтарҙа ғына була. Шуға күрә, нисек кенә ерәнгес булһа ла, Емеш һуңғы ваҡытты уның үҙҙәренә йышыраҡ килеүен теләй ине.

Бына бер көндә, Байгилде ағай иген менән һатыу итеүселәргә ҡаршы көрәшеп ҡайҙалыр йөрөгән саҡта, ысынлап



уларға Әхмәтша ҡараҡ килеп инде. Сәрбиямалдың йөҙө шунда уҡ икенсе теҫ алды.

— А-таҡ, сәпсим онотоп та торам, ҡыҙҙарым, Йәнеш, Емеш, бынауындай һәйбәт сыуаҡ көндә нимә тип өйҙә ултыраһығыҙ?— тине ул, иркә мыйылдап.— Барығыҙ, күңел асып, туйғансы уйнап ҡайтығыҙ.

Емешкә хатта, үгәй әсәһенең күҙҙәрендә бөгөн һалҡын ҡорос саҡҡылары юғалып, уның урынында ысын ҡыуаныс балҡыған һымаҡ та күренде.

«Ул да ысынды һөйләй беләме икән ни?»

Ләкин Сәрбиямал уға был хаҡта оҙаҡ уйлап торорға бирмәне. Арҡаларынан төрткөләп тигәндәй, ашыҡтырып сығарып ебәрҙе.

— Ишетәһегеҙме, штобы оҙағыраҡ уйнап, туйғансы йөрөп ҡайтығыҙ!

Тышҡа сыҡҡас, ҡыҙҙар йүгерешеп лапаҫ башына барып менделәр. Унда күптән ҡар иреп бөткән, һалам өҫтөндә аяҡҡа шундай йомшаҡ, йәнгә һөйләп биргеһеҙ рәхәт, йылы ине. Емеш, ҡыуанып, һалам өйөмөнөң еҫтөнә үк менеп китте. Йәнеш тә уның артынан ҡалмаҫҡа тырышты. Улар, ҡанаты ҡыйырылып оса алмай ятҡан ҡаҙ шикелле, яҙғы ер өҫтенә һоҡланып ҡарап торҙолар. Емеш, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, үрле-ҡырлы һикеренде:

— Яҙ!.. Яҙ етте!.. Сәскәле, ҡояшлы, йәмле яҙ етте!..

Ахыр ул яҙға ҡарата булған үҙенең бөтә белгән маҡтауҙарын теҙеп таҡмаҡлап сыҡһа ла, быларҙың үҙ күңелендәге шашҡын ҡыуанысты һис тә әйтеп бирә алмауын тойоп, уға ҡасандыр Ҡарасәс әбейҙән ишеткән һүҙҙәрҙе лә өҫтәне:

— Эй, өшегәнде йылытҡан, асыҡҡанды туҡ иткән яҙ, изгелекле, шәфҡәтле яҙ!..

Ысынлап та, быйылғы яҙ, Емеш өсөн бойоҡҡан күңелде асыусы булыуға ҡарағанда, урамға, ҡар-буран _араһына ташланып туңып үлеүҙән ҡотҡарыусы, өшөгәнде йылытыусы, асыҡҡанды туҡ итеүсе яҙ булараҡ бигерәк тә ҡыуаныслы ине. Бына тағы элекке йылдарҙағы кеүек ҡуянтубыҡ сығыр, йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, көпшә, шатыр, унан муйыл, ҡарағат, ҡымыҙлыҡ етешер, улар бөтөүгә бөрлөгән, балан өлгөрөр... Шулай итеп, ала ҡар ваҡытынан алып көҙгө ҡарға баҫҡансы Оло Эйек туғайы төрлө-төрлө тәмле үләндәр, емештәр менән тулы булыр. Улар барында астан үлмәҫкә лә, йәшәргә лә була бит! Көҙгә, бәлки, улар үҙ ауылдарына ҡайтып та китерҙәр. Емешкә атаһы шулай ти бит. «Быйыл яҙға булмаһа ла, көҙгә ҡайтырбыҙ. һеҙ бынан кире үҙ ауылығыҙҙа ерле-һыулы, туған-ырыулы булып йәшәрһегеҙ», ти...

Бөгөн көн ысынлап та ғәжәп һәйбәт ине: Оло Эйектен, боҙо хәҙер-хәҙер ҡалҡынып, күтәрелеп, ағып китергә ята. Яр баштары, тау битләүҙәре ҡарҙан әрселеп бөткән. Унда ла, һулда ла, хатта ялан кәртәгә йәйелгән һаламтиреҫ аҫтынан да, көмөш йылан кеүек борғаланып, ҡар һыуҙары аға. Оҙонғол йыраҡаһынан Үле Эйеккә ағып төшкән шарлауыҡтын, гөбөрләүе бында, лапаҫ башына ла, айырым-асыҡ ишетелеп тора. Бөтә әйләнә-тирәлә яҙғы ташҡын, яҙғы ярһыу хөкөм һөрә хәҙер.

Емеш менән Йәнеш шулай һалам еҫтендә һикерешеп уйнап торған арала күрше кәртә баштарында ла ҡара-ҡора баштар күренгеләй башланы.

— Бүтән ҡыҙҙар ҙа кәртә башына сыҡҡандар!.. Уй, сынаяҡ уйнатыр саҡ еткән дә баһа, Йәнеш!..— тип шыбырланы Емеш.

— Әйе шул. Әйҙә, беҙ ҙә сынаяҡтарыбыҙҙы ҡаҙып алайыҡ, һылыу,— тине Йәнеш тә, ҡанатланып.

— Әйҙә!..

Ләкин ҡыҙҙарҙың береһенең дә лапаҫ башынан төшкеһө килмәне. Улар, ҡояшҡа сағылған күҙҙәрен алыҫта, күк ситендә, күгелйем һыҙат ҡына булып күренгән тауҙарға тебәп, тағы бер аҙ тирә-яҡты байҡап торҙолар. Оло Эйек яғынан иҫкән һалҡынса ел, уларҙың ямалып бөткән керле күлдәктәрен елпелдәтеп, туҙған сәстәрен өлпөлдәтеп тартҡыланы. Өйкөм аҡ болоттар, яңы ғына моронлаған себеш шикелле йәш ергә һоҡланып, күк көмбәҙенен. тап уртаһынан ҡарап торған көләс ҡояшҡа әленән-әле селтәр бөркөп, йылыға һыуһаған ерҙе шаярттылар. Берсә күләгәләп бошондороп, берсә эремек ҡар өҫтөнә мең төрлө нур шәлкемдәре ташлап, һөйөндөрөп уйнанылар. Ҡыштын әсе һыуығын татыған һоро турғайҙар, ҡыуаныстарынан пырхылдашып, әле ситән башына, әле ялан кәртәгә ябырылдылар. Уларҙың ҡайһы бер ҡыйыуыраҡтары, хатта, тиреҫ аҫтынан шылтырап аҡҡан ҡар һыуҙарына ятып ҡойоноп та сыҡтылар. Эшлеклерәктәре, Сәрбиямалдың үҙе кеүек, донъяла башҡа бер кемде лә һанға һуҡмай ялан кәртәнен ҡап уртаһында ялҡау ғына көйшәп ятҡан ҡыҙыл тукал һыйырҙың арҡаһынан украһын таҙарталар. Йөндәре ҡойолоп, өтөкләнеп бөткән таҙ тауыҡтар, яланғас муйындарын оҙон һуҙып: «Ки-ки-киҡ!..»—тип йырлай-йырлай тиреҫ аҫтынан ҡорт эҙләйҙәр. Селлә һалҡынында тырнаҡтары өшөп төшкән тупыс аяҡ ҡарт һары әтәс, ситән сыбығына көскә тотоноп тороуына ҡарамаҫтан, тауыҡтар бында хужа барын онотоп ебәрмәһендәр өсөн:

— Кики-ги! Ғуҡ!..— тип ҡысҡырып ҡуя.

Теге ваҡытта тәҙрәне ватып сығып ҡасҡан оҙон ҡойроҡ-



ло, ҡыл ботло, аңра оҙдой һарыҡ та, әбей битен ҡояш нурҙарына терәп, кинәнеп ойоп тора. Унын ҡара бөҙрә бәрәсе ҡара билдәш шаян кәзә бәрәстәре артынан ҡалышмай йүгереп йөрәй. Тик кәзә бәрәстәре баш сайҡап, һикерә-һикерә ситән буйлап үргә, хатта лапаҫ башына хәтле менеп киткән саҡта ғына уларҙан артта тороп ҡалғаны өсен ғәрләнеп, аңра инәһенә һыйына. Малдарҙың, ҡош-ҡорттарҙын. ошо яҙғы шатлығына ҡарап тороу ҙа Емештең күңелен әйтеп бөтөргөһөҙ ҡыуаныс менән тултыра.

— Эй-й, рәхәт тә һуң был яҙ!.. Эйе бит, Йәнеш!...— ти ул, ярһып. Ул Йәнеште теге ваҡытта бер генә тапҡыр апай тип әйтһә лә, быны артабан дауам иттерә алмағанлыҡтан, һаман шулай исеме менән генә әйтеп йөрөтә. Йәнеш тә бөгөн ғәҙәттәгенән йәнле һәм келәс.

—• Йә, уйнап ҡалайыҡ, Емеш!..— тип ашыға ул.— Уйнай ҙа алмай ҡалырбыҙ... Апайым ҡайтарып та ҡуйыр...

— Әйҙә, уйнай һалайыҡ,— ти Емеш тә, быға ризалашып,— тиҙерәк уйнайыҡ!

Улар йәнәһе аяҡ һынмаһын есен:

— Бер аяғым ҡамыр, бер аяғым тимер, тфү-тфү! — тип төкөрәләр ҙә кем уҙарҙан кәртә башынан ергә һикереп төшәләр. Унан, аласыҡ янындағы ылаш аҫтынан көҙ көнө күмеп ҡалдырған бер ҡумта уйынсыҡтарын тиҙ генә ҡаҙып алып, тағы лапаҫ башына йүгерәләр.

Сынаяҡ уйнатыу — ҡыҙҙарҙың ала ҡар ваҡытында кәртә, лапаҫ баштарында уйнала торған иң тәүге яҙғы уйындары. Кейемһеҙлек арҡаһында оҙон ҡыш буйына өйгә бикләнергә мәжбүр булған бала-саға, ҡояш йылыта башлау менән, оянан яңы сыҡҡан тауыҡ себештәре шикелле, тышҡа һибелә. Ләкин ер әле ҡарҙан әрселеп бөтмәгән. Әлегә берҙән-бер йылы урыназбар, лапаҫ башы.

Емеш менән Йәнеш бер ҡумта тулы төрлө-төрлө сынаяҡ, быяла ярсыҡтары, матур шыма ҡырсынташтарҙан торған байлыҡтарын тиҙ арала һөрткөләп, таҙартып, уларҙан бик шәп «һый» әҙерләнеләр. Күк, йәшел, ҡыҙыл, һары сынаяҡтарҙың ҙурыраҡ ярсыҡтары тәрилкәләргә әйләнде. Уларға ваҡлап һалынған һары быяла ярсыҡтары — һары емешкә, ҡара шешә ярсыҡтары — ҡара емешкә, күк, зәңгәр, ҡыҙыл быяла ярсыҡтарынан ҡатнаштырып эшләгәндәре — монпасиға, йомро аҡ таштар — күмәскә, тумалаҡ ҡара таштар — муйыл, эремсек майҙарына, ваҡ аҡ таштар шәкәргә әйләнде. Бер тиҫтер йоҡа ялпаҡ таштар — ҡоймаҡ, ваҡ йомро таштар — бауырһаҡ, төрлө-төрлө оҙонса таштар кәнфит булды. Ғөмүмән, «һыйҙын» иҫәбе-һаны юҡ ине. Хәҙер уға ҡарап Емеш кенә түгел, хатта ҡояш нурҙары ла

ҡыуанып, йәшелле-ҡыҙыллы осҡон сәсрәтеп уинарға кереште.

— Йә, кемдәрҙе саҡырабыҙ, һылыу?— тине Йәнеш, сикһеҙ йәнләнеп.— һый етерлек булды.

— Шәүрәне, Сабира менән Сәмиғәне... Заһираны, Хәсбиямалды,— тип теҙҙе Емеш.

— Хәсбиямалды?.. Кит, шул маңҡаны!..— тип ҡаршы төштө Йәнеш.— Алтынбикәне тиһәң, бер хәл...

— Ә ул маҡтансыҡ!.. Кәрәкмәй,— тип өҙҙө Емеш. Шул ваҡыт ситән башында Сәмиғәнен, өлтәй башы күренде. Ул, сысҡан ҡойроғондай ике үрем һары сәсен тырпайтып, лапаҫ башына менеп килә ине.

— Эй, Сәмиғә һылыуым килә. Әйҙүк, түрҙән уҙ, һылыу,— тип, тап Сәрбиямал булып, татлы тәтелдәп ҡаршылаңы уны Йәнеш.— Йә, ни йомошоң бар, һылыу?

Бындағы яҙғы сынаяҡ уйынын лапаҫ башында уйнала торған балалар спектакле тип атарға мөмкин булыр ине. Бында һәр бала үҙ әсәһенең, өләсәһенен, йәки апайҙың, баланын. ролен башҡара. Уның бөтә һүҙе, ҡыланышы, тормошҡа, кешеләргә мөнәсәбәте үҙ ғаиләһенең күҙлегенән сығып алып барыла. Кемдең ата-әсәһе ауылда ниндәй ҡатламға инә, ул уйында ла шул ҡатламдын, ролен уйнай. Шул ҡатлам күҙлегенән, шул ҡатлам ғәҙәтенән һәм мөмкинлегенән сығып эш итә. Шул арҡала, был уйынға ҡарап, ауылдағы ғөрөф-ғәҙәт һәм мөнәсәбәттәрҙе һис яңылышмай күҙ алдына килтерергә була ине. Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡайһы саҡта был өлкәндәр ролен уйнау бик мәҙәк, көлкө килеп тә сыға. Ләкин уйын бик етди һәм тәбиғи итеп алып барылғанлыҡтан, бынан бер кем дә көлмәй. һәр кем үҙ ролен етди рәүештә дауам итә. Әле бына әсәй ролен уйнаған апаһы Сабиранын, ҡыҙы булып килгән Сәмиғә лә, лапаҫ башына менгәс, тап тормоштағыса, аяҡ остарына ғына ҡарап, ҡыймай тороусы оялсан, әҙәпле ҡыҙ ролен бик оҫта башҡарҙы.

— Йәнеш еңгә,— тигән булды ул, көскә тауышын сығарып.— Әсәйем һине беҙгә ҡунаҡҡа килһен, тигәйне...

Тимәк, улар ҙа сынаяҡ уйнарға керешкәндәр. Емештәрҙән алдараҡ өлгөргәндәр.

Йәнеш тә, уйындың тәртибен боҙмай, һаман шул Сәрбиямал булып ҡыланды.

— Эй, эшем бик күп ине бит әле. Үҙем дә ҡунаҡ саҡырырға әҙерләнгәйнем бит әле.

Сәмиғә, оҙон муйынын һуҙып, нәҙек кенә тауыш менән:

— Улай тимә инде, беҙ алдан өлгөргәс, алдан беҙгә барығыҙ инде, әсәйем бик үтенеп саҡырҙы,— тип яуапланы. Йәнеш ғәйәт эшлекле кеше тауышы менән:



.— Йә, ярай, улай булһа. Барһам барып сығырмын,— тине. Бынан һуң Сәмиғә:

— Тиҙ генә барығыҙ, еңгә, оҙаҡламағыҙ, йәме,— тине лә, сәсе өлтәнләп, ситәндәр, кәртәләр аша һикерә-һикерә икенсе ҡыҙҙарҙы саҡырырға китте. Йәнеш менән Емеш, йылға яғынан иҫә башлаған ҡырҡыу елдән ҡасып, һалам ышығына инеп яттылар. Ғәҙәт буйынса, саҡырыусы икенсе тапҡыр килмәйенсә барыу ас күҙләнеү була. Кеше ни тиклем бай булһа, саҡырыусының үҙенән баймы, ярлымы булыуына ҡарап, ул шул тиклем оҙаҡларға, саҡырыусыны ҡат-ҡат йөрөтөргә тейешле ине. Бына оҙаҡламай Сәмиғә Емештәргә тағы килеп етте.

— Йәнеш еңгә, әсәйем тиҙ генә килһен тип әйтте. Башҡа ҡунаҡтар килеп бөттө,— тип хәбәр итте. Йәнеш тағы тап Сәрбиямал булып:

— Эй аллам да, эшем бик күп ине бит әле. Саҡырмаһағыҙ ҙа ярар ине лә,— тип наҙланып, борғоланып, ризаһыҙ төҫ менән генә барырға әҙерләнә башланы.

— Әйҙә, ҡыҙым, Емеш, барайыҡ булмаһа. Мә, сатин күлдәгеңде кей. Хәситәнде таҡ. Кешмир яулығыңды ябын. Мә, сәс тәңкәңде лә таҡмай ҡалдырма штобы, матур кейен,— тип һөйләнә-һөйләнә Емешкә һалам бөртөктәре тотторҙо. Сәмиғә тағы бер ҡат:

— Тиҙ генә барығыҙ, еңгә, әсәйем тиҙ булһындар, тине,— тип ҡабатланы ла тағы ситән аша һикерә-һикерә Собхан старшиналар яғына китте.

Ә Йәнеш үҙ уйынынан һаман рухлана барып:

— Үҙем атлас күлдәгем менән бынауы шау уҡа еләнемде кейәйем. Селтәремде тағып, ҡашмауымды кейеп алайым. Кеше араһында сер биреп, кәм-хур булып ултырмайым,— тип наҙланып һөйләнде. Ул үҙенен. был хыялдағы байлығы менән ошо минутта сикһеҙ көлк© лә, ҡыҙғаныс та ине.

Улар, бер ситән башынан икенсеһенә үтеп, Баҙыян еңгәләрҙең кәртә башына йүнәлделәр. Сынаяҡ уйнау кәртә башында барғанғамылыр, унда саҡырыусы ла, ҡунаҡтар ҙа, ғәҙәттәгесә, урам буйлап түгел, ә кәртәләр аша йөрөй ине.

Ҡыҙҙар, ҡыр кәзәләре шикелле үрҙән үргә һикереп, инде Сәмиғәләргә барып еттек кенә тигәндә, Емештең күлдәк итәге ҡаҙыҡ башына эләгеп буйҙан буйға йыртылып китте. Уйнап йөрөгән бала ғүмерендә осрай торған был иң ябай хәл Йәнеш менән Емеш өсөн һөйләп биргеһеҙ ҡайғы булды. Улар, ни эшләргә белмәй, ялан кәртәлә туктап ҡалдылар. Яҙ шатлығы ла, уйын ҡайғыһы ла юҡҡа сыҡты.

— Йә, апайым үлтерә бит инде!.. Эй, һине...— тип әсенде Йәнеш.— Йә, ни эшләйбеҙ инде?!

Емеш күлдәгенең йыртылған урынын тереп тотоп, бер

һүҙ ҙә өндәшә алмай, тәрән ҡайғыға батып торҙо. Уны үгәй әсәйҙән тукмалыуҙан бигерәк, хәҙер бында, ҡыҙҙар араһында ярыҡ ҡорһаҡ булып ултырыу ғәрләндерә ине.

Былай ҙа ҡышын-йәйен бер күлдәк ине. Хәҙер ул да бөтөнләй йыртылып сыҡты... Инде нисек кеше күҙенә күренергә?!»

Уларҙы был аптырауҙан Сабираның тауышы тартып сығарҙы. Ул ғәйәт йхлас, ҡунаҡсыл тауыш менән:

— Аһа, ҡунаҡтарым килә икән дә баһа!.. Әйҙүк, рәхим итегеҙ, түргә уҙығыҙ,— тип ҡаршыланы. Йәнеш менән Емеш ирекһеҙҙән тағы уйын тәртибенә күнергә мәжбүр булдылар.

— Әҙерәк көттөрҙөк шикелле, әхирәт, үпкәләмә инде, бик эшем күп булды шул. Бушай алманым,— тип ғәйепле тауыш менән һөйләнә-һөйләнә Йәнеш кәртә башына табан атланы. Емеш тә уның артынан эйәрҙе. Сабира, уның арҡаһынан тыпылдатып һөйөп, иркәләп, Баҙыян еңгә шикелле ысын күңелдән ҡыуанып ҡаршы алды.

— Әйҙә, һылыу, уҙ. Бына ошонда, әсәйен. янына ултыр. Хәҙер үҙенә майлап икмәк бирермен.

Емештәр лапаҫ башына барып менгәндә, бында, әле һаман хуш-еҫен юғалтмаған бер йөктәй йәшел бесән янында, арыу уҡ ҡыҙҙар йыйылғайны инде. Шәүрә лә, Хәсбиямал да бында ине. Улар ауылда иң ярлы кешеләр булғанлыҡтан, әллә ҡасан, иң алдан килеп ултырғайнылар. Емештәрҙән һуң бик оҙаҡ көттөрөп Зәһира, унан Гөлйыһан килде.

Баҙыян еңгә үҙе лә ошонда, кәртә башында, үҙе иләпһуғып эшләгән киндерҙән Тимербай ағайға күлдәк-ыштан тегеп ултыра ине. Емеш кәртә башына менгәс тә уның янына барҙы. Баҙыян еңгә уның башынан йомшаҡ ҡына һыйпап, иркәләп алды ла, ниңәлер ауыр көрһөнөп:

— Йә, ни хәл, һылыу? Ниңә былай бик бойоҡ күренәһең?— тип һораны.

— Күлдәгемде ҡаҙыҡҡа эләктереп йыртып ебәрҙем,— тине Емеш.— Нимә эшләргә икән?

— Аһа, ҡана! Эй-й, ҡалай ҙур йыртҡанһың,— тине Баҙыян еңгә.— Ҡана, тегә һалып бирәйем.— Ул, үҙ эшен ситкә ташлап, Емештен күлдәген ямарға кереште. Баҙыян еңгә Емешкә хәҙер ныҡ ҡына ябығып, ҡартайып, аҡ йөҙө һарғайып киткән кеүек күренде. Күрәһең, Ҡарасәс инәйҙең фажиғәле үлемен, иренең тукмалыуҙан һуң бер нисә ай ятып, ул үлерҙән — был үлерҙән тороп ҡалыуын кисереүҙәре уға еңел булмағандыр. Шулай ҙа уның кин, асылып, тирә-яҡҡа ғәжәпләнгән һымаҡ кирелеберәк ҡарап торған аҡыллы күҙҙәре һаман элеккесә көләс, йөҙө илгәҙәк, мыләйем ине. Емеш, күлдәге ямалып беткәнсе унан күҙен



алмай текләп, төрлө аянысл уйҙарға батып ултырҙы. Баҙыян^ еңгә лә Ҡарасәс инәй кеүек оҙаҡламай үлеп китер кеүек тойолдо уға. «Ниңә кеше үлә?— тип әсенде Емеш.— Ниңә гел һәйбәт кешеләр үлә?...»

Бына ҡыҙҙар йыйылып бөттө. Тик Собхан старшинаның ҡыҙы Алтынбикә генә юҡ ине әле. Сәмиғә уға бара-бара арып бөттө. Көттөрөү, ялындырыуҙа ул үҙенең әсәһенән дә уҙҙырып ебәрә ине. Ахыр өй хужаһы түҙмәне, ҡунаҡтарын табынға саҡырҙы.

— Йәгеҙ, ҡунаҡтар, рәхим итеп ултырышығыҙ. һин, Йәнеш әхирәт, бынауында, минең янға, Гелйыһан еңгә менән Зәһира еңгәләр һеҙ түргә уҙығыҙ, Шәүрә килен, һин ошонан, ситтән ултырырһың, миңә сәй яһашырһың,— тип Сабира бөтөнләй етди итеп, әсәһе йәки мәрхүм ҡәртәсәһе Ҡарасәс әбей шикелле тыныс, сабыр тауыш, яҡты йөҙ менән, ҡунаҡтарын дәрәжәләренә ҡарап урынлаштырып сыҡты. Иң түрҙә бер урынды буш ҡалдырҙы.

— Бында Алтынбикә еңгә ултырыр. Ул ни, маллыбарлы кеше, бушамайҙыр. Бишенсе тапҡыр барғанды көтәлер инде ул...

Сабираның һүҙен башҡалар ҙа күтәрмәләне.

— Шулай инде...

— Эйе лә баһа!..

— Бай кешенен, килем-китеме лә күп була инде уның... Йә берәйһе килеп төшкәндер... Шуға килә алмай торалыр...

Алтынбикә һаман килмәне. Сабира уға бишенсе тапҡыр һылыуын ебәрҙе.

— Бар, ҡыҙым, тағы барып кил булмаһа. Ҡунаҡтар көтә-көтә арып бөттө, тиген. Әсәйем үҙең менән бёргә алып кил тип әйтте, тиген, йәме.

Тыңлаусан Сәмиғә ситәндәр, кәртәләр аша тағы Собхан старшиналарға йүнәлде. Ҡунаҡтар тағы бик оҙаҡ көттөләр. Хәҙер саҡыра киткән Сәмиғә лә юҡ ине.

— Ярай, былай булғас, сәй әҙерләй башлайым,— тине Сабира.— Бер кешене ун кеше күпме көтөргә кәрәк?

— Ҡуй, ярамаҫ, үпкәләтерһең.

— Көтәйек. Улай килешмәҫ,— тиештеләр ҡунаҡтар.

— Көтә-көтә кетөк булдым,— тип шаян йылмайып ҡуйҙы Сабира,— инде көтмәйем, яҙ була.— Унан шаҡмаҡлы ҡыҙыл сепрәкте ашъяулыҡ итеп, ҡунаҡтар алдына түшәп, уның өҫтөнә төрлө-терлө сынаяҡ ярсыҡтарынан, таштарҙан әҙерләнгән «һыйҙарын» теҙә башланы. «һый» бик бай, күп төрлө ине. Уның хатта балсыҡтан эшләнгән самауыры ла, сәйгүне лә, сынаяҡтары ла бар ине.

Сабира, табын әҙерләп бөтөп, сәй яһай ғына башла-
, лапаҫ башына, ялт итеп, Алтынбикә килеп менде.

Ул ысын ҡунаҡҡа барғандағы кеүек матур итеп кейенепяһанып килгәйне. Уның өҫтөндә елбәҙәкле ейәктәрҙе семәрләп, кәкерсәкләп баҫып, әллә нисәмә ҡатмар һалып тегелгән атлас күлдәк, ебәк ептәрҙән мөһөр яһап ысын мәрйендәр, көмөш тәңкәләр теҙеп, шау уҡа итеп тегелгән өр-яңы елән, түшендә гел берәр һумлыҡ тәңкәләрҙән теҙеп эшләнгән әмәйлек, аяғында былтыр Тимербай ағай тегеп биргән еҙ дағалы өр-яңы күн итек, ә беләктәрендә көмөш беләҙектәр ҙә, ысын мәрйендәр, бармаҡтарында көмөш балдаҡтар, фәйрүзә ҡашлы йөҙөктәр, башында күҙҙең яуын алып торған шау бизәк йәшел кешмир шәл ине. Алтынбикә йәшкә Йәнештәрҙән оло булмаһа ла, буйы-һыны, кейемдәре менән бөтөнләй еткән ҡыҙ булғайны инде. Ул кейем-һалымы, атаһы шикелле ғәжәп тәкәббер, текә ҡарашлы матур алһыу йөҙө менән дә, ҡышты өшөп, туңып, һарғайып сыҡҡан был балалар араһында, яңылышып, дегәнәк өйөмө янында сәскә атып ебәргән ҡына гөл кеүек булып, айырылып тора ине. Ҡыҙҙар һоҡланыулы күҙҙәрен унан ала алмай тынып ултырҙылар. Ә Алтынбикә, уларға юғарынан мыҫҡыллы ҡараш ташлап, бөтә кейеме менән ҡояшта йылҡылдап, әйләнеп-тулғанып тора бирҙе лә, һүҙҙәрен теш араһынан ғына сығарып:

— Бәй, көтмәҫ, булғас, мыҫҡыл итеп, нинә саҡырҙыц! һинең мыҫҡалыңа ғына һыйырлыҡмынмы ни мин?! — тип Сабираға екерҙе. Уның кейемдәре алдында юғалып ҡалған Сабира, ҡапыл йоҡонан уянып киткән кеүек, һиҫкәнеп һикереп торҙо.

— Әйҙүк, Алтынбикә еңгә, түрҙән уҙ. Ана һинә иң түрҙә урын ҡалдырылған, рәхим ит.

Ләкин Алтынбикә бындай иғтибарһыҙлыҡты күтәрергә теләмәне. Күҙҙәрен уҫал уйнатып:

— Кәрәкмәй, уҙмайым. Уҙғандан да артыҡ булды,— тине. Көтмәҫ булғас, саҡырмайҙар уны. Оло башымды кесе итеп килгәнемдең ҡәҙерен белмәгән кешелә ни эшләп сәй эсеп ултырайым ти мин. Мине кем тип белден, ҡорсан,-ғы!—тип тап әсәһе булып екеренде лә, башты ғорур артҡа ташлап, иҫ киткес тәкәббер ҡиәфәт менән ҡыҙҙар алдында тағы бер-ике әйләнгәс, ялт итеп, баҫҡыс буйлап ергә төшөп китте.

— Китмәсәле, Алтынбикә еңгә, үпкәләмәсе,— тип Сабира ҡунаҡсыллыҡты ахырына хәтле түҙемлелек менән дауам итте.— Беҙ бит яңы ғына ултырғайныҡ та баһа. Бер сынаяҡ та эсеп өлгөрмәнек тә баһа!.. Әй алла, ҡалай уңайһыҙ булды бит әле был. Ҡуй инде, әй-й!..

— Ҡалған сәй эсеп ултырырға мине кем тип белдең? Ҡойолдороҡ!..



Алтынбикә был һүҙҙәрен әйткәндә, сәсрәтә баҫып, ялан кәртәнән урамға сығып бара ине инде.

— Ҡайһылай һауалы, ай-һай-һай!—тип баш сайҡап ҡуйҙы Баҙыян еңгә.— Әсәһе лә беҙҙең кеүекте бер ҡасан да һанға һуҡманы бит уныц... Ярар, ҡыҙым, бер саҡ һеҙ ҙә уларҙы һанға һуҡмаҫһығыҙ әле...

Сабира, тынысланып, ихласлыҡ менән йәнә ҡунаҡтарын һыйларға керештег

— Йә, майына, балына ынтылып, кәнфитен, емешен ҡабып, тәмләп кенә эсегеҙ әле, ҡунаҡтар!..

— Эскәйнек инде, эскәйнек. Еткәйне инде, еткәйне.

— Ҡуй-ҡуй, яһама, еңгә. Әлдә лә бик күп эсеп ташланым,— тип башҡа ҡыҙҙар ҙа уйынды күтәреп алырға тырыштылар. Шулай ҙа уйын хәҙер баяғыса тәбиғи булып сыҡманы. Ҡыҙҙарҙын күҙ алдында хәҙер Алтынбикәнең кейемдәре лә ғорур, тәкәббер ҡыланышы ғына йылҡылдап тора. һәр кем, өндәшмәһә лә, тик уның тураһында ғына уйлай. Бында кешенең үҙе алдында туп-тураһын сатнатып әйтеү, ҡурҡмай-өркмәй тура һөйләү дөйөм ҡылыҡтарҙың береһе булһа ла, кеше үҙе юҡта уның етешһеҙлеге, ярамаған яғы тураһында һөйләү, ғәйбәт тип аталып, ҙур ғәйеп һанала. Шуға күрә Алтынбикәнең ҡыланышына күп ҡыҙҙарҙың асыуы килһә лә, үҙе булмағас, уны ғәйепләп һөйләүсе булманы. Шулай ҙа беген күпселек ҡыҙҙарҙын кәмһенеүе шул хәтле булды, инде бында бер һүҙ ҙә өндәшмәй ҡалыу һис тә мөмкин түгел ине. Ин элек Сабира түҙемен юғалтты:

— Эй-й, маҡтансыҡ та инде был Алтынбикә,— тине ул, йәберһенеп.— Ҡалай әҙәмгә һанамай китеп барған булды!..

Уйын бөттө. һәр кем, өлкәндәр ролен уйнауҙан туктап, үҙенсә һөйләшеүгә күсте.

— Күлдәктәренә генә ҡарап тора. Әйтерһен. донъяла ундай күлдәкле кеше ул бер генә!— тип Сабиранын һүҙен күтәреп алды Йәнеш.

— Атайым миңә лә шундай итек тектерергә бирҙе әле,— тине Гөлйыһан, күкрәген кирә биреп.

Заһира, түшен-башын һыйпап, урынынан тороп уҡ китте.

— Ә минен. күлдәгем кемдекенән кәм?!

Ысынлап та, ул, ялан аяҡ булһа ла, өҫтөнә күк сатиндан һәйбәт кенә итеп тегелгән өр-яңы күлдәк кейеп килгәйне.

Ғаббас мулланын ҡыҙы Гөлйыһан менән Әхмәтша ҡараҡ ҡыҙы Заһиранын өҫ-башына ла һоҡланып бөтә алмаған Шәүрә, күҙен мөлдөрәтеп, тирә-яҡҡа иркә ҡарап алды ла:

— Миңә лә әсәйем байрамға сатин күлдәк тегәм ти әле, вәт,— тип ҡуйҙы.

Гөлйыһан уның яғына ҡарап иренен бүртәйтте.

— Текте, ти!.. Сатин түгел ситсаһы ла тәтемәҫ әле.

— Тегә шул, вәт,— тине Шәүрә.

Заһира шарҡылдап көлдө.

— Көтөп тор! Нимәһен биреп, бетен биреп һатып алһынмы ни һинә ул күлдәклекте?..

Шәүрә тиҙ генә еңелергә теләмәне. Илап ебәрә яҙып:

— Әсәйем алмаһа ла, атайым алып бирә, вәт! Йыуаға сығыу ваҡытына минең бына тигән күлдәгем буласаҡ. Бына күреп тороғоҙ, вәт!—тип еңеште.

Гөлйыһан, быға тағы ауыҙын бүртәйтеп, мыҫҡыллап яуап бирҙе:

— Пеш-ш!.. һинең эшкинмәгән зимагур атайың алды, ти, алмай ҙа ни!..

Заһира уның һүҙен тағы шарҡылдап көлөү менән ҡеүәтләне.

— Ха-ха, зимагур атайың!.. Эй, илла уҫалһың да, Гөлйыһан!.. Шәүрә бит Алтынбикә менән ярышмаҡсы була!.. Ярышыр ҙа шул. Улар бит күршеторалар. Етмәһә, Шәүрәнең әсәһе Алтынбикәләрҙә аш бешерә!.. Эйе бит, әхирәт!.. Ха-.ха!..

Заһира менән Гөлйыһандың аяуһыҙ мыҫҡылы аҫтында Шәүрә, ситлеккә эләккән бала турғай кеүек, тыбырсынды. Уның мөлдөрәп торған уйынсаҡ теремек күҙҙәре ярҙам һорап ялынған шикелле дуҫтарына тилмереп төбәлде. Үҙ хәле Шәүрәнекенән дә ауыр булғанлыҡтан, һүҙгә ҡатнашмай бер ситтә ултырған Емеш дуҫына инде лә ярҙамға килмәй булдыра алманы.

— Аһа, бында Алтынбикәнең әхирәттәре ултыра икән дә баһа!— тип тегеләр яғына сәнскеле һүҙ ташланы.— Ҡалай яҡлашҡан булалар. Ә ул һеҙҙе әҙәмгә лә һанаманы!..

Заһира, ғәҙәтенсә, шунда уҡ:

— Әхирәте шул. һинең кеүек килмешәк түгел!— тип эләктереп тә алды. Гөлйыһан:

— Әхирәттәре шул, Алтынбикәнең әхирәттәре! һеҙгә ундай әхирәт тәтемәй ҙә,— тип күтәрмәләне.

Емештең уйсан, бойоҡ күҙҙәрендә ут баҙлап китте, ул Заһираның башындағы бармаҡ баҫымындай йылтыр урынға ымланы ла таҡмаҡ әйтеп тә ебәрҙе:

Өс әхирәт пар килгән,
Күңелдәре тар килгән.
һылыу ғына булыр ине,
Тик башына таҙ тейгән!..

Сабира, Сәмигә, Шәүрәләр пырхылдап көлөп ебәрҙеләр. Бынан һуң Заһира менән Гөлйыһан, һүҙ керәштереп енә алмаҫтарын һиҙеп, ныҡышҡанда Емештән тағы ла әсерәк



таҡмаҡтар көтөргә мөмкинлеген иҫкә алып, тиҙ генә кәртә башынан һыҙҙылар Сөнки улар, кескәй булһалар ҙа, быңдай таҡмаҡтарҙың көсөн беләләр, уларҙың телдән телгә күсеп китеүенән ҡурҡалар ине. Үҙе хаҡында кемдең насар таҡаҡ сығарткыһы килһен һуң? Бигерәк тә ҡыҙ кешенен.... Ә Емеш ул мәсьәләлә аяуһыҙ ине. Асыуына тейгән бер ҡыҙға таҡмаҡ сығарырға әҙер тора. Шуның есөн Шәүрә, Сабиралар уны яратһалар, Заһира, Гөлйыһандар уны күрә алмайҙар. Әле лә улар, кәртә башынан төшеп, урамға барып сыҡҡансы:

— Килмешәк, етем быҙау, ерһеҙ!..

— Беҙҙең урамдан уҙырһың әле. Эт һөсләтеп, аяғыңды өҙҙөрөрмөн әле!— тип әрләп барҙылар. Ләкин был Емеш өсөн яңылыҡ булмағанлыҡтан, уның иҫе китмәне. Баҙыян еңгә генә тағы, ауыр итеп көрһөнөп, үҙ алдына һөйләнеп ҡуйҙы:

— Ай-һай-һай-һай!.. Ысынлап та... Төпте ата-әсәләре булып үҫәләр бит! һаман шашып маташалар!— тип ҡуйҙы.

Заһира, Гөлйыһандар киткәс, кәртә башында бер аҙға тағы тынлыҡ урынлашты. Йәнеш, әллә был күңелһеҙ тынлыҡтан ҡотолоу өсөн, әллә ысынлап та әҙерләнгән «һыйы» иҫәнә төшөп:

— Эй, еңгәләр, килендәр, әйҙәгеҙ инде беҙгә сәйгә барайыҡ. Мин, аш-һыуымды әҙерләп, самауырымды ҡайнатып киткәйнем, әле һүҙгә мауығып, онотоп тик ултырам да баһа,— тип ҡайтанан уйын роленә инергә маташты.

Ләкин башынан уҡ боҙолған был уйынды ҡыҙҙарҙың береһенең дә дауам иткеһе килмәне.

— Ҡуй, бөгөн сынаяҡ уйнамайыҡ,— тине Сабира.— Башҡа берәй ҡыҙығыраҡ уйын уйнайыҡ.

— Нимә уйнайбыҙ?— тиештеләр ҡыҙҙар.

— Ҡар һыуына барайыҡ,— тине Сабира.— Оҙонғол башында йүгерешеп уйнарбыҙ.

Быға бөтәһе лә риза булды. Унан лапаҫ башынан кем уҙарҙан һикерешеп төштөләр ҙә, көйәнтәләп сығыр есөн, үҙ өйҙәренә таралдылар. Тик Йәнеш менән Емеш кенә үҙ ҡапҡа төптәрендә аптырашып туктап ҡалдылар.

«Өйгә ҡайтырға иртәме, һуңмы?.. Нисек инеп күнәктәрҙе алып сығырға?!»

Бына инде бүтән ҡыҙҙар көйәнтәләп урамға сыға ла башланылар. Йәнеш ҡыйыуһыҙ ғына Емешкә өндәште:

— Бар, һылыу, күнәктәрҙе алып сыҡ...

Емеш һүҙһеҙ генә күлдәгенең йыртылған урынына ымланы.

— Эй, күрмәҫ әле, бар, һылыу,— тип ялынды Йәнеш. Емеш аласыҡҡа табан атланы. Ләкин уның ҡыйыулығы ла ишек төбөнә хәтле генә етте.

«Нисек барып инергә?!»

Аласыктын, ҡыҫып ҡалдырылған ишегенән тирә-яҡҡа май, ҡурылған ит, ҡоймаҡ еҫтәре таралған. Сынаяҡ шылтыраған, хыхылдашып көләшкән, иркәләшкән тауыштар ап-асыҡ ишетелеп тора.

Бына Әхмәтша ҡараҡ ауыҙ тултырып ашамлыҡ ҡапкан көйө:

— Ну, үҙен шәп тә бисә һин, Сәрбиямал. Бынауындай асығауыҙҙарҙы, самбусаларҙы донъяла бүтән бер бисә лә былай тәмле итеп бешерә белмәй! Биллаһи, бешерә белмәй, валлаһи, белмәй!..— тип ерәнес сөсәләнеп һөйләнә. Сәрбиямал йәш ҡыҙ кеүек кеткелдәй, иркәләнә:

— Кешеһенә күрә бешерәм-төшөрәм инде, нисек итәһең?.. Йән һөйгәнең өсөн ҡулдан килгәнсә тырышаһын. инде, ҡалай итәһек!..

— Йән һөйгәнең өсөн тиген, ә?..

— һағындырып, оҙаҡлап килгән йәр өсөн... Хи-хи-хи...

— Оҙаҡлапмы?! Оҙаҡланыммы ни? Өйгә ҡайтып төшөү менән, кисте лә көтмәй, килеп еттем бит. Бөгөн таңда ғына ҡайттым бит мин.

— Ярар, ярар, үпкәм юҡ,— ти Сәрбиямал, мыйылдап. Унан быҒаса Емеш бер ҡасан да ишетмәгән ерәнес тауыш менән сәрелдәп, татарсалап йырлап ебәрә:

Еләненнен төймәләрен
Элә белми эләсең,
Шәфәк батмый, кеше ятмый,
Килә белми киләсен.!..

— Хи-хи-хи!..

Әсе нәфрәт тойғоһо Емештен. йөрәген ҡыҫып алды. Ул, йылан саҡкан кеүек ишектән ситкә тайшанып, урамға йүгереп сыҡты.

— Ниңә алып сыҡманың?— тип аптыраны Йәнеш.

— Кит,— тине Емеш,— бар үҙең ин. Мин унда инә алмайым.

Йәнеш:

— Эй, шул һине, тыңлауһыҙҙы!—тип асыуланды.— Былай булғас, ҡар һыуына бара алмайбыҙ ҙа баһа! Мин дә инергә ҡурҡам.

Ҡыҙҙар, аптырашып, бер-береһенә ҡарашып, уйланып торҙолар. Ул арала бүтән ҡыҙҙар, көйәнтәләп сығып, Ҡарасәс әбейҙәр тыҡрығы тәңгәленә йыйылып та бөттө.

— Йә, бармайбыҙмы ни, Емеш?—тип ҡабатланы Йәнеш.— Алып сыҡмайһыңмы ни?

Емештен, ҡар һыуына барғыһы бик килә ине. Ул, ҡыйыу булырға тырышып, тағы өй яғына атланы. Ләкин тағы ишек төбөндә туҗтап ҡалды. Асыҡ ишектән, Әхмәтша ҡараҡ менән Сәрбиямалдың һөйләшкән тауышы һаман ап-асыҡ ишетелеп тора ине. Тик улар хәҙер нисектер серле, етди тауышҡа күскәйнеләр.

— Ҡара әле, Сәрбиямал, тиҙҙән аҡтар киләсәк. Чехтар баш күтәргән,— тип шыбырлай Әхмәтша ҡараҡ.— Ҡаланан ишетеп ҡайттым.

— Эй-й, ысынмы, йәнем, ҡалай ҡыуаныс...

— Кемгә ҡыуаныс, кемгә көйөнөс бит әле.

— Уныһы шулай инде.

— Бына шуны әйтәм әле: улар килһә, һиңә лә бик үк яҡшы булмаҫ әле.

— Ни өсөн? Атаҡ, ни тнгән һүҙен. был, йәнем?

— Как же, ирең большевик. Улынды ла большевик булған имеш тип һөйләйҙәр. Ҡара, тел-теш тейеүе бар...

— Кит, юкты ни... Ниндәй ирем дә, ниндәй улым булһын ти улар?! Тик бер күҙ буяуы инде шунда... Унан, йәнем, һин барында, миңә ниндәй тел-теш ҡағыла алһын?.. Хи-хи... һин минһеҙ тора алаһындыр шул, ҡарағашым!..

— Әгәр тел-теш тейеүен теләмәһәң, һин беҙгә ярҙам итергә тейешһең, аңлайһыңмы, Сәрбиямал?

— Ниндәй ярҙам, йәнем? Нисек инде ул «беҙгә»? Шәмсиәң менән икегеҙгәме? Хи-хи...

— һин аңламағанға һалышма. Мин һиңә бик етди эш менән килдем: беләһеңме, аҡтар килгәнсе беҙ бында эште бөтөрөп торорға уйлайбыҙ... Күптән быны эшләргә ине лә... һатыбалдың мылтыҡтарын былар баҫып алып, һалдаттарын тарҡатып эште бер аҙ туктатып торҙолар. Хәҙер һатыбалдың отряды ҡайтанан аҡка баҫты. Ҡорал да етерлек. Волость бирҙе. Йыйып әйткәндә, беҙҙә көс етерлек. Ә ул көстө тағы ла арттырырға кәрәк. Бына шуның өсөн һатыбал менән Федька Рябой берләште. Бөгөн төндә бында буласаҡтар. Анланыңмы, Байгилдене, албырғатып, бер ҡайҙа ебәрмәй янында тот. Бөтә бисәлек мәкеренде ек. Әммә ләкин уны янындан ебәрмә. Ҡосаҡлап, һөйөп алып ятһаң, бигерәк тә шәп булыр... Мин бер юлға көнләшмәм.

Ишек төбендә тыңлап тороу Емеш өсөн ҡурkыныс та, сикһеҙ уңайһыҙ ҙа ине. Ул бер-ике тапкыр ҡагкаға табан йүгерел китергә теләне, ләкин аяҡтары уны тыңламаны.

«Атайымды нимәлер эшләтмәксе булалар!..»—тип, ҡото осоп, тын да алмай ҡатып торҙо ул, ә аласыҡта һөйләшеү Дауам итте.

— Китсәле, йәнем, һин барында уны иркәләргә күңелем тартамы һуң инде...

— Тартыр. Ишетәһеңме, ул һөжүм булырын белмәҫкә

тейеш. Аңланыңмы? Ул йоҡлаһа, башҡалары ла йоҡлар... Хаммат больницала, Тимербай ауырыу... Хәҙер беҙгә Байгилде генә ҡурҡыныс... Төшөндөңмө?

— Төшөнмәҫкә ни... Атаҡ, ата-аҡ...

— Әгәр ошо эште эшләһәң, биллаһи айырып үҙенде алам.

— Алырһыңмы?

— Алам тигәс, алам. Биллаһи-валлаһи... Икмәк-тоҙ! Тик Байгилдене генә тиҙерәк йыйыштырайыҡ. Юҡһа, ул ҡайтҡаны бирле, һине көнләп, һарғайып бөттөм.

— Ысынмы, йәнем... Эй, йәнем!..

Бынан ары һөйөшөү, үбешеү китте. Емештең артабан тыңлап торорға хәле ҡалманы. Берҙән, атаһы өсөн ҡурҡыуҙан, икенсенән, үгәй әсәһенең оятһыҙлығына, һатлыҡлығына нәфрәтләнеүҙән тыны ҡыҫылып, көскә тауышын сығарып:

— Апай,— тип өндәште.— Апай, беҙгә күнәктәр кәрәк ине. Ҡар һыуына барайыҡ тигәйнек.

— Ә, нимә тиһең, сәнселгер!— тип, сәрелдәп, шалтыршолтор күнәктәр күтәреп, Сәрбиямал килеп тә сыҡты. Уның бәләкәс сыҫкан күҙҙәре ут сәсеп быҙлай. Үҙе алыҫтан йүгереп килгән кеше кеүек таһылдай ине. Бындай күренештә ул Емештен, күнелендә бығаса таныш булмаған ытырғаныу уятты. Шунлыҡтан Емеш ҡарашын тиҙ генә унан аяҙ, яҡты күккә күсерҙе.

— Оҙағыраҡ йөрөп ҡайтығыҙ!— тип бышылданы Сәрбиямал. Унан, киң янбаштарын мимылдатып, аласыҡҡа кире инеп китте.

«Эй, атайым ошондай саҡта ҡайтып та инмәй бит, исмаһам. Ҡайтһын ғына ине, күрһен ине.» тип әсенеп уйланауйлана Емеш урам буйлап китте. Ләкин әле ишеткән ҡурҡыныс хәбәр тураһында кемгә лә булһа әйтеү башына ла килмәне. Ә уйынға керешкәс, был хаҡта бөтөнләй ҙә онотто. Йәнеш тә, бер ни белмәй, тыныс ҡына һеңлеһе артынан эйәрҙе.

Улар Тимербайҙар тыҡрығына килеп еткәндә, бында бик күп ҡыҙҙар йыйылғайны. Хатта бая лапаҫ башынан әрләшеп төшөп киткән уҫал Заһира ла, ҡылансыҡ Гөлйыһан да ҡалмағайны.

Ҡыҙҙар, аллы-артлы эйәртенешеп, Оҙонғол яғына киттеләр. Емеш, Шәүрә, Сәмиғәләр, көйәнтәһеҙ булғас, алдан йүгерҙеләр. Улар тыҡрыҡтан үр яҡҡа, һыртҡа барып сыҡҡандан, ҡояш күк көмбәҙенең тап уртаһына килеп баҫҡайны. Көн ғәйәт йылы ине. Ҡыҙҙар әле ҡары ireп бөтмәгән тыҡрыҡтан сыҡҡансы ялан аяҡтарын ныҡ ҡына өшөтһәләр ҙә, ауыл артында дуғаланып ятҡан Үле Эйек ҡашлағына етеү



менән, тиҙ үк йылынып та алдылар. Унан Собхан старшиналарҙың, Ғаббас муллаларҙың әллә нисә йылғы эскерт ашлыҡтары ятҡан ҙур ырҙындар янында өйөлөп ятҡан ҡарҙарҙы йүгереп үтеп, Оҙонғол башына барып сыҡҡас, бөтөнләй йылы булып китте. Бында ҡыҙҙар тамам ҡара ергә баҫтылар. Оҙонғол ҡашлағы ҡарҙан күптән әрселеп, кибеп-боҫланып ята ине.

Сағылтау битләүендәге ҡайынлы сауҡалыҡтан ҡаты сиҙәм аша ағып килгән терегөмөштәй саф ҡар һыуҙарынан хасил булған йырғанаҡтан яҙ көнө ҡар һыуҙары көслө шарлауыҡ булып Үле Энеккә ағып тешә. Ә йәй көнө ул текә ярлы тәрән ҡоро йырғанаҡ булып ҡала. Бында инде ул саҡта уның үҙәнендәге Йәрәктауҙан, Йөрәктау түбәһендә үҫкән сук ҡайындан башҡа, күңелде ылыҡтырырлыҡ бер нәмә лә ҡалмай. Борон заманда, ата-балалар яҙҙан алып көҙгә тиклем йәйләүҙә йөрөгән саҡта, атта сабышып барған ҡыҙҙар, егеттәр, һәр йыл ошо Оҙонғол буйында туҡтап, Йөрәктау түбәһендәге Сук ҡайынға төрле ебәк таҫмалар тағып, биҙәп китә торған булғандар. Был суктар яҙғы-йәйге ямғырҙарҙа йыуылып, уңып бөткәс, ҡыҙҙар көҙ көнө, йәйләүҙән ыҙмаға ҡайтышлай, уға тағы таҫма тағып, ҡайһы берәүҙәре уға хатта суклы беләҙектәр, йөҙөктәр ҙә кейҙереп китә торған булған. Шул арҡала был ҡайын, йәйен-ҡышын гел төрлө суктар менән елберләп, туйға әҙерләнгән ҡыҙ шикелле һылыу, төҙөү булып ултырған. Шуға «Сук ҡайын» тип атағандар уны. Хәҙер, әлбиттә, ул суктарҙың эҙе лә күренмәй. Уның янынан яҙын-көҙөн, уйнап-көлөп, атта сабышып үткән батыр, шаян, уйынсаҡ ҡыҙҙар ҙа инде әллә ҡасан үлеп, онотолоп бөткән. Уның янынан хәҙер Емеш, Шәүрә, Хәсбиямал кеүек ялан аяҡ, ялан баш, ас ҡыҙҙар ғына һәр яҙ шулай, сәүкә шикелле сыулашып, ҡар һыуына йүгереп үтәләр...

Оҙонғол буйының, Сук ҡайындың ошо шаулы үткәне тураһында ҡасандыр Ҡарасәс әбейҙән ишеткән был хикәйә Емештең хәтеренән һис тә сыҡмай. Ул һәр яҙ ғына түгел, хатта йәй көндәрендә лә был Йөрәктау менән Сук ҡайын янынан ғәмһеҙ генә үтеп китә алмай. Бында уға боронғоноң ниндәйҙер серле иҫтәлектәре йәшеренеп яталыр, яҡшылап, иғтибарлыраҡ ҡа-раһаң, уларҙың эҙҙәрен әле лә күреп булалыр төҫлө тойола. Бында килгәндә, алыҫтан насар күрә торған күҙҙәре менән серәнә-серәнә сәғәттәр буйы был ҡайынға текләп тора ул. Унын, ботаҡтарынан арғымаҡтарға атланып сабып йөрөгән теге шат, шаян ҡыҙҙарҙың бармаҡ эҙҙәрен, Улар тағып киткән аллы-гөллө суктарҙың ҡалдыҡтарын эҙләй. Уға был Сук ҡайын да, Йөрәктау ҙа ғәжәп серле, моңһоу, шул уҡ ваҡытта ерҙең иң йәш, иң матур урынылыр; шунын өсөн бөтә йәш-елкенсәктең күңеле яҙ башла-

ныу менән бында тартылалыр һымаҡ тойола. Ысынлап та, Оҙонғолдоң бер яҡтан Үле Эйеккә, икенсе яҡтан үрге туғайға ослайып ингән был урыны, көн битенә ҡарап ятҡанлыҡтан, яҙ көнө иң элек ҡарҙан әрселә. Ҡара хәтфәгә ҡаҙалған шыршы ылыҫтары һымак булып, ҡаҙ үләндәре иң элек бында шытып сыға. Һис тә ауылға, кәртә-ҡураға, юлға теймәгән иң таҙа, иң саф ҡар һыуҙары ла ошонан аға. Шунлыҡтан, Оло Эйек ташып, һыу буръяҡҡа әйләнеү менән, бөтә ҡыҙ-ҡырҡын бында йүгерә...

Шәүрә менән Емеш башта, Оҙонғол башына барғас, Йөрәктау өҫтөнә бик бейектән урғып, күбекләнеп төшкән шарлауыҡҡа текләп торҙолар. Сағыу ҡояш уларҙың туҙған сәстәренән, өшөгән арҡаларынан һыйпап йылытты, йомшаҡ, дымлы кейеҙ кеүек йылы ер табанды иркәләне. Ә түбәндә, өйрәләнеп ятҡан ҡалын ҡар эсендә, әле яңы ғына моронлап килгән себеш кеүек, баштарын саҡ-саҡ ҡына күрһәтеп ятҡан бөҙрә талдар, еректәр, баландар, береһенән-береһе һылыу, зифа буйлы йәш уҫаҡтар, яланғас ботаҡтарын наҙлы сайҡап, уларҙын. күңелдәрен бөткөһөҙ ҡыуаныс менән тултырҙы. Емеш менән Шәүрә һәр яҙ ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы йыйып арығас, төбөндә ултырып ял итә торған «Хәбир батыр» тирәге лә уларҙы үҙ янына саҡырҙы. Унын, үрге туғайҙа бер ағас та ярышып етә алмаған мөһәбәт олоно, ҡеүәтле ботаҡтары өҫтөндә ҡарғалар ҡарҡылдаша, сәүкәләр сәүкелдәшә. Улар ҡороған сыбыҡтарҙан оя үрәләр. Ә тирәктең иң осонда, ямғырҙан йыуылып, ҡояшта ҡыҙынып аҡһыу төҫкә ингән ҙур ҡыҙыл байраҡ һалмаҡ ҡына елберләп тора. Уны былтыр, каторганан ҡайтҡас, Тимербай ағай, Иштуғандар, Әхәттәр менән шунда барып элеп ҡуйғайнылар. Байрас мендереп элгәйне уны. Шәүрә, Сәмиғә, Емештәр ҙә ҡыҙыҡ күреп тирәк төбөндә ҡарап торғайнылар. Тимербай ағай шунда:

— Был тирәктең төбөнә Хәбир батырҙың изге ҡаны түгелгән. Әйҙә шуның өсөн бында хәҙер гел ошолай ҡыҙыл тыу елберләп торһон,— тип әйткәйне.— Был «Кафыр Хәбир» тирәге түгел, ә «Батыр Хәбир» тирәге булыр,— тигәйне. Батыр Хәбир тирәге... Ана унда теге ҡыҙыл тыу һаман елберләп тора. Тик ҡасан һуң Емеш менән Шәүрә унда барыр? Ҡасан туғай ҡарҙан әрселер ҙә ҡасан ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ шытыр?! Ул саҡта әле күп саҡрымдарға йәйелеп, үҙенек ҡыҙыл мәтегә буялған болғансыҡ һыуы менән бөтә туғайҙы ҡаплап ятҡан Оло Эйек тә йыуашып үҙ үҙәненә ҡайтыр, туғайлыҡ сәскәләр, һандуғастар менән тулыр... Эй, рәхәт тә булыр һуң ул саҡта!

Емеш менән Шәүрә, шундай уйҙарға батып, тирә-яҡты күҙәтеп торған арала ҡыҙҙар:

«Кетеү!», «Әс бүкән», «Кейәүеңбалға саҡыра!» кеүек ке-



щенән ысын мәғәнәһе менән йүгереклек, йылғырлыҡ талап иткән яҙҙың иң күңелле уйындарын уйнарға керештеләр.

— Беҙ ни эшләп торабыҙ?— тип ҡысҡырҙы Шәүрә,— әйҙә, тиҙ булайыҡ!..

— Эй-й, әйтмә лә!..

Улар ҡыуыша-йүгерешә уйнаусылар араһына инеп юғалдылар.

Емешкә бигерәк тә «Биләүсә» уйыны оҡшай ине.

— Биләүсә!

— Билдән ала.

— Батырың булһа, ебәреп ҡара!..

Бында йүгерек тә, батыр ҙа, аянмаған да кеше генә үҙ төркөмөнә дан алып килә. Аянып-наҙланып торған кеше төркөмдө тарҡата. Емеште ҡыҙҙар йүгереклеге, ихласлығы, аянмай көрәшеп, үҙ төркемөнә еңеү яулашыуы өсөн яраталар.

Яҙ, ирек, уйын ҡыуанысы менән ҡалҡынып, күккә осоя китерҙәй булып ярһыған Емештең ҡыуанысының бегөн игесиге булманы. Ул мәңге шулай бер туҡтамай уйнарға, йүгерергә, келөргә, шаярырға эҙер ине. Ләкин оҙаҡламай уйын һыуынды. Ҡыҙҙар өйҙәренә ҡайтырға йыйынды. Көмөштәй саф, йылтыр ҡар һыуҙарын күнәктәренә мөлдөрәмә тултырып, берәм-берәм, төркөм-теркөм булып ауылға табан атлай башланылар. Емеш, Шәүрә, Сәмиғәләр ҙә билдәренән ҡосаҡлашып, йырлаша-йырлаша, улар артынан эйәрҙеләр.

Емеш яңғыҙ саҡта үҙенән-үҙе йыр сығарып, шуға үҙ йөрәгендәге ҡайғы-хәсрәтле моңдар һалып йырларға ярата. Шундай көйҙәр, йырҙар ғына унын йөрәгенең ауыр хәленә тура килгән кеүек була ине. Был көйҙәрҙе, йырҙарҙы ул башҡа ваҡытта һис тә ҡабатламай, улар унын иҫендә лә ҡалмайҙар. Унын күңелендә, шул ваҡыттағы йөрәк хәленә, кәйефенә ҡарай, үҙе лә аңламаҫтан килеп тыуалар ҙа шунда уҡ онотолалар. Тик тиңдәштәре менән бергә булғанда ул бөтәһенә билдәле булған йырҙарҙы, көйҙәрҙе генә йырлай. Әле лә ул бына:

Алдыр Эйек буйҙары,
Гөлдөр Эйек буйҙары,
Ал булһа ла, гөл булһа ла,
Ҡалды Эйек буйҙары,—

тип йыр **башлап** ебәрҙе. Унын артынса **Шәүрә:**

Ҡулъяулығым асылдыр,
Асыл түгел йәселдер,
Йәс басымды син аздырдыщ
Тәсә нисәп басылдыр...—

тип ҡайҙандыр, кемдәндер яҙа-йоҙа отоп алған йырын, татарса йырлайым тигәнсә, бөтөнләй һаҡау итеп йырлап ебәрҙе. Сәмиғә лә уға ҡушылды. Тик Емеш кенә ҡушыла алманы. Сөнки был йыр бик мәғәнәһеҙ һәм йәмһеҙ тойолдо уға. Ә ул мәғәнәһеҙ һүҙҙәрҙе яратмай ине.

Емештәр ҡайтып еткәндә, аяҡты киң баҫып, бөйөргә таяна биреп, Сәрбиямал ҡапҡа төбөндә тора ине.

— Эй, ҡороғорҙар, әрәм тамаҡтар, тағы оҙағыраҡ йөрөр инегеҙ!

Был тауышты ишетеү менән, Емеш тертләп китте. Уның ҡыш буйы ситлектәге ҡош кеүек зарыҡҡан күңелен осондороп, ҡанатландырып күктәргә ашырған яҙ шатлығы, әкиәттәге тылсымлы алтын һарай шикелле, күҙ асып йомғансы юҡҡа сыҡты. Ул, ғәйепле башын түбән эйеп, ҡапҡа төбөндә туҡтап ҡалды. Сәрбиямал уның күлдәгенең баяғы йыртып тегелгән урынын күреп алды.

— Ата-аҡ! һин шулай күлдәк йыртып йөрөйһөңмө ни әле, сиған балаһы!— тип ҡысҡырып та ебәрҙе. Шул ыңғайға уҡ Емештең сәс толомонан тотоп алып кереп тә китте.— Иламай ҙа бит, сиған балаһы!.. Яуызлығына барып иламай ул. Юрый, үлтерһен дә гонаһлы булһын тип, ҡарышып иламай ул сәнселгер!..— тип һөйләнә-ҡарғана туҡманы ул. Балаларҙың ошаҡлау ғәҙәте булмауҙан файҙаланып, ул Байгилде ағай өйҙә юҡта һаман уларҙы яфалауын дауам итә ине.

Емеш, Сәрбиямал туҡмауҙан туҡтау менән, үҙе хаҡында онотоп, урамға йүгереп сыҡты ла Тимербайҙарға табан йүгерҙе. Бая аласыҡ ишеге аша ишетеп ҡалған һүҙҙәрҙең ҡот осорғос мәғәнәһе, ни өсөндөр, унын. аңына әле генә, ҡаты туҡмалғас ҡына килеп етте:

«Уй, кис булып килә лә баһа!..— тип сабырһыҙланып китте ул.— Атайымды тиҙерәк табырға, әйтергә кәрәк!.. Юҡһа уны ла Ҡарасәс инәйем кеүек туҡмап үлтерерҙәр!»

## VI

Был кисте Сәрбиямал Байгилде ағайға ҡарата ғәҙәттә булмағанса илгәҙәк, һүҙгә лә, һыйға ла йомарт булды. Иттән бик тәмле итеп асығауыҙ бешерҙе. Бауырһаҡты ла онотманы. Аласыҡтан бер өҙлөкһөҙ шыжылдаған-быжылдаған тауыштар ишетелеп, ҡайнаған май еҫтәре борҡоп ҡына торҙо. Әйтерһең, уларға бөгөн ниндәйҙер ҡәҙерле ҡунаҡ килә йәки байрам көн ине.

Аласыҡтағы эштән Йәнеш кенә түгел, Емеш тә бөгөн бушаманы. Сәрбиямал уларҙы:

— һыу алып кил. Утын алып ин. Бауырһаҡ ҡырҡ. һуған әрсе кеүек бойороҡтар менән үҙ тирәһендә йүгертеп кенә йөрөттө. Үҙ-ара бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшеп алырға ла, ҡайҙа булһа ла сығырға ла ирек бирмәне. Шулай ҙа Емеш, кәртәгә утынға барған арала, солан эргәһендәге түмәр өҫтөндә һаҡалын семеткеләп, ниндәйҙер тәрән уйға батып ултырған атаһы яғына аптыраулы һәм борсоулы ҡараш ташламай уҙа алманы:

«Мин уға әйттем дә баһа!.. Ниңә ул өйгә ҡайтты икән? Ниңә былай аңра кеше һымаҡ тик ултыра?.. Төн етә бит инде. һатыбал килеп етә лә баһа!.. Әллә мин әйткәнде аңламаны? Әллә ышанманы?..»

Ләкин Байгилде ағай уның был борсоулы ҡарашын, гүйә, күрмәне лә, аңламаны ла. Сәрбиямалдың оҙон-оҙаҡ әҙерләгән һыйын тыныс ҡына көтөп, һаман шул түмәр өҫтөндә ултыра бирҙе. Бына төн етте. Өйгә ут алынды. Улар киске тамаҡ ашарға ултырҙылар.

— Ошо арала бер ҙә өйҙә тормай, ваҡытында ашамай йонсоп киттең бит, атаһы. Шуға бөгөн үҙенде һыйларға булдым әле. һәйбәтләп аша ла штобы ятып ял ит. Етер, бөгөн мин һине бер ҡайҙа ла ебәрмәйем,— тип көлә-шаяра Сәрбиямал Байгилде ағайҙың алдына асығауыҙ, самбуса, бауырһаҡтарын алып килеп ултыртты. Хатта ҡарағат ҡағы менән eләк ҡағы ла табып сығарҙы.— һыйлан, атаһы, хәл йый.

Ул бөгөн ҡыҙҙарҙы ла онотманы. Бешерелгән әйберҙәрҙән уларға ла мул ғына өлөш сығарҙы.

— Ашағыҙ, ҡыҙҙарым. Ҡарынығыҙ асҡандыр.

Өй эсенә аш-һыуҙан тәмле еҫ таралды. Бөтәһе лә ихласланып ашарға кереште. Тик Емештең генә, ҡарыны ас булһа ла, күңеле тыныс булмағас, тамағына аш барманы. Ҡулы тәмле самбусаларға үрелмәне. Ул, ҡырҡыу һәм аптырауҙан кин, асылған күҙҙәрен берсә атаһына, берсә үгәй әсәһенә күсереп, ашъяулыҡ янында һүҙһеҙ ҡатып ултырҙы. Унын, был ҡыланышына түҙеме бөткән Сәрбиямал яһалма илгәҙәклеген онотоп:

— Нимә көтәһең, күҙле бүкән! Ниңә ашамайһың?—тип екеренгәс, ул бер самбусаны алып тешләһә лә йота алмай аҙапланып кире ҡуйҙы. Уның тамаҡ төбөнә нимәлер килеп тығылып, хатта төкөректө лә үткәрмәй тора һымаҡ ине.

— Минең башым ауырта,— тине ул, иламһырап,— ашағым килмәй...

— Килмәһә, бар, ят. Ултырма бында табын йәмен ебәреп,— тине Сәрбиямал. Байгилде ағай ҙа ашығып уның һүҙен ҡеүәтләне:

— Эйе, ауырығас, ятырға, ял итергә кәрәк. Ашағы килмәгәс, көсләп ашауҙан ни файҙа?

Ул Емештен, түҙемдән сығып, үҙенә бая әйткән һүҙҙәрен бында ҡабатлап ҡуйыуынан ҡурҡа ине. Емеш атаһына тағы

бер ҡат борсоулы, шелтәле ҡараш ташланы ла сәй янынан тороп китте. Бәләкәс яҡта ла, тышта ла ҡараңғы, айһыҙ төн хөкөм һөрә ине.

Емеш Сәрбиямалдың йән биҙҙергес яһалма иркәлегенә, атаһының ғәмһеҙ, тыныс тауышына ҡолаҡ һала-һала, өлкәндәрҙең аңлайышһыҙ ҡылыҡтары хаҡында аптыраулы уйға батып:

«Мин бөгөн йоҡламаҫҡа, тегеләр килә башлаһа, атайыма тиҙ генә белдерергә тейешмен», тип әҙерләнеп ята торғас, тәрән йоҡо эсенә инеп юғалғанын тоймай ҙа ҡалды. Оҙаҡламай Йәнеш тә уның янына килеп ятты. Ә ҙур яҡта Сәрбиямал һаман тынманы. Сәй эсеп бөткәс тә Байгилде ағайҙың бер алдына, бер артына төштө. Мамыҡ мендәрҙәрҙе ҡырҡ ҡат ҡабартып, һәйбәтләп урын йәйҙе. Йылы, йомшаҡ юрған аҫтында, туҡ бесәй кеүек мырылдап, ирен ҡуйынына саҡырҙы. Һуғышҡа китер алдынан булған бәхетле бер төндө хәтерләтеп:

— Йә, шул бер төн өсөн генә иргә сыҡтыммы ни мин һиңә? Йә, һуғыштан ҡайтыуыңа йыл тулып үтте. Исмаһам, бер асылып һөйләшкәнең, бер ихласлап ҡосаҡлағаның да юҡ бит. Эй алла, бигерәк ғүмеркәйем зая үтә бит,— тип тәтелдәне.— Әҙәм төҫлә ҡуштан ирем булһа, әллә мин дә былай биҙәү булып йөрөмәҫ инем,— тип илаулап та алды.

Байгилде ағайҙың был ялған һуҙҙарҙе ҡырҡа рәүештә еҙгеһө: «Табыр булһаң, Әхмәтшавдан да табыр инең инде», тип уның намыҫһыҙлығын йөҙөнә бәргеһе килде. Ләкин ендәшмәне.

«Кәкрене ҡәбер генә төҙәтә тиҙәр бит. Һүҙ әрәм итеп тораһы ла юҡ...»

Ә Сәрбиямал һаман тынманы. Ул, ирен үҙ янына килеп ятырлыҡ хәлгә еткерә алмаһа ла, ваҡыты еткәнсе өйҙән сығармай тотоп торорға тырыша ине. Уға Әхмәтшаһы шулай ҡушты. Бөгөн тендә, һатыбалдар килеп баҫҡанда, Байгилде бер ғәмһеҙ уның ҡуйынында ятырға тейеш.

«Барыбер ул мине яратмай. Сәғүрәһен онота алмай. Бәлки, Әхмәтша менән сыуалғанды һиҙеп, минән биҙәлер... Былай итеп зина ҡылып, гонаһлы булып йәшәгәнсе, Әхмәтшаға хәләл ефет булып торормон, бәлки...» тип Сәрбиямал эстән үҙен аҡларға тырышты.

«Алдауҙан, ике йөҙлеләнеүҙән һатылыуға хәтле барып етте. Уйламай ҙа ирен үлемгә бирергә ята бит, ә?» тип аптыграп уйланды Байгилде ағай. Уның күҙ алдына һөйөү һәм моң менән тулы шоморт ҡара күҙҙәр килеп баҫты.

«Сәғүрә!.. Сәғүрә!.. Ниңә был минутта минең янымда һин түгел, ә был ен алмаштырған яуыз бисә икән?!>

Был уй артынса Байгилде ағайҙың иҫенә, ни өсөндөр, улы Иштуған килеп төштө. Ҡайтҡаны бирле уның хаҡында кемән генә һорашманы, ҡайҙан ғына эҙләмәне ул. Ләкин Иштуғандарҙың хәлен белә алманы. Берәүҙәр, шул ҡасып киткән төндө уларҙы һатыбал, Әхмәтшалар ҡыуып етеп, үлтергәндәр икән, тинеләр. Икенселәре, улар ҡалаға барып, Ҡыҙыл Армияға яҙылғандар, хәҙерге кендә лә аҡтарға ҡаршы һуғышып йөрөйҙәр, имеш, тип һөйләнеләр. Ә асығын бер кем дә белмәне.

«Их улым, улым, тип, эстән генә ауыр итеп көрһөнөп -ҡуйҙы Байгилде ағай.— Хәҙер минең уң ҡанатым була торған егет инең бит һин...»

— Ят, тим, атаһы, ят,— тип уның уйын бүлә Сәрбиямал.— Ташла шул мылтығыңды. Нимәгә һин уны ҡатыныңдан артыҡ күреп ҡосаҡлап ултыраһың?

— Ашыҡма, ятырмын. Иртә бит әле,— тине Байгилде ағай.— Йоҡо ла осоп тора...

«Әллә берәй нәмә һиҙенә инде кафыр,— тип Сәрбиямал да үҙенсә борсола.— Бер уйлаһаң, йәл дә бит әле... Эй-й, ярар ҙа!.. Барыбер гонаһлы баш гонаһлы инде...»

Унан тағы йәне түҙмәй ҡысҡырып ебәрә:

— Ят тим дә баһа! Утты һүндер. Кәрәсинемде әрәм итәһең!

Байгилде ағай өндәшмәй. Мылтығын һөрткеләп, майлаштырып, нисек тә эш табып, кейенгән көйө һаман урындыҡ ситендә ултыра бирә.

«Бөтә һаҡлыҡ сараһы күрелгән дә бит, кем белә? Әҙер торорға кәрәк...»

Улар һатыбалдын теге мылтыҡтарҙы кире ҡайтарып алыу теләге менән яныып йөрөүен, Байгилделәрҙең дружинаһына һөжүм итергә әҙерләнеүен белһәләр ҙә, бының ҡасан, ниндәй ваҡытта булырға тейешлеген белмәйҙәр ине әле. Шулай ҙа һәр төндө хәрбиҙәрсә әҙер тороп үткәрәләр ине. Ә инде бына, һис уйламағанда, Емеш уларға был һөжүмдең ваҡытын әйтеп бирҙе.

Бөгөн-иртән китергә ятҡан боҙ өҫтөнән хәҙер юл юҡ. Һатыбал Илсеғолға һөжүм итергә теләһә, уға хәҙер Оло Эйектең был яғына сығыр өсөн бер генә юл бар. Ул да Мраковка менән Яҡуп ауылы араһындағы ағас күпер. Уларҙы ошо күперҙән сыҡҡан ерҙә ҡаршы алырға кәрәк.

Дружинасылар шулай хәл иттеләр: дошмандың бындағы шымсыларының күҙен бәйләр өсөн, Байгилде ағай өйҙә ҡала. Сәрбиямалдың һыйын, хөрмәтен ҡабул итеп, «алданып» ултыра. Ә дружинасылар, ҡараңғы төшөү менән берәм-берәм ауылдан сығып, Оҙонғол башына йыйналалар. Унан бергәләп күпергә йүнәләләр. Күперҙең был яғында, юл буйлап үҫкән ҡуйы туғайлыҡта, улар дошманды көтөп ятырға тейештәр.

Дружинаға Закир командир хәҙер. Ул засаданы уңышлы үткәрергә вәғәҙә итте. Дружина әле һатыбал отрядына ҡаршы асыҡтан-асыҡ һөжүмгә сығырлыҡ көс булып ойошоп етмәгән булһа ла, засаданан тороп уны ҡыйратырлыҡ ине.

«Ә шулай ҙа... кем белә?..»

Байгилде ағай был төндө мылтығын ҡулынан төшөрмәй урындыҡ ситендә ултырып үткәрҙе. Ә инде таң атҡас, төнгө хәлдәр тураһында белергә ашҡынып, өйҙән сығып та китте.

Емеш уянып: «Йоҡлап киткәнмен дә баһа! Уй, атайыма бер-бер хәл булманымы икән?..» тип, хафаланып, йүгереп сыҡҡанда, ҙур яҡта бер кем дә юҡ. Иртәнге сағыу ҡояш ҡына, бөтә өй эсен яҡтыртып, шат балҡып тора ине.

Емеш уҡ кеүек атылып тышҡа сыҡты. Ишек алдында ла бер кем дә күренмәй.

«Аласыҡталарҙыр!..» тип уйланы Емеш. Унда йүгерҙе. Аласыҡта ниндәйҙер талаш-тартыш бара ине. Емеш, ҡурҡып, инмәй туҡтаны.

— Үлтермә, йәнем! Туҡмама, ебәр! Мин ғәйепһеҙ!—тип быуылып бышылдай Сәрбиямал.— Биллаһи-валлаһи, икмәктер, тоҙҙор, әйтмәнем. Бөтәһен һин ҡушҡанса эшләнем... Өйҙә тотоп торҙом...

— Әйткәнһең. һинән башҡа бер кем дә белмәй ине. Беҙҙекеләрҙе былар күпер алдында көтөп ятып ҡырғындар. Аңлайһыңмы, ҡырғандар! һатыбал саҡ ҡасып ҡотолған! Ишетәһеңме, ахмаҡ бисә, һин һаттың беҙҙе!

Бынан һуң дөбөр-шатыр көрмәкләшеү, һуғышыу китте. Тап-топ һуҡҡан, Сәрбиямалдың:

— Әләү-ү!.. Әләү-әләү!..— тип сеңләгән тауышы ишетелде. Оҙаҡламай аласыҡтан күҙҙәренә ҡан тулғанӘхмәтша ҡараҡ атылып килеп сыҡты ла арт ҡапҡаға табан йүгерҙе. Ул Сәрбиямал янына һәр саҡ шулай кәртә артынан, арт ҡапҡанан ғына йөрөй.

Емештен йөрәге, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡоторонҡо ҡыуаныс менән тулап китте.

«Былай булғас, атайым тере!.. Тимербай ағай ҙа... Закир ҡоҙа ла... Хәлим ағай ҙа... бөтәһе лә тере!..»

Ул ҡыйыуланып аласыҡҡа барып инде. Ләкин унын, ҡыйыулығы шунда уҡ юҡҡа сыҡты. Сәсе-башы туҙған, биттәре, беләктәре күгәреп бөткән үгәй әсәһен күреү менән ул ҡото осоп кире тышҡа ташланды. Сәрбиямал уға күҙҙәрен аҡайтып, бармаҡ янап ҡалды.

— Ҡасып ҡотола алмаҫһың! Ҡулыма килеп эләгерһең, сиған балаһы! Кисә аласыҡ ишеге төбөнә һин генә килдең! һин генә еткергәнһең, етемәк! Йәнең сыҡҡыры!



Ошо көндән һуң Сәрбиямал был уңышһыҙлыҡ өсөн Емештән үс алырға һәр саҡ берәй сәбәп эҙләп кенә йөрөнө. Оҙаҡламай бындай уңай сәбәп килеп тә сыҡты.

Үҙенен күҙ сағылдырғыс һылыулығынан, биҙәү кейемдәренән һәм йөрәгендә уянған наҙлы мөхәббәттән башҡа бер ниҙе лә күрмәгән, бер ниҙе лә тоймаған ҡылансыҡ һылыу ҡыҙ шикелле ярһыу яҙ бөтә матурлығы менән уйнарға, балҡырға кереште. Тәпәш өйҙәрҙе бөтөнләй тигәндәй күмеп яткан тау-тау ҡарҙар бер-ике көн эсендә күҙҙән юғалды. Улар урынында кеҙгеләй ялтыр йәйелмә шәреләр, күләүектәр, шишмәләр, шарлауыҡтар барлыҡҡа килде. Улар ҙа йырлай-йырлай Оло Эйеккә барып ҡушылырға, унын ташҡыны менән бергә тиҙерәк, алданыраҡ Оло диңгеҙгә етергә ашыҡты. Көн-төн туктамай гөрләне шарлауыҡ. Ҡар һыуҙары үҙҙәре менән бергә ҡыш буйына ер өҫтөнә йыйылған бетә сүп-сарҙы, тиреҫ-миреҫте ағыҙып, йыуып алып киткәнлектән, ер өҫтө, яңы ғына йоморткanan сыҡҡан ҡаҙ бәпкәһе шикелле, таҙа, матур, наҙлы булып йылкылдап ҡалды. Унын, күпереп торған ҡара мамыҡ тәненә, бик тиҙ арала йәшел ебәктән күлдәк үрелде. Йылдың себеш кеүек ҡыҙыу, нәфис тәнле, үҫмер ҡыҙ кеүек һылыу, көләс битле сағы килде. Их! Бер туктамай тышта йүгереп йөрөһәң ине хәҙер. Нисек рәхәт булыр ине бит!.. Ләкин ҡайҙа һуң? Емеште Сәрбиямал урамға түгел, ишек алдына аяҡ баҫтырманы.

— Атайыңа оҡшап зимагурланып йөрөмә!— тине ул, ҡырт киҫеп.— Штобы шәлеңде тиҙерәк бәйләп бөтөр. Тамаҡ хаҡынды ҡайтар!

Емеш, моңайып, әкрен генә йырлай-йырлай, бәләкәс яҡтың тәҙрәһе тебөндә ҡуҙғалмай шәл бәйләп ултыра.

Башыҡайым ауырый — баҫҡан юҡ, .
Баш аҫтына яҫтыҡ һалған юҡ.
Үҙ әсәкәйгенәм, һай, булмағас,
Үҙәләнеп торран кеше юҡ...

Ә тәҙрә аша уға икһеҙ-сикһеҙ кин. көләс зәңгәр бушлыҡ йылмая. Яҙ ҡояшының шаян нурҙары, унын нәҙек йылтыр ҡорос энәләренең үткер остарына ҡунып, алтын саҡкылар сәсрәтеп шаяра. Өйкөм-ейкөм аҡ болоттар күктең күреп туймаҫлыҡ һылыу йөҙенә аҡ селтәрҙәр бөркәп уйнай. Ҡайһы саҡта ҡыр ҡаҙҙары ла, торналар ҙа Емештең тәҙрәһе тәңгәленән, түбәндән генә уҙып китәләр. Емеште үҙҙәре менән арьяҡҡа, туғайлыҡҡа, күләүеккә саҡыралар. Унын ҡулдары ҡайһы саҡта үҙлегенән-үҙҙәре бәйләүҙән туҡталып ҡала. Шулай яңғыҙ уйлана-уйлана һуңғы бер йыл эсендә күпме

шәл бәйләне ул. Йөн шәлдәр ҙә, дебет шәлдәр ҙә, телләп тә, сәсәкләп тә бәйләне. Һәр бер шәлгә үҙенең ярһыу йөрәгенек утын, саф, уяу мейеһенең бөтә яҡтылығык, уйсан күҙҙәренең бөтмәҫ-төкәнмәҫ нурын һалды. Ул бәйләгән һәр бер шәл һис ваҡытта икенсеһенен. күсермәһе булманы. Һәр береһе Емештең шул минутта йөрәге тыуҙырған өр-яңы биҙәк, бөтөнләй башҡа мөһөр, үҙенә генә хас сәскә менән байый, биҙәлә барҙы. Шуға күрәмелер, әллә Сәрбиямалдың тырышлығынанмылыр, Емешкә һуңғы йылдарҙа һис тә эшһеҙ ултырырға тура килмәне. Шәл бәйләтергә теләүселәр артҡандан-арта ғына барҙы. Үҙ ауылдарынан ғына түгел, хәҙер күрше ауылдарҙан да, хатта Мраковка, Каргалка хуторҙарынан да Сәрбиямал заказдар алып ҡайта башланы.

— Бәйлә, тиҙерәк бөтөр штобы!—тине ул һәр бер яңы заказды Емешкә алып килеп биргән һайын.— Атайындың тапҡаны һеҙгә етмәй. Мине хәҙер кәсеп иттермәйҙәр. Элекке шикелле он, ашлыҡтейәп Ырымбурға йөрөп тә булмай хәҙер. Хөрриәт бит!.. Сәүит бит хәҙер. Бына, еңел булһа, үҙ тамағынды үҙен туйҙырып ҡара әле!..

Ләкин үҙе эш хаҡына кемдән күпме алыуын Емешкә бер ҡасан да әйтмәне. Дөрөҫөндә бынык менән ҡыҙыҡһыныу Емештен. башына ла килмәне. Унын был турала хатта уйлап та ҡараған булманы. Ул тик бәйләүен генә белә, был эшен бөтә йөрәге менән ярата ине. Ошо мауыҡтырғыс эш арҡаһында ҡыштар ҙа, нисектер, тиҙерәк, күцеллерәк үткән һымаҡ була башланылар.

Шулай ҙа бөгөн уға һөйөп эшләгән был эше лә ницәлер тыныслыҡ бирмәне. Бына ул үҙе лә аңламаҫтан, ҡасандан бирле үҙен шәл бәйләргә өйрәткән Айһылыу шикелле уйсан, моңһоу ҡараштарын тәҙрә аша ҡайҙалыр текләп, шым ғына ултыра. Ә ҡулдары үҙлегенән-үҙҙәре, күҙ эйәрмәҫлек тиҙлек менән, бәйләй ҙә бәйләйҙәр. Нәҙек кенә йылтыр ҡорос энәләр сыңлауы аҫтында төрлө-төрлө биҙәкле, турғай суҡышы һымаҡ, кескәй нәфис телле, йылы йомшаҡ шәл тыуа, үҫә, ҙурая бара. «Ниндәй бәхетлелер быны ябынған кешеләр... Тән, май кеүек иреп, рәхәтләнеп китәлер бынын, эсендә... Емештең бер ҡасан да ундай рәхәтте татып ҡараған юҡ әле. Хатта берәй башалтай ғына ла бәйләп кейә алғаны юҡ ул үҙенә. Эй, үҙ әсәһе булһа уға башалтайлыҡ түгел, хатта шәллек йөндө лә йәлләмәҫ ине...»

Сәрбиямал үҙ ғүмерендә Емешкә әллә нисәмә тапҡыр кәзә, һарыҡ, хатта быҙау ҙа инселәне лә бит... Тик уларҙың үҙҙәрен түгел, бер бөртөк ҡылдарын да бирмәне шул. Быны ул хоҙайҙы алдау өсөн генә шулай эшләй бит. Әйтәйек, унын берәй бәрәсе йәки быҙауы сирләй башлаһа, ул:

— Әгәр ҙә мәгәр ошонан да үлмәй ҡалһа, уны Емешкә



бирер иием. Емешкә инселәйем,— тип әйтеү әйтә. Ул, ни өсөндөр, Емештен күҙе ҡаты, күҙе тейеүсән тип тә, уға инселәгән мал тере ҡала тип тә ысын күңелдән ышана. Щуға күрә хоҙай менән үҙ араһында өҙлөкһөҙ алдашыу, хәйләләшеү алып бара. Йәнәһе, Емешкә инселәгәс, хоҙай, етемде йәлләп, малды үлтермәй. Шулай итеп, Сәрбиямал бер ҡатлы хоҙайҙы һемәйтә лә ҡуя. Былтыр ҙа ул теге Емеш яратҡан шаян, иркә күк билдәш бәрәсте, эсе китә башлағас, Емешкә инселәгәйне лә. Тик бәрәс һауыҡҡас, ғәҙәте буйынса, был турала тынын да сығарманы...

— Бәйлә, бәйлә! Штобы тиҙерәк бөтер!—тип Емештең уйын бүлдерҙе Сәрбиямал.— Ниңә унда әллә ҡайҙа, күккә текләп ҡатып ҡалдын? Әллә унда һиңә шайтан ҡойроҡ болғап торамы?! Ишетәһенме, телһеҙ, күңел биреп кенә эшлә, тим! Минең әхирәтемдең ҡыҙынан өйрәнеп, бөтә ауылға> данлы шәл бәйләүсе булып алдың бит. Ҡәҙерен бел!

Эйе, Емеш шәл бәйләү оҫтаһы хәҙер. Ауылда уны бөтәһе лә зирәк, отҡор, егорле тип маҡтайҙар, һоҡланалар. Ләкин бынан Емешкә ни енеллек килә?.. Ана бит, Шәүрәнең атаһын да оҫта тип маҡтайҙар. Емештең атаһын да, хатта әсәһен дә шулай маҡтағандар... Унан еңеллек килгәнме ни уларға? Эшсәнлек, егәрлелек менән бәхетле булып булмай, күрәһең?.. Бәхетле булыр есөн матурлыҡ та, егәрлелек тә түгел, ә нимә кәрәк икән һуң?

Емеш һаман шулай уйсан, моңһоу, шул уҡ ваҡытта ни тиклем иҙелеүгә лә ҡарамаҫтан, текә һәм ғорур ҡарашлы, һөрмәле ҙур ҡара күҙҙәрен төпһөҙ бушлыҡҡа текәп, шәл бәйләп тәҙрә тебөндә ултырҙы ла ултырҙы. Бына бер ваҡыт шәлдең уртаһы ла бәйләп бөтөлдө. Емеш был уртага, үҙе алдан бәйләп, әҙерләп ҡуйған телле, селтәрле шәл ситтәрен беркетеп сыҡты. Кемдендер бәхетенәтағыбер йомшаҡ, йылы нәфис дебет шәл елгерҙе. Инде унВl йыуып кирергә лә, эше лә бтв. Унан инде, әйҙә, кинәнеп, ҡыуанып әллә нисә йылдар буйы ябын да ябын. Ябынған һайын матурлана, күперә, йомшаҡлана ғына барасаҡ... Хәҙер Емешкә бер аҙ уйнап алырға ла мөмкин булыр, бәлки...

Сәрбиямал шәлде төрлөсә әйләндереп-тулғандырып:

— Бынауында күҙ ҡалдырғанһың түгелме?.. Күҙ айырып бәйләгән урындары бар һымаҡ бит, аҙғын! Гел урамға текләп ултырып бәйләгәс, күҙ айырылмай ни эшләһен!.. Ата-аҡ, нинә был шәлдең телдәре эрерәк һымаҡ?.. Әллә һин тиҙерәк бөтөрәйем тип шулай иттеңме быны?.. Башҡаларынын теле күгәрсен суҡышындай ғына була торғайны түгелме һуң?..— тип, терләсә текемләп ҡараһа ла, был һүҙҙәренен дөрөҫлегөн раҫларлыҡ дәлил таба алмағас:— Бар, һыу әпкил. Һыу йылыт. Шәлде хәҙер үк йыуып, кипеп ҡуйырға кәрәк,— тине.



3

Шунын. артынса ук:— Йәнеште үрге туғайға утынға ебәрҙем. һин дә, һыу әпкилгәс, уның артынан бар. Икәүләп берәр ҡосаҡ утын күтәреп апҡайтығыҙ,— тип өҫтәне.

Емеш, әлбиттә, быға ла ҡыуанып риза булды. Уйнарға рөхсәт итмәһә лә, һәр хәлдә, һыуға барыу ҙа, туғайҙан утын күтәреп алып ҡайтыу ҙа, өйҙә шәл бәйләп, зарығып ултырыуҙан яҡшыраҡ ине хәҙер.

Емеш, көйәнтәләп, йүгерә-атлай урамға сыҡты. Әле генә күпереп ҡалҡҡан ҡаҙ үләндәре менән ҡапланған киң таҙа урам иҫ киткес матур һәм кешеһеҙ ине. Емеш уға һоҡланып та, берәр ҡыҙ күренмәҫме тип тә, ҡапҡа төбөндә туҡтап ҡалды. Ошо ваҡыт уның иҫенә беренсе булып Ҡарасәс әбей килеп төштө:

«Эй, бахыр, хәҙер инде был матур яҙҙы ул бер ҡасан да күрмәйәсәк бит... Йә, ни өсөн, ниңә үлтерҙелер инде уны?! Хатта бынауы Ульябайҙың Ульябайын да үлтерҙеләр бит әле...»

— Йә, ниңә ҡатып ҡалдың тағы?.. Тиҙерәк бул, сиған балаһы!— тип ҡысҡырҙы арттан Сәрбиямал.

Емеш шундай һәйбәт кешеләрҙе ваҡытһыҙ гүргә тыҡҡан аяуһыҙ яҙмышҡа эсенән ауыр ғына итеп көрһөнөп алды ла, йәш килендәр шикелле матур, оҫта баҫырға тырышып, йылға яғына китеп барҙы.

Оло Эйектең ин ташҡын сағы ине бөгөн. Ул үҙенең ҡыҙғылт буръяҡ һыуын ике-өс саҡрымға йәйеп, туғайҙар, ҡырсындар, сабынлыҡтар аша мөһәбәт кирелеп ята. Унын, өйрөлөп аҡкан бөгөлсәк тулҡындары өҫтөнә ҡыйғас ҡанаттарын тейҙерә яҙып, аҡсарлаҡтар оса. Шаян буҙ турғайҙар айҡалып аҡкан тулҡын эсенән берәй туҙ йәки сыбыҡ киҫәге табып ҡуналар ҙа, үҙ батырлыҡтарына үҙҙәре маһайып, кескәй күкрәктәрен ҡуҡырайтып ағып китәләр. Унан ул туҙ йәки сыбыҡ киҫәге берәй өйрөлтмәккә эләгеп һыу төбөнә батып киткәс, сипылдашып көлөшә-ҡыуанышa күккә күтәреләләр. Уларға сикһеҙ мәрәкә була... Их, ни тиклем матурлыҡ көс, ҡеүәт, ни тиклем тылсымлы сер бар был яҙғы ташҡында!

Емеш йылға өҫтөнән күҙен ала алмай бик оҙаҡ текә яр башында торҙо. Уның күкрәге йылғанан бөркөлгән дымлы йомшаҡ һауаны еҫкәп, уйсан күҙҙәре шаян буҙ турғайҙарҙы ла, ташҡын һыуҙы ла, яртылаш һыуға батҡан һылыу тирәктәрҙе лә һөйөп туйманы.

«Эй-й... Ағын йылға булһаң ине лә тауҙар, далалар, туғайҙар буйлап шаулап-гөрләп аҡһаң да аҡһаң ине... Ҡайҙа барып сығыр инең икән? Ҡайҙан башлана, ҡайҙа барып ҡоя икән был йылға? Урал тауынан башлана ла үҙенән дә оло, көслө йылғаларға ҡушыла-ҡушыла диңгеҙгә барып ҡоя ти ине, шикелле атайым... Ҡанҙа икән һуң ул Урал тауы?.. КүР"



һән ине шуны барып. Ә диңгеҙ нимә икән һуң ул? Бөтә йылғалар барып төшә торған ҡаҙан һымаҡ берәй тәрән соҡормо икән?

Әсәһе үлгәне бирле һөйләп түгел, тик уйлап, өҙлөкһөҙ уйланып ҡына йәшәргә өйрәнгән Емеште яҙғы йылғаның шаулы йыры тағы ошондай уйҙар менән үҙ артынан эйәртеп алып китте. Уның тынғыһыҙ кескәй йөрәге лә ошо яҙғы ташҡын кеүек ярҙарына һыймай тулҡына, ярһый, ашҡына ине хәҙер.

Эй, рәхәт тә һуң йылға өҫтөнә ҡарап, уйланып тороуы. Ләкин Емешкә былай яраймы һуң?! Уға бит тиҙерәк һыу алып ҡайтырға ла туғайға утынға китергә кәрәк!..

Емеш күнәктәрен шалтыратып, текә ярҙан түбәнгә йүгерҙе. Унда, һыу алғыстан арыраҡ, һыуҙан саҡ ҡына башын күрһәтеп, ҡайҙандыр ағып килеп туктаған ҙур ағас тамыры, үрмәксе кеүек тармаҡтарын тырпайтып, ҡара дүңгәк булып ята ине. Емеш һыуҙы төрле сүп-сарҙар эркелеп яткан яр ситенән, һыу алғыстан алмай, эскәрәк инеп, таҙараҡ ерҙән һоҫоп алыр өсен, ярҙан һонолоп түмәр өҫтөнә барып менде. Түмәрҙең һыу эсенә нығыраҡ ослайып ингән бер тармағына баҫып, күнәген һыуға батырҙы. Инде тулы һыулы күнәкте тартып алайым ғына тигәндә, түмәр ҡапыл әйләнеп батты ла китте. һыу тулған ауыр күнәк һәр саҡ ошондай һаҡһыҙлыҡ арҡаһында бәләгә осрай торған Емеште таш кеүек төпкә һөйрәне. Емеш иҫенә килеп күнәкте ҡулынан ысҡындырғанда һуң ине инде. Ул һыу төбенә бик тәрәнгә сумып өлгөргәйне. Ләкин көрәшергә өйрәнгән йән бирешергә, батып үлергә теләмәне. Бар көскә тырышып-тырмашып өҫкә табан йөҙә башланы. Болғансыҡ, ҡараңғы һыуҙа Емеш үҙенен ҡайһы яҡҡа табан йөҙгәнен дә, һыу өҫтөнә яҡынаямы, юҡмы икәнен дә белә алманы. Етмәһә, әле генә боҙҙан әрселгән һалҡын һыу бөтә тәнде ҡороштороп, боҙло бармаҡтарын муйынға батыра башланы. Ләкин бик кескәй генә саҡтан уҡ йөҙөргә, сумырға, аҡ таштар эҙләп һыу төбөндә оҙаҡ-оҙаҡ йөрөргә өйрәнгән Емеш ҡурҡып юғалып ҡалманы. Бар көскә тырышып йөҙҙө лә йөҙҙе. Ахыр инде бөтөнләй тыны бөтөп, сәсәй башлағанда, һыу өҫтенә ҡалкып килеп тә сыҡты. Тулкын уны ағыҙып ярҙан алыҫҡа, йылға уртаһына, алып бара ине Емеш, тулкын өҫтенә салҡан ятып, ял итеп, тулаған йөрәген әҙерәк тынысландырҙы ла ярға табан йөҙөп китте. Ярға етеү еңел булманы. Яҙғы ташҡын уны йылға уртаһына һөйрәне, күлдәк итәктәре аяғына уралып, һалкын һыу ҡосағы аяҡҡулдарын ҡороштороп уның хәлен алырға тырышты. Яр буйында ла ярҙам ҡулы һуҙырлыҡ бер кем дә юҡ ине. Шулай Ҙа Емештең йәшәүгә булған иҫ киткес ихтыяры был ҡоторонҡо стихия менән көрәштә лә еңеүсе булып сыкты. Ул, ҡүгәренеп ҡатһа ла, барыбер үҙендә ярға килеп сыҡкансы

йөҙөрлөк көс тапты. Ахыр бына һөлөк шикелле һөйрәлеп, шыуғалаҡ мәтегә бата-бата яр ситенә сығып ултырҙы. Тап бына шунда инде ул үҙенең хәҙерге хәленең ни тиклем мөшкөллөгөнә төшөндө. Үгәй әсәйҙен иң яратҡан ҡалай күнәге, һыйыр һауырөсөн генә тотаторған өр-яңыҡәҙерле аҡ күнәге һыу төбөндә ҡалғайны. Инде ни эшләргә? Ҡайтанан төшөп, сумып эҙләр инең дә, болғансыҡ һыуҙа күреп буламы ни уны?.. Етмәһә, Емештең хәҙер ҡабат һыуға сумыр хәле лә юҡ бит әле...

«НисеК ейгә ҡайтырға хәҙер! Ни тип яуап бирергә?! Исмаһам, атайым да өйҙә юҡ бит әле... Ағайым да...»

Байгилде ағай дружина төҙөлгәне бирле бигерәк тә өйҙә тормай. Бөгөн ул, Собхан старшинаның йәшергән игендәрен эҙләп табып, ҡалаға, Ҡыҙыл Армияға ярҙамға оҙатыу менән мәшғүл ине. Ә Иштуғандан шул ҡасып киткәне бирле һаман бер хәбәр ҙә юҡ. Уларҙын ҡайҙалығын, ни эшләп йөрөүҙәрен әле һаман бер кем дә белмәй ине. Был уйҙарҙан Емештең аяҡ быуындары тағы ла нығыраҡ хәлһеҙләнеп китте. Унын күнелен ҡаты өмөтһөҙлөкеолғап алды. Их, ҡысҡырыптырып илап ебәрһән ине, исмаһам! Ниңә һуңул бер ҡасан да илай алмай?! Әллә ошо Йәнеш күп илап уны илауҙан биҙҙерҙеме? Әллә был аяуһыҙ яҙмыш киптерҙеме унын күҙ йәштәрен?!

Ул ҡалтырап, дерелдәп, тештәре тешкә бәрелеп шаҡылдап, ҡуҙғалырға йәки өйгә ҡайтырға хәле лә, батырлығы ла етмәй яр башында сүкәйеп ултырҙы ла ултырҙы. Еүеш күлдәк өшөгән тәнде боҙ ҡапсыҡ кеүек ҡурҙы. Ҡояш та, унын, ҡыҙғаныс хәлен күрмәҫкә теләгән һымаҡ, битенә болоттан аҡ бөркөнсек бөркәнде. Йылға өҫтөнән һалҡын, үткер төньяҡ еле иҫә башланы.

«Йә, ярар, ни булһа булыр, ҡайтайым, тип уйланы ахыр Емеш. Өшөп-туңып үлергәме ни былай?..»

Сәрбиямал уны, оҙаҡ йөрөгәне өсөн туҡмарға әҙерләнеп, йәне түҙмәй урам ҡапҡаһы төбөндә көтөп тора ине. Ул, көйәнтә менән һынар күнәкте генә тотоп ҡайтып килгән Емеште күргәс, йәне түҙмәй ҡысҡырып та ебәрҙе:

— Ата-аҡ... Ҡәһәр һуҡҡыры, сиған балаһы!.. Ҡалай күнәгемде ҡайҙа иттең?!.

— һыуға баттым... һыу төбөндә ҡалды...— тип көскә тауышын сығарып яуап бирҙе Емеш.

Сәрбиямал уға тишерҙәй булып текләп:

— Ә?! Нимә тиһең?!— тип ҡабатлап ҡысҡырҙы. Уға Емештен күнәкте батырыу өҫтөнә, баҙнат итеп өйгә ҡайтып килеүе баш етмәҫлек, аҡылға һыймаҫлык хәл булып күренде. Емеш тә уға аптырап ҡараны. һәм күгәргән ирендәрен саҡ ҡуҙғатып:

— Йәй, һыу ҡайткас, сумып эҙләп табырмын... Хәҙер мин өшөнөм... Ауырыным...— тине. Өй яғына үтеп китергә теләне.

Сәрбиямал, унын. был ҡыйыулығына тағы ла иҫе китеп, ни эшләргә белмәй, ике бөйөренә таянып, Емештең юлына арҡыры төштө. Асыуҙан тештәре шаҡылдап, тағы бер ҡат:

— Ә!.. Нимә тиһең?— тип, ер яңғыратып сәрелдәп, бармаҡтарын тырпайтып, Емеш өҫтөнә килә башланы.— Ҡәһәр һуҡҡыры, дөмөккөрө!.. Күнәгемде әрәм иткәнсе, үҙең батып улһәнсе, сиған балаһы!.. Аҡ ҡына, ҡалай ғына күнәгемде! Яңы ғына күнәгемде!.. Ҡәҙерле бала булһа, үҙе батып үлер ине шунда!.. Етемгә нимә була ул!..

Был инде Емештән, Әхмәтша менән унын араһын боҙған бер көнгө ҡыйыулығы өсөн ысынлап үс ала торған сәбәп ине. Ләкин барып сыҡманы. Ул Емештең сәсенән матҡып тотоп, йолҡҡолап ташлайым ғына тигәндә, яҡында ғына:

— Туҡта! Ни булған?— тигән баҫалҡы, ләкин бойороҡло тауыш ишетелде. Сәрбиямал шунда уҡ йыуашып, тәтелдәп китте.

— Әй, атаһы, һин икәнһең дә! Кем тип торам тағы... Бына ҡыҙыбыҙҙы ҡара, һыуға батып үлә яҙған... Ярай әле күнәкте... ҡалай күнәгемде генә батырып, уҙе ҡалған...

Ул, бигерәк тә бер көнгө ваҡиғанан һуң, Байгилде ағай алдында айырыуса алсаҡ, йыуаш булып ҡылана ине хәҙер.

— Ярар,— тип ҡоро ғына өндәшеп туктатты Байгилде ағай.— Бала үлер хәлгә еткән, ә һиңә күнәк ҡайғыһы. Әйҙә, ҡыҙым, өйгә инеп ят, йылын.

Ул Емеште бәләкәс бала шикелле етәкләп өйгә инеп, яткырып, юрған еҫтенә үҙенен. һалдат шинелен ябып ҡуйҙы.

— Ауырыма, йәме, ҡыҙым. Бирешмә. Тиҙҙән мин һеҙҙе үҙебеҙҙең ауылға алып ҡайтырмын... Ҡотҡарырмын...

Емеш өндәшмәне. Уға хәҙер йылыныуҙан башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй ине.

Байгилде ағай Сәрбиямалға:

— һин балаларға ҡул тейҙереүендә туктат. Етер. Әгәр Емешкә бер-бер хәл булһа, минән яҡшылыҡ көтмә,— тип ҡаты итеп иҫкәртте лә Тимербайҙарға сығып йүгерҙе. Дружинаның штабы хәҙер уларҙа ине.

Сәрбиямал унын артынан:

— һай, ҡойолдороҡ, зимагур, бальшәүникмен тигәс тә, ҡалай етерәйеп киткән булған! Бына аҡтар килгәс, теленде ҡыҫҡартырҙар әле,— тип һөйләнеп, итәгенә йәшереп кенә йоҙроҡ күрһәтеп ҡалһа ла, Емешкә тейергә батырсылыҡ итмәне.

Емеш, йылынырға тырышып, юрғанды башынан аша бөркәнеп ятты. Ләкин унда ла йылылыҡ юҡ ине хәҙер. Шулай ҙа тештәретешкәбәрелепбикоҙаҡҡалтырап, урындыҡһелкетеп Дерелдәп ята торғас, ул ҡыҙыулығы нык күтәрелеп, һата-

шыулы ҡаты йоҡо эсенә инеп юғалды. Бына иң элек ул нин-дәйҙер кескәй генә өйҙә тотош яҡтырып, ялманып янып тор-ған сыуал алдына барып баҫты. Сыуалға буйҙан буйға һөйәп ҡуйылған эре ҡоро бүрәнәләр, тирә-яҡҡа ҡыҙыл телле ялҡын сәсрәтеп, күнелле шытырлап яналар. Емештен. ҡулдарына, яңаҡтарына, хатта биттәренә, сәстәренә тиклем унан сикһеҙ рәхәт йылы бөркөлә. Сыуал янында, Емештең һәр ваҡыт төшөнә инә торған ғәжәп моңһоу күҙле, ҡаҡса йөҙлө, ҡара шәлле, матур йәш ҡатын да, арыҡ ҡулдарын ялҡынға һуҙып, ҡыҙынып ултыра. Емеш иркәләнеп уның осло яурынына башын терәй. Ә теге ҡатын уның, бөҙрә сәстәренән йомшаҡ ҡына итеп һыйпай ҙа, әкрен, бик әкрен, ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп:

— Ҡыҙым...— ти.— Ҡыҙым, һин ҙурайҙың инде... Ә был мендәренде мин һинә өс йәш саҡта ғына яһағайным... Шуға ул хәҙер һиңә бәләкәс тә... Ҡаты ла... Был юрғанды ла мин яһағайным бит... Туҙып бөткән шул хәҙер... Йыртыҡта-рынан һыуыҡ инеп өшөтә бит һине... Мин булһам, һиңә хәҙер ҡаҙ мамығынан ҙур-ҙур мендәрҙәр яһар инем... Өр-яңынан юрғандар ҡорар инем... Аҫтыңа йылы, йомшаҡ аҡ кейеҙ түшәп һалыр инем, ҡыҙым...

— Әсәй,— ти Емеш, иркәләнеп.— Әсәкәйем!..

— Тор, сиған балаһы!.. Бар, штобы күнәгемде табып апҡайт!..

Сәрбиямал Емештең өҫтөнән юрғанын тартып алып ыр-ғытты. Емеш, һиҫкәнеп, уянып тороп ултыра бирҙе лә, тағы урынына ауҙы. Был ваҡытта утындан ҡайтып, һылыуының, ауыр хәлгә осрау ҡайғыһын күҙ йәштәре менән йыуып ултыр-ған Йәнеш, Сәрбиямал ҙур яҡҡа сығып киткәс, Емештең юрғанын ҡабат ябып ҡуйҙы. Емеш тағы һаташа башланы. Инде уға баяғы йылы рәхәт сыуал да, уның янындағы теге моңло күҙле, иркә һүҙле изге йән эйәһе лә күренмәне. Уның алдында хәҙер күбә ҙурлыҡ ут сүмәләһе баҙлап тора. Ул бөтә тирә-яҡты яндырып-көйҙөрөп Емешкәтабан шыуыша башла-ны. Емеш ҡаса алмай. Ул ошонда әле генә осратҡан әсәһен эҙләп табырға тырыша.

Ә ут сүмәләһе уның, биттәрен, ҡул-аяҡтарын яндырырға, сәстәрен көйҙөрөргә керешә. Емеш унан инде хәҙер ҡасырға ла, йәшеренергә лә теләй. Ләкин юл юҡ. Ҡайҙа ғына ташлан-һа ла, унда, ҡара йыландар, телдәрен сығарып, ыҫылдап, уның, өҫтөнә ут сәсәләр. Ә ут сүмәләһе һаман ҙурыраҡ, ҡыҙы-уыраҡ була бара.

«Әсәй, әсәкәйем, үләм!.. Ҡурҡам!..— тип һаташа Емеш.— Ут... Ут!.. Янам... Янам!..»



VII

Емеш, ҡаты ҡыҙыулыҡ менән аунап-тәгәрәп күпмелер ваҡыт яҭкас, бер көн бик ҡаты ғына тирләне лә, ҡапыл ҡы-ҙыулығы ҡайтып.еңеләйеп тороп ултырҙы.Уның беренсе ҡа-рашы уҡ Сәрбиямалдың: «Ата-аҡ!.. Тағы үлмәй ҡалды!..» тигәнде аңлатҡан асыулы күҙе менән осрашты. Сәрбиямал был ваҡытта йомортҡа менән һөткә генә туғып, үтә күренер-лек йоҡа итеп ҡойолған һап-һары сөсө ҡоймаҡтарҙың майҙа-рын ағыҙа-ағыҙа табанан тәрилкәгә бушатып тора ине. Емештең башына иң тәү башлап:

«Шул ҡоймаҡтын. береһен генә ашап ҡарарға ине...»— тигән уй килде. Шуның артынса ул үҙенең эсендә бик ҡаты аслыҡ тойҙо. Эсәктәре өҙөлдө, ауыҙынан ҡара һыу аҡты. Был уның ауырығаны бирле беренсе тапҡыр ашағыһы килеүе ине. Сәрбиямал ҡоймаҡтарҙы ҙур яҡҡа алып сығып китте. Унан сынаяҡ шалтыраған, Әхмәтша ҡараҡтың ниҙер мығыр-лап һөйләнгән тауышы килә.

«Тағы ярашҡандар икән!—тип уйланы Емеш.— Атайым ҡайҙа икән, иҫәнме икән?..»

— Аҡтар... Чехтар... Каширин отряды... һатыбал отря-ды...— тип, тотлоға-кикерә, һөйләнә Әхмәтша ҡараҡ,— боль-шевигынды бынынһында ҡулдан ысҡындыраһы булма, ҡара. Үҙенә яҡшылыҡ булмаҫ!..

— Беҙҙекеләр килһендәр генә. Мин уны үҙ ҡулым менән тотоп бирәсәкмен... Юҡһа ул зимагур минең донъяма баш булып маташа хәҙер, хәстә-хәстә үҙ донъяһындай итеп, хужа булып йөрөй...

Емеш бындай һүҙҙәрҙе күп ишеткәйне инде. Уларҙың «беҙҙекеләре» килеүгә, атаһына берәй яманлыҡ эшләүенә ышанмай ҙа башлағайны. Ул атаһының большевиктар менән бер булып байҙарға ҡаршы көрәшеп йөрөүе, Шымбай кашт-тан, Әхмәтша ҡараҡ кеүек кешеләрҙен, уны яратмауы, лә-кин уға бер ни ҙә эшләй алмауҙары өсөн шат та, ғорур ҙа ине хәҙер. Шуға Емеш уларҙың был мәкерле пландарын тыңлап торорға ла теләмәй, стенаға тотона-йәбешә, ишеккә табан шыуышты. Ә тышта был ваҡытта ысын мәғәнәһе менән яҙ ине инде. Ҡояштың сағыу нурҙарына күҙҙәре сағылып, йылы дымлы ер, йәш үлән еҫенә иҫереп, башы әйләнгән һы-маҡ булып, ишек төбөндә оҙаҡ туҡтап торҙо. Унан әкрен-ләп шыуыша-шыуыша урамға сыкты. Урам бөгөн ғәҙәттә-генән дә тын, буш ине. Атлы-һабанлы кешеләр баҫыуҙа, ер һөрөү, ашлыҡ сәсеү эшендә, атһыҙҙар ҡыуғында, күптәр армияла ине. һуғышҡа, армияға алынырға ярамаған ҡарт-тар, йәш үсмерҙәр ҙә өйҙә юҡ ине хәҙер. Ә бала-сағa, ҡатын-ҡыҙ бындай ваҡытта бөтә көнөн һыу буйында, бүрәнә баш-

тары, ҡайын туҙҙары тотоп, йәйлек утын, ҡышлыҡ туҙ йыйып үткәрә. Йәнеш тә өйҙә юҡ ине. Күрәһең, ул да йылға буйындалыр... Емеш, ғәҙәт буйынса, яҙ етеп, ҡар ирεп бөткәс тә, бөтә ауыл бер булып һепереп-таҙартып ҡуйғанлыктан бер тигеҙ булып шытып сыҡҡан бөҙрә ҡаҙ үләндәренә, тел менән һөйләп биргеһеҙ ҙур ләззәт менән, иплəп кенә баҫа-баҫа Оло Эйек яғына табан атланы. Унын Йәнеште лә, Шәүрәне лә, бүтән ҡыҙҙарҙы ла тиҙерәк күргеһе, Оло Эйектән бүрәнә аҡҡанын ҡарағыһы, атаһының ни хәлдә, ҡайҙалығын тиҙерәк белгеһе килә ине. Урам ғына түгел, хәҙер бөтә яр башы ла йәшел үлән менән ҡапланған, ауыл артындағы ҡарт тирәктәр ҙә, ҡәкре өйәнкеләр ҙә, Оло Эйек буйындағы талдар, уҫаҡтар ҙа, алыҫта күгәреп ятҡан кәкерсәк-бөкөрсәк тауҙар ҙа йәшел япраҡ аҡ сәскә менән күмелгән. Бөтә әйләнә-тирә кейәүгә оҙатырға әҙерләнгән башҡорт ҡыҙы шикелле йәш, һылыу, төҙөү һәм уйынсаҡ ине бөгөн. Хатта Оло Эйек яғынан иҫкән дымлы еләҫ һауа ла муйыл сәскәләренен, хуш-еҫен аңҡытып тора. Былар бөтәһе лә Емештен, ҡаты ауырыуҙан талған тәненә, ҡыйырһытылған йөрәгенә ял бирә, иркәләй. Был һауаны күкрәген тултырып һулаған һайын, унын аяҡтарына хәл инә, күңеле күтәрелә, күкрәге киңәйә бара, ул үҙен был гүзәллектәр эсендә, аңғармаҫтан сәскәнән ел осороп алып киткән кескәй генә бер мамыҡ бөртөгө кеүек тоя ине.

Бына Оло Эйек. Күптән түгел генә уны йота яҙған был уҫал ағын йылға хәҙер бөтөнләй тип әйтерлек йыуашып, үҙ үҙәненә ҡайтып ингән. Емеште һыу төбөнә батырып ебәргән теге мәкерле түмәр ҙә хәҙер һыуҙан ситтә, һоро мәтегә ярtылаш батып ята. Һыу аҫтынан яңы ғына арынып өҫкә ҡалҡҡан ҡырсынташтар ҙа, тирәктәр, талдар ҙа айырыуса төҙөү, күләс бөгөн. Күрәһең, бүрәнә ағa башлауға ла арыу уҡ ваҡыт үткәндер. Бик күп бүрәнәләр өҫтө-өҫтөнә өйөлөп ярҙан ситтә, ҡырсында ятып ҡалған. Ә түбәнге бөгөлдә әле генә бынан уҙған оҙон һалдың артҡы ишкәксеһе күренә. Тимәк, һалсылар ҙа, ҡыуғынсылар ҙа үтә башлаған. Бүрәнә ағып бөтөр саҡ еткән. Шулай уҡ оҙаҡ ауырып ятттымы икән ни Емеш?

Емеш, уйсан күҙҙәрен шаулы йылға өҫтөнән ала алмай, текә яр башында уйланып торҙо. Түбәндәкыҙҙар, малайҙар ҡороҡтар, һөҙгөстәр менән эләктереп туҙ,сыбыҡ-сабыҡтота. Йәнеш тә шунда йөрөй. Ә бында Емештән әҙ генә ситтәрәк бер төркөм ҡатындар, ярҙан аяҡтарын һалындырып, бүрәнә аҡҡанын ҡарап ултыра. Емеш тә Оло Эйектен, ошо шаулы сағын, бигерәк тә унан бүрәнәләр, һалдар, ҡыуғынсылар үткән сағын ярата. Был ваҡытта уға тормош, нисектер, йәнләнеп, теремекләнеп, күңелләләнеп киткән кеүек, яҙғы ташҡындар уға яңылыҡ, йәшлек, матурлыҡ алып килгән кеүек була. Ауыл өҫтөндәге күк тә ғәҙәттәгенән бейегерәк,



һауа ла иркенерәк, ҡояш та ҡыҙыуыраҡ һымаҡ тойбла. Эй, Оло Эйек буйының һәр ваҡыт ошолай ҡайнап, шаулап тороуын теләр ине ул...

Эре-эре ҡайын, ҡарағай, ҡарағас бүрәнәләр йылғаға һыйышмай артылып, ҡатланып аҡтылар ҙа аҡтылар. Аҡсарлаҡтар, ҡанаттарын ҡыйғас һелтәп, үҙҙәренә балыҡ тоторға ҡамасаулаған был бүрәнәләргә асыуланған һымаҡ, сар-сар ҡысҡырып, йылғаның буйынан буйына осоп йөрөнөләр. Бына әлеге-баяғы шаян буҙ турғайҙар, бер йыуан ҡарағас бүрәнә еҫтөнә ҡушлап ҡунғандар ҙа, эре генә ҡуҡырайышып ағып баралар. Ҡатындар төркөмө араһында ултырған Баҙыян енгә, уларҙы күргәс, оҙон һуҙып:

Эйек кенә буйы туғай-туғай,
Туғайында һайрай буҙ турғай.
Буҙ турғай ҙа булып һайрар инем,
Тел аҫҡысы бирһә бер хоҙай,—

тип йырлап ебәрҙе. Унын шулай тәбиғәттең, тормоштоң һәр бер күренешенә хас йыры әҙер. Әйтерһең, ул яҙҙан алып көҙгә тиклем тәбиғәттең, тормоштоң үҙ күңелендә ошондай йыр тыуҙыра торған күренештәрен генә күҙәтеп, уға хас йыр сығарып ҡына йөрөгән. Баҙыян еңгә бынан һуң да шундай моңһоу һәм гүзәл йырҙарҙы берәмләп әкрен генә көйләп ултырҙы. Янындағылар әленән-әле, тыйнаҡ ҡына көрһөнөп:

— Эй-й!.. Ғүмер тигәнен,!..— тип һуҙып, унын йырын күтәрмәләпҡуйҙылар. Емеш, был ҡатындар араһында Таиба әбейҙе лә күреп, ғәжәпләнде. Сөнки ул быҒаса унын үҙенең дә, килендәренең дә, улдарының да урамға сығып, йәки һыу буйына килеп, былай эшһеҙ ултырыуҙарын күргәне юҡ ине.

«Күрәһең, ҡайғы уны ла өйөнән кешеләр араһына ҡыуып сығарғандыр... Шундай кешеләрҙе лә еңгән был донъяға Емеште, кескәй генә бер баланы, бөгөүе нимә?.. Баҙыян еңгә артабан һуҙҙы:

Йәмле генә Урал буйҙарында
Ҡымыҙлыҡтан йыуан йыуа бар.
Эскенәйең бошоп, йәврәген янһа,
Йырлап илай торған йола бар...

Был йырҙан һуңкемдер тағы:

— Эй-й!..— тип һуҙып ҡуйҙы.— Тере кешеләргә тағы яҙ етте...

Был Таиба әбейҙең тауышы ине. Унын артынса Шәүрәнен, әсәһе Зөбәржәт еңгә лә, көрһөнөп:

— Әйтмә лә,— тине.— Бына минең Әхмәтемә ошо яҙ егерме ете тулыр ине... Унын, бахырымдың, үлеүенә инде ике йыл үтеп тә китте... Исмаһам, үҙ ҡулымда үлһә лә, был тиклем үкенесле булмаҫ ине. Бахырымды, унда, лазаретта, йүнләп, кәфенләп күмеүсе лә булмағандыр...

Уға Хәсбиямалдын, әсәhе ҡушылды:

— Ә минең ҡартымдың, Тулыбайымдың hуң, ниндәй.р.ә-йебе бар ине? Йә, ни өсөн үлтерҙеләр уны? Ни өсөн үлтерҙеләр?.. Шул инде дружинасылар өсөн... Мылтыҡлы булғас, уларға тотонорға баҙнат итмәйҙәр ҙә бер ғәйепheҙ йыуаш кешеләрҙе тотоп ҡыралар... Ҡанға hыуhап йөрөгәндәргә барыбер ҡан бит... Я алла...

— Минен, бейемде әйт,— тине Баҙыян еңгә.— Бейемдең, Ҡарасәс әбейҙең, күңелендә кешегә яҡшылыҡтеләүҙән башҡа бер генә кер ҙә юҡ ине лә баһа... Эй-й, был донъяла, гел шул яҡшы кешеләр генә ыҙа сигә, күрәhең... Эттәргә генә бер ни ҙә булмай...

Таиба әбей ҙә моңhоу hуҙып hүҙгә ҡушыла:

— Эй-э... алла үҙе генә ярҙам бирhен инде hеҙгә, килендәр... Әле мин бына, Хамматым тере ҡалhа ла, ҡайғырып бөтә алмайым. Бына нисә ай больниста ята бит!.. Духтыр әйтә, ти, hин ҡуш йөрәк икәнhең. Баhадирлығың арҡаhында ғына үлмәй ҡалдың. Башҡа берәү ул тиклем ҡан юғалтыуҙан биш таптыр үлер ине тип әйтә, ти... Эй-й, Сәлимә киленде әйтәм... дошман хөсөтөнә бирелеп кенә үҙен дә бөтөрҙө, Хамматымды ла hәләк итә яҙҙы шул... Йә, ниндәй ҡатын ине бит?.. Ут ине инде, утГ.. Баҫкан еренән оскон сәсрәп торор ине, мәрхүмкәйҙең...

Емеш, йерәк hыҙлатҡыс был hүҙҙәрҙе артабан ишетмәҫ өсөн, иғтибарын тотош йылға өҫтөнә күсерергә тырышты. Был ваҡытта йылға буйы тағы ла шау-шыулыраҡ, яр буйында кешеләр тағы ла күберәк булып киткәйне. Бына түбәнге ярҙа ла бер төркөм ҡатын-ҡыҙ, бер нисә ҡарт, ҡулдарын артҡа ҡуйып, кәзә hаҡалдарын кәкшәйтеп, йылғаға ҡарап тора. Ҡырсында ҡайҙандыр килеп сыҡҡан ҡыуғынсылар ҡайнаша. Улар ҡорола ятып ҡалған бүрәнәләрҙе төрле ерҙән багор менән сәнсеп алалар ҙа ҡүмәкләп hыуға hөйрәп төшөрәләр. Уларҙың:

— hу-әйҙә-hуп!.. hу-әй-ҙә-hуп!—тигән тоноҡ күкрәк тауыштары бер өҙлөкhөҙ hыу өҫтөндә яңғырап тора. Быға ярты яҡ күлдәге әрмәнделәр — «hыу үгеҙҙәре» ҡушыла.

— Ҡуңыҡ!.. Ҡуңыҡ!.. Ҡуныҡ!..

Бына үрге бөгөлдән тағы hал күренде. Уны ҡарт ҡына ике кеше алып бара ине. Яр ситендә туҙ тотоп торған балалар уларға, ғәҙәт буйынса, шаяртып:

— hалсы, кәпәсеңде hыуға манып алсы!—тип ҡысҡырҙылар. Ләкин hалсылар, бер ҙә йәнлелек, күңеллелек әҫәре күрhәтмәй, ишкәктәренә таянып, тауыш-тынhыҙ ағa бирҙеләр. Селәүсен кеүек нәҙек оҙон hал балалар тәңгәленән борғоланып-hырғыланып алға шыуҙы. Балалар, ғәҙәткә hыймаған был ҡырыҫ hалсыларға асыуланып: :



— Бөрйән бөрөш, бите шәрөш!— тип әрләп ҡалдылар. Бында башҡорттар бөтә ҡыуғыноыларҙы ла «бөрйәндәр» тип атайҙдр. Үҙ араларынан ҡыуғынға китеүселәрҙе лә «бөрйән булып китте» тип hөйләйҙәр ине. Уларса ҡыуғынсы менән бөрйән икеhе бер ине.

Элек hалсылар, ярға сығып, икмәк бешереп, сәй эсеп, ҡурай уйнап китә торғайны. Оло Эйек буйы башҡорттары, үҙҙәре ҡурай уйнауҙы күптән онотhалар ҙа, ҡыуғынсыларҙы ошо ҡурайҙары, оҙон көйлө ғәжәп моңло йырҙары өсөн hағынып, кетөп, ҡыуанып ҡаршы ала торғайнылар. Ләкин быйыл hалсылар ҙа, ҡыуғынсылар ҙа ҡарттарҙан, йә йәш үҫмерҙәрҙән генә торғанға, бының өҫтәүенә тирә-яҡта үҙ-ара hуғыш барғанғалыр, тауыш-тынhыҙ, күнелhеҙ генә үтәләр ине. Ҡырыҫ hалсылар артынан бер теркөм йәш үҫмер тейәлгән ҡуш кәмә килеп сыҡты. Яр буйындағы балалар уларға тағы:

— hалсы, кәпәсенде hыуға манып алсы!— тип ҡысҡырҙылар. Аранан бер өлкәнерәге, ҡояшҡа янып, бронза төҫөнә ингәне, эре аҡ тештәрен ялтыратып, ҡысҡырып көлдө лә, башындағы ҡолаҡсын бүркен hыуға манып алып, багорҙың башына элеп юғары күтәрҙе. Бүректең ҡолаҡтарынан шабырлап кәмәгә hыу ҡойолдо. Кәмәселәрҙе яр буйы шаулашып көлөп оҙатты.

— hо-hо-hо!.. hай, молодец!

— Ха-ха-ха!.. Вәт егет, исмаhам!..

Улар артынса икенсе кәмәләр ҙә күренде. Ярҙан уларға:

— йырлап китегеҙ!..

— Ҡурай тартып үтегеҙ!— тип ҡысҡырыштылар.

Ысынлап та, кәмәлә ҡурайсы менән йырсы ла табылды. Ҡуш кәмәнең башында ултырып килгән киң күкрәкле, баhадир кәүҙәле, шоморт ҡара hаҡаллы, урта йәштәрҙәге бер кеше билендәге билбауына бәйләп ҡуйған еҙ ҡурайын ҡынынан алды ла hыҙҙырып уйнап ебәрҙе. Яр башындағылар, хатта балаларға хәтле, тып-тып булдылар. Оло Эйек өҫтөн шул халыҡтың моңға, йырға, уйын-көлкөгә бай, ауырлыҡҡа сыҙам батыр йөрәгенең, икhеҙ-сикhеҙ киң, иркен, балаларса саф күңеленең бөтә гүзәллеген үҙенә йыйнаған моң күмеп китте. Кәмәнең икенсе башында ултырған ҡаҡса ғына битле, бөркөт күҙле, кемрө танаулы бер ҡарт ишкәген янына hалып, кәзә hаҡалын, нәҙек кенә мыйығын hыпырып алды ла, тамаҡты ҡыра биреп, ҡурайға ҡушылды. Уның тауышы күтәренке, сағыу, тыны икhеҙ-сикhеҙ иркен ине.

hандуғасҡай уҙе лә ҙур түгел.
Күкрәккәйе лә унын кик түгел.
Ҡайҙа ғына hайрай hандуғас? ' •••• ' '•.
Йәмле Оло Эйек буйында туғайҙа. •: -.*.-.

Кешеләрҙән кеше лә, һай, ким түгел,
Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел.
Ҡасан да ғына һайрай һандуғас?
Апрель үтеп, йәмле лә май тыуғас.

Ҡуш кәмә, йыр ыңғайына әкрен генә тулҡынып, яр ситләп уҙҙы. Йырсының аҙаҡҡы һүҙҙәрен һәр кем үҙ йөрәгендә ҡабатлап бөтөрөп ҡуйҙы. Ҡуш кәмә артынан тағы һал күренде. Унда ла кемдер, йөрәктәрҙе түҙгеһеҙ елкендереп, «Урал» ды һуҙа ине.

Ерәнсәккәй атыҡ елгән саҡта,
Ышлыяҡкайҙары киң кәрәк.
Башҡорт халыҡ йырын йырлар өсөн,
Ал ебәктәй йомшаҡ тын кәрәк...

Юҡ, һуғыш та, ҡайғы ла, ҡаты эш тә, аслыҡ, яланғаслыҡ та был халыҡтың йырға, йәшәүгә булған мөхәббәтен, тыуыштан шағир йөрәгенең дауыл утын һүндерә алмаясаҡ... һайрар өсөн тыуған һандуғасты һайрауҙан туҡтатырлыҡ көс бармы ни донъяла.

Емеш, үҙенең аслығын да, ҡаты хәлһеҙлеген дә онотоп, йүгереп түбәнгә, ҡыҙҙар янына төшөп китте. Бында, тәпәшәк яр ситендә, йыр ҡурай тыңлау, һалсылар менән мәрәкәләшеү менән бергә етди эш тә дауам итә: ҡыҙҙар, малайҙар туҙ тоталар. Уларҙың ҡайһы берҙәренең ҡулында аҡ ҡыуалдын. башына талдан селтәрләп бәйләнгән һөҙгөс, ҡайһы берҙәрендә оҙон ҡороҡ. һөҙгөс менән айырым туҙҙарҙы һөҙөп алалар. Ә ҡороҡ менән йыуан-йыуан ҡайындарҙы эләктереп, яр ситенә тартып килтерәләр ҙә туҙҙарын һыҙырып алып ҡалалар. Ә ҡарағастарҙы хуш еҫле һағыҙҙары өсөн тоталар. Ҡарағас һағыҙы бында ҡыҙ-ҡыҙҡын араһында иң ҡиммәтле, ҡәҙерле сәйнәүәйбере иҫәпләнә. Ҡайын туҙынан иретеп, үҙҙәре эшләп ала торған ҡара һағыҙ уның янында бер нәмә лә тормай ине.

Емеш тә ошонда төрлө эш менән ҡайнашҡан балалар араһында йөрөгән апаһы Йәнеш янына барып баҫты. Уның да хәҙер туҙ тотҡоһо килә ине. Тик ҡайҙа баҫырға, Йәнештең бер яғында Зәһира менән уның ҡурҡаҡ, ләкин бәйләнсек ҡустыһы Моратша, икенсе яғында Таиба әбейҙең ейәне Байрас туҙ тота. Йәнеш, Емеште күргәс, ни әйтергә белмәй аптырап торҙо. Сөнки ул әле иртәнсәк кенә бер ни белмәй ауырып ята ине. Сәрбиямал һәр көн уның хаҡында:

— Тиф менән ауырый. Ауылда тиф таралған. Үлер. Тифтән берәү ҙә тере ҡалмай,— тип тукып, үлергә юрап ҡына тора. Шуның өсөн Йәнеш тә инде Емештең үләсәгенә күнегеп бөткәйне. Хәҙер Емештең терелеп бында, һыу буйына, килеп сығыуы уның өсөн көтөлмәгән хәл булды. Ул ҡыуанып та, аптырап та телһеҙ ҡалып текләп торҙо. Ахыр борсолоп:

— Ниңә килдең? Ниңә торҙоң?..— тип һораны.— Бына өҙлөгөп, ҡабат ауырып китерһең әле!

— Ауырымам,— тине Емеш.— һауыҡтым инде. Бер ерем дә ауыртмай.

Ул ысынлап та ошондай матур саҡта ҡабат ауырып китеүҙе башына ла килтермәй ине.

Ике аҙналап күренмәй тороп, ҡапыл килеп сыҡҡан Емешкә ҡыҙыҡһынып ҡарап тороусылар араһынан Моратша;

— Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ!.. Емештең күләгәһе, һөлдәһе килгән... Күләгә, күләгә!,— тип ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

Зәһира ла, балаларға хас аяуһыҙлыҡ менән шарҡылдап көлөп, ҡустыһына ҡушылды:

— Абау, ысын да баһа... Ҡалай ябыҡҡан!.. Ҡәберҙән сыҡҡан кеүек булған. Тфү... тфү!..

— Күләгә килгән, күләгә!— тип һикерәнләне Моратша.

Емеш ғәрләнеү һәм хурланыу тойғоларынан ни эшләргә белмәй аптырап ҡалды. Уның һөрмәле ҙур ҡара күҙҙәре ауырыуҙан һун. тағы ла ҙурыраҡ, моңһоуыраҡ, уйсаныраҡ булып киткәйне. Ә ҡыйғасланып торған нәҙек ҡара ҡаштары, уның ҡағыҙ кеүек аҡ йөҙөн күләгәләп, уға тағы ла моңһоулыҡ, матурлыҡ өҫтәп тора. Уның ҡаты ауырыуҙан тағы ла йоҡараҡ, бәләкәйерәк булып киткән битендә лә, үҙ һүҙләнеп бүртәйеп торған ныҡ ҡымтыулы ирендәрендә лә бер генә тамсы ҡан әҫәре ҡалмаған. Күлдәк йыртыҡтарынан күренә биреп торған балауыҙҙан ҡойоп яһалған кеүек нәҙек төҙ боттары ла, сабыйҙыҡы кеүек кескәй ҡулдары ла шундай көсһеҙ, хәлһеҙ, үтә күренмәле һымаҡ булып торалар. Ғөмүмән, ул бөтә күренеше, торошо менән тере кеше булыуға ҡарағанда, хәҙер-хәҙер ирееп күҙҙән юғалырға тейешле ҡар һәйкәлгә оҡшай ине. Уның был өнһөҙ, хәрәкәтһеҙ торошо Моратшаны тағы ла шаштырып ебәрҙе.

— Күләгә,күләгә!.. Күләгәләр үлә лә!— тип таҡмаҡланы

— Көлмәгеҙ, йә томан булып күккә осоп китер!—тип шҫҡылланы Зәһира. Йәнеш, туҙ тотоуҙан туктап, берсә [ЧЕмешкә, берсә көлөүселәргә текләп илай яҙып, аптыранып "йорҙо. Ул Емештән дә нығыраҡ иҙелгән булғанлыкҮан, үҙен дә, һылыуын да яҡлап, бер кемгә бер һүҙ ҙә әйтә алмай ине. Шулай ҙа ул, ни өсөндөр, һәр саҡ Емеш өсөн үҙенә ҡарағанда ла нығыраҡ ҡурка, Емеш туҙемдән сығыр ҙа ниндәйҙер ярамаған, көтөлмәгән берәй ҡурҡыныс эш эшләп ҡуйыр төҫлө тоя. Әле лә ошо аңлайышһыҙ тойғо уның

бөтә йөрәген биләп алды. Емеш был мыҫҡыллауҙы күтәрә алмаҫ, анауы аҡсарлаҡ йәки буҙ турғай шикелле ҡалҡынып күккә күтәрелер ҙә, Оло Эйек уртаһына барып төшөп, тулҡын эсенә инеп юғалыр, йәки, ысынлап та, Зәһира әйтмешләй, томанға әйләнеп юҡ булыр төҫлө тойолдо уға. Ә шыҡһыҙ Моратша һаман көлдө лә көлдө. Йәнештең икенсе яғында туҙ тотоп маташҡан Байрас та, әле Емешкә әле Моратшаға ҡарап, был күренеште күҙәтеп тора ине.

— Күләгә шул, күләгә!.. Күләгә булмаһа, берәй һүҙ өндәшер ине ул!.. Ҡыҙҙар, ҡасығыҙ, бында Емештең һөлдәһе килгән.

— Ха-ха-ха!..

Байрас ҡулындағы һөҙгөсөн ергә ырғытып бәрҙе лә һыу буйында йөрөй торғас ярылып, ҡарайып ҡатҡан уҫтарына ҡаты ғына төкөрөп алды. Унан ялан аяҡтарын һары мәтегә матҡып баҫып, ашыҡмай ғына Моратшаға табан атланы. Моратша шып туҡтаны. Ләкин ситкә тайпылырға өлгөрмәне. Байрас бер ҡулы менән уның яғаһынан бөрөп тотоп алды.

— һин ниңә ауырыу кешенән көләһең? Туҡтай беләһеңме һин, юҡмы?!—тип һораны. Уның, ҡаты йоморланған икенсе йоҙроғо Моратшаның башы өҫтөндә яуабына ҡарап яуап бирергә әҙер тора ине.

Атаһына оҡшап, кин. яурынлы, баҙыҡ кәүҙәле, аҡыллы ҡарашлы был малайҙы ғәҙел, ҡыйыу холоҡло булғаны өсөн тиңдәштәре яраталар, ә был бәйләнсек, ҡурҡаҡ Моратша унан ҡурҡа ла ине. Шуға ул әле лә, Байрас килеп яғаһынан алғас, ҡойолоп төштө. Турғай күҙҙәрен мәғәнәһеҙ кепесләтеп:

— Беттө, бөттө, Байрас! Биллаһи-валлаһи бүтән көлмәйем,— тип тәтелдәне.

— Көлмә!—тип ҡырҡа ҡабатлап иҫкәртте Байрас— Ҡара илла!

Ул Моратшаны, яғаһынан тотоп, тағы бер тапҡыр ҡаты ғына һелкетте лә, бер кемгә лә ҡарамай, яр ситенә үҙенең туҙ тотоп ултырған урынына китте. Йәнеш иркен тын алып Емешкә үҙенен, һөҙгөсөн һуҙҙы.

— Мә, һылыу, һин дә туҙ тот, йәме.

Емеш ҡыуанып һөҙгөскә тотондо. Байрастын, көтмәгәндә шулай үҙен ҡыйыу яҡлауынан'уның күңелен бөткөһөҙ рәхмәт тойғоһо солғап алды. Дөрөҫ, был уның өсөн яңылыҡ түгел.

Байрас уны:

,• — Минең күршегә теймәгеҙ әле. Минең күршене йәбер^әмәгеҙ,— тигән булып, уйынға һабыштырып булһа ла, #лек тә яҡлаштыра торғайны. Ләкин был тиклем ап-асыҡ



яҡларға ҡыйыулығы еткәне юҡ ине әле. Шуның өсөн был Ёмеште сикһеҙ ҡыуандырһа, Байрастың иғтибарын яулау ниәте менән йөрөгән еая Зәһираның зәменә ныҡ тейҙе. Ул, Байрасҡа үпкәле ҡарап:

— Килмешәкте, ерһеҙҙе яҡлап маташҡан буласы бынауы ҡойолдороҡ!— тип һөйләнде. Уның һүҙенә иғтибар итеүсе булмағас, һикереп тороп Йәнеш әле генә ҡороҡ менән эләктереп алған ҙур һары туҙҙы тартып алды.— Бир, беҙҙең Эйектең туҙын тотоп ултырма бында килмешәк!

— һай, ҡомағай өйрәк!— тине Байрас, уға әйләнеп ҡарамай ғына.— Белгән һүҙе һаман ерһеҙ ҙә ерһеҙ!.. Беләһеңме, хәҙер беҙҙә ерһеҙҙәр юҡ!..

Зәһираның бындай ҡылығына өйрәнгән Йәнеш, бер ҙә ҡаршылыҡ күрһәтмәй, туҙҙы уға биреп ебәрҙе.

— Ал. Мин тағы тотормон, йәме. Тағы бирермен...

— Бар шул. Ерһеҙ шул, ерһеҙ! һинең Емешең ерһеҙ килмешәк... Етем быҙау!

Был мәғәнәһеҙ һәм әсе һүҙгә хатта Байрас та яуап тапманы.

Зәһира еңеүенә кинәнде. Хатта үҙенең бында ирке сикләнмәгән хужа булыуын тағы бер тапҡыр раҫларғатырышып, тотоп алып ҡалырға ярамағандар иҫәбенә ингән нәҙек бүрәнәне күтәреп, һелкетә баҫып ҡайтып китте. Текә яр буйлап үрге яҡтан килеп сыҡҡан объездчик, уны шунда уҡ күреп, артынан сапты. Күп тә үтмәй, Зәһира бүрәнәне кире алып килеп һыуға ташланы. Ҡыҙҙар ҙа, малайҙар ҙа быны күрмәмешкә һалышты. Зәһираның хәленән уларҙың бөтәһенә лә уңайһыҙ булып китте. Сөнки урлау, әйберҙе һорамай алыуҙың ҙур ғәйеп икәнен бөтәһе лә яҡшы беләләр ине улар. Тик бәйләнсек Моратша ғына үҙ апаһын да мыҫҡылламай ҡала алманы.

— Ай-һай, шәп картыш эләктергәйнең... бахыр, һәйбәт булды!..— тине ул, пырхылдап көлөп.— Шәп ине... Эйектең бөтә һыуын һемереп эскән иң шәп уҫаҡ бүрәнә ине бит...

Моратшаның был һүҙен дә күтәрмәләүсе булманы. Ә Емеш Йәнештең ҡороғо менән үҙе яңы көскә эләктереп алған бүрәнә башын, яр буйынан ағыҙып, Зәһираның алдына алып барҙы.

— Мә, Зәһира, ошоно ал. Бындайҙы алып ҡайтҡан өсөн асыуланмайҙар.

Зәһираның ҡомһоҙ күҙе тағы шатлыҡ менән тоҡанып китте.

— Абау, ниндәй һәйбәт кенә... Ҡарағай ғына... Ҡоро ғына!..

— Ал, ал. Барыбер уны алып ҡайтырға минең көсем етмәй.

Заһира, быны Емеш, юрый ғына биреп, кире тартып алмаһын тигән шикелле, өтәләнеп бүрәнә башын һыуҙан тартып алды. Ҡомһоҙ күҙҙәрен йылтыратып, уны үҙенең бөтә кешеләрҙекенән күберәк һәм ҙурыраҡ туҙ ейөмөнә алып барып ырғытты.

— Бына был, исмаһам, шәп түмәр!

Емеш тә кешегә, хатта үҙе яратмаған кешегә булһа ла, кескәй генә бер яҡшылыҡ эшләй алыуы өсөн шат булды.

Көндөң ҡалған яғы тыныс үтте. Бына ҡояш, яңы ғына атҡан умырзая сәскәһе шикелле, офоҡҡа ҡыҙыллы-һарылы нур бөркөп, Яғылса тауының ҡаялы түбәһенә урынлашты. Оло Эйек өҫтөн ҡаты тулҡындырып, йәйәүле Яр буйында кешеләр һирәкләнә башланы. Йәнеш менән Емеш тә, туҙ, тап-топ күтәреп, өйгә ҡайтып китте. Сәрбиямал уларҙы:

— Бар, быҙауҙы ҡарап алып ҡайтығыҙ!.. Штобы тиҙ йөрөгөҙ!..— тип яңы бойороҡ менән ҡаршы алды. Был ваҡытта ул Әхмәтшаһын оҙатып, һыланып-һыйпанып, ҡапҡа төбөндә баҫып тора ине.

Ҡыҙҙар, ғәҙәт буйынса, бер ҙур төркөм булып йыйылып, быҙау ҡарарға киттеләр.

VIII

Ауыл артына сыҡҡас, Сабира янғырауыҡлы тауыш менән йыр башлап ебәрҙе. Заһира, Гөлйыһан, хатта Йәнеш уға ҡушылды. Улар, ҡосаҡлашып, Оҙонғол башына тиклем йырлашып барҙылар.

Оло Эйеккә таҫма һалһан,
Батмай, елбёрләп аға.
Уйлай ҡүңелем, һөйләй телем,
Йәшем мөлдөрләп аға...—

тип, күңелһеҙ һәм балаларға хас булмаған йырҙар йырланы улар. Нмешкә бөгөн донъя айырата яҡты, матур һымаҡ ине. Ул һәр бер күбәләк артынан ҡыуҙы, эле бер сәскә, әле икенсе сәскә янында туҡталды. Берсә ҡыңғырау сәскәне, берсә күгәрсен күҙен, берсә сәскәһен ҡойорға өлгөргән умырзая тубырсығын яратты. Ҡаты ауырыуҙан һуң бигерәк тә моңһоу булып киткән һөрмәле ҡара күҙҙәре менән дә, һис бер ҡан әҫәре ҡалмаған кескәй ап-аҡ ҡулдары менән дә иркәләне ул сәскәләрҙе. Үҙе артынан бер аҙым да ҡалмай йөрөгән дуҫы Шәүрәгә ҡарап:

— Сәскәләрҙе өҙмәйек, Шәүрәкәй. Аяҡтарыбыҙ менән дә тапамайыҡ, йәме,— тип үтенде. Дуҫының һәр бер фекере менән һис һүҙһеҙ килешергә өйрәнгән Шәүрә ысынлап та, хлта йүгергәндә лә сәскәләргә баҫмаҫҡа, рәнйетмәҫкә тырышты. Быға Емештең күнеле бөтөп, дуҫына ла сәскәләргә ҡараған кеүек һөйөп ҡараны.

— Ниңә уларҙы тапарға? Уларҙын. ғүмере былай ҙа бик ҡыҫҡа бит, эйе бит, Шәүрәкәй?

— Эйе шул,— тип баш һелкте Шәүрә лә.— Әсәйем әйтә, сәскә ғүмеренән ҡыҫҡа ғүмер юҡтыр,— ти.

— Бар,— тип раҫланы хәҙер Емеш.— Ҡарасәс инәйем бер саҡ ниндәйҙер сикһеҙ ҡыҫҡа ғүмерле күбәләктәр хаҡында һөйләгәйне. Улар ҡояш менән бергә тыуалар ҙа, ҡояш байығанда үләләр ҙә, ти. Тик бына әллә нисек кенә тип исемдәрен дә әйткәйне лә бит... Оноттом шул инде... Эй, Ҡарасәс инәй булмаһас, ундай ҡыҙыҡ нәмәләр тураһында һөйләр кеше лә ҡалманы инде хәҙер, эйе бит, Шәүрәкәй? — тип моңһоу ғына тауыш менән тамамланы Емеш.

— Йә, ниңә үлтерҙеләр инде уны, ә, Шәүрәкәй?..

Шәүрә лә үҙенә хас булмаған рәүештә ауыр көрһөнөп ҡуйҙы:

— Әйтмә лә, бахырҡайҙы...

Уның был һүҙе таңда тыуып кисен үлгән күбәләктәргә-меләҙҙән көҙгә хәтле генә йәшәгән сәскәләргәме, Ҡарасәс әбейгәме йәки бөтә кәүҙәһе үтә күренмәле быяла шикелле генә булып ҡалһа ла, үҙе тураһында түгел, ә һаман сәскәләр, күбәләктәр, кешеләр тураһында ғына уйлаған, ғәжәп сабыр һәм баҫалҡы дуҫы Емешкә ҡаратамы әйтелеүе билдәһеҙ булһа ла, саф бала йөрәгенән урғылып сыҡҡан был йәлләү һүҙе ошо минутта уларҙын бөтәһенә лә берҙәй үк тура килеүе асыҡ ине.

Емеш менән Шәүрә сәлләбаш сәскә янында һөйләшеп ултырған арала, ҡыҙҙар Оҙонғолдоң текә ҡашлағынан йүгерешеп түбәнгә, үрге туғайға, төшөп тә киттеләр. Емеш Шәүрәне лә ашыҡтырҙы.

— Бар, һин дә тиҙерәк йүгер.

— Ә һин?..

— Мин йүгерә алмайым. Мин яйлап барырмын,— тине Емеш.

Шәүрә, дуҫын яңғыҙ ҡалдырып киткеһе килмәй, әҙерәк икеләнеп тора бирҙе лә:

— Мин хәҙер килеп етермен, йәме, Емеш,— тип, уны кескәй бала шикелле йыуатып, ҡыҙҙар артынан китте. Ә Емеш, тағы ла хәлһеҙләнеп киткән аяҡтарын көскә ҡуҙғатып, Оҙонғол яры башына, үҙе яратҡан Сук ҡайын тәңгәленә барып баҫты. Бында, аҫта, әле күптән түгел генә ҡалын ҡар аҫтында ятҡан, инде ҡуйы, шыр әрәмәлеккә әйләнгән үрге туғайҙа хәҙер быҙауҙар йөрөй. Уларҙы бында иртәнсәк көтөү ҡыуғас алып килеп ебәрәләр, кетөү ҡайтыр алдынан килеп алалар. Быҙауҙар көн буйына һутлы туғай үләндәре

менән туйынып, үрге ҡырсынан Оло Эйеккә төшөп һыу эсеп, һыйланып йәшәйҙәр.

Емеш, бөҙрә талдар, яҙҙың уҡалы еләненә төрөнгән туғайлыҡтар араһында уҡа таҫма шикелле йымылдап ятҡан алыҫтағы Оло Эйеккә моңһоу күҙҙәрен текәп, ҡыҙҙарҙы оҙаҡ ҡына көтөп торҙо. Ҡарт тирәктәр әкрен генә баш сайҡанылар, һис бер ел әҫәре булмаһа ла, көмөш япраҡтарын ҡыштырлатып, ниҙер һөйләштеләр, шыбырлаштылар. Йөрәктау өҫтөндәге суҡ ҡайын ғына, суҡтарын хәлһеҙ һалындырып, йәнһеҙ ултырҙы. Әле күптән түгел генә аҡ күбек сәсрәтеп урғып ятҡан шарлауыҡтан мәхрүм ҡалған Оҙонғол буйы хәҙер тын, буш ине.

Ҡыҙҙар, быҙауҙарын етәкләп, берәм-берәм ҡабаҡ аҫтынан күтәрелә башланы. Иң алдан, эсе үткәшеп, дүрт аяғын бергә генә баҫып торған бәләкәс ҡыҙыл быҙау етәкләп, Шәүрә сыкты. Уның быҙауы, арыҡ булһа ла, ҡолак ярырлыҡ әсе тауыш менән баҡыра, ысҡынып китергә теләп, Шәүрәнең ялан аяҡтарына баҫып тартҡылаша ине. Емеш, уның бысаҡ һырты кеүек ҡырлы арҡаһынан һыйпаны.

— Ҡайһылай арыҡ ҡына бахыр. Селәүсен, ер бөтә тип, ашамай, имеш, ти торғайны Ҡарасәс инәй. Был да, туғай үләне бөтөр тип, йәлләп ашамайҙыр, күрәһең.

— Ауырыу ул. Ашаһа ла йоҡмай,— тине Шәүрә.— Әсәйем әйтә, әгәр ошо быҙауым үлмәһә, һиңә инселәйем, ти... Үлер шул, тормаҫ... Беҙҙең быҙауҙар бер ҙә йәшәмәйҙәр улар... Былтырғы быҙауҙы ла миңә инселәгәйне әсәйем... Ул да үлде... Малдан бәхетем юҡ минең...

Шәүрә, ташҡурсаҡ кеүек һылыу, нәфис битен байып барған ҡояш нурҙарына терәп, сыҫкан тештәрендәй ваҡ аҡ тештәрен йылтыратып, күңелһеҙ генә көлөп ҡуйҙы.

— Әсәйем әйтә, төҫкә матур ҡыҙ бәхетһеҙ була ул, ти. Үҫеп етһә, уны берәй ҡарт бай һатып ала.ти...

Ул, үҫмер йәштә генә булһа ла, үҙенең матурлығын белә, урыны тура килгәндә, был хаҡта иҫкә алып китергә лә ярата ине.

— Ниңә улай ти?— тип ғәжәпләнде Емеш.— Нинә бәхетһеҙ була? Ниңә ҡарт бай ала, ти?

— Әллә, белмәйем,— тине Шәүрә, өмөтһөҙләнеп. Унан бер аҙ өндәшмәй торғас:— Ниңә тип ни,— тип артабан һөйләп китте...— Артынан мәһәр есөн бер көтөү түгел, бер баш йылҡыһы ла бармаясаҡ ярлы ҡыҙҙы ниндәй егет алһын?.. Уны шул үҙ малы күп булған ҡарт бай ғына һатып ала инде... Бына шулай бәхетһеҙ булғас, миңә инселәгән быҙауға саҡлы үлеп тора...

Емеш, дуҫын йыуатырлыҡ та, үҙ күңелендә Шәүрә-



нең һуңғы һүҙҙәре һалған ҡараңғы уйҙарҙы ҡыуалап ебәрерлек тә һүҙ таба алмағас:

— Йә, ярар, ҡайғырма, был быҙау үлмәүҙән генә барыбер байып булмай инде ул,— тип ҡуйҙы.— Бына минең апайым былтыр бер һарыҡ бәрәненең, ике кәзә бәрәсенең, эсе китә башлағас, минә инселәгәйне лә бит... Әгәр ҙә мәгәр ошонан үлмәй ҡалһалар, был бәрәстәремде Емешкә бирәм. Валлаһи-биллаһи, бирәм, тигәйне. Ул шулай миңә һарыҡ та, хатта быҙау ҙа инселәгәне бар. Улар үлмәй ҡалалар ҙа... Унан миңә ни файҙа? Уларҙын. миңә бер бөртөк ҡылы ла тәтемәй хатта...

— Ул бит һинең әсәйең үгәй булғанға шулай,— тине Шәүрә һаман шул күңелһеҙ тауыш менән.— Үгәй әсәйҙәр шулай булалар, ти, ул.„ Ә минең әсәйем, эй, минең әсәйем бигерәк һәйбәт кеше бит ул!.. Ҡулынан килһә, ул миңә нимәләр генә биреп бөтмәҫ ине!..

Оҙаҡламай Заһира, Гөлйыһан, Сабираһәм башҡа ҡыҙҙар ҙа, быҙауҙарын табып алып, Оҙонғол башына килеп менделәр. Йәнеш тә, тукал һыйырҙың тап үҙенә оҡшап оҙонтороҡ ҡыҙыл ала тукал быҙауҙы, күҙ теймәһен өсөп, кыҙыл сепрәктәр тағып бөткән ҡыл муйынсағынан етәкләп алып сыкты. Алтынбикәнең ун быҙауын Хәсбиямал менән ҡустыһы ҡыуалап алып сыкты. Улар, үҙҙәренен, һыйырҙары булмагас, бер сүгәтә ҡатыҡ, йә бер сәйлек һет өсөн уларҙың быҙауҙарын иртәнсәк ҡырға ҡыуып, кисен алып ҡайтып йөрөйҙәр ине.

Ҡайтышлай ҡыҙҙарға һырт артынан, баҫыу яғынан килеп сыҡҡан бер төркөм рус балалары осраны. Электән йәшәп килгән ғәҙәт буйынса, балалар араһында белербелмәҫ тел менән әрләшеү, үсекләшеү башланды.

— Башкирин, гололобый...— Не ходи нашей дорогой...

— Урыҫ суҫка ашаған!.. Суска махан ашаған, тфү-тфү!

Ахыр рус малайҙары сыбыҡ тотоп ҡыҙҙарҙы ҡыуырға, ә ҡыҙҙар, әрләшә-әрләшә, сыр-сыу килеп ҡысҡыракөлә ҡасырға тотондо.

Илсеғол ауылынын, еренә ултырған Мраковка, Ивановка ауылының рустары менән башҡорттар араһында революцияға хәтле ер-һыу өсөн өҙлөкһөҙ ҡуҙғалып торған ғауға, ыҙғыш уларҙын, балаларына ла нык йоғонто яһағанлыктан, балалар ҙа осрашҡанда һаман әле элеккеләй талашмай-тартышмай уҙып китә алмай. Был уларҙын, күбеһенә хатта ҡыҙыҡ, мәҙәк эш булып киткән. Әле лә ҡыҙҙар әрләшә-көләшә, тырым-тырағай ҡасып бөттө. Ялан уртаһында, быҙауҙар араһында Емеш бер үҙе тороп ҡалды. Ул — ауырыуҙан яңы ғына торғанға — йүгерә лә, ҡаса ла, берәй һүҙ өндәшә лә алманы. Бына бер ваҡыт зәп-зәңгәр

12 Заказ 733

күҙле, эре һары һипкелле, киндер күлдәкле бер малай оҙон тал сыбыҡты уҫал һелтәп, уға табан килә башланы. Емеш, ҡото осоп, текләп, баҫкан урынында тора бирҙе. Ул арала теге малай, йүгереп килгән ыңғайға нимәлер ҡысҡырып, уға уралта һуғып ебәрҙейем генә тигәндә, ҡапыл туктаны ла ҡалды. Бер яҡтан үтә зәңгәр, икенсе яҡтан үтә ҡара күҙҙәр керпек тә ҡаҡмай текләшеп тынып торҙо. Ахыр зәңгәр күҙҙәр балкып, көләп ебәрҙе.

— Эй, һин, Байгилканың ҡыҙы ла баһа!.. Байгилканың ҡыҙы!.. Беҙ дуҫтар!..

Малай Емешкә күрешер өсөн ҡул һуҙғандай ҙа итте. Ләкин Емеш, уның телен аңламағас, ҡулын артына йәшерҙе. Шунан теге малай, зәңгәр күҙҙәрен йылтыратып, Емешкә тағы ниҙер әйтеп, дуҫтарса йылмайҙы ла, кире боролоп, иптәштәренә ҡысҡырҙы:

— Эй, ташлағыҙ! Давай һуғышмайбыҙ. Хәҙер батша заманы түгел бит. Хәҙер революция!.. Совет. Атайым әйтә, хәҙер бөтә кеше дуҫ булырға тейеш, ти!

Ҡыҙҙарҙы пыр туҙҙырып, ялан буйынса ҡыуып йөрөгән малайҙар, сәүкә шикелле эркелешеп, һырт артына, Ивановка яғына китеп юғалды. Ҡыҙҙар, таралған быҙауҙарын йыйып алып, бер ни булмаған кеүек, көлөшә-көлөшә ҡайтып киттеләр. Тик Емештең күҙ алдында ғына теге һары һипкелле, яҙғы күк шикелле асыҡ зәңгәр күҙле малай һаман баҫып тора ине. Емеш ғәжәпләнеп тә, ҡурҡынып та унын. хаҡында уйланы.

«Ни өсөн һуҡманы икән ул миңә?! Мин барыбер ҡаса ла, уға ҡайтарып һуға ла алмай инем бит... Тукта... Тукта... йылмайҙы ла, йәлләне лә түгелме һуң әле ул?.. Ә үҙе урыҫ малайы!..»

Бынан ары Емеш үҙенең башына:

«Урыҫ булһа ла, ҡалай матур ғына бит әле үҙе...» тигән уй килгәс, ҡото осоп, тирә-яғына ике-өс төкөрөп ҡуйҙы.

— Тәүбә, тәүбә!.. Әстәғәфирулла... Тфү!.. тфү!..

Бибисара абыстай уға, кафырҙы матур тип, яҡшы тип уйларга ла, уларҙың тормошона ҡыҙығырға ла ярамай, тип өйрәткәйне.

— Был донья — кафырҙын, ожмахы, шуға улар һәйбәт йәшәйҙәр. Ә беҙҙең ожмах теге доньяла,— ти ине Бибисара абыстай. Ләкин Емеш белә: теге донъялағы ожмахҡа инер өсөн дә кеше алдында мең төрлө кәртә тора. Емеш өсөн ин, ҙур кәртәләрҙең береһе — уның уйламай тора алмауында ине. Унын, яратыусан, һоҡланыусан, ҡыҙыҡһыныусан күнеле бер генә минут та тулҡынмай, уйламай тора алмай һәм, ни генә уйлаһа ла, алланын, эшенә барып тығылыу, ни генә



күрһә лә, нимә генә яратһа ла, ярамаған гонаһлы эш эш ләү булып килә лә сыға. Бына әле лә ул үҙе лә аңламаҫтан бынауы зәңгәр күҙле малай тураһында ла, ер өсөн барған бөтмәҫ тартыш тураһында ла, хатта үҙенең атаһының да хәҙер шул «ер», «һыу», «ил» тип Собхан старшина, Шымбай каштан кеүек кешеләр менән гел талашып-тартышып йәшәүе хаҡында ла аптырап уйларға керешеп китте. Тик ауылға етер алдынан ғына Шәүрә серле шыбырлап уның уйын бүлде.

— Теге малаҡайҙы таныныңмы, Емеш?

— Ҡайһы малаҡайҙы?

— Эй, биғәләш!.. Ҡайһы ти... Анауы баяғы, һине һукмай киткән малаҡайҙысы!

— Уны, урыҫ малайын, ҡайҙан таныйым ти мин?!—тип аптыраны Емеш.

— Ә мин танынsocket,— тип маҡтанып шыбырланы Шәүрә.— Уның атаһы теге балшәүник Никита бит. Шуны ла белмәйһеңме? Теге ваҡытта туҡмалған Тимербай ағайҙарҙы кем санаға тейәп Ташлыға больниска алып китте һуң? Шул кеше ине бит ул!..

— Ә-ә...— тип, әҙерәк төшөнгән һымаҡ итеп ҡуйҙы Емеш.

— Күргәйнем... Ул да баяғы малай ксүек зәңгәр күҙле, кылған сәсле ине шикелле.

— Тап шулай! Бына бит, беләһең! Ә үҙең белмәйем ^ булаһың!— тип, ҡыуанып китте Шәүрә.— Унан, ^ауышын тағы ла баҫа биреп, артабан шыбырланы.— )сәйем әйтә, шул Никита, бынау байҙарҙы туҙҙырыу өсен Ьтряд алып киләм тип, ҡалаға китте лә һыуға батҡан кеүек юҡ булды ла ҡуйҙы, ти. Хәҙер, ти, бөтә яҡлап бында аҡтар етеп килә, ти. һатыбал отряды ла көсәйә. Беҙҙең фужинасылар уларға ҡаршы үҙҙәре генә нимә эшләй 1лырҙар инде, ти. Тиҙерәк кенә Никита ярҙамға ҡайтмата, атайымдарҙы һәләк итерҙәр, ти, вәт. Бына был малай ана шул балшәүник Никитаның улы булғанға, һине танып, һукмай китте ул, белденме? Атыу анау сыбығы менән уралтып килтереп тартһа!.. һин бер ни ҙә эшләй алмаҫ инен, вәт...

— Ә һин эшләр инеңме?

Шәүрә шарҡылдап көләп ҡуйҙы:

— Миы, исмаһам, битен булһа ла тырнар инем.

Әллә әсәһе Зөбәржәт енхә уға бөтә яңылыҡ тураһында һөйләп торғанға, әллә кеше араһында һмештән йыш йөрөгәнгә, Шәүрә күп нәмәне шулай алдан белеп, ишетеп, күреп тора ине.

Ҡыҙҙар быҙауҙарҙы алып ҡайтып, ишек алдарына индереп бәйләүгә, көтөү ҙә төштө. Урам бер аҙға кәзә-

һарыҡ баҡырған, һыйыр мөңрәгән, быҙауҙар, бәрәстәр сылалашҡан тауыш менән тулды. Сәрбиямалдың ҡыҙыл тукалы ла ҡайтып етеп, мөгөҙһөҙ башын аратаға тығып ҡапканы күтәреп кенә асты ла ишек алдына, быҙауы янына үтте. Сәрбиямал, йәшел буяулы оҙон күнәк тотоп, ҡарғана-тиргәнә аласыктан уға ҡаршы сыкты.

— Ҡәһәр генә һуҡҡыры, сиған балаһы, ҡалай күнәгемде әрәм итеп ҡуйҙы бит. Ҡулы ҡороғоро, сәнселеп киткере!.. Күнәгем батҡансы, үҙе генә батып үлһәсе!

Емеш күнәкте һыу төбөндә ҡалдырып, ауырып йығылғаны бирле һәр көн, иртә-кис, һыйыр һауған һайын ҡабатланғанлыктан, Йәнеш өсөн тәбиғи бер хәлгә әйләнгән был ҡарғау-тиргәү Емешкә бик ауыр тәьҫир итте. Уның ошо көндәр эсендә бөтә кисергәндәрен яңыртып, анһыҙ ҙа хәлһеҙ быуындарын тағы ла ныҡыраҡ талдырып ебәрҙе. Ул, һарыҡ-кәзәләрҙе тиҙ генә ялан кәртәгә индереп япты ла, ҡайтанан урамға сыкты. Шәүрә лә, ҡустыһы Хәсәнде йоҡлатып, Емеш эргәһенә сығып ултырҙы. Улар ситән буйында айырыуса йомшак ҡалын булып кейеҙләнеп яткан бөҙрә ҡаҙ үләндәрс өҫтөнә һуҙылып яттылар. Урамда көтөү ҡайтыу ваҡытынын. йәнлелеге һаман дауам итә ине әле. Аиа Сабира көтөүҙән айырылып кәртә артыыда тороп ҡалған ҡара һарығын тал сыбыҡ менән һыҙыра-һыҙыра елдереп ҡайтып килә. һарыҡ, ишек алдына инергә теләмәй, янтайып ситка ҡаса. Баҙыян снгә, ҡулына икмәк ҡатыһы тотоп:

— Бәрә-бәрә-бәрә!.. Бәрәс-бәрәс!..— тип ҡапка төбөндә уны саҡырып тора.

Бына атҡа яйлаҡ ҡына атланып, Оло Эйск яғыиа Байрас үтеп бара. Ул атаһының ҡайғыһын кисергәне бирле нисектер үҫеп, оҙопайып, ҡаҡсаланып киткән кеүек күренә. Элекке уяу, теремек күҙҙәрендә уйсанлыҡ бар һымаҡ. Шулай ҙа Емсште күргәс, ул, элеккесә, шаяртмай үтә алманы:

— Бибсш, Йәнеш, Гөлйемеш...
Гөлйемсш матур, имеш...

Шәүрә, щарҡылдап көлөп, уға шунда уҡ таҡмаҡлап яуап ҡайтара:

Гөлйемеш иатур имеш тә, . ..,
һиңә тәтемәй, имеш...

Емеш өндәшмәй, Байрас яғына әйләнеп тә ҡарамай. Уға Байрастын. был шаяртыуы оҡшамай. «Ниңә элеккесә, Гөлйемеш шаҙра, имеш, илаҡ, имеш, йәки телһеҙ, имеш, тип үсекләмәй икән? Гөлйемеш матур, имеш, тигән була.



Анауы Моратша әйтмешләй, күләгәгә, һөлдәгә әйләнгән кеше матур була тиме ни?!»

— Байрас иртәгә атаһын алып ҡайта, ти,— тип хәбәр итә Шәүрә.— Ҡара әле, Емеш, Хаммат ағайым ҡайҙа ҡайтыр икән хәҙер? Өммөкәй еңгәгә ҡайтырмы икән ни инде?..

Емеш, дуҫынын, был хәбәрен бөтөнләй ишетмәгән һымаҡ, үҙ уйын дауам итте:

«Йәлләгән буламы икән әллә был Байрас та? Шулай йәлке генәме икән ни инде мин хәҙер?.. Эй алла!..»

Оло Эйек буйынан ҡаҙ көтөүҙәре лә ҡайта башланы. Сәрбиямалдын, да ике оя ҡаҙы, ҡыҙыл тәпәйле ваҡ ҡына һары бәпкәләрен эйәртеп, ҡаңғылдашып ҡайтып инделәр ҙә, ашап туйғас:

— Хи-хи-хи!— тип йыуаш ҡына һөйләнеп, урамдың ҡап уртаһына сығып, йәшел үлән өҫтөнә түшәлеп яттылар.

«Бәпкәләр ҙурая башлағандар ҙа икән... Бәлки быйыл ҡаҙ көтөргә тура килмәҫ,— тип уйланы Емеш. Ул арала Кәзә мәзинден. әсе тауышы унын иғтибарын үҙенә тартты. Ул үҙенек ике ҡолағынан тарта-тарта, башын борғалап:

— Аллаһы әкбәр-р-р!.. Аллаһы әкбәр-р-р!..— тип, әсәһен юғалткан кәзә бәрәсе шикелле тазылдап, манара башында ҡысҡырып тора ине. Емеш аҙандын һүҙҙәрен аңламаһа ла, унын ойләнә-тирәләге кешеләрҙен ябай эштәренә, ҡылыҡтарына оҡшамауында ниндәйҙер мауыҡтырғыс серлелек, моңһоу яғымлылыҡ тоя. Әле ул Шәүрәнең Байрас тураһында көлә-көлә ниҙер һөйләп маташыуын да ишетмэи, аҙаиды тынлап ятты.

«Нимә тип ҡысҡыра икән ул?.. Ниңә башҡортсағына ҡысҡырмай икән? Аллаһы тәғәлә башҡортса аңламаймы икән ни?.. Эй-й, минен. теләктәрем, моғайын, шуға ҡабул булмайҙыр әле... Мин теләкте ҡөрьән телеидо теләй белмәйем дә баһа!..»

Башына беренсе тапкыр килгән был уйҙан Емештең бөтөнләй өмөтө еҙәлеп китте. Ысынлап та, ул атаһының, ағаһыныц иҫән-һау булыуын, атаһының бөгөн үк, иртән үк ейгә ҡайтып килеүен, үгәй әсәйҙен күңелендә аҙ ғына булһа ла шәфҡәт тойғоһо уяныуын, үҙенә байрамға яңы кү;|дәк булыуын, тағы бик күп нәмәләр тураһында нисә тапкыр төндәр йоҡламай алланан ялынып һорап, теләп сыҡҡаны бар... Тимәк, былар бетәһе лә бушҡа ғына булған?! Алла уны ишетмәгән дә, аңламаған да! Улай булғас, ниңә һуң ул бетә кешене лә шул ҡөрьән телендә һөйләшә торған итеп кенә яратмаған икән?..

Кәзә мәзин, Емеште был аяуһыҙ уйҙан айныҡтырлыҡ итеп, тағы бер ҡат әсетауыш менән:

— Аллаһы әкбәр!— тип ҡысҡырҙы ла манаранан төшөп

китте. Ҡарттар берәм-берәм, олпат ҡына атлап, мәсеткә йыйыла башланы. Ин алдан аҡ ҡабаҡ ҙурлыҡ сәлләһен сумыра кейеп, йәшел таяҡҡа таянып, Ғаббас мулла китте. Уның артынса ҡаҙан ҡорһаҡлы, ҡыҙыл елкәле Собхан старшина, кипкән тәнен ҡаҙыҡ кеүек ҡатырып Шымбай каштан, дегетсе Ғәйнетдин, ҡараҡ Әхмәтша һәм тағы берике ҡарт, йылы урын эҙләп мейес башына үрләгән тараҡан шикелле, әкрен генә мәсеткә табан шыуышты. Намаҙға барыусылар араһында ярлыларҙан элек илаҡ Хәсбиямалдын, атаһы Тулыбай ҡарт ҡына була торғайны. Хәҙер ул да үлтерелгәс, мәсеткә йөрөүсе бүтән берәү ҙә ҡалманы.

Тарамыш үнәсле, бәләкәс кенә башына шундай килешһеҙ, кеше кейеме һымаҡ булып ултырған керле, иҫке сәлләле, ҡырҡ ямау сапанлы мәрхүм Тулыбай ҡартты Емеш мәсеткә инеп юғалғансы күҙәтеп ҡала торғайны. Уның кейеме генә түгел, хатта атлап барыуы ла башҡаларҙан бөтөнләй айырылып тора, ул ни өсөндөр тыныс атлап түгел, ә үнәсен алға һуҙып, тыбызлап, эләгә-йығыла ашығып бара торгаймы. Күрәһен, эш тапмай урамда эркслеп йөрөгән малайҙарга ла унын, мәсеткә йөрөүе сәйер тойолғандыр. Улар уны шау килеп, эт булып абалап оҙаталар ине. Тулыбай ҡарт һис тә асыуланмай. Таяғын унға-һулға һелтәгән булып:

— Шау-шыу, шауғамыш!—тип һөйләнеп уҙып китә. Йәнәһе, шаулап торған ҡамыш араһынан уҙып бара. Малайҙарға ҡыҙыҡ була. Улар тағы ла ҡотороноборак эт булып абалап ҡалалар.

Бибисара абыстай уның хаҡында һәр саҡ:

— Эй, ошо Тулыбай ҡартты әйтәм, алла бәндәһе лә индс. Донъя ҡыумай, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмай, хәйер-саҙаҡаһын йәлләмәй,— тип маҡтай.— Теге донъяла ожмахтың түрендә генә ултыра торған кеше ул Тулыбай,— ти. Ә инде Ҡарасәс инәй, ниңәлер, уны бер ҙә маҡтамай торғайны.

— Йөрөй шунда, иҫәүәнләнеп,— ти торғайны ул.— Әлепте таяҡ тип белмәгән көйө, ул да суфыйлыҡ дәғүә итә, бахыр. Балаларын асыҡтыра-йонсота мулла мәзин ашата. Ана, Ғаббас мулла менән Кәзә мәзин бер ҙә, теге донъяла булыр әле тип, был донъяларынан баш тартып тормайҙар. «Биргәнден. күҙенә ҡарама!..» тип, биргәнбирмәгәнде өҙөп-йолҡоп алып ҡына торалар. Үҙҙәре эшләмәһәләр ҙә, ялсыларын эшләтеп, донъяны нисек ҡыуалар!..

«Ҡайһы дөрөҫ һөйләй быларҙың?!. Ысынлап та, ниңә мәсеткә байҙар, муллалар ғына йөрөй?.. Былай булғас, теге донъяла, ожмах та байҙар, муллалар өсөн генә була түгелме һун?..»



Емеш, үҙ уйынан үҙе ҡурҡып, һикереп тороп ултырҙы.

Шәүрә, уның ошо минутта тағы ла нығыраҡ аҡһыуланған арыҡ йөҙөнә ҡарап, аптырап китте.

— һин нимә уйлайһың, Емеш?

Емеш үҙенең ни уйлауын һөйләп биреү түгел, уны ҡайтанан иҫкә алырға ла ҡурҡып:

— Ә һин?— тип һораны.

— Мин анауы Ғаббас мулла олатай хаҡында уйлайым,— тине Шәүрә, көлә биреп.— Әсәйем әйтә, ну, илла шыуғалаҡ та нәмә инде шул, ти. Былтыр батша төшкәс, туғанырыуына йәшергәндән ҡалған байлығын үҙ ҡулы менән илтеп сәүиткә биргәйне.— Мин сәүитски булам, муллалығымды ташлайым,— тип йөрөгәйне. Аҙаҡ, батша төшһә лә, бында эш башында үҙ кешеләр ултырғанын күргәс, ҡалай кинәнеп ҡабат мулла булып алды. Мут кеше. Бөтә яҡҡа ла ярай белә. Ундай кеше уттан-һыуҙан ҡоро сыға ул. Аҡты ҡара, ҡараны аҡ тип раҫлаң ҙа ала. Барыбер уға ышаналар. Бар һин барып, юҡ ул. дөрөҫтө һөйләмәй, ул алдай, тип әйтеп ҡара әле... Тештәренде емерер... Юҡ, үҙе емермәҫ... Үҙе һине яҡлаған кеше булып торор... Тештәренде башҡа кешеләрҙән емерттерер... ти, вәт.

Шәүрәнең был һүҙҙәренә Емеш нисек ҡарарға, ни тип әйтергә белмәй аптырап ултырғанда, Шәүрә тағы шул үҙенең ғәмһеҙ бер ҡатлы йылмайыуы менән һүҙен икенсегә бороп та ебәрҙе.

— Әсәйем әйтә, ул, ти, бынауы йәш бисәһен ун ике йәшенән алды, ти... Беләһеңме, бәләкәс кенә сағынан... Вәт!

— Ниңә үлмәне икән ул?

— Кем?

— Шул йәш бисәһе.

Шәүрә, ҡысҡырып көлөп, Емештен, осло яурынынан этәрә биреп ҡуйҙы.

— Кит, биғәләш, нинә үлһен?..

Емеш һис тә көлмәй, етди тауыш менән:

— Үлергә кәрәк ине уға,— тине.— Ундай шыуғалаҡ та, яуыз да, ҡарт та кеше менән торғансы, үлергә кәрәк ине уға...

— Кит, биғәләш,— тип ҡабатланы Шәүрә.— Улай анһат ҡына үлеп булалыр шул?! Әсәйем әйтә, ҡәҙерһеҙгә ҡалған башты үлем дә алмай ул, ти.

Шәүрәнең был һуңғы һүҙе Емештең йөрәк яраһына тоҙ һипте. Сөнки ул үҙе лә, Сәрбиямалдың әйтеүенсә, «кәҙерһеҙгә ҡалғанлыҡтан», үлмәй йәшәүселәрҙең береһе ине.

— Әсәйем әйтә, муллалар, байҙар, ти, тыштан бик изге йән булып йөрөһәләр ҙә, эстән боҙоҡтар улар, ти... Беҙҙең

ярлы ундай ике йөҙлө була алмай, ундайҙарҙы яратмай ҙа, ти... Вәт. Ана Собхан старшина ла, батша төшкәс, ҡыҙыл тыу тотоп, мин старшина булманым, булырға ла теләмәнем. Мине көсләп һайлап ҡуйҙылар, тип йөрөгәйне. Әле инде бына тирә-яҡтан аҡтар яҡынлаша башлағас, сәпсим элекке саҡтағы кеүек ҡылана, ти... Байҙар шулай, ти, ул... Бар ерҙә лә ярай беләләр, ти...

Емеш, көнелендә бик ауыр, ҡараңғы булған саҡта, йәшел үлән өҫтөнә салҡан төшөп, оҙаҡ-оҙаҡ күккә текләп ятырға ярата ине. Әле лә ул, был бәйләнсек ауыр уйҙарҙан ҡотолор өсөн, ҡапыл салҡан әйләнеп китте.

«Кешеләрҙең күңелдәре лә ошо зәңгәр күк кеүек булһын ине. Бына уның. йөҙөнә күбәләктәй генә болот ҡунһа ла, дауыл ҡупһа ла, йәшен йәшнәһә лә, ялағай ялпылдаһа ла, ай, ҡояш, йондоҙҙар ҡалҡһа ла күренеп кенә тора. Кешеләрҙең күңелдәре лә шулай күренеп кенә торһон ине... Ни уйлай, ни теләй, нимә кисерә — бөтәһе лә башҡа кешегә билдәле булһын ине... Ул саҡта бер ҙә боҙоҡ уйлы кешеләр булмаҫ ине... Булһа ла кешеләр уны шунда уҡ танып алырҙар ине... Эй-й, ниндәй һәйбәт булыр ине донъя...

Емеш, офоҡ яҡтыһы менән алһыу зәңгәр төҫкә ингән тымыҡ аяҙ күккә өнһөҙ текләп ятҡан хәлдә, үҙе күп тапҡырҙар борсоган был уйҙы тағы бер ҡат мсйеһенән үткәрҙе.

Һөйләшмәй оҙаҡ тынып тора алмаған Шәүрә:

— Беләһеңме, Емеш, күкте һыйпап ҡараһан, ине, эйе бит?.. Беләһеңме, анауь(, иң бейек Күктау башына менеп тора бит ул, эйе бит?— тип тағы һүҙ башлап ебәрҙе. Ул да аяҡтарын сәнсеп, Емеш янында салҡан төшөп ята ине хәҙер. Шул Күктау башына менһән., күккә ҡул етер ине бит, эйе бит, Емеш?

— Белмәйем,— тине Емеш, уйсан гына.— Белмәйем...

Ысынлап та, Емеш тә күктен, нимә булыуы, нисек булыуы тураһында күп тапкырҙар уйлап ҡарағаны бар. Ләкин һис тә осона-башына сыға алганы юҡ. Ул да уны ерҙең өҫтөнә ҡапланған зәңгәр көмбәҙ итеп кенә күрә. Шунан ары бер ни ҙә аңлай алмай. һәм күк тап бына ошо серлелеге менән Емештең күңелен үҙенд күберәк тарта ине лә шикелле. Ергә ҡарағанда күккә ҡарарға нығыраҡ ярата ине ул.

— Бибисара абыстай әйтә, күк ете ҡат, ти, ул, вәт,— тип дауам.итә Шәүрә.— Иң өҫтә, етенсе ҡатта, үҙенең алтын тәхетендә, алла үҙе ултыра, ти. Ә анауы йондоҙҙар күктен, тәҙрәләре. Фәрештәләр шунан кешенең ерҙә нимә эшләгәнен күҙәтеп кенә торалар ҙа аллаға бара ла ошаҡлайҙар, ти. Харап ошаҡсылар, ти, улар, вәт.

,— Хәҙер бына ошонда беҙҙең, нимә эшләгәнде лә күрәләр тиме?



— Күрәләр, ти.

— Нимә уйлағанды ла беләләр тиме?— тип ҡурҡыныт ныҡыша Емеш. Сөнки Бибисара абыстайҙың: «Уйлау ул шайтан эше»,- тигән һүҙенән һуң, ул үҙен ерҙә иң гонаһлы кешеләрҙең береһе итеп хис итә. Ләкин бөтә әйләнә-тирәк серле бер йомғаҡ булғанда, нисек итеп уйламай тора алырға мөмкинлегенә төшөнөп кенә етә алмай ине.

— Уйлағанды ла беләләр, ти. Харап зирәктәр ҙә, шаяндар ҙа, ти, улар...— тип раҫланы Шәүрә, үҙе ғәмһеҙ шарҡылдап көлөп ҡуйҙы. Ул күпте белеп, күпте һөйләргә ятаһа ла, быларҙы һис тә йөрәгенә яҡын алмай, кисермәй, ысынға һанамай, гүйә, был һөйләгәндәр һис тә уның, үҙенә ҡағылмаған һымаҡ тыныс, ғәмһеҙ тауыш менән, мәрәкәитеп кенә һөйләй ине.— Кешенен, ике яурынында ике фәрештә ултыра, ти. Уларҙың береһе кешенең яҡшылығын, икенсеһе яманлығын яҙып бара, ти. Унан, ҡиәмәт көнөеткәс, ошо ике дәфтәрҙе биҙмәнгә һалып үлсәйҙәр ҙә, яҡшы яғы еңһә, ожмахҡа, яман яғы еңһә, тамуҡка төртөп төшөрәләр ҙә ебәрәләр, ти... Вәт, мәрәкә!..

— Кит, иҫәр, таптын мәрәкәне!— тине Емеш. Унан, бөгөн күккә ҡарап ятып та йәнгә тынысл ыҡ табыуҙан өмөт өҙөп, тороп баҫты.

— Әйҙә әбәк уйнайыҡ!

Шәүрәгә шул ғына кәрәк ине. Ул дуҫының осло яурынына ҡаты ғына ҡағып:

— Әбәк!— тине лә урам буйлап йүгереп тә китте. Емеш уныц артынам йүгерҙе. Наҙлы ғына хи.хылдашып, иренеп кенә ян яҡтарынан у/Гән өҙөштөрөп ятҡан ҡаҙҙар, пыр туҙып, ситкә тайшанды. Киске уйын ваҡыты еткәнде һиҙеп, Сабира, Сәмиғә, Заһиралар ҙа йүгерешеп сыҡты. «Әбәк», «Йәшенмәк» уйындары башланып китте.

Уйын эңер ҡараңғыһы төшөп, ҡыҙҙарҙы әсәләре берәмберәм ҡайтарып алғанға хәтле дауам итте. Бынан һуң, Шәүрә менән Емеш баш осонда жыулап осоп йөрөгән май ҡуңыҙҙарын ҡыуып, уларҙы устары менән бәреп төшөрөп, тағы бер аҙ йүгерешеп йөрөнөләр. Аҙаҡ, Емеш, тамам арып, хәлдән тайып, тағы ситән буйына, үлән өстөнә, барып ятты. Шәүрә-лә унын янына килеп ултырҙы. Урам бөтөнләй тын, кешеһеҙ булып ҡалды. Кәзәләр, ҡаҙҙар, кинәнеп, ҡайтанан урам- уртаһына таралып яттылар. Хатта бер генә вйҙә лә ут -аҫаре күренмәне. Сөнки кешеләр хәҙер тышта, аласыҡта, бешеренәләр, ишек алдында аи^айҙар, йоҡлайҙар, өйгә бик һирәк инәләр ине. Етмәһә, күп кешелә хәҙер кәрәсин дә, шырпы ла юҡ. Торонбашты йәки ҡоро тиҙәкте к&лгә күмеп кенә ауылда утты һаҡлап киләләр. Әгәр үҙенең усағында ут һүнһә, һоҫко тотоп, урам буйлап ут эҙләп йөрөйҙәр ине.

Емеш менән Шәүрә тағы бик оҙаҡ, киске урамдын. ошо серле тынлығын тынлап, ситән буйында ултырҙы. Шәүрәнең әсәһе Зөбәржәт еңгә ҡараңғы төнгә хәтле Собхан-старшиналарҙан эштән ҡайта алмағанлыҡтан, ә Емештең атаһы өйҙә булмағас, Сәрбиямал үҙе яҡшылап киске тамаҡҡа ашап-эсеп алмайынса уны өйгә ҡайтарырға теләмәгәнлектән, улар бөгөн урамда теләгәнсә ултыра, энер тынлығы менән туйғанса һоҡлана алалар ине. Ә төн шундай рәхәт. Көньяҡтан яны һауылған һөт шикелле йылымыс, дымлы ел иҫә. Туғайҙа кәкүк саҡыра. һандуғастар сутылдаша. Күләүектә әрмәнделәр баҡылдаша. Был тауыштарға Оло Эйек үҙенен, ҡырсынташтары менән серләшкән шат, шаян йырын өҫтәй. Ҡараһыу зәңгәр күк, шәфәҡ яҡтыһы менән яҡтырып, йондоҙҙар менән йымылдап, көләсләнеп тора. Бындай төндәр Емештек уйсан күңелендә бөткөһөҙ моң, дәрт уята. Ул хатта ошо матурлыҡтан үҙенең аяҡтарына хәл, йөрәгенә көс өҫтәлә барғанын тоя. Бындай кистәрҙән ул бер ҡасан да туя алмай, уға һоҡланып, уны күҙәтеп таң атҡанса ошолай ултырырға әҙер ине. Ләкин оҙаҡламай Тимербайҙарҙан арҡаһына мылтыҡ аҫҡан Байгилде ағай килеп сыҡты.

— Эй-й, атайым!— тип ҡыуанып шыбырланы Емеш.— Атайым өйҙә икән дә!

— Минең атайым да ҡайтҡандыр әле. Улар хәҙер гел бергә йөрөйҙәр.

Байгилде агай, ситән буйында ятҡан ҡыҙҙарҙы күрмәй, ишек алдына инеп китте. Шунан күп тә тормай, унын борсоулы тауышы яңғыраны:

— Емеш, ҡыҙым, һин ҡайҙа?

— Атайым минеэҙләй,— тип шыбырланы Емеш.— Шәүрә, мин ҡайтам.

— Мин дә,— тине Шәүрә.

Улар өйҙәренә таралды.

Емеш ҡайтып ингәндә, ишек алдындағы үләнгә түшәлгән киң сепрәк балаҫ өҫтөнә сәй әҙерләнгәйне.

Әле иртәнсәк кенә Әхмәтша ҡараҡҡа йылтыраған кеүек, берҙәй үк ғәмһеҙ йылтырап, оло еҙ самауыр урғып ҡайнап ултыра. Сәрбиямал ашъяулыҡ янында ҡырын төшөп һуҙылып ятҡан Байгилде ағайға арҡаһын ҡуйып ултырған да, уҫал күҙҙәрен асыулы йылтыратып, сынаяҡтарға сәй яһай. Тулға-« ай көмөш нурҙарын офоҡ ҡыҙыллығына мансып ала ла сәй өҫтөнә ҡыҙғылт таҫма һуҙа. Емеш ошо нур аҫтында, күләгә шикелле өнһөҙ-һуҙһеҙ шыуышып, сәй янына яҡынлаша. Байгилде ағай уға тәү күргән кеше кеүек итеп текләп, ғәжәпләнеп ҡарап ята. Емеш тә атаһына "карай. Сөнки ауырып йығылғаны бирле атаһын ул тәүләп



күрә. Атаһы нисектер йәшәреп, нығынып, күҙ ҡараштары теремек булып киткән һымаҡ күренә уға.

«Ниндәй ҡыуанысы бар икән? Әллә Иштуған ағайым -кайтамы икән?..» тип уйлай Емеш. Ләкин өндәшмәй. Атаһы *|уны:

— Әйҙә, кил, ҡыҙым, кил Ултыр. Тамағыңа аша Ҡалай эирешеп киттен, ҡыҙым.. Ҡаты ауырының шул, ҡаты, |гип, яратып, быҒаса бер касан да булмаҒанса асыҡ, яҡты ^араш менән ҡаршыланы. Емеш барып ултырғас, хатта арҡаһынан бер-нке һөйөп тә ҡуйҙы.— Ярай, ҡыҙым, 5ирешмә. Бирешмәйек. һәйбәт ваҡыттар килә, ҡыҙым.. Зеҙгә хәҙер бирешергә һис тә ярамай. Был донъяныц »тлеген күп күрҙек, инде рәхәтен күрср саҡ етте тигәндә, lыр бирергә ярамай, шулай бит, ҡыҙым?—тип һөйләнде

Емеш гәжәпһенеп атаһына текләне.

«Нисек, нимәгә шатлана ала икән?.. Әхмәтша ҡараҡ.. lымбай каштандар хаҡында һаман бер ни ҙә белмәйме ккән ни ул?»

,.' Байгилде агай тороп ултырҙы. Икмәкте үҙе телеп, май ягып, Емеш менән Йәнештец алдына һалды.

— Атайығыҙҙың. үҙ елкәһе мснән эшләп тапкан хәләл икмәге. Туйғансы ашагыҙ, ҡыҙыкайҙарым. Емеш, һннә күберәк ашап, тиҙерәк хәл йыйырға кәрәк. Юҡһа, ел өреп йыгыр үҙецде. Мнн өйҙә булмаһам, икмәкте теләгән саҡта үҙегеҙ телеп алыгыҙ ҙа ашағыҙ. Асығып йөрөмәгеҙ.

һунгы ваҡытта ул шулай ашап-эсеүҙәре менән дә 'ҡыҙыкһына, үҙе өйҙә саҡта уларҙы ас итмәҫкә тырыша нне.

Сәрбиямал, күҙенен агын әйләндереп ҡарап, бер ни өндәшмәй тик кенә ултырҙы. Байгилде агай, быға һис тә иғтибар итмәй, бер сыиаяҡ сәйҙе йәһәт-йәһәт кенә һемереп эсте лә тағы ҡырым төшөп ятты. Унын бөтә ҡыланышында, һүҙендә, күҙ ҡарашында ниндәйҙер ҙур тәрән шатлыҡ, ышаныс тойғоһо сағылып тора. Был хәл Емеште сикһеҙ "кыуандыра ла, аптырата ла. Байгилде ағай тормошток хәҙер нык үҙгәреусн, үҙҙәренең был йортта элеккесә ялсы түгел, ә тин хоҡуклы кешеләр булыуын ҡыҙҙарына яҡшыраҡ төшөндөрөргә теләп булһа кәрәк, Емештең арҡаһынан тағы бер ҡагып, һүҙен дауам итте. Ул бөгөн ғәжәп шат, уяу, һүҙсән ине:

— Емеш, Йәнеш, Ҡыҙҙар тауыка сығыр саҡ еттеме әле?

— Иртән сығалар ҡыҙҙар,— тип бошонҡо ғына яуап бирҙе Йәнеш.

— Ә һеҙ?

— Беҙҙен, күлдәгебсҙ юҡ,— тйп элеп алды Емлаш.- Алама күлдәк менән сыҡманҙар бит...

— Дөрөҫ. Дөрөҫтө әйттең, ҡыҙым,— тип, һаҡалын семеткеләп, әҙерәк уйланып ултырҙы Байгилде ағай. Унан ышаныслы итеп:— Күлдәк булыр,— тип өҫтәне.— Иртәгә иртән мин баҙарға китәм. һеҙгә шунда күлдәклек алып ҡайтырмын. Тауға өлгөрмәһә лә, йыуаға сығырға яңы күлдәгегеҙ булыр.

— Унда баҙарҙа һиңә нимә бар? Йөрөмә,— тип ҡаршы төштө Сәрбиямал.— Тағы шул ашлыҡ һатыусыларҙы тоторға бараһығыҙҙыр әле. һиндә ҡыҙҙарыңа күлдәк кайғыһымы ни?.. Хөрриәт бит!..

— Тотһаҡ һуң?

— Ниме, сәүит тип, ҡала тип, йәнең өҙөлдө? һин уларға ашлыҡ оҙатаһың. Үҙендең бында, әйтер инем ииде, ауыҙынды асһаң, үпкән. күренергә тора...

— Торһа һуң?

— Торһа тип ни, үҙ туранда ла уйла әҙерәк. Бына аҡтар килгәс, үҙенде, балшәүник тип, иң тәү тотоп атырҙар әле...

— һиненсә, нимә эшләргә һуң?

— Баҙарға барма. Байҙарға бәйләнмә. Өйҙә генә тор. Аҡтар сәпсим яҡын, имеш, тип һөйләйҙәр ҙә баһа. Улар килһә, һинһеҙ беҙ бында нисек итербеҙ?..

— Ярай, Сәрбиямал, һин миңә был хаҡта өйрәтеп маташма. Барыбер мин үҙем кәрәк тип тапҡанса эшләйәсәкмен.

Сәрбиямал, самауырҙы һелкстә күтәреп, аласыҡҡа инеп китте.

— Йә, ярар. Йөрө. Үҙ башыңа йөрөйһөңдөр әле. Емеш мпләп кенә атаһы янында ятҡан мылтыктын һалҡын көбәгенә тейеп ҡараны:

— Атай, һин тағы һалдат булдыңмы ни? Тағы һуғышҡа китәһенме ни?

— һуғышҡа китмәйем. һуғыш хәҙер үҙе бында килде, ҡыҙым,— ти Байгилде ағай, уйсанланып.— Шуға күрә тағы һалдат булып алырға тура килде.

— Ниндәй һалдат? Ҡыҙылмы, аҡмы, әллә балшәүникме?—тип ныҡышты Емеш. Сёнки ул ҡыҙылдар, аҡтар, большевиктар тип һөйләгәнде бик йыш ишетә ине хәҙер. Уның был һорауына Байгилде ағай рәхәтләнеп, ҡыскырып бер көлдө лә:

— Мин, ҡыҙым, дружинасы ғына әле. Кем белә, бәлки. ҡыҙыл ғәскәргә ҡушылып китергә лә тура килеп ҡуйыр. Ләкин оҙаҡҡа түгел. Аҡтарҙы ҡыуып, ҡырып бөтөргәс тә ейгә ҡайтырмын. Иштуған ағайын, да ҡайтыр. Унан беҙ күмәкләп Иҫәнбәткә, үҙ ауылыбыҙға, күсеп китербеҙ. Тик һеҙ бында бирешмәгеҙ, йәме, Сәрбиямалдан ҡурҡмағыҙ. Үҙегеҙҙе туҡматмағыҙ. Мин уға һеҙҙе бер ай түгел, бер йыл ашатып торорлоҡ ашлыҡ әҙерләп биргәнмен,— ти уйсан, етди тауыш менән һөйләп китте Байгилде ағай.— Хәҙер бер кем дә бер кемде лә туҡмарға тейеш түгел, белденме, ҡыҙым? Бар кеше бер тиң хәҙер. Элеккесә ерһеҙ-етем тип кешене кәмһетер саҡ түгел.' Аңланыңмы, ҡыҙым? Иҫендәме, бер саҡ мин һиңә Тоғро батыр менән Алдар батыр тураһында һейләгәйнем. Һин: «Алдар батыр екеп ҡуйһа?..»—тип ҡурҡҡайның... Хәҙер бит бына Тоғро батыр енде... Шулай булғас, беҙгә лә үҙ илебеҙгә ҡайтырға, ерле-һыулы булырга ваҡыт етте... Әйткәйнем бит... Тоғро батыр еңгәс тг>, ҡайтырбыҙ, тигәйнем.. Иҫсндәме?

— Иҫемдә...— ти Емеш, көскә тауышын сығарып. Байгилде ағай ҡыҙының ҡабарынҡы сәстәренән иплэп кенә һыйпап ала.

— Эй, ҡыҙым, аҡыллы ҡыҙым бнт һин минен... Тик бына әҙ генә бәләкәсерәкһең шул әле...

Ул артабан ниҙер әйтергә теләп тә нисек һүҙ башларга белмәгән һымаҡ туҡталып ҡала. Оҙаҡ ҡына уйланып ултыра. Унан тағы, ҡапыл йәнләнеп:

— Ҡыҙым,— тип өндәшә.— Ҡыҙым, Емеш, әгәр мин берәй яҡҡа китеп барһам... Тиҙ ҡайта алмаһам... бында, өйҙә, түҙеп торорлоҡ булмай башлаһа... Эйе, һеҙҙең Бибеш апайығыҙ бар бит әле. һеҙ яңғыҙ түгел... Бибеш апайығыҙға һыйыныығыҙ, йәме... Ул бәхетле хәҙер... Улы бар... Таиба ҡоҙағый ҙа, Хисбулла ксйәү ҙә уны яраталар... Насар ксше булманы был Хисбулла... Мнн уларға әйттем... Улар һеҙҙеташламаҫтар...

Емеш ҡуркынып атаһына текләне.

— һин ҡайҙа китәһең, атай?

— Китмәйем, ҡыҙым. Иртәгә баҙарга барам. Һеҙгә күлдәклек алып ҡайтам...

— Ә үҙең... .

— Уны мин былай ғына һөйләйем бит... Ауыр бола саҡ. Донъяның хәлен белеп булмай, тип... Ә бәлки Ьер ни ҙә булмаҫ әле...

Урамдан Тимербайҙың тауышы ишетелде.

— Байгилде ағай, киттек!

Емеш иламһырап атаһының итәгенә йәбеште.

— Атай, китмә, мин ҡурҡам!..

— Ҡайҙа китәһең тағы? Йөрөмә! Етер!— тип, аласыҡтан Сәрбиямал да килеп сыкты. Урамдан Тимербайҙың:

— Тиҙ бул, Байгилде ағай, кетәбеҙ!— тигән тауышы Ҡабатланды. Байгилде ағай, Емештең үҙенең сабыуына йәбешкән ҡулын иплэп кенә ысҡындырып:

— Ебәр... ҡыҙым... мин... Хәҙер... Ҡурҡма, йәме, ныҡ бул!.. Йәнеш, һин ҙур кеше. һылыуыңды ҡара! Иламағыҙ! —

тине лә мылтығын алып урамға йүгерҙе, Емеш тә унының артынан эйәрҙе. Ләкин атаһын ҡабат күрә алманы. Емеш ҡапҡанан сыҡҡанда, ул эңер ҡаранғылығында, ҡурғаш кеүек иреп, юҡ булғайны инде. ^рам тын. Тик артта, ишек алдында, Йәнештең низер һиҙенеп, үкһеп-үкһеп илаған тауышы ғына ишетелә ине.

## IX

Иштуған Яғылса һыртына килеп менгәндә, таң һыҙылып килә ине. Ул, Исәнбәт яғынан ҡаты атыш тауышы ишеткәс, атын ҡапыл туҡтатып, һырт өҫтөндә оҙаҡ ҡына тыңлап торҙо. Ауылдын. ике осонда ла, уртаһында ла мылтыҡтан өҙләкһеҙ атыш бара ине.

«Кемдәр һуғыша? Ауылда аҡтармы, ҡыҙылдармы? Теге беҙҙән ҡасып сигенгән аҡтар бында, Исәнбәттәме икән әллә хәҙер? Аҡтар булһа, көстәре нисек? Ҙурмы, бәләкәй отрядмы?»

Разведчик Иштуғанға, ашығыс рәүештә был һорауҙарға яуап алып, отрядҡа сабырға кәрәк. Ул ҡайынлы сауҡа эсенән ысыҡлы етеү үлән араһына төштө лә атын ҡайынлыҡ ситендәге яңғыҙ ҡайыпға бәйләп, үҙе ырҙындар аша ҡаса-боҫа ауылға яҡынлашты. Шәһит бабайҙарҙын. арт ҡапҡаһынан инеп, ауылда нимә барын белешсп сығырға ниәтләп, ергә ятып, картуфлыҡҡа табан шыуыша башланы. Бына атыш тауышына ҡатын-ҡыҙ, бала-сага илашҡан тауыштар ҡушылды. Ауыл яғынан берәм-һәрәм ҡара-ҡора шәүләләр тырым-тырагай һыртҡа табан йүгереп үтте. Шуларҙын, береһе аңғармаҫтан, шыуышып барған Иштуғанға килеп абынып, тәкмәсеп китте.

Уй-уй-уй!.. Алла-алла!.. Йәнемде һәләк итмә!. Күбәләктәй йәнемде ҡотҡар!..

Был Сыуаҡай әбей тауышы ине. Иштуған уны шунда уҡ танып алды.

- Инәй!— тип шыбырланы ул.— Сыуаҡай инәй, ҡурҡ- • ма. Был мин. Иштуған. Ауылда кемдәр һуғыша? Аҡтар күпме?

Ҡурҡыуҙан аҡылын юғалткан Сыуаҡай әбей унын һүҙен ишетмәне, һаман үҙенекен тәтелдәй бирҙе.

Үлтермә, зинһар!.. Мине - ҡарт кешене... Балаларымды айырма!..

Ул, ҡасырға, йүгерергә телэп, тырышып-тырмашып тороп баҫты. Иштуған унын беләгенән ҡыҫып тотоп алды,

- Инәй, тим, аҡылыңды йый! Исәрләнмә, һөйлә: ауылда аҡтармы? Әйтһәң, хәҙер ҡыҙыл ғәскәр килеп уларҙы ҡыуалап ебәрәсәк, ишетәһенме, инәй? Мин ҡыҙылдар яғынан!..



Сыуаҡай әбей Иштуғандың һүҙҙәренә төшөнөргә тырышып:

— Эй-й-й!..— тип оҙон-оҙон һуҙып торҙо.—Эй-й-й, Иштуған улым, ысын да баһа!.. Был һин дә баһа!.. Улай булғас, бар, тиҙерәк бул. Дружинасыларҙы һатыбал ҡыра бит...

Үлтерәләр бит инде... Тиҙерәк уларҙы ҡотҡарығыҙ! Минең улымды — Сәхиулла ағайыңды үлтерәм тип беҙҙең өйгә лә баҫып килеп инделәр... Сәхиулла лапаҫ башынан тороп улар менән атышып ҡалды... Мин, ейәндәрем... ҡастым... Ҡайҙа барырға белмәй ҡастыҡ... Уй алла, үлтерерҙәр инде улыҡайымды, яңғыҙымды... Тиҙерәк, тиҙерәк ярҙам итегеҙ, Иштуған!.

Сыуаҡай әбей, барлыҡ көсөн йыйып, Иштуғанды этәреп ебәрҙе.

— Ҡыҙылдарыңды тиҙерәк алып кил, улым!..

Иштуған, кабурынан наганын ала-ала ҡайынлыҡҡа, атына табан йүгерҙе.

«Ах, һатыбал, йылан! Халыҡты ҡырырҡа керешкән икән!.. Эйе, Сыуаҡай инәйем дөрөс әйтә, тнҙерәк хәбәр итергә, тиҙерәк ярҙамға килеп етергә...»

Иштуған, Әхәт, Айһылыуҙарҙың Ҡыҙыл Армия сафына инеп хеҙмәт итә башлауына бер йыл тулып килә ине. Иштуған хәҙер ошо тирәлә баш күтәреүсе байҙарға, аҡтарға ҡаршы көрәшеп йөрөүсе Ырымбур эшселәре отрядынын. һыналған разведчигы ине. Беренсе һынауҙы ул атаман Дутовҡа ҡаршы һуғышта үтте. Революция дошмандарына ҡаршы көрәшеү өсөн Петербургтан килгән революцион матростар һәм милли-азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелгән башҡорт полктары менән бер сафта тороп, Ырымбурҙы дутовсыларҙан таҙартыу өсөн һуғышты.

Улар ҡыҙыл гвардия отрядына ҡасып киткәс үк килеп эләктеләр. Уҙған йылдын, октябрь аҙаҡтарында булды был хәл. Октябрь революцияһы булған, бөтә ерҙә Ваҡытлы хөкүмәт вәкилдәрен алып ырғытыу, Совет власын, эшсе-крәҫтиән власын нығытыу өсөн ҡаты көрәш барған, ҡыҙыл гвардиялар төҙөлөп яткан көндәр ине был. Улар өсәүләп туй барған төндә ҡасып киткәндән һуң, тәү уйлағанса, Ырымбурға түгел, ә Орскиға барырға булдылар. Ырымбур Әхмәтша ҡараҡ, һатыбалдар өсөн үҙ ауылы кеүек яҡын, таныш урын. Унда ҡасҡындарҙың эҙенә улар бик тиҙ төшәсәк. Ә инде уларҙың ҡулына эләкһәң, имен ҡотолоуҙы өмөт итергә ярамай. Берҙән-бер юл — ят-яғыраҡ китергә, теге-•"әр йыш йөрөмәй торған ҡалаға барырға кәрәк. Шулай итеп улар Орскиҙы һайланылар. Ләкин унда барыуҙын. йәш ҡасҡындар өсөн ауыр яғы ла бар ине, әлбиттә. Сөнки был ҡаланы улар аҙ беләләр, уларға бында эш тә, йәшәр Урын табыу ҙа ен,ел булмаясаҡ ине. Шулай ҙа тәүәккәлләнеләр.

Ҡасып киткәндең иртәгеһенә улар кисләтеп кенә ҡалаға барып инделәр. Арыған, аҡ күбеккә батҡан иркә айғырҙарҙы һалмаҡ, ҡына атлатып, оло урамдарҙын береһе буйлап киттеләр.

«Ҡайҙа барып морон төртөргә? Яцы, ирекле тормошто нимәнән, ҡайҙан, нисек башлап китергә?..»

Был һорауга уларҙың береһенең дә башында яуап юҡ ине. Күңелдә ҡыҙ урлауҙың мауыҡтыргыс романтикаһы ла һүрелә башлағайны инде. Иштуған дуҫы Әхәттең күҙ ҡарашында:

«Йә, ҡыҙ баланы алып ҡасыуын ҡастыҡ та, хәҙер унық менән нимә эшләйбеҙ инде? Ҡайҙа ҡуябыҙ? Үҙебеҙ генә булһаҡ, ҡайҙа ла юғалмаҫ инек!..» тигән шелтәне барған һайын йышыраҡ укый. Үҙенең күнелендә лә ҡыуаныска ниндәйҙер көйөнөс килеп ҡушылған һымаҡ була. Йөрәкте ниндәйҙер билдәһеҙ шом талай. Был шом берҙән Айһылыуҙы ауыр хәлгә ҡалдырыуҙан ҡурҡыуҙан булһа, икенсенән саф, ялкынлы мөхәббәтенә, йән һөйгәые менән ҡауышыу шатлыгына ҡара тап булып ат урлау ваҡиғаһы килеп ҡушылыуҙан килә ине. Дөрөҫ, башта, ауылды сығып илле-алтмыш саҡрым ер үтконсе, Иштугандыц башына:

«Айһылыуҙы ҡотҡарырға. һатыбалга бирмәҫкә». тигән теләктән башҡа бер уй ҙа килмәне. Ә инде ауылдан алыҫлашҡан, ҡыуыусылар килеп тотоу ихтималы азайған һамым унын күңелен икенсерәк уйҙар борсой башланы.

«Орскиҙы мпн аҙ беләм. Ҡайҙа барырбыҙ? Нисек.урынлашырбыҙ?.. Айһылыу ауырлыҡҡа сыҙармы? Нисек әйтһән дә, берәүҙәрҙең берҙән-бер иркә ҡыҙы бит...»

Иштуғандыц күҙ алдында ваҡыт-ваҡыт Емеи1 менәп Йәнеш тә килеп баҫҡыланы.

«Инде улар ни эшләрҙәр?.. Атайым да өйҙә юҡ бит, исмаһам. Ә мин уларҙы үгәй ҡулына ташлап ҡастым... Их, оятһыҙ... Йә, ағай кеше шулай буламы инде? Атайымдын. күҙенә мин нисек күренермен?..»

Был' уйҙарға әлеге-баяғы ат урлау мэсьәләһе лә килеп кушылып киткеләне.

«Ауылда беҙҙе хәҙер ат ҡарағы тип йөрөтәләр инде... Ат ҡарағы — ниндәй хурлыҡ!.. Ниндәй ауыр һүҙ... Ҡасандыр бер саҡ, малай сакта, Хәбир батыр тирәге төбөндә, Тимербай ағай: «Яҡшы кеше ҡараҡ булмай ул. Яуызлыҡ менән уғрылыҡ бер тирәлә йөрөй»,— тип һөйләгәйне. Атайым да ҡараҡлыкты күрә алмай ине... Ә мин...Их, үҙ атым булһа.был эште эшләр инемме ни мин?..» Бындай уйҙарҙан һуң, Иштуғандың тәнен ат тәненең эҫеһе эйәр аша үтеп яндыра башлаған кеүек тойола. Ул хатта ваҡыт-ваҡыт, атты ташлап, йәйәү йүгереп китерҙәй була.

«Ҡайҙа ҡуйырға, нимә эшләтергә был аттарҙы? Әллә һатып ебәрергәме? Юҡ, юҡ, Айһылыуға хараад ашатыр хәлем юҡ!..»



Әхәт был хаҡта бик тыныс уйланы. Ул Иҙрис ҡарттың атты биргәндә:

— Собхан старшинаның байлығына беҙҙен, көс бик күп ингән. Был ат уныҡы түгел — ә беҙҙеке,— тигән һүҙе менән тулыһынса килеште. «Атайым да, ағайым да, әсәйем дә уларға бик күп эшләне. Шулай булғас, уларҙан бер ат алыу артыҡ булмаҫ әле», тип кенә уйланы. Уны тик Айһылыу мәсьәләһе генә борсой ине.

«Йә, нимәгә кәрәк инде ул беҙгә? Уны хәҙер ҡайҙа ҡуябыҙ? Әгәр ул булмаһа, хәҙер беҙ ҡыҙыл гвардияға яҙылып китер инек тә буржуйҙарға ҡаршы һуғышып тик йөрөр инек. Их Иштуған, Иштуған, иҫәр!.. һинең был иҫәрлегеңде күтәрмәләп йөрөгән мин иҫәр...»

Ә Айһылыуҙың йөҙө яҙғы күк кеүек көләс, болотһоҙ ине. Ул йәне һөймәгән һатыбалдан ҡасты, ҡотолдо. Уға башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Иштуған менән ул ошолай, ат өҫтөндә, ер сигенә китергә лә әҙер. Уны хатта өҫтөнә кейгән килешһеҙ ирҙәр кейеме лә борсомай. Уға ҡасыр алдынан Әхәт үҙенен. һуғышта йөрөгән ағаһы Әхмәттән ҡалған ҡолаҡсын бүркен, тула салбарын, һоро сәкмәнен кейҙереп, билен ҡояшҡа, ямғырға уңып бөткән ал билғау менән быуып ҡуйғайны. Айһылыу хәҙер атаһының кейемдәрен кейгән теремек шаян малайға оҡшай ине.

Шулай һәр ҡайһыһы үҙенсә уйланып, улар ҡала урамдары буйлап оҙаҡ ҡына барҙылар. Эңер төшөп, йорттарға ут ала башлаған саҡ ине. Улар ниндәйҙер ҙур ғына йорт ишек төбөнә йыйналған бер төркөм халыҡ янына килеп туктанылар. Йорт ишегенең үр яғында торған вывесканың баш һүҙҙәре ҡыйрап тешөп, «...гимназияһы» тигән аҙаҡҡы һүҙе генә тороп ҡалғайны. Ошо йорттоң емерелеп бөткән таш күтәрмәһендә, киң баҫып, биленә ҙур наган таҡкан йәш матрос, ҡулдарын болғай-болғай, нимәлер һөйләп тора. Күтәрмә янын төрлөсә кейенгән, ләкин йонсоу төҫлә, күҙҙәре берҙәй үк ғорур ышаныс менән балҡыған бер төркөм иәштәр солғап алған. Ә уларҙан арыраҡ бик күп төрлө йәштәр йыйналған. Улар араһында һатыбал кеүек йылтыр еҙ төймәле кара шинель кейгән, туҡлыҡтары төҫтәренә сыккан гимназист йәштәр ҙә күп. Күрәһең, ошо гимназияның укыусыларылыр. Улар, көләп-мыҫҡыллап, теге матростың һүҙен өҙөргә тырышып, үҙҙәре бер төркөм булып айырылып торалар.

Иштуғандар, алдан һөйләшеп ҡуйған кеүек, өсөһө бер юлы аттан һикереп төштө.

«Нимә һөйләй икән? Тыңлайыҡ әле...»

Йәш матрос ярһып-тулкынып донъя коммунизм тураһында һөйләй ине.-

— Петербурҙа, иптәштәр, революция булдымы? Булды. Октябрь революцияһы ендеме? Енде. Буржуйҙарҙы һеперептүктекме? Түктек, иптәштәр. Совет властын төҙөнөкмө? Төҙөнөк, иптәштәр. Йәшәһен эшсе-крәҫтиән власы! Йәшәһен Совет власы, иптәштәр! Беҙ социализм иле төҙөйәсәкбеҙ, иптәштәр. Йәшәһен бөтә донъя революцияһы, иптәштәр, ур-р-ра!..

— Ур-ра!— тип тигеҙһеҙ тауыш күтәрмәләй матросты. Бер яҡта гимназистарҙың шарҡылдап көлгәне ишетелә. Ә Иштуғандың янында торған оҙон муйынлы, ҡара күҙлекле гимназист ҡолаҡ ярғыс әсе һыҙғырып ебәрә лә:

— Тауыҡ кетәгендәй өйҙәрҙә йәшәүсе һәләмә, ялҡау крәҫтиәндәр менән социализм төҙөмәксе булаһыңмы? Ха-ха-ха, алйотлоҡ бит был!..— тип һөрәнләй. Матрос үҙенә керпек тә ҡаҡмай текләп торған кескәй һәләмә малайҙың арҡаһынан ҡағып ала.

— Бөтә илдә социализм төҙөрбөҙ, иптәштәр. Өр-яңы тормош ҡорорбоҙ. Унда байҙар ҙа, анауы гимназист кеүек маҡтансыҡ бай малайҙары ла булмаҫ. Ә бына ошо малайҙар, ярлы-етем, эшсе балалары мәктәптәрҙә уҡырҙар. Уларҙан уҡытыусылар, врачтар, комиссарҙар етешер, иптәштәр.

— Эй, матрос, комиссар итеүҙән элек һин ул малайҙын, тамағын туйҙыр. Юғиһә ул астан үлә, йә кеше талап төрмәгә эләгә!— тип ҡысҡыра теге оҙон муйынлы гимназист.

— Ха-ха-ха!..— тип күтәрмәләй башҡалар. Иштуған, үҙе лә һиҙмәҫтән, гимназистың яғаһынан маҡып тотоп алып ҡаты ҡына һелкетә лә артҡа ырғыта.

— Һин, егет, тыңларға ҡамасаулама!..

Матрос Иштуған яғына хуплаулы ҡараш ташлап алды ла иркенләп дауам итте. Бынан ары уны бүлдереүсе булманы.

— Эйе, революцияның теләктәре изге, иптәштәр. Иҙелгән, емерелгән Россияны ҡайтанан торғоҙоп, өр-яңынан төҙөргә кәрәк. Ләкин кәртәләр күп, иптәштәр. Революцияны быуырға теләп, төрлө хәшәрәттәр мыжғып ята. Шуларҙы һеперепт түкмәй тороп кинәнеп булмаҫ. Көрәшкә, ҡоралға тотоноғоҙ, иптәштәр. Йәштәр, эшсе йәштәр, ҡыҙыл гвардия сафына яҙылығыҙ. Ҡыҙыл тыу аҫтына баҫығыҙ. Йәшәһен бөтә донъя революцияһы, иптәштәр!—тип бөтөрә ул һүҙен. Унан:— Кем теләй, хәҙер үк миңә яҙылығыҙ,— тип түш кеҫәһенән ҡағыҙ, ҡәләм алып яҙырға әҙерләнә. Йәштәр берәм-берәм, төркөм-төркөм булып унын янына баралар. Әхәт Иштуғандың ҡолағына шыбырлай:

— Йә, нимә ҡарап торабыҙ? Беҙ үҙ урыныбыҙҙы таптыҡ. Иштуған, моңайып, Айһылыу яғына ҡарай.

«Уны ҡайҙа ҡуябыҙ?!»



Ул арала теге матрос, күптәнге таныш кеүек, асыҡ йылмайып, улар Каршыһына килеп баҫа.

— Яҙылаһығыҙмы?

Иштуған Айһылыу яғына ымлай.

— Беҙҙә ҡыҙ бар...

— Булһа ни, беҙҙә уға ла урын бар. Медсестралыҡка өйрәтербеҙ,— ти матрос.— Таныш булайыҡ. Мин революцияны яҡлар өсөн Орск эшселәренән төҙөлгән ҡыҙыл гвардия отрядының вәкиле. Ә һеҙ ҡайҙан?!

Шул көндән алып улар эшселәр отрядынын. һалдаты булып киттеләр. Шунда, отрядтың үҙендә үк, мылтыҡтан, пулеметтан атырға өйрәттеләр. Айһылыу медсестралыҡка өйрәнде. Күп тә үтмәй, уларға Ырымбур янында, дутовсыларға ҡаршы һуғышта ҡатнашырға тура килде. Ә унан һун инде был отряд, Дутовҡа ҡаршы баш күтәргән Ырымбур эшселәренен. отрядына ҡушылып, кулаҡ балаларын баҫтырыу, продразверстка йыйнау эштәрендә ҡатнашты. Был яҡта Каширин отряды тигән исем менән үҙен танытырға өлгөргән был отряд бына хәҙер бер нисә ай инде аҡтарға һәм баш күтәргән кулаҡтарға ҡаршы һуғышып, ауылдан ауылға күсеп йөрөй. Бынан бер көн элек кенә улар аҡтарҙы Мөлкәмән тауынан, позиция тотоп ятҡан ерҙәренән бәреп төшөрөп, Юшатыр буйынан ҡыуып ебәрҙеләр. Һуғыш ҡаты булды. Аҡтар, ике кен буйы һуғышып, күп ҡорал ҡалдырып, Көплө урманы яғына ҡарай сигенде. Эшселәр отряды, уларҙы эҙәрләп, бөгөн был яҡҡа килеп сыҡты. Ләкин аҡтар менән Ташлыла ла, Ивановкала ла, Троицкиҙа ла ҡайтанан осраша алманы. Улар ҡайҙалыр юл ялтартып йөрейҙәр ине. Троицкиға килеп еткәс, отряд ундағы кожевник Червяк тарафынан ойошторолған бандалар менән осрашып ҡаты ғына бәрелешеп алды. Отрядҡа бындағы кулаҡ ояһын туҙҙырырға Ырымбурҙа уҡ килеп ҡушылған Никита ҙур ярҙам итте. Ул бындағы һәр бер кулактың ҡылығын, эшен яҡшы белә ине. Иштуған разведкаға киткәндә, отряд был тирәләге бөтә совет яҡлы кешеләрҙе йәшерен рәүештә ҡырҙырып, продразверстканы өҙөүҙе ойоштороп ятҡан кожевник Червякка бөтә халыҡ алдында революцион закон буйынса хекөм ойоштороп ҡалғайны. Иштуған йән-фарманға сабып ҡайтып, һатыбал отряды менән дружинасылар араһында һуғыш барыуы тураһында хәбәр иткәс, отряд шунда- уҡ Иҫәнбәт яғына ҡарай юлға сыҡты. Ә ул арала Иҫәнбәттә һаман мәкерле һөжүм ҡотороноп дауам итте.

Чехтар яҡынлашҡас, Башҡортостан аҡтар ҡамауында ҡалған тигән хәбәр таралғас, Федька Рябойҙың бандит-тары төнгө кәсептәрен тағы ла көсәйтте. Улар хәҙер атыу-үлтереү генә түгел, талау менән дә шөғөлләнә. Совет закон-дарын әле яҡшы белеп, төшөнөп етмәгән аңһыҙ башҡорт ауылдарында теләгән бер өйгә инеп, теләгән нәмәне талап-тартып алып сығып китә. Уларға ҡаршы бер кем дә, бер ни ҙә эшләй алмай. Федьканың ағаһы Ферапонт Хитров Октябрь революцияһы булмаған да кеүек, һаман волость башында тыныс ҡына ултыра бирә ине.

Һатыбал да яҙ көнө Яҡуп күпере янындағы төнгө һуғыш-та күп юғалтыуға осраған отрядын ҡайтанан аяҡҡа баҫты-рырға, аҡтар был тирәгә еткәнсе һуғышҡа тотоноп китерлек хәлгә еткерергә тырышып, Ташһарайҙа ҡыҙыу эш алып барҙы.

Күпселегендә фронттан ҡайтҡан рус, башҡорт һалдат-тарынан торған Илсеғол дружинаһы ла, Никитаның ярҙам алып ҡайтыуын көтөп ятмай, бөтә волость күләмендә байҙарға, спекулянттарға ҡарата ҡаты көрәш асып ебәрҙе.

— Бөтә артыҡ иген ҡала есөн! Ҡыҙыл Армия өсөн! Енеү өсөн! Иген менән һатыу итеү ҡырҡа тыйыла. Совет хөкүмәтенен бойороғо шулай! Был бойороҡто боҙған кешегә аяу юҡ!

Ошо бер аҙна эсендә генә улар, Сергей Хитров, Собхан старшина, Ғаббас мулла кеүектәрҙең йәшергән игендәрен табып, йөкләп-йөкләп ҡалаға оҙаттылар. Бигерәк тә баҙар көндәрендә, бөтә юлдарға дозорҙар ҡуйып, йәшерен рәүеш-тә иген менән һатыу итеүселәрҙе тотоп йөрөнөләр. Сергей Хитровтар хәҙер элеккесә иркенләп ашлыҡ менән һатыу итә алмай башланы.

Илсеғол дружинаһы ҡоралланып алғаны бирле, волоста ике власть йәшәй ине. Бер яҡта Ваҡытлы хөкүмәт ҡалды-ғы Ферапонт Хитров етәкселегендәге волость башҡарма комитеты, һатыбал, Федька Рябой отрядтары, икенсе яҡта һалдаттарҙан, ярлы батрактарҙан төҙөлгән яңы ауыл Советтары, ярлылар комитеттары һәм дружинасылар тора. Ҡоралһыҙ, янғыҙ-ярым кешеләргә генә һөжүм итеп, йәшерен-боҫорон енәйәт эшләргә генә һәләтле булған Федька бандаһы ла, иркә бай малайҙарынан йәки алданған аңһыҙ кешеләрҙән йыйылған һатыбал һатлыҡтары ла әлеге дружинасыларға асыҡтан-асыҡ ҡаршы көрәшкә сығырға баҙнат итмәй, Ферапонт Хитровтың волость башҡарма комитеты ла хәҙер күҙ буяу өсөн генә булһа ла дружина-ның эшен хупларға, хатта ҡайһы бер ярҙам да күрһәткеләргә



мәжбүр ине. Ләкин әйләнә-тирәлә һауаның томороҡлана, тимерҙәй ҡыҙа барғаны һәр ике яҡҡа асыҡ ине. Шуға күрә Илсеғол дружинаһындағылар Никитаның ҡаланан ярҙам алып ҡайтып етеүен түҙемһеҙлек менән көтәләр ине. Сөнки эле был көс менән генә Федька, һатыбал бандиттарын туҙҙырырға ла, Ферапонт Хитровтың һатлыҡ волость баш-ҡармаһын алып ырғытырға ла мөмкин түгел ине.

Ошондай ауыр, ҡатмарлы көндәрҙең береһендә, баҙар көн, Илсеғол дружинасылары спекулянттарҙы тотоп, ҡалаға бик күп иген ылауҙары оҙатҡандан һуң, ауылға ҡайтырға йыйынған саҡта уларға бер һыбайлы килеп ҡушылды.

— Ә, Сәғит ҡустым!— тине Байғилде ағай. Уны шунда уҡ таныны. Тимербайға ла танытырға ашыҡты.— Белә-һеңме, Тимербай, был бит теге егет... Көтөүсе. Иҫәнбәттән... Хәтерләйһеңме, һатыбалдың ҡорал складын ҡарауыллап тора ине... Ташһарайҙа... Беҙ ҡорал эҙләгән саҡта...

— Шулаймы ни?— тип көлөп ҠУЙҘЫ Тимербай ҙа.— Йә, ни эш бөтөрөп йөрөйһөң. егет? Әллә тағы һатыбал яғына китеп бараһыңмы?— тип шаяртты. Сәғит, ул тендә-ге күңелһеҙ күренеште хәтерләткәс, уңайһыҙланып, ҡыҙары-нып китте лә ашыға-ашыға кеҫәһенән бер ҡағыҙ алып Тимербайға һуҙҙы.

— Юҡ. Ни эшләп уға барайым мин ҡабат. Мине Шаһи-морат ағайым һеҙгә ебәргәйне...

Тимербай етди тонға күсте.

— Шаяртып ҡына әйтәм. Дөрөҫ, нинә бай малайҙары яғына сығырға ти? Мин әле һинең ул саҡта беҙгә һаты-балдың пулеметы йәшерелгән урынды күрһәтеүеңде лә хәтер-ләйем...

— Рәхмәт, ағай...—тине Сәғит, үҙенә өлкән ағайҙар тарафынан күрһәтелгән иғтибарға һаман уңайһыҙланып.— Мин ул саҡта аңһыҙ инем әле...

Тимербай, яҙыуға күҙ йөрөтөп сыҡҡас, тағы Сәғиткә яратып ҡарап алды.

— Тимәк, беҙҙән һеҙгә ярҙам кәрәк тиһең, егет, ә?— тип һорап ҡуйҙы. Унан яуап биреүҙе лә көтмәҫтән:— Ярар,— тип өҫтәне.— Дружинасылар менән кәңәшеп алырбыҙ ҙа барып та етербеҙ.

Мәсьәләнең ниҙә икәнен төшөнөп алған Байғилде ағай ҡанатланып китте.

— Барайыҡ. Хәҙер үк. Ошо ыңғайҙа уҡ китәйек, Тимербай. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡҡан яҡшы тигәндәр боронғолар,—- тип һүҙгә ҡушылды.— Иҫәнбәткә барып Ҡормош бай кеүектәр менән иҫәп-хисапты өҙөргә минен, күптән ҡул ҡысып тора,— тип тә ебәрҙе.

— Барығыҙ әле,— тип, ҡунаҡҡа саҡырғандай итеп ялынып ҡуйҙы Сәғит тә.— Ҡормош байҙан хөкүмәт өсөн

бер тоҡ та ашлыҡ алғаныбыҙ юҡ әле. Әллә ҡайҙа йәшергән дә бөткән...

Төштән һуң дружинасылар Иҫәнбәткә ҡарай юлға сыҡтылар. Байгилде ағай, уйланып, Тимербай менән Закирҙан артта, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә ат өҫтөндә бәүелеп бара. Күңелде төрлө иҫтәлектәр ҡытыҡлай. Бына уның алдында тыуған ауылы ята. Унда, Иҫәнбәттә, уның атаһының, һөйгән ҡатыны Сәғүрәнең ҡәбере... Унда уның бала сағы, йәшлеге уҙған урындар... Бөгөн уға ниңәлер донъя айырата моңһоу һымаҡ. Күнелде ниндәйҙер ҡайғылы тойғо солғай бара. Иҫәнбәтте күреү шатлығы ла ниндәйҙер моңһоулыҡҡа мансылған кеүек... Етмәһә, Емеш менән Йәнеш тә күҙ алдынан китмәй... Эйе, улар яңы күлдәк кәтәләр... Мин ҡайтыуҙы түҙемһеҙлек менән көтәләр... Ләкин ни эшләмәк кәрәк?.. Көрәш... Иҫәнбәткә лә бармайынса ярамай... Барырға, ундағы ярлы-батрактарҙы ла көрәшкә рухландырырға кәрәк. Эйе, көрәшһеҙ беҙҙең, балаларҙын. күҙенән моң китмәҫ!.. Көрәшһеҙ бер ҡасан да ысын бәхет килмәҫ уларға!.. Эйе, ҡыҙыҡайҙарым күлдәклек көтөп зарығып торорҙар инде... Ярар... Иртән йоҡоларынан тороуға алып ҡайтып етермен... Ҡыуандырырмын ҡыҙыҡайҙарымды... Әгәр Иҫәнбәткә кире күсеү яғын да һөйләшеп ҡайтһам, Емешкә бигерәк тә ҙур ҡыуаныс булыр. Ауылды хәтерләмәй ҙә бит инде. Шулай ҙа әллә нинә ҡайтҡыһы килә бит шул баланың. Әсәһе йөрөгән ерҙәр күнелен тарталыр сабыйҙын... Ә минен үҙемден, ҡайтҡым килмәйме ни? Нисә йылдар зарығып көттөм мин был көндәрҙе... Их-ма!.. «Ожмах булһа ла торған ер, һағындыра тыуған ер!..» Эйе... Ожмах!.. Ниндәй ҙә ожмах бит әле!.. Их...

Ул ауыр көрһөнөп ҡуйҙы ла, атына шарт һуғып, иптәштәрен ҡыуып етте. Улар Иҫәнбәткә:

— Йәшәһен, йәшәһен, шанлы ҡыҙыл ғәскәрҙәр!— тип, яҙғы дымлы һауаны янғыратып йырлай-йырлай барып инделәр. Был ваҡытта төш ауып килә ине. Бөтәһе лә эйәрләгән ат менгән, мылтыҡ-ҡылыс таҡҡан, ләкин күбеһе ауыл кешеһенсә кейенгән был сәйер һыбайлыларҙы, ҡыҙыҡһынып, иң элек бала-саға солғап алды. Унан берәм-һәрәм ирҙәр, ҡатындар ҙа күренгеләй башланы. Бер аҙҙан ауылдын, бөтә ярлы-ялпыһы улар янына йыйылды. Дружинасылар килгәненә бигерәк тә ҡыуанған кешеләр — күптән түгел яраланып ҡайтҡан Шаһиморат, Байгилде ағайҙар теге ваҡытта һатыбал отрядынан ҡотҡарған Сәхиулла менән көтөүсе Сәғит булды. Улар ҙа, үҙ ауылдарында ярлылар комитеты төҙөп, байҙарға ҡаршы көрәш асып ебәргәндәр. Ләкин ошоғаса ауылдың ин серегән байы Ҡормоштан хөкүмәт өсөн һис тә иген ала алмағандар. Ҡормош һәр саҡ:



— Ашлығым юҡ. Игенем үҫмәне,— тип меҫкеиләнеп тик торған. Ярлылар комитеты унын келәттәрен астырып ҡарап та иген таба алмаған. Ҡайҙа йәшергән, нисек йыйған, бер кем дә белмәгән.

— Ысынлап илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға тиҙәр бит. Ысынлап, ихласлап эҙләйек. Табырбыҙ,— тине Байгилде ағай.— Табырға тейешбеҙ.

Тимербай ҙа, Закир ҙа унын. һүҙен ҡеүәтләне. Шаһиморат менән Сәхиулла:

— Әйҙә, оҫталығыбыҙҙы күрһәтеп ҡарағыҙ. Беҙ ҙә өйрәнеп ҡалырбыҙ,— тип, уларға ҡушылды. Отряд бер нисә төркөмгә бүленеп эшкә тотондо. Берәүҙәре лом менән, мылтыҡ штыгы менән ергә төртә-төртә Ҡормош байҙың ишек алдын, кәртә-ҡураһын тикшереп сыҡты. Икенселәре ашлыҡ кәбәне, һалам эҫкерте аҫтынан эҙләне.

Ахыр улар, аслыҡ һәм киммәтселек көтөп, күп йылдар һуғылмай ултырған бойҙай эҫкерте аҫтынан иген менән тулы ер келәт табып алдылар. Ундағы бойҙайҙарҙы шунда уҡ Ҡормош байҙын. үҙ аттарына тейәтеп ҡалаға оҙата башланылар. Ҡормош бай һәр бер тоҡҡа йәбешеп иланы.

— Бөлдөрәһегеҙ!.. Астан үлтерәһегеҙ бит! Йәлләгеҙ! Теймәгеҙ байлығыма!— тип, дружинасыларҙың боттарына, итәктәренә йәбешеп, һарылып ятты. Унын был ҡыланышы Байгилде ағайҙың күңелендә асыуҙан бигерәк, ерәнеү уятты.

«һай! Байлыҡ ҡоло! Нисек оялмай! Нисек түбәнһенә бит. Ул бит бер бот иген өсөн йәнен бирә, йә йәнендә ала торған кеше. Ә бит бында иген бер бот йәки йөҙ бот ҡына ла түгел!.. Нисек иламаһын?!»

Дружинасылар ҡалаға илле-алтмыш ылау иген оҙатҡансы, кен кисләп, ҡаранғы төштө. Шаһиморат, Сәхиуллаларҙың үтенеүе буйынса, улар Иҫәнбәттә йоҡлап ҡалырға булдылар.

Кисен, Шаһимораттарҙа ашап-эсеп, тамаҡ туйҙырғас, Байгилде ағай, Тимербай менән Закирҙы үҙенең ташландыҡ йорт урынына алып барып, Ҡормош бай, һуҡыр Сапыйҙарҙан күргән яфаларын һөйләп йөрөнө.

Сүп-сар, тиреҫ-көл түгелеп, алабута, дегәнәк баҫып бөткән буш ишек алдында улар оҙаҡ ҡына йөрөнөләр. Байгилде ағай емерек мейес кенә һерәйеп тоған өй урынында ла, усаҡ-мейесе ер менән тигеҙләнгән аласыҡ урынында ла туктап уйланып торҙо. Ахыр ышаныслы тауыш менән:

— Донъялар тынысланғас та, мин бында кире ҡайтырға тейешмен. Сәғүрә йәшәгән был нигеҙ бынан ары ла етем ятмаҫ,— тип ҡуйҙы.— Өр-яңынан өй һалып, донъя төҙөп, балаларымды тыуған ауылдарына алып ҡайтып ҡуйғым килә минең... . . .

— Сәрбиямал-апай теләрме һуң?—тип һораны Тимербай.— Миненсә, ул Илсеғолдо ташлай алмаҫ.

— Сәрбиямалмы?.. Теләмәһә, торор ҙа ҡалыр. Минә унын малы ла, үҙе лә кәрәкмәй... Етер... Тик шуныһы: бында һаман Ҡормош байҙар хөкөм һөрә бит әле... Әйтерһең, батша ла алып ырғытылмаған. Революцияла булмаған... Их, беҙгә яңылыҡтар бик тиҙ килеп етмәйҙәр шул...

— Эйе, бында Ҡормош, тегендә Собхан, Сергей байҙар... Эй-й, ярлының елкәһенә кем генә атланманы ла, кем генә унын, башын ҡайҙа оҙатманы һун,— тип, Тимербай ҙа ауыр ғына көрһөнөп ҡуйҙы.— Эйе, Байгилде ағай, һин ҡайтырға, ташландыҡ нигеҙ урынына — өр-яңы нигеҙ ҡорорға тейешһең. Ҡормош байҙар түгел, беҙ йәшәргә тейешбеҙ хәҙер...

— Мин дә шулай уйлайым, туған. Шуға ышанам да.

— Тик бына аҡтарҙы, байҙарҙы еңеп кенә бөтөрәйек. Шунһыҙ улар беҙгә барыбер тынғы бирмәҫ.

— Эйе,— тине Байгилде ағай.— Аҡтар, байҙар тамам еңелһен, Иштуған ҡайтһын...

Бығаса һүҙгә ҡушылмай, үҙенә хас булмаған уйсанлыҡҡа бирелеп бер ситтәрәк торған Закир:

— Ҡарағыҙ әле,— тип һүҙгә ҡушылды.— Минә был Ҡормош байҙың ҡомһоҙлоҡтан ғына түгел, ҡанға һыуһауҙаи зәһәрле янып торған күҙҙәре бер ҙә оҡшамаңы бит әле. Беҙ бында ҡалдыҡ та ҡалыуын, ул берәй этлек эшләп ҡуймаһа ярар ине. Юҡҡа шуны бая, ашлығын бирмәй һуғышҡанда, атып ҡына йыҡманыҡ. Әллә хәҙер барып, ялпайтып киләйемме шуны?..

Тимербай менән Байгилде ағай был һүҙгә ни тип әйтергә лә белмәй торған арала, Закир, өҙә баҫып, урамға йүнәлде.

— Әйткәндәй, -мин уны хәҙер йә расходҡа сығарырға, йә иртәгә, беҙ киткәнсе берәй келәткә бикләп тоторға тейешмен. Былай булмай. Ул иректә йөрөтөлә торған йырткыс түгел...

Байгилде ағай ҡабаланып унын юлына арҡыра төштө.

— Ярамай, туған. Халыҡ мин ҡотортоп үс алдыра тип уйлар... Беләһең бит, беҙҙең халыҡ кенә ҡыуыуҙы, үсләшеүсе яратмай...

— Ни эшләп һин тип уйлаһындар? Мин эшләйем бит уны, һин белмәйһең дә, күрмәйһең, дә.

— Шулай ҙа, ярамай, туған. Мин, ҡан түгеп, үс алырға теләмәйем.

— Их, һине... ҡан түгергә теләмәй, имсш. Беләһеңме, ул хәҙер һинең боғаҙыңды сәйнәп, ҡаныңды һурыр ине. Валлаһи, шулай итер ине. Ул һинең кеүек нескә күңелләләрҙән түгел, юҡ, түгел...



— Быны мин беләм.

— Белгәс?..

— Белһәм дә, кәрәкмәй, Закир. Ул яңғыҙғы беҙгә хәҙер бер ни ҙә эшләй алмай. Ул инде еңелгән, йығылған — ә йығылғанды түбәләү егетлек түгел ул, туған. Шулай бит, Тимербай?

— Йә, ярай, Байгилде ағай әйткәнсә булһын,— тине Тимербай ҙа, бер аҙ уйланып торғас.— Хәҙергә ҡалып торһон. Ләкин бырыбер ирекгә йөрөтөргә ярамай уны, Закир дөрөҫ әйтә.

Закир асыуланып ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы.

— Их, ҡыйыу һалдат түгелһегеҙ шул. Күренеп тора, ҡыйыу түгелһегеҙ!.. Бындай икеләнеүҙәр, ҡыйыуһыҙлыҡтар өсөн ҡайһы саҡта бик ҡиммәт түләнә ул... Быны хәтерләрһегеҙ әле бер заман. Мин әйткәйне тиерһегеҙ.

Улар уйсан ғына таралыштылар. Тимербайҙы Сәхиулла, Байгилде ағай менән Закирҙы Шаһиморат алып ҡайтты. Башҡа дружинасыларҙы ла, бындағы ғәҙәт буйынса, һәр кем үҙ теләге менән ҡунаҡҡа алып китте.

Ә Ҡормош бай бер кемгә лә белдермәй-һиҙҙермәй, ат эйәрләп, Ташһарайға сапты.

«Мин байлығымды буш таратырға өйрәнмәгәнмен!.. Ҡанығыҙ менән түләрһегеҙ һеҙ минә, ҡыҙыл шайтандар!..»

Унык ике улы ла, һукыр Сапый менән Әхмәҙулла мулланың улдары ла һатыбал отрядында йөрөй ине.

## XI

Ирҙәр иртүк баҙарға китеп бөткәс тә, бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡын, кейенеп, төҙәнеп, сәс тәңкәләрен, сулпыларын сылтыратып аллы-гвллө сәскәләр шикелле сыбар, матур булып, бер өйҙән икенсеһенә йүгерешеп йөрөй башланылар. Торабара урамда ҡыҙҙарҙан, йәш килендәрҙән ҙур ғына теркөм барлыҡҡа килде. Икенсе бер урында малайҙарҙан, үҫмер егеттәрҙән дә бер төркөм йыйылғайны.

Емеш яңғыҙ үҙе генә ҡапҡа төбөндә емөтлө-өмөтһеҙ уйҙар менән баш ватып торҙо:

«Ҡыҙҙар тауға сығырға әҙерләнә... Эй, атайым минә лә күлдәклек алып ҡайтһа ине тиҙерәк... Мин дә йыуаға сығыр инем, исмаһам... Алып ҡайтыр әле, алла бирһә. Алып ҡайтам тине бит...»

Оҙаҡламай урамға Шәүрә лә сыҡты. Ул да, өҫтөндәге күлдәге иҫке булһа ла, башына әсәһенең шау биҙәкле ҡыҙыл йоҡа шәлен ябынып, түшенә хәситә тағып, арыу уҡ төҙөү булып алғайны.

— Емеш, әйҙә, тиҙ бул!.. Ҡыҙҙар тауға сыға бит,— тип

ҡысҡыра-һөйләнә ул Емеш янына йүгереп килде.—Тиҙ-бул,-би-ғәләш!..

Ишек алдында зсе ҡатыҡ менән сәс йыуып маташҡан Сәрбиямал, ҡатыҡлы йыуан бармағын янап:

— Йөрө әле кеше аҙҙырып!.. Бына мин һине тотоп алһам, остоҡай!..—тнп ҡысҡырҙы.

Шәүрә, бүренән өрккән бәрәс кеүек, һикереп ҡапҡанан ситкә тайшанды.

Ауылдан ике саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы түбәһе ялан-ғас тәпәш тауҙы бында «Ҡыҙҙар тауы» тип йөрөтәләр. һәр яҙ ҡыҙ-ҡыркын ошо тауға йыйылып, уйнап-көлөп, бейеп-йырлап, күңел асып ҡайта. Ҡайһы йылда унда бер нисә ауыл йәштәре йыйыла. Ул саҡта уйын һабан туйындағы кеүек кү-ңелле була. Бындай уйындан мәхрүм ҡалыу, әлбиттә, Емеш кеүек елкенсәк күңелле бала өсөн еңел түгел ине. Ләкин ни эшләмәк кәрәк?!

Бына Емеш янына Йәнеш тә килеп баҫты. Улар ҡапҡа төбөндә тауыш-тынһыҙ ғына тапанып торҙолар. Ләкин Сәр-биямал уларға оҙаҡ бошонорға ирек бирмәне.

— Емеш!— тип ҡысҡырҙы ул, сәрелдәп,— сиған балаһы, бар ҡаҙ күтөргә кит. Үле Эйек буйына алып бар. Ҡара, што бы яҡшы күт!.. Әгәр берәр бәпкәм юғала торған булһа, йә-ненде алырмын... Ишет!.. Йәнеш, һин, бар, Зөбәржәт еңгәң-дәрҙән киле һорап алып ҡайт. Тары төй. Кискелеккә өйрә бешерербеҙ. Штобы тиҙ йөре, ишетәһеңме, һеңгәҙәгән!..

Ҡыҙҙар әле генә аллы-гөллө күлдәктәр, кешмир шәлдәр, сәскәле яулыҡтар менән балҡып, сәстәңкә, селтәр, хәситә, сулпы сыңдары һәм көләү-һөйләшеү менән янғырап торған, ләкин инде хәҙер тын, буш булып ҡалған урамға тағы бер ҡат моңһоу ҡараш ташлап алдылар ҙа ҡушылған эштәрҙе башҡарырға таралдылар. Йәнеш үҙенән ҙур ағас килене көскә күтәреп алып ҡайтты. Сәрбиямал уның янына бер та-баҡ ҡыҙыл тары сығарып ултыртты.

— Мә, ошоно төйөп бөтһәң етер. Сәсмәй генә төй!.. Төй-гесөндө киленең ҡап уртаһына ғына туралап төшөр... Што-бы ярма, тере генә булһын... Онталмаһын!

Оло кеше есөн эшләнгән төйгөс Йәнештең арыҡ ҡулда-рына ауыр ҙа, йыуан да. Ә бер табаҡ тары уның өсен көнө буйына етерлек ыҙалы эш ине. Емеш, был тарыны эш итеп алғансы үгәй әсәйҙән Йәнештең күпме әрләнәһен, туҡмала-һын уйлай-уйлай, ҡаҙҙар артынан эйәреп Эйек буйына китте. Сәрбиямалдың быйыл өйрәктәре юҡ. Яһалма күл янында булған үкенесле теге ваҡиғанан һун, өйрәк аҫрамай ине ул.

Яҙ көнө Оло Эйек ҡаты ташҡанға, унан оҙаҡ ваҡытҡа бүрәнә менән ҡапланғанға, бында ҡаҙ-өйрәк Үле Эйектә үҫә ине. Ололарҙың әйтеүенә ҡарағанда, ҡасандыр Оло Эйекошо



урындан аҡҡан. Яҙ көнө Оҙонғол шарлауығы ул саҡта туп-тура Оло Эйеккә ҡойған. Аҙаҡ Оло Эйек был ерҙе тарһынып, ура юл ярып киткән дә, бында ошо ҡыйғас күл генә ятып ҡалған. Тора-бара күл тирәһен ҡуйы туғайлыҡ ҡаплаған. Уны хәҙер Үрьяҡ туғай тип, ә ауыл артында ярты ай һымаҡ ҡыйғасланып яткан ошо оҙон тар күлде Үле Эйек тип йөрө-тәләр. Тимәк, был ҡасандыр аҡҡан йылға — тере йылға бул-ған. Хәҙер аҡмай торған үле йылға ғына булып ҡалған. Шуға һәр ваҡыт тын, моңһоу уның өҫтө. Дөрөҫ, яҙ көнө Оҙонғол йыраҡаһынан шарлап ҡар һыуҙары ағып төшкәндә, йәки Оло Эйек ҡаты ташып ярҙарынан ашып сыҡҡанда, Үле Эйек тә терелеп, йәнләнеп китә. Хатта бөтә үрге туғайҙы баҫып, уҫал тулҡынланып ята. Ләкин ситтән бәргән көс менән генә күпме ярһырға, шауларға мөмкин һуң? Бына ҡар һыуҙары ағып бөтә, Оло Эйек үҙ үҙәненә ҡайта, ҡояш аяуһыҙ ҡыҙҙы-ра... Шунан Үле Эйек, тынып, бойоғоп, нәҙек кенә ай ураҡҡа әйләнеп, шыр туғай эсенә инеп юғала. Аҙаҡ уны һары томбо-йоҡтар баҫып китә...

Үле Эйектең ауыл артындағы бейек яры буйлап эре-эре тирәктәр, өйәңкеләр үҫкән. Уларҙы бер кем дә ҡырҡмай, һындырмай. Хатта ҡыш көнө ҡаты бурандарҙа утыны бөтөп интеккән кешеләр ҙә уларҙың бер генә ботағына ла теймәй. Был ғәжәп мөһәбәт, йыуан ҡарт тирәктәр билдәһеҙ заман-дарҙан бирле шулай тыныс ҡына үҫеп ултыра бирә. Ҡар-тайып, сереп үҙҙәре ауғансы йәки берәй дауыл, йәшен күтә-реп һуҡҡансы йәшәй ҙә йәшәй. Был тирәктәр ҙә яҙҙан алып көҙгә тиклем ҡара ҡарғалар, сәүкәләр көн итә. Уларҙын сы-быҡ-сабыҡтан үреп эшләнгән күбә ҙурлыҡ оялары, ҡара ҡараҫҡы булып, тирәктәрҙең йәмен ебәреп тора. Ҡарға, сәү-кәтауышы, тирә-яҡтың тын моңһоулығына ниндәйҙер ҡырыҫ, шыҡһыҙ күңелһеҙлек өҫтәй.

Емеш ҡаҙҙарын ошо Үле Эйектең бейек тирәктәренән тешкән күләгә урынға, әле генә һуғылып бөткән төрлө биҙәк-ле йәшел балаҫ кеүек йомшаҡ йәш үләнле яр башына алып килеп ебәрҙе.

«Йәгеҙ, кинәнегеҙ... Исмаһам, һеҙгә рәхәт булһын... Йә-шел үлән йолҡоп ашағыҙ... Күлгә төшөп йөҙөп өйрәнегеҙ... Мин һеҙҙе бынан, яр башынан ғына, ҡарап ултырырмын, йәме, бәпкәләр!..»

Бәпкәләр, ҡаҙҙар яр башында Емеште янғыҙ ҡалды-рып китергә йәлләгән шикелле:

— Би-пип... Би-пи-пип!..

— Ки-ги-гик... Ҡи-ғаҡ!— тип һөйләнеп, арлы-бирле үлән йолҡҡолап, уның тирәһендә әйләнеп йөрөнөләр. Ләкин ата ҡаҙ уларға күп һөйләнеп, бушҡа ғүмер уҙҙырырға ирек бир-мәне. Оҙон муйынын һуҙып, күк ҡанаттарын ҡаҡҡылап:

— Ҡа-ға-ғаҡ!— тип бөтә тирә-яҡты яңғыратып ҡыҫҡырып алды ла:—Ҡаҡ-ҡаҡ-ҡаҡ! Ҡаҡ-ҡаҡ-ҡаҡ!..— тип ҡаңғылдап, ярҙан түбән төшөп китте.

— Йөҙөргә, күл төбөнән ылымыҡтар табып ашарға өйрәнергә кәрәк! Тиҙерәк булығыҙ, балалар!— тип аңланы уны бәпкәләр һәм «би-пи-пип!»— тип иркә генә бипелдәшеп уның артынан эйәрҙе. Инә ҡаҙҙар ҙа:

— Ҡи-ға-ғаҡ! Ҡи-ға-ғаҡ!— тип, ата ҡаҙҙың һүҙен дөрөҫләп, бәпкәләренең, артынан төштө. Ҡабаҡ башында Емеш бер үҙе генә ҡалды.

Ҡаҙҙар бәпкәләрен йөҙөргә, күл төбөнән ылымыҡ эҙләп табырға өйрәтеп, күл өҫтөндә арығансы йөҙҙөләр. Унан йәнә ярға сығып:

— Би-пи-пип!..

— Ҡа-ҡа-ҡа!— тип ашарға һоранылар. Емеш уларға эремсек һалып болғатҡан көрпәне, ебеткән икмәк ҡатыларын турап биргәс, ата ҡаҙ уны:

— Ыҫ-ыҫ-ҫ-ҫ!— тип, асыуланып, ситкә ҡыуып ебәрҙе. Үҙе бәпкәләре ашап туйғансы ялғаш янында бейеп торҙо. Инә ҡаҙҙар ҙа бейенеләр. Ә бәпкәләр кем уҙарҙан көрпәне лә, икмәкте лә һоғоноп бөткәс:

— Со-р-р-р!.. Со-р-р!..— тип, йоҡо йырын йырланылар. Инә ҡаҙҙар йомшаҡ ҡына итеп:

— Ғи-ғи-ғи!..— тиештеләр ҙә бәпкәләрен ҡанат аҫтына йыйып ултырҙылар. Оҙон муйынлы, күк йөнлө баяғы усал ата ҡаҙ ғына башты ҡырын-мырын һалып күкте, тирә-яҡты ҡараштырып улар янында баҫып торҙо. Емешкә тағы ла күңелһеҙерәк, моңһоуыраҡ булып китте.

«Нимә эшләргә? Ҡалайтып көн үткәрергә?! Тукта, бынауы тирәк башына менеп тирә-яҡты ҡарайым, исмаһам... Ҡыҙҙар тауы күренмәҫме икән... Эй-й, Шәүрә лә унда хәҙер тыпыр-тыпыр бейеп йөрөйҙөр әле...»

Емеш, ҡулдарын ҡанат һымаҡ йәйеп, йүгереп күл ситенә төшөп китте. Бер минуттан ул Үле Эйектең өҫтөнә эйелеп үҫкән бейек йыуан тирәктең иң осонда, ҡуйы япраҡтар араһында ултыра ине инде. Ул тауға, ағасҡа, ғөмүмән, бейек урынға менеүҙән әйтеп биргеһеҙ тәм таба. Бейеклек уның күңелендә үҙенә генә билдәле булған ярһыу ҡыуаныс, ашҡыныу, елкенеү уята. Әле япраҡтар араһына күмелеп, тирәктең кәймелдәп торған иң бейек ботағына менеп ултырыуы менән, ул бөтә эс бошоуын, яңғыҙлығын онотто. Үҙен болоттар өҫтендә оскан ҡош кеүек тойҙо. Күкрәге тынды йышыраҡ ала, йөрәге ҡырағай ҡыуаныс менән тулҡына, елкенә башланы. Шунан ул тирәк ботағын бар көскә һелкетә-кәймелдәтә!

— Кәк-күк!... Соббух!.. Ҡотдус!..— тип, кәкүк булып ҡырырға тотондо. Арығансы, талғансы һелкенде, төрлө ҡош булып һайраны, һыҙғырҙы. Ҡайһы ваҡыт ул үҙен ысынлап та осор ҡош кеүек, хатта осоп барған кеүек тойҙо.

«Кәкүк тә, Күкен дә башта ҡыҙ кеше булған, аҙаҡ ҡына •ҡошҡа әйләнгән... Кем белә, бәлки, Емеш тә шулай булыр. Бынауы Күкен бигерәк тә уның кеүек етем булған... Уны ла үгәй әсәһе яратмаған... Ҡарғаған, хурлаған, хатта матурлығы шиңһен, тип кен яҡтыһы күрһәтмәй, иҙән аҫтына бикләп тотҡан... Иләк менән һыу ташытҡан, таяҡ менән ер соҡотҡан, ә Күкен уның һайын матурлана, аҡыллылана ғына барған. Бер саҡ туғайҙа ағас менән ер соҡоп, борсаҡ сәсеп йөрөгәйн саҡта, Күкен янына бик матур батыр һунарсы килеп сыҡҡан. Күкендең һылыулығына хайран ҡалып, текләп торған. Күкен дә уға бер күреүҙә ғашиҡ булған. Шунан уны һунарсы үҙҙәренә, Мәншәтау буйына алып ҡайтып киткән. Бик матур, бик бәхетле итеп донъя көтә башлағандар. Үҙҙәренә оҡшап, бик матур, бик батыр булмаҡсы бер малай ҙа тапҡан Күкен. Уға Мәншәмәрҙән тип исем ҡушҡандар. Тағы ла бәхетлерәк итеп ғүмер итә башлағандар... Тик үгәй әсәй Күкендең бәхетен һаман күрә алмаған. Ҡунаҡҡа саҡырған булған да, Күкенде сихырлап күгәрсен итеп осорған да ебәргән. Уның урынына үҙенең тәртешкә аяҡлы, иләк битле ҡыҙын, Күкен түҫәгенә индереп, кейәүгә ултыртып ебәргән. Теге кейәү бер нәмә лә һиҙмәй ҡалған. Мәншәмәрҙән генә быны һиҙгән, тик әйтеп бирергә сабый әле һөйләшә белмәгән. Ул, бахыр, тыбырсынып илаған да илаған. Шунан бер ваҡыт егеттен. әсәһе лә һиҙенә башлаған. Берҙән-бер көндө ул, ейәнен күтәреп, Мәншәтауға сығып киткән. Унда, ейәнен йәлләп илай-илай:

Мәншәтауҙың башында
Мәншәмәрҙән илайҙыр,
Таш имсәкле, ҡом һөтлө
Имеҙһә лә туймайҙыр,
Күкен килеп имеҙһен,
Күкен килеп имеҙһен!..—

тип йырлап ултырған. Бына бер ваҡыт баш өҫтөнән өйөр-өйөр ҡоштар оса башлаған. Уларҙың, һәр ҡайһыһы, әбейҙең зарын ишетеп, Мәншәмәрҙәнде йәлләп:

— Күкен артҡы теҙемдә!— тип ҡыҫҡырып китәләр икән. Шунан тау өҫтөнә бер төркөм күк күгәрсендәр осоп килеп сыҡҡан. Аранан береһе, айырылып, әбейҙең баш осонда кәйелеп оскан-оскан да тау башына килеп төшкән. Унан күгәрсен тунын һалып ташлап элекке Күкенгә әйләнгән. Аҡ таш өҫтөнә ултырып, илай-илай улын имеҙгән. Уның. тулҡынлы оҙон сәстәре ҡара болот кеүек булып тауҙың битен ябып ятҡан, йөҙө ҡояш кеүек балҡып, күҙҙең. яуын алып торған...

Ҡәйнәһ€ уға аптырап, телһеҙ ҡалып тик ултырған. Ә Күкен, улын туйғансы имеҙгәс, тағы ҡош тунын кейек осоп киткәи. Мәншәмәрҙән ошо имеүҙән өс көн, өс төн уянмай йоҡлаған. Уянғас, тағы әсәһен таптырып иларға керешкән. Ҡәртәсәһе уны тағы Мәншәтауға алып киткән. Шулай итеп әбей ейәнен, өс көнгә бер Күкенде саҡырып имеҙҙереп, үҫтерә башлаған. Тора-бара теге егет тә ҡатынынан шикләнә башлаған. Сөнки үгәй әсәй үҙ ҡыҙын төҫө менән Күкенгә оҡшатһа ла, унын тәне лә, йөрәге лә таш кеүек һалҡын, ҡаты квйө ҡалған.

«Туҡта, бында берәй сер булмағайыг... Әсәйем был серҙе белә торғандыр, моғайын»,— тип уйлаған егет. Унан әсәһе, Мәншәмәрҙәнде күтәреп, Мәншәтауға киткәндә, һиҙҙермәй генә артынан эйәреп барған. Әбей, тау өҫтөнә менеп, теге аҡ ҡая янына барып ултырған. Ә егет аҡ ҡая артына йәшенгән. Тау өҫтөнән еләҫ ел иҫкән, ҡояш ҡыҙҙырған, түбәнән көтөү-көтөү ҡоштар осҡан... Әбей уларға ҡарап:

Мәншәтауҙын башында
Мәншәмәрҙән илайҙыр,
Таш имсәкле, ҡом һөтлө
Имеҙһә лә туймайҙыр,
Күкен килеп имеҙһен,
Күкен килеп имеҙһен...—

тип йырлай башлаған.

Ҡоштар йәнә уны тынысландырып:

— Күкен хәҙер килә!..

— Күкен арттағы теҙемдә!— тип ҡыҫкырып үткәндәр. Шунан бына оҙаҡламай бер төркем күк күгәрсен осоп килеп, Мәншәтауҙың өҫтөндә осоп әйләнә башлаған. Шунан, аранан береһе, иң матуры, ҡыҙыл тәпәйле, өлпәй башлы, ынйы күҙлеһе төркөмдән айырылып сыҡкан да кәйелеп ергә тешкән. Күгәрсен тунын һалып, элекке Күкенгә әйләнгән. Унын. һылыу тәне аҡ мәрмәр кеүек ҡояшта ялтырап, тулҡынлы оҙон сәсе таралып, болот кеүек булып тау битен ҡаплап ятҡан. Егет ҡая артынан уға ҡарап, һылыулығына тағы ла нығыраҡ хайран ҡалып торған. Ә Күкен илай-һыҡтай улын имеҙеп йоҡлатҡан да, ҡабат осоп китәйем генә тигәндә, ире унын оҙон ҡара сәстәрен үҙ ҡулына урап тотоп алған.

— Сәсемде ебәр, тунымды бир! Минен бында бер балам булһа, унда өс бәпкәм бар. Уларҙы етем итмә,— тип ялынған Күкен. Тик ире унын был ялыныуына ҡолаҡ та һалмаған.

— Мин һине яратам. һинһеҙ йәшәй алмайым,— тигән. Үгәй әсәйҙен. сихырлап Күкенде күгәрсенгә әйләндергән тунын шунда, тау түбәһендә үк утка яндырған. Улар ҡыуанышып, күмәкләшеп әйгә ҡайтып ингәндә, үгәй әсәйҙең үҙ ҡыҙы иләк битле, тәртешкә аяҡлы булып элекке төҫөнә әйләнеп ҡарап ултырған. Теге күк йөн тунды яндырғас, үгәй әсәйҙен. сихыр көсө юғалған. Бынан ары егет уны ҡыуалап әсәһенә ҡайтарып ебәргән дә Күкен менән тағы элеккесә татыу итеп йәшәп киткәндәр...»

Ләкин Емеш әкиәттен. аҙағын яратмай.

Әле лә ул ысын күңелдән үкенеп:

«Йә, шул күк күгәрсен көйө генә ҡалһасы... Гөлдергү... Гөлдөргү!..— тип, гөрләп, теләгән ерендә осоп, иректә генә йәшәһәсе»,— тип уйлап алды. Унан мин дә ҡошҡа әйләнмәммә тип өмөт итеп, тирәктең йәшелле-күкле упҡын өҫтөнә эйелгән һығылмалы ботағында тағы бик оҙаҡ тирбәлеп ултырҙы. Ахыр бынан, тирәк башынан, айырата матур, асыҡ булып күренгән арьяҡ туғайлыҡты күҙәтергә керешеп китте. һәм ғәҙәтенсә:

«Их, шундай туғайҙа, юк-юҡ, бындай түгел, икһеҙ-сикһеҙ ҡара урманда, аллы-геллө сәскәләре, көмөш һыулы шишмәләре булған аҡланда әкиәттәге кеүек бер яңғыҙ өй торһа ине. Шунда Шәүрә, Сабира, Йәнеш, хатта уҫал Зәһира, илаҡ Хәсбиямал кеүек ҡыҙҙар бөтәһе бергә йәшәһен ине... Өлкәндәрҙән бер кем дә булмаһын ине... Эй, ниндәй рәхәт булыр ине... Иртәнсәктән кискә, төнгә хәтле уйнап тик йөрөр инек... Тыйған да, әрләгән дә кеше булмаҫ ине... Кем нисек теләһә, шулай тик йөрөр ине. Бына мин үҙем көндөҙ ҙә, тендә лә йоҡламаҫ, йүгереп уйнар ҙа уйнар инем...»— тип хыялланырға кереште. Ләкин был уй артынса уҡ унын башына:

«Ә һуң ул балаларға ашарға кем бирер ине?.. Беҙ бит әле бәләкәстәр. Ашарға таба ла, эшләй ҙә алмайбыҙ!..»— тигән күнелһеҙ уй килде. Емеш был уйға күңеленән ҡул һелтәп:

«Эй-й... Ҡуй ҙа... Булмаҫты уйламайым да»,— тине лә тағы ботаҡта һелкенергә тотондо.

«Их, ҡош булыш ҡына осорға ине. Ҡош ҡына ысын ирекле була инде ул!»

Емеш шулай татлы хыял һәм үтәлмәҫ өмөт донъяһында онотолоп ултырған арала, йоҡоларын туйҙырып, инде өҙәйолҡа үлән ашап йөрөгән ҡаҙҙар ҡапыл сыр-сыу килеп ҡаңғылдашырға кереште.

Емеш, ҡурҡынып, ҡүҙҙәрен башта ергә, унан күккә йүнәлтте. Яр өҫтөндә ҡаҙҙар янында улай ҡурҡырлыҡ, бәпкәләргә тейерлек бер ни ҙә күренмәй. Ә күктә, бик бейектә, төйләгән әйләнеп йөрөй. Емеш:

Төйләгән, атайын-әсәйең
Ер аҫтына күмелгәв?
..,; Ьар ҡайт, бар ҡайт!..—

тип таҡмаҡланы. Был һүҙҙе ишеткәс, төйләгән ашығыс рәүештә кире боролорға тейеш ине. Атай-әсәй үлгәндә тамаҡ ҡайғыһы буламы ни? Ләкин был ғәмһеҙ төйләгән күрәһең, ата-әсәһен дә һанға һуҡмай. Ул ҡымшанмай ҙа, һаман түбәнәйә, ергә яҡыная барҙы. Ҡаҙҙар, ҡайҙа ҡасырға белмәй, пыр туҙышып йүгерешә, ҡысҡырыша башланы. Емеш тейен етеҙлеге менән түбәнгә ташланды.

Төйләгән унан да уҙҙырҙы. Күҙ асып йомғансы үк кеүек ергә атылып төштө лә, бесәй табаны япрағы аҫтына башын ғына йәшереп торған бер бәпкәне, тырнаҡтары менән эләктереп, күккә күтәрелеп тә китте. Ҡаҙҙар ҙа, Емеш тә, ауыҙҙарын асып, аптырашып торҙо ла ҡалды. Ҡасан Емеш, иҫенә килеп: «Ни эшләргә? Апайыма ни тип яуап бирергә!»— тип уйлап алғансы, ҡаҙҙар:

— Ға-ға-ға!..

— Сип-сип-сип!— тип, әле генә кисерелгән ҡурҡыныс хаҡында кем уҙарҙан бик оҙаҡ һөйләнделәр. Унан ата ҡаҙ:

— Ҡи-ҡа-ҡа-ҡаҡ... Ҡи-ғаҡ-ға-ғаҡ!—тип ҡайтырға кәрәклекте белдерҙе. Инә ҡаҙҙар ҙа, бәпкәләр ҙә ҡайтыу яғына атланылар. Емешкә лә улар артынан эйәреүҙән башҡа сара ҡалманы.

Сыр-сыу килеп ҡаҙҙар ҡайтып инеүгә, аласыҡтан Сәрбиямал да килеп сыҡты:

— Ниңә иртә алып ҡайттың? Сиған балаһы!

Емештең ҡото осоп бармаҡтарына теклән торғанын күргәс, шикләнеп, йыуан тоҡос бармаҡтарын тырпайтып, бәпкәләрҙе һанарға кереште:

— Берәү, икәү, өсәү... ун бер, ун ике, ун... өсөнсөһө ҡайҙа? Бынауы йәш ҡаҙымдың ун өсөнсө бәпкәһе ҡайҙа?

Емеш ғәйепле башын түбән эйҙе:

— Төйләгән типте...

Сәрбиямал арыҫлан шикелле ажғырып Емештең өҫтөнә ырғыны.

— Ә-ә-ә?! Нимә тиһең?.. Төйләгән типте тиһеңме?.. Мин һине ни өсөн ебәргәйнем... Бәпкәне тейләгәндән типтерер өсөнмө, ә? Ер йоторо, ҡаҙалғыры!

Бынан бер нисә минут үтеүгә Емеш, туҡмалып, иҙелеп ташланған хәлдә, аласыҡ янында ята ине. Уның янында Йәнеш кенә ултыра. Һеңлеһенең үтә күренмәле беләктәрен һыйпап:

— Ниңә ағас башына менеп киттең, йә? Ниңә ҡаҙҙар янында ғына ултырманың?— тип ҡабатлай Йәнеш.

— Әллә,— тип аптырай Емеш үҙе лә.—Ниңә улай иттем икән?

— Үлерһең һин былай булһа, йәшәмәҫһең, һин, Емеш!..

Был һүҙ ни өсендер Емеште бөгөн ҡурҡытмай.

— Үлһәм ни... Бик һәйбәт булыр... Ҡотолормон...— ти ул,



тыныс ҡына.— Бибисара абыстай әйтә, сабый саҡта үлгән кеше ожмах ҡошо ғына була, ти... Эй, ниндәй рәхәт булыр... Сәскәнән сәскәгә, тирәктән тирәккә ҡунып осоп ҡына йөрөрмөн... Кешеләр араһында түгел, ҡоштар араһында ғына йәшәрмен... Эй, үлһәм ине тиҙерәк, сабый сағым уҙмаҫ элегерәк үлһәм ине мин...

Йәнеш һеңлеһенең алыҫҡа, зәңгәр күккә текләп, хәрәкәтһеҙ тынып ҡалған моңһоу күҙҙәренә ҡурҡып, мөлдөрәп ҡараны. Уға Емеш, ысынлап та, бына хәҙер үлер ҙә, ожмах ҡошо булып осор ҙа китер, был ләғнәтле тормошта ул бер үҙе генә торор ҙа ҡалыр төҫлө тойолоп китте. Ул үҙәләнеп, ҡурҡынып Емештең еңенә йәбеште:

— Һылыу, Емеш, үлмә!.. Мине янғыҙ ҡалдырма, йәме!

Емештен. аяғы янында аунап яткан ҡарт һунарсы Мыраубай ҙа ялҡау ғына мыраулап, Емештең аяғынан ҡосаҡлап алды. Әйтерһең, ул да: «Үлмә, икәү уйнайыҡ. Һинһеҙ миңә бик күңелһеҙ булыр»,— ти ине.

— Бынауы бесәйгә хәтле минән бәхетле...— тип уйланды Емеш.— Эйе, ысынлап та, уға йәшәүе рәхәт бит... Ул алланан да, үгәй әсәйҙән дә, бер кемдән дә ҡурҡмай. Уға гонаһ та, сауап та, тамуҡ та, ожмах та юҡ... Бына тиҙҙән йәй етер. Үле Эйек беҙҙең тәңгәлдә ҡорор, кибер. Ул саҡта Мыраубай өйҙә лә тормаҫ... Йылдағыса үрге туғайға һунарға сығыр ҙа китер. Унан, көҙгө һалҡындар төшөп ер туңғансы, сысҡандар, көшөлдән ашап һимереп, туғайҙа йөрөр ҙә йөрөр... Бер нимәнән дә ҡурҡмаҫ. Бер кемгә лә ялынмаҫ. Бына нисек батыр бесәй ул Мыраубай... Ошо бесәй хәтле лә батырлығың булмағас, донъяла нисек йәшәргә кәрәк?»

Емеш, шулай уйлана-уйлана апаһының арыҡ тубыҡтарына ятып бер аҙ хәл алғас, Мыраубайын ҡосаҡлап, урамға сығып китте лә, ситән буйына, йәшел үлән еҫтөнә һуҙылып төшөп ятты. Ғәҙәтенсә, күккә, алыҫҡа ҡарап, буталсыҡ тарҡау нәмәләр тураһында уйлап үҙенең хәҙерге хәлен онотторға, йөрәгенен, яраһын төҙәтергә тырышты. Бына көнбайыштан, яр шикелле ишелеп, ҡалын ҡара болот ҡалҡып сыҡты. Уны ара-тирә йәшен ҡылыстары сыйғалап үтте. Йәшен һәм ямғыр еҫе менән тулышҡан яҙғы саф һауа уның туҡмалып иҙелгән күкрәгеп йомшаҡ нәфис ҡулдары менән һылай-һыйпай иркәләргә, төҙәтергә кереште.

«Кис булып килә. Ә атайым һаман юҡ... Атайым һаман ҡайтмай. Күлдәклек алып ҡайтмай... Ниңә һаман ҡайтмай икән?..— тип, хафаланып, уйланды хәҙер Емеш.— Тиҙерәк кенә ҡайтһын ине минең атайым...»

Емеш сығып үлән өҫтөнә ятҡас та, дуҫына һиҙҙермәй генә шыуышып ситән буйына килеп ултырған Шәүрә уның уйын бүлде:

— Һин нимә уйлайһың, Емеш?

Ул һәр саҡ Емешкә ошо һорауҙы бнрергә ярата ине Емеш уға әйләнеп ҡарамай ғына:

— Тауҙан ҡайттығыҙ ҙамы ни?— тип һорауҙы икенсе яҡҡа борҙо.

Уға был ауыр, ләғнәтле көндөң үтеп китеүе шатлыҡлы ла, ғәжәп тә һымаҡ тойола ине.

— Ҡайтмай ни, эңер төшөп килә лә баһа!..— тине Шәүрә, ҡыуанyслы йылмайып. Унан дуҫына бөгөнгө көндөң ҡыҙыҡтары тураһында ашығы-ашыға һөйләргә кереште.— Эй-й, мәрәкә булды, вәт...— тине ул, ҡулдарын сәбәкәйләп.— Йүгерә-йүгерә аяҡ ҡалманы. Уйнамаған уйын, һөйләмәгән һүҙ, йырламаған йыр ҡалманы, вәт. Эй-й, Емеш, әгәр һин үҙең күрһән, ине!..

Һүҙ бер аҙға туктaлып ҡалды. Унан Шәүрә, бөтөнләй икенсе, һүренке тауышка күсте.

— Тауҙа күңелле булды ла ул... Унда башҡа ауылдар ҙа килмәгәйне әле... Ә бына ҡыҙҙар иртәгә аръяҡҡа, йыуаға сығайыҡ, тип һөйләшеп ҡайттылар... Йыуаға сығыу, тауға сығыу түгел бит инде ул... Йыуаға сыгып булмай инде...

— Ниңә?—тине Емеш.— Нинә сыҡмайһын?..

— Яны күлдәк юҡ.

— Булмаһа ни.

— Вәт, биғәләш, алама күлдәк менән йыуаға сығып булалыр шул. Унда бит нисәмә ауыл бергә йыйыласаҡ... Әллә ниңә баҙарҙан һаман атайым да ҡайтмаған. Бәлки күлдәклек ситса алып ҡайтырмын тип киткәйне...

— Минең дә атайым ҡайтманы. Ул хатта мицә сатин күлдәклек алып ҡайтмаҡсы ине лә... Ниңә ҡайтманылар икән? Арҡаларына мылтыҡ аҫып китте бит улар... Баҙарға түгел, һуғышҡа киткәндер бәлки улар... Уй, атайым... Атаҡайым тиҙерәк кенә ҡайтһансы...

Улар, арҡаға арҡа терәп, һәр икеһе үҙ уйына сумып, оҙаҡ ҡына тынып ултырҙылар. Емештен, муйынында ҡыҙыл мәрйендәрҙән теҙелеп ишеп-ишеп эшләнгән муйынса күреп:

— Ҡайҙан алдын һин уны?— тип аптырап һораны Шәүрә. Быгаса Емештең былдай муйынсаһы барын белмәй ине. Эйе, Емеш уны бөгөн иртәнсәк кенә, апайым тауға ебәрһә, тип уйлап тағып алғайны. Әле инде Шәүрәнең ҡыҙыҡһынып, янып киткән күҙҙәренә ҡарап, үҙе лә аптыраған һымаҡ, һорау менән яуап бирҙе.

— Матурмы?

— Эй-й, һорап тораһын. тағы? Ҡалай ҙа матур әле!..

Емеш муйынсаны ипләп кенә үҙ муйынынан алды ла Шәүрәнец арыҡ муйынына таҡты.

— Мә, кей. һиңә булһын. Былдай күп мәрйенле муйынса әле бүтән бер ҡыҙҙа ла юҡ. Хатта Заһирала ла... Гөлйыһанда ла юҡ...



Шәүрә ҡыуанысынан һикереп төшөп бейеп китте.

— Эй-й, ҡалай килешә!.. Ҡалай матур!..

Унан тағы һурелде. Күнелһеҙләнеп Емештең. янына уллрҙы.

— Ҡуй, кәрәкмәй, алмайым, Емеш. Был муйынса һинең үҙекә лә бик кнлешә.

— Килешһә, мин уларҙы тағы яһай ҙа алам,— тил көлдө Емеш.

— Нисек?! Ошоно һин үҙең яһай алаһыңмы?!

— Эйе.

— Кит, биғәлеш, юҡты һөйләмә!

— Юҡты һөйләгәнем бармы ни минең?

— Юҡ та ул...

— Шулай булғас, ышан.

Улар аяҡтарын бөкләп ҡара-ҡаршы ултырҙылар. Емеш дуҫына, әсеп килгән һөткә ҡайнар һыу ағыҙғас, унын һағыҙланып китеүе, был муйынсаҡтарҙы шул эремсектән эшләп, киптереп, ҡырҡып, ҡыҙыл буяуға манып алыуы тураһында һөйләп бирҙе.

— Былраҙы мин былтыр йәй үк эшләгәйнем.. Тик яңы күлдәгем булмағас, таҡмағайным ғына,— тип тә әйтеп ҡуйҙы.

— Эй-й!.. Ҡалай мәрәкә!—тип аптыраны Шәүрә.

— Әгәр теләһән, мин һиңә уны тағы ла күп итеп яһап бирә алам. Тик, әсеп килгән һөтөң, ҡайнар һыуыц, ҡыҙыл буяуың ғына булһын.

— Ысынмы?!— тип, тағы ла нығыраҡ ҡыуанды Шәүрә.

— һинең мәрйендәрең хәҙер бөтә ҡыҙҙарҙыҡынан да күберәк буласаҡ. Тик һин уларға быны мин яһағанды әйтмә. Әсәйем ҡырк тартмасынан һатып алып бирҙе тиген. Әйҙә, һинең байлығыңа аптыраһындар.

— Эй, эйе шул. Ҡалай мәрәкә булыр. Емеш, ҡайҙан өйрәндең һин быны яһарға?..

— Белмәйем,— тине Емеш, бошоноп. Унын был турала артабан һөйләшкеһе килмәй ине инде.

Дуҫының һөйләшкеһе килмәгәндә артыҡ һырмаҡайланып йөҙәтергә яратмаған Шәүрә, мәрйененә һоҡланып, уны һыйпап-һөйөп бер аҙ тынып ултырҙы. Унан, һикереп тороп, бейеп китте:

— Былай булғас, мин иртәгә йыуаға сығам!. — тип ҡуйҙы.— Күлдәгем, яңы күлдәгем бул-маһа ла сығам!

— Сыҡ шул,— тине Емеш.— Сыҡ. Рәхәтләнеп бейе, уйна. Әгәр мине апайым ебәрһә, бер ҙә күлдәк тип тормаҫ инем әле

— Сығам, сығам!— тип ҡабатланы Шәүрә. Унан Емеште уратып тағы бер-ике бейеп әйләнде лә:— Емеш, ултырып тор!.. Мин хәҙер!..— тип йүгереп өйҙәренә ҡайтып китте. Емештең уйы тағы атаһына күсте:

«Ниңә һаман юҡ?» Ләкин Шәүрә уға оҙаҡ уйланырға бирмәне. Шунда уҡ кире йүгереп сыҡты ла Емешкә бер шырпы ҡабы алып килеп бирҙе.

— Мә, Емеш. Минән һиңә бүләк булһын.

— Шырпы ҡабымы?— тип һораны Емеш.

— Әсен ҡара... Асып ҡара!..— тине Шәүрә, түҙемһеҙләнеп. — Йә, ҡарай һал инде!..

«Ниндәй бөжәк икән бынын, эсендә? Сиңерткәме икән, тиреҫ ҡуңыҙымы икән?»—тип уйланды Емеш. Шәүрәнең шулай шырпы ҡабына берәй бөжәк бикләп биреп, Емеште ҡурҡыта торған шаян ғәҙәте бар ине.-

— Аса һал, ас... Ҡурҡма, биғәләш!..— тип көлдө Шәүрә.

Емеш, һаман шул берәй сиңерткә ырғып сығыр тип ҡурҡып, һаҡлыҡ менән генә шырпыны асты:

— Эй-й!.. Ҡумыҙ!..— тип, ҡыуаныстан ни эшләргә белмәй ҡысҡырып ебәрҙе.— Ҡу-мы-ҙ!..

Унының аҡһыу ирендәре хатта ҡалтырап китте.

— Эйе шул, ҡумыҙ шул!— тип тәтелдәне Шәүрә.— һинә ҡумыҙ бүләк итәм. һин миңә муйынса бирҙен. Мин һиңә ҡумыҙ. Әхирәтбулышырбыҙ. Әхирәт! Мәңгелек дуҫ!.. Мәңгелек әхирәт, йәме, Емеш!

Емеш, аптырау ҡатыш ҡыуаныуҙан тағы ла ҙурыраҡ асылған күҙҙәрен ҡумыҙҙан ала алмай, Шәүрә артынан:

— Мәңгелек дуҫ!.. Мәңгелек әхирәт!..— тип ҡабатланы. Был минутта унын шатлығынын иге-сиге юҡ ине. Сөнки бығаса бер ҡасан да иҫенән сыҡмаған, шул саҡлы уйнағыһы килеүҙән хатта төштәренә инеп йөҙәткән ҡумыҙ унын, ҡулында ине хәҙер.

— Ҡайҙан алдын һин быны, Шәүрәкәй?— тип һораны хәҙер Емеш.— Нисек таптың һин быны?!

Шәүрә әхирәте янына, ергә йөҙнөкләне. Шунан улар, ситәнгә арҡа терәп, йәнәш ултырҙылар. Емеш ҡумыҙҙа «Ҡуңыр буға» көйөн уйнаны. Кескәй ҡумыҙ унын ҡулында яҙғы ташҡын булып шауланы, май ҡуңыҙы булып выжылданы, һабан турғайы булып сырылдап күккә, ҡояшҡа осто, кәкүк булып тирәк ботағында талпынды, һандуғас булып талдан талға ҡунып, Оло Эйек менән ярышып сутылданы, яҙғы еләҫ ел булып биттәрҙән генә түгел, йөрәккә инеп, һөйөп, ҡыуандырып үтте. Тора-бара ул, бығаса һис тә ишетелмәгән ниндәйҙер йөрәк өҙгөс монло көйҙәргә күсеп китте. Былары Емештең үҙ йөрәгенең зары, моңо, ярһыуы ҡумыҙ телдәре аша шундай ғәжәп матур ҙа, моңло ла, серле лә көй булып, ташып сыға ине.

Бик иртә өлкән кешегә әйләнгән кескәй Емештең күп һыҡтаған йөрәгендә томаланып ятҡан ҡайнар хистәр, йөрәк өҙгөс моң-зарҙар, шулай тотоп торғоһоҙ ташҡын булып, ҡумыҙ теле аша ағылдылар-ағылдылар ҙа туктап та ҡалдылар. Емештең аҡһыу биттәре алһыуланып, киң текә маңлайынан борсаҡ-борсаҡ тирҙәр атылып сыҡты. Емеш дуҫына бә-; хетле йылмайып ҡараны.

«Йә, нисек, уйнай беләмме?»— ти ине был ҡараш. Шәүрә һоҡланыуҙан телһеҙ ҡалып баш сайҡап ҡына ултырҙы.

— Былай булғас, әхирәт, иртәгә һин дә йыуаға сыҡ, йәме,— тине Шәүрә, шатланып.— Күлдәгебеҙ алама булһа ла, ҡумыҙыбыҙ булғас, бейегеһе килгән бетә ҡыҙҙар беҙҙең янда буласаҡ, эйе бит, әхирәт!..

Емеш тә, ысын ҡыуаныс менән балҡыған күҙҙәрен дуҫына төбәп, баш ҡаҡты.

— Эйе шул. Атайым ҡайтһа, апайым ебәрһә, сығырбыҙ ҙа шул...

## XII

Был төндә Емеш йоҡоһоҙ үткәрҙе. Атаһының үҙенә сатиндан күлдәклек алып тиҙерәк ҡайтыуын алланан ялынып-ялбарып теләне ул. Үҙен берсә өр-яңы күк сатин күлдәк, шау биҙәк ал кешмир яулыҡ ябынып йыуаға сыҡҡан ҡыҙҙар менән аръяҡта, мең төрлө аллы-гөллө сәскәләр араһында, күбәләк кеүек осоп йөрөгән бәхетле шат, уйынсаҡ ҡыҙ итеп күҙ алдына килтерҙе. Берсә унын башына йөрәк ешөткөс күренештәр килде. Бына унын атаһы ҡайтманы. Иштуған ағаһы шикелле китте лә юғалды. Сәрбиямал уларҙы өйөнән ҡыуып сығарҙы. Йәнеш тә, Емеш үҙе лә бына хәҙер ҡайҙабарырға, нимә эшләргә белмәй урам уртаһында илашып торалар... Был уйҙан Емештец күкрәге ҡыҫылды, тыны быуылды. Ул хатта бер нисә тапҡыр юрғанын һирпеп ташлап тороп ултырҙы. Ат тояғы дөпөлдәгән, ҡапка шығырлап асылған тауыш ишетелмәҫме, тип тыңланы. Ләкин ҙур яҡта Сәрбиямалдын ихлас ғырылдауынан, үҙ янында Йәнештен, һаташып, ыңғырашып, тынысһыҙ мышылдап йоҡлауынан башҡа бер ни ҙә ишетә алманы. Атаһы һаман ҡайтманы. Ә таң атыуға Илсеғолға Иштуғандар булған ҡыҙылдар отрядын эҙерләгән аҡтар килеп тулды. Тын урам йәйәүле, һыбайлы һалдат менән тулып китте. Собхан старшина, Ғаббас муллаларҙың ҡапҡалары ҡоҙа ҡаршылағандағы кеүек шар асып ҡуйылған. Унда ят һалдаттар бер инеп, бер сығып йөрей. Собхан старшина бөйөргә таяна биреп, киц баҫып, үҙҙәренен. -капка төбөндә ука погонлы, йыуан ҡорһаҡлы бер хәрби менән һөйләшеп тора. Башҡалары был ука погонлы кеше янынан үткәндә таш ҡурсаҡ кеүек аяҡтарын тып баҫып, устарының ҡабырғаһы менән үҙ маңлайҙарына һуғып үтәләр. Собхан старшина уларҙын. һәр береһенә майлы йылмайып:

— һай, афарин! һай, баһадирҙар!.. Һай, әфәнделәр!..— тип мығырланып ҡала. „

Шымбай каштан да бөгөн, яраһына тоҙ һибелгән ҡорсаңғы ат кеүек, сәбәләнеп урамға һыймай тыбырсынып йөрөй. Ире, улы йәки берәй яҡыны ҡыҙылдар яғында йәки дружинала булған кешеләрҙең өйҙәренә төртөп күрһәтеп, ниҙер һөйләй. Уның бармағы төбәлгән бер өйгә теге мылтыҡлы кешеләрҙән бер нисәһе йүгерешеп инеп китә. Унан оҙаҡламай нәмәләрҙер күтәреп, кемдәрҙелер тартҡылап,туҡмапалып сыға. Бына уларҙың бер нисәһе Емештәргә лә килеп инде. Был ваҡытта Сәрбиямал, Байгилде менән Иштуған өсөн үҙен бәләгә осратыуҙарынан ҡурҡып, с)хмәтшаһын эҙләп урамға сығып киткәйне. Өйҙә Йәнеш менән Емеш кенә ине. Аҡтар уларҙың өҫтөнә ябырылып:

— Ҡайҙа атайығыҙ? Ағайығыҙ ҡайҙа? Ах ҡыҙыл көсөктәр!— тип аҡырындылар, төкөрөндөләр. Емеш менән Йәнеш телһеҙ ҡатып торҙолар. Шунан тегеләр, урындыҡ, иҙән аҫтарын аҡтарып, урын-ерҙе туҙҙырып, хатта яҫтыҡ, мендәрҙәрҙе ҡылыс менән сәнскеләп сығып киттеләр. Өй эсе ҡаҙ йөнө менән тулды. Оҙаҡламай, Әхмәтшаһын эйәртеп, Сәрбиямал ҡайтып инде. Сәрбиямал, өйҙәге хәлде күргәс, эргәһендә һөйәркәһе булыуын да, янында гел шат, гел йәш булып ҡылана торған ғәҙәтен дә_онотоп, сәстәрен йолҡколап иларға кереште:

— Эй-й!.. Мендәркәйҙәремде!.. Яҫтыҡкайҙарымды!.. Өрәңы ғына, сатин тышлы ғына юрғанкайҙарымды! Бөтөргәйдәр!.. Сәнскеләгәндәр!.. Йә, кем өсөн?! Кем өсөн, тим, бирәндәр!.. һеҙҙең өсөн, һеҙҙең арҡала бит мин был ыҙаны күрәм!.. Шул яуыз, ҡороғор Иштуған, шул зимагур Байгилде арҡаһында бит былар бөтәһе лә!..— тип, төрлө тауышҡа таҡмаҡлай-таҡмаҡлай иланы ул. Эсе аҡтарылып яткан мендәрҙәрҙең, бығаса Сәрбиямалдың үҙенән башҡа бер кемдең ҡулы теймәгән бай, ҡәҙерле урын-ерҙең, туҙып, ошо хәлгә килеүе Емеш өсөн дә ҡыҙғаныс ине, әлбиттә. Ләкин хәҙер уға — Таиба әбейҙең Хамматы үлемесле яраланған саҡта ҡайғыны нисек сабыр кисереүен, Ҡарасәс әбейҙен, батыр, мөһәбәт үлемен күргән кешегә — Сәрбиямалдың ҡыланышы шундай түбән, мәғәнәһеҙ, килбәтһеҙ тойолдо. Емеш ғүмерендә беренсе тапҡыр үгәй әсәһенен. асыуы алдында ҡурҡып, аптырап ҡалмай, уға әйләнеп тә ҡарамай, тышҡа сығып китте. Уның күңелендә хәҙер бер генә уй ҡабатлана ине: «Атайым ҡайҙа икән һуң? Атайыма ни булды икән?..»

Өйҙән, уның артынан, Әхмәтша ҡараҡтын. асыулы тауышы яңғыраны.

— Етәр, илама! һиңә нимә ҡушҡайнылар? Байгилдене ҡулдан ысҡындырма. Ҡайҙа бараһын, нимә эшләргә йыйыныуын белеп тор,— тип әйткәйнеләр түгелме?

Сәрбиямал шунда уҡ илауҙан туҡтаны: , .



— Аһа, ҡайҙа тип ни, кисә иртәнсәк баҙарға ғына киткәйне лә баһа ул. Мин һиңә баҙарға китте, унда үҙең ҡара, . тип әйттем дә баһа,— тип ҡарыулашырға кереште.— Үҙеҙ йоҡлап ҡалғас, мин ғәйеплелер шул.

— Бөтәһе лә — Тимербайы ла, Закиры ла юҡ. Моғайын, уларға аҡтарҙың етеп килеүе хаҡында кемдер хәбәр иткән. Шуға алдан һыҙғандар улар.

— Кем әйтер икән?

— Кем, кем!.. Бәлки һин бытылдағанһындыр әле, бытбылдыҡ!..

— Абау, йәнем, һин ни һөйләйһең?.. Ҡулымдан килһә, мин уны хәҙер үк үҙ ҡулым менән тотоп бирер инем...

— Бирер инем... Бирер инем,— тип асыулы үсекләне Әхмәтша. Ул бөгөн бөтөнләй икенсе, уҫал, ҡырҡыу тауыш менән һөйләшә ине.— Алданын һин. Байгилдене ҡулдан ысҡындырмам тигән вәғәҙәңде үтәмәнең!

— Көймә, йәнем. Ҡайтыр ҙа, ҡулға ла ҡабыр. Ҡайҙа китер тиһең ул, балалары бында булғас...

— Төн уртаһында ҡайтһа ла, миңә хәбәр ит. Етер уға, күп йөрөнө.

— Итермен, йәнем, итермен.

Емеш, күҙ алдары ҡараңғыланып, сайҡала-сайҡала, аласыҡ яғына табан атланы. Уға ҡурҡыныс та, ерәнес тә ине быны ишетеү.

«Эй атайым, атайым!.. Белһән, ине һин кем менән йәшәгәнеңде!..»

## ХШ

Ҡормош бай атын яндыра яҙып, йән-фарман сабып Сәләм ауылына килеп еткәндә, төн уртаһы ауғайны инде. Шулай ҙа һатыбал йоҡламағайныәле. Ул үҙенең яҡын ярҙамсылары Хөснөлхаҡ, урядник Алексейҙың улы Метрофан, волость башҡармаһынан Феропонт Хитровтар менән бергәләп ағымдағы хәлдәрҙе тикшереп, артабанғы хәрәкәт өсөн мәкерле план ҡороп ултыра ине.

— һамар, Силәбе чехтар ҡулында. Аҡтар Өфөгә һөжүм итәләр. Ҡыҙылдар тимер дүңгәләк эсендә ҡалып киләләр. Шундай саҡта нимә кетөп тик ятабыҙ? Беҙ һөжүмгә тотонорға, совет яҡлыларҙы эстән ҡыйрата башларға тейешбеҙ,— тип һөйләне Хитров.— Ә һеҙ һаман бер эш күрһәтмәй ятаһығыҙ. Ышанысты аҡламайһығыҙ. Яҙ көне Илсеғолға яһаған һежүм дә барып сыҡманы...

һатыбал, бөтә асыуын Илсеғол дружинаһына ауҙарып, төкөрөк сәсеп оҙон телмәр һөйләне.

— Улар беҙҙең ҡоралды урлап алдылар. Улар беҙҙен

сафты тарҡаталар, халыҡты ҡыҙылдар яғына ауҙара. Улар минең атайымдың, хатта, Феропонт Сергеич, һеҙҙен. атайыҙыңҙың ашлыҡтарын да талап алып, ҡалаға, эшселәргә оҙатып бөттөләр. Улар илде бөлдөрә. Беҙ күрәште иң элек ошо дружинаны туҙҙырыуҙан башларға тейешбеҙ.

Метрофан әлдән-әле:

— Большевиктарға үлем!— тип, күҙҙәрен аҡайтып, ҡысҡырып ултырҙы.

Яҡуп күпере янындағы төнгө һуғышта үлтерелгән тигән һүҙ таралһа ла, асылда, еңелсә генә яраланып ҡотолған Хөснөлхаҡ та, оҙон үңәсен һуҙып:

— Эйе, дөрөҫ, әфәндем, дөп-дөрөҫтө әйтәһегеҙ, большевиктарға үлем!— тип, урынында ултырып сыҙамай һикерән,-ләне. Откоу, кеше күңеленә хөсөт һалыуҙа ул атаһы Ғаббас мулланан бер ҙә кәм түгел ине.

Кәнәшмәнеңтап ҡыҙған ғына сағында, ахылдап-ухылдап, Ҡормош бай килеп инде.

— Әгәр, ысынлап та, Илсеғол дружинаһынан ҡотолорға теләһәгеҙ, хәҙер үк беҙҙең ауылға сабығыҙ. Уларҙы йоҡоларында берәм-берәм һуйып сығығыҙ! Аллаһы тәғәләнең ярҙамы һеҙҙең яҡта буласаҡ! Кем ҡайҙа, ҡайһы өйҙә йоҡлай, үҙем күрһәтеп йөрөрмөн. Һеҙгә тауыш-тынһыҙ, үткер бысаҡ менән генә эш итергә ҡаласаҡ!— тип, һимеҙлектән дә, асыуҙан да, тыны ҡыҫылып, хырылданы ул.— Йәгеҙ, йәмәғәт, йәһәт булығыҙ!

Был фекер бөтәһенә лә оҡшаны. Улар Илсеғол дружинаһына ҡаршы асыҡтан-асыҡ көрәш башларға ошоғаса батнат итмәй, аҡтарҙың яҡынлашыуын көтөп торһалар ҙа, әле инде уларҙы йоҡоларында һуйып сығыу мөмкинлеге тыуғас, быға бик теләп риза булдылар. Оҙаҡламай һатыбал отряды юлға сыҡты. Ә Феропонт Хитров Яҡуп ауылына хәтле уларға эйәреп барҙы ла, унышлы һөжүм теләп, тороп ҡалды.

Күк битенә ҡанлы пәрҙә ябып, таң һыҙылғанда, улар өйҙән өйгә инеп, бер ни белмәй йоҡлап ятҡан дружинасыларҙы берәм-берәм һуйып йөрөйҙәр ине инде. Күптәр уянырға, ҡаршылыҡ күрһәтергә өлгөрә алманы. Бында ишеккә элгес ҡуйыу, өйҙе йоҙаҡлап, бикләп йөрөү ғәҙәте булмағанлыҡтан, бөгөн үлтереүселәргә һәр өйҙөң ишеге асыҡ ине.

Шаһимораттарға Ҡормош бай үҙе юл башлап килде.

— Самай атамандары ошонда! Йәгеҙ, аллаға тапшырҙыҡ!..

Шаһимораттарҙың соланында ятҡан Байгилде ағай, был шомло шыбырлауға ҡапыл уянып китеп, мылтығына тотондо.

— Егеттәр, тороғоҙ! Кемдәрҙер килә!..— тип шыбырланы.



Тимербай менән Шаһиморат, ҡулдарына мылтыҡ алып, Байгилде ағай янына баҫты. Ул арала булмай солан ишеге әкрен генә шығырлап асылып китте. Һыҙылып килгән таң яҡтыһында өс шәүлә ап-асыҡ күренде. Былар ҡулына балта тотҡан Ҡормош бай, штык менән ҡаҙарға әҙерләнгән һатыбал, Хөснөлхаҡ ине.

Соландын ҡараңғы мөйөшенән бер юлы ес мылтыҡтан атыу яңғыраны. Ҡормош бай менән һатыбал бер-берեһенең өҫтөнә ҡапланып төштө. Арттан эйәргән Хөснөлхаҡ ҡысҡыра-һөрәнләй кире йүгерҙе.

— Уяуҙар! Аталар!..

Өйҙә эҫе тип, лапаҫ башына, бесән өҫтөнә сығып ятыу арҡаһында ғына тәүге мәкерле һөжүмгә эләкмәй ҡалған Сәхиулла менән Закир ҙа, атыш тауышына уянып, мылтыҡҡа тотондо. Унда ла атыш китте. Ләкин Сәхиулланы тәүге пуляларҙың береһе үк йығып һалды. Закир атышты бер үҙе дауам итте. Дружинасыларҙың йоҡола үлтерелеп өлгөрмәгәндәре терлө урында, һәр кем үҙенсә атыш, көрәш. алып бара ине. Шулай ҙа атыштың иң көслө ере Шаһимораттар өйө янында барҙы.

Өйҙәренән өркөтөлөп сығарылған ҡатын-ҡыҙ, бала-сағa менән бергә Сыуаҡай әбей ҙә:

— Үлтерәләр!.. Аталар!.. Ҡотҡарығыҙ!— тип һөрәнләй-һөрәнләй, үҙенен ҡайҙа барғанын, ни эшләгәнен үҙе лә аңламаҫтан, тыҡрыҡ аша һырт яҡҡа табан йүгерҙе. Бына шунда инде ул Иштуған менән осрашты, Тимербай ҙа, Закир ҙа дружинаға ойошҡан рәүештә етәкселек итә алманы.

Метрофан менән Хөснелхаҡ, бөтә булған бандиттарҙы әйҙәп алып килеп, Шаһимораттын. өйөнә ҡаты һөжүм башланы. Бысаҡ, йәки ҡылыс менән түгел, мылтыҡтан пуля яуҙырып, өйгә ябырылып киләләр ине улар хәҙер. Тик кеше ҡаны* на иҫереп ҡоторонғанлыҡтан, ҡайҙа атҡанлыҡтарын, ни эшләгәндәрен белмәйҙәр ине. Ә соланда ситән ярығы аша уларҙы яҡшы күреп ултырған'өс батыр бер пуляны ла яҙа ебәрмәне.

Тора-бара дошман өйгә туранан-тура һөжүм итеүҙең ахмаҡлыҡ икәненә төшөнә башланы.

— Ут төртөргә!

— Бомба ташлап шартлатырға!— тип шауланы.

— Сығығыҙ! Бирелегеҙ! Юҡһа, янып үләсәкһегеҙ!— тип ҡурҡытырға маташтылар. Ләкин уларға соландан тик бер генә яуап булды — атыу.

Ахыр мылтыҡтарҙа патрондар ҙа бөттө.

— Штык һуғышына тотонорға ваҡыт, иптәштәр!— тине Байгилде.— Алға!.. Ура-а!— тип һөрәнләп, иң алдан һөжүм' тә ташланды.

— Ура!.. • • . .

Улар, өс арыҫлан кеүек, бандиттар өйөрөнә ябырылды. Сәнсеш, ҡырылыш, ҡыҫҡырыш китте. Бандиттар тырым-тырағай ҡаса башланы. Мылтығын ташлап йән-фарман ҡасып барған Хөснөлхаҡты ҡыуып етеп, сәнсәм генә тигән саҡта, Байгилде ағай үҙ күкрәген нимәлер көйҙөрөп алғанын тойоп, сайҡалып китте.

«Яраландым, күрәһең...»

Ул йүгереп барған ынғайға һөрөнөп китте. һағынған тыуған ерен тотош ҡосағына алып үбергә теләгәндәй, ҡулдарын йәйеп, йөҙ түбән ауҙы. Шул саҡ унын ҡолағына күмәк ат тояғы, көслө ура тауыштары сағылды.

— Ур-ра! Ур-ра!.. Ҡыҙылдар киләләр! Ҡыҙылдар!..

«Ҡыҙылдар?.. Үҙебеҙҙекеләр!.. Ысынмы, һаташаммы...»

Был Байгилде ағайҙын. башына килгән һуңғы уй булды. Пуля унын йөрәк итен йыртып үткәйне.

Эшселәр отряды һатыбал бандаһын бик тиҙ туҙҙырып ташланы. Ҡояш сығыуға, ауыл уларҙан тамам таҙартылды.

һуғыштан иҫән ҡалған дружинасылар һәм эшсе отряды һалдаттары урам уртаһына йыйылды. Тимербай, Закир, Шаһимораттар, үҙҙәрен ҡотҡарыусылар араһында Иштуған, Әхәт, Айһылыу һәм Никитанын, булыуына айырата ныҡ ҡыуандылар. Ә Иштуғандын. ҡайғыһы ауыр ине. Атаһын ошонда, үҙ ауылына килеп үлтерелгән хәлдә осратырмын тип башына килтергәйнеме ни ул?..

Был көндөң тәүге яртыһын отряд йыртҡыслыҡ ҡорбандарын хөрмәтләп күмеүгә арнаны. Иҫәнбәт зыяратында тиҫтәләгән яңы ҡәбер барлыҡҡа килде. Ғәҙәттә, кешене ҡәбергә ирҙәр генә оҙата ине... Ә бөгөн дружинасыларҙын, үлеме ғәҙәттәгесә булмаған кеүек, һуңғы юлға оҙатыу ҙа башҡаса булды. Был фажиғәле ваҡиға менән өйҙәренән өркөтөлөп сығарылған бөтә халыҡ — ҡарты-йәше, балаһы-сағаһы эркелеп ҡәберлеккә барҙы. Улар араһында Сәхиуллаһын һуңғы юлға оҙатыусы Сыуаҡай әбей ҙә бар ине. Унын былай ҙа кескәй, ҡаҡса кәүҙәһе бөгөн тағы ла бәләкәсәйеп, өшөп бөрөшкән һоро турғай һымаҡ ҡына булып ҡалған. Ғәҙәттәге етеҙ, йүгерек аяҡтары бөгөн таштай ауырайып, эләгә- һөрләгә бара. Ләкин ул иламай, тын-тауыш сығармай. Ҡасандыр ҡымшанмаҫ көслө ихтыярҙын, шаһнты булып нык ҡымтылып торған йоҡа ирендәр бөгөн өҙөлмәй ағасында тороа ҡалған былтырғы япраҡ кеүек хәлһеҙ генә елпелдәп:

— Ба-ла-м... Улы-ҡа-йым...— тип ишетелер-ишетелмәҫ кенә шыбырлай ҙа тағы тынып ҡала... Элек үҙенен. бөтә донъяға һейөп, ышанып, һәр саҡ бәхетле балҡып, йәҙөнә нур биреп торған изгелекле ҡуцыр күҙҙәрендә ҡәһәрле яҙмышы алдында өнһеҙ теҙ сүгеү, буйһоноу, өмөтһеҙлек билдәһен башҡа бер ни ҙә юҡ хәҙео. Уға ҡараһа Иштуғандың йөрәгендә йәлләүгә ҡарағанда асыуға, әсенеүгә оҡшаш тойғо уяна.

«Исмаһам, ҡыҫҡырып илаһасы! Бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе һәләк иткән, үҙенең берҙән-бер улын тартып алған яуыздарға әсе ләғнәт һүҙҙәрен яуҙырһасы! Көрәшкә, үс алыуға, енеүгә саҡырһасы!— тип, әсенеп уйлана ул.— Йә, шундай теремек, ҡыйыу холоҡло, бошонмаҫ Сыуаҡай инәй ҙә быңдайға әйләнгәс!.. Яҙмышҡа ундай буйһоноусанлыҡ, ҡаршылыҡһыҙлыҠ менән бәхет яулап буламы ни?! Эйе, тормош, күрәһен, Сыуаҡай инәйҙе лә бөгөп һалды...»

Иштуған атаһын әсәһе менән ҡарттаһы янына күмдерҙе. Ирғәле ҡарттын. баш осондағы бик боронғо яҙыулы, ямғыр-ел йыуып, суғырмаҡланып бөткән һоро таш янына үргә табан ослайып торған яңы ҡая таш уҫеп сыҡты. Уға: «Дружинасы Байгилде, 42 йәштә, синфи көрәш ҡорбаны булды. Июнь, 1918 йыл»,— тип бәке менән соҡоп ашығыс ҡына яҙылғайны.

Иштуған, атаһының баш осона теҙләнеп, ошо һалҡын ташты ҡосаҡлап үпте лә, тәрән ҡайғылы уйҙар эсенә сумып, ауыл яғына китте. Айһылыуы унын биленән йомшаҡ ҡына ҡосаҡлап, өнһөҙ-һүҙһеҙ йәнәшәнән бара ине. Тик ауылға етер сакта ғына Иштуған, уйҙар баҫымынан бер аҙ ыҫҡынып, кәләшенә күтәрелеп ҡараны.

— Ай, Айһылыу, белһәң ине... Нисек улар көттөләр. Бәхетле, ирекле көндө көттөләр. Иҙеүселәр ҙә, иҙелеүселәр ҙә, ҡара уйлы, бысраҡ күңелле кешеләр ҙә булмаған саф, матур, яҡты тормошто квттәләр... Тик икеһе лә — атайым да, әсәйем дә — ул көндө күрә алманы... Үлделәр... юҡ үлмәнеләр, үлтерҙеләр уларҙы. Йә, ни өсөн? Эй, ниндәй саф йөрәкле, изге теләкле кешеләр ине бит улар, Айһылыу!..

Айһылыу уны биленән ныгыраҡ ҡыҫып ҡосаҡланы:

— Көрәш ҡорбанһыҙ булмай, ти инен, бит һин, Иштуған. Шулай булғас, ни эшләйбеҙ һун? Үлемдән ҡурҡкан кеше көрәшкә сыҡмай. Ә ҡайным үлемдән ҡурҡмаған. Көрәшкә сыҡҡан. Йәлләүгә түгел, хөрмәтләүгә лайыҡлы кеше бит ул!..

Кәләшенен. был һүҙе Иштуғанға үҙен ҡулға алырға ярҙам итте. Бынан һуң Айһылыуға үҙенен. бында ҡайтасағы, атаһының үҙ ауылына ҡайтырға тигән ғүмерлек хыялын тормошҡа ашырасағы тураһында һөйләне.

— Аҡтарҙан илде таҙартҡас та ҡайтырбыҙ. һин быға ҡаршы булмаҫһың бит, Айһылыу?

Айһылыу:

— һин ҡайҙа булһаң, мин шунда инде, Иштуған. Күрәһең, беҙҙе хатта һалдат тормошо ла айыра алманы,— тип яуап биргәс, Иштуғандың күңеленә енелерәк булып китте. Ул ышаныс менән:

— Ҡайтырбыҙ. Атайым менән әсәйем минән шуны көтә. Мин, бында ҡайтып, әле тере йөрөгән бынауы һуҡыр Сапый, Әхмәҙулла муллаларға беҙҙең көн килеүен раҫларға тейешмен!— тип ҡабатлап ҡуйҙы.

Кешеләр таралғас, Никита ла дуҫының башы осонда, фуражкаһын һалып, оҙаҡ ҡына баҫып торҙо.

«Их, дружок, браток! Ваҡытһыҙ һәләк булдыц. Кәмһетелгәндәргә көн тыуғас ҡына китеп барҙың. Беҙ һине онотмабыҙ, Байгилде. Һинең өсөн үсте аяуһыҙ ҡайтара белербеҙ беҙ... Иштуғаның үҙеңә оҡшаған. Кеше булыр. Ҡыҙҙарыңды ла онотмабыҙ... Урамда ҡалдырмабыҙ... Тыныс йоҡла, дружок!..»

Ҡорбандарҙы күмеп бөткәс, отряд арлы-бирле тамаҡ ялғап алды ла волость башҡармаһы урынлашҡан Яҡуп ауылына ҡарай юл алды. Иҫәнбәттән Шаһиморат та, ярлы-батрактан ҡулына мылтыҡ тоторлоҡ башҡа ирҙәр ҙә, ҡыҙылдар отрядына яҙылып, байҙарға, аҡтарға ҡаршы көрәшкә сығып китте.

## XIV

Сәрбиямал тиргәнеп-ҡарғанып тағы бер аҙ иланы ла Йәнеш менән Емеште өйгә саҡырып алды.

— Штобы, хәҙер үк өйөмдө йыйыштырығыҙ. Әгәр ҙә мәгәр мендәрҙәремдең бер генә бөртөк йөнөн әрәм итеп сүпләмәй ҡалдырпағыҙ, муйынығыҙҙы һындырырмын. Ишетһен ҡолағығыҙ!— тип бойороҡ бирҙе. Унан йәштәрен һөртөп, һыланып-һыйпанып тағы урамға сығып китте. Был ваҡытта Алтынбикә, Гөлйыһан, Запиралар ҙа ҡорбан байрамы көнөндәгеләй кейенеп-төҙәнешеп, йәш казактарҙың иғтибарын үҙҙәренә тартырға тырышып, көлә-шарҡылдай урамда йүгергеләп йөрөйҙәр. Ә Шәүрә, Сабира, Сәмиғә кеүек ҡыҙылдар яҡлы кешеләрҙең ҡыҙҙары, ҡайһы баҙға тешөп, ҡайһы ырҙынға һалам араһына инеп, йәшенеп бөткән, урамда ярлыялпынан бер кем дә ҡалмаған ине. Емеш менән Йәнеш эстәрендә ут янһа ла, уфтанмай, һуҡыранмай, Сәрбиямалдың бойороҡтарын еренә еткерер өсөн, ең һыҙғанып эшкә керешге. Эш иң элек мендәр мамыҡтарын бөртөкләп сүпләп алып, кәпрәндәрҙең йыртыҡтарын ямауҙан башланды. Был бик ваҡ, ентекле эш ине. Шулай ҙа ҡыҙҙар быны Сәрбиямал ҡушҡанса, бер генә бөртөк мамыҡты ла әрәм итмәй, таҙа итеп башҡарҙылар. Унан өйҙө йыйыштырып, иҙәндәрҙе йыуып тышҡа сыҡтылар. Бынан һуң Йәнеш аласыҡ алдында ҡатыҡҡа ҡушып болғатылған ҡыҙыл кирбес онтағы менән еҙ самауыр, еҙ тас, еҙ ҡомғанды ағартырға кереште. Ә Емеш унан аҙ ғына алыҫҡараҡ, үлән өҫтөнә ултырып, өҙөп-йолҡоп сәс тарарға тотондо. Унын, тулҡынлы ҡара сәстәре сикһеҙ ҡалын, тешһеҙ ағас тараҡ артыҡ тупаҫ, ә үтә күренмәле арыҡ ҡулдар хәлһеҙ ине.



Бер аҙҙан Сәрбиямал тағы әйләнеп ҡайтты. Унын ғәҙәтән тыш асыулы торһайған ауыҙыла, ларҫ-лорҫ баҫып килән бағана аяҡтары ла, утлы ҡорос саткылары сәсрәтеп торган сысҡан күҙҙәре лә балаларға ғәҙәттәгенән дә ҡурҡыныҫыраҡ тойолдо. Улар хатта, ни эшләргә белмәй, аяҡ үрә тооп баҫҡандарын тоймай ҡалдылар.

«Тағы ни генә бар икән инде?.. Нимәгә генә асыуланды икән тағы?!»

Уларға күнелдәрендә тыуған был борсоулы һорауға яуапты оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Сәрбиямал, һикерә баҫып, балалар алдына килеп туктаны ла, ҡулын бөйөренә таянып, ҡот оскос һалҡын һәм йәмһеҙ тауыш менән:

— Атайығыҙ дөмөккән!..— тип хәбәр итте. Ҡыҙҙар икеһе бер юлы ултыра төштө. Уларҙың баҫып торорға ла, бер һүҙ өндәшергә лә, хатта иларға ла хәлдәре етмәне. Сәрбиямал, балаларҙык ҡурҡыу һәм йөрәк өҙгөс ҡайғы менән үҙенә төбәлгән өнһеҙ күҙҙәренә ояттһыҙ ҡыуаныс менән туп-тура ҡарап, хәбәрен артабан дауам итте:— Кисә төндә дөмөктөргәндәр!.. Яҡшы булған. Бальшәүник булмаһын үҙе. Бальшәүник булып, донъяма баш булырға йөрөй ине. Бына баш булһын инде хәҙер!..

Емеш йөрәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Буштыр. Бушты һөйләйһеңдер, апай!.. Атайым үлмәҫ!..

Сәрбиямал иренен ерәнес торһайтып, шарҡылдап көлдө.

— Эйе, тере ҡалдырҙылар ти шуны! Ҡормош бай үҙ ҡулы менән һуйып үлтергән ти! Белдеңме? Бына әле генә Шымбай ағайымдан ишетеп ҡайттым. Һатыбал отрядындағы бер кеше килеп һөйләп киткән... Үлтергәндәр... Дөмөктөргәндәр!..

— Уй, атаҡайымды!.. Атаҡайымды!..— тип ыңғырашты ҡыҙҙар. Ә Сәрбиямал күптән уйланған иң ябай бер мәсьәләне хәл иткән һымаҡ:

— Инде барығыҙ, теләһәгеҙ ҡайҙа китегеҙ. Штобы минең тупһама аяҡ баҫаһы булмағыҙ! Миңә бальшәүник балалары кәрәкмәй. Һеҙҙен. өсөн тағы мендәрҙәремдең эстәрен аҡтартыр хәлем юҡ,— тип еҫтәне. Унын йөҙө таш кеүек йәнһеҙ, күҙ ҡарашы йыртҡыстарҙыҡынса аяуһыҙ ине.

Тик ҡайғынан алйыған ҡыҙҙар ғына быны абайларлыҡ хәлдә түгелдәр ине хәҙер. Улар баштарына тимер суҡмар менән һуҡҡан кеүек иҫәңгерәп, йәшһеҙ күҙҙәрен ошо хәтле ҙур ҡайғы алып килеп үҙ еҫтәренә ауҙарған үгәй әсәйҙәренә һүҙһеҙ текләп, ҡатып торалар ине. Сәрбиямалға үҙ теләгән уларға, ғәҙәттәгесә, ҡул менән аңлатыуҙан башҡа сара ҡалманы, Ул һүҙҙән хәрәкәткә күсте. Һәм бер ташланыуҙа ҡыҙҙарҙын, сәстәренән маткып тотоп алып, ҡапҡаға хәтле һөйрәп алып килде лә икеһен бер юлы урамға ырғытты:

— Барығыҙ, теләһәгеҙ ҡайҙа китеп дөмөгегеҙ!.. Миңә кафыр балалары, бальшәүник балалары кәрәкмәй!..

Ҡыҙҙар үҙ хәлдәренең ни тиклем ауыр булыуына хәҙер генә төшөндөләр. Йәнеш, ҡайғынан быуындары тотмай бащлаған аяҡтарын бөкләп, ситән буйына ултыра төштө лә, йөрәк өҙгөс тауыш менән:

— Уй алла, инде беҙ ҡайҙа барабыҙ, ни эшләйбеҙ, һылыу, Емеш! Атайым үлгән бит!..— тип сеңләп илап ебәрҙе. Емеш бер ҡулына кисә Шәүрә биргән ҡумыҙҙы, икенсеһенә сәс тарап ултырған теге тешһеҙ тараҡты тотҡан килеш, мәрмәр һын шикелле ҡатып, өнһөҙ-һүҙһеҙ уның янында баҫып торҙо. Үҙ артынан эйәреп урамға сыҡҡан Мыраубайҙың, уны йыуатырғамы, әллә уға иркәләнергәме теләп, ышҡыныуын да, аяҡ бармағынан йомшаҡ ҡына тешләп тартҡылауын да тойманы. Әхирәтенең ҡапҡа төбөнә сығыуын күтөп, күҙәтеп кенә торған Шәүрәнен. йүгереп килеп:

— Әхирәт, Ёмеш!.. һиңә ни булды? Ниңә өндәшмәйһең? Ниңә Йәнеш илай? Әллә атайымдарға бер-бер хәл булғанмы? Берәй хәбәр ишеттегеҙме әллә?—тип һөйләнеүен дә ишетмәне. Ахыр, Шәүрә лә моңайып тынып ҡалды. Улар яурындарын яурынға терәп, йәшле күҙҙәрен ҡайҙалыр алыҫҡа текләп, ситән буйында өнһөҙ-һүҙһеҙ баҫып торҙолар. Ә Йәнеш һаман көйләй-көйләй үкһене лә үкһене.

## XV

Волость башҡармаһы урынлашҡан Яҡуп ауылында бөгөн иртәнсәктән алып ғәйәт ҙур йәнлелек хөкөм һөрә. Бында бөтә тирә-яҡтан байҙар, сауҙагәрҙәр, бай табанын ялап көн күреүселәр йыйылған. Урядник Алексей ҙа, Сергей Хитров та бында. Федька Рябой ҙа үҙенен бығаса большевиктар, ҡыҙылдар исеменән халыҡты ҡырып йөрөгән талаусылар бандаһы менән хәҙер бында килеп урынлашҡан. Уларға байрам. Аҡтар, чехтар киләләр. Хәҙер уларға үҙ маҡсаттарына ирешеү юлында йәшеренеп түгел, ә асыҡтан-асыҡ хәрәкәт итер саҡ етте. Феропонт Хитровҡа ла хәҙер, волость башҡарма комитетынын. председателе булып, төрлө төҫкә инеп, этләнеп ултырырға тура килмәйәсәк. Ул хәҙер волостың тулы власлы хужаһы, старостаһы Феропонт әфәнде Хитррвҡа әйләнәсәк. Был маҡсатҡа тиҙерәк ирешер өсөн, улар инде аҡтарҙың килеп етеүен дә көтмәй, урындарҙағы совет активтарын асыҡтан-асыҡ ҡыра башларға ҡарар иттеләр. Был эшкә етәкселек Федька Рябойға тапшырылды. һатыбал бандиттарының ҡыйралыуы, эшселәр отрядынын, бында етеп килеүе хаҡында әлегә бер ни ҙә белмәгән Феропонт Хитров, баҙар майҙанында, теге ваҡытта Никиталар, Тимербайҙар баҫып телмәр һөйләгән мискәгә менеп, ерән мыйығын өҙгөләй-йолҡҡолай сәрелдәп ҡысҡырынды.

— һатыбалдың батыр һуғышсылары бөген тендә Илсеғол большевиктарын ҡырып һалды. һатыбал хәҙер ошо данлыклы отряды менән бында әйләнеп ҡайтасаҡ. Улар ҙа, федька, һинең отрядың менән бергә изге эшкә тотонасаҡ! Байҙар, ағай-энеләр, көс тә, алла ла беҙҙең яҡта!..

Каширин отряды волость башҡармаһын ошо шаулы тантана барған саҡта аңғармаҫтан килеп баҫты. Федька Рябойҙың асыҡ һуғышҡа өйрәнмәгән ҡоралды бандаһы әҙ генә ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡараны ла тырым-тырағай ҡаса башланы. Ләкин эшсе отрядынын мәргән пулялары уларҙы бөтә ерҙә лә ҡыуып етте.

Күптәр баҙар майҙанында үк ятып ҡалды. Никита менән Иштуған Федька Рябойҙы Батыйма тутайҙың иҙән аҫтына ҡасҡан еренән һөйрәп сығарҙылар. Тик иҫерек Апанас ҡына ҡайҙалыр ҡасып юғалды.

Отрядтын, революцион Советы урядник Алексей, Феропонт Хитров, Федька Рябойҙы атырға хөкөм итте. Хөкөм еренә еткерелгәс, отряд ашығыс рәүештә Илсеғолға ҡарай юлға сыкты. Сөнки разведчиктар унда аҡтар булыуы тураһында хәбәр алып килде.

Аҡтар Илсеғолға килеп ингәс тә, үҙҙәрен эҙәрләгән эшселәр отрядының бөгөн иртән килеп етерен хәтерләп, ашығыс рәүештә оборонаға әҙерләнде. Ауылдың яҡ-яғына окоптар ҡаҙылды. Мәсет манараһына хәтле пулемет мендереп ултырттылар. Бер өҙлөкһөҙ ары саптылар, бире саптылар. Собхан старшина, Ғаббас мулла, Шымбай каштандарға хәтле ниҙер һөрәнләп урамда сабышып йөрөнөләр. Бына көн кисекте, Сағылтау артынан ярҙай емерелеп аҡһыл ҡара болот ҡалҡып сыҡты. Бик ҡаты күк күкрәне, дәһшәтле йәшен атҡылары офоҡто арҡыры-буй йыртҡылай башланы. Әйтерһен дә бөтә донъя, бөтә күк йөҙө ҡапыл һуғышҡа йәки урамға ҡыуып сығарылған ҡыҙҙар еҫтөнә ауып төшөргә әҙерләнде. Ләкин Емештәр барыбер урындарынан ҡуҙғала алманы. Уларҙың аталары юҡ, аталары үлтерелгән. Улар өсөн хәҙер ошо ҡайғынан башҡа донъяла бер нәмә лә йәшәмәй ине.

Ҡара болот һаман киңәйә, ҡуйыра, күк йөҙөн тотош ҡаплай барҙы. Күк күкрәү, йәшен йәшнәү көсәйгәндән-көсәйҙе. Элек Емеш йәшендән, күк күкрәүҙән бик ҡурҡа, йәшен ваҡытында өйҙөң ҡараңғы мөйөшөнә ҡасып, алама юрғанына төрөнөп, ҡалтыранып, белер-белмәҫ көйө *әллә* ниндәй доғалар укып ултыра торғайны. Ләкин ул хәҙер, гүйә, йәшенде ишетмәне лә, күрмәне лә. һаман шул урында һүҙһеҙ ҡатып тора бирҙе. Айырылмаҫ дуҫы Шәүрә лә унын. янында ине. Хәҙер Шәүрәнен дә шат, шаян күңеле бойоғоп, ниндәйҙер ауыр ҡайғы һиҙенеп, тынып ҡалғайны.

Бына уларҙың тап түбәһенән генә бик ҡаты йәшен дөбөрләп уҙҙы. Уға ҡайҙандыр бик яҡындан, ерҙән:

— Тып-тып-тып! Быт-быт-бытыр-р-р!— тигән тауыштар ҡушылды.

— Әллә ошондай саҡта Сәрбиямал инәй он алабы ҡағып маташамы икән?—тигән булды Шәүрә.— Оно бөткәндер шул...

Емеш быны ла ишетмәне. Ә күк күкрәүгә ҡушылып, ерҙә лә ниндәйҙер гөрһөлдәү, бытылдау, тыпырлау һаман йышая, яҡыная барҙы. Уға:

— Зый-зый-зыйт!.. Зый-зый!— тип, әсеһыҙғырыу, сыйылдауҙар ҙа өҫтәлде. Кемдәрҙер йүгерештеләр, шашынып ҡысҡырыштылар, йығылдылар. Был — һуғыш ине. Граждандар һуғышынын, тәүге саткылары Илсеғолға ла килеп еткәйне.

Оҙаҡламай ауылдың уң яғындала, һулаҡайҙа ла уһылдап снарядтар ярыла, үрҙә, түбә өҫтөндә шрапнелдәр шартлай, унын, тос йәҙрәләре тыпылдап ергә яуа башланы. Аҡтар, атлыһы атына атланып, йәйәүлеһе йүгереп, ауылды ташлап ҡасырға тотондо. Бына теге мәсет манараһынан өҙлөкһөҙ бытылдап, ут яуҙырып торған пулемет янындағы һалдат та ҡапыл сайҡалып китте лә, манара эсенә ауып, юҡ булды. Пулемет тынды. Собхан старшина менән Ғаббас мулла, кырандасҡа арҡыс-торҡос һандыҡтар тейәп, ҡатындарын, ҡыҙҙарын ултыртып, аттарын сыбырткылай-сыбырткылай ауылдан сығып киттеләр. Әхмәтша ҡараҡ та һыбай ҡайҙалыр китеп юғалды. Бүтән кешеләр ҙә, ғүмерҙәрендә ишетмәгән был гөрһөлдәү, шатырлауҙан ҡурҡып, ни эшләргә белмәй, урамға йүгереп сыҡтылар ҙа, ары-бире йүгереп, аяҡ аҫтында буталып йөрөнөләр.

Бына яҡында ғына:

— Яр аҫтына йәшенегеҙ, яр аҫтына!..— тигән борсоулы тауыш яңғырап китте.— Емеш, Шәүрә, Йәнеш, әйҙәгеҙ яр аҫтына!..

Ике ҡыҙын эйәрткән Баҙыян еңгә Оло Эйек яғына йүгереп бара ине. Ул арала, үҙенән ҙур төйөнсөк күтәреп, Сәрбиямал да өйөнән йүгереп сыҡты. Унан әллә ниҙәр ҡысҡыра-ҡысҡыра Баҙыян еңгәләр артынан йүгерҙе. Хатта бығаса бер ни күрмәй, бер ни ишетмәй үкһеп илапултырған Йәнеш тә улар артынан эйәрҙе. Йылға буйына етеп текә яр аҫтына төшкәс, ғәҙәт буйынса, һаман шул үҙенең үгәй әсәһе янына һыйынырға тырышты. Сәрбиямал был ваҡытта яр аҫтына, балсыҡ алыу өсөн ҡаҙылған ҙур ғына соҡор эсенә инеп йәшенгәйне, унын янында Йәнеш хәтле йәнә бер-ике кеше һыйырлыҡ урын бар ине әле. Ләкин ул Йәнеште этәреп сығарҙы.

— Кит бынан, теләһәң ҡайҙа йәшен! Штобы күҙемә күренмә!..

Йәнеш илай-һыҡтай, йәшенер урын эҙләп, ар.ы йүгереп китте. Шул ваҡыт унын тап түбәһе өҫтөндә генә ҡолаҡ ярғыс шартлау яңғыраны. Шрапнель йәҙрәләре һыуға һибелде...

Ҡайғынан ҡуркыуҙы бөтөнләй оноткан Емеш менән бөтәнәмәне лэ ҡыҙыҡ, ирмәк кенә күреүсе монһоҙ Шәүрә генә һаман шул баҫкан ур.ындарында, ситән буйында тора бирҙе. Әйләнә-тирәлә уларҙан башҡа бөтә кеше үҙенсә айҡалды-сайҡалды, ниҙер эшләне, нимәлер ҡысҡырҙы. Хәйер, был сыр-сыуға иҫе китмәгән тағы бер кеше бар ине. Был — урыҫ Иҙрис. Ул да был дөйөм сыуалышҡа ҡатнашманы. Собхан старшиналар ҡасҡас, шар асыҡ ҡалған ҡапҡанан алпан-толпан баҫып килеп сыҡты ла, ҡулындағы әлеге балалайкаһын һуҡҡылап, иҫерек сағындағы кеүек сайҡалып, һөйләнеп тик торҙо. Ул ахыры үҙенә бик һуңлап килгән был ирек көнөн шулай илай-көлә, йырлай-һөйләнә каршы ала ине.

Тора-бара ауылды аҡтар ҙа, байҙар ҙа ташлап китеп бөттө. Атыш ҡайҙалыр алыҫта, ауылдан аша ситтә ишетелә башланы. Иҙрис ҡарт ашығып кире инеп китте. Унан, күп тә тормай, ҡыуал осона тағылған ҙур ғына ҡыҙыл сепрәкте баш осона күтәреп, ҡайтанан сыҡты ла йәштәрсә яңғырауыҡлы, ап-айыҡ тауыш менән:

— Йәшәһен ҡыҙыл ғәскәрҙәр!.. Беҙҙе ҡотҡарыусы батыр ҡыҙыл ғәскәр йәшәһен!— тип ҡысҡырып ебәрҙе. Кешеләр, йәшенгән ерҙәренән сығып, берәм-берәм унын янына йыйылды. Бына иң элек Шәүрәнең әсәһе Зөбәржәт еңгә сыҡты. Унын, артынса Таиба әбей, кескәй генә төйөнсөктәй улын күкрәгенә ҡыҫып, бәхетле йылмайып, Бибеш, Хисбулла, яр аҫтынан йүгереп ҡайтып килгән Баҙыян еңгә, Сабира, Сәмиғәләр, тағы башҡа бик күп ҡатын-ҡыҙ, бала-саға ҡыҙыл флаг аҫтына йыйылды. Урамды ҙур ғына халыҡ төркөмө барлыҡҡа килде. Шатлыҡлы көлөү, ҡыуанныслы һөрәнләү яңғыраны.

Аҡтарҙы ҡыуып, шаулап үтеп торған йылғыр һыбайлыларға, ҡулын күҙ өҫтөнә ҡуйып оҙаҡ ҡына текләп торғас, Таиба әбей, ауыр көрһөнөп, күҙенә килеп тығылған йәштәрен таҫтар осо менән һөртөп алды.

— Йә, ошондай ҡыуаныслы көндә Хамматым да өйҙә юҡ бит, исмаһам. Ошо көндө көтә ине... Ошонон өсөн тартыша-көрәшә ине бит ул. Сәлимә киленде әйтәм, мәрхүмкәй, дошман хөсөтөнә бирелеп, йығып һалып ҡуйҙы шул ыласынымды... Үҙе лә әрәм булды... Эй-й, балалар!.. Исмаһам, Закирым һау булһа ярар ине. Уларҙы ла һатыбал ҡырған икән, тип һөйләйҙәр бит, я алла!..

— Әйтмә лә,— тине Баҙыян еңгә лә, ауыр көрһөнөп.— Был шатлыҡты бик күптәр күрә алмаҫ әле, еңгә... Минен, бейем, ошо Собхан старшиналарҙан бер үс алыр көндө көтмәгәйнеме ни, мәрхүм?! Эй-й!.. Тимербай һуң? Ул да юҡ бит бына... Кем белә, үлеме-тереме улар?..

Эшсе отряд аҡтарҙы ҡыуып, ашыға-саба һаман урам арҡыры үтеп торҙо. Ошо ваҡыт һеләүһен шикелле йомшаҡ баҫып, Шымбай каштан да ҡыҙыл флаг аҫтына килеп баҫты.

Әхирәтен ташлап китә алмай һаман ситән буйында тапанып торған кескәй Шәүрәгә хәтле, быға аптырап:

— Атаҡ-атаҡ!..— тип ҡысҡырып ҡуйҙы.— Ҡара әле, анауы һөмһөҙҙө!... Әсәйем уны, ул бит Собхан етаршинаның уң ҡанаты. Шуға ярайым тип, ул бөтә һәйбәт кешенең башын һатып бөттө, ти ине. Ә ул, старшинаһы менән бергә китмәй, ҡайҙа кешеләр араһына инеп торған булды!.. Вәт һин уны, ә? Эйе бит, әхирәт!..

Емеш һаман өндәшмәне. Уға хәҙер барыбер ине. Уны хатта ҡыҙылдарҙың килеүе лә, аҡтарҙың ҡасыуы ла ҡыуандырмай ине инде. Увың башында тик бер генә уй: «Атайым үлгән... Атайымды үлтергәндәр!.. һатыбал минен атайымды үлтергән...»— тигән йөрәк өҙгөс ауыр, әсе хәкһкәт кенә йәшәй ине хәҙер.

Ул арала ҡыҙыл байраҡ аҫтына килеп баҫыусылар һаман арта барҙы. Бына әкрен, ҡыйыуһыҙ атлап Өммөгөлсөм дә Таиба әбей янына килеп туҡтаны. Ҡаты бошоноп:

- Бейем, минең Байрасым... Байрасым ниңә ҡайтманы икән һуң, ә?.. Бынауы аҡтарға тура килеп харап булып ҡына ҡуймаһа ярар ине...— тип һөйләнде. Ә сабырһыҙ ҡарашы, йәшле күҙҙәре Байрас өсөн генә түгел, Хаммат өсен дә ҡаты бошоноуын һөйләп тора ине.

Байрас ауылға аҡтар килеп ингән көндө уларҙан саҡ ҡына алда, ат егеп, Ташлыға атаһын больницанан алып ҡайтырға киткәйне. Иҫәп буйынса улар күптән өйҙә булырға тейештәр ине. Ләкин ҡайтманылар. Өммөгөлсөм был һуңғы өс төндө керпек ҡаҡмай үткәрҙе. Ул, берҙән, Байрасы өсөн хәүефләнһә, икенсенән, Хаммат менән үҙ араһындағы мөнәсәбәттен, бьтан ары нисек булыу мәсьәләһе лә йөҙәтә ине.

«Хаммат Сәлимәнең буш өйөнә ҡайтып тешөрмө? Әллә унын яньшамы? Нисек кенә итһән дә бында ике бала бар бит. Балаларҙы бик ярата бит ул... Әгәр бында ҡайтһа, уны нисек ҡаршыларға. Ҡалай итеп, артыҡ ҡыуанғанды, һағынғанды күрһәтмәҫкә? Үҙ-үҙемде онотоп, унын күкрәгенә ташланып, илап ебәрмәһәм ярар ине... Эй алла, ҡайҙан миңә ундай ҡатылыҡты алырға? Ул мине яратмай, ул мине ташланы. Ә мин, исмаһам, уны саҡ ҡына онота ла, уға асыулана ла алманым бит... Хәтер ҡалыуҙы ла белмәнем бит, исмаһам... һаман ратҡандан-ярата ғьша барҙым... Йә, шулай булғас, ул ниңә минең ҡәҙеремде белһен? Ниңә ратһын?.. Ә мин һаман өмөт иттем... һаман кеттем... Эй алла, ошо түҙемлегем өсөн генә булһа ла һин миңә берәй саҡ бәхетемде кире ҡайтарырһыңмы икән?.. Яратмаһа ла, ул тиклем өҙөлмәһә лә янымда булһын ине... Мин уны үҙем генә яратып, үҙем генә ҡәҙерләп торорға ла риза булыр инем... Йә инде, оятһыҙ, алйот, мин ни уйлайым?! Яратмаған кеше менән тороу уға еңел булырмы ни? Ул һейөп йәшәргә хаҡлы түгелме ни?..»



һуңғы көндәрҙә Өммөгөлсөмдөң мейеһе ошондай уйҙарҙан әйләнеп сыға яҙҙы. Хамматтың ҡайтыр көнө яҡынлашҡан һайын, унын башындағы был уйҙар киҫкенләшә генә бара ине.

«Нисек кенә булһа ла Хаммат йәһәтерәк ҡайтһын да, нимә генә булһа ла булып ҡуйһын ине инде. Юҡһа был өмөт мине аҡылымдан яҙҙырыр»,— тип уйлай ине ул. Әле лә ул үҙе урамда, кешеләр араһында, аҡтарҙың ҡасҡанын, ҡыҙылдарҙың ауылға ингәнен ҡарап торһа ла, күңелендә тик ошо уйҙар ғына әйләнде, Хаммат менән Байрастың ҡайтып инеү минутын көтөп, йөрәге ярылырҙай булып тибә ине. һәм бына ҡапыл унын төҫө ҡасып, башы әйләнеп китте. Ул ҡалтыранған ҡулдары менән янында торған Таиба әбейҙен беләгенә тотондо:

— Бейем, ҡара әле... Анауы беҙҙең ат түгелме һун.?..

Ысынлап та, ҡыҙылдар үтеп торған тыҡрыҡтан, атын етеҙ елдереп, урамға Байрастар ҙа килеп ингәйне.

— Эй-й!.. Аһа-а!.. Шулар ҙа баһа!.. Эй, балаҡайҙарым!.. Ҡолонсаҡҡайҙарым!..

Таиба әбей, ҡартлығын да онотоп, уларға ҡаршы йүгереп китте. Унан, ниҙер иҫенә төшәп, уйланып тора бирҙе лә, кире әйләнеп, Өммөгөлсөмдөн, еңенән тартты:

— Әйҙә, килен, балаларҙы ҡаршы алайыҡ!..

Ә Өммөгөлсөмдөн, урынынан ҡуҙғаларға ла, берәй һүҙ өндәшергә лә хәле юҡ ине. Таиба әбей:

— Әйҙә, тим, алйот!— тип, унын еңенән тағы бер тартты ла, үҙе бар көсөн йыйып, уландарына ҡаршы йүгерҙе.

Байрас урам уртаһына еткәс, дилбегәһен тарта биреп, икеләнеп ҡалды. Хужаһынын ни ҡушҡанын аңламай, аптырап ҡалған ат та ҡайҙа табан атларға белмәй аушанлап ҡуйҙы.

«һине ҡайҙа алып барырға?..»— тип аңланы Хаммат быны. Ул кузлала ултырған улынын арҡаһынан ҡағып ҡуйҙы.

— Хәҙергә ҡәртәсәйендәргә алып барып төшөр, улым...

Байрас атын Таиба әбейҙәргә табан борҙо. Хаммат, ҡағыҙ кеүек ап-аҡ ҙур усын юғары күтәреп, бәхетле, киң йылмайып, халыҡ төркөмөн сәләмләп уҙҙы.

— Еңеү менән, үҙебеҙҙекеләр килеү менән ҡотлайым, туғандар!..

Ҡыҙылдар, ура ҡысҡырып, дөбөр-шатыр һаман үттеләр ҙә үттелләр. һыбайлылар ҙа, йәйәүлеләр ҙә, арбалылар ҙа бер өҙлөкһөҙ ағылып ҡына торҙо. Тора-бара ҡайһы берәүҙәре ауылға боролоп инә, ҡыҙыл флаг күтәреп, ҡаршылап торған төркөм янына килеп күрешә, ҡосаҡлаша башланы. Бьшар араһында Закир, Тимербай, Хәлим ағай һәм Никита ла бар ине. Бик һәйбәт ҡара юрғата атланған тәпәш буйлы,

киң яурынлы йәш бер һалдат аттан һикереп төштө лә, Зөбәржәт еңгәнең ҡосағына ташланды.

— Ағайым!.. Ағайым!.. Ысын, Әхәт ағайым!—тип ҡыс ҡырып ебәрҙе Шәүрә.— Ағайым ҡайтты, вәт!,.

Ул, уҡ кеүек атылып, атлылар янына йүгерҙе. Ошо ваҡыт йәш кенә ике һалдат, аттарын йәнәш юрттырып Емеш янына килеп туҡтанылар ҙа тып-тып итеп ергә һикереп төштөләр. Ҡулына ҡыҙыл тәреле аҡ таҫма бәйләгән, нәҙек билен яҫы ҡайыш менән ҡыҫып быуған берәүһе, аттарҙы теҙгененән тотоп, тороп ҡалды. Ә ҡара күн тужурка кейгән, ялтырап торған ҡылыс, мылтыҡ таҡҡан ҙур кәүҙәле икенсе бере һе, уң ҡулы менән ҡылысын артҡа этәрә-этәрә, Емеш янына йүгереп килде.

— Емеш!.. һылыу!..

Емеш бер һүҙһеҙ артҡа сигенде.

— һылыу, тим, ниһәл? Ниңә өндәшмәйһен? Танымайһыңмы әллә ағайыңды?!

Иштуған Емештең ҡаршыһына сүгәләп:

— һылыуым минең! һиңә ни булды?!

Ул арала Айһылыу ҙа, аттарын ситән ҡаҙығына бәйләп, Емеш янына килеп етте. Ҡояшҡа янып, елгә елһеп, баҡыр төҫөнә ингән йөҙөндә аҡ булып күренгән йыш тештәрен йылтыратып, күҙ сағылдырғыс матур итеп йылмайҙы.

— Шәпме, бикәс?!

Шул ваҡыт Емештең күп кисергән кескәй күкрәгендә ятҡан күтәргеһеҙ ауыр ҡайғы менән көтөлмәгән ҙур шатлыҡ икеһе бергә килеп бәрелештеләр ҙә вулкан булып тышҡа атылып сыҡтылар. Емеш ғүмерендә тәү тапҡыр, балаларса ихласлаҡ менән ҡысҡырып илап ебәрҙе.

— Ағай!.. Ағайым!.. Еңгәм!..

Бына инде тирә-яҡта атыш та тынды. Ошоғаса яр аҫтында ултырған үтә һаҡ кешеләр ҙә аллы-артлы өйҙәренә йүнәлде. Бына баяғы үҙенән ҙур төйөнсөгөн саҡ күтәреп, ах та ух килеп, Сәрбиямал да ҡайтып инде. Ҡапҡа төбөндә Емеште һөйөп, йыуатып маташҡан Иштуған менән Айһылыуҙы күргәс, ғәжәп ҡыуанған кеше булып, төйөнсөгөн ергә ырғытып, ҡосағын йәйеп уларға ташланды:

— Атаҡ! Ата-аҡ!.. Былар кемдәр тип торам. Үҙебеҙҙең улыбыҙ менән киленебеҙ ҙә баһа!.. Эй-й!.. Әйҙүк!.. Әйҙәгеҙ, ейгә рәхим итегеҙ, ҡарлуғастар!..— тип, иҫ киткес алсаҡлыҡ менән тәтелдәп китте. Хатта һаман илауҙан тымып етә алмаған Емештең башынан һыйпап, арҡаһынан һөйөп тә ҡуйҙы.— Ата-аҡ!... Емеш, ҡыҙым, ниңә илайһың! Шатлыҡҡа илайҙарҙыр шул, иҫәүән!.. Ҡыуан!..

Иштуған хафаланып тирә-яҡҡа ҡаранды:

— Йәнеш ҡайҙа? Йәнеш һылыуым ҡайҙа минең?... Ниңә ул күренмәй? Әллә...



Сәрбиямал ҡапыл, ҡаты ҡайғырып китте, иламһырап, күҙҙәрен осо менән һөртөп алды:

— Аһа, уны ни, бахырҙы... тегендә, яр буйында, башына йәҙрә тейеп үлтерҙе лә ҡуйҙы бит... Әйтеп торам, ин, яр аҫтына төпкәрәк инеп, үҙ яныма ғына ултыр, тип торам... Тынламай, ҡарышып яр ситендә һерәйеп баҫты ла тик торҙо... Ә мин...

Иштуған:

— Бәлки ул терелер!.. Бәлки уға тиҙ ярҙам кәрәктер!— тип, ҡысҡырып-ашығып, Оло Эйек яғына ташланды. Айһылыу менән Емеш тә унын, артынан йүгерҙе. Сәрбиямал, ҡалын иренен мыҫҡыллы турһайтып, күҙҙәренән йөрәк өшөткөс уҫал оскон сәсеп, улар артынан бер аҙ ҡарап торҙо ла, төйөнсөгөн ерҙән тырнап алып, өйенә инеп китте:

«Тере ти... Бүле тейгәс, тере ҡалдырҙы ти уны, бешмәгәнде...»

Йәнеш яр аҫтында, йылғаның көслө тулҡындары бәреп, көмөш саткылар сәсрәтеп уйнаған ҡырсын таштары өҫтөндә кескәй генә булып ята. Оло Эйек тулҡындары, ярыша-ярыша унын туҙған сәстәрен йыуа-йыуа, йылға эсенә алһыу ҡан таҫмалары һуҙа ине. Иштуған йән атып йүгереп килгән ыңғайға һеңлеһен күтәреп алды. Йомолған күҙҙәренә, арыҡ, аҙаплы йөҙөнә текләп ҡараны.

— Йәнеш, һылыу!

Йәнештең аяҡ-ҡулы еп кеүек һалынып төштө. Ул һыуынырға ла, ҡатырға ла өлгөрмәгәйне әле.

— Апай!.. Уй, апайымды!..—тип ҡысҡырып иланы Емеш.— Йәнеш апайымды!..

Ул хәҙер, бер илай башлағас, күҙ йәшен дә тыя алмай, ғәҙәттәге тимер түҙемлелегенә ҡайта ла алмай ине.

Иштуған менән Айһылыу Йәнештең йөрәген тыңлап, төрлөсә ҡуҙғатҡылап, ҡул тамырҙарын тотҡолап ҡаранылар. Ләкин һуң ине инде. Йәнеш, башына килеп тейгән шрапнель ярсығынан, шул минутта уҡ йән биргән һәм, үҙенең күбәләк ғүмерендәй ҡыҫҡа, аҙаплы йәшәү осоронда беренсе тапҡыр тыныслап, мәңгелеккә йоҡлап киткәйне...

— Я хоҙай!.. Тағы бер ҡорбан!.. Йә, ни өсөн?.. Ҡасан сиге булыр быны́ң?..

Иштуған һеңлеһенең йәш бала шикелле кескәй, арыҡ кәүҙәһен ҡәҙерләп күкрәгенә ҡыҫты ла өнһөҙ-һүҙһеҙ ауыл яғына табан атланы. Айһылыу менән Емеш илай-һыҡтай унын, артынан эйәрҙе.

Бая көнсығыштан, ҡыҙҙар тауы артынан аҡһыл ҡара булып ҡалҡып сығып та, ауылды ситләтеп үтеп киткән йәшенле ямғыр ҡайтанан урап килер, дөһөрләп-шатырлап ҡойоп яуырға кереште. Әйтерһең, тәбиғәт тә бөгөн кешеләр менән бергә илай-һыҡтай, ҡыуана-һөйөнә, ер өҫтенән бөтә бысраҡты тиҙерәк йыуып ташларға ашҡына ине.

1956—1959

## ҮТКӘН ЮЛДАР, УҘҒАН ЙЫЛДАР...

### 1. БАЛА САҠ

I

Бала саҡ... Фәжиғәле тип әйтерлек ҡырыҫ та, әкиәт кеүек мауыҡтырғыс та, йыр һымаҡ моңһоу ҙа булды минең бала саҡ. «Кәмһетелгәндәр» романын уҡыған кеше Емеш тигән кескәй ҡыҙ менән таныш инде. Емештең тормошо — ул минең бала сағым. Әлбиттә, ул бында, әҙәби әҫәргә хас рәүештә үҙгәртеп, дөйөмләштереп алынған. Шуныһы факт — бында уйлап сығарылған деталь юҡ. Бөтәһе лә курелгән, кисерелгән. Шулай ҙа ул тотошлай минең бала саҡтың кусерməhe лә түгел. Әгәр мин бала саҡта баштан үткәндәрҙең бөтәһен дә шул килеш ҡағыҙға күсерһәм, был, берҙән, әҙәби әҫәр була алмаҫ ине. Икенсенән, быға куптәр ышанмаҫ: «Тормошта булмай торған хәл был»,— тип раҫлаусылар ҙа табылыр ине.

Ғөмүмән, «Кәмһетелгәндәр»— ул автобиографик роман. Байгилделәр ғаиләһенең нигеҙендә беҙҙең. ғаиләнең яҙмышы ята. Шул уҡ ваҡытта ул, бая әйткәнемсә, беҙҙең ғаилә тормошоноң теүәл кусерməhe лә түгел. «Кәмһетелгәндәр» дейөмләштерелгән әҙәби образдарҙан тора. Әлбиттә, мин бында бигерәк тә төп образдарҙы һүрәтләүҙә үҙ ғаиләбеҙҙең. тормош хәлен бик ныҡ файҙаланғанмын.

Дөрөҫөн әйткәндә, мин бала сағымды иҫкә алырға һис тә яратмайым. Кемдең, һис юғы уйҙа ғына булһа ла, яҡтынан ҡаранғыға ҡайтҡыһы килһен?! Ләкин утелгән оҙон юлдың тәүге һуҡмаҡтары, уҙған шаулы йылдарҙын, төп сығанаҡтары шунда — бала саҡта ята бит. Улай ғына ла түгел, алда үтәһе юлдарға, уҙаһы йылдарға әле булһа шауҡымы ҡағылып ята ул бала саҡтың. Шулай булғас, үҙенден. тормош һәм ижад юлың хаҡында һөйләргә йыйынғанда, бала саҡты иҫкә алмай уҙырға мемкинме һуң? Әлбиттә, юҡ.

Борон беҙҙең башҡорт халҡында бер һәйбәт ғәҙәт булған: үҙен хөрмәт иткән кешемен тигән һәр бер кеше үҙ тоҡомон ете быуынға тиклем хәтерләргә тейеш. Йәғни ата-бабаларының кем, ниндәй кеше булыуын, уларҙың исемдәрен, кәсептәрен, гөрөфғәҙәттәрен, донъяға, тормошҡа ҡараштарын белергә; батырлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм тура һүҙлелек менән тоҡомға халыҡҡа эшләгән бөтә яҡшылыҡтарын түкмәй-сәсмәй быуындан быуынға еткерергә; һәр бер йәш быуын, үҙ тоҡомоноң бөтә булған яҡшы яҡтарын йыйып, шуға торош итерлек булып үҫергә тейеш булған. Шуныһы ҡыҙыҡ: бер кеше лә үҙ тоҡомонда булған кире яҡты хәтерләмәгән. Бөтә ата-бабалар ҙа тик иң яҡшы яҡ менән генә иҫкә алынған. Тимәк, насар тоҡом булмаған. Әгәр инде шундай идеаллаштырылған яҡшы тоҡомдан берәй насар кеше килеп сыға икән, уны уҙ тоҡомо ғына түгел, бетә ауыл ғәйеп иткән.



...Яҡшы атанан яман тыуған,
Тип ғәйепләрҙәр инде...—

тигән йырҙы ла, күрәһең, халыҡтың шелтәле ҡарашын тойған шундай кешеләр йырлағандыр.

Мин үҙем, үкенескә ҡаршы, тоҡомдо ете быуынға хәтле белеүсе кешеләргә инмәйем. Хәйер, мин генә түгел, минең атай-әсәй ҙә ундайға инә алмаған. Сөнки беҙҙең тоҡом, бигерәк тә атай яғынан, бик иртә үлеп торған. Балалар бабаларын түгел, үҙ ата-әсәләрен дә саҡ-саҡ ҡына хәтерләп үҫкән. Ә бына хәҙер, Совет власы шарттарында, беҙҙең тоҡомдоң ла ғүмере оҙайҙы. Беҙ, бик йәшләй етем ҡалған биш бала, атай-әсәйҙең ғүмерен икеләтә йәшәп киләбеҙ инде. Ин. кеселәре булған мин дә инде әллә ҡасан уҡ атай-әсәйҙен, йәшен уҙып киттем.

Мин, тоҡомдо ете быуынға хәтле хәтерләмәһәм дә, үҙ хаҡымда һөйләй торған һүҙҙе ин. элек атай-әсәйҙән башларға уйлайым әле. Сөнки баланың кем, нисек булыуында ата-әсәнең йоғонтоһо, әлбиттә, ҙур. Шулай булғас, үҙ хаҡында һөйләрҙән алда, атай-әсәйендә иҫкә алмай үтеу һис тә мөмкин түгел.

II

Мин 1908 йылдын, 2 ғинуарында элекке Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Бөрйән-Ҡыпсаҡ волосы, һуңғы административ бүленеш буйынса Зиянчура районы Төйөмбәт ауылында (был ауылды ул яҡта халыҡ үҙе Байыулы йәки Байыуландары тип йөретә) ерһеҙ-һыуһыҙ ярлы бер ғаиләлә алтынсы бала булып донъяға килгәнмен.

Минең әсәйем Фәғилә шул уҡ Ырымбур губернаһы, Икенсе Ҡара-Ҡыпсаҡ волосы Сапыҡ ауылында һуҡыр Ғумәр ҡарттың ҡыҙы булған. Әсәйем бик йәштән быуындар һыҙлауы менән яфаланған. Микә ике йәштәр самаһы ваҡытта ул, имселәр һүҙенә ышанып, ҡан алдырған саҡта, ни сәбәптәндер, бөтә тәне хәрәкәттән туҡтаған. Шул хәлдә ул йыл ярым ҡуҙғала алмай ятҡандан һуң, 1911 йылдың йәйендә үлеп киткән. Был ваҡытта миңә өс йәш ярым самаһы булған.

Мин әсәйемде хәтерләмәйем. Ә үҙемә сәсәк һалған фельдшерҙың һәм сәсәк һалғанда мине алдына алып ултырған атайымдың кейеме, йөҙө әле булһа көн кеүек күҙ алдымда тора. Ә бит шул саҡта әсәйем тере булған. Мейештә, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, ҡуҙғала алмай түшәктә ятҡан. Сәсәкте лә миңә унын үтенесе буйынса һалғандар.

«Бәләкәс ҡыҙым ошоғаса ҡыҙылса менән дә, сәсәк менән дә ауырыманы. Минән һуң ауырыһа, уны кем ҡарар? Атаһы, үҙ күҙем алдында сәсәк һалдыр,— гип, үҙ хәле ауыр булһа ла, мине ҡайғыртып ятҡан ул. Күрше-күләндең һөйләүенә ҡарағанда, үлгән саҡта әсәйем утыҙҙан саҡ ҡына ары булған.

Атайым Ғабдулла Төхфәтулла улы Биишев ерһеҙ-һыуһыҙ ғына түгел, хатта бөтөнләй туған-ырыуһыҙ бер кеше ине. Уҡыусының башында:

— Ни өсөн улай? Ул саҡтағы башҡорттарға ерһеҙлек хас нәмә түгел бит?— тигән һорау тыуыуы бик мөмкин. Был хаҡта атайымдың үҙ ауыҙынан ишеткән ошондай бер хикәйәне генә һөйләй алам:

— Ҡасандыр бик күптән, башҡорттарҙың ерҙәрен бүлеп биреү ваҡиғаһынан элек, Ырымбур губернаһы Туксоран буйы башҡорттары хәҙерге Күгәрсен районындағы Эйек тигән бик матур, ташҡын йылға буйына килеп йәйләп йөрөй торған булғандар. Шуғамылыр, землемер ер бүлгән саҡта уларға ерҙе, бер өлөшө ошо Эйек буйынан, бер өлөшө Туксоран буйынан бирелгән. Шунан Туксоран буйындағы Ҡотломбәт ауылының Байыулы араһы башҡорттары ялан яҡтағы ерҙәрен һатҡандар ҙа Эйек буйына, элек йәйләп йөрөгән ерҙәренә күсеп килеп, ерләшеп ҡалғандар. Ауыл ырыу аҡһаҡалының исеме менән Төйөмбәт тип аталған.

Бик күп йылдар үткәс, атайымдың ҡартатаһы Ирғәле ҡарт, Эйек буйындағы туғандарын күреп ҡайтыр өсөн, бөтә ғаиләһен тейәп, мал-тыуарын ҡыуып, Төйөмбәткә килеп сыҡҡан. Ҡола ялан Туксоран буйынан килгән был ҡартҡа Эйек буйының гөлсәскәгә, емеш-еләккә һәм бесәнгә бай һыубаҫар гүзәл туғайҙары ла, ҡара һағыҙ шикелле үҙләнеп торған һутлы баҫыуҙары, бәрҙе, бағыр балыҡтары, йәйен яҡтылыҡтары менән күнелдәрҙе ҡытыҡлап торған Эйек үҙе лә бик оҡшаған.

— Мин дә Эйек буйында ҡалам. Мин дә ошо яҡта йәшәйем,— тигән ул.

— Бында ер душ башына бүленеп бөткән бит. Бында ер теймәй бит һикә,— тигәндәр Байыулылар кешеләре.

— Ярар. «Ил өҫтөндә сәпсек үлмәй». Ҡалай ҙа йәшәрбеҙ әле,— тип Ирғәле ҡарт Эйек буйында тороп ҡалған.

Ләкин Ирғәле ҡарт яңылышҡан. Ил өҫтөндә сәпсек улмәһә лә, ерһеҙ-һыуһыҙ тормош — ләғнәтле тормош — уның тоҡомон бик тиҙ ҡороткан. Ирғәле ҡарттың һәм улы Төхфәтулланың ғаиләһе лә был ауыр, ләғнәтле донъяны бик тиҙ арала ҡалдырып киткән. Байыулы ҡәберлегендә Ирғәле ҡарттың баш осона ҡуйылған бер һоро таш ҡына уларҙын, был ерҙә йәшәүенең берҙән-бер шаһиты булып ҡалған. Күп замандар үтеү менән яртылаш ергә батҡан был юнылмаған-йышылмаған һуйырташҡа ул саҡта кемдер, бәке менән соҡоп, Ирғәле ҡарттың ете тоҡомон һанап яҙып ҡуйған. Ныҡлабыраҡ ҡараһаң, был яҙыуҙы әле лә укып була.

Атайым ун ике йәштә саҡта үкһеҙ етем ҡала. Уның Вәлиулла тигән ун йәшлек ҡустыһы, Бибиғәйшә тигән ун биш йәшлек апаһы була. «Кәмһетелгәндәр» романындағы Гелғәйшә образын хәтерләгәи кеше Бибиғәйшәнең тормошо менән таныш инде. Мин унда Бибиғәйшә инәйҙең тормошон бөтөнләй үҙгәртмәй тип әйтерлек алғанмын. Бибиғәйшә инәй үҙенең «әсмүхә сәйлек» бабайы менән мин белгәндә лә бар ине әле. Улар Зиянчура районында, Ерекле тигән кескәй генә башҡорт ауылының бер осонда, ситән өйҙә генә йәшәйҙәр ине. Уларҙың балалары күп, өйҙәре буш, тамаҡтары һәр саҡ тип әйтерлек ас була торғайны. Шулай ҙа Бибиғәйшә инәй үҙенең бөтөнләй тип әйтерлек һөйләшмәүсән, эшсән һәм изге күңелле, йыуаш «әсмүхә сәйлек» бабайынан да, үҙенең ошо ситән өйлө тормошонан да бик риза, шат күңелле, яҡты сырайлы, бошмаҫ тәбиғәтле кеше булып хәтеремдә һаҡлана минең. Бибиғәйшә инәй менән бабайы, янылышмаһам, 1921 йылғы аслыҡта үлеп ҡалдылар.

Бибиғәйшә инәйҙе әлеге бабайға биргәс, атайым, ҡустыһы Вәлиулланы эйәртеп, ауылдан сығып китә. Улар ауылдан ауылға, ҡаланан ҡалаға күсеп йөрөп үҫәләр. Белгән кешеләрҙең һөйләүенә ҡарағанда, атайым бик егәрле булып үҫә. Ҡулынан килмәгән эше булмай. Итек тә тегә, мейес тә сығара, көтөү ҙә көтә, ә ураҡ урыуҙа алдына кеше сығармай. Ул шулай йәйен төрлө кешелә төрлө эш эшләп йөрөй ҙә ҡышын берәй мәҙрәсә тирәһендә уҙғара. Бай шәкерттәргә йомош-юлға йөрөү, самауыр ҡайнатыу кеүек эштәрҙе һәйбәт башҡарған өсөн, уға мәҙрәсәлә йоҡлап ҡыш сығырға мөмкинлек бирәләр. Шулай йөрөй торғас, ул, нисектер, үҙенен дә укыуға һәләтлелеген күрһәтә. Тора-бара Ырымбурҙағы Ғәни байҙың ярлы-етем балаларҙы укытыу өсөн бүлә торған фонды иҫәбенән уны мәҙрәсәгә лә алалар. Яңылышмаһам, ул башта Яңы Себенле (Яманболаҡ тип тә йөрөтәләр. Шағир Булат Ишемғол тыуған ауыл) ауылындағы йәдит мәктәбендә укый, унан шул ук Ғәни байҙың укырға һәләтле ярлы-етем балалар өсөн бүлгән ярҙам фонды иҫәбенә Ырымбурҙағы мәшһүр «Хөсәиниә» мәҙрәсәһенә инеп укып сыға.

Билдәле булыуынса, татар милли буржуазияһы сауҙа капитализмына күскән осорҙарҙа укыу-яҙыуға, иҫәп-хисапҡа оҫта кешеләргә нык мохтажлыҡ кисерә. Ул ваҡытҡа тиклем йәшәп килгән дини-схоластик мәҙрәсәләр буржуазиянын. был һорауына яуап бирә алмай башлай. Шул саҡта бигерәк тә Ырымбурҙың иң ҙур миллионерҙары булған Хесәйеновтар йәдит мәҙрәсәләре асыуға, йәштәрҙе тиҙерәк укытып, үҙҙәренә кәрәк тиклем белемлерәк, аңлыраҡ итеп сығарыуға иғтибар бирә башлайҙар. Минең атайым да байҙарҙың ошо «изгелегенә» эләгә. Ә ҡустыһы Вәлиулла (Төхфәтулла улы Биишев), был ваҡыт эсендә зимагор булып китеп, ҡайҙалыр юғалып ҡала. Атайымдын, ошо ҡустыһын эҙләп Ырымбур, Верхнеуральск, Златоуст ҡалаларын бер нисә ҡат әйләнеп сығыуы, ләкин бер ҡайҙан да таба алмауы тураһында ҡайғырып, ҡайта-ҡайта һөйләүе хәтеремдә ҡалған. Яиылышмаһам, бер тапҡыр ул Вәлиулланы Златоустан эҙләп табып та алып ҡайтҡан. Ләкин тамам «зимагорлыҡҡа» өйрәнеп алған Вәлиулла ҡабат ҡалаға

ҡасып киткән. Аҙаҡ атайым уны бөтөнләй юғалтҡан. Кем белә, бәлки, Вәлиулла ағай ҙа берәй ерҙә йәшәгәндер. Бәлки, унан ҡалған балалар ҙа барҙыр? Донъя киң бит. Кем ҡайҙа йөрөмәҫкә мвмкин. Бәлки, минен, ошо яҙыу атайымдың ғүмер буйы эҙләп тә таба алмаған ҡустыһының һис юғы балаларын табып алырға ярҙам итеп тә ҡуйыр?!

Заманының иң алдынғы мәҙрәсәһендә уҡып сыҡҡан, уҡымышлы кеше булғанлыҡтан, халыҡ атайымды хәлфә тип тә, мулла тип тә йөрөткән. Байыуланды һырт өҫтөндә мулла ҡыйығы тип йөрөтөлгән бер урын бар. Атайым һәр йылда шул урынды һатып алып тары сәсә торған булған.

«Хөсәиниә»лә уҡып сыҡҡас, атайым бик тырышып балалар уҡытыу эшенә керешеп китә. Төйөмбәткә, үҙ ауылына, ҡайтып мәҙрәсә аса. Ләкин эшенең башында уҡ тирә-яҡтағы ҡәҙимсе муллалар һәм байҙар тарафынан бик ныҡ ҡаршылыҡҡа осрай. Мәҙрәсәгә хатта һөжүмдәр була. Ҡара дин әһелдәре тарафынан ҡотортолған фанатиктар күп тапҡырҙар мәҙрәсәнең тәҙрәләрен ҡыйратыу, «боже матери» тип ҡара таҡтаны ватҡылап, хисап һәм уҡыу-яҙыуға өйрәткән китаптарҙы йыртҡылап, олтораҡ итеп, ҡыҫҡаһы, бөтә уҡыу-уҡытыу әсбаптарын юҡҡа сығарып ташлайҙар. Ләкин атайымда ла ныҡышмалылыҡ ҙур була, күрәһең, ул шәкерттәре менән мәҙрәсәне үҙе ремонтлап, мейесен емерһәләр, үҙе мейес сығарып, тәҙрәләрен ҡуйып ала ла тағы уҡытырға керешә. Йәҙитселек үҙенек тәүге осоронда прогрессив күренеш була, күрәһең. Сөнки байҙар тарафынан уға ҡаршылыҡ бик кеслө була. Шул йылдарҙа Ырымбурҙа сыҡҡан «Ғәни бай» тигән китапта Ғәни байҙың «Хөсәиниә»лә сыҡҡан хәлфәләргә яҙған хаттары баҫылған. Был хаттарҙың күбеһе шул көрәште сағылдыра. Әлбиттә, бай быға үҙенсә, уҙенең синфи нөктәһенән сығып баһа биргән. Ошо китапта унын минең атайыма яҙған бер хаты ла урынлаштырылған. Был хат көрәштән ҡул һелтәргә саҡырған юлдарҙан тора. Уҡ биткә һуҡһалар, һул битте ҡуйырға өндәй.

Хаттарҙан күренеүенсә, атайымдың халыҡты арартыгу юлындағы тырышлығы Ғәни бай теләгән тиклемдән уҙып китеүе күренә. Шуға күрә Ғәни бай, ғәҙәттә, ике һүҙенен береһендә «мәҙәниәт, аң-белем» тип һөрәнләргә, халыҡҡа мәҙәниәтсе булып күренергә ятаһа ла, аң-белем өсөн ҡыҫҡыу көрәш башланған саҡта, үҙ синыфына тоғро булып, ҡара реакция яғында ҡала. Байҙар һәм муллаларҙың ябай халыҡтың уҡыу-яҙыуға, аң-белемгә булған ынтылышын бәбәгендә үк быуырға тырышып ошойторған һөжүмдәрен халыҡҡа япһарырға тырыша. Аң-белем өсөн көрәштән баш тартырға саҡыра. Сөнки уны, миллионерҙы, халыҡтың да, хәлфәнең дә аң-белемегә артыҡ тырышып ынтылыуы ҡурҡыта башлай.

Төйөмбәттә мәктәпкә ҡаршы һөжүм һаман көсәйә, киҫкенләшә бара. 1912 йылда, ҡара реакцияның иң ҡоторонған бер осоронда, атайым өҫтөнән яҙылған доностар уҙҙәренең кульминацион нөктәһенә етәләр. Уны аллаға һәм батшаға ҡаршы отҡо алып барыуҙа, йәштәрҙе аҙҙырыуҙа, уларҙы дингә һәм батшаға ҡаршы тәрбиәләүҙә ғәйепләп хөкемгә тарттыралар. Суд уны, бөтә мөлкәтен конфисковать итеп, егерме дүрт сәғәт ваҡыт эсендә Бөрйән-Ҡыпсаҡ волосы территорияһынан ҡыуып сығарып ебәрергә хөкөм итә. Шулай итеп, әсәйем үлгәнден, икенсе йәйендә, ядғыҙ аты ла тартып алынған, бер әйберһеҙ ҡалған атайым, беҙҙе — бала сағаһын эйәртеп, ауылдан һәм волостан сығып китергә мәжбүр була.

Беҙ 1912 йылдан алып Икенсе Ҡара-Ҡыпсаҡ волосы Исем ауылында йәшәй башлайбыҙ. Шул саҡта беҙгә тәү башлап ярҙам ҡулын һуҙған, үҙенең аласығында йәшәп торорға рөхсәт иткән Йәнтүрә тигән ағай Исем ауылында әле лә иҫән-һау тип ишетәм. Был бәләкәс кенә кәүҙәле, аҙ һүҙле, ҡырмыҫҡа шикелле эшсән ағай, бигерәк тә унын яҡты сырашш, киң күңелле, ғәжәп йомарт, илгәҙәк ҡатыны Шәһиҙә енгә минең күңелдә мәңгелеккә һаҡланып ҡалған. Шәһиҙә еңгә йыш ҡына беҙҙен, — бәләкәс етем ҡыҙҙарҙың ҡалын оҙон сәстәрен тарап-үреп, күлдәктәребеҙҙе йыуып, ямап биреп тә ебәргәләй торғайны.

Донъя яҡшы кешеләрга бик бай бит ул. Беҙҙен, ғаиләнең ошо ауыр ваҡытында ярҙам ҡулы һуҙып, йығылған ерҙән торғоҙоп китеүсе бүтән кешеләр ҙә була. Ырымбур аръяғынан, Туксоран буйынан, атайымдын, ниндәйҙер туғандары, унып ауыр хәлгә ҡалыуын ишетеп, эҙләп килеп табалар. Атайыма, балсыҡтан ҡорап-һыланған булһа ла, дүрт мөйөшлө кескәй бер өй, ат-һыйыр, кәзә-һарыҡ алып биреп, беҙҙең бөтәбеҙҙе бер ҡат кейендереп китәләр. Мин дүрт йәштәрҙә генә саҡта булған был ваҡыттарҙы бик томанлы ғына хәтерләйем, әлбиттә.

Исем ауылы ла Оло Эйек буйында, бикматур туғайлыҡтарға, емеш-еләккә бай урында ятҡан утыҙ-ҡырҡ өйҙән торған кескәй, ләкин төҙөк кенә ауыл ине. Минең бала сағым ошо ауылда үтте.

III

Беҙҙең үгәй әсәй һылыубикә тигән бик егәрле, ҡупшы ҡатын да әсәйем тыуған ауылдан — Сапыҡтан, Рамазан тигән балта оҫтаһының ҡыҙы ине. Ул атайыма хәтле лә бер нисә ирҙә булып ҡайтҡан, Сапыҡта Ырымбурҙан килгән купец ҡатында аш-һыу бешереүсе булып торғанлыҡтан, эшкә лә, үткерлеккә лә өйрәнгән, татар һәм рус телдәрендә лә яҡшы һөйләшә белгән ҡатын ине.

Аш-һыу бешереүҙә лә, тегеү-сигеү, бәйләүҙә лә ауылда уға тиңләшерҙәй ҡатын юҡ ине.

Әле булһа хәтеремдә, ул Исем ауылы ҡатындарына, яурындарын күпертеп, ҡойроҡлап (шлейф менән), нгул саҡта Ырымбур купец бисәләренең һуңғы модаһы менән күлдәктәр тегеп кейҙереп ебәрә. Эйек буйы халҡының ғәҙәтенсә, бер нисә ауыл бер булып, яҙ кенө тауға йыуаға, ҡарға бутҡаһына сыҡҡанда, беҙҙең Исем ауылы ҡатындарынан төҙөү кейенгән кеше булмай торғайны. Минә үгәй әсәйҙең һәр бер эше сикһеҙ оҡшай, үҙемдә лә унын кеүек

матур итеп эшләп ҡарау теләге уяна. Ысынлап та, һыйыр һауамы, он иләйме, ҡамыр баҫамы, уның һәр бер хәрәкәте ниндәйҙер бер ритмға буйһонған, ниндәйҙер үҙенә генә хас кейгә өнһөҙ көйләп торған кеүек тойола ине миңә. Ә инде ул әйбер теккәндә, машина тауышына ҡушылып, сикһеҙ моңло итеп көйләп ултырған саҡта, мин, үҙем дә һиҙмәҫтән, тотош ҡолаҡҡа әүерелә́м. Уның йырҙарын ишетергә, отоп алырға тырышам. Ә инде уның ауыҙынан наҙлы йәки ҡайғылы йыр ишетһәм, бөтөнләй аптырап ҡалам. Сөнки шундай үткер, уҫал, ҡаты бәғерле ҡатындың ҡайғылы, моңло булыуы миңә һис тә аңлашылмай ине. Ысынлап та, беҙгә ҡаты булды ул. Үҙе бер ҡасан да әсә булып ҡарамағанғамылыр, баланы ҡыҙғаныу, йәлләү тигәнде бөтөнләй белмәй кеүек ине ул. Шулай ҙа, бик кескәйҙән эшкә, хеҙмәткә ғашиҡ була алыу тойғоһо тәрбиәләгәне өсөн, ул минең йөрәктә әлегәсә ҙур хөрмәт менән һаҡлана. Уның кеүек эш оҫтаһын, эшкә шиғри мөнәсәбәтле кешене күрмәй үҫеү минең өсөн бик ҙур рухи ярлылыҡ булыр ине.

Беҙҙең үгәй әсәй әле лә иҫән. Атайым үлгәс, ул Мораҙым ауылына (шул уҡ район) иргә сығып киткәйне. Әле лә шунда йәшәй. Бер ваҡыт, һуғыштан һуң, ул мине эҙләп Өфөгә килеп сыҡты. Минең бала сағым менән бергә бик алыҫта, хатта бынан мең йыл элек булған хәл һымаҡ, бик томанлы ғына хәтерҙә ҡалған был кешене тере күреү минең күкелдә, башта ысынға оҡшамаған, төштө ысын итеп күреү һымағыраҡ, сәйер тойғо уятты. Мин оҙаҡ ваҡыт бының реаль ысынбарлыҡ икәненә ышана алмай торҙом.

Өйҙә үгәй әсәйҙең ҡатылығы, урамға сыҡһаң, «килмешәк», «ерһеҙ» тип ситләтеүҙәр арҡаһындалыр инде, мин бик моңһоу һәм ҡырыҫ булып үҫтем. Миңә ул ваҡытта донъяла бөтә кеше яман, бөтә кеше кемде булһа ла рәнйетеү, хурлау, кәмһетеүҙән тәм таба, шулай булғас, кешенән ҡасып, үҙ эсеңә бикләнеп йәшәүҙән башҡа сара юҡ һымаҡ тойола ине. Мин хатта ҡайҙалыр кеше аяғы баҫмаған ҡара урманға йәки, «Ел-ел арбам» әкиәтендәге кеүек серле арбаға ултырып, ете диңгеҙ артына осоп китеү тураһында хыялланып, йәки бөтә кешене лә яҡшы, изге күңелле итеү өсөн берәй сара табыу тураһында мең төрлө план ҡороп, төндәр йоҡламай уҙғара инем. «Эй алла, ниңә һин бәндәләреңде бер-береһенең уйын-теләген, ни эш ҡылырға йыйыныуын, үҙе әйтмәһә лә, башҡалар белеп торорлоҡ итеп яратманың? Ул саҡта донъяла бер ҙә яуыз ниәтле кешеләр булмаҫ. Бер кем дә насар уй уйларға баҙнат итмәҫ ине?»—тип алланың эштәре хаҡында ла йыш ҡына баш вата һәм, уйлаған өсен гонаһлы булыуҙан ҡурҡып, тағы ла ауырыраҡ тойғолар эсендә газаплана инем. Бәләкәй саҡта мин дингә һәм ен-пәрейгә бик ныҡ ышаныусан, шул арҡала төндәрен, ҡот оскос төштәр күреп, һаташып, ғазапланып сығыусан була торғайным. Ләкин минең был хәлемде, әлбиттә, үҙемдән башҡа бер кем дә белмәй. Сөнки ул саҡта мин бөтөнләй тип әйтерлек телһеҙ инем.

Ошо Исем ауылында мин халыҡ моңо, әкиәттәре, легендалары менән дә тәүләп таныштым. Бында нисә тен һөйләһә лә, әкиәт һәм легендалары бөтмәй торған, һәр ваҡыт яҡты йөҙлө, ғәжәп киң күңелле Зөбөрә еңгә, һүҙгә бай, сәйгә әүәҫ Сафура инәй кеүек кеҫ1еләр, яҙын Эйек буйлап ҡыуғын ҡыуып уҙа торған йырсы-ҡурайсы «бөрйәндәр» минен, йөрәккә ин, тәүге һәм юйылмаҫ шиғриәт һалыусы булдылар. Зөбөрә еңгә «Ҡуҙкүрпәс менән Маянһылыу» легендаһын башынан аҙағына хәтле шиғыр менән һөйләп сыға торғайны. (Беҙҙең яҡта ул легендалағы егеттең исеме хәҙер әҙәбиәттә алып йөрөтөлгәнсә «Ҡуҙыйкүрпәс» тип түгел, ә «Ҡуҙкүрпәс» тип атала.) Ғөмүмән, Зөбөрә еңгә башҡорт халыҡ тел-әҙәбиәтенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ шишмәһе ине. Мин уның әкиәттәрен бөтәһен дә отоп алғайным. Аҙаҡ, уҡый-яҙа белгәс, уларҙы, онотолмаһын өсөн, яҙып ҡуйырға ла теләнем. Ләкин етем кешегә ул саҡта ҡайҙан ул хәтле ҡағыҙ табырға?! Яҙып булманы. Яҙылған тиклеме лә юғалды. Ҡалғандары, йылдар үтеү менән, әкренләп онотолдо. һуғыштан һуң, «Совет Башҡортостаны» газетаһында эшләгән саҡта, мин үҙебеҙҙең яҡҡа командировкаға ҡайттым. Зөбөрә еңгәне табып, һис юғы шул «Ҡуҙкүрпәс менән Маянһылыу» легендаһын яҙып алайым тип, Исемгә барып сыҡтым. Исемдә миңә Зөбөрә еңгәнең һуғыш ваҡытында бөтә бала-сағаһы үлеп бөтөүе, үҙенең дә ҡайҙалыр ситтә, ялан яғында, һоранып йөрөп үлеп ҡалыуы хаҡында әйттеләр.

Исемдә мин үҙебеҙҙең өйҙө лә, хатта унын урынын да тапманым. Беҙ йәшәгән өй урынын, ҡылансыҡ йәш ҡыҙ шикелле, артыҡ йыш борғоланыусан һылыу Эйек йылғаһы баҫып киткән. Өй ҙа, күрәһен, шунда һыу аҫтында күмелеп ҡалғандыр, йәки күрше-күлән уны утын итеп яҡҡандыр. Сөнки ул шунан башҡаға ярарлыҡ түгел ине.

Исемгә барыуҙың ҡыуаныслы яғы шул булды: мин унда теге 1912 йылда ҡыуылып килгән беҙҙең ғаиләгә тәү башлап ярҙам ҡулы һуҙған кешене — Йәнтүрә ағайҙы күрҙем. Ул һаман шул элеккесә аҙ һүҙле, баҫалҡы, тыныс холоҡло эшсән бер кеше. Тик изгелекле күнеле менән беҙҙең өшөгән йөрәкте йылытып ебәрә торған яҡты сырайлы Шәһиҙә еңгә генә донъя ҡуйған. Уның урынын шундай уҡ һөйкөмлө икенсе еңгә алған.

## IV

Мин белгәндә, атайым ауырыу ине. «Бер йылды Эйек, һаҡмар буйлап ҡыуғын ҡыуып барғанда, Ырымбурҙа, таҡта ярыу заводында, декабргә хәтле эшләп ҡалдым. Ҡайтҡанда өҫтә алама ғына бишмәт. Аяҡта итек ине. Шунда үпкәмә һалҡын алдырҙым. Шунан һуң мандып булманы»,— тип һөйләй ине атайым. Ул, ауырыу булһа ла, бик тынғыһыҙ, теремек кеше ине. Беҙҙең өйҙә бүтән бер нәмә булмаһа ла, шул ваҡытта терки телендә сыҡҡан бөтә прогрессив газета, журнал, китап була. Атайым янына һәр көн кеше-

ләр йыйыла. Уларға атайым ҡысҡырып газеталар уҡый. Был беренсе империалистик һуғыш йылдары булғандыр инде. Сөнки һүҙ күп ваҡыт һуғыш хаҡында бара. Минең бик кескәйҙән һүҙҙәргә иғтибар итә торған ғәҙәтем була торғайны. Ҡайһы һүҙҙәр миңә үҙҙәренең яңы һәм аңлайышһыҙ булыуҙары менән оҡшай, ҡайһы һүҙҙәр, хатта хәрефтәр мине биҙҙерә. Был ваҡыт Ырымбурҙа техникумда уҡып йөрөгән саҡта, мин «з» хәрефенән биҙҙем. Сөнки беҙҙең техникумдың уҡытыу эштәре мөдире, артист Әлмәшев ағай «з» хәрефенә артыҡ ныҡ баҫым яһап һөнләй. Ул һөйләгәндә, был хәреф «з-з-з!» тип, бер еҙләкһеҙ безелдәп торған һағыҙаҡҡа әйләнә. Ә һағыҙаҡты мин артыҡ сабырһыҙ булған өсөн яратмайым. Хәтеремдә, мин шул йылда үҙ исемемдең «з» хәрефенән башланыуы өсөн дә көйөнә башлағайным.

Бына шул һүҙҙәргә иғтибар итә торған ғәҙәттәндер инде, атайымдын да кешеләр менән һөйләшкәндә, газеталар уҡығанда «Төркиә», «Австрия — Венгрия», «Балкан», «Варшава», «Петербург» тип әйткән айырым һүҙҙәре минең ҡолаҡҡа һеңеп ҡала. Уларҙың мәғәнәһен белмәһәм дә, мин кен һайын тигәндәй ошондай һүҙҙәрҙе ишетеп үҫә инем. Атайымдың ҡайһы саҡта артыҡ ярһып китеп: «Был батша демөгә, ҡәһәр һуҡҡыры», «Тиҙҙән дөмөктөрәләр уны...»— тип әйтеп ебәреүе, газета уҡығанда тыңлап ултырыусыларҙыц: «Шулай ғына булһын инде... Тиҙерәк кенә аҫтыөҫкә килһен инде был яуыҙдың...»— тип серле һөйләнеуҙәре лә иҫтә ҡалған.

Минең аңлауымса, был саҡта атайым полиция надзоры аҫтыида торған булырға тейеш. Бер ваҡыт шундай хәл булды: беҙҙең ҡапҡа төбөнә тройка еккән ҡораллы кешеләр килеп туҡтаны. Уларҙы тәҙрә аша күргән үгәй әсәй:

— Уй, стражниктар!— тип, ҡурҡып, ҡысҡырып ебәрҙе. Атайым, ни эшләргә белмәй, арлы-бирле бәргеләнде. Ул арала, мылтыҡ-ҡылыстарын шалтыратып, ҡара кейемле, йылтыр еҙ төймәле өс кеше өйгә килеп инде. Улар, беҙ аңламаған телдә асыулы ҡысҡырынып, атайымды төрткөләп алып сығып та киттеләр. Беҙҙең ғаилә сыр-сыу килеп, илашып тороп ҡалдыг. Шунан, хәтерләмәйем, күпме ваҡыттан һуңдыр, атайым, ғәҙәтенсә йәнләнеп, ярһыуланып ҡайтып килде. Сәй янында үгәй әсәйгә:

— Һаман шул донос! Тик улар — наҙандар, мине эләктерә алаларыы ни?!— тип ғәйрәтләнеп һөйләп ултырҙы.

Октябрь революцияһы булғастыр инде, мин ул хәтлемен асыҡ белә алмайым, атайым беҙгә:

— Үҙ ауылыбыҙға ҡайтабыҙ, балалар. Бынан һуң һеҙ ерһеҙһыуһыҙ булмаҫһығыҙ,— тип ҡыуанып һөйләй торғайны. Бер саҡ, күрәһең, Төйөмбәткә барып та ҡайтты. Сәй янында ҡыуана-көлә ошондай бер һүҙ һөйләгәне хәтеремдә ҡалған.

— Байыулы урамына барып инһәм, түшенә лә, папахаһына ла ҡыҙыл таҡҡан бер Һыбайлы. нагандан уҡға ла, һулға ла шартлатып атып, сабып йөрей. Ҡараһам, Әбделхаҡ! Үҙемден, теге ваҡыттағы ин тырыш шәкертем. Мине таныған, ҡыуанып китте.

— Эй, хәлфә ағай, ҡайттыңмы ни? Бик дөрөҫ, әйҙә, ҡайт. Хврриәт хәҙер. Әйт, ҡуш ҡына, үҙенде бинахаҡҡа рәнйетеп, илдән һөрҙөрөп ебәргән ҡара ҡорһаҡтарҙың бөтәһен атып бөтәм. Һинең өсен үс алам,— ти. Мин уға: «Ҡуй, Әбделхаҡ, улай ярамай. Бер кемде лә атма. Үҙенде лә һаҡла. Әлегә һин бында яңғыҙ. Улар күмәк. Үҙеңде харап итеп ҡуйыуҙары бар»,— тинем.

Шунан Әбделхаҡ:

— Ярар, хәлфә ағай, һин әйткәс, атмайым. Хәҙергә ҡалып торһондар яуыздар,— тине лә Троицк яғына сабып китте. Әбделхаҡ һуғыштан большевик булып ҡайтып килгән икән. Уларҙың частары шунда Троицкиҙа тора икән.

Был һөйләшеүҙән һуң күпме ваҡыт үткәндер, унынын белмәйем, атайымдың әсенеп:

— Әйттем. һаҡлан, тинем. Йәш шул. Байҙарҙын. мәкеренә төшөнмәй ине шул әле ул... Троицкиҙа ҡоралланған байҙар отряды Әбделхаҡтарҙың аҙ һанлы большевиктар отрядына аңғармаҫтан һөжүм иткән, шунда Әбделхаҡ та үлтерелгән, тип һөйләйҙәр. Һай, ысын булһа, әрәм иткәндәр инде ҡаһарман егетте...— тип һөйләгәне лә иҫемдә.

1919 йылдың йәйендә атайым Ташлыға — ул саҡтағы Бөрйән-Ҡыпсаҡ волосынын, үҙәгенә сығып, Төйөмбәткә уҡытыусы булып тәғәйенләнеп ҡайтты. Ғүмер буйы ҡайтырға хыялланған теләгенә ирешеүенә ҡыуанып, ҡайҙа баҫҡанын белмәй йөрөнө. Ләкин атайыма уҡытыусы булырға ла, ғүмер буйы хыялланған тыуған ауылына ҡайтыу теләгенә ирешергә лә тура килмәй. 1919 йылдын көҙөндә оҙаҡ ваҡыт һуҙылып килгән үпкә ауырыуы уны түшәккә йыға һәм оҙаҡламай алып та китә.

## V

Мин үҙемде атайымдың уҡытыуын хәтерләмәйем. Ләкин бик Кескәйҙән уҡый белә инем. Бәлки атайымдын. өйҙә өлкән туғандар-^ уҡытыуын тыңлап өйрәнгәнмендер. Атайым бигерәк тә ағайым-|ды ҡышҡы кистәрҙә өйҙә бик тырышып, ҡаты тотоп уҡыта ине.

Беҙҙең кескәй өй, шаршау урынына, таҡта менән икегә бүленгәйне. Ҙур яҡта атайым ағайымды уҡыта. Ғәрәп теленең сарыф, нәхеүен (грамматика, синтаксис) ейрәтә. Ағайым ҡурҡа-ҡалтырай һүҙҙәрҙе төрләндереп, мәғәнәләрен башҡортса әйтеп сыға. Мин күп ваҡыт бәләкәс яҡтан тыңлап ултырам. Был аңлайышһыҙ һәм мәғәнәһеҙ тойолған һүҙҙәрҙән аунап ятып көлгө килә. Ләкин ҡайҙа ул, тынды ла сығарырға баҙнат итмәйһең. Атайым бик ҡыҙыу холоҡло кеше. Ағайымды, дәресен яҡшы белмәһә, яңаҡлап та ебәрә. Шул саҡтан ошондай бер көлкө күренеш иҫтә ҡалған. Бер ваҡыт ағайым ғәрәпсә «һукты» ҡылымын төрләндереп ултыра.

— Зараба, зараба, зарабу, зарабна!

Был һүҙҙәр миңә үтә ҡыҙыҡ тойолдо. Инде ағайым һүҙҙәрҙе:

— Зараба — һукты бер ир, зараба— һукты ике ир, зарабу — һукты күп ирҙәр, зарабна — һукты бер ҡатын...— тип тәржемә итә башлағас, беҙҙең һейләшкә һис тә оҡшамаған был һүҙҙәр алмашыныуына ҡыҙыҡһыныуҙың сигенә етеп, мин ҡурҡыуҙы ла онотоп ташлағанмын, күрәһең. Ҡапыл пырхылдап көлөп ебәргәнемде тоймай ҙа ҡалдым. Атайым ҡолаҡҡа ҡатыраҡ ине. Шулай ҙа ишетте. Уҡ кеүек, бәләкәс яҡҡа атылды һәм:

— Ах, шайтан ҡыҙ! Ниндәй мәрәкә таптың?!—тип, мине сыбыҡлай-сыбыҡлай, тышҡа ҡыуып сығарҙы. Шуға, ахыры, был «зараба» ҡылымын төрләндереү ҡасандыр үҙем укыған кеүек булып иҫтә ҡалған.

«Буҙйегет», «Ләйлә менән Мәжнүн», «Таһир менән Зөһрә», «Йософ менән Зеләйха», «Әльфө ләйләтөн вә ләйлә» («Мең дә бер кисә») һәм башҡа шундай китаптарҙы мин үҙебеҙҙең өйҙә бик кескәй саҡта укып үҫтем. Бөйек татар шағиры Ғабдулла Тукайҙың шиғырҙарын, бигерәк тә уның «Иҫемдә ҡалғандар» тигән әҫәрен (күрәһең, үҙем дә етем булғанғалыр) илай-илай укый торғайным. Был китаптар өҫтәүенә ағайым ҡырҡ тартмасынан төрлө ваҡ-төйәк китаптар ҙа һатып ала. Былар араһында «Мәғшуғым» кеүек (авторын хәтерләмәйем) бөтә йөкмәткеhe һөйгән ҡыҙының шиғыр юлдарына йәшерелгән исемен таптырыуҙан торған буш китаптар ҙа була торғайны. Уларҙы ла мин, ағайым йәшереп ҡуйған урындан алып, мәғәнәһенә төшөнә алмай, ҡат-ҡат укып, баш ватып ултыра торғайным. Беҙҙә ҡөрьән һәм әфтиәк тәфсирҙәре (тәржемәләре) лә була торғайны. Миңә ундағы пәйғәмбәр, әүлиә, батша һәм башҡа шундай «изге» йәндәрҙе алдап, аҙҙырып йөрөүсе шаян шайтандар, ҡылйыуар ендәр тураһындағы әкиәттәр айырыуса оҡшай. Был дини әкиәттәр миндә алланың «изге» йәндәрҙе лә аҙмай, боҙоҡлоҡ эшләмәй торған итеп яратмауына аптырау уята ине.

Атайым йыш ҡына һыҙыҡлы аҡ ҡағыҙға ҡауырһын перо менән, бик матур итеп, нимәләрҙер яҙа ла, дүрткә бөкләп, газеталар, китаптар араһына һалып ҡуя. Минең шул яҙыуҙарҙы ла алып укығым, унда нимәләр яҙылыуын белгем килә торғайны. Ләкин һис тә баҙнат итә алмай инем. Ғөмумән, мин атайымдан, ни өсендәр, ҡурҡа һәм уны яратмай ҙа торғайным. Ул үлгәс, апайҙарымдын, минең иламауыма ғәжәпләнеүҙәре һәм ҡаты шелтәләүҙәре әле лә хәтеремдә.

— Ҡара әле, бынауы һөмһөҙ иламай ҙа, исмаһам!.. Йә, үкһеҙ етем ҡалдың да баһа!..— тип аптыранылар улар. Ҡайғыра ла, илай ҙа алмауыма мин үҙем дә ғәжәпләндем. Ләкин, кескәй саҡтан ук, яһалма йәш сығарыуға ҡарағанда, урынлы шелтә ишетеүҙе артыҡ һанай инем мин.

Мин атайымды балаларын уҫал үгәй әсәйҙән дә, «килмешәк», «ерһеҙ» тип кәмһетеүселәрҙән дә һис тә яҡламаған өсөн яратмай



инем шикелле. Ә яҡларға уның хәленән килмәүен уйлап, ғәфү итерлек аң, күрәһең, миндә булмаған. Үҙемдең атайһыҙ нисек йәшәүемде ҡайғыртырға ла, күрәһең, баш етмәгән.

Үҙен күреп белмәһәм дә, әсәйемде табыныу дәрәжәһенә етеп арата, уны ваҡытһыҙ ҡорбан булған изге йән итеп тә, ҡар-буран эсендә аҙашып-илап йөрөгән, үгәйһетелгән йәш килен итеп тә йәлләй, минең өсөн өҙелгән берҙән-бер саф йөрәкле кеше итеп тә хөрмәтләй инем. Яңғыҙым ғына булғанда, бышылдап ҡына уға үҙ ҡайғыларымды һөйләп йыуана, уны тере кеүек, һәр саҡ минең янымда, минең менән бергә интегеп йөрөгән кеүек итеп тоя, шуға, ахыры, атайымды үгәй әсәйҙән уның өсөн кенләй ҙә инем шикелле мин. Сенки: «Әсайем үлгәс, атайым да үлhен ине... Ниңә уға бынауы уҫал үгәй әсәй менән торорға?» — тигән аяуһыҙ уй минең башыма йыш килә ине.

Исем дини яҡтан Сапыҡ ауылы мәхәлләһенә инә ине. Шул уҡ ваҡытта бында Әхмәҙулла ишандың мөриттәре (эйәрсендәре) лә бар. Паралич һуҡҡас, үҙенең ғәриплеген халыҡты тағы ла нығыраҡ алдауға файҙаланыу маҡсаты менән тотош аҡ сепрәккә урап-ған был әҙәм аҡтығы Исемгә йылдың иң матур сағында, йәй айҙарында килеп сыға (ҡайһы ауылда йәшәүен белмәйем). Уның менән ауылға:

— Ул тотош сихри нур менән ҡапланған икән. Гонаһлы донъяға нурлы йөҙөн күрһәтмәҫ өсөн аҡ бөркәнсек бөркәнгән икән...— тигән серле һүҙҙәр килеп етә.

Ишанды мөриттәре ашҡа өйҙән өйгә күтәреп йөрөтәләр. Бығаса ғәҙәти генә йөрөгән ир кешеләр ишан килеү менән тилергән, аҡылдан яҙған кеше төҫөнә инәләр. «Һеү ҙә һеү!» тип ҡысҡырасыйылдай, эт өйерө кеүек өйкөмләшеп, ғәрип ишандарын күтәреп, урам тулып йөрөй башлайҙар. Улар артынан, ҡыҙыҡһынып, сыр-сыу килеп, бер көтөү бала-саға эйәрә. Урам гөж килеп тора. Мин дә, бөркәнсек аҫтындағы «сихри йәнде» күрергә теләп, шул балалар кеүек йүгереп йөрөргә теләйем. Ләкин атайым беҙҙе сығармай.

— Уның нимәһен ҡыҙыҡ күрәһегеҙ?— ти.— Ул — әҙәм күргеһеҙ ғәрип, ишәк кеүек наҙан, саян кеүек яуыз бер йән. Мөриттәренә эшләү, тырышыу, укыу-укытыу — шайтан эше. Алла бәндәһе эшләмәҫкә, тырышмаҫка, аллаға һәм ишанға табынып ҡына йәшәргә тейеш, тип өйрәтә. Ә үҙе ғәрип көйе лә, дүрт-биш ҡатын алып, әллә ни хәтле ялсылар тотоп, баяр кеүек йәшәй^'— ти.

Ысынлап та, бигерәк тә ошо бөркәнсекле булыуы арҡаһында бөтә кешенең иғтибарын үҙенә тартыуы менән ау һуҙып себен килеп ҡабыуын көтөп ултырған гигант үрмәксене хәтерләтә ине был ишан.

Бына шундай шарттарҙа үтте минен, бала саҡ. Әле хәҙер, ҡайһы ваҡыттарҙа, ул заманды иҫкә төшерһән, хатта ышанмай ҙа китәһең: шулай ук булған хәлдәрме һуң былар? Әллә берәй һаташыу, ауыр төш күреү генәме был, тиһең. Сөнки, хәҙерге совет ысын-

барлығы менән сағыштырғанда, ул көндәр тап һаташыулы төш һымаҡ бит! Бөйөк Октябрь бына шундай мөғжизә яһаны. Эйе, ул, Бөйөк Октябрь революцияһы ғына, беҙҙе, тормоштоң иң, ҡараңғы, тынсыу төпкелөнән тартып алып, яҙғы ҡояш нуры аҫтында гөрләп сәскә атҡан гөл-баҡса шикелле келәс, яҡты һәм иҫ киткес иркен яңы донъяға, бәхет донъяһына, сығарып ҡуйҙы. Бына шуның өсөн, мин бөтә ғүмерем буйына үҙемде туған Совет хөкүмәте, бөйөк Коммунистар партияһы алдында икһеҙ-сикһеҙ бурыслы тойҙом. Бөтә булған көсөмдө, һәләтемде, йөрәк йылымды уға, тик уға ғына, һибә итергә тырыштым. Ил өсөн, халыҡ всөн намыҫлы хеҙмәт — минен. иң ҙур бәһетем булды.

## 2. МӘКТӘП

Мәктәп... Был һүҙ беҙҙең ауылға 1919 йылдың көҙөндә тәү башлап килеп инде. Башта күптәр уны дөрөҫ әйтә белмәй йөҙәнеләр. Ҡайһылары иҫкесә «мәҙрәсә» тип атаны,ҡайһы берәүҙәр «мәптек» тип йөрөттө.

— Беҙҙең ауылда ла мәптек асыла, ти... Шунда бынауы үҙебеҙҙең Ғибадулла (йәғни минең ағайым) мөғәллим булып тәғәйенләнгән, ти. Ҡыҙҙарҙы ла, малайҙарҙы ла бергә уҡытам. Хәҙер хөрриәт заманы, ир ҙә, бисә лә бер. Шулай булғас, уҡытыу ҙа бергә булырға тейеш, тип әйтә, имеш,— тип һөйләне халыҡ.

— Ата-аҡ!.. Ҡыҙҙарға уҡыу нимәгә ти ул,— тип аптыраусылар ҙа,— ул мәптек тигән нәмәкәй балаларҙы аҙҙырып-яҙҙырып бөтмәһә ярар ине лә…— тип хәүефләнеүселәр ҙә булды.

Беҙҙең Исем ауылында, ғөмүмән, башҡорт ярлыһына хас рәүештә, ислам диненең ҡатын-ҡыҙҙы ҡаты сикләй торған артыҡ ҡырағай яҡтары ныҡлап ҡабул ителмәгәйне. Унда ҡыҙҙар, кейәүгә барғансы, башына яулыҡ та ябынмай, балалар, ҡыҙға-малайға артыҡ ныҡ айырылмай, бергә уйнап үҫәләр ине. Шуға, ахыры, бергә уҡытыу ауылда артыҡ ҙур ҡаршылыҡ тыуҙырманы.

— Хөрриәт бит. Хөрриәт булғас, әйҙә уҡыһындар. Заманына килгән икән, әйҙә ҡыланһындар!— тип һөйләнеүҙән ары китеүсе күренмәне. Мәктәптә уҡыуҙар башланып, күпме ваҡыт үткәстер, мин дә уҡырға барҙым.

Беҙҙең был тәүге мәктәп Төхфәт тигән хәллерәк ҡарттың бер өйөндә урынлашҡайны. Дүрт тәҙрәле был кескәй ейҙвң, урындығын алып ташлап, иҙәнен йыуғандар ҙа кемдә ширлек (эскәмйә) бар, шуны йыйып алып килеп теҙгәндәр. Уҡыусылар иҙәндә ултыра. Ширлеккә китабын, ҡағыҙын һала. Шунда уҡ, ишек төбө яҡта, бик үк белдекле булмаған ҡулдан әүеш-тәүеш эшләнгән ҡара таҡта ла тора. Уның буяуы ла ҡара тип әйтерлек түгел. Кибеп тә етиңгән аҡ таҡта икәне әллә ҡайҙан уҡ беленә. Күрәһең, ағайым уны яһап, буяп ҡуйған булған.

И Көҙгө күнелһеҙ кен. Тышта туктауһыҙ ямғыр һибәләй. Сентябрь йәки октябрь айылыр инде был. Мәктәп, халыҡса әйткәндә, эт бәйгсәһәң торғоһоҙ. Балалар ешөп, ҡоршайышып ширлектәр артынца ултыра. Мин дә, күшеккән кәзә бәрәстәре шикелле бер мөйөшһыйынған ҡыҙҙар яғына барып, туңған аяҡтарымды күлдәк итәемә урап ултырҙым. Ҡыҙҙар күп түгел, дүртәү-бишәү генә. Улар араһында әкиәттәр оҫтаһы Зөбөрә еңгәнен, миңә тиңдәш ике ҡыҙы ла бар. Ҡыҙҙар бигерәк тә тарҡау ҡиәфәтле. Уларҙың йөҙөндә быгаса таныш булмаған был мәктәп тигән, уҡыу тигән ғәҙәттән тыш нәмәнән аптырап та, борсолоп та ҡалғанлыҡ һиҙелә.

Бына ағайым өйҙә ерек бөрөһөн ҡайнатып үҙе яһаған көрән ҡараны, шешәләргә һалып, ширлектәргә теҙеп сыкты. Ҡағыҙ, ҡәләм өләште.

Уның арыҡ оҙон кәүҙәһе, килбәтһеҙ хәрәкәттәр яһап, берсә ҡара таҡта янында, берсә ширлек артында ултырған балалар алдында әрбәндәй. Миңә ул яна, көйә, тирләй һымаҡ тойола. Ысынлап та, шулай булғандыр. Сөнки ул да был көндө үҙенең уҡытыу эшенең тәүге аҙымын атлай ине бит.

Бына ул бик тырышып, тирләп-бешеп ҡара таҡтаға ниндәйҙер хәрефтәр яҙа ла:

— Күсереп яҙығыҙ: был «а» хәрефе. Ә быныһы «б»,— тип хәреф өйрәтә. Малайҙар, белепме, белмәйме, яҙып маташа. Ҡыҙҙар һаман шул аптыраныу хәленән сыға алмай. Мин дә берсә ҡәләмде, берсә пероны тотоп ҡарайым. Ҡулым һис тә ипкә килмәй. Етмәһә, күрәһең, алыҫтан насар күргәнмендер инде, таҡтаға яҙылған хәрефте йүнләп абайлап та булмай. Миңә, үгәй әсәйҙән оҫта таҡмаҡлатып он иләргә, үҙләндергәнсе ҡамыр баҫырға, ҡағыҙ йоҡалыҡ итеп һалма йәйергә, ҡылдай нәҙек, тигеҙ итеп туҡмас ҡырҡырға, етмәһә, бала кендегенә оҡшатып бик ваҡ һәм тук билмәндәр яһарға өйрәнгән, өйҙә «егәрле» ҡыҙ тигән исем алырға өлгөргән кешегә, бынауында, етмәһә, малайҙар араһында, «а» тип тә яҙа белмәй, ҡәләмде йәтеш тота алмай ултырыу сикһеҙ ғәрлек тойола. Был һалкын, ҡотһоҙ «мәптек»тә минең күңелде үҙенә ылыҡтырырлыҡ бер ни ҙә күренмәй, күрәһең. Мин бер нисә көн генә барам да «уҡыуҙан» туктайым.

Етем тормошоноң һәйбәт бер яғы бар уның. Ул — ирек. Йәшәргә лә, үлергә лә тулы ирек. Етем кеше бик кескәйҙән үҙе уйлап, үҙе хал итергә өйрәнә. Уны ҡурсыған кеше булмаған кеүек, ирекһеҙләп, ҡыҫтап, ҡайғыртып тороусы ла булмай. Миңә лә: «Ниңә уҡырға йөрөмәйһең? Бар уҡы!»— тип әйтеүсе булманы. Шулай итеп, мин ул йылда уҡырға йөрөмәнем.

II

Тәү башлап мин мәктәпкә 1920 йылда индем. Был йылды Хәлимә апай шул үҙебеҙҙең районды Аҡман тигән ауылында уҡыта ине. Мине лә шунда алып китте. Ағайым Ғибадулла, бер кәзә тиреһен үҙе иләп, миңә тун тегеп бирҙе. Бер кәзә тиреһенән тун сыҡҡас, буй ни хәтле генә булғандыр инде минең? Ә бит ул йылды миңә ун ике йәш тула ине. Ул саҡтағы башҡорт ғәҙәтенсә еткән ҡыҙ бит!

Аҡман ҙур, теҙәк ауыл ине. Бында ике мәктәп бар. Был йылда ҡыҙҙар-малайҙар тәү тапҡыр бергә уҡытыла. Мине беренсе класҡа ултырттылар. Свнки мин, уҡый белһәм дә, ҡулыма ҡәләм тота белмәйем. Етмәһ 1 цифрҙарҙы ла, китап биттәренән ҡарап, ташҡа баҫылғанынса, үҙ алдыма ғына өйрәнгәнмен. Мәктәптә уҡытыу татар телендә алып барыла. Бығаса мин татар телен китаптан уҡып белһәм дә, һөйләшеп, һөйләшкәнде ишетеп өйрәнмәгәнмен. Шуға күрә мин һөйләшә башлаһам (күрәһең, телде боҙоп, бик ҡыҙыҡ итеп һөйләшәмдер инде), ҡыҙҙар-малайҙар көлмәй түҙә алмай. Шунан мин бында тағы үҙ эсемә бикләнәм. Мине һөйләштерергә тырышып та, бер һүҙ ҙә әйттерә алмағас, ҡайһы берәүҙәр апайымдан:

— Хәлимә, һинең һеңлең телһеҙме әллә?— тип һорайҙар. Ләкин дәрестә, уҡытыусы алдында, мин өндәшмәй ултыра алмайым. Күңелдә ҡапыл дөрләп тоҡанып киткән уҡыу теләге минен бөтә ҡырыҫлығымды еңә.

Аҡманда уҡығанда мине кешенән ситләткән икенсе бер сәбәп тә бар ине. Ул да булһа, әлеге ағайым үҙе иләп, тегеп биргән кәзә тун булды. Мәктәпкә барып инеү мәнән, бигерәк тә шаян малайҙар, мине үртәп:

— Мә-ә-ә! Мә-ә!— тип, кәзә булып, баҡыра башлайҙар. Тунды мәктәптең ишек яҡ стенаһындағы дөйөм кейем элгестә һис тә тотмайҙар: «Мә-ә-ә!»— тип, ҡысҡыра-баҡыра, мейес артына йәки мейес башына ырғыталар. Уларҙыңошо эскерһеҙ, балаларса шаяртыуын мин өнһеҙ-һүҙһеҙ, ләкин сикһеҙ ауыр кисерәм. Хатта бер саҡ, ошо үсекләүҙәрҙән тамам биҙеп, ҡыштын. сатлама һыуыҡ бер көнөндә, Исем ауылына, ағайымдарға ҡайтып китәйем тип, йәйәүләп юлға ла сығып киттем. Юлда мине Аҡман ауылының Ҡыҙыл Мәсеттән ҡайтып килгән ниндәйҙер бер ағай, тотоп алып, Хәлимә апайға тапшырҙы.

— Ниңә улай ҡасып ҡайтырға булдың? Егерме саҡрым ерҙе йәйәүләп үтә алыр инеңме ни? Әлдә таныған кеше осраған. Юҡһа туңып үлер инең бит. Бүре ашар ине лә баһа! Йә, ниңә улай миңә әйтмәй ҡайтырға булдың?— тип Хәлимә апай төрлөсә һорашып ҡараны. Ләкин минән, ғәҙәттәгесә, бер һүҙ ҙә ала алманы.

— Әгәр тағы шулай ҡайтырға уйлаһаң, мин һине бер ҡасан да үҙем менән алып йөрөмәм, уҡытмам,— тине Хәлимә апай. Был һүҙ мине ҡасып ҡайтыу уйынан бөтөнләй дүндерҙе. Мин түҙергә булдым, сөнки минең сикһеҙ уҡығы.м килә ине.



Ярты ҡыш үтеүгә, мин татар телендә һөйләшергә тамам өйрәlеп алдым. Инде шаяи малайҙарға мине үртәр өсөн әлеге кәзә тунlан башҡа нәмә ҡалманы. Тора-бара кәзә тун да кейем элгестә ты[ыс ҡына эленеп тора башланы. Сөнки мин уҡыуҙа ҙур һикереш [һаным. Мине бик тиҙ арала беренсе кластай икенсе, өсөнсө класса, унан дүртенсе класҡа күсерҙеләр. Мин үҙемдең яҙырға нисек өйрәнеп китеүемде хәтерләмәйем. Күрәһен, электән күп кенә китаптар уҡырға өлгөргән ун ике йәшлек ҡыҙға бының өсөн һис тә күп көс түгеү кәрәк булмағандыр.

Бығаса минең кәзә тунға тынғы бирмәүсе малайҙарҙан, йондоҙ кеүек нурланып, балҡып торған яҡты күҙле, шаян малай Барый Сафин, оҙон, арыҡ һары малай Әхтәм Ихсан(яҙыусы) дүртенсе класта уҡый ине. Мин улар янына күсеп ултырҙым. Аҙаҡ башҡорт совет матбуғатынын, иң күренекле һәм һәләтле журналистарынан береһе булып киткән мәрхүм Барый Сафин менән беҙ Каруанһарайҙа ла бергә уҡыныҡ. Ул ғәжәп яҡшы күңелле иптәш, сикһеҙ һәләтле һәм эшсән журналист, үҙ эшенә йәне-тәне менән бирелгән коммунист ине.

Барый Сафин да, Әхтәм Ихсан да шул йылда уҡ шиғыр яҙа башлағайнылар. Барый яҡшыраҡ та, талантлыраҡ та яҙа ине, әлбиттә. Ләкин ул, ни өсөндөр, аҙаҡ был эшен дауам итмәне. Күрәһек, урта-марҙа шағир булыуҙан яҡшы журналист булыуҙы артыҡ һанағандыр. Аҡыллы һәм баҫалҡы кеше ине шул ул Барый. Аяуһыҙ улем уны бик ваҡытһыҙ һәм ҡапыл беҙҙен. аранан тартып алды.

Шулай итеп, мин, кәзә тунлы ҡырағай ҡыҙ, дүртенсе класта уҡый башланым. Ул йылда бында тел һәм әҙәбиәт дәресен Солтангәрәй Тукаев тигән бик прогрессив фекерле йәш кеше уҡыта, унын дәресе миңә айырата оҡшай ине. Әле булһа хәтеремдә, Тукаев инша (сочинение) яҙҙырған саҡта, сюжетлы күренештәр төшөрөлгән һүрәттәр алып килеп ҡара таҡтаға элә лә:

— Йә, ошо күренештә кем нимә күрә? һөйләп ҡарағыҙ әле,— ти. Беҙ күргән, аңлағаныбыҙҙы үҙебеҙсә һөйләп бирәбеҙ. Шунан ул беҙгә:

— Ошо күренешкә ҡарап инша яҙығыҙ. Хикәйә йәки шиғыр менән яҙырға ла мемкин,— ти торғайны. Ғәҙәттә, иншаны Барый шиғыр менән яҙа, мин хикәйә менән яҙа торғайным. Тукаев үҙе лә шиғыр яҙа торған булған, күрәһең. Сөнки минең шул саҡтағы бер альбомға ул бер шиғырын яҙып ҡуйған. Был шиғырында ул мине, яҙыусы буласаҡ ҡыҙ, тип атай. Минең кеүек кәзә тунлы, ҡырағай бер ҡыҙға шул йылдарҙа шундай ҡыйыу өмөт менән ҡарарға ул ниндәй нигеҙ тапҡандыр, уныһы миңә билдәһеҙ, әлбиттә.

Солтангәрәй Тукаев шул саҡта уҡ үпкә ауырыуы менән яфалана ине. Оҙаҡламай унын үлеп ҡалыуын ишетеп, йөрәгемдең ҡаты һыҙланғаны әле лә хәтеремдә.

Аҡман ауылы ул саҡта уҡ культуралы ауыл ине. Унан сыҡҡан Ғәлим Сиражетдинов, Ғөбәй Сиражетдинов кеүек ҙур уҡы-

мышлы кешеләр, коммунистар яңы ғына урынлашҡан совет органдарында волость һәм кантон мәғариф бүлектәрендә эшләйҙәр. Исхаҡов, Ихсанов, Насыров һәм башҡа бик күптәр райондың терлө ауылдарында уҡытыусылыҡ итәләр. Ауылда шул йылдарҙа уҡ «Союз молодежи» исемендә комсомол ойошмаһы барлыҡҡа килде. Быға бөтә уҡытыусылар һәм күпселек уҡыусылар яҙылды. Мәктәп көндөҙ уҡыу-уҡытыу, ә кистәрен шул ойошма ағзалары һәм бөтә прогрессив йәштәр ойошторған кисәләр, концерттар менән гөр килеп тора. Кистән таҡғаса бөтә тирә-яҡҡа хөрриәт йырҙары яңғырай. Хәтеремдә, ул саҡта Интернационал («Бәйнәлмиләл» тип йөрөтөлә ине) менән бер ҡатар Башҡортостан халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың «Ҡыҙыл байраҡ» тигән шиғыры ауыҙҙан төшмәй йырлана торғайны:

...Эй ҡыҙыл байраҡ,
Нур бир йыһанға.
Әйҙә, эшселәр,
Алға һәм ялға!..

Был шиғырҙың, кем тарафынан сығарылғандыр, үҙенә генә хас, бик дәртле көйө лә бар ине. Унан башҡа ла халыҡ араһына бик ныҡ таралып, популярлашып киткән революцион йырҙар күп ине ул саҡта. Үкенескә ҡаршы, ул йылдарҙың революцион йыр ҡомарткылары менән ҡыҙыҡһынған, уларҙы йыйған музыка әһелдәре беҙҙә әлегә күренмәй һымаҡ. Ә кәрәк ине.

Аҡман ауылында бай ғына китапхана ла була торғайны. Мин тәү башлап унда татар әҙәбиәте классиктарынан Ғәлимйән Ибраһимов, Фәтих Әмирхан әҫәрҙәре, Мәжит Ғафури, Сәғит Рәмиев, Дәрдмәнд шиғырҙары менән таныштым. Ғәлимйән Ибраһимовтың «Йәш йөрәктәр» романын мин тәү башлап шунда уҡып сыҡтым.

Шулай итеп, мин был йылда башланғыс мәктәпте тамамланым. Күп әҙәби китаптар уҡыным. «Хөрриәт заманының», йәғни революция тулҡынының (тирә-яҡ ауылдарға сағыштырғанда, әлбиттә), ин. ҡыҙыу ҡаҙанында ҡайнаным. Был минең өсөн ҡайтанан тыуыу йылы булды. Аҡман ауылы ошоғаса минек хәтеремдә күнел дәфтәренен. иң яҡты сәхифәләренән береһе булып һаҡланып килә.

## III

Мәктәптә уҡыуҙар туҡталғас, Хәлимә апай мине тағы ағайымдарға илтеп ҡалдырҙы. 1921 йылғы ҡаты аслыҡ башланды. Халыҡта «Ауырыу аш түгел» тигән бер мәҡәл бар. Ләкин ауырыуҙың аш булған сағы ла була икән уның. Быны минең 1921 — 1923 йылдарҙағы хәлем дөреҫләй ала. Был йылдарҙа мин бер өҙләкһеҙ тапма (малярия) менән ауырыным. Һис тә ашағы килмәй. Һыуһап ҡына торола. Ә һыуһынға эсергә «аллаға шөкөр» һыу етерлек. Һис шикһеҙ, мин ошо арҡала ғына астан үлмәй ҡалдым да. 1923 йылдын. көҙөндә Хәлимә апай мине тағы үҙе менән алып китте.

Был ваҡытта ул шул уҡ үҙебеҙҙең районды Ыуары тигән ауылында уҡыта ине. Бында мин, күрәһең, тамаҡ туйғанғалыр, бик тиҙ аяҡҡа баҫтым. Тағы дүртенсе класҡа инеп уҡыным. Сөнки унан да юғары класс юҡ ине бында. Әҙәби китаптар уҡырға ла тағы мөмкинлек асылды. Ошо ауылдын. Исмәғил тигәи муллала бай ғына китапхана бар ине. Уларҙын, минең менән бер класта уҡыған ҡыҙҙары аша (Бибисара исемле ине шикелле) мин был китапхананан теләгәнсә китаптар алып уҡый инем. Шул китапхананан «Әбүғәлисинә», «Гипнотизм һәм магнетизм» тигән китаптарҙы алып уҡығандан һуң, гипнотизер булырға ла үҙем кеүек бөтә ярлы-етемде бәхетле итеп бөтөргә хыялланып, төндәр буйы йоҡлай алмай уйланып сығыуҙарым әле булһа хәтеремдә тора. Был китаптың, гипнотизер булыр есөн иң элек үҙеңдә характер тәрбиәләргә, маҡсатҡа ирешеү юлында ныҡышмалы һәм тырыш булырға, намыҫлы, ғәҙел, тоғро холоҡло, изге күңелле булырға кәрәк, тигән өйрәтеүен дә бик яратыуым, үҙемдә шундай сифаттарҙы тәрбиәләргә тырышып йөрөүҙәрем дә иҫтә тора.

1924 йылдың йәйендә Ташлыла (ул ваҡыттағы волость үҙә-, гендә) ике айлыҡ курс асылды. Ул техникумдарға уҡытыусылар гәҙерләй ине. Мин дә ошо курсҡа инеп уҡыу бәхетенә ирештем. ( Мине беренсе әҙерлек курсына алдылар. Әҙерәк уҡығас, белмәйем, ни өсөндөр, икенсе әҙерлек курсына күсерҙеләр. Икенсе әҙерлек курсында ҡыҙҙар бөтөнләй юҡ ине. Мин яңғыҙым бер партала ултырам. Малайҙарҙы үҙ партама ултыртмайым да, улар менән һөйләшмәйем дә. Ҡыҙҙарҙы мәктәпкә йөрөтөүҙе әле күптәр гонаһ һәм ярамаған эш тип һанаған бер заманда яңғыҙыма малайҙар араһында ултырып уҡыуы еңел булмағандыр, күрәһең.

Ошонда, Ташлыла, курста уҡып йөрөгән саҡта, мин тәү башлап ҡыҙыл галстуклы кешене күрҙем. Ул — шағир Батыр Вәлид ине. Өфөлә пионер вожатыйҙары әҙерләү курсын тамамлап ҡайтҡайны шикелле. Бына ҡара салбар, аҡ күлдәк кейгән, оҙон ҡара сэсле, ҡаҡса буйлы, янып торған ҡыҙыл галстуклы быжыр бер сгет, Ташлы урамына һыймай, баш сайҡап, үтеп-һүтеп йөрөй. Уның артынан һәр саҡ бер төркөм бала эйәргән була. «Вожатый», «пионер» тигән, мин әле уғаса ишетмәгән һүҙҙәр ҡабатлана уның янында.

«Нимә, кем була икән ул вожатый тигән нәмә? Ниңә улай ҡыҙыл муйынсаҡ тағып алды икән был ағай?..»— тип үҙ алдыма үҙем ғәжәпләнәм мин. Һәр саҡ унын, артынан эйәрә биреп ҡалам. Ә Батырҙың аяҡтары, гүйә, ергә теймәй. Әйтерһең дә, ҡыҙыл галстук уға ҡанат хеҙмәтен үтәй. Ул елә, оса... Минең хәтерҙә ул ғүмергә шул ынтылышлы осошта кәүҙәләнеп ҡалған.

Шул йәйҙе Батыр Вәлид, әҙерлек курсынан һәм Ташлы балалар йортонан бер төркөм балаларҙы ойоштороп, йәйәү Өфөгә, Ленин мәктәбенә, алып китте. Бер төркөм балалар, Ырымбурҙа, Каруанһарайҙа асылған башҡорт педагогия техникумына барырға булып, Батырға эйәрмәй ҡалды. Мин дә ҡалыусылар араһында инем.

## 3. КАРУАНҺАРАЙ

Каруанһарай — башҡорт хеҙмәтсән халҡының азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ өсөн алып барған күп быуатлыҡ көрәш тарихына кескәй бср сохифә булып ингән йорт. Бында Октябрь реаи.ноция-

һына хәтле Ырымбур губернаторы торған. Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң, туранан-тура Лениндың күрһәтмәһе менән, был йорт башҡорт хеҙмәтсән халҡына ҡайтарып бирепә. Бына ошо йортта инде башҡорт хеҙмәтсән халҡының балаларын уҡытыу өсөн тәүге техникумдарҙың береһе асыла. Уны башта ИНО тип йөрөтәләр. Уҡытыу программаһы ла институтҡа хас ине шикелле. Был техникум Каруанһарайҙа 1934 йылға хәтле йәшәне. Башҡорт хеҙмәтсән интеллигенцияһын әҙерләүҙә ул бик ҙур урынды тотто. Башҡорт совет әҙәбиәтенең иң күренекле вәкилдәре булған Сәғит Агиш, Баязит Бикбай ҙа, танылған журналистар Барый Сафин, Ҡасим Аҙнабаев та, халыҡ артисткаһы Тацһылыу Рәшитова ла, педагогия фәндәре кандидаты Сәғит Әлибаев та, атҡаҙанған уҡытыусылар Фәйзи Бакаев, Мәфтуха Нагаева, Шафиҡа Ғәйнуллина, Хаят Әбушахмина һәм башҡа бик күптәр ан.-белемгә, халыҡҡа хеҙмәт юлындағы тәүге етди аҙымдарын ошо техникумдан башлап киткән кешеләр.

Техникум ике әҙерлек курсы һәм дүрт төп курстан тора, йәғни алты йыллыҡ ине. 1924/25 уҡыу йылынын. көҙөндә ишн дә ошо техникумға барып индем. Мине башта беренсе әҙерлек курсына алдылар. Бер-ике ай уҡығас, икенсе әҙерлек курсына күсерҙеләр.

Икенсе әҙерлек курсында, Сермән һәм Ташлы балалар йортонда тәрбиәләнеп, ете класс тамамлап, арыу уҡ белем алған балалар уҡыйҙар. Хәтеремдә, был класта рус теленән синтаксисты үтәләр ине инде. Ә мин, бында килгәс кенә рус хәрефтәрен тәүләп күргән ҡыҙ, улар менән тиң өлгөрөп уҡырға тейеш булдым. Әлбиттә, был минең өсөн енел бурыс түгел ине. Ләкин миңә, бик кескәйҙән үҙ көсөиә таянып йәшәргә өйрәнгән балага, ауырлыҡ алдында сигенеү тигән нәмә ят ине. Шулай итеп, мин техникумды биш йылда, йәғни 1929 йылда, унышлы тамамлап сыҡтым. Хәҙерге нөктәнән сығып ҡарағанда был, әлбиттә, бик ябай хәл. Ә ул ваҡыт есөн башҡорт ҡыҙынын техникум тамамлап сығыуы ҙур ваҡиға ине.

Техникумда күбеһенсә үҙҙәренен, әҙәби йәки ғилми хеҙмәттәре менән матбугатта таиылған Фатих Кәрим, Ибраһим Ҡыпсаҡ (Ғабдулла Ибраһимов), Ғәлим Айҙаров, Ибраһим Бикчәнтәев кеүек заманынын. юғары культуралы педагогтары уҡыта ине. Уларҙын. һәр бер дәресе минен, өсөн яны донъя асыу менән бер була торғайны. Миңә тарихи һәм ижтимағи фәндәр айырата оҡшай ине.

Ә инде әҙәбиәт дәресе минец өсөн оло байрам ине. Беҙҙен әҙәбиәт уҡытыусыһы Ғәлим Айҙаров ысын мәғәнәһе менән үҙ эшенен, оҫтаһы һәм патриоты ине. Унын дәресендә һалкын һәм ғәмһеҙ йөрәк менән ултырырға һис тә мөмкин түгел. Ул уҡыусыларын, ярһытып, ялҡынландырып, иҫ киткес гүзәл әҙәби образдар донъяһына алып инеп китә лә яҙыусының иң мөкәддәс, ин. гүзәл тойғоларын уның менән бергә татырға, кисерергә, яҙыусы менән бергә ҡанатланырға йәки нәфрәтләнергә мәжбүр итә. һин күп ваҡыт үзендец дәрестә ултырыуынды ла онотаһың. Сөнки Ғ. Айҙаров бер ҡасан да ҡағыҙға ҡарамаҫ. һүҙ тапмай ыҡ-мыҡ итеп тормаҫ, дәресен бер милләт әҙәбиәте менән генә сикләмәҫ. Әҙәбиәтте һәр ҡасан дәүергә бәйләп алып барыр, шул дәүерҙә татар, башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, рус һәм башҡа милләт әҙәбиәттәрендә лә ниндәй ыңғай күренештәр, ниндәй һәйбәт әҫәрҙәр булған, ниндәй яҙыусылар йәшәгән, уларҙың тормошо, көрәше, эше — береһе лә ҡалмаҫ. Унын дәресе, икһеҙ-сикһеҙ гүзәл дарья булып, беҙҙең йәш йөрәктәрҙе эшкә, хеҙмәткә ярһыта, ил есөн, халыҡ өсөн намыҫлы хеҙмәткә дәртләндерә, яңы, йәш совет иленә ҡарата йөрәктәрҙә сикһеҙ мөхәббәт тәрбиәләй ине.

Ғәлим Айҙаров башҡорт халыҡ ижадын өйрәнеү, уны йыйыу эшенә мөхәббәт тәрбиәләүҙә лә күп хеҙмәт һалды. Ул беҙҙең әҙәби түнәрәктәрҙә ҡатнаша ине. Бер йылды ул беҙҙән, әҙәбиәт һөйөүселәрҙән, бер нисә фольклор китабы әҙерләү төркөмө ойошторҙо. Бер төркөм уҡыусылар шиғри фольклорҙы, бер төркөмө эпостарҙы, бер төркөмө әкиәттәрҙе йыйырға һәм китап итеп сығарырға әҙерләргә тейеш ине. Мин әкиәттәр йыйынтығын әҙерләүсе төркөмдөн. етәксеһе итеп билдәләнгәйнем. Ләкин беҙ был эште аҙағына хәтлем алып барып сыға алманыҡ. Беҙҙен. уларҙы күсереп, яҙып бөтөрлөк ҡағыҙыбыҙ булманы. Етмәһә, оҙаҡламай, ни сәбәптәндер, Айҙаровты икенсе эшкә күсерҙеләр.

## 4. Тәүге аҙым

Каруанһарайҙа әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныусылар бик күп була торғайны. Рус әҙәбиәте донъяһында М. Горький, В. Маяковский кеүек гиганттарҙын, иҫ киткес революцион пафослы ғорур тауыштары бөтә донъяны дер һелкетерлек ҡеүәтле яңғыраған йылдар ине был. Татар әҙәбиәтендә һ. Таҡташ, Ҡ. Нәжми, Хәсән Туфан, Ғ. Ҡотой, башҡорт әҙәбиәтендә Д. Юлтый, Ғ. Амантай, Афзал Таһиров, Төхфәт Йәнәби, Батыр Вәлидтәр был йылдарҙа бөтә тауыштан йырлап, уҡыусы йөрәген тотош биләп алғайнылар.

Бына ошондай дөйөм әҙәби күтәрелеш йылына тура килде беҙҙен, йәшлек. Беҙҙең техникумда «Йәш быуын» тигән айлыҡ ҡульяҙма әҙәби журнал һәм «Уҡыусы» тигән ике аҙналыҡ стена газетаһы даими рәүештә сығып килә ине. Яҙырға теләүселәр ҡәләмдәрен шунда һынайҙар. Ләкин уларҙа әҫәр баҫтырыуы еңел түгел. Талап ҙур, урын тар була. Шунлыҡтан ҡайһы бер шаяныраҡтар үҙ журналдарын, йәғни официаль орган булмаған журналдар, сығара башлайҙар. Ләкин комсомол быны ҡаты тыя ине.

Техникумда икенсе йыл ғына уҡып йөрегән саҡта мин дә аңламаҫтан шундай бер журналда ҡатнашып алдым.

Бер саҡ техникум күләмендә талантлы шағир булып танылған мәрхүм Төхфәт Моратов (Бөйөк Ватан һуғышы ҡорбаны) миңә:

— Ҡайҙа, миңә берәй хикәйәвде бир әле. Мин уны үҙемдең дәфтәремә күсереп яҙып ҡуйырмын,— тине. Шунан мин уға бер хикәйә яҙып бирҙем. Хикәйәнен. тулы йөтмәткеhе иҫемдә ҡалмаған. Ғәжәп матур күл янында ҡыҙ менән егет ғишыҡ хаҡында һөйләшеп ултыралар ине шикелле...

Бер саҡ беҙҙе, әҙәбиәт түңәрәге йыйылышынамы, белмәйем, комсомол йыйылышынамы саҡырып, бешергә тотондолар.

— «Аҙым» тигән йәшерен журнал сығарып яталар!— тип мин күрмәгән-белмәгән бер йоҡа ғына дәфтәр киҫәген баш осонда болғап беҙҙе тиргәйҙәр.— Бына, Зәйнәп мөхәббәт хаҡында яҙған. Мещанлыҡ бит был! Комсомолка кешегә мөхәббәт хаҡында яҙырға яраймы ни?.. Етмәһә, ҡыҙы тап мещанкаларса осло дағалы туфли кейгән, сәсен бөтөркәләгән!..— тип бешәләр генә. Хәтеремдә, ул саҡта техникумда уҡып йөрөгән шәп кейемле, тәтәй туташтар миңә — киндер күлдәкле,. ялан аяҡлы көйө, әҙәбиәт кеүек изге йортҡа баҫып инергә баҙнат иткән ҡыҙға айырыуса нык ташландылар. Мин, әрләнеүҙе күп ишетеп һәм бөтә кешенән ҡурҡып өйрәнгән етем бала, бер ни ҙә өндәшмәйем дә, бер ни ҙә аңламайым да. Ҡурҡып, ҡалтырап тик ултырам. Тик Төхфәт Моратов ҡына тороп ниҙер һөйләй.

— Был йәшерен журнал түгел, ә минең иҫтәлек дәфтәрем. Мин унда үҙемдең дуҫтарымдың әҫәрҙәрен күсереп барам. Иҫтәлек дәфтәрен алып уҡырға һеҙҙен. хаҡығыҙ юҡ!— тип ҡарыулаша.

Техникумда беҙҙең курсҡа хәтле гел хәлле, аңлы ғаиләләрҙән сыҡкан балалар уҡыған. Шуға күрә улар кейемле лә, ҡыйыу һәм шат та инеләр. Мин барып ингән йылды тәү тапҡыр бында Сермән һәм Ташлы балалар йортонан уҡыусылар алынды. Беҙҙен курс шуларҙан төҙелде. Барыу менән беҙҙең аяҡтарға бер төҫтән арский тип йөрөтөлгән һары ботинкалар, өҫкә малайҙарға ла, ҡыҙҙарға ла бер төҫтән, итәгенән еңе оҙон ҡыҫҡа пальтолар (полупальто) алып кейҙерҙеләр. Бығаса уҡығандар араһында беҙ бәләкәслек һәм аламалыҡ менән айырылып торабыҙ. Шуғалыр инде беҙҙең барыбыҙға ла «фуфу»ҙар тигән исем ҡуштылар. Ул саҡта «Фуфу» тигән ваҡ ҡына сигарета булған шикелле.

Әлеге «Аҙым» журналын тикшереп ҡайтҡандан һуң, теге тәтәй туташтар минән:

— Аһа, белмәй ҙә торғанбыҙ, «фуфу»ҙарҙан яҙыусы сыҡҡан икән дә баһа!— тип мыҫҡыллапмы, мәрәкәләпме көләүҙе ятаҡта ла бер яҙға хәтле дауам иттеләр. Шунан алда ғына стена газетаһында баҫылып сыҡкан шиғырымды үҙҙәренсә боҙғолап декламировать иттеләр. Ә мин: «Бынан һуң яҙмайым. Ғүмерҙә лә яҙмайым»,— тип эстән генә ант итәм. һәм шулай булды. Теге



ваҡытта мине, өндәшмәҫ, ҡырағай ҡыҙҙы, нисектер һөйләштерергә, хатта хикәйә яҙҙырып алырға ла өлгәшә алған, ғәжәп яғымлы һәм яҡшы күңелле Төхфәт Моратов та бынан һуң мине һөйләштерә, ни ҙә булһа яҙҙырып ала алманы.

Икенсе курста уҡыған йылды беҙҙең курстың танылған яҙыусылары Суфьянов Сабит (Әбус), Баязит Бикбай, Лотфый Баязитов, Байымовтар «Баҫҡыс» исемле, шулай уҡ официаль булмаған, ғәжәп уткер телле, сатирик журнал сығара башланылар. Мине лә ҡатнашырға саҡырҙылар. Мин, бер «өркөтөлгән кеше», унда ҡатнашманым. Был ваҡытта мин инде үҙем комсомол ячейкаһында актив эшләүсе комсомолка булып алғайным. Шунлыҡтан «Баҫҡыс» журналын официаль органға әйләндереү, етди һәм өлкән курс студенттарының әҫәрҙәрен баҫыуҙан уҙмаған «Йәш быуын» янында йәштәр өсөн дә журнал булдырыу мәсьәләһен хәл итеүҙә мая индерергә тырыштым. Аҙаҡ был журнал, ячейканың официаль органы булып, беҙ уҡып сыҡҡансы дауам итте. Ғәжәп үткер телле, келкө журнал ине ул. Үҙе тотошлай тип әйтерлек шиғри әҫәрҙәрҙән тора ине.

1929 йылда беҙҙең курстың «яҙыусылары», әҙәбиәткә яҡынайыу маҡсаты менән, Өфө педагогия техникумына күсергә булдылар. Стипендия мәсьәләһе лә ҡыҫынҡы булғас, техникум администрацияһы быға ҡаршы килмәне. Шул саҡта Баязит Бикбай, Суфьянов Сабит, Лотфый Баязитов һәм тағы бер нисә егет Өфөгә күсте. һәм шунда уҡ Өфөнөң газета-журнал органдарына эшкә урынлашып, әҙәбиәттә актив ҡатнашып киттеләр. Мин дә улар менән китергә теләгәйнем дә, техникум администрацияһы ебәрмәне. Ул саҡта башҡорт ҡыҙҙарынан техникумды тамамлаусылар аҙ ине.

— Бер башҡорт ҡыҙын үҙебеҙҙә уҡытып сығарырға теләйбеҙ,— тинеләр. 1929 йылда, техникумды тамамлағас, мин: «Үҙемде эшкә иң алыҫҡа ебәреүегеҙҙе һорайым»,— тип ғариза яҙып, Баймаҡ районы (хәҙер Әбйәлил районы) Билал ауылына уҡытыусы булып киттем.

Техникумда уҡыған саҡта, 1927 йылда, мин «Гөрләүектәр араһында» тигән бер хикәйәмде Өфөгә, Яҙыусылар союзы органы булған «Сәсән» журналына ебәргәйнем. Ләкин унан бер яуап та алманым. Шунан һуң бүтән әйбер ебәрмәнем. Бына бер саҡ, 1930 йылда, мин уҡытыусы булып сығып, мәктәптә эшләп кенә түгел, Билал ауылында дулатып колхоздар ойоштороп йөрөгән, политик яҡтан да һәм матур әҙәбиәткә ҡараш мәсьәләһендә лә нык ҡына уҫкән бер заманда, «Сәсән» урынына сыға башлаған «Октябрь» журналында теге минең «Гөрләүектәр араһында» тигән хикәйәм баҫылып килә. Мин уҡыйым да тағы теге «Аҙым»да сыҡкан хикәйәнән һуң кисергән ауыр тойғоно кисерәм. Хикәйәне һис кенә лә төҙәтмәгәндәр, ҡәләм тыҡмағандар, хатта күп урында, танымау арҡаһында, яңылыш һүҙҙәр киткән...

«Юҡ, мин айтәм, хәҙер мин был хикәйәне матбуғатҡа тәк-

дим итмәҫ инем. Хәҙер мин былай яҙмаҫ инем. Ниңә генә ебәрҙем икән?.. Юҡ, бынан һуң, тамам өлгөрөп етмәйенсә, матбуғатҡа бер ни ҙә тәҡдим итмәйәсәкмен»,— тип тағы үҙ-үҙемә һүҙ бирәм.

Шуныһы ҡыҙыҡ, аҙаҡ мин күп йылдар газеталарҙа, журналда, нәшриәттә, радиокомитетта (бөтәһе 21 йыл) әҙәби работник йәки редактор булып эшләнем.

Ләкин үҙ әҫәрҙәрем өҫтөндә эшләргә, елгөрөп еткәс кенә матбуғатҡа сығырға тигән теләгемә ирешергә мин һис тә йүнләп ваҡыт таба алманым. һәр ваҡыт матбуғаттың яуаплы органдарында эшләү, йәмәғәт эшендә актив ҡатнашыу, ғаилә, бала минең бөтә ваҡытымды алды. Башлаған эштәр шул көйө ҡала барҙы. 1929 йылда, Билалда укыткан саҡта, яҙа башлаған «Бер ғүмерҙең тарихы» тигән трилогияның, беренсе китабын — «Кәмһетелгәндәр»ҙе мин 1958 йылда ғына баҫтырып сығара алдым.

Унан һуң. мин, өлгөрөп еткәс, иң шәп әҫәр яҙғас ҡына матбуғатҡа бирергә кәрәк, тигән фекеремден, яңылышлығын да бик һуңлап аңланым. Яҙған әҫәренде иптәштәргә укытмай, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап елгөрөп етеп булмай икән ул.

Бына Бөйөк Ватан һуғышы башланып китте. Ил өҫтөнә ауыр һынау йылдары килде. Минен, ғаиләмә лә ул күп ауырлыҡтар өҫтәне. Ирем Ғәзиз Әминев һуғыш башланған көндө Ленинград янында үҙ часы менән ил һағында тора ине инде. Минең ҡулда ес йәш бала ине. Ләкин беҙ, егерменсе, утыҙынсы йылғы комсомол быуыны, ауырлыҡ алдында һығылып, икеләнеп ҡалыуҙы белмәй инек. Ниндәй генә ауырлыҡ күрелмәһен, ул беҙҙен еңеүгә, хаҡлыҡтын. тантана итеүенә булған ышанысыбыҙҙы һис кенә лә ҡаҡшата алманы. Мин үҙемден. ошо йылда, йәғни 1941 йылдын. ноябрь айында, Коммунистар партияһы сафына инеүемде һәм бөтә көс менән йәмәғәт эшенә сумып китеүемде лә ошо ҙур ышаныстың, бөйөк Ленин юлына булған ҡаҡшамаҫ мөхәббәттең һөҙөмтәһе тип ҡарайым. Шулай итеп, минә, коммунист кешегә, яҙыр өсөн ниндәйҙер айырым, арыу шарттар көтөп ятырға мөмкин түгел ине инде. Унан һуң илгә шундай ҙур һынау килгән саҡта ла ҡәләмгә тотонмағас, ғүмер буйы уйымдан сыҡмаған яҙышыу теләгенән ни мәғәнә?! Шулай уйланым мин һәм һуғыштың тәүге айҙарында уҡ балалар өсөн «Партизан малай» тигән хикәйә яҙып ташланым. Ул 1942 йылда китап булып сыҡты. Бынан һуң, мин ҡатмарлы эш шарттарында, һирәкләп булһа ла, матбуғатта ҡатнаша башланым.

Тағы ошондай бер фактты иҫкә алып үтмәй булмай: мин бетә ғүмеремде әҙәбиәткә арнаһам да, «тамам елгөрөп етергә» мемкинлек һәм ваҡыт тапмауҙан, матбуғатҡа сыҡмай ҙа ҡалыр инем, бәлки. Минен, матбуғатҡа сығырға ҡыйыулыҡ итеуемә ин, тәү башлап мәрхүм Низам Ҡәрипов ағаи сәбәпсе "улды. ер ваҡыт, 1941 йылдың яҙында, мин радиокомитетта әҙәби тапшырыуҙар редакторы булып эшләгән саҡта, ул мине Яҙыусылар союзына саҡырып алды. Ҡәрипов ағай был саҡта Яҙыусылар союзынын, председателе булып эшләй ине.

— Иптәш Биишева, һеҙҙе яҙыша тип әйтәләр. Ниңә беҙҙең журналға бер ни ҙә алып килмәйһегеҙ?— тип һораны ул минән.

— Яҙышырға теләк бар ҙа. Бер ниҙе лә бөтөрә алған юҡ. Башланған да ташланған. әйберҙәр бар,— тинем мин. Был ваҡытта мин, радиола көндәлек тапшырыуҙарҙы әҙерләп бөткәндән ҡалған ваҡытта, әлеге 1929 йылда башлаған романды яҙып маташам. Өсөнсө китабынын. аҙаҡҡы һөйләмдәренә хәтле башта уйланып бөткән. Тик ҡағыҙға төшөрөп бөтөп өлгөрөргә генә ваҡыт табып булмай ине. (Был меңләгән битләп яҙылған әйберҙәр, һуғыш йылдарында яғылмаған, еүеш бүлмәнең мөйөшөндә. ятып, сереп бөттө.)

— Йә, иртәгә үк берәй хикәйәнде алып кил әле. Мин укып карайым,— тине Ҡәрипов ағай. Мин уға иртәгеһенә үҙемдең «Өс кис» тигән хикәйәмде алып барҙым. Шул көндөң эш аҙағында ук Ҡәрипов ағай мине тағы союзға саҡырҙы. Барһам, унын. ҡыҫығыраҡ, ләкин ғәжәп яғымлы күҙҙәрендә шатлыҡ осҡондары балҡый. Ул саҡтағы минең кеүек ҡырыҫ, официаль теманан, эшкә ҡағылған һүҙҙәрҙән башҡа бер ни һөйләшмәй торған кешене лә һөйләштерә ала торған алсаҡ, кешелекле был кешелә миңә ҡарата ниндәйҙер хөрмәт тойғоһо сағыла.

— Ултыр, һеңлем,— тине ул, мин инеү менән. һәм шунда ук: — һин өлгөрөп еткән яҙыусы ла баһа!—тип өҫтәне.— Ошондай хикәйә яҙа ала тороп, яҙышмай ятырға оялмайһыңмы һин?— тигән ҡаты һорау ҡуйҙы.

— Минең балаларым бар...— тигән булдым мин, аптырап.

— Нисәү?— тип һораны Ҡәрипов ағай.

— Өсәү. Ин, ҙурыһына дүрт йәш. Иң бәләкәсе яңы тыуған,— тим мин.

— Тапканһың эш!—тине Ҡәрипов ағай, көлә биреп.— Баланы уны бөтә ҡатын да таба. Ә бына бындай хикәйәне бөтә ҡатын да яҙа алмай. һин — яҙыусы. Аңлайһыңмы шуны?! Яҙыусы!

Мин ҡыҙарынам. Өндәшмәйем. Шунан ул тағы етди тонға күсә һәм бойорған да, минең аңралыҡҡа әсенгән дә һымаҡ тауыш менән былай тип өҫтәй:

— Был хикәйәнде журналдың май һанына баҫабыҙ. Шул кейө, бер генә төҙәтеүһеҙ баҫабыҙ. Анлайһыңмы? Бынан һуң һәр һанға бер хикәйә алып килеп тор. Яҙған бөтә әйберенде туптура үҙемә бир. Мин, үҙем ҡарап, журналға бирә барырмын,— тине. Мин, ҡыуанысым эскә һыймай, ҡанатланып сығып киттем.

Ысынлап та, «Октябрь» журналыньгң 1941 йылғы май һанында «Өс кис» хикәйәһе баҫылып та сыҡты. Ә июнь айында немец фашистары беҙҙен. илгә һөжүм итте. Журнал сығыуҙан туҡталды. Низам Ҡәрипов ағай, ҡулына ҡорал алып, беренселәрҙен. беренсеһе булып, Тыуған илде һаҡларға китте һәм Волгоград

өсөн барған үлемесле һуғышта аҡтыҡ тамсы ҡанын да, иң аҙаҡҡы һулышын да Тыуған ил өсөн биреп, батырҙар үлеме менән һәләк булды. Башҡорт халҡының тоғро улы, яҙыусы Низам Ҡәрипов ағай шундай изге күңелле, ғәжәп кешелекле һәм кеселекле, ысын коммунист ине ул. һәр ваҡыт яуаплы эш, көрәш, аҙаҡ килеп ҡанлы һуғыш арҡаһында, яҙыласаҡ гүзәл әҫәрҙәрен үҙе менән алып, әҙәбиәт донъяһын ваҡытһыҙ ҡалдырып киткән Ҡәрипов ағайҙың яҡты образы минең күңелдә һәр ваҡыт иң хөрмәтле урындарҙың. береһен алып тора. Иң тыйнаҡ, баҫалҡы, ғәжәп кешелекле һәм Тыуған илгә, бвйөк Коммунистар партияһына иң бирелгән кешеләр образы хаҡында уйлай башлаһам, беренселәрҙең береһе булып, минең күҙ алдыма ул иң элек килеп баҫа. Мәкгелек дан һәм хөрмәт яуһын уға — ысын кешегә.

Миңә юғары уҡыу йорттарында уҡырға тура килмәне. Ләкин мин ғүмер буйы уҡыным. Эшләйем һәм уҡыным. Совет ҡоролошо, илдә социализм өсөн, коммунизм өсөн барған героик көрәш фронты — минек өсөн иң ҙур университет булдыг. Мин ни ҙә булһа өйрәнмәй, уҡымай торған көндәремде белмәйем. Сенки яҙыусы, хатта ул ниндәй генә уҡыу йортон тамамламаһын, даими уҡымай, үҙенә талапсан булмай, үҙ өҫтөндә эшләмәй икән, иң, мөһиме еҙлөкһөҙ халыҡ йөрәгенә мөрәжәғәт итмәй, уның менән бергә янмай-көймәй икән, ул барыбер заман менән тнң баҫа алмай. Заман талабына торош итерлек әҫәр ижад итә алмай. Шуға күрә яҙыусының. иң мөһим беренсе бурысы — даими уҡыу, өйрәнеү.

Бына үҙем һәм ижадым хаҡында уҡыусыларыма куптән һөйләргә теләгән ҡайһы бер һүҙҙәрем ошо ине. Башҡаһын, әҫәрҙәрҙе уҡығас, иптәштәр үҙҙәре әйтерҙәр.

*1963, сентябрь*

23384

БИБЛИОТЕКА
Объединенного гр фкома
Уфимского Г К



ЙӨКМӘТКЕҺЕ

БЕРЕНСЕ БҮЛЕК . . . . . . . . . 3
ИКЕНСЕ БҮЛЕК . . . . . . . . . 68
ӨСӨНСӨ БҮЛЕК . . . . . . . . . 279
ҮТКӘН ЮЛДАР, УҘҒАН ЙЫЛДАР . 406

Литературно-художественное издание

БИИШЕВА Зайнаб Абдулловна

УНИЖЕННЫЕ

РОМАН

*(на башкирском языке)*

Редакторы *М. С. Игебаева*
Рәссамы *И. С. Файрушин*
Художество редакторы *В. П. Ковалев*
Техник редакторы *Н. Я. Зарипова*
Корректорҙары *Р. Ф. Хафизова, Г. Й. Якшыдәүләтова*

ИБ 4292

Наборға бирелде 29.11.89. Баҫырға ҡул ҡуйылды 28.07.90. Ҡағыҙ форматы 84ХЮ8 ⅟•• Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫм таб. 22,68. Шартлы буяу отт. 23,94. Учет.-изд. таб. 25,51. Тиражы 30000 экз. Заказ № 733.
Хаҡы 1 һум 70 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. 450000. Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. 450000. Уфа-центр, ул. Советская, 18.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйьк^са дәүләт комнтетының Өфө полиграфия комбинаты. "450001. Өфө, Октябрь проспекты, 2.





1 һум 70 тин

Башҡрртостан китагт нәшркәте

